Зигат Султанов
Йыһат Солтанов

СОЧИНЕНИЯ В ПЯТНАДЦАТИ ТОМАХ

ӘҪӘРҘӘР УН БИШ ТОМДА

ТОМ XV

ПЕРВАЯ КНИГА
БЕРЕНСЕ КИТАП

ОСЕННИЕ ЛИСТЬЯ
КӨҘГӨ ЯПРАҠТАР

История, публицистика
Тарих, публицистика

Редакторы

Йыһат Солтанов.

Әҫәрҙәр ун биш томда, XV том. Беренсе китап. Көҙгө япраҡтар. Тарих, публицистика. — Өфө: Башҡортостан “Китап” нәшриәте, … бит, ... табаҡ.

Был йыйынтыҡҡа күберәген 2010—2011 (һәм шунан һуңғыраҡ) йылдарҙың көн заңдары тыуҙырған, уҡыусыларыма башлыса интернет аша атҡарылған эреле-ваҡлы яҙмаларым тупланды. Араһында бәләкәй тираж менән сыҡҡан, күптәр күрмәй ҙә ҡалған “Хажиәхмәт Унасов. Ҡанлы йылдар”, “Аҙнамөхәмәт, Салауат һәм Юлай йондоҙлоғо. Мәсьәләгә яңыса ҡараш” тигән кескәй китаптарҙың тулы тексы ла бар.

ХӘТИРӘЛӘРҘӘН ҺАЙЛАНМА СӘХИФӘЛӘР
(әҙәбиәттәге юлым)

Киҫәтеү. *Һәр бер дәүерҙә лә һәр әҙиптең ижади яҙмышы -- милли әҙәбиәтебеҙ, гөмүмән мәҙәниәтебеҙ тарихының айырылғыһыҙ өлөшө ул. Инде 80 йәшенә етеп барған авторҙың шул әҙәбиәт донъяһындағы оҙайлы һәм ҡатмарлы ижад юлы менән ҡыҙыҡһыныусыларға тәғәйенләнде был “саф әҙәби” өҙөмтәләр. Тулы текст интернеттағы сайтымда:* <**зигатсултанов.рф**>, *артабан кнопка: файлы -- VII том; күсереп алыу түләүһеҙ.*

12.05.2012

Матбуғатҡа тәүге аҙымдарым

Ике тапҡыр Ҡыҙыл Байраҡ орденлы Балтиҡ хәрби-диңгеҙ флотының “Андриан Зосимов” исемле эскадра тральщигында – миналарға ҡаршы көрәшеүсе карабында хеҙмәт итәм. Диңгеҙҙә йөрөп ҡайтҡан һайын, Таллинн ҡалаһына ҡыҫҡа ваҡытлы ялға сыҡҡан сәғәттәрҙә республика китапханаһына, мәшһүр йырсы Георг Отсты тыңларға опера театрына йөрөйөм.

Үҙемдең хәләл бөтә хәрби бурыстарымды үтәүҙән тыш, әҙәбиәтте лә үтә лә һөйгәнлектән һәм китаптарҙы йотлоғоп уҡығанлыҡтан, йәмәғәт башланғысындағы өҫтәлмә вазифа — карап китапханасыһы эшен дә бик теләп йөкмәнем, база китапханаһының байтаҡ ҡына аҫыл баҫмаларын үҙебеҙгә күсертеүҙәренә өлгәштем (матростар ҡалын романдарҙы яратып уҡый ине). Үҙемә Өфөнән “Әҙәби Башҡортостан”ды ла (хәҙерге “Ағиҙел”) алдыртам (журналды редакцияның үҙенән ҡотһоҙ гәзит ҡағыҙына бандероль итеп төрөп ебәрәләр ине), шиғырҙарымдың «Моряк һүҙе» тигән береһе лә тап шунда 1953 йылда ташҡа баҫылып сыҡты:

Ҡай берәүҙәр әйтә: «Һеҙ — моряктар,
Диңгеҙҙәрҙә үтә көнөгөҙ.
Ҡоро ер тип китмәй һис иҫегеҙ,
Ярҙа йәшәү һеҙгә күңелһеҙ!»

Юҡ, ҡоро ер бик ҡәҙерле беҙгә, —
Тыуған булған өсөн һөйәбеҙ.
Ғәзиз булған өсөн уны һаҡлап,
Шашҡын диңгеҙҙәрҙә йөҙәбеҙ.

1953. Таллинн.

1956 йылдың февралендә, хәрби хеҙмәтте тамамлап, йәшлек хыялдарымдың ҡалаһы Өфөгә килеп төштөм, ул саҡтағы кисерештәремде “Өфө урамдары” тигән шиғырымда биргәнмен:

...Таштарыңды үбәм ҡосаҡлап,

Тапмаммы, тип, әсәм һөйөүен,
Тапмаммы, тип, атам һөйөүен...

Хәйерлегә булһын килеүем...
21.11.1956.

Ләкин ундай һөйөүҙе әҙерләп тормағандар икән шул — Өфөм миңә эшләр эш тә, һыйыныр мөйөш тә бирмәне (был хаҡта «Метеор» исемле иҫтәлегемдә яҙғанмын). Ҡорт саҡкан айыуҙай сәбәләнеп йөрөп, яңы төҙөлөп ятмыш ҡала-ҡасабаларға — Күмертауға, Павлов ГЭС-ына, Салауатҡа барып морон төртөүҙәрҙән дә ҡананы ғына танауым. Ә бит, хатта башҡа таш яуһа ла, Өфөлә тороп ҡалаһы, әҙәбиәт усағына яҡын булаһы ине!..

Һуңғы сиктә Ағиҙел йылға пароходствоһының алты айлыҡ моторсылар курсына эләгеп, шуның Ҡултыҡтағы (Затондағы) ятағында ҡыш сығып, йылға өҫтө боҙҙан арсалғас та 11-енсе һанлы буксир-теплоходта ҡара көҙгәсә Ағиҙел, Ҡариҙел буйҙарынан йөк тейәлгән баржалар, һалдар тарттыртып йөрөнөк. Шул тормоштан алып, шул теплоходта тәүге проза әҫәрҙәремде — «Ҡултыҡ пираттары», «Тулҡын өҫтөндәге күбектәр» тиген сатирик повестар һәм тағы сатирик хикәйәләр, «Йөрәк яраһы», «Урман бабай» исемле моңһоу әҫәрҙәремде яҙҙым. Һуңғыһы 1957 йылда «Пионер» журналында донъя күреп, тик 1967 йылда (ун йылдан һуң!..) ғына балалар өсөн айырым китап булып та ташҡа баҫылды.

Айғолағынан матҡып ҡоро ергә алып ырғытылған балыҡтай, күпме генә тулап-ынтылып ҡараһам да, Өфө мине прописканан үткәрмәй, ул ултырған изге Ҡоба тау ҙа минең өсөн оторо-кирегә магнитланған — Ырымбур далаһы яғына быраҡтырып этәрә ине. Әҙәбиәтебеҙҙең ҡаҙанында ҡайнап ижад итермен, тигән мөҡәддәс өмөтөмдән өҙөлөп, йылғаларҙа навигация туҡталып эш ҡалмағас, торорға мөйөш тә юҡлыҡтан, шул уҡ 1956 йылдың ноябрендә ауылыма юлландым, тыуған тупраҡкайыма аяҡ баҫтым:

Туфлиҙарҙы һалып ырғытып,
Ялан аякланып йөрөйөм.
Табандарым тойоп һөйөнә
Йылылығын атай еренең.

Туҙғыта ел ҡалын сәсемде —
Уйнай бирһен, эшем юҡ унда!
Күктәр күкрәп йәшен атһа ла,
Уяталмаҫ хыял-йоҡомдан.

Бабаларҙың баллы был ере
Атамды һәм мине туйҙырған.
Йылғалары, хәтфә ҡырҙары
Һөйөү тойғоларын тойҙорған.

Ошо ерҙең Айлы төнөндә
Төндәй күҙҙе тәү ҡат үпкәнмен.
Быҫҡаҡ ямғыр яуған көнөндә
Өйҙән «мәңге» сығып киткәнмен...

Ялан аяҡланып йөрөйөм,
Ҡайтып ураү-ураү юлдарҙан.
Һуңғы һулышымды алырға
Ҡайҙа илтеп йығыр еларбам?..

1956.

1934 йылда туған Башҡортостаныбыҙҙан ҡырҡып алынып, «Ырымбур» өлкәһе булып оҙаҡ ҡына йылдар донъя көтһәк тә, «бүре балаһын бүреккә һалһаң да урманға ҡарай», тигәндәй, барыбер баш Күк Уралға тартыла, әүәлгесә Башҡортостан һаналғы килә ине.

Шул йылдарҙа төбәгебеҙҙәге сәмле йөрәк егеттәрҙе ойошторол, СССР Верховный советы президиумы рәйесе Климент Ефремович Воршиловҡа күмәк ҡултамғалы ғариза яҙып ебәрҙек: ерҙәребеҙ менән ҡуша үҙҙәребеҙҙе кире-ҡабат Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһына ҡайтарып ҡуйыуҙарын һорап. Бер айҙан һуң Мәскәүҙән атҡарылған рәсми яуап (уны беҙгә Ырымбурҙан түрә килеп уҡып ишеттерҙе) артабан был йүнәлештә үрһәләнеп ҡарпыуҙан төңөлдөрҙө: ҡабат ҡуша алмайбыҙ, ә мотлаҡ Башҡорт АССР-ында йәшәргә теләүселәр унда тотҡарлыҡһыҙ күсеп китә ала, тиелгәйне унда... Тыуып-үҫкән еребеҙҙе — Олобайыбыҙҙы, тауҙарыбыҙҙы, йылға һәм туғайҙарыбыҙҙы, бабаларыбыҙ күмелгән зираттарҙы һәм, ниһәйәт, тарихыбыҙҙы нисек итеп ташлап китейек инде?!.

Шулай ҙа үҙ еребеҙҙә боронғо ата-бабаларыбыҙса инсафлы йәшәге килә. Ауылдағы әрпешлек, уғрылыҡ, тәртипһеҙлек тере елкәмә тейә, намыҫымды керләтмәйенсә шуларға ҡаршы тороу, көрәшеү иһә дуҫтан да дошман яһай — күрә алмаусыларымдың һанын арттыра ине.

«Борос» тигән сатирик стена гәзите сығарыуым да күптәрҙе әсеттереп, әрпештәрҙең теңкәләренә тейҙем...

Тормош нисек кенә ҡыйын булмаһын, Аллаһы Тәғәлә тарафынан күңеленә яҙыусылыҡ мөһөрөн һуғып тыуҙырылған әҙәм балаһы һис нимәгә ҡарамайынса яҙа ла яҙа икән ул... Тик шуныһы йәнде ҡыя: әүәле Башҡортостанымдың тере тәне булып та, аҙаҡ Ырымбур өлкәһенең бер районы итеп ҡалдырылған төбәгемдә башҡортса матбуғат юҡ, ә Өфөгә ебәргәндәрем йә балталай һыуға бата, йә “ташҡа баҫырға яраҡһыҙ” тигән хөкөмгә дусар була. Тешемде ҡыҫып, йөрәгем һыҙлап йөрөгәндә, көтмәгәндә, күктән фәрештә осоп төшөп шәфҡәтле ҡанаттары менән яралы йәнемде ҡосҡто:

Йыһат туғанҡай!

Бик оҙаҡ ваҡыттар тауыш бирмәй, һине билгеһеҙлектә ғазаплағаным өсөн ғәфү ит. Бик үтенәм.

Мин ауырыным, бик ҡаты ауырыным. Баш менән. Больница – йорт – Кавказ. Шулай үтте көндәр. [Журналда] миңә килгән әйберҙәрҙе бүтән бераү ҙә уҡымаған.

Ә бына яңы ғына баш-күҙ алып киләм кеүек. Әйберҙәреңде “сукно аҫтынан” һөйрәп сығара башланым. Поэмаң[1] *М. Тажиҙа. Ҡалғандарын беҙ Әсғәт Мирзаһитов менән уҡыйбыҙ. Ҡәләмең яҡшы. Һин – яҙыусы булырға тыуған кеше! Һин быны бел һәм үҙеңде һаҡла, ҡара, үҫтер. Танауыңды күтәрмә был һүҙҙәр өсөн, ләкин ҡәҙереңде бел.*

---

[1] “Ашҡаҙар”ҙың тәүге варианты.

Әле был әсәрҙәрең баҫылып та ҡуймаҫ. Сөнки был замандарҙа сатираның абруйы төшөп тора бит...

Ә "Урмандар" – китәсәк. Кем белә, бәлки, тегеләрен дә баҫып булыр.

Был хатта мин бүтән мәсьәлә күтәрәм. Һинең алдағы яҙмышың тураһында уйлайым. "Белемһеҙ аҡыл – ҡанатһыҙ ҡош", -- ти гәрәптәр. Һиңә уҡырға – иң яҡшы мәктәптә уҡырға кәрәк. Дөрөҫ, һин күп уҡыған күренәһең, ләкин системалы белем кәрәк. Һин миңә ашығыс яҙ: белемең ниндәй? 10 класс бармы? Әгәр ҙә шундай документың булһа, мин һине Мәскәүҙәге А.М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтына уҡырға ебәреүҙе тәьмин итеүҙе өҫтөмә алам! Унда махсус йәш яҙыусылар уҡый.

Шуны уҡып бөтһәң, һинән беренсе дәрәжәләге прозаик сығасаҡ. Мин бындай һүҙҙе ғүмеремдә икенсе генә кешегә әйтәм, бел.

Шулай, ашығыс рәүештә һорауыма яуап бир һәм, әгәр ҙә урта белемең бар икән (документально), -- мин тәҡдим иткән институтҡа уҡырға китергә әҙерлән, көҙ үк.

Хәҙергә хуш. Сәләмәт бул. Яҡын күреп, ***Ғәйнан Әмири.*** 11.04.1957.

Г. Уфа, Ленина, 2, кв. 36, Амири Г.Г.

P.S. *Бында шундай һүҙ ҙә бара әле – фекер тыуып тора: һине берәй 10 көнгә саҡыртып алдырырға иҫәп бар. Союз иҫәбенән, әлбиттә. Мирзаһитов менән бергә хикәйәләреңде баҫырға әҙерләү буйынса эшләр инегеҙ. Ләкин был хаҡта 1-2 көндән конкрет яҙырбыҙ.* ***Әмири.***

Минең нисек ҡанатланып осоу дәрәжәһенә етеүемде һәм шул уҡ саҡта үкенепһыҙланыуымды белһәгеҙ ине!.. Сәғәтендә үк яҙып һалған яуап хатым был хаҡта асыҡ һөйләй:

Иҫәнмеһегеҙ, Ғәйнан ағай!

Кисә төнлә генә Һеҙҙең хатығыҙҙы алып бик ҡыуандым. Оҙаҡ хәбәр килмәй торғас, һуңғы көндәрҙә күңелһеҙләнә башлаған инем, Һеҙҙең әйткән һүҙҙәрегеҙ миңә ҡанат үҫтереп ебәрҙеләр. Рәхмәт, ағай, йылы һүҙ, игелекле уйҙарығыҙ өсөн. Мин бер ваҡытта ла танауымды күтәрмәм, үҙ-үҙемде әллә кемгә ҡуймам, сөнки минең бөтә теләгем, бөтә ынтылышым шәхси үҙем өсөн түгел, ә башҡорт халҡыма яҡшы хеҙмәт күрһәтеү, нисек тә уның культураһын, рух байлыҡтарын үҫтереү өсөн йүнәлдерелгән. Бала сағымдан уҡ мин туған халҡымдың быуаттар буйына ирек яулап яҙған данлы тарихы менән ғорурландым, уның йыр-моңдарға бай булыуын күреп шатландым, ләкин, шул уҡ ваҡытта, әҙәбиәтебеҙҙең, искусствобыҙҙың сағыштырмаса арттараҡ барыуын һиҙеп һыҙлана инем. Туған халҡым бәхете өсөн йәшәргә теләп янам мин, ағай. Әгәр ошо ниәтемә ирешә алһам, бик бәхетле булыр инем. Аҙыраҡ лирикаға бирелеп киттем, буғай, ғәфү итегеҙ. Практик мәсьәләләргә күсәйем.

Берәй 10 көнгә Өфөгә килергә, тигән тәҡдимегеҙҙе бик-бик шатланып ҡабул итәм. Мөмкин булһа, шуны ойоштороғоҙ әле, ағай; хикәйәләрҙе үҙем дә әҙерләшһәм, бик шәп булыр ине. Унан, миндә йәнә бер әйбер бар – ирекле (аҡ) шиғырҙа яҙылған повестең[2] беренсе киҫәге. Шуны ла үҙегеҙгә уҡып, кәңәштәр алыр инем. Шулай итеп, мин шатланып риза Өфөгә барырға.

Ә белем мәсьәләһенә килһәк, һеҙ хаҡлы: системалы белем миндә юҡ. Минән тормаған сәбәптәр арҡаһында мин урта белемһеҙ ҡалдым. Өҙөп-йолҡоп, тигәндәй,

---

[2] "Үткән йылдар моңо" тигән шиғри романым тураһында һүҙ бара.

туғыҙынсыныҡын үтә башлаған инем (Чкалов[3] ҡалаһындағы колхоз председателдәре әҙерләү урта мәктәбендә), хәрби хеҙмәткә алып киттеләр. Аттестат юҡ. Шулай эштәр...

Әҙәбиәт институтында уҡыу минең өсөн донъялағы бөтә бәхеттәрҙең иң өлкәне булыр ине. Хыялдарымдың сорғолошо булыр ине ул, ағай.

Үҙегеҙҙең хәлдәр нисек? Тамам һауыҡтығыҙмы? Сәләмәтлек, уңыштар теләйем. Хушығыҙ, хат көтәм. **Йыһат Солтанов.**

Шуныһын да әйтеп үтергә кәрәк: колхоз ҡырҙарында эшләп йөрөп юғары белемгә өлгәшкәнемдән һуң да Мәскәүҙә уҡыу хыялымдан төңөлмәнем – А.М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институты түбәһе аҫтындағы ике йыллыҡ Юғары әҙәби курстарға китергә ынтылып ҡараным, унда урындағы Яҙыусылар союзы юлландырмаһы менән генә ҡабул итәләр ине. Союзыбыҙ председателе Ә.М. Мирзаһитов үтенесемде һалҡын тыңланы, ә идараның абруйлы ағзаһы Зәйнәб апай Биишева: "Юҡ! Беҙ унда Яныбай Хамматовты ебәрәбеҙ!" – тип ҡырт-киҫте. Әммә Яныбай Хамматов Мәскәүҙә үтмәне – унда һүҙе үтемле "әҙәби генерал"ыбыҙ Мостай Кәрим ҡаршы төшкән, тинеләр...

1957 йылда түбәмде күккә тейҙертерҙәй тағы ла бер ваҡиға булып алды — әйткәнемсә, «Урман бабай» тигән матур ғына хикәйәм баҫылған «Пионер» журналының 7-нсе һаны көтмәгәндә почта аша Өфөнән килеп төштө лә, күкрәгем тулы ҡыуанысыма сыҙай алмай, тай-тулаҡтай тулай-тулай, ергә ятып ауынаным...

Һунарсыла ана шулай йәшәгәнебеҙҙә бер-бер артлы яңы кисереш-шатлыҡтар килде — Илмирә, Таңнура тигән ҡыҙҙарыбыҙ ҙа тыуып (баш балабыҙ -- Сабит), өс сабыйҙың ата-әсәһе булдыҡ; улар минең «Ила, балам», «Бала һаҡлау», «Далам ҡылғаны» кеүек шиғырҙарымда сағылды. Саниям был бәпестәрҙе, әлбиттә, тәртә араһында йөрөп ҡолонлаған бейә бахырҙай, һис бер ниндәй декретлы ялһыҙ (ундайҙы белмәй ҙә инек) — колхоздың һарыҡ фермаһында эшләп йөрөгәне килеш тапты («Кисер мине» тигән әрнеүем):

Ғәфү ит һин мине, йәшлегемдә
Булдым аңыш — күпте белмәнем.
Килен итеп өйгә төшөргәндә
Устарымда алып инмәнем.

Баллы төнөбөҙҙө балһыҙ иттем,
Ә һуңынан ал-ял белмәнем.
Буйыңдағы һыйпап тере йәнде
Тилергәндә, «рәхмәт» тимәнем.

Ҡорманым йорт лайыҡ хан ҡыҙына,
Тапманым тун лайыҡ һыныңа.
Күҙҙәреңдең изге сағыулығын
Һалалманым фани йырыма.

Тәртә араһында ҡолонлаған
Байтал кеүек, эшкә егелдең.

---
[3] Хәҙерге Ырымбур.

Ыжғыр буранда бит илтеп ҡуйҙым
Бесән санаһында үҙенде.

Малай тапҡан тигәс иртәгәһен,
Килә алмай ҡалдым бер аҙна.
Аҙашҡан да туңып үлгәндер, тип,
«Тынысландырғандар» бер аҙға...

Кисер мине, шунан һуң да һаман
Ултырманым камил аҡылға.
Тапҡан берең... Бесән санаһында,
Арбаһында... сыҡтың хаҡ юлға.

Көнөн-төнөн бағып колхоз малын,
Сабый имеҙергә йүгерҙең.
Ашарға ла беҙгә һин бешерҙең,
Өҫ-башты ла йыуып өлгөрҙөң.

Ҡырыҫлығым менән мыжыҡлығым
Рәхмәтемдән булды күберәк.
Бөтәһе лә ятты бер яурынға,
Бөтәһен дә тартты бер йөрәк.

Ожмахыңдың хаҡын ҡайтарырлыҡ
Рәхәтлектәр бирә алманым.
Әрнетергә һине, буғай, ҡайта
Фәҡәт ошо әрнеп яҙғаным.
1.01.1996.

Шул уҡ ваҡытта иң юғары белемгә лә өлгәшеү һаман мөҡәддәс хыялым булғанлыҡтан, ҡоро ярға сығарып ырғытылған бахыр балыҡтай, үҙемдә юҡ рәсми урта белемде ҡайһылай итеп алырға белмәй, оролдом да бәрелдем. Бәхеткә ҡаршы, күрше ауыл Жултыйҙың урта мәктәбендә беҙҙең кеүектәргә киске уҡыу ойошторолғас, үҙебеҙҙең һигеҙ йыллыҡ мәктәп директоры Үтәбаев Сәлмән Ғәлиулла улы етәкселегендә ныҡ ҡына юллап йөрөп, шул Жултый киске урта мәктәбенең филиалын астырттыҡ ауылда һәм эштән һуң кистәрен тырышып урта белем алырға керештек. Биш-алты уҡыусы инек, минән шәберәктәре лә бар ине (мәҫәлән, Фәрит ҡустым Солтанов), тик күбебеҙгә түҙемлек, ныҡышмалылыҡ етмәне. Һөҙөмтәлә Жултыйға иң һуңғы имтиханға яңғыҙым ғына барҙым һәм урта белем тураһында аттестат алып ҡайттым.

Алдан алдырып әйткәндә, 1963 — 1969 йылдарҙа, колхозымдың ҡара эштәрендә егелеп йөрөгән килеш, ситтән тороп уҡып, Башҡорт дәүләт университетын да тамамлап сыҡтым. Шуны ла әйтергә кәрәк: үҙ ғүмеремдә миңә, тейешле белем алыу өсөн, төрлө ваҡытта һәм төрлө мәктәптәрҙә, үҙ әсә телемде ҡалдырып, төрлө өс телдә уҡырға тура килде: татар, үзбәк, урыҫ телдәрендә; ләкин һәр саҡ ул телдәрҙә уҡыуым башланғыс хәлендә өҙөлә килде — Хоҙай Бабай үҙ телемдә генә уҡынырға бойорғандыр... Ысынлап та, яҙмыш миңә үҙ аллы уҡыу барышында урта белемде лә, юғары белемде лә үҙемдең

башҡорт телемдә фекер йөрөтөп алырға яҙҙы — башҡорт яҙыусыһы өсөн был ифрат та мөһимдер.

Хәтеремдә, вузға кермәҫем борон әле, Өфөгә бер килеүемдә «Ағиҙел»селәр Әсғәт Мирзаһитов, Фәрит Иҫәнғолов менән хозур табында күңелле генә ултырғайным әңгәмәләшеп. Һүҙҙән һүҙ сығып, белем алыу тураһындағы хыялым мәғлүм булғас, Фәрит Иҫәнғолов үҙенең түшендәге зәңгәр эмаль ялатылған вуз ромбигын ысҡындырып алып, минең түшемә таҡты. Ни әйтергә лә белмәй тулҡынланып, аптырап торғанымда:

— Мин быны ваҡытлыса бирәм. Үҙ ромбигыңды алғас, кире ҡайтарырһың, — тине ул. Шул шарт менән ҡул ҡыҫышып килештек һәм мин быны шиғырымда («Бурыс») нығыттым:

Ҡул ҡыҫыштым бөгөн ғүмерлеккә
Дуҫ булырға, ҡәләмдәш менән.
Хеҙмәт юлым, түккән моңом, тиһәк,
Мин әле бик бәләкәс кенә.

Ҙур йөрәген бирҙе дуҫым миңә,
Сыҡ һин, тине, еңеп көрәштән.
Шул нур-йөрәк менән минең йөрәк
Күкрәгемдә хәҙер берләшкән.

Үҙ йөрәгем бер мәл олоғайып,
Ҡайтарырмын дуҫҡа бүләген.
Ай арҡылы нурын ҙур Ҡояштың
Алмайҙыр Ер бушҡа төндәрен.

1962.

Ниһәйәт, юғары белемгә эйә булғас, университеттың күк эмалле ромбигын түшемә тағып барып, ҡәләмдәшемдең үтескә биреп торған аманатын, рәхмәт әйтеп, тантаналы рәүештә үҙенә ҡайтарҙым (ә ул иһә был тарихты хәтерләмәй ҙә, имеш...).

Ошо мәлде күреү өсөн, ай-һай, күп көс сығарырға, көрәшергә тура килде миңә. Өлкән ҡәләмдәштәремдән Ғәйнан ағай Әмириҙең йомарт йөрәк йылыһы, игелеге рухымды ныҡ ҡанатландырып күтәрҙе...

Бер үк ваҡытта ижадым менән дә янып-көйөп йәшәнем. Аяғөҫтө йөрөп яҙыла торған шиғырҙарҙан тыш, үҙем, үҙемдең ауыл һәм, ғөмүмән, осоромдоң йәнгә тейгән колхоз тормошонан алып, күңелемде болоҡһотҡан мәсьәләләрҙе һалып, бөтә ҡыйынлыҡтарға ла бирешмәй, йәшлек намыҫын ыуалтмай, ысын кеше булып ҡалған егеттең үҙ һөйләүендә «Кеше тураһында йыр» (һуңғы исеме “Йәшлек тураһында йыр”) тигән (ғәмәлдә автобиографик) романымдың ҡулдан ике йөҙ биткә яҡын өлөшөн аҡ ҡағыҙға төшөргәйнем.

Өфөнән Муса ағай Ғәли ебәргән хат-тәҡдим буйынса, 1962 йылдың йәйендә уҙғарыласаҡ йәш яҙыусылар семинарына, тип, бер шәлкем шиғыр, яртылаш яҙылған шиғри роман менән бергә баяғы сәсмә романымдың бер талай өҙөгөн, «Хеҙмәт» исемле шулай уҡ автобиографик нигеҙҙәге повесемде шунда юлландырғайным, сөнки прозалағы тәүге ҙур эшемә ҡарата «ысын яҙыусы»ларҙың башланғыс фекерен белергә, әгәр ҙә улар хуплаһа, эшемде тамамлап ҡуйырға теләгем ҙур ине. Семинарҙың ҡатнашсылары иң күмәк булған шиғриәт бүлеге — Яҙыусылар берлегенең берҙән-бер ҙур бүлмәле «Ағиҙел»

журналы редакцияһында, ә проза буйынса ултырыш коридорҙың ҡаршы яғында — Яҙыусылар берлегенең тар ғына һыйҙырышлы консультанттар кабинетында бер юлы барҙы гөрләп. Йәнем-тәнем менән шиғриәткә тартылыуымды еңеп, ҡап-уртаға ярылып булмағанлыҡтан, был форсатта прозам хаҡында фекер ишетеүҙе мөһимерәк һанап, баяғы кабинетҡа кереп ултырҙым. Мин фәҡирегеҙҙең әҫәрҙәрен танылған яҙыусылар — яҡташым Сәғит ағай Агиш, журналдың яуаплы сәркәтибе Ғәли ағай Ибраһимов, сәсмә әҫәрҙәр бүлеге мөдире Фәрит ағай Иҫәнғоловтар тикшергән икән. Тик уларҙың телмәренән күңелемдә ауыр тойғо яралды — романымды дауам итеүҙең һис тә кәрәкмәгәнлеген, сөнки ҡәләмем яҡты совет ысынбарлығына яҡтылыҡ өҫтәмәүен, әҙәбиәтебеҙҙең социалистик реализм талаптарына тамсы ла яуап бирмәгәнлеген тәрән әрнеү ҡатыш мейемә һеңдереп, хыялым селпәрәмә килде, өмөттәрем өҙөлдө.

Бына яҡташ ағайымдың төп фекере:

«...Әгәр ҙә мин повесте генә уҡып, ике хикәйәне уҡымаған булһам, Йыһат Солтанов тураһында һәйбәт фекерҙә ҡалмаған булыр инем...

...Уҡыусыға асыҡ булһын өсөн, ҡыҫҡа ғына сюжетты һөйләп бирәйек. Ғәлим тигән 24 йәшлек егет колхозға армиянан йөрөп ҡайта, армияла ул флотта хеҙмәт иткән. Башта ул колхозда теләһә ҡайҙа ебәрһәләр — шунда эшләп йөрөй. Аҙаҡтан уға колхозда иҫәпсе — учетчик хеҙмәтен бирәләр. Ошо эшкә керешкәс, ул колхоздағы етәкселәрҙең, председатель, парторгтан алып бухгалтер, бригадир, трактористарҙың — бөтәһенең дә алама кешеләр икәнен күрә. Бөтә эштә лә күҙ буяйҙар. Райкомға тамамланмаған эштәрҙе алдап, тамамланды тип бирәләр. Шоферҙар бензинды урлап, үткенселәргә һаталар. Ғөмүмән, колхозда Ғәлимдән башҡа бер йүнле кеше юҡ... Колхоз председателе, элекке мәктәп директоры, бик ҡара буяуға буялған. Ул хатта институтты ла хәйләләр, алдауҙар менән тамамлаған. Авторҙың әйтеүе буйынса, бик һәйбәт стена газетаһы сығарыла, ләкин уның ғәмәлдә бер төрлө лә тәьҫире юҡ. Уҡыйҙар ҙа көләләр, саралар күрелмәй. Хатта газетаны йыртып ташлаусыларға ла бер нәмә лә булмай...

24 йәшлек Ғәлим һалдатта үткән ғүмерен — әрәм булған йәшлек тип һанай.

Ҡыҫҡаһы, повестә бөгөнгө көндөң бер яҡты яғын да күреү юҡ...

С. Агиш».

Ғәли ағай Ибраһимов фекерҙәрен үҙенә хас теүәллек, бөхтәлек һаҡлап теркәгән:

«Йыһат Солтановтың «Хеҙмәт» повесе һәм өс хикәйәһе хаҡында рецензия (бөтәһе 6 табаҡ күләмдә).

Йыһат Солтановтың мин уҡып сыҡҡан әҫәрҙәре араһында эшләнеп бөткәнгә яҡын, тип әйтерлек, уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итерлеге — «Йөрәк һыҙлай» хикәйәһе. Хикәйәнең яҙылышы, теле башҡаларға ҡарағанда уңышлыраҡ, бында һоҡланып уҡырлыҡ итеп яҙылған тәбиғәт күренештәре, һалсылар тормошо, мөхәббәт күренештәре, иҫтә ҡалырлыҡ портреттар бар. Бигерәк тә Дания исемле ҡыҙҙың образы уңышлы сыҡҡан.

Ошоларҙы уҡып та Йыһат Солтановта яҙыусыға кәрәкле оҫталыҡ, тормоштоң айырым һыҙаттарын күрә белеүсәнлек, күргән нәмәләрҙе әҙмә-әҙ яҙа белеү һәләте бар, тип әйтергә мөмкин...

...Авторҙың дөйөм етешһеҙлектәре хаҡында әйтеп үтке килә. Иптәш Солтанов тормоштоң үҙендә йәшәгәнлектәнме, йәмғиәттәге тиҫкәре яҡтарҙы күп белә. Шуға күрәлер, ул гел тиҫкәре яҡтарға, ҡара таптарға ғына иғтибар итә. Ә тормоштоң ыңғай яҡтарын, беҙҙең йәмғиәттең өҫтөнлөк яҡтарын күрә белмәй, алдынғы кешеләрҙең көрәшенә иғтибар итмәй...

Әйтеп үтелгән дөйөм етешһеҙлектәр Й. Солтановтың «Хеҙмәт» повесенә лә бик хас. Уның төп геройы хисапсы Ғәлим колхоздағы бөтә етешһеҙлектәргә ҡаршы көрәшә. Ул үҙе образ булыу ягынан көслө генә эшләнгән. Ул ерҙең кәрәкле тәрәнлектә һөрөлмәүен дә, эшләнгән эштең күләмен арттырып күрһәтеүҙе лә, ягыулыктың әрәм-шәрәм ителеүен дә күрә, шуларга ҡаршы көрәшә. Был атаклы звеновод Загладаның игенсе намыҫы өсөн көрәшен хәтерләтә. Уның мәкәләһендә шундай, әлеге повестәгесә етешһеҙлектәр ҙә күрһәтелә. Ләкин ундай хәлдәр тормошта осраһа ла, әҙәбиәттә улай күрһәтеү мөмкин түгел. Нисек инде ул хисапсы Ғәлим бер үҙе генә тырыша. Бер ярманан бутҡа буламы? Ә был колхозда председатель Йәрмит тә, парторг Бикмурзин да, уныңярҙамсыһы ла, бригадир Дәүләт тә, бухгалтер ҙа — бөтәһе, бөтәһе лә насар, эш өсөн тырышмайҙар, эсәләр, һөйләшеүҙә тупаҫтар, ялҡауҙар. Ғөмүмән, автор ниндәй ҡара буяуҙар таба алган — бөтәһен дә улар өҫтөнә ҡоя. Шуныһы характерлы: уларҙың бер яҡшы яҡтары ла юҡ, исемдәре телгә алыныу менән үк, тиҫкәре икәнлектәре аңҡып тора...

...Ниңәлер Й. Солтановта һәр әҫәрҙә «кәмһетелгәндәр» мотивы өҙөлмәй, ҡабатлана бирә. Повестә лә, «Йөрәк һыҙлай» хикәйәһендә лә — шул мотив. Был, бигерәк тә, «Ягымһыҙ кеше йылмая» исемле хикәйәһендә нык сагыла. Уның төп геройы егерме йыл төрмәлә ултырган. Ҡайтҡас та уга шундай ҡараш. Был тәбиги ҙә, ләкин күбәйеп кенә китә...

...Йыһат Солтановтың әлеге әҫәрҙәренә ҡарағанда өмөт бар, был әҫәрҙәрен дә ул кәрәкле художество кимәленә еткерә алыр тип уйлайым.

Ғәли Ибраһимов».

Өсөнсө рецензентым да шулай уҡ, хикәйәләремдең ыңғай һәм кире яҡтарын анализлап, минең өсөн төп мәсьәләгә күсә:

«Йыһат Солтановтың был әҫәрҙәре, — ти ул, — *иң тәүҙә тел байлыгы менән ыңғай тәьҫир ҡалдыра. Йәш яҙыусыла шаҡтай камиллашҡан художестволылыҡ, образлылыҡ күҙгә ташлана. Пейзаж һүрәтләүгә авторҙа ҙур оҫталыҡ бар. Башлыса кеше образдары ла ыҡсым, тере итеп тормошсан һүрәтләнә.*

Әҫәрҙәрҙең барыһына ла характерлы булган төп етешһеҙлектәрҙең береһе — тормош дөрөҫлөгөн биреүҙә ахыргаса тогро булмау, уҡырга эффектлыраҡ булһын өсөн, йыш ҡына хәл-ваҡигаларҙы шаҡ ҡатырырлыҡҡа тартымыраҡ итеп бирергә тырышыу...

«Хеҙмәт» повесенең ыңғай яҡтары шаҡтай күп. Ул, башта әйткәнемсә, ярайһы өлгөрөп еткән художестволы, лексик яҡтан бик бай, төҙөк тел менән яҙылган. Һүрәтләү саралары тереләр, яңылар, тапҡырҙар. Образдар башлыса (айырым-айырым ҡарағанда) күҙ алдына баҫырлыҡ итеп һүрәтләнгәндәр. Улар телдәре менән дә, төҫтәре менән дә бер-береһенән айырыла.

Тик әлеге образдар нисбәтендәге самаһыҙлыҡ бик нык күҙгә ташлана. Бер Ғәлим образы гына ыңғай. Ҡалгандары барыһы ла тиҫкәреләр. Элекке хисапсы — ялҡау, эшлекһеҙ, эскесе. Тракторист Насырый — эскесе, ҡараҡ, күҙ буяусы. Бригадир Дәүли — күҙ буяусы, дан артынан ҡыуыусы. Председатель Йәрмит — һауаланган, тупаҫ, карьерист кеше. Бухгалтер — ҡагыҙ ҡоло, ҡараҡтарҙы ҡаплап тороусы, һәр ваҡыт колхозга хыянат итеүҙе талап итә. Завмаг Иван Дмитриевич «шешә менән һатып ала, шешә менән теш һындыра». Парторг Рәүф Бикмурзин насар кеше. Прокурор тураһында ярты гына һөйләм бар — уныһы ла насар кеше. Ахырҙа Ғәлимә исемле агроном ҡыҙ матур гына булып килеп инә, ләкин уның ыңғай героиня буласагы әҫәрҙә күренеп өлгөрмәй...

Фәрит Иҫәнголов».

Төп етешһеҙлегемде яҡшы төшөнөп төңөлдөм: яҡты совет тормошоноң ҡараңғы яҡтарын ғына яҙа икәнмен; ундай ҡараңғы яҙыусыға яҡты совет иленең матбуғат юлы бикле. Ләкин бит мин ҡараны күрәләтә аҡ тип әйтә алмайым — ытырғанып тартынам... Прозамды тикшереүселәр асылда төп геройҙарымдың ысын ыңғай образ булыуын иҫәпкә алманылар, уларҙы дөйөм совет тормошоноң ҡараңғы фоны хәүефләндерҙе.

Шулай итеп, хәҙер яҡшы аңлауымса, хөрмәтле хөкөмдарҙарым дөйөм ҡабул ителгән кодекс буйынса хөкөм ҡылдылар мине — тоталитар рухлы совет әҙәбиәтенең социалистик реализм ҡануны шундай ине бит... Үҙҙәренсә, моғайын, ҡулсыр баланы көршәкте ярмаҫы борон ҡурсаларға тырыштылар — бының өсөн үпкәләп булмай ине. Әммә беренсе ҙур әҫәрем (романым) яртылығында килеш өҙөлөп ҡалды...

Прозабыҙ маһирҙарынан әлеге үҙемә ҡағылышлыны алып бөтөп, күрше бүлмәләге шиғриәтселәр ултырышына йүгерҙем; унда һөйләшеүҙең иң ҡыҙған мәле — Рәшит Назаров шиғырҙары тураһында яҙыусылар берлеге рәйесе Назар Нәжмиҙең ялҡынлы телмәренән һуң фекер алышалар ине. Шиғриәтебеҙгә "Бабичтан һуң яңы даһи" тыуғанлығын самалап, баштан уҡ ошонда ҡатнашмауыма үкенә биреберәк ҡуйҙым. Тәнәфескә сығып, коридор башындағы ҙур тәҙрә ҡаршыһына баҫҡас, мине танып белеүсе шағир йораттары: «Ҡайҙа йөрөйһөң, әй, ниңә ултырышҡа килмәнең?» — тип төпсөнөргә кереште. «Ә мин проза бүлегендә ултырҙым», — тип аҡланған арала, ҡаршымда ғына бороддатып тәмәке тартып торған һарғылт-һоро туҙғыҡ-бөҙрә сәсле, яҫы урыҫ маңлайлы һәм танаулы, йәше буйынса үҙемә тиҫтер булырҙай бер уҙаман, күҙҙәрен ҡыҫа биреп киң йылмайҙы ла: «Вәт әй! Шағир башың менән проза тылҡып йөрөйһөңмө? Ә мин бында һинең хаҡта бынамын тигән телмәр һөйләп ташланым тағы», — тигән булды. Башҡалар ҙа: «Шәп телмәр, шәп!» — тип дөрөҫләгәс, ҡыҙыҡһыныуым артты, ләкин, үҙ ғәҙәтемә барып, артыҡ төпсөнөп торманым. Өҫтәүенә, үҙем кеүек үк ябай ғына күренгән, иҫке кирза итекле һәм шағирәнә олпатлыҡһыҙ был кешене, ҡиәфәте башҡортҡа тартмағанғамы, күңелем өнәмәне. Шулай ҙа һорашып белдем — Рәми Ғарипов тигән шәп шағир икән. Ултырыштар тамамланғас, Сәғит ағай Агиштың, миңә төбәп: «Яҡташымды өйгә алып ҡайтырға ине лә бит, үкенескә ҡаршы, бөгөн генә еңгәгеҙ иҙәнде буяған шул, — тип мәрәкәләүе хәтерҙә. Минең менән бергә проза буйынса һөйләшеүҙә ҡатнашҡан һәм бындағыларҙың барыһын да белгән Саҡмағош егете (тиҫтерем) Фәнил Мансуров, берәр «ярты» ҡыҫтырып, Рәми Ғариповтарға барырға өндәһә лә, баяғыса, риза булманым (иртәгәһен Фәнил һөйләүенсә, Рәмиҙең ғаиләһе саҡ һыйышып йәшәгән ҡыҫыҡ бүлмәлә таң атҡансы бик күңелле ултырғандар). Үҙем һымаҡ уҡ элекке моряк дуҫым — Күмертауҙан шахтер шағир Хөснулла Түләкәйев менән мине, көтмәгәндә, Әсғәт ағай Мирзаһитов Горсовет туҡталышындағы фатирына алып ҡайтып шәп ҡунаҡ итте, ә иртәнсәк (ял көнө ине) күрше генә йортта йәшәгән Фәрит Иҫәнғоловтарҙа күмәкләшеп һыйландыҡ. Үҫеп еткәс хәрби-диңгеҙ флотының һыу аҫты кәмәһе офицеры буласаҡ, ә хәҙерен атаһының тубығында әүмәләнгән ыштанһыҙ сабыйының, супырҙатып, атай салбарын сылатыуы хәтерҙә. Уларҙан сығыуыбыҙға, киоскынан гәзиттәр алырға килгән шағир (игелекле тиҫтерем), Башҡортостан китап нәшриәтенең редакторы Шакир Бикҡолов осрап, һәм ул дәррәү яҡындағы магазинға йүгереп барып килеп, урам аша Ғафури баҡсаһына керҙек, һуҡмаҡ буйлап төшә торғас, соҡорҙағы тимер торбанан сопорлап ағылыусы һалҡын шишмәгә юлығып, тамаҡтарҙы шуның менән йыуҙырта-йыуҙырта, нәүбәттәге шешәне бушаттыҡ. Үҙ ғәҙәтемә барып, баҡса ҡапҡаһы башындағы «Парк им. М. Гафури» тигән яҙыуҙы күреүҙән күңелем боларҙы ла: «Был ни хәл? Ниңә башҡортса түгел?! — тип һораным. — Өфө буйлап гел

шулай. Былай барһа, башҡорт теле бөтәсәк бит!..» — тип көйәләндем. Хөснулла Түләкәйев менән Шакир Бикҡолов өндәшмәне, ә Мирзаһитов менән Иҫәнғолов күҙгә-күҙ ҡарашып алды. «Юҡҡа иҫең китмәһен, — тине Фәрит Иҫәнғолов. — Кәм тигәндә, яңынан егерме биш йыл йәшәйәсәк әле башҡорт теле, тимәк, беҙҙең ғүмергә етә». Ә Мирзаһитов үҙенең олпат-һалҡын тауышы менән ҡаты итеп киҫәтте: «Бынан һуң һин, ҡустым, бындай һүҙҙәр һөйләмә — ахыры яман бөтөр»... Ауыҙымды ҡымтыным да башҡаса был икәү янында бер ваҡытта ла «ундай һүҙҙәр һөйләмәҫкә» тырыштым... Әйткәндәй, Мирзаһитов ғүмере буйына ярым башҡортса, ярым татарса һөйләште, ә Иҫәнғолов, табындарҙа бергә ултырғанда иҫереп алһа, ярым татарсамы, ярым сыуашсамы сусылдарға керешер ине (йәшлегендә татармы, сыуашмы мәктәбендә уҡыған, тиҙәр). Улар икеһе серҙәш һәм яҡын дуҫтар ине. Ә минең беренсе китабымды («Урман бабай», 1967), «Пионер» журналынан хикәйәмде үҙе күсертеп алып, донъяға сығаран, шуның менән яҙыусылығыма юл асҡан ҡорҙашым Шакир Бикҡоловтың шәхси тормошо бәхетһеҙ осланды: көтмәгәндә баш ауырыуынан ҡатыны вафат булып, икенсе йылына үҙе лә шундай уҡ сиргә һабышты; шул сәбәплелер инде, үҙ-үҙен белештермәй, бер мәл шулай Яҙыусылар берлеге рәйесе Әсғәт Мирзаһитовтың «Әсәләр көтәләр улдарын» тигән пьесаһы буйынса Башакадемтеатр сәхнәһендәге премьераһы барышында партерҙың бишенсе рәтендә иртә салланған башын ҡалҡытып, бөтә залға әҫәрҙән үҙенең ҡәнәғәтһеҙлеген белдерә яңғыратты, һөҙөмтәлә етәксе даирәләр тарафынан аҫтыртын эҙәрлекләнеп йөрөп ваҡытынан элек китте донъянан...

Ғафури баҡсаһында барған тел яҙмышы тураһындағы күңелһеҙ һөйләшеүгә килгәндә, йор тәбиғәтле Хөснулла дуҫымдың һис кенә лә иҫе китмәне кеүек; ғүмерҙәребеҙ дауамында семинар көндәрен хәтерләгәндә лә ни бары: «Сәғит Агиштың иҙәне буяулы булһа ла, Әсғәт ағай менән Фәрит ағайҙыҡы буялмаған булып сыҡты бит, әй!» — тип хихылдап көлөр ҙә ҡуйыр ине.

Өфөгә күсеп килгәндән һуң мин тиҫтерем Рәми Ғарипов менән ныҡ дуҫлашып, ысын ҡорҙаштарға — арҡадаштарға әүерелдек, ижадсы тормошоноң байтаҡ әсе-сөсөһөн бергәләшеп татыныҡ. Шуныһы ла үҙемсә: дуҫымдан мин бер ваҡытта ла «теге саҡта шиғриәтселәр ултырышында минең хаҡта ҡайһылайыраҡ һөйләнең?» тип белешергә башыма ла килмәне һәм ул да иҫләмәне быны (шулай уҡ уның менән бергәләшеп фотоға төшөү ҙә уйыбыҙға кереп тә сыҡмағандай). Фәҡәт үҙе был донъянан киткәненә егерме бер йыл үткәс кенә, тәүҙә гәзит битендә, ә унан һуң «Әҫәрҙәр»е йыйынтығының икенсе томында (475 — 476 биттәр) тулҡынланып та, ғәжәпләнеп тә уҡыным шул йыйнаҡ һәм тос телмәрҙе:

«Йыһат Солтанов.

Төнгө хәбәр.

Төн. Көтмәгәндә-нитмәгәндә генә берәү ишек шаҡыны. Әле бер кем үтмәгән һуҡмаҡтан үҙ һуҡмағын ярып, үҙ алдына ғына үҙенсә моң көйләп, тормоштоң асыһын-сөсөһөн күп татыған, кемдер тарафынан байтаҡ ҡына рәнйетелгән, ләкин үҙенең ғәжәп саф күңелен, кешелеген, үҙенең кешелек бәсен һаҡлап ҡалған бер юлсы ишек шаҡыны. Был шаҡыуҙа бер ниндәй тупаҫлыҡ та, ҡысҡырыныу-екеренеп торған талап та, бер һөмһөҙлөк тә юҡ. Был шаҡыу ниндәйҙер кешенең кешелегенә ышаныусан, ғәжәп кешелекле, хатта кеселекле, үҙенең йылы күңел төбөнән сыҡҡан ихлас һүҙенә ихлас яуап табырына шик-шөбһәһе булмаған тыйнаҡ өмөт менән ҡараған кешенең шаҡыуы.

Һис бер икеләнеүһеҙ ишек асаһың. Күңел күҙең алданмаған.

Бөтөнләй көтмәһәң дә, күптән көткән, күптән күңелең эҫенеп бөткән бер теләктәге үҙ кешең килеп инә. Өйөңә түгел, туп-тура күңелеңә инә.

— Йыһат Солтанов икән дәһә, нишләп былай күҙгә-башҡа күренмәй йөрөнөң? Һине бит беҙ күптән көткәйнек, әйҙә, рәхим ит, беҙ бит һин күреп белмәһәң дә тойоп белгән күмәк дуҫтарың. Һинең моңоң тураһында ла, кеше булыуың тураһында ла бер ултырып һөйләшке, кәңәш-төңәш итке килә. Ырымбур хәлдәрен аҡтарып һал, әйҙә!.. Ил ирҙән, ир илдән туямы — бик хуш килдең, төклө аяҡтарың менән, тип ҡаршылайһың уны. Матбуғаттағы һуңғы һанды уҡығас, беҙҙең әҙәби ҡор һаман ишәйә, түңәрәкләнә бара, тип ҡыуанаһың.

Мостай Кәрим әйтмешләй, яңы шиғыр ғына түгел, ә Яңы шағир килде, тиергә мөмкин, Йыһат шиғырҙары менән танышҡас.

Киң кейем туҙмаҫ, тигәндәй, Йыһат Солтановҡа ошондай кәңәште бирге килә.

Моңоң яҡтыраҡ булһын, дуҫҡай. Үҙеңдең шәхси тормошоңда төрлө күңелһеҙ хәлдәр булһа ла, үҙ яҙмышыңа ил күҙе, заман зирәклеге, конкрет тормош солғанышы менән ҡара. Үҙенсәлекле тауышың көрөрәк, баҙығыраҡ, ҡыйыуыраҡ булһын. Күҙ күремең дала киңлектәрен иңләрлек булһын. Үҙ моңоң менән әүрәмә, башҡаларҙың да йөрәк ҡағышын той — үҙ итеп күр. Ер-һыуыңдың сағыу буяуҙарын, йорт-аймағыңдың йор һүҙҙәрен, беҙ ишетмәгән мәҡәл-әйтемдәрен, ҡарт-короларыңдың мәғәнәле тел төбөн, далалағы Яңы тормош һыҙаттарын — бөтәһен-бөтәһен дә танһыҡ өсөн генә түгел, танһыҡ ҡанһын, күңел һоҡланһын өсөн алып кил.

Һеҙҙә лә бит егерменсе быуаттың 64-енсе йылылыр[4], һеҙҙә лә ер юлдаштарының осоуын күҙәтәләрҙер, һеҙҙә лә бала-саға космонавт булып уйнай торғандыр, һеҙҙә лә ҡайырып сирәм күтәрәләрҙер, дала буйлап вольтлы электр тоғы ташыусы ҡорос бағаналар атлап уҙалыр, бына тигән коммунистик хеҙмәт кешеләре барҙыр, ҡарттарҙың да биш ваҡыт намаҙ ғына уҡымай, «Ырғыҙ», «Абай», «Йәш гвардия» китаптарын уҡығандары барҙыр. Кешеләр араһында яңы мөнәсәбәт, яңы заман ҡараштары ерегеп киләләр.

Бына шуларҙы ла күрергә, тойорға һәм моңона ҡушылып йырларға кәрәк!

Шунһыҙ бөгөн әҙәбиәт була алмай!»

Шул уҡ бер балыҡ башы — баяғы сәсмә әҫәрҙәремде тикшергән абруйлы өс прозаиктың соцреализм талаптарына яңғырашлы дөйөм фекерҙә булған бит был да! Телмәрҙе үҙ ваҡытында тыңлай алмай ҡалһам да һәм унда «моң»ға, минең моңома, ҡағылышлы һүҙҙәрҙән бихәбәр йөрөһәм дә, нигеҙҙә моңома теләктәшле Рәми Ғариповтың был рәсми урындағы рәсми телмәренең тәьҫире, ижадыма ҡарата башҡаларҙың мөнәсәбәтендә ҡыйыш көҙгөләгеләй боҙолоп, кире яҡлап сағылды, шиғырҙарымды бәғзеләр яҡты совет ысынбарлығынан, тормошобоҙҙан зарланыу, ысынбарлыҡтың ҡара яҡтарын ғына күреү тип баһалап, кире ҡағыу ҡеүәһе күтәрелде — аҫтараҡ был хаттарымда сағылыр. Һәм мин шуларға яуап итеп «Моң тураһында» тигән шиғырымды яҙырға мәжбүр булдым:

Моңло булыу — зарлы булыу түгел.
Айыра бел зарҙы моңдарҙан.
Зарлы бәндә күҙ йәшен ағыҙһа,
Моңло кеше йырҙар сығарған.

Йырһыҙ йәшәү — үтә ҡыйын, тиҙәр,

---

[4] Ошо 1962 йылғы телмәренән сәхифәне ҡағыҙ битенән көндәлегенә күсереп ҡуйыу датаһы, булһа кәрәк.

Йәшәп булмай моңһоҙ бөтөнләй.
Ҡая ғына һаҡлай хисһеҙ тынлыҡ,
Ҡая ғына тора һелкенмәй.

Кешелектең көсө — моң кисереү.
Тыуа шағир моңдар эсенән.
Игелек һис көтмә был доньяла
Моңон юйған йүнһеҙ кешенән!

Моңдар, моңдар, тормош һуҡмағымда
Үткәрҙем күп һеҙҙе йөрәктән.
Булдығыҙ һеҙ мине кешелеккә,
Хислелеккә, йырға өйрәткән.

30.11.1962.

Ләкин проза бүлегендәге лә, шиғриәт бүлегендәге лә докладтарҙа дөйөмләштерелгән баяғы ижадымдағы “ҡара буяу” -- социалистик реализм ҡанундарына тура килмәү тураһындағы һығымталар миңә йән әрнеткес бәлә килтерҙе, йылдар буйына әҫәрҙәрем бер ҡайҙа ла үтмәне...

Семинарҙа шиғырҙарыма ҡарата Рәми Ғариповтың йылы һүҙ әйтеүе тураһында ишетеп ҡанатланғас, «Төнгө хәбәр» исемле йыйынтыҡ итеп әҙерләгән ҡулъяҙмамдың машинкала баҫылған бер данаһын, талант эйәһе ҡорҙашымдан һынау үткәртәйем, тип, Рәмигә уҡырға бирҙем: «Әгәр хуплаһаң, яҙыусылар берлегенең шиғриәт секцияһында тикшертергә ине ниәт», — тинем. «Ярай, эшләрмен», — тип, папканы ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып алды (шул кисендә үк ул ҡулъяҙманы ҡайҙалыр торғоҙоп ҡалдырған — юғалтҡан булып сыҡты һәм уны минән алыуын кире ҡаҡты), бер аҙ ҡыҙмаса булыуы ғына хәүеф һалды һалыуын (һуңғараҡ яҡшы белдем: йәш шағирҙар уның эргәһенә «ярты» ҡыҫтырмайынса йөрөмәйҙәр — тәмәкене, хәмерҙе нығ ярата икән ҡорҙашым)...

Ауылыма ҡайтып китеп, түҙемһеҙлек менән Рәмиҙән хәбәр көттөм, ләкин «шылт!» иткән дә тауыш юҡ ине, ә үҙем һорашып хат яҙыуҙы тыйнаҡһыҙлыҡ һананым. Өҫтәүенә, «Ағиҙел» журналына ебәргән әҫәрҙәрем дә, һыуға батҡан балталай, хәбәрһеҙ сума торҙо...

1963 йылдың йәйендә, урта белем тураһында өлгөргәнлек аттестатымды алыу менән үк, Өфөгә тумарылдым — ниһәйәт, вузға инергә. Бер түгел, өс балам, ҡартайған әсәйем бар, колхозда көн күрешебеҙ шәптән түгел — аҙым һайын ҡамасаулайҙар, йәнде киҫәләр, ләкин уҡығы ла уҡығы — белемле булғым килә! Ошо йәшемдә һәм ғаилә хәлемдә нисек итеп биш йыл буйына ситтә студент хәлендә йөрөрөмдө күҙ алдыма ла килтерә алмай инем, дөрөҫөн әйткәндә; ләкин үҙемде күҙ йомоп упҡынға ташланырға тәүәккәлләнгән бәндәләй тоя инем — ни булһа ла булыр... Әммә бәхетемдән (Хоҙай Бабай бойороуы буйынса) тирә-яғымда айныҡ аҡыллы ағайҙарым бар булып сыҡты, хәйерле юлға баҫырға ярҙамлашты. Башҡорт дәүләт университетының ситтән тороп уҡыу бүлегенә кереп, әйтеп үтеүемсә, эшләп йөрөй-йөрөй эйә булдым юғары белемемә...

Икенсе тапҡыр машинканан үткәртеп алған баяғы шиғри йыйынтығымды шиғриәт секцияһы рәйесе Муса ағай Ғәли ҡыш һуҙымында иренмәй уҡып сығып, секция ағзаларынан һәм башҡаларҙан да уҡытып, килеүемде көтөп кенә торған икән. Йәйге эҫе

көндәрҙең береһендә «Ағиҙел» журналы редакцияһы бүлмәһендә секция ултырышы булды (Рәми юҡ ине, буғай), йыйынтығым ғәмәлдә ыңғай баһаланып, айырым китап итеп баҫтырып сығарырға тәҡдим ителде нәшриәткә. Кемдәрҙең яҡлап һөйләгәне хәтеремдә ҡалмаған — яҡшылыҡтар онотолоусан икән ул (яҡшылыҡ эшләү — тәбиғи хәл итеп ҡаралыуҙандыр). Әммә Уран Кинйәбулатов тигән, телевидениела эшләгән һәм йыр текстары яҙыу маһиры булған мыҡты кәүҙәле йәш шағирҙың (Кәтибә апай Кинйәбулатованың бер туған ҡустыһы, тинеләр) янып-ярһып мине юҡҡа сығарыуы иҫемдә... Әммә икенсе бер сағыу ваҡиға күмә был моңһоу иҫтәлекте — 80-енсе йылдарҙа булды бер хәл: «Урал батыр шәжәрәһе» тигән тарихи-мәҙәни хеҙмәтем «Ағиҙел» һандарында баҫылып сығып, авторы юғары даирәләр тарафынан «милли сикләнгәнлек»тә ғәйепләнеп, әҙәбиәтебеҙ генералдары суҡмарҙарын башыма ҡундырған ауыр-билғауыр осоромда баяғы Уран Кинйәбулатов Ленин урамында осрап, ҡоластарын йәйеп ҡосаҡлап алды ла, шул әсәрем өсөн халыҡ исеменән мең-мең рәхмәттәр әйтеп: «Һиңә булған хөрмәтемде нисек кенә итеп белдерәйем икән һуң? Әгәр хәлемдән килһә, ошо урында аяҡтарың аҫтына йомшаҡ келәм булып түшәлер инем!» — тип алдымда түбәнселекле баш эйҙе (шуны онота алмайым)...

Ҡорҙаш менән хатлашыу

Иҫәнмеһең, Рафаэль ҡорҙаш!

Һағынысль сәләмдәр ебәреп, Йыһат.

Өфөнән ҡайтып киткәндән биреле (йәғни Яңы йылдан һуң) мин һиңә, бына, дүртенсе тапҡыр шиғырҙар ебәрәм инде. Ләкин һинән бер ҙә яуап ала алғаным юҡ, ҡорҙаш. Хаттарҙы заказлап һалғайным — барып етергә тейештәр инде, үҙемсә. Ниңә яуап яҙмайһың, әллә ваҡытың юҡмы? Нәмәләрем тураһында редакция фекерен белгем килә. Бер хәбәр ҙә килмәгәс, бушҡа эшләп ятмайыммы икән, тигән уй килә күңелгә.

Повесемде лә аҡрынлап эшләйем. Ваҡыт етеңкерәмәй. Башҡорт дәүләт университетына йәйге йыйылышҡа барыуыма эшләп өлгөртә алһам, яҡшы булыр ине, тим.

«Йәш көстәр»гә шиғырҙарым индеме, «Ағиҙел»дең 3-өнсө һанында әлеге нәмәләр баҫыламы? Мин ул һанды, күҙем ҡарайып, көтөп торған булам инде. Ләкин: «Баҫылмағандыр, берәй сәбәп сыҡҡандыр», — тигән шикле уй борсой. Сөнки минең өлөшкә ундай «сәбәп»тәр бик йыш тейеп тора ул. Яҙмыш шулайыраҡ...

Үҙең ни хәлдә, ҡорҙаш? Яҡшы ғына ял итеп ҡайттыңмы? Нимәләр өҫтөндә эшләйһең? Ижад пландарың нindәй?

Мин колхозда эшләйем, грузчик һ.б. булып. Ҡыш буйы һалам ташыныҡ. Яҙғы сәсеүҙә орлоҡ ташыясаҡмын (машинала, тейәүсе булып). Шулай хәлдәр. Ситтән тороп уҡығас, ваҡыт бик аҙ.

Эшеңдә уңыштарға ирешеүеңде теләп, **Йыһат**. 13.04.1963.

Рафаэль ҡорҙаш!

Ике шиғыр ебәрәм, ваҡыт тапһағыҙ, ҡарап сығығыҙ әле.

Мин былтыр йәш яҙыусылар өсөн үткәрелгән семинарҙан һуң Өфөнән ҡайтҡас, әлеге һөйләшеп ҡуйыу буйынса, үҙемсә яҡшы тип һаналған 24 шиғырымды ебәргәйнем. Ни өсөндөр һеҙҙән яуап булманы. Алдығыҙмы уларҙы? Унан алда ебәрелгән шиғырҙарҙы

ла баҫтырманығыҙ (хәтерегеҙҙәме, һеҙ улар эсенән дүртәүен «С.Б.» газетаһына бирергә булғайнығыҙ?).

Мөмкин булһа, зинһар, шиғырҙарымдың яҙмышын хәл итегеҙ әле. Үтенәм. **Йыһат Солтанов**. 16.04.1963.

Һәм бына һис көтмәгәндә Өфөнән шаңҡытҡыс сәләм:

Йыһат ҡорҙаш!

Иң тәүҙә һинең алдыңда ғәфү үтенәм. Шиғырҙарыңды оҙаҡ ятҡырып ташлағанмын. Ҡул теймәне, буғай. Уларҙы бит бик кәйеф барҙа ғына бик ҙур иғтибар менән уҡырға ине иҫәп. Бына бөгөн, ниһәйәт, уҡып сыҡтым. Һәм минең нисек шатланғанымды күҙ алдыңа килтерә алырһыңмы, юҡмы! Теге ваҡытта мин һиңә һаҡһыҙыраҡ: «Һин, шағир булыуҙан бигерәк, прозаик», — тигән фекерҙе әйтә биреп ҡуйғайным шикелле. Яңылышҡанмын. Һин — шағир ҙа, Йыһат. Бына тигән шиғырҙарыңды уҡыным әле. Һин шиғри бальзамды, беҙҙең шикелле, крандан ағыҙып түгел, ә шишмәнең үҙенән ҡуш услап алып эсәһең. Һинең донъяға ижади ҡарашың бар. Һинең шиғырҙарҙа, бөтәһенән элек, тормош тәжрибәһенән килгән фекерҙәр ярылып ята. Шуларҙы һин, ҡытыршыраҡ формала булһа ла, үҙеңсә әйтеп бирә беләһең. Әлбиттә, яҙыу алымың ысынлап та бер аҙ ҡытыршыраҡ. Ләкин шөкәтһеҙ түгел. Ошо ҡытыршылыҡтың үҙенең яҡшы яғы ла, насар яғы ла бар. Яҡшы яғы шунда: шиғырҙарың бик тәбиғи ағалар. Ышандыралар. Ә был — ҙур нәмә. Насар яғы инде шунда: уларҙың ритмдары күп осраҡта тигеҙһеҙ булыуы ҡолаҡты яра биреп ҡуя. Һикәлтәле юлға оҡшап китәләр. Мин хәҙергә һинең шул етешһеҙлегеңә генә иғтибар итеүеңде һорайым. Сөнки был бик мөһим етешһеҙлек. Һөйләү манераңдың ҡырыҫыраҡ булыуын етешһеҙлек тип иҫәпләмәйем. Ул — хатта яҡшы ла. Ә бына шиғыр техникаһының ҡайһы бер закондарына буйһонорға кәрәк тип уйлайым.

Бер строфаны ғына тикшереп ҡарайыҡ.

Көрәш ятты һәр саҡ алдымда,
Хисләнергә ваҡыт булманы.
Һәм мөхәббәт миңә алыҫтан
Ғына тартынып ҡул болғаны.

Тәүге ике юлы шыма. Дүртенсе юлы инде абындыра. Беренсенән, «ғына» киҫәксәһен «алыҫтан» һүҙенән айырып, икенсе юлға күсереп яҙыу шиғырҙы бик боҙа. Икенсенән, дүртенсе юлдағы һүҙҙәрҙең килеше бөтөнләй урынлы түгел. Сағыштырыу өсөн ошо уҡ юлды үҙгәртеп әйтеп ҡарайыҡ:

Һәм тартынып ҡына алыҫтан
Ҡул болғаны миңә мөхәббәт.

Ритм бөтөнләй икенсе бит. Һин быны белмәйһең түгел, беләһең. Ә бары тик шиғырҙы шымартып ултырырға ғәҙәтләнмәгәнһең генә. Ә бит ул кәрәк. Һынлы сәнғәт оҫталары бит бер ниндәй формаһыҙ таштан да ниндәй гүҙәл һын барлыҡҡа килтерәләр. Материалың бит һинең бай. Әйҙә, ҡорҙаш, ошо булған материалды эшкәртергә иренмәйек. Үҙ эшебеҙҙең оҫтаһы булырға ирешергә тырышайыҡ.

Бына шул минең һиңә ҡарата төп кәңәшем. Кәңәш кенә түгел, үтенесем дә. Сөнки, һиҙәм, һиндә һәр кем дә эшләй алмай торған нәмәләрҙе эшләргә мөмкинлек бар. Бер мәлде мин йәшлек тәүәккәллеге менән шундай юлдарҙы ла яҙып ташлағайным:

Минең ҡулдан килер шундай эштәр:
Эшләй алмаç уны һәр кем дә.

Был, әлбиттә, бик тыйнаҡ әйтелмәгән. Ләкин үҙ-үҙеңә ҡарата шундай ышаныс һәм ныҡышмалылыҡ менән эшләү насар түгелдер.

Шулай итеп, әйҙә, Йыһат ҡорҙаш, шиғыр өçтөндә скульпторҙар ныҡышмалылығы менән эшләйек. Фекере, образдары булһа, ҡалған яғы былай ҙа үтә ул, тип ҡарамайыҡ.

Редакциялағы был шиғырҙарыңды һайлап, бер аҙын йәштәр һанына индерергә тырышырбыҙ. Ул турала һөйләшеп тә ҡуйҙыҡ. Ә ҡалған яғын уйла әле.

Унан һуң журналдың үҙенә генә ҡағылышлы бер һүҙем бар. Һин бит инде хәҙер беҙҙең ғаилә ағзаһы булып киттең. Хәҙер киләһе йылға ҡарата журналға яҙылыу бара. Уны үҙегеҙҙең тирәлә (үҙегеҙҙең ауылда булһа ла) таратыуҙа һин дә булышһаң ине. Бына шул.

Сәләм менән, эшеңдә уңыштар теләп, журналдың поэзия бүлеге мөдире **Рафаэль Сафин**. 8.10.1963.

«Яҡшы һүҙ — йән аҙығы», — тигән мәҡәлдең ҡөҙрәтен тойҙом шунда; табандарым әрһеҙ ерҙән ҡубынып, ҡулдарым ҡанатҡа әүерелеп, осоп барғандай инем. Йөрәгемде усыма һалып, тигәндәй, яҙҙым хатты:

Рафаэль ҡорҙаш!

Бөгөн һинең 8.10.1963. яҙған хатыңды алып уҡыным һәм, шатлығымдан, ни эшләргә лә белмәнем. Көтмәгәндә булды был хәл!

Мин һиңә шиғырҙарымды бик ҡыймай ғына ебәргәйнем һәм уларға былдай йылы ҡараш күрһәтелер тип өмөт тә итмәй инем. Шулай ҙа шиғырҙарымдың гелән кәбәктән генә тормауына күңелем ышана ине минең; йөрәгем, бошоноп, унда тос йәҙрә орлоҡтарҙың да төрөнөп ятыуын, ләкин уларҙы ни өсөндөр бүтәндәр күҙгә элмәүен, иçәпкә алырға теләмәүен һиҙенеп һыҙлай ине...

Ошо көнгә тиклем мин үҙемде, шиғыр яҙыу минең ҡулдан килмәй, мин — шағир булырлыҡ кеше түгелмен, тип ышандырырға тырыштым һәм эстән генә, һиҙҙертмәй, көйөнөп йөрөнөм. Бына ни өсөн шулай булды был.

Бер заман мин 40-50-ләп шиғырымды (уларҙың байтағы быйыл мин һиңә ебәргән шиғырҙар араһына ингән) Өфөгә ебәреп ҡарағайным. Бер ни тиклем көткәс, яуап хаты килде. Хикәйәләре менән бөтә халыҡҡа танылған прозаик иптәш тарафынан яҙылғайны был рецензия. Был ағай, шиғырҙарымдағы рифма, ритм сатаҡлыҡтарын бик дөрөç күрһәтеү менән бер рәттән (мин быны үҙем дә белә инем һәм ҡайһы бер өлкән быуын шағирҙары ижадында ла шундай уҡ күренештәрҙе осратҡанлыҡтан, был шулай китә бирә икән, тип уйлай торғайным), ундағы шиғыр юлдарына ишелеп ятҡан моңдо ул рух төшөнкөлөгө, пессимизм тип атаны, һәм ижади киләсәгемә кресть тартып ҡуйҙы. Һуңғыһы менән мин риза булманым. Моң эсенә төрөнөп ятҡан ялҡынды күрергә теләмәүҙәре рәнйетте мине...

Шул йылды миңә Өфөгә барырға, редакцияға инергә тура килде. Был юлы мин үҙемдең шиғыр яҙыу тәжрибәмә ҡарата, рәсми рәүештә, тағы ла үлтергесерәк баһа, һөҙөмтә ишеттем. Редакцияның яуаплы секретаре М. Тажи ағай миңә, туранан-тура: «Беҙ һиңә күптән әйткәйнек бит инде, шиғыр яҙма, ә проза менән генә шөғөллән, тип. Һинән шағир сыҡмай!» — тине. Ошо ваҡиғанан һуң мин шиғыр яҙыуҙы бөтөнләй ташларға ҡарар иттем. Шиғыр китаптарын уҡымаҫҡа, шиғырға ҡарата үҙемдә нәфрәт тойғоһо тәрбиәләргә тырыштым. Йылдан артыҡ шулай яҙмай йөрөнөм. Ләкин был килеш йәшәү мөмкин түгел ине. Мин үҙем өсөн генә яҙа башланым. Уларҙы камиллаштырып, шымартып ултырыуҙы кәрәкмәгән эш тип һананым. Ниңә юҡ өсөн ваҡыт уҙғарырға, улар барыбер донъя күрмәйәсәктәр бит! Йөрәгемдә ҡайнаған тойғоларҙы һурып алып, мине бер аҙ бушатһалар — булды!

Ләкин тора-бара, мине тағы өмөт саҡкылары биләй башланы. Шиғырҙарымды тағы ла бер тапҡыр ебәреп ҡарау теләге уянды. Һәм бына, көтмәгәндә, һеҙҙән шундай дәртләндергес хат алдым!

Мин, әлбиттә, ниндәйҙер гений булғанмын да, мине баһаламағандар, тигән фекер үткәрергә теләмәйем, о юҡ, ҡорҙаш! Әгәр шулай аңлаһаң, бик ҙур яңылышлыҡ булыр ине. Мин бында һис тә үҙем хаҡында түгел, ә поэзияның бер биҙәге булған моң хаҡында һүҙ алып барғым килә. Сөнки минең йөрәгем моңға бәйләнгән, шиғырҙарым, яҙған саҡта, моңға уралып сыға (һәр хәлдә, үҙемә шулай тойола). Һәм шул моң арҡаһында улар «рух төшөнкөлөгө», «пессимизм» тип аталдылар ҙа инде.

Әлбиттә, беҙҙең хәҙерге тормош өсөн төшөнкөлөк хас түгел; беҙгә дәртле йырҙар, шиғар-лозунгылары шартлап торған утлы шиғырҙар кәрәк. Ләкин был ғына моңдо шиғыр донъяһынан һыҙып ташларға нигеҙ бирмәй әле. Сөнки моң — кеше күңеленә хас тәбиғи тойғо ул. Дәртһеҙ кеше булмаған кеүек, моңһоҙ йән дә булмай. Моң кисереү (быны аһ-зар менән бутарға ярамай) — кеше күңеленең иң нескә, иң гөманлыҡлы тойғоларының береһе ул. Йөрәген моң тирбәтмәгән әҙәм илгә, кешеләргә булған һөйөүҙең, яҙы бөрө еле булып йөрәк аша күкрәп үтеүсе саф мөхәббәттең асылын белә алмай. Моңдо халыҡ тыуҙырған һәм уны хисапһыҙ күп нескә һыҙаттар менән байытҡан. Әгәр беҙҙә революция еңгән икән, социализм төҙөлөп бөтөп, бөйөк коммунизм осорона китеп барабыҙ икән — моңдоң да көнө бөткән, дәрт кенә тороп ҡалған, тигән һүҙ түгелдер. Былай уйлаусыларҙы мин, етәкләп, халыҡ күңеле дәрьяһына килтерер инем һәм: «Ана, ҡарағыҙ, унда сайпылған тулҡындарҙың тауышына ҡолаҡ һалығыҙ!» — тир инем. Улар унда шатлыҡтарҙың да, дәртлектәрҙең дә, моңдарҙың да, халҡымдың мең-мең төрлө бүтән яҡты тойғолары менән ҡуша аралашып, иҫәпһеҙ күп тулҡын булып тәгәрләгәнен күрерҙәр ине...

Халҡым миңә иң ҙур судья ла, уҡытыусы ла. Халыҡ күңелен тыңлай белгән кеше ундағы иң нескә хистәрҙе лә тотоп ала ала. Мин шуны аңланым: халҡым моңдарҙы дәрт менән бергә, бер хоҡуҡта ҡулланып йөрөтә. Космик ракеталар осоронда ла кешегә моң кәрәк икән. Иғтибар итегеҙ: хәҙерге көндә лә кешеләр боронғо моңло оҙон көйҙәрҙе яратып тыңлай бит. Мәжлестәрҙә ултырғанда берәү оҙон көйҙө һыҙҙырып ебәрһә, бөтөн табын шым ҡалып уны тыңлай һәм, аҙаҡтан, иҫәпһеҙ күп алҡыштар менән тәбриклә й. Өфө радиоһы тапшырған моңло йырҙарҙы, башҡорттар ғына түгел, татарҙар ҙа һөйөп һәм йотлоғоп ҡабул итәләр. Күрәһегеҙ, йырҙарҙы тыуҙырған социаль ерлек емерелгән, ләкин йырҙар яңы ерлектә лә шанлы ғүмерҙәрен дауам итәләр. Сөнки халыҡ күңелендә уларҙың зыңғырлап һуғылыу ҡылы өҙөлмәгән...

Моң — күп ҡырлы кеше тойғоhононң бер гүзәл hыры ул. Әгәр беҙ уны поэзия ерлегенән hыҙып ташлаhаҡ, уҡыусыны иң гүзәл тойғоларҙың берeһен кисереүҙән мәхрүм иткән һәм шиғырҙы ярлыландырған булыр инек. Халыҡ, әлбиттә, шағирҙар моңдо танымай икән, тип, үҙенең моңға булған ҡарашын үҙгәртмәҫ инде. Шатлыҡ, дәрт тойғолары менән бер рәттән, ул hаман моң эҙләүен, моң кисереүен дә дауам итер. Шағирҙарҙың китабында тапмаhа, ул уны үҙе сығарыр. Ләкин ул уны ҡайhы ваҡыт дөрөҫ, ә ҡайhы ваҡыт яңылыш идея менән hуғарыр. Әҙәбиәт арҡылы халыҡ аңына тәьҫир итә торған мөhим рычагтарҙың береhе беҙҙең ҡулдан ысҡынған булыр... Бына шуларҙы иғтибарға алып, ошондай фекер әйтке килә: әгәр ул яҡшы идея күтәреп, шул идеяны халыҡ күңеленә нескәлеклерәк юл менән алып барып еткереү өсөн килhә, моңға ҡаршы күҫәк күтәрмәйек әле беҙ! Моң йәшәргә тейеш, ләкин ул, шағирҙар ҡәләме аҫтында, уҡыусыға hағыш-хәсрәт, аh-зар килтереү өсөн түгел, ә уның законлы кешелек тойғоhон ҡәнәғәтләндереп, шул уҡ ваҡытта уны киләсәккә ышаныс, Ватанға, халыҡҡа, партияға оло мөхәббәт, эшләнеп ятҡан бөйөк эштәрҙең ҡәҙерен белеү тойғоhо менән байытырға тейеш. Әгәр ошо күрhәтелгән вазифаларҙы уңышлы йөкмәп килә алhа, шағир йөрәгенән hарҡылып шиғырға төшкән уйсан моң hис тә «пессимизм емеше» тип аталырға тейеш түгелдер, минеңсә.

Ошо юлдарҙы уҡығас, был мырҙа моңло шиғырҙар ғына ижад итеп йәшәргә йыйына икән, тип уйлай күрмә тағы. Һис тә улай түгел. Кеше өсөн хас тойғоларҙың бөтәhе лә етерлек миндә. Әгәр шул күп төрлө тойғоларҙың тик береhен генә бөтә шиғырҙарыма hалып ҡуллана торған булhам, мин бик ярлы һәм бәхетhеҙ булыр инем. Шағир ижадында хистәр, тойғолар бриллианты бөтә ҡырҙары менән балҡып тоҡанырға тейеш.

Кескәй тәжрибәмдәге төп hыҙаттарҙың hинең тарафтан ыңғай баhаланышы, ысынлап та, ҡанатландырҙы мине, ҡорҙаш! Һин шиғырҙарымдың тышҡы ҡабығы үтәләй ысын үҙәкте күрә алғанhың. Шиғыр техникаhы яғынан ебәргән етешhеҙлектәрем тураhындағы hүҙҙәреңде тулыhынса ҡабул итәм һәм дөрөҫ тип иҫәпләйем. Һинең хатты уҡыу hөҙөмтәhендә шиғырҙарыма ҡабат күҙ йөрөтөп сыҡҡас, бына ошондай нәтижәгә килдем. Ысынлап та мин, hин әйтмешләй: «Фекере, образы булhа, ҡалған яғы былай ҙа үтә ул», — тиеберәк уйлағанмын икән шул. Ә инде: «Шиғырҙарҙы скульпторҙар ныҡышмалылығы менән эшләйек», — тигән саҡырыуың һәм бер ниндәй формаhыҙ таштан да гүзәл hын барлыҡҡа килтереүсе скульпторҙар ижады тураhындағы образлы миҫалың мине үҙ ҡәләмемә бөтөнләй икенсе күҙлек аша ҡарарға рухландырҙы. Эйе, ҡорҙаш, эйе, тормош тәжрибәләрен һәм халҡым күңелендә ятҡан гәүhәр тойғоларҙы, бихисап рухи байлыҡтарҙы камил формаға ла hала белергә кәрәк! Ә инде яҙыу манерамдың бер аҙ ҡытыршыраҡ булыуын йәғни шиғыр юлдарының hөйрәлеберәк килеүен йөкмәтке тарафынан талап ителгән сара, тип аңлатҡым килә, шулай ҙа. Ағастары япраҡҡа төрөнөп ултырған елhеҙ йәй айында ҙур йылғаларҙың талығып ҡына ағышын күргәнең барҙыр бит hинең? Мәҫәлән, Һаҡмар hыуының. Шаулап-ажғырып аҡҡан hай кисеүҙе үтеп, түбәнерәк барhаң, сикhеҙ тәрән уйға һәм моңға сумып, бер нисә саҡырым буйына талығып, тыныс һәм яй ғына ағып ятҡан тәрән йәшел ятыуҙы күрәhең. Ул уйлы, моңло булғаны өсөн шулай талығып яй ғына аға, hөйрәлеп аға кеүек...

Тағы ла өҫтәп, шуны әйтке килә: халҡы араhында, ҡарурмандағы ағастарҙай, тығыҙ hөйкәлеп йәшәгән кеше — төрлө төҫтәге буяуҙар араhына ташланған киптергес ҡағыҙҙы — промокашканы хәтерләтә. Промокашка бит яҙыу ҡараларының ҡараhын да, ҡыҙылын да, зәңгәрен дә, hайлап тормаҫтан, бөтәhен бер дәрәжәлә hеңдермәйенсә булдыра

алмаған кеүек, әҙәм балаһы ла халыҡ тойғоларының төрлө биҙәктәрен: дәртен дә, моңон да һәм бүтәндәрен дә, айырмайынса, үҙенә ҡабул ҡыла. Ул биҙәктәрҙең иң яҡшыларын шиғыр аша халыҡҡа кире ҡайтарғанда, уларҙың бер генә тимгелен дә һүрелтмәй, юғалтмай, киреһенсә, шағир күңелендә яралған яңы тимгелдәр һәм идеялар менән тулыландырып, байытып бирергә кәрәк.

Ҡәҙерле ҡорҙаш! Быға саҡлым мин үҙемде ҡанаты һындырылған ҡош итеп һиҙә инем. Ләкин һинең ысын дуҫлыҡ хисе менән, минең көсөмә ышаныс белдереп яҙған илһамландырғыс һүҙҙәрең миңә яңынан ҡанат ҡуйҙы. Түбәм өҫтөндә тәрән бейеклек күрҙем һәм шул бейеклекте яулау мөмкинлеге барлыҡҡа ышандым. Иң мөһиме ошо!

Ҡанатҡа эйә йән — осорға, күккә күтәрелергә тейеш. Ләкин шағир поэзия күгенә үҙен бөтә донъяға күрһәтеү өсөн түгел, ә бөтә донъяға күктән һүнмәҫ ут йолоп алып биреү өсөн күтәрелә.

Мин шулай аңлайым.

Бына һеҙгә тағы ла бер нисә шиғырымды ебәрәм. Үҙегеҙ нисек ҡарарһығыҙ...

Иҫән бул, ҡорҙаш, ижадыңда уңыштарға иреш.

Йыһат Солтанов. 14.10.1963.

Йыл буйына айный алмай йөрөнөм был илереп-тилереүҙән, ә Рафаэль ҡорҙашымды донъялағы иң ҡәҙерле дуҫтарымдың береһе итеп күрҙем. 32-нсе йыл тыуғандарҙың утыҙ ике йәше тулған 1964 йылдың 3 декабрендә (үҙемдең тыуған көнөм) илһамланып ошо шиғырҙы яҙҙым:

Утыҙ ике

*Ҡорҙашым **Р. Сафинға**.*

Утыҙ икене лә еткерҙек бит! —
Утыҙ ике тапҡыр Ер шары
Беҙҙең менән һыҙҙы түңәрәген,
Сорнап алды йәй һәм ҡыштарҙы.

Утыҙ ике тапҡыр, күк күгәртеп,
Беҙҙең өсөн яңы йыл тыуҙы.
Донъя ғәмен йыйған күңелдәрҙе
Шампанский йә үрт-йәш йыуҙы.

Утыҙ ике тапҡыр, өмөт итеп,
Күҙ аттыҡ беҙ төпһөҙ күктәргә.
Утыҙ ике тапҡыр һәм йөкмәндек
Ватан артҡан изге йөктәргә.

Утыҙ ике төрлө һөнәр тирҙек,
Утыҙ ике яҙмыш кисереп.
Һәм ышанам: беҙҙең саф йөрәктәр

Етмешкә лә беҙҙе еткерер[5].

Беҙҙең нәфрәт, беҙҙең мөхәббәттәр
Утыҙ икеләтә пак булды.
Күкрәктәрҙең күкрәп-тетрәүҙәре
Йондоҙланып күккә атылды.

Һөйөклө дуҫ, ләкин һөйләнек беҙ
Утыҙ ике төрлө ҡояшты.
Табында ла, ҡанлы яуында ла
Намыҫыбыҙ булды юлбашсы.

Тайпылманыҡ тоғро юлыбыҙҙан,
Аяҡтарҙы йылан саҡһа ла.
Шуға ла шул бөгөн күбебеҙҙең
Бәғерендә яра һаҡлана.

Һөйөклө дуҫ, тоғро дуҫым минең,
Ҡаршылайбыҙ ғүмер байрамын.
Утыҙ ике тапҡыр бирәбеҙ һүҙ
Тапатмаҫҡа Намыҫ байрағын.

Һин — Өфөлә, ә мин ауылымда,
Тик йөрәктәр тибә бер тигеҙ.
«Ҡояш алып ергә ҡайт!» — тиһәләр,
Менеп китер инек икебеҙ.

Һөйөклө дуҫ, икәү күтәрәйек
Икеләтә нурлы бокалды,
Утыҙ икенсе йыл тыуғандарҙың
Утыҙ ике йәше айҡанлы.

Һөйөклө дуҫ, утыҙ ике тапҡыр
Ант итәйек илде һөйөргә.
Көн килһә лә, ҡара төн килһә лә,
Халҡым өсөн, тиеп, еңергә!

Утыҙ ике әжәл кисермәбеҙ,
Ләкин беҙҙең кискән бер әжәл
Ил алдында антты үтәү булыр —
Халыҡ өсөн түгел бер ни жәл!

Һөйөклө дуҫ, тоғро дуҫым минең,

[5] Күрәҙәлегем дөрөҫкә сыҡты: ҡорҙашым Рафаэль Сафин 2002 йылда — 70 йәшен тултырып китте был донъянан; ә мин иһә иҫкәртмәле был юлдарҙы 71-енсе йәшемдә яҙып ултырам.

Күтәрәйек нурлы бокалды
Утыҙ икенсе йыл тыуғандарҙың
Утыҙ ике йәше айҡанлы!

3.12.1964.

Әҫәрҙәр ҙә бит донъяға үҙ яҙмышы менән тыуа. Был шиғырҙы «Йондоҙ ямғыры» йыйынтығыма кереткән булһам да, дуҫым Рәми Ғариповтың һүҙен тыңлап, алып ташлағайным, шунан һуң да ул бер ваҡытта ла матбуғатта сыҡманы. Әйткәндәй, шулай уҡ икенсе дуҫым Рафаэль Сафиндың хупламауы арҡаһында «Мостай Кәримгә» тигән шиғырым да ҡулъяҙмала килеш ҡалды. Ә Рәмиҙең үҙе хаҡындағы бер нисә шиғырым, күпме генә боронғо һәм ныҡлы дуҫтар булһаҡ та, үҙе үлеп байтаҡ йылдар уҙғас ҡына яҙылды, буғай...

Рафаэль әйткән «һөйрәлеүсе ритм» тәү сиратта «Буранлы юлда» тигән шиғырға бәйле булып, ҡарлы-буранлы алыҫ Тирәкле юлынан өшөп-ҡатып колхоз малдарына һалам ташыған саҡтарҙы иҫкә төшөрә. Атауылла дуҫым йөрөткән ҡарышлауыҡлы трактор, осһоҙ-ҡырыйһыҙ аҡ диңгеҙҙә тулҡындарҙы ярған карап һымаҡ, аҫҡа бер батып, бер ҡалҡып, эс бошорғос талғын дырылдап бара; тауышы бер көсәйеп, бер һүлпәнәйеп сыға; ә ҡарышлауыҡ табанлы «тимер ат» артында беҙ — санала бейек йөк башында буран өйөрмәһе эсендә һерәйешеп ултырып киләбеҙ. Шул хәрәкәт ыңғайына тракторҙың талғын ауазылай оҙон моң — һөйрәлеүсән ритмлы шиғыр үҙенән-үҙе ярала күңелемдә...

Рафаэль ҡорҙаштың баштан уҡ миңә һирпелгән йөрәк йылыһы һәм яҙғы беренсе ҡояш нурҙары тәьҫирендә һалҡын ҡарҙы йырып сығыусы ныҡыш аҡ-сәскәләй бирешмәйенсә үркелеүсе талымһыҙ шиғриәтемде, кеше булараҡ үҙемде лә хөрмәтләүе, әйтә алам, оҙаҡ йылдарғаса һүрелмәй күңелемде биҙәне. Яҙыусылар берлегенә ағза итеп алынғанымда фатихалап биргән яҙыуы ла тап ошо хаҡта һөйләй бит:

Яҙыусы Йыһат Солтановҡа СССР Яҙыусылар союзы агзалыгына ***Рекомендация.***

Мәглүм ки, яҙыусылыҡка иң яҡшы рекомендация – ул яҙыусының китаптары. Йыһат Солтановты мин шагир итеп ныгыраҡ беләм. Уның "Йондоҙ ямгыры" исемле шигри китабы үҙе үк бик һәйбәт рекомендация.

Йыһат Солтанов тормош багажы ҙур булган, әҙәбиәткә үҙенең ныҡлы ҡарашы менән килгән, яҙыусының төп ҡоралы телде үҙенсә яҡшы белгән етди әҙип. Унан, шигри әҫәрҙәр генә түгел, ҙур күләмле проза әҫәрҙәре лә көтөргә хаҡлыбыҙ. Сөнки ул был өлкәлә лә етди заявкалар бирҙе.

Унан һуң миңә, Йыһат менән бергә эшләгән, уны, яҙыусы итеп кенә түгел, ә кеше итеп тә арыу уҡ белгән әҙәмгә, уның кешелек сифаттары ла ҡәҙерле. Уның менән яңы яҙылып бөткән әҫәрең һәм артабангы ижад пландарың хаҡында рәхәтләнеп һөйләшеп ултырып була.

Мин, 1960 йылдан биреле Яҙыусылар союзы агзаһы булараҡ, Йыһат Солтановҡа СССР Яҙыусылар союзы агзалыгына фатихамды бирәм.

Р. Сафин. 03.11.1970.

Ҡорҙашымдың хатындағы матбуғат таратыу тураһындағы нәсихәтенә килгәндә, ауылыма ҡайтҡас та уҡ башлағайным ул эште. Даими алдыртҡан «Ағиҙел»емде үҙемдән һуң башҡаларға уҡыттым, «Совет Башҡортостаны» гәзитен, көндөкөн-көнгә ҡуша тегеп, ауылыбыҙҙың китапхана уҡыу бүлмәһенең өҫтәлендә ҡалдырҙым. Башҡорт матбуғатына өйҙән-өйгә йөрөп өгөтләп яҙҙырттым. Бына шуға бер миҫал булырҙай хатым:

Һаумыһығыҙ, иптәштәр!

Бына мин һеҙгә тағы ла бер шиғыр ебәреп ҡарайым.

Ғинуар айында бер, февраль айында бер тапҡыр шиғырҙар ебәргәйнем, Рафаэль ҡорҙаш ни өсөндөр яуап яҙмай. Әллә өйҙә юҡмы? Әйберҙәрҙең редакция тарафынан нисек баһаланғанын белмәгәс, икеләнеп торам. Билдәһеҙлек.

«Ағиҙел» журналына ҡағылышлы бер-ике һүҙ. Беҙҙең бригаданан быйыл 23 кеше «Ағиҙел»гә яҙылғайны, ләкин, яңы йылдың инде өсөнсө айы китеүгә ҡарамай, беренсе һанын да күргәнебеҙ юҡ. Элемтә бүлеге: «Беҙ бер ни ҙә белә алмайбыҙ, Өфөнән ебәрмәй тоталар», — тип яуап бирә. Тейешле урынға шылтыратып, бына шул мәсьәләне хәл итһәгеҙ ине. Эштәр былай барһа, киләһе йыл подписчиктарҙан ҡолаҡ ҡағыу мөмкин бит.

Иҫән булығыҙ, яуап яҙығыҙ. Бөтәгеҙгә лә ижади уңыштар теләп, **Йыһат**. 11.03.1964.

Өфөләге «шеф»тарым Рафаэлде лә, Рәмиҙе лә боронғо Петербурҙағы урыҫ аристократтары һымаҡ итеп күрә башланым; сөнки улар минең кеүек ҡара эштәр араһында болғанмайынса, сәскәле яҙ йырсылары — һары һандуғастар һымаҡ, нәзәкәтле үҙ телдәрендә генә һөйләшеп, саф шиғриәт менән генә һулайҙар кеүек ине. Ә мин көндәлек әрһеҙ эштәремдә янып йәшәйем, КПСС-тың үҙем сикһеҙ ихтирам иткән генеральный секретаре Никита Сергеевич Хрущевтың ялҡынлы сәйәсәте менән мөкиббән мауығам, ижадым да ана шул тормош һулышынан тын ала. «Шеф»тарым кеүек йылына бер нисә бөртөк шиғырҙы ювелирҙай йыбанмайынса шымартаһы, йылтыратаһы, гәүһәрләтәһе урынға, ҡырыҫ тормош киҫәген тормош ҡаяһынан ҙур дәүмәлдә умырып алып, ҙур жанрҙар менән йөҙәтәм Өфөнө. Шул рәүешле 1963 йылда — «Крематорий», 1964 йылда — «Милиция иптәшкә өндәшеү», «Химия һәм игенсе», «Ашлама һәм фашлама», «Йөрәк илауы» (1937 йылғы Сталин репрессиялары тураһында) тигән поэма һәм плакат-поэмаларымды яҙғанмын; шуларҙың ылғый ауыл тормошло өсөһөн «Совет Башҡортостаны» гәзитенә тәҡдим ҡылып, ундағы әҙәбиәт бүлеге мөдире Рәми Ғариповтан: «Һин, ҡартым, поэзия менән булаш. Тиреҫ ул поэзия матдәһе түгел», — тигәнерәк ҡәтғи яуап алғанмын... Шул ваҡыт мин йөрәк һыҙлатҡыс ауыр хистәр кисереп, бөтә үткән ғүмеремде, йәшлек йылдарым һүрелеп ҡалған һәм мәңгелеккә юғалған тыуған ауылым Сәнкем-Биктимерҙе, ҡәҙерле ауылдаштарымды иҫемә төшөрөп ултырҙым...

«Һәнәк» журналына ла ваҡ ҡына сатирик хикәйәләр ебәреп ҡарағайным, ләкин Марат Кәримов тигән берәүҙән (торараҡ белеүемсә, ифрат талантлы яҡташым булып сыҡты, халыҡ шағиры дәрәжәһенә күтәрелде) кире ҡағылыу хаттары алдым (ижадым ул теләгәнсә юғары кимәлдә булмағанғалыр инде). Был яҡтан да өмөтөм тамам өҙөлдө, тигәндә генә, көтмәгәндә, миңә таныш түгел Ғабдулла ағай Әхмәтшиндән һөйөнөслө хәбәр килеп төштө, оҙаҡламай баяғы хикәйәләрем “Һәнәк” журналында бер-бер артлы ташҡа баҫылып та сыға башланы. Баҡтиһәң, Марат Кәримовты үрләтеп, Мәскәүгә ВЛКСМ Үҙәк Комитеты мәктәбенә уҡырға ебәргәндәр, урынында миһырбанлы Ғабдулла ағай эшләй башлап, аҙаҡ унын үҙе иҫкә алыуынса, өҫтәл тумбаһы аҫтында ҡаҡланып ятҡан ҡулъяҙмаларымды һөйрәп сығарған...

1965 йылдың йәйендә сираттағы уҡыуымдың сираттағы бурыстарын үтәү буйынса вузға барғанымда үҙ ғүмеремдәге көтөлмәгән боролош булды: «Һәнәк» журналының баш редакторы Идиәтулла ағай Әсәдуллин (һуғышта Ғ. Әхмәтшин ағай менән бергә булған)

миңә журналда эшкә ҡалырға тәҡдим яһаны, өҫтәүенә, фатир һымаҡ бер мөйөш тә тәтетмәкселәр икән (машинистка Фәхриә апайҙан бушанған). Күп уйлап торорға ла, ғаиләм менән кәңәшләшергә лә форсат юҡ — күҙ йомоп ризалыҡ бирҙем (үтә яуаплы мәлдәрҙә шулай ҡапыл хәл итеү ғәҙәтем бар). Ауылға хәбәр итеп, ғаиләмде күсереп алырға әҙерләй башланым фатирҙы. Унда ризалашҡандар (бүренең башы урманға ҡарағанлығын яҡшы беләләр бит инде!), урын-ҡаралтыны юлға әҙерләп төйнәштерергә керешкәндәр...

Өфөлә

«Ябай ауыл малайы»ның (шулай тип һанайҙар ине мине) Өфөгә килеп урынлашыуы баш ҡала өсөн, әлбиттә, иҫ китерлек ваҡиға булмағандыр. Тәүге йылым ҡалаға һәм эш урынына күнегеү, яңы хеҙмәттәштәр менән уртаҡ тел табып йышылыу һәм, ниһәйәт, ғаиләмде туйҙырыр икмәк табыу хәстәрлектәренә күмелеп үтте. Иң ҡыйыны — ҡәләмдәштәр араһында йәйелгән һәм һис кенә лә туҡталырға уйламаған хәмер затлы эскеселеккә ылығып йәшәп китеү, кемдең арбаһына ултырһаң — шуның йырын йырлап ҡына ылауҙан ҡоламай бара алыуың ине. Ул осорҙа ғөмүм ил буйынса ҡотороноп "сәскә атҡан" был киҙеү күренекле һәм күренекһеҙ ҡәләм эйәләрен дә ныҡ ҡаҡшатты шул: редакцияларҙың күбеһендә эш көнө редакторҙан ҡасып-боҫоп рюмка тотоуҙан башланыр ине, абруйлы оло быуын әҙиптәренең дә күбеһе (тәртипле һәм инсафлы Сәйфи Ҡудаштан һәм "һалҡын кеше" Әкрәм Вәлиҙән ғәйреләре) шул һөрөмдә бергәләп ҡайнашыр ине. Әйтәйек, ярым һуҡыр һәм һаңғырау яҡташым Сәғит Агиш, кәкре таяғына таянып, көн дә иртән редакцияларҙы әйләнеп сыға, башҡалары ла һуғылмай үтмәй һәм был тап "Һәнәк"тәге "күтәренке" сәғәттәргә тап килә. Ә гонорар алыу ("Һәнәк"тә айына бер-нисә тапҡыр) көндәрендә ул саҡтағы матбуғат йортондағы (Карл Маркс урамы, 25) хәмер-хөмөрлө буфетта ағай-эне бигерәк тә кинәнеп байрам итә, һәр беребеҙ ғаиләләргә "ярым төҙөк, ярым боҙоҡ" ҡайтабыҙ, ә ҡайһы берҙәребеҙ, ярты юлда һөрлөгөп, төрлө мажараларға осрап, ҡаланың айныткысханаһына ла тарыйбыҙ. Шундай мажараларҙың береһен әйтәйем.

Шул Карл Маркс 25-тә касса "амбразура"һы ҡаршыһында сират торабыҙ: алдараҡ – Сәғит Агиш, унан ҡала бер-нисә кеше аша "Һәнәк"тәшебеҙ Рәйес Ғабдрахманов, уның артынса беҙ, ҡалған "Һәнәк"селәр. Рәйес ағай Ғабдрахманов шунан бер-ике ай элегерәк кенә кисен эштән "күңелле" ҡайтып барышында һыңар аяғын һындырып, ике ҡултыҡ таяғына таянып йөрөп ята, әммә барыбер "күңелле" ғәҙәтен ҡуймай. Бына Сәғит ағайыбыҙ, юморист, "амбразура"нан үҙ әжерен алды ла, артына боролоп ҡарап, ҡатын-ҡыҙҙыҡылай бәләкәй генә ҡулындағы бер ус ҡағыҙ аҡсаны һелкеп, урыҫсалап "юморланы":

-- Раис Габдрахманов, айда, пошли другой нога ломать!

Һәм иртәгеһен күңелһеҙ хәбәр килде: Сәғит ағайыбыҙ, баяғы буфеттағы хиссиәтле табыныбыҙҙан ҡайтып барғанында, Коммунистик урам асфальтендә үҙ аяғына үҙе һөрлөгөп, ҡулын һындырған...

Атаҡлы Баязит ағай Бикбай менән дә аптыратҡыс хәл булған. Шул йылдарҙа тимер юл вокзалы яғындараҡ Карл Маркс урамындағы йортта йәшәй ине ул. Ваҡиға йәйге селләлә моронлап, ағайыбыҙ ул заманда хәлле кешеләр генә киймәле буй биҙәкле ебәк пижамала тимер юл вокзалы янындағы мунсаға киткән; елле ҡайын миндек менән

йәне теләгәнсә сабынып сыҡҡас, еңгәйгә ҡайтып етере алдынан ҡанды йүгертергә тип, вокзал ресторанына кереп ултырған да поезд туҡталған арала вагондарынан төшөп, уның өҫтәленә һырып шешә бушатыусы шундай уҡ буйлы пижамалы йомарт ике офицерға табындаш булған. Поезд ҡуҙғалыры алдынан ғына, ялҡынлы тостарының осона сыға алмай, буфеттан бер-ике шешәне эләктереп, өсөһө ҡосаҡлашып, вагонға саҡ менгәндәр; купеға инеп ултырып, күңелле шөғөлдө ары дауам иткәндәр һәм Баязит ағайыбыҙ буй-буй пижамала килеш Өфөләге фатиры урынына Мәскәүҙең Ҡазан вокзалына барып төшкән. Ҡаса-боҫа, тигәндәй, такси яллап, консерваторияла уҡып ятмыш йәш композитор Заһир Исмәғилев йәшәгән дөйөм торлаҡка барып етә был, ә тегеһе уны ҡосаҡлап ала, таксисты ризалаштырып, бүлмәһендә ятҡырып ял иттертә. Шулай баш-күҙ алғас, мыҡты һынлы йәш композитор ҡустыһының булышлығында күршеһендәге ҡыҫҡараҡ буйлы бер азаматтың алмаш костюмын пижамаһы өҫтөнән кейеп алған әҙип ағайыбыҙ әҙәпле генә ҡиәфәттә Рәсәй Әҙәбиәт фонды (Литфонд) идараһына барып инә (унда уны яҡшы беләләр) һәм, баш ҡалала милли опера либреттоһы яҙып ята торғас көрсөккә таяныуын һөйләп биреп, ярҙам фондынан ярайһы ғына аҡса алып сығып китә... Осло беҙ ҡапсыҡта ятмай бит: ағайыбыҙҙың Өфө мунсаһынан нисек итеп “өйөнә ҡайтып етеүе” тураһындағы иҫкиткес мажаралы хикәйәт бер килке Мәскәү зыялылары араһында бик тиҙ таралып, күп йылдар буйына шешәле табындарҙа һөйләнеп йөрөмәле көләмәс төҫөн ала; бер заман шуның нигеҙендә кинорежиссер Эльдар Рязанов үҙенең “Новый год или с легким паром” тигән билдәле фильмен эшләп данлана...

Матбуғат йортобоҙҙо аҙаҡ иҫке урыҫ зираты өҫтөнә биналап күсерҙеләр, ә зираттың ҡалған өлөшөндә лә бөтөрөү эштәре бара. Шундағы миләш һәм ҡайынлыҡтар араһындағы бер-нисә урында ҡала хәмерйәндәре дүрткел ҡәбер таштарынан өҫтәл-эскәмйәләр әтмәләгәндәр ҙә йәйге эҫе көндәрҙә шул күләгәле табындарҙа йыйналышып эсәләр – урам аша ғына араҡы кибете, милиция ла әруахтарҙы борсомай... Главпочтамтта хаттар эшкәртеү бүлегендә эшләүсе ҡатыным Санияға йәш хеҙмәттәш ҡыҙҙарҙың береһе һөйгән егете менән шунда юлығыуын һөйләгән: “Рауил Бикбаев тигән ифрат йомарт шағир бар икән: табыныбыҙға туҡталды ла, ҡулдарын болғай-болғай ҡысҡырып шиғыр һөйләп, бер-икене “төшөрөп” алғас, ҡеүәтләнеп, “бөгөн минең байрамым, егеттәр!”, тип һөрәнләп, магазиндан бер юлы бер йәшник араҡы килтертте табынға!”

Ошо зиратҡа бәйле тағы ла бер эпизод ҡалған иҫтә (Булат Рафиҡов үҙе һөйләне). Ул саҡта ҡала хакимиәте шул бөтөрөлмөш зираттағы мәрхүмдәрҙең туғандарына уларҙы башҡа зираттарға күсереп күмергә рөхсәт иткәйне (быны ҡала бюджеты иҫәбенән ойошторғайнылар, буғай), урыны-урыны менән асылған һәм мәйете алынған ҡәбер соҡорҙары окоптарҙай өңшәйеп ятыр ине. Тирәһендә ҡыҙарып миләш бешкән бер миҙгелдә нескәлекле “күңел күтәреп” йөрөүсе ҡәләмдәштәребеҙ Булат Рафиҡов, Ғәзим Шафиҡов, Миәссәр Басиров һәм Александр Филиппов шунда юлығалар ҙа, “фатирсы”һынан бушанған ҡәбер эсенә төшөп ултырып, баштары өҫтөнә эйелеп үҫкән миләш емештәре ҡабып эсәләр. Кеше ҡәберенән сығыу ҙа еңел түгел икән шул: Булат, аяғын һындырып, бер-нисә ай буйына ҡултыҡ таяҡтарына таянып йөрөнө...

Әммә хәмер бәләһенең шауҡымында ижади һулыш асылыу осраҡтары ла булды. Мәҫәлән, зыярат буйындағы һуҡмаҡтан эшкә барған саҡтарымда Ҡауи Мөфтәхитдинов тигән ашҡын-шашҡын хисле бер шағирыбыҙҙың берәй мәрйә ҡыҙын ауыҙына ҡаратып ялҡынлы шиғырҙарын тиреп тороу мәлдәрен күргеләй инем. Баш ҡаланың Орджоникидзе районында йәшәгән билдәле шағирыбыҙ Абдулхаҡ Игебаев, мәҫәлән,

“йәшел йылан” зәхмәтенән тап минең кеүек үк күҙҙәре тоноп ҡайта ла фатирына, дыуамалланып, көсө еткән мебелдәрен берәм-берәм өсөнсөмө, дүртенсеме ҡат тәҙрәһенән тышҡа быраҡтыра башлай. Ғәрәсәтле шау-шоуға күрше-күлән ҡуҙғалып, милиция пәйҙә булып, ағайыбыҙҙы “баш төҙәтергә” һалҡын йортҡа “ҡунаҡҡа” алып китәләр, район судьяһы Хәкимйән Зарипов (шулай уҡ әҙип), ҡыҙған башты ул саҡтағы ҡанун буйынса тиҙ генә хөкөм ҡылып, ун биш тәүлеккә ултыртып ҡуя. Шул арҡала камерала ижад ялҡыны ҡабынған шағир илһамланып ҡәләменә тотона, бәләле хәмер һуҡмағынан мәңгелеккә ваз кисергә ант итеп, бынамын тигән ялҡынлы поэма яҙып сыға зиндандан һәм уны үҙе эшләгән “Совет Башҡортостаны” гәзитендә ташҡа баҫтыртып илде шаулата (әҫәрҙе үҙем ҡыҙыҡһынып уҡыным -- ҡәләмдәшем Хөрмәт Биҡҡол ағай шәхси архивынан алып биргән гәзит киҫентеһенән, аҙаҡ уны авторына тапшырҙым). Ошонан һуң ағайыбыҙ ысынлап та яуыз “йәшел йылан”дың ғүмерлек тере дошманына әүерелде, Инш-Алла! Тик шуныһы үкенес: заманалар үтеү менән дә үҙ көсөн юғалтмаған баяғы фәһемле шиғри әҫәрҙе шағирҙың бер йыйынтығында ла күрмәйбеҙ.

Ғөмүмән, заманының ошо ағыулы сире арҡаһында ҡәләмдәштәр араһында “запой” (айҙар буйына туҡтамай эсеү) менән интегеүселәр ыраны: Динис Исламов, Ғабдулла Әхмәтшин, Мостай Кәрим, Шакир Насиров, Александр Филиппов, Абдулхаҡ Игебаев, Ғәзим Шафиҡов, Булат Рафиҡов, Ирек Кинйәбулатов, Ғәйфулла Вәлиев, Әнүр Вахитов (һуңыраҡҡы быуындарҙы әйтеп тормайым)... Мостай Кәрим менән уның фронтташ дуҫы Ғабдулла Әхмәтшин бер саҡ Ҡорған ҡалаһындағы атаҡлы докторға барып дауаланғас, тәүгеһе шөйлә һауыҡһа ла, икенсеһе шул көйгә ҡалды һаман. Б. Рафиҡов, А. Игебаев, А. Филиппов та, егеттәрсә үҙтеләкле дауаланып, зәхмәт быумаһын дауамлатмаҫлыҡ рухи ныҡлыҡ таптылар, әммә байтаҡтарыбыҙ бынан арына алмайынса, ваҡытынан элек китте “теге донъя”ға...

Минең бер кемем дә юҡ, үҙемде сит илдән килгән эмигрант хәлендә тоям -- таяныс һәм терәүҙәрҙе үҙеңдең түҙмерлегең, егетлегең генә булдыра, ә шулай ҙа теләһә ниндәй мөхиттә һәм сүрәттә лә кешелегеңде һаҡлап ҡалырға кәрәк.

Бүре араһында — бер үҙем, тип,
Бүреләнеп, кешем, олома.
Сөнки кеше — кеше килеш ҡала,
Таш яуһа ла йөрөр юлына.

Сүгеп әгәр яуыз ҡаршыһында,
Яһилланып кинәт олоһаң,
Үкен, бәндә, үкен тыуғаныңа —
Ҡотолмаҫһың бүре булыуҙан...

Кеше була кеше — бил бөкләмәй
Ғорур үтһә генә донъяла.
Бүрелеккә башын һалған бурҙар
Бүре өйөрөндә юғала.

3.11.1962.

Ә шулай ҙа «ябай ауыл малайы»на баш ҡалала аҡыл таҫлап баш ватырға ярамай — уның өсөн “өҫтәге өлкән ағай”ҙар барыһын да энәһенән ебенәсә уйлап һәм әҙерләп

ҡуйғандар. Әҙәбиәт — ярым урыҫса, ярым татарса, ярым башҡортса — ниндәйҙер ярым һаҡау телдә яҙыла, сөнки башҡорттоң үҙенең, һуңғы һүҙҙе әйтеү хоҡуғын ҡаҙанған "шағир-генерал" ағайыбыҙ ауыҙ тултырып әйтмешләй, «бер нимәһе лә булмаған». Әгәр башҡортһоң икән, шуға шөкөр итеп йәшә һәм үҙең дә шулай яҙ. Башҡортостан тарихы тип ауыҙыңды ла асма — уның тарихы (Бөйөк Октябрь революцияһына тиклемгеһе) шулай уҡ ғүмерҙә лә булмаған һәм булырлыҡ та түгел. Башҡортостандың баш ҡалаһында ҡала балалары өсөн ниңә башҡорт мәктәбе юҡ, тип тә тыбырсынма — яманатлы Мөхәммәтша Буранғолов һ.б. кеүек һөрһөп бөткән «башҡорт милләтсеһе» булырһың. Бына шул билдәле ҡыҫаларҙа ғына һәүетемсә юртаҡлап барһаң, тәртә тибеп һындырырға маташмаһаң — иң шәп башҡорт икәнһең дә, мырҙаҡай!

Ләкин «ябай ауыл малайы» үҙенең коммунислығын, ә Коммунистар партияһы программаһында, СССР Конституцияһында милләттәрҙең сәскә атып үҫеше, һәр кем үҙенең милли телендә теләгәнсә аралашыу, белем алыу хоҡуғының ҡануни гарантияланыуын һис кенә лә оноторға теләмәй. Бигерәк тә үҙенең уҡыу йәшенә етеп килгән берҙән-бер улын һәм ҡыҙҙарын ул баш ҡалабыҙҙа мотлаҡан үҙенең башҡорт телендә уҡытырға яҫкана...

1967 йылда баш ҡаланың бер килке зыялылары ҡалабыҙҙа башҡорт мәктәбе астыртыуҙы юллап йөрөй башланыҡ. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының филолог-ғалимы, сығышы буйынса минең ырымбурҙашым Иҙел Агишев башланы һәм артабан шундай уҡ гүзәл шәхес Мөхәмәтғәли Иҫкужин менән бергә ең һыҙғанып етәкләне был эште. Ғаризаны, йөҙ ҡырҡ ике кеше ҡул ҡуйып, КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетына, БАССР Министрҙар Советына бер юлы юлландырҙыҡ. Бөтәбеҙ исеменән вәкил булып кергән дүртебеҙҙе (И. Агишев, Ә. Вахитов, К. Әхмәтйәнов һәм эшсе синыф вәкиле Аҡбашев) КПСС өлкә комитеты сәркәтибе Т.И. Ахунйәнов иптәш эттән алып — эткә һалып һүгеп сығарҙы (Әнүр Вахитовты «һинең һымаҡ эскесегә тағы ни кәрәк?!» тип битәрләгән). «Йөҙ ҡырҡ ике ҡултамға — фикция. Һәр кем үҙенең башҡорт мәктәбенә уҡырға бирәсәк балаһының исем-фамилияһын, тыуған йылын күрһәтеп ҡул ҡуйһын!» — тип талап ҡылды Ахунйәнов артабан. Һөҙөмтәлә шөрләгән ағай-эненең күп өлөшө тарҡалып, талап ителгән документҡа утыҙ кеше ҡул ҡуйҙыҡ, балаларыбыҙҙы асыласаҡ башҡорт синыфына уҡырға бирәсәктәребеҙҙе гарантияланыҡ. Рәсми тупһаларҙы шымартып йөрөй торғас, Красин урамындағы 91-енсе урта мәктәптә (элекке етем балалар йорто) ҡала балалары өсөн башҡорт синыфы асырға рөхсәт бирелде. Буш бүлмә булмағанлыҡтан, беренсе ҡаттағы киң коридорҙың бер башын арҡыры бүлеп, синыф бүлмәһе яһанылар, парталар ултырттылар. Беренсе уҡытыусы итеп — Ураҡсина Венера Заһит ҡыҙы, тәрбиәсе итеп Ишемова Роза Ғаҡил ҡыҙы тәғәйенләнде (был эшкә тәүәккәлләнеү өсөн уларға ла йөрәкле булыу кәрәк ине). Әммә ата-әсәләрҙең беренсе йыйылышында уҡ ҡатмарлыҡ килеп сығып, башланған эш тарҡала биреп ҡуйҙы: КПСС-тың ҡала комитетынан һәм ҡала советынан килмеш ике вәкил (береһе — Зәйнәп Перчаткина), башҡорт телендә уҡытыуҙың милләтселек шауҡымы менән ата-әсәләрҙе ҡурҡытып, күпселек ата-әсәләр үҙ ғаризаларынан баш тартып ҡайтып киттеләр, ун бала ғына ҡалды синыфта (шуларҙың дүртәүһе яҙыусыларҙың — Йыһат Солтановтың улы Сабит, Әнүр Вахитовтың улы Азамат, Булат Рафиҡовтың ҡыҙы Гөлсәсәк, Зөфәр Ғәбсәләмовтың ҡыҙы Әлфиә ине). Баштарыбыҙға таш яуһа ла тарҡалышмаҫҡа һүҙ ҡуйышып, беренсе уҡыу йылын башлап ебәрҙек. Зөфәр Ғәбсәләмовтың ҡыҙы атлап йөрөй алмаҫлыҡ сиркәш булғанлыҡтан, Зөфәр уны көн дә мәктәпкә елкәһендә йөкмәп килтерер һәм алып ҡайтып китер ине.

Шуныһын да әйтмәй булмай: балаларын башҡорт синыфына уҡырға биреүҙәрен үтенеп-өгөтләп йөрөгәнебеҙҙә яҙыусыларыбыҙҙың байтағы төрлө сәбәптәр табып баш тартты. Мин үҙем, мәҫәлән, Шакир Янбаев менән Рәйес Низамовҡа морон төрткәйнем, тәүгеһе үҙҙәренең янындағы урыҫ-татар мәктәбен хәләл ефете «Хәдичә Ахметовна» һәм башҡа ата-әсәләр менән бергә яҡшы итеп йүнәтеүҙәрен, шуға күрә ул яҡшы мәктәптән китмәйәсәктәрен белдерҙе (Хәдичә Ахметовнаға афарин! — ике улын да сусылдап һөйләшкән татар телле итеп үҫтерҙе). Рәйес Низамов ҡорҙашым иһә «Ағиҙел» журналының редактор урынбаҫары ине — милләтселектә ғәйепләп алып ташлауҙарынан шөрләне. Ул ғына ла етмәһә, партия өлкә комитетына эш менән кергәнендә ул: «Һәнәк»тә эшләп йөрөгән Йыһат Солтанов “башҡорт мәктәбендә киләсәктең милли кадрҙары тәрбиәләнәсәк», — тип әйтте, тип ысҡындырған икән, Т.И. Ахунйәнов иптәш тиктомалдан минең фәҡир шәхесемә иғтибарын йүнәлтеп: «Нинди адәм ул — төсенә ҡарағанда ҡырғызмы, әллә нинди дә булса башҡа берәй жоратмы?» — тип, башҡортлоғомдо белә тороп та, түбәнһетеүле тауыш менән һорашҡан -- зыялылар араһында ошо хәбәр таралды... Шулай итеп, хатта минең ҡиәфәтемдән дә йөҙ сыйыра башланылар. «Ябай ауыл малайы»ның «милләтсе»гә әүерелә барыуының йылға башы булды был...

«Милләтсе» булараҡ махсус күҙәтеү ҡалпағы аҫтына алыныуым яйлап ҡына һиҙҙертә башланы үҙен. Әҙәм рәтле фатир алырға сиратым етһә лә, ҡала үҙәгендә төҙөлөп бөткән нәшриәт йортонан өлөш сығармай, ҙур ғына ғаиләм менән ҡаланың шайтан барып етмәҫ Черниковка осонда «Курочкина гора» биҫтәһендәге тар ғына һәм уңайлыҡһыҙ (кер йыуырға эҫе һыуҙы күнәкләп мунсанан һатып ала инек) ике бүлмәгә күсенеп китергә мәжбүр ҡылдылар. Ул яҡҡа троллейбус та, трамвай ҙа, ҙур автобустар ҙа йөрөмәй, йоҙроҡтай ғына машинаға әҙәм балалары, күҙҙәренә аҡ-ҡара күренмәй, бер-береһен тапашып илашып менә, илашып төшөп китә — шул шарттарҙа көн дә иртән баяғы башҡортса беренсе синыфта уҡып йөрөгән балаҡайымды үҙем эшкә барышлай алып китәм, алып ҡайтам... Шулай ҙа теште ҡыҫып түҙҙек, мәктәпте ташламаныҡ. Балалар башҡортса һөйләшеп, башҡортса уҡып, башҡорт булып үҫтеләр. Өс йыл араһында өс синыф булғас, Достоевский урамында төҙөлөп ятҡан урта мәктәпте 20-нсе һанлы башҡорт мәктәбе итеп юллап алдыҡ (өс синыф шунда күсенде), бының артынан да шул уҡ Иҙел Агишев менән Мөхәммәтғәли Исҡужин уҙамандар күп йөрөнө. Иҙел Агишев менән мин уҡыу корпусына өҫтәп уҡыусылар өсөн ятаҡ бинаһы төҙөтөүҙе һорап ингәнебеҙҙә Министрҙар Советы рәйесенең урынбаҫары Рамаҙан ағай Өмөтбаевтың бик ыңғай һөйләшеүе онотолмай (ләкин бинаны һалмаҡҡа ҡаҙып өлгөрткән котловандарҙы, күрше йорттарҙағы урыҫ-татарҙарҙың хөсөтөнә күрә юғарынан тыйып, күмдертеп ташланылар). Оҙаҡ көтөлгән мәктәбебеҙҙе, ниһәйәт, 1970 йылда рәсми асыу тантанаһына йыйылдыҡ, шунда балаплар һәм ата-әсәләр ҡаршыһында «Бәхет һарайы» тигән ошо шиғырымды тулҡынланып уҡыным:

Сентябрҙең тәүге аҡ таңын
Аса һеҙгә шат көҙ — йәш егет.
Хуш килдегеҙ алтын һарайға,
Илкәйемдең ялҡын йәшлеге!

Тәбрик итә нурлы кластар —
Тора урғып белем шишмәһе.

Нур-шишмәнән гәүһәр күкрәккә
Йотоп-йотолоп ҡына эсәһе!

Аҡ күңелдең аҡыҡ ярына
Яғылмаһын ҡара наҙанлыҡ! —
Аҡбур менән ҡара таҡтаға
Ап-аҡ антты һыҙып яҙайыҡ!

Ауыр саҡта, талғыр саҡта ла
Хыялдарҙа көлһөн яҙ айы! —
Шул саф антты ҡайнар йөрәккә
Ырыҫ менән ырып яҙайыҡ!

Бөрөнән дә бөркөт үҫтерер,
Ныҡ үтәлһә намыҫ ҡушҡан ант.
Һона Ватан һеҙгә ҡуш ҡулын —
Бейектәргә сорғор ҡуш ҡанат!

Барһын арбап тылсым теләндә
Мәғрифәтле таң һәм кисәләр.
Белем серҙәрен бит тәү башлап
Әсә теле менән сисәләр!

Әсәм телен — белем асҡысын
Мираҫ итеп алған көр быуын
Мираҫ итер ерҙең мең телен,
Туған итер ерҙең мең моңон!

Башҡортостан, гүзәл гөлбостан,
Ҡуя алға һеҙҙең мең һорау.
Илдең тырыш ҡыҙ һәм улдары
Булығыҙ, ти көмөш ҡыңғырау!

Төклө аяҡ менән уҙығыҙ
Мәғрифәттең мәрмәр баҫҡысын.
Алдығыҙҙа — бәхет һарайы,
Ҡулығыҙҙа бәхет асҡысы!

25.08.1970.

«Һәнәк», «Башҡортостан ҡыҙы» журналдарында эшләгән тынғыһыҙ йылдарым фельетон һәм мәҡәләләр яҙыу өсөн республика буйлап өҙлөкһөҙ командировкаларҙа йөрөп, редакцияларҙа кеше әйберҙәрен ипкә килтереп үтте, өйҙә ултырып яҙышырға ваҡыт ҡалманы; эштән арып ҡайтҡандан һуң, төндәрен генә үҙ ҡәләмемә тотона инем. Гел арҡаһын биреп көлгән көн тигәнең көтмәгәндә битен дә күрһәтте миңә: Башҡортостан китап нәшриәтенең балалар әҙәбиәте бүлегендә эшләп йөрөгән ҡорҙашым Шакир Бикҡолов, әйтеп үтеүемсә, 1957 йылда “Пионер” журналында сыҡҡан

“Урман бабай” тигән хикәйәмде айырым китап итеп нәшриәт планына индереп ебәргән (1967 йылда донъя күрҙе). Ә йән атып йөрөгәнем — китап булып сығыуын күҙҙәрем ҡарайып көткән шиғри йыйынтығым ине. Яҙыусылар берлегенең шиғриәт секцияһында ыңғай баһаланып, нәшриәткә тәҡдим ителһә лә, унда төрлө сәбәптәр менән йылдан-йыл кисектерелә килә ине. Интегеп-зарығып, ил ағаһы дәрәжәһендәге Мостай Кәрим менән гәрсә яҡынлығым булмаһа ла, булышлығын өмөт итеп, түбәндәгесә ялбарырға тәүәккәлләнем:

“Иҫәнмеһегеҙ, Мостай ағай!

Был хатты яҙып, ваҡытығыҙҙы алғаным өсөн ғәфү итеүегеҙҙе һорайым. Башҡа әмәл ҡалмағанға ғына баҙнат иттем. Солтанов Йыһат тигән кеше борсой Һеҙҙе.

Рөхсәт итһәгеҙ, тәүҙә саҡ ҡына үҙем менән таныштырып китер инем. 1932 йылда тыуғанмын, үткән юлым: колхоз — хәрби диңгеҙ флоты — колхоз — “Һәнәк” журналы редакцияһы. Ошо көндә лә шул редакцияла эшләгән булам. 1953 йылдан башлап, ваҡытлы матбуғатта байтаҡ ҡына шиғырҙарым, хикәйәләрем, повесем баҫылып сыҡты. Бынан өс йыл элгәре үк шиғырҙарымды туплап, секцияла тикшерткәйнем. Хуплап, нәшриәткә тәҡдим иткәйнеләр. Ләкин ул йыйынтыҡ ошо көнгәсә донъя күрә алмай ята нәшриәттә. Йыл да вәғәҙә итәләр ҙә оноталар. 1966 — 1967 йылдарҙы “юбилей йылы, план тығыҙ” тинеләр, 1968 йылғы планға индерергә вәғәҙә итеп килделәр. Быйыл тағы, 1968 йыл “юбилей арты йылы” булғанлыҡтан, минең китапты 1969 йылға күсерҙеләр. Унан килеп, ярты табаҡлыҡ бер хикәйәм кесе йәштәге мәктәп балалары өсөн быйыл сығырға тейеш булғанлыҡтан, шуны китапҡа иҫәпләп: “Йәш яҙыусының китабын йыл да сығарып булмай инде ул”, — тип кенә ебәрәләр (баш редактор менән директор әйтә). Бына шулай һаман “йәш” булып йөрөйөм, ағай. Ә минең ҡорҙаштар инде кәмендә 5-6 китаптың авторы.

1957 йылдың майында Башҡортостан Яҙыусылар союзы мине Һеҙҙең имза ҡуйылған телеграмма менән тиҙ генә саҡыртып алғайны. Мәскәүҙәге Әҙәбиәт институтына уҡырға ебәрмәк булғанһығыҙ икән. Ләкин минең белемем ул саҡта 4 (дүрт) класс ҡына булғанлыҡтан, бара алмай ҡалдым. Союздағы иптәштәр миңә урта белем алырға наказ биреп ҡайтарҙылар. Үкенескә ҡаршы, мин ул саҡ Һеҙҙең үҙегеҙҙе күрә алманым — Мәскәүҙә инегеҙ. Һеҙгә еткерергә вәғәҙә итеп, киләсәктә мин уҡыясаҡ урта мәктәптең адресын яҙып алып ҡалдылар союзда. Оҙаҡламай мәктәп директорына Һеҙҙең исемдән мине нисек тә уҡырға урынлаштырыуҙа ярҙам күрһәтеүҙе һорап яҙған хат килеп төштө. Шуға ҡанатланып, мин колхозда эшләп йөрөгән көйөмсә тәүҙә үҙ алдыма, унан һуң ситтән тороп уҡып, 1963 йыл әлеге мәктәптә урта белем алып сыҡтым һәм ситтән тороп Башҡорт дәүләт университетында уҡый башланым. Хәҙер 4-енсе курстамын. Бына шулай бер саҡ минең яҙмышымды хәл итеүҙә лә ҡатнашҡайнығыҙ Һеҙ, ағай. Бөгөнгө көн һаман китабымды сығара алмай, үҙ быуындаштарымдан ныҡ артҡа ҡала барғас, был юлы инде ярҙам һорап Һеҙгә үҙем мөрәжәғәт итергә батрысылыҡ ҡылдым. Йыйынтыҡты 1968 йыл планына керетеү өсөн берәй тел ярҙамы бирһәгеҙ ине, ағай. Китап “Йондоҙ ямғыры” тип атала, күләме 3,5 (өс ярым) табаҡ самаһы. Ошо арала ғына Рафэль Сафин менән Рәми Ғарипов уны тағы ла бер ҡат уҡып сығып, яҡшы баһа бирҙеләр. Байбурин да арыу фекерҙә.

Мин үҙем хәҙер “Ерем, кешеләрем” тигән яңы повесемде тамамлап киләм. Быйыл уҡ “Ағиҙел” журналына тәҡдим итергә уйлайым[6].

Һау булығыҙ, ағай.

Боросғаным өсөн тағы ла бер тапҡыр ғәфү үтенеп, **Йыһат Солтанов.**

Адрес: Өфө — 25, Свердлов урамы, 94, кв. 9.

19.02.1967.

Көндәрҙең береһендә: “Мостай Кәрим хатыңды тотоп китап нәшриәтенә кергән, китабыңды барлашҡан”, — тигән хәбәр ҡолағыма яғылғас, эштең ыңғай бороолош алырына өмөт итеп йөрөһәм дә, һис бер үҙгәреш булманы — һүҙе үтмәгәндер инде, күрәһең (ә бәлки, китабымдың алдағы 1969 йыл планынан да төшөрөп ҡалдырылмауы уның арҡаһындалыр). Хатыма яуап та килмәне. Ә Рәмиҙәрҙең һүҙе һүҙ түгел ине ул замандарҙа...

Әйткәндәй, 1966 йылда «Совет Башҡортостаны»ндағы эшенән ҡыуылып (редакторы Абдулла Исмәғилев менән килешә алмай), һыныҡ икмәкһеҙ, тигәндәй, интегеп йөрөгән Рәми Ғариповтың көтмәгәндә «Башҡортостан ҡыҙы» журналына эшкә урынлашыуына рухи булышлыҡ иттем. 1968 йылда яңы асылған шул баҫманың редакцияһына хеҙмәткәрҙәр йәлеп итеү эше бара ине. Баш редактор итеп раҫланған Кәтибә апай Кинйәбулатова минең эш урыныма — «Һәнәк» журналына килде лә, аулаҡҡа саҡырып алып, миңә «Башҡортостан ҡыҙы»ның яуаплы сәркәтибе булып барырға тәҡдим итте: «Тәртиплеһең, белемлеһең — бергәләшеп яйға һалырбыҙ журналды», — тине. Ымһындырғыс тәҡдимдән мин баш тарттым: «Һәнәк» мине эшкә саҡырып алды, торлаҡ бирҙе. Бер биш йыл да эшләмәй ташлап китеү — килешмәҫ», — тинем. Шунда уҡ контртәҡдим яһап өлгөрҙөм: «Ул эшкә Рәми Ғариповты алығыҙ, апай!» — «Ай-һай, уныһы барып сыҡмаҫ шул, — тип баш сайҡаны апайым. — Ахунйәнов ныҡ ҡаныҡҡан бит уға». Был һөйләшеү тураһында бер кемгә лә белдертмәҫкә вәғәҙәмде алып (ул вәғәҙәне бына хәҙер генә боҙам), хушлашты апайыбыҙ. Ә эштән һуң Рәми менән ғәҙәттәгесә шешә янында икәүҙән-икәү ҡалғас: «Былай интегеп йөрөүеңә сик ҡуйырға кәрәк — һинең өсөн ҡулай эш урыны бар», — тинем. — «Ниндәй эш ул?» — тине дуҫым, ҡаштарын емереп. «Сер итеп кенә әйтәм, берәүгә лә һөйләмә. Кәтибә апай журналына яуаплы сәркәтип эҙләй». Ҡул һелтәп көлдө Рәми: «Һин, ҡарт, алйып бараһыңмы әллә? Ахун таяғы (Ахунйәновты шулай тип атар ине) яҡын да юлатмаясаҡ мине». «Ә һин күҙ йом да өлкә комитетҡа Ахунйәновтың үҙенә кер, кандидатураңды ҡыйыу тәҡдим ит. Бынан бит һин бер нәмә лә юғалтмайһың, ә приобрести можешь: «Пролетариату нечего терять кроме своих цепей, приобретет же он весь мир!» — тигән дәһә Маркс менән Энгельс бабайҙарыбыҙ. Ятып ҡалғансы, атып ҡал, тимерҙе ҡыҙыуында һуҡ!»

Һуңғы дәлил Рәмигә ныҡ тәьҫир итте: «Ысынлап та, шулай итәйем әле, иртәгә үк ҡаршыһына баҫайым!» — тип йәһәтләп ҡайтып китте. Һәм иртәгәһенә үк шатланып килеп ҡулымды ҡыҫты — кергән һәм Ахунйәнов иптәш бер һүҙһеҙ риза булған.

Шул уҡ йылда Рәми, журналды бергәләшеп юлға һалышырға, тип, ныҡышып, мине үҙе эргәһенә эшкә ҡоҙаланы (баш редакторым менән дә уртаҡ тел тапҡан, буғай), дуҫым менән бергә ултырып эшләргә шатланып ризалаштым. Идиәт ағай Әсәдуллин да, йәш журналды нығытырға кәрәк тип, үҙенең ризалығын бирҙе. Ләкин әйтергә кәрәк: Рәми менән бергә эшләүебеҙҙең бәйгеһе оҙон булманы — ылғый ҡатын-ҡыҙ

---

[6] “Ерем, кешеләрем” романы шунан һуң 29 йыл үткәс кенә — 1996 йылда донъя күрҙе.

коллективының кухня ваҡлыҡтары һымаҡ ығы-зығыһынан биҙәрләп, 1969 йылда «Ағиҙел» журналы редакцияһына әҙәби тәнҡит һәм публицистика бүлеге мөдире булып эшкә күстем; ә фәҡәт үҙ режимы (төндә ултырыу, көндөҙ төш еткәнсе йоҡлау һәм тәүлектең теләгән бер сәғәтендә хәмергә ылығыу) менән генә йәшәргә теләгән Рәми, баш редактор Кәтибә апай Кинйәбулатова һәм редакцияның әүҙем хеҙмәткәре Әнисә һылыу Таһирова менән килешә алмай (Рәми өҫтөнән йыш бирелгән ялыунамәләр Т.И. Ахунйәнов кабинетында ғауғалы тикшерелә ине), 1972 йылда эшенән тайҙыртылды...

1968 йыл йәйгеһен «Башҡортостан ҡыҙы» редакцияһының эше буйынса Бөрйән районына барғанымда үҙ ғүмеремдә беренсе тапҡыр Шүлгәнташ мәмерйәһенә кереп сыҡтым, шунда ҡабынған тәрән хис һәм кисерештәрҙән айный алмайынса иҫереп йөрөп, аяғөҫтө, тигәндәй, бер ай эсендә өр-яңы әҫәремде — «Минең шәжәрәм» тигән поэмамды яҙып өлгөрттөм. Рәмиҙән был әҫәрем хаҡында берәй нәмә ишеттемме, юҡмы икән — әйтә алмайым хәҙер. Әммә уның 1969 йыл көндәлектәренә «Шәжәрәм»дең шауҡымы һирпелеп ҡалған (үҙе үлеп күп йылдар үткәс кенә матбуғатта мәғлүм булды):

Һәр кемдең үҙ «Шәжәрә»һе булһын!

...Бынан бер нисә йыл элек мин Йыһат Солтановтың «Төнгө хәбәр» тигән ***ҡулъяҙма шиғырҙар йыйынтығы***[7] *менән танышҡас, беҙҙең әҙәби ҡор һаман ишәйә бара, тип ҡыуанып, көндәлеккә ошо һүҙҙәрҙе яҙып ҡуйғайным. Уның тәүге китабы сығыу менән был фекер көсәйә генә төштө. Мостай Кәрим әйтмешләй, әҙәбиәтебеҙгә Яңы шиғыр китабы ғына түгел, ә Яңы шағир килде, тиергә мөмкин.*

Йыһаттың тормош юлы ла бик күптәр өсөн, айырыуса Нур Хәбиров менән Шакир Ғәлин өсөн, ғөмүмән, бөтәбеҙ өсөн дә бик фәһем алырлыҡ. Йыһат мәктәптә уҡып ни бары дүрт класс бөткән. Һуңынан аяҡтан яҙып, байтаҡ йылдар урынынан да ҡуҙғала алмай ятҡан. Тик үҙенең иҫ киткес ныҡышмалылығы, ихтыяр көсө менән әҙәбиәт өсөн аяҡҡа баҫып, — ҡайҙа тиһегеҙ?! — Балтиҡ хәрби флотына киткән. Үҙ алдына уҡып, урта мәктәпте тамамлаған һәм бына хәҙерге көндә өс бала атаһы булып, эшләгән көйө Башҡорт дәүләт университетын тамамлап, «Ағиҙел» журналында бүлек мөдире булып ултыра. Хикәйәләр ҙә, повестар ҙа яҙа. Ә иң мөһиме — ғәжәп оригиналь шағир ҙа. Шулай уҡ уның тел байлығы, фантазияһы, тәрән белемле булыуы, эш һөйөүсәнлеге, ихтыяр көсө мине хайран ҡалдыра. Йыһат универсаль талант эйәһе, тиер инем мин. Бәлки, был үҙенсә бер ҡаһарманлыҡтыр ҙа әле. Был һүҙҙәрҙән уның һис тә башы әйләнеп китерлек йомшаҡлығы юҡ. Сөнки ул бик күп һынауҙар үткән, үҙенең тамырҙары менән үҙ халҡының оло тарихына ерегеп үҫкән баҙыҡ нәҫел ағасы тамырҙары хаҡында йыр яҙған, үҙенең шиғри шәжәрәһен тапҡан кеше.

Тимәк, әҙәбиәткә килеү юлдары ла әҙәбиәттең үҙе кеүек үк төрлөсә һәм ҡыҙыҡ. Ысын талант үҙ быуынынан 15 йылға һуңлап[8] *килеп тә үҙ ҡорҙаштары араһында үҙ урынын табырға мөмкин икән...* (Рәми Ғарипов. Әҫәрҙәр, II том. Өфө «Китап» — 1998; 582 — 583-өнсө биттәр).

«Минең шәжәрәм» Башҡортостан совет автономиялы республиканың яҡынлашып килгән 50 йыллыҡ юбилейы айҡанлы рухланып яҙылғайны; яңы ғына Мәскәүҙән

---

[7] Тимәк, элегерәк миңә танымаһа ла, был йыйынтыҡтың үҙ ҡулында булғанлығын таный.

[8] Рәми ҡорҙашым яңылыша: “сит илдәрҙә” йәшәгән Йыһат Солтановтың, һис тә әҙәбиәткә түгел, ә әҙәбиәтебеҙ усағы булған Өфөгә, Башҡортостанға һуңлап килеүе тураһында ғына һүҙ барыуы мөмкин. Сөнки Рәми Ғариповтың шиғыры беренсе тапҡыр 1950 йылда “Әҙәби Башҡортостан” журналында ташҡа баҫылһа, минеке лә шул уҡ журналда 1953 йылда сыға.

яҙыусыларҙың ике йыллыҡ курсында уҡып ҡабилиәтләнеп ҡайтҡан ялҡынлы шағир Абдулхаҡ ағай Игебаев та шул уҡ дата айҡанлы «Урал тауышы» тигән ҙур күләмле поэмаһын килтереп һалғайны «Ағиҙел» редакцияһына, ләкин журналда минең әҫәрҙе бирергә булдылар (ул «Ағиҙел»дең 1969 йыл 11-енсе һанында донъя күрҙе), ә Абдулхаҡ ағайҙыҡы «Совет Башҡортостаны» гәзитендә баҫылып сыҡты. Был әҫәрҙе ижадымдың сорғолошо итеп күргән ҡәләмдәштәрем миңә ихлас күңелдән уңыш юраны.

Ултырыш осланыуға, ирәбе ағайҙарым Вәзих Исхаҡов менән Фәрит Иҫәнғолов эргәмә килеп ҡулымды ҡыҫып, пинжәгемдең түшенә Ғәлимов Сәләм исемендәге комсомол бүләгенең билдәһен тағыр өсөн йәһәтләп тишек тишә башларға кәңәш иттеләр, ә Яҙыусылар берлеге рәйесе Лоҡман-Хәким ағай Ғиләжев иһә поэмам тексының бер данаһын кисекмәҫтән радиокомитеттың әҙәби тапшырыуҙар бүлеге мөдире Яҡуп Ҡолмойға илтеп бирергә ҡушты — Бөйөк Октябрь юбилейы көндәрендә шиғриәтем эфирҙан тос яңғырарға тейеш ине. Пинжәгемдең түшенә тишек тишергә йыйынмаһам да, һуңғыһын тиҙләтеп үтәнем, ә Хәким ағай үҙ сиратында Яҙыусылар берлеге иҫәбенән поэмамдың урыҫсаға юлма-юл тәржемәһен дә эшләттерҙе (Шамил Анаҡтан) — исемем урыҫ әҙәбиәтендә лә мәғлүм булмаҡсы имеш... Ләкин секция һәм Хәким ағай билдәләгән изге маҡсаттар береһе лә бойомға ашманы — ҡотоптан ҡапыл боҙло һыуыҡ бәргәндәй, яртылыҡ юлында туңып ҡалды; ошонан һуң йыш ҡына редакцияла, редактор Әсғәт Мирзаһитовтың эш өҫтәле йәнәшәһендә, уның менән ни тураһындалыр шыбырлашып ултырыусы түңәрәк ҡара һаҡаллы (башҡорт) КГБ кешеһе үҙенең сәйер визиттарын йышлатты; Мирзаһитовтың миңә ҡарата мөнәсәбәте һиҙелерлек һыуынды һәм шиклеләнде — органдарҙың ҡалпағы аҫтында йәшәүемдең асыҡ дәлиле ине был... Әммә яҙмышымдың ҡағып-һуғыуҙарына күнегә-күнегә эт ҡайышына әүерелгәнлектән, ҡәләм тибрәтеүсе байтаҡтарыбыҙға хас булған әсе хәмерле “ижади кризис”ҡа бирелмәнем -- “Ағиҙел”дә “Портреттар” тигән шиғри шәлкемем баҫылып сыҡты һәм был юлы ла, ҡәләмдәштәремдең үле тынлыҡ һаҡлауын боҙоп, боҙланып барған күңелемдә Ғәйнән Әмири ағайымдың аҡ ҡағыҙ битенә яҙылған йылы һулышы ирөтте:

Зиһат!

Ике “Портрет”ты уҡып сыҡтым. “Эт йәнле” хаҡында бер ни ҙә әйтмәйем. Шулай ҙа, минеңсә, был бик тә шәп повесть материалы. Ихтыяр көсө, рух баһадиры хаҡында повесть.

Ә “Өҫтөнбикә” -- тетрәткес. Был әйбер -- Көнбайыш илдәрендә XIX быуаттан киң таралған классик балладалар кимәленә яҡынлашҡан. Үҙе -- бик тә колоритлы. Башҡорт материалында һәм рухында. Тағы -- мин һәр ваҡыт һоҡланып йәшәгән башҡорт ҡатынына дан йыры ла был.

Молодец, Зиһат!

Мөғайын, һин беҙҙең әҙәбиәттә баш етерлек эштәр башҡарырһың әле. Һаулыҡ бирһен үҙеңә.

15.VI.69. ***Әмири.***

1969 йылда «Йондоҙ ямғыры» (элекке исеме «Төнгө хәбәр») тигән шиғри йыйынтығым, оҙон-оҙаҡ көттөрөп, Ғәйнан ағай Әмириҙең йәмәғәтселек башланғысындағы редакторлауында, ниһәйәт, баҫылып сыҡты. Китапҡа ҡарата «Ағиҙел» журналында Рауил Бикбаевтың «Аҫыллығын тойоп донъяның...» тигән ыңғай ҡарашлы

мәҡәләһе күренде. Һәм, бигерәк тә, Ғәйнан ағайымдың сикһеҙ-ихлас ҡыуаныслы фекернамәһе күңелемде шифалап тора һаман:

Йыһат туғаным!

Бына «Йондоҙ ямғыры»ның корректураһын ҡарап сыҡтым. Сыҡтым да шатлыҡтарға сумдым: «Ниндәй ғәжәп китаптың редакторы булыу бәхете төшкән минең өлөшкә!» — тинем. Ысынлап та, ғәжәп китап был! Кескәй генә ул. Әммә — имән сәтләүегә кеүек кескәй. (Шундай сәтләүектән дәһә, таш-ҡаяға баҫып, ел-дауылдарға баш эймәй, горур шаулап торған мәңгелек имән үҫеп сыға).

Ғәжәп китап был. Кескәй генә ул. Уға тупланған шиғырҙар ҙа саҡ ҡына. Тик улар йә ынйы бөртөгө кеүектәр (ынйы бөртөгө бик ваҡ — ә ниндәй ҡиммәтле!), йә бойҙай орлоғолай (яҙын ул «Ҡулына йәшел ҡылыс тотоп сыға»саҡ!), йә тылсымлы бөрөләй. Эйе, был китапта бөрөләр ҙә күп. Ләкин тамсы ла шикләнмәҫкә мөмкин: улар мотлаҡ япраҡ ярырҙар, сәскә атырҙар — ил күрке булып гөрләрҙәр.

Ғәжәп китап ***<u>бу.</u>*** *Халыҡсан. Просто халыҡсан ғына түгел, —* ***<u>башҡортсан!</u>*** *Унда, уның һәр юлында (тиерлек) башҡорт йөрәге тибә, башҡорт һулышы бар; уның уйы, хисе — бөтәһе лә һинең, Йыһат туғаным, башҡорттоң бик оло йырсыһы булып күтәреләсәгеңә, осасағыңа ишара, шикләнмәйем! Һәм был һүҙҙәрҙән һинең башың әйләнеп китмәйәсәген дә беләм. (Бөркөт балаһын космосҡа алып менһәң дә, уның башы, моғайын, әйләнмәҫ ине).*

Тағы нимә тим?

Миңә хәҙер 59-ынсы йәш. Йылтырауыҡ тәтәй күреп сәбәкәй саба торған сағым үткән. Ынйыны ябай быяланан айыра беләмдер тип уйлайым.

Хоҙайым, һиңә сәләмәтлек, оҙон ғүмер бирһен. Бер ҡасан да ваҡлана күрмә, гел генә шулай эре булып йәшә.

Ҙур ышаныс менән —

Ғәйнан Әмири.
10.10.1969.

Ләкин шәхесем һәм ижадым тирәһендә үле бушлыҡ (вакуум) хасил ҡылыу, ниндәй генә уңыштарға өлгәшһәм дә, күрмәй-белмәй, өндәшмәй ҡалдырып онотторотоу, ниндәй генә әҫәремде булһа ла, матбуғатҡа сығартмайынса тотҡарлап тонсоҡтороу — яҙыусыны үлтермәйенсә лә юҡ итеү механизмы сәйәси яҡтан миңә ҡарата яҡшы көйләнгәйне инде һәм обкатка (шымартыу) үтә лә башлағайны. Яҙылып ятҡан поэмаларым, романдарым, тарихи әҫәрҙәрем киләсәктә уҡыусыларына барып етә алмайынса 20-30 йылдар буйынса яҙыу өҫтәлемдең тартмаларында быуылып ятасаҡтар ине. *Ләкин* быларҙы ул саҡтарҙа башыма *ла* килтерә алмайынса, ауға эләгеп ярға сығарылған балыҡтай, үрле-ҡырлы һикеренә, сәбәләнә башланым.

Ә шулай ҙа тормош, шарлап аҡҡан йылғалай, һаман да алға дөрә, ижад шишмәм дә, тынғы белмәй, урғылып тора ине.

Һәм бына тағы:

Протокол №2.

1971 йылдың 5 февралендә проза секцияһының ултырышы булды. Унда Ф. Исәнғолов, Ә. Мирзаһитов, Ә. Вахитов, Р. Низамов, Ш. Янбаев, А. Клюшкин, Х. Зариповтар ҡатнашты.

Председатель: Ш. Янбаев.

Секретарь: Х. Зарипов.

Көн тәртибе:

1. Йыһат Солтановтың «Коммунист» тигән повесен тикшереү.

Әҫәр буйынса һөйләнеләр:

1. Ф. Иҫәнголов. Повесте кинәнеп уҡып сыҡтым, бер тында һәм мауығып уҡыным. Был әҫәр минең күҙ алдымда Йыһатты бик күтәрҙе. Шул совет власы урынлашҡан йылдарҙағы трагик ваҡиғаларҙы һүрәтләүгә бағышлана әҫәр. Был — Башҡортостан тарихындағы иң киҫкен, ауыр моментын художестволы асыуға ынтылған һәм быға шаҡтай дәрәжәлә өлгәшкән дә әҫәр.

Сәғитов — комиссар образы шаҡтай тулҡынландырғыс итеп асылған. Ундай коммунист — комиссарҙар тормошта булды, шул уҡ Ш. Хоҙайбирҙин дә Сәғитовтың прототибы була алыр ине. Төп герой Сәғитовтың эше дөрөҫ башҡарылған. Ошо уҡ ваҡытта уға еңелерәк бирелгән нәмәләр ҙә бар. Әйтәйек, Әһлиуллин штабына килеп төшкәс, ул өс тотҡондо тикшермәйенсә ҡотҡара. Ниндәй генә бирелгән коммунист булһа ла, ул уларҙы тикшермәйенсә сығарып ебәрмәҫ ине.

Төп геройҙың үлеме менән дә килешмәйем. Сәғитов йәшәргә тейеш, уның йәшәргә хаҡы бар. Уның үлеме әҫәрҙең йөкмәткеһен йомшарта. Был хаҡта авторға уйларға кәрәктер, тип уйлайым.

Ә унан повестәге ваҡиғаларҙы дөйөм республика, ил ваҡиғаларына бәйләп бирергә кәрәктер.

2. Ш. Янбаев. Йыһаттың шул ваҡыттағы ваҡиғаларҙы ҡуйы буяуҙар менән яҙыуы мине һөйөндөрҙө. Шул замандағы ҡойолған ҡан менән яҙылған кеүек әҫәр һәм ул ышандыра. Ошо уҡ ваҡытта тәнҡит замечаниеларым да бар. Беренсе, Сәғитов образына бәйле шуларҙы әйткем килә. Төп геройҙың ҡайбер поступкалары уйланып етмәгән кеүек, минеңсә; Әһлиуллин менән мөнәсәбәтен логикаға ҡорорға кәрәктер. Восстаниеның сәбәптәрен дә Сәғитов образы аша асырға кәрәкмәйме икән? Сюжет һыҙығын ҡайтанан уйлап ҡарарға кәңәш итер инем мин. Ә унан буяуҙарҙы бик ҡуйыртып ебәрә автор. Был образдарҙы аңлауҙы ҡыйынлаштыра. Сәғитовтың үлеме менән дә килешә алмайым.

3. Ә. Вахитов. Әҫәрҙе мин бик мауығып уҡыным. Юғарыла әйткән иптәштәрҙең фекере менән килешәм. Комиссар Сәғитовтың образы асыҡ булып күҙ алдына килеп баҫа, ләкин уның аҙаҡ йомшарыуы менән килешмәйем. Урыны менән автор фальшҡа ла бирелеп китә. Комиссарҙы идеал итеп кенә күрһәтергә ынтылыу кәрәкме икән? Артыҡ субъективизмға бирелеү ҙә бар кеүек. Ә унан серлелек хаҡында ла уйлап ҡарарға кәрәктер. Ғөмүмән, повесте яратып уҡыным.

4. Р. Низамов. Мин Әһлиуллин һәм Барановский образдары хаҡында әйтергә теләйем. Уларҙы герой булараҡ әҫәрҙә тағы ла нигеҙләп эшләргә кәрәктер, тип уйлайым. Кешеләрҙең башын киҫеп алып килеү кеүек деталдәр бик аяныс, ләкин улар кәрәкме икән?

5. Ә. Мирзаһитов. Иптәштәрҙең һөйләүе менән мин ризамын, улар бик уйлап һөйләнеләр. Повестәге конкретлылыҡ шул дәүерҙәге ысынбарлыҡҡа тура киләме? Әйтәйек, повестең ерлеге Көньяҡ Урал райондарында нигеҙләнә. Шул яҡта бронепоездың үтеүе мөмкинме? Быны асыҡлай төшөргә кәрәктер.

Әһлиуллин образына килгәндә, ул бик тиҫкәре планда бирелгән. Ул ваҡытта шул тиклем яуыз ниәтле командир булғанмы? Әгәр ҙә шулай икән, комиссар Сәғитов фетнәселәр янына китергә тейеш түгел ине, ә Әһлиуллин, Барановскийҙар менән көрәшер өсөн отрядта ҡалыуы үҙен аҡлар ине.

Автор хис кешеһе, ләкин шуға ҡарамаҫтан ул урыны менән натуралистик тасуирлауҙарға бирелеп китергә тейеш түгел.

Мин Йыһаттың ижадын яратам, был әҫәре уның үҫеүен күрһәтә, ул замечаниеларҙы иҫкә алып повесен йәнә бер ҡат ҡарап, төҙәтеп эшләп сығырға тейеш.

6. Х. Зарипов. Әҫәр — үҙенсәлекле. Бер темп менән бара ла бара. Даже бүлекләп тә тормаған. Ҙур әҫәр яҙырға мөмкинлеге бар. Мәҫәлән, төп геройға психологик дәлилләүҙәр етмәй. Әһлиуллинды уйларға кәрәк. Үҙенең уйҙары бирелмәй. Лев Толстой, герой үҙ-үҙе менән көрәшһә көслө була, ти бит.

7. Й. Солтанов. Замечаниеларҙы ҡабул итеп ҡабат эшләргә һүҙ бирҙе.

***Ҡарар:** Әҫәрҙе эшкәрткәндән һуң, китап нәшриәтендә баҫып сығарырға тәҡдим итергә.*

Председатель: ***Ш. Янбаев.***
Секретарь: ***Х. Зарипов.***

Ләкин башҡорт совет әҙәбиәтенең рәсми органдары һәм рәсми шәхестәре республиканың юғарыраҡ органдары тарафынан Йыһат Солтановҡа ҡаршы көйләнгәйне шул инде; әҫәрең ниндәй генә яҡшы булғанда ла, мотлаҡ кире генә ҡағыласаҡ ине. Һәм тап шулай булды ла. Секция ултырышында башҡалар менән бергә «Коммунист»ҡа ҡарата ыңғай фекер әйткән рәсми кеше Әсғәт Мирзаһитов, бара-тора, 180 градусҡа боролдо ла: «Повестә тасуирланған 1920 йылғы баш күтәреү — бөтә Башҡортостанға һәм башҡорт халҡына хас күренеш түгел, ә әҙәби әҫәр объекты булырға лайыҡһыҙ үтә локаль эпизод ҡына ул», — тигән үлтергес һығымта бирҙе; шуның менән мин совет хакимиәте өсөн һис бер әһәмиәтһеҙ һәм зарарлы эш эшләп маташыусы насар уйлы (йәғни милләтсе) бер авторға әйләндем; бындай нәмәне матбуғатта сығарырға һүҙ ҙә булырға тейеш түгел, тигәнгә ҡайтып ҡалды. Ни өсөн, ҡайҙан тыуҙы хөрт сәбәп?! Аңлай алмай йөҙәнем. Әммә был үтә иртә өлгөрөп еткән «бөйөк коммунизм гражданы»ның (Ә.М. Мирзаһитовтың) ысын йөҙөн, баҡтиһәң, ысын шағирыбыҙ мин фәҡирегеҙгә тиклем үк — 1963 йылдың 3 ғинуарында уҡ күреп-белеп киҫәткән икән дә:

«Агиҙел» редколлегияһында «Аманат»ты[9] тикшерҙеләр, — тип яҙа Рәми Ғарипов. — Рафаэль уҡып бөткәс, береһе лә һүҙ башлай алмай, ауыр тынлыҡ урынлашты. Бөтәһенең дә йөҙө етди, бөтәһе лә үҙ эсенән генә һөйләшә ине. Хәким ағай, ахырҙа, Әхнәф Харисовҡа һүҙ бирҙе. Харис ағай гәҙәтенсә «ҡапаҡ» тимәне.

— Шиғыр ҡобайырҙың бөтә мөмкинлектәрен файҙаланып, до предела эшләнгән. Һәр бер юлы ҡойоп ҡуйылған. Уйландыра ла икенсе уйҙар тыуҙыра. «Теле юҡтың иле юҡ, /Иле юҡтың ирке юҡ», — тигән категорически формулировка менән килешеп булмай, — ти.

Ғөмүмән, бик йомшаҡ түшәп, ҡатыға ултыртты. Был түшәгеҙ Әсғәт Мирзаһитов күтәреп алды. Шиғыр эшләнеше яғынан, уныңса, классически эшләнгән. Ләкин идея йәһәтенән партия программаһына тура килмәй. Йәнәһе, хәҙер, ассимиляцияға юл тотҡанда, бөтә телдәрҙең берләшеүенә барғанда, был шиғыр төрлө толкованиеларға юл ҡуясаҡ». (Рәми Ғарипов. Әҫәрҙәр, II том. Өфө «Китап» 1998; 430-ынсы бит).

Ҡот осорғос! Әҙәби мөхитебеҙҙең тын алғыһыҙ тынсыулығын, ә оҙаҡламай шул тынсыулыҡты уғата нығыраҡ ҡуйыртырға «Ағиҙел» журналының баш редакторы, шунан һуң Башҡортостан Яҙыусылар берлеге рәйесе итеп ҡуйыласаҡ һәм әҙәбиәтебеҙҙә ҡәтғи рәүештә шул «партия программаһы»ның «милләттәрҙе ассимиляциялау» сәйәсәтен бойомға ашырыу өсөн йонсоткос оҙаҡ йылдар — ғүмере буйына ең һыҙғанып-балаҡ

---

[9] Уның «Аманат» тигән билдәле шиғыры тураһында һүҙ бара.

төрөп көрәшәсәк эшем эйәһенең булмышы асыла бында. Бына шундай яһилйәндәр беҙҙең ижади яҙмышыбыҙ менән юғарынан бойоролғанса һәм үҙҙәре теләгәнсә уйнаны.

Секцияла ыңғай баһаланыуҙың әҫе мәлендә үк «Коммунист»ың илле битлек бер өҙөгөн, шул йылдарҙың матур йолаһы буйынса уҡыусыларҙы алданыраҡ таныштыра торорға, «Совет Башҡортостаны» гәзитенә илткәйнем; Мирзаһитов һымаҡ иптәштәр һис тә көтмәгәндә ул редакция биргән «Комиссар» тигән исем менән һандан-һанға баҫылып килеп сыҡты, ижадым тураһындағы ҡыҫҡа ғына «кәрзин» менән фотом да бар ине.

Был фактҡа һуңлабыраҡ һарыуҙары ҡайнаған Мирзаһитов һәм ярандары оторо фекерҙәрен партия өлкә комитетына еткергәндәр һәм уның өгөт-нәсихәт бүлеге мөдире Урал Насир улы Бакиров (дөйөм алғанда итәғәтле һәм яғымлы йән) был факт өсөн гәзиттең баш мөхәррире Абдулла Ғиниәт улы Исмәғилевте саҡыртып алып «бешергән», тинеләр; шунан һуң ул Исмәғилев («держиморда» тип йөрөтәләр ине үҙен) алдағы ун йылға минең морон алдында редакция ишеген япты.

Баяғы «локаль эпизод» тигән һылтау менән Мирзаһитов иптәш «Коммунист»ы «Ағиҙел»гә яҡын юлатмағанлыҡтан, ҡулъяҙмамды Башҡортостан китап нәшриәтендә лә алманылар, сөнки күптән нығынған ҡағиҙә буйынса, башлап «Ағиҙел» журналында донъя күрмәгән әҫәрҙәр китап булып сығырға ла лайыҡлы түгел ине. Шул рәүешле «Коммунис»ым ҡулъяҙмала килеш тонсоғоп ҡалды.

Әйтеп үтеүемсә, 1969 йылдың көҙөндә мине “Ағиҙел” журналы редакцияһының публицистика һәм очерктар бүлегенә мөдир итеп эшкә алдылар. Эш күләме ҙур – гелән сейле-бешеле әйберҙәр килә лә миңә шуларҙың барыһын да “кондиция”ға еткереп бирергә кәрәк ине. Авторҙарҙы эшенә һәм талантына ҡарап ҡына баһалауым да ҡытыршылыҡтар тыуҙырҙы.

Тураһын әйткән — туғанына ярамаған, тигәндәй, әлеге лә баяғы шул тиктормаҫ телем менән бәлә-ҡазаларымды ырата ғына инем. Мәҫәлән, 1971 йылда бөтәбеҙ бергә баш баҫып эшләп ултырған «Ағиҙел» редакцияһы бүлмәһендә күңелле ығы-зығы ҡупты: әҙәбиәтебеҙҙең уҙаманы Мостай Кәрим, яңы ғына ҡәләмдән сыҡҡан «Салауат» тигән трагедияһын журналға килтереп биреп, бөтәбеҙҙе сикһеҙ бәхетле иткән, имеш. Әле уҡымаҫтары борон уҡ, һәр хеҙмәткәр «тере классик» ағабыҙға әҫәре хаҡында яғымлы һүҙҙәр яуҙырырға, ҡайнар алҡыш ҡуптарырға атлығып тора, шуның форсаты сығыуын ғына көтә... Баш редакторыбыҙ Мирзаһитов, әллә ошо дөйөм күңел күтәренкелеген иҫәпкә алып, әллә әҫәрҙең авторына әйтеләсәк тәбрик һүҙен дөйөм ҡаҙандан бер юлы тослата һоҫоп биреү теләге менән, трагедия ҡулъяҙмаһын уның авторы икенсе әйләнеп килгәнгә тиклем үк бөтәбеҙгә лә бик тиҙ уҡып сығырға ла үҙ фекерен әйтә торорға ҡушты. Әммә беренсе булып уҡыуҙан барыһы ла тайшаныбыраҡ ҡалғас, ҡулъяҙманы мин алып ҡайтып киттем дә төн сыҡҡансы уҡып та килтерҙем һәм, ахмаҡйән, иртән эш башлар алдынан уҡ бөтә коллективҡа (баш редактор ҙа бар) тура ярып әйттем: «Уҡып сыҡтым. Ләкин, үкенескә ҡаршы, бөйөк батырыбыҙ Салауат Юлаевҡа лайыҡлы әҫәр тыумаған. Ундай әҫәр киләсәктең иң талантлы авторы тарафынан ғына яҙылыр, тип өмөт итергә генә ҡала»...

Бөтәһе (шул иҫәптән Мирзаһитов та) һыу уртлағандай шымдылар ҙа, минең тарафҡа баш ҡалҡытып та ҡарамай, баш баҫып эшләргә керештеләр, сөнки «бөйөк классиг»ыбыҙҙың ижадына кире ҡараш булырға тейеш түгел... «Шылт!» иткәнде лә Мостай ағаһына йүгереп барып еткереүселәр һәр даим булғанлыҡтан, көфөрлөгөм көнөндә үк ирештерелде адресатына. Күккә күтәреп маҡтауҙарға ғына күнеккән әҙип, билдәле, ниндәйҙер Ырымбур малайының ҡағиҙәне боҙоуын күтәрә алманы. Әммә

трагедияның үҙәге баҙыҡ түгеллеген үҙенең рәссам йөрәге менән ул үҙе лә тойғандыр һәм шул хаҡта борсолоуын ошо ҡырҡа әйтеп биреүем арттыра ғына төшкәндер, сөнки барса һарай халҡы королдең кейемен маҡтағанда ла бер сабыйҙың: «Король яланғас бит!» — тип ҡысҡырыуы (Х.-Г. Андерсен) донъяның аҫтын өҫкә килтереп түңкәрә...

Әҫәр 1972 йылда «Ағиҙел»дең февраль һанында уҡ тиҙләтеп баҫылып сыҡты, Башҡорт академдрамтеатрында «шаулап» барҙы һәм спектакль Салауат Юлаев исемендәге дәүләт бүләге менән билдәләнде, матбуғатта фәҡәт мәҙхиәләр генә суҡлап-суҡлап яуҙырылды. Әммә, әммә... «Король яланғас бит!» — тигән яңғыҙ ҡысҡырыу барыбер күп йылдар буйына королгә тынғылыҡ бирмәгән, ҡолаҡ итен кимергән...

«Һүҙ — СССР яҙыусыларының VIII съезы делегаттарына» тигән рубрика аҫтында 1986 йылғы «Ағиҙел»дең 6-нсы һанында Мостай Кәримдең «Еңеп сығыу көтә» тигән нәүбәттәге шанлы мәҡәләһе баҫыла («Литературная газета»ның 1986 йыл 29 ғинуар һанынан тәржемәләп биргәндәр).

«Салауат» трагедияһында, — ти ул, — *бер нисә быуын инде халыҡтың аңында барлыҡҡа килгән ярһыу яугир, йөрәкле батыр һәм йыраусы булып торған традицион образға ҡапма-ҡаршы рәүештә, Салауат Юлаев шәхесен һәм уның тарихи миссияһын һүрәтләүҙә әҙер өлгө буйынса түгел, ә полководец, шағир, дәүләт эшмәкәре сифатында ҡылған эштәренә һәм ҡылыҡтарына баһа биреү юлын һайланым. Ауыр уйҙар менән һеңгәҙәп, әсе шик-шөбһәләр менән ытырғанып, батыр киләсәк алдында һәм выждан алдында үҙе етәкселек иткән һәм йырсыһы булған халыҡ восстаниеһының үкенесле тамамланғаны өсөн яуап тота. Хаҡ, әммә бойомға ашмаҫлыҡ эшкә меңдәрсә, меңдәрсә кешене әйҙәгән был ир кем һуң? Яҙыҡ эшкә олоһо ла, кесеһе лә дәррәү күтәрелер инеме ни? Әгәр ул хаҡлы икән, ниңә һуң еңелгән? Ул ҡапма-ҡаршылыҡлы уйҙар сорнауында. Шулай итеп, мин халыҡ хәтерен геройға ҡарата үҙ концепциям менән айҡарға баҙнат иттем, шуның менән* ***ҡайһы бер ғилми даирәләрҙең ҡаршылығына осраным»...***

Ҡылансыҡланмайыҡсы, Мостай ағай! — ниндәй «ғилми даирәләр» ул баҙнат итеп ҡаршы килһен инде һеҙҙәргә?! Һеҙгә ҡаршы һүҙ әйтеү — елгә ҡаршы төкөрөү, йәки үҙ башыңа үҙең һуғыу менән бер ине бит, әлегәсә ул шулай. «Король яланғас бит!» — тиеп, бер ниндәй ҙә «ғилми даирәләр» түгел, ә эскерһеҙ сабый йән генә әйтер ҙә һалыр ине... Әгәр "ғилми даирәләр" ҙә тап шулай әйткән булһа – бигерәк тә шәп, әлеге һөмһөҙ Й. Солтанов хаҡлы, тимәк!

Ә «геройға ҡарата үҙ концепцияғыҙ»ға килгәндә, хөрмәтле Мостай ағай, йомшаҡ ҡына әйтһәк, шапшаҡ концепция бит: һеҙ күрһәтергә яҫҡанған ул рухы өтөк Салауатты үҙ заманы тарихи документтарының береһендә лә осрата алмаҫһығыҙ! Үкенмәгән ул үҙенең эштәре өсөн! Үҙегеҙҙән өҫтәрәк бойороп ултырмыш кемдәргәлер яраҡлашыу, уларҙың боҙоҡ күңел ҡылында уйнарға маташыу түгелме был? Көллө халыҡ көләс-нур тип таныған һәм белгән Көндө (ҡояшты) «ҡара батҡаҡ йомарлағы» тип алъюҫыҡтан иғлан ҡылып ышандырып буламы илде?!. Ана шул ышандыра алмағанға ла бит эстән өҙәләнәһегеҙ, баяғы ҡысҡырыҡ сабыйға өҙлөкһөҙ йоҙроҡ төйөп киҙәнәһегеҙ:

«Әммә туғанлыҡ тауына артылыу процесы тамамланмаған һәм бөтә проблемалар ҙа хәл ителгән, шөбһәләр ҡалмаған, бөтә ҡарғалар шымған, бары тик былбылдар ғына һайрай, тип уйлаһаҡ, хаҡиҡәттән тайпылыр инек. Милли тойғо — ул бик нескә һәм һиҙгер, ул һәр саҡ ҡайғыртыусанлыҡҡа һәм иғтибарға мохтаж. Әлбиттә, милли антогонизм, берәүҙәрҙең башҡаларҙан өҫтөн тороуына дәғүәләр һәм бер-береңә хаслашыуҙар күптән инде кире ҡайтмаҫ

ергә батты. Был — Ленин васыяттарының ҡимматле һөҙөмтәһе. Әммә ләкин күңелемә оҡшап етмәгән айырым штрихтарҙы иҫкә төшөрмәйенсә лә булдыра алмайым. Патриотизм ярһыуында ҡайһы бер милли культура вәкилдәренең берсә үҙ халҡына йәш өҫтәргә, нисек тә булһа боронғолоғон иҫбатларға йәки тарихта өлөшөнә төшмәгән ҡаҙаныштарҙы уныҡы тип һанарға, йәки әкиәти ҡаһарманлыҡтарға күмергә маташыуҙарҙы һәм теләүселәрҙе күҙ уңында тотам... Күмәкләп сигелгән матур биҙәкле келәмдән нисек тә булһа үҙ ебеңде һурырға, уртаҡ думбыранан үҙ ҡылыңды тартып алырға, уртаҡ йырҙан үҙ һүҙеңде йолҡорға — тағы бына ошондай һарыу ҡайнатҡыс тенденция бар. Төрлө ҡәбиләләр һәм халыҡтар борон-борондан күмәкләп туҡыған келәм, бергәләп көйләгән думбыра, уртаҡ йыр ул саҡта ни хәлгә төшөр? ***Башҡортостандағы*** *һәм башҡа ҡайһы бер тарафтарҙағы төрки телдә яҙған* ***ҡәләмдәштәрем*** *ҡайһы берҙә* ***бына ошолар менән мауыға.*** *Әйтергә кәрәк, бер улар ғына түгел... Ошондай ваҡ нәфселәнеү, минең уйымса, хуплауға лайыҡ түгел һәм зыяндан башҡа файҙаһы юҡ»...*

Донъя яратылғандан алып Уралында көн күреүсе башҡорт халҡының рухи-мәҙәни тарихын һәм уның сал боронғолоғон матбуғатта иғлан ҡылыусы әҙип ул саҡта әлегә тик берәү — Йыһат Солтанов булғанлыҡтан, ағабыҙҙың кем биленә типкәнлеген ҡәләмдәштәр ҙә, рәсми етәксе әһелдәр ҙә яҡшы беләләр һәм тейешле сараһын күрәләр ине. Уртаҡ келәмдән үҙ ебен һурып алып, совет илен ҡаҡашатыусылар «бер улар ғына түгел», тип яһил киҫәтеп ҡуйыуы ла тәрән мәғәнәгә эйә — АҠШ Үҙәк темеҫкенеү идаралығының да (ЦРУ) мәкерле эше был йәнәһе (тимәк, Йыһат Солтанов шулар тирмәненә һыу ҡоя)... Сығырынан сығып ҡабарынған үҙбелдекле яһилйәнгә ҡарыулашып һүҙ әйтергә заманында ирек бирмәһәләр ҙә, хәҙер инде (үҙе иҫән саҡта, иншалла!) мәрхүм дуҫымдың шулай уҡ әллә ҡасанғы — 1957 йыл 16 март көндәлеге менән яуап ҡайтарам: *«Минең өсөн Башҡортостан темаһы изге, был минең — тормошом, ҡайғым, шатлығым. Был минең ғорурлығым һәм кәмһенеүем. Был минең — йөрәгем.*

Мостай Кәримгә ул — ҡайын япрағы; ел иҫкәндә шаулай, ел иҫмәһә — юҡ. Ел ҡайһы яҡтан иҫә — ҡайын япрағы ла шул яҡҡа елберҙәй. Шуның өсөн ул: «Мин башҡортмон», — тимәй, ә «Россиян мин», — ти». (Рәми Ғарипов. Әҫәрҙәр, II том. Өфө «Китап» 1998; 233-өнсө бит).

Мостай Кәримдең “яҡын дуҫы” Назар Нәжми ҙә уны ғәҙел баһалап, 70-енсе йылдарҙа уҡ күптәребеҙгә ишеттереп әйткәйне: “Хандар өсөн йырлаусы һарай шағиры!” Дөп-дөрөҫ, шуға күрә лә ғүмере буйына режимдың һыйлы табынында яланып тамаҡ туйҙырҙы. Заман ауҡын ошолай үҙенсә төшөнөп, эс серҙәрен көндәлектәренә лә (“Ағиҙел” журналының 2006 йылғы 10 -- 11 енсе һандарынан был мемуарға өҫтәлмәләр керетәм) теркәгән икән:

“Шағирға ғүмер баҡый йә таш, йә һөйәк ырғыталар. Һайла!”

Һуңғыһын һайланы, әлбиттә. Хатта “теге донъя”ға ла хан арбаһында үтеү яйын ҡармалай бит ағайым:

“Байҙарҙы дуҫтары ерләй, ярлыларҙы – туғандары, һуҡбайҙарҙы ергә былай ғына тапшыралар. Ваҡыты еткәс мине кем ерләр икән?”

Фанилыҡта хандар, әлбиттә, өлөш сығара ала, ләкин ысын дуҫ була алмай:

“Бер-беребеҙ менән уртаҡлашырлыҡ оло серҙәребеҙ, ижади серҙәребеҙ, бүлешерлек шиктәребеҙ, икеләнеүҙәребеҙ юҡ... Франсиско Гойяның дуҫтарына һөйләрлек серҙәре лә, сер һөйләрлек дуҫтары ла булған. Минең бер дуҫым бар (мин Өфөнө әйтәм), тик ул минең серҙәремде күтәрерлекме икән?”

Һәм йәнә:

“Үҙ әҙәбиәт мөхитемдә мин ҡай саҡ Рим аллаһына оҡшаш – ихтирам итәләр һымаҡ, ярҙам көтәләр, ҡурҡҡан да төҫләләр, әммә яратмайҙар. Ҡурҡҡан кешене ратыу мөмкин түгел”.

Дөрөҫ, ялағайҙар, алдын-артын шапылдатып ялаусылар менән тулы булды “бөйөк аға”ның ян-яғы, хатта күҙҙәрен гүр тупрағы ҡаплағас та, бер-береһенән уҙҙырырға тырышып ярамһаҡландылар, мөртәттәр. Ләкин ундайҙарға баһа үҙ ваҡытында уҡ бирелгән, ҡылыҡтарына өҫтән генә ҡарап көләп йөрөлгән:

“Елгә еленләп гүмер уҙгарыуҙар, йыйын эшкә ашмаҫ кешеләр өсөн һоранып йөрөүҙәр (хаҡ әйтә: эшкашмағандарҙы ғына ҡолаҡтарынан өҫкә тартып, эшкашҡандарҙың башына һуғып йәшәне! – Й.С.), *йыйын йүнһеҙҙе яклап йөрөүҙәр ярты гүмеремде алды. Йылдарымдың байтак өлөшө заяга үтте. Ҡурҡып йәшәнем... Намыҫһыҙҙар, яуыздар, бәгерһеҙҙәр шул ваҡытта үҙ мәнфәгәттәре өсөн мине эшкә екте... Мин гүмер буйы тигәндәй үҙемдең булмаган, әммә һәр ваҡыт бар икәнен тойган мундирымдың бөтә һәҙәптәре лә ҡаптырылган көйө йәшәнем. Гел генә һәҙәптәрҙе ысҡындырырга теләнем, ҡай саҡ был килеп тә сыга, тик аҙаҡҡа тиклем түгел. Эш нимәлә һуң?”*

Эш эт томшоғона ырғытылған һөйәктә, әлбиттә, үҙең әйтеп бирҙең бит!

1972 Яңы йылға бер көн генә ҡалды, тигәндә, «Совет Башҡортостаны»ның әҙәбиәт бүлеге хеҙмәткәре шағир Хәсән Назаров мине телефон аша ҡабалан саҡырып алып, быуыныма ҡорт булып төштө бит, әй: «Яңы йыл менән ҡотлап халыҡҡа өндәшкән ялҡынлы мәҡәлә кәрәк, иртәгә үк наборға төшөп китәсәк — таң атҡансы әүмәләп килтер, ағай, юғиһә янасаҡбыҙ!..» — «Коммунист» тигән әҫәремдән өҙөктө баҫҡанығыҙ өсөн ни булғанын беләһегеҙ — Абдулла Исмәғилев атып бәрәсәк барыбер», — тип «кәзәләнеп» ҡараһам да, уныһын үҙ өҫтөмә алам, баҫмай һис әмәле юҡ, сөнки шундай материалһыҙ сыҡһа, уға ла эләгәсәк, ә һинән башҡа бер кем дә уны төн ултырып яҙып килтерә алмай, тип һалпы яҡҡа һалам да ҡыҫтырғас, яҡташымдың һүҙен йығырға ҡыймай, ризалашып ҡайтып киттем дә машинка яҙмаһында биш битлек был публицистиканы яҙып, үҙ ваҡытына килтереп тә еткерҙем; һәм ул, ысынлап та, гәзиттең 1972 йыл 1 ғинуар һанында һис бер тотҡарлыҡһыҙ донъяға сыҡты:

Яҙ, Башҡортостан!

Йоҙроҡ кеүек йомарланған Ер шарына йәнә лә яҡты көн килде.

Биш бармаҡтай биш ҡитғаһын биш төрлө ғәм менән сорнап, биш төрлө юл-йүнәлеш юрап 1972 йыл килде. Кешелектең көр яҙмышын ҡайнар усына йомарлап тотҡан эшсән йоҙроҡ-планета икһеҙ-сикһеҙ йыһан юлдарынан яңы саҡрым бағанаһын ҡағып уҙҙы. Был саҡрымда уҙған менән киләсәк, иҫке менән яңы, аҡ менән ҡара осраша. Был саҡрымда һәр ике яҡ үҙенең көсөн һынаша. Ер шарының миллион-миллион ир һәм ҡатындары был саҡрымда, күҙҙәренә аҡ күренмәй, ҡара ҡайғы йотоп тешләнеп уҙалар. Әлеге биш юл-йүнәлештең иң ҡараһы-билғауырына дусар булғандар улар. Ә миллион-миллион бәхетлеләр өсөн иһә был Яңы саҡрым — офоҡтарҙың тағы ла киңерәк асылыуы, барған һайын айбарланыусы ҡояшлы-айлы икһеҙ-сикһеҙ аҡ донъя ул.

Ҡәҙерле кешеләрем, аҡ киләсәкле, киң офоҡло Совет Башҡортостанының тулы хоҡуҡлы граждандары! Һеҙ, беҙ — үҙебеҙ бит ул иң бәхетле аҡ донъяның төп хужалары! Алдыбыҙға ҡалҡынып ҡарайыҡсы — офоҡтар ҡайһылай асыҡ. Тирә-яғыбыҙҙы боролоп байҡайыҡсы — донъя ниндәй киң. Табан аҫтыбыҙҙа үҙенең ҡышҡы күркенә — һөттәй аҡҡа төрөнгән тыуған еребеҙ. Әйтерһең, тик беҙҙең өсөн, төн сыҡҡансы ғәзиз еребеҙ үҙенең саф аҡ никах күлдәген кейгән...

Сал Иртыштан алып көр Иҙелгәсә, йор яйыҡтан алып тын Ҡамағаса, Чукот диңгеҙенән алып Балтик диңгеҙенәсә, Төньяҡ Боҙло океан һәм Аҡ диңгеҙҙән — Ҡараҡом һәм Каспийгәсә ике ҡитғаны иңләп-буйлап ятҡан икһеҙ-сикһеҙ бөтә еребеҙ, әйтерһең, беҙҙең алда йәйелеп киткән ап-аҡ ҡағыҙ — яҙыр өсөн асып һалынған аҡ ҡағыҙ. Уға яҙыу өсөн бөйөк хоҡуҡ ҡәләме донъяла тик һеҙҙең менән беҙгә — Совет Социалистик Республикалар Союзының граждандарына бирелгән. Һәм тағы ла шуға иғтибар итегеҙ, ҡәҙерле яҡташтарым: һеҙҙең алдағы аҡ табаҡҡа эре хәрефтәр менән «СССР — 50» тигән, был донъяла иң ырыҫлы, тылсымлы һүҙ — ҡотлоларҙан ҡотло нур-һүҙ бар. Тимәк, 15 герблы, 150 телле татыу милләттәр республикаһына быйыл теүәл 50 йәш тула. Был беҙгә Яңы атлап ингән 1972 йылдың алтын бүләге. Изге йола буйынса ошо данлы бүләкте ҡотлап, Ватандың аҡ бит-ҡағыҙына беҙ, һәр ҡайһыбыҙ, үҙенең ҡултамғаһын йөрәк уты менән яндырып һаласаҡ. Ул уттарҙан ҡабынған факел быуаттарҙан — быуаттарға йылъяҙма булып дөрләп барасаҡ. Тәүлектәрен, сәғәттәрен, минуттарын һәм секундтарын алдан уҡ һанап-көйләп ҡуйған егәр яңы йыл шул тамғалар өсөн бына һәр беребеҙҙең күҙ алдына теүәл 365 көн-юлға бүленгән, һәр юлы утлы ҡәләм осон көтөп кенә торған ап-аҡ затлы йүнәлеш-өлөшөн асып һалған.

Эшсе иптәш! Һинең ҡултамғаң ҡуя торған ҡәләмең — станогың, ул тынғы белмәй әйләнһен.

Колхозсы-ерекмән иптәш! Баҫыу һәм ҡырҙарҙа түккән һәр тамсы хәләл маңлай тирең илгә яңы муллыҡ килтерһә, һинең ҡултамғаң шул булыр.

Яҙыусы һәм ғалим, пограничник һәм космосты яулаусы! Һеҙҙең йөрәк тибешегеҙ билдәләр ҡултамғағыҙҙы. Ә бөтәбеҙҙең дә ҡулдарыбыҙ, йөрәктәребеҙ, аҡылдарыбыҙ берегеп, әлеге мәңге һүнмәҫ факелды дөрләтһен.

Эйе, алдыбыҙҙа яңы асып һалынған аҡ ҡағыҙ — 1972 йыл — һәм СССР-ҙың алтын 50 йыллығы. Эшсән йоҙроҡ-планетабыҙ осһоҙ-ҡырыйһыҙ йыһан юлына ҡағып үткән яңы саҡрым бағанаһы ошо ике утлы һанды үткән менән киләсәктең, иҫке менән яңының, аҡ менән ҡараның ҡап-урталыҡ араһын аныҡ билдәләү өсөн ҡуйылған. Ерҙәге бар һуҡырҙарҙың күҙен асыу, өмөтһөҙҙәр өсөн өмөт маяғы ҡабыҙыу өсөн ҡуйылған. Был нур бөркөп тороусы маяҡ ҡара төндәрҙә лә барлыҡ биш ҡитғаға тиң балҡып күренә, көслө прожектор менән бөтә кешелек донъяһының үткәнен, бөгөнгөһөн, киләсәген ҡапшап ҡарарға форсат бирә.

Башҡортостаным минең! Бөгөн ап-аҡ ҡар бөркәнгән баҫыуҙарың, яландарың, ҡаяларың, эшсән ауыл һәм ҡалаларыңдың күген күмгән шау-электр диңгеҙҙәрең менән һин ҙур Ватандың башындағы аҫыл аҡыҡҡа ынйы-гәүһәрҙәр батырып эшләнгән ҡиммәтле таж һымаҡ балҡып күренәһең. Берәүҙәр һине бик ҙур тере йөрәккә, күрешеү өсөн һонолған эшсән ҡулға, йәки ҡайын япрағына оҡшатып йырлайҙар. Икенселәр осоп барған бөркөткә, ҙур Ватандың билендәге ҡоралды кобураға йәки Урал батырҙың алмас ҡылысына тиңләп данлайҙар. Өсөнсөләр һине, илдең күҙ ҡараһы, тип атайҙар. Ләкин быларҙың бөтәһен бергә ҡушып әйткәндә лә аҙ булыр, беҙҙең йөрәк хистәрен биреп бөтөрмәҫ һымаҡ. Был донъяла һинең менән сағыштырырлыҡ тик бер генә нәмә бар — ул да булһа һин үҙең, һин үҙең, Башҡортостан!

Туған халҡым! Һине имәндәргә тиңләр инем мин, тик улар мәңге йәшәмәй. Аҡҡан йылғаларға оҡшатыр инем, ләкин улар ҙа мәңге аҡмай. Мәғрур тауҙар менән сағыштырыр инем, әммә тауҙар ҙа ишелеп төшә. Ә һин, туған халҡым, ике осо ла төпһөҙ йыһанға китеп олғашҡан офоҡ һыҙығы кеүекһең: һин мәңге булған, барһың һәм мәңге буласаҡһың. Икегеҙ ҙә бер-берегеҙгә тиң килгәнһегеҙ, туған халҡым һәм тыуған

Башҡортостан! Әммә донъяла иң ҙур тиңлек тә бар әле: илдәр менән илдәрҙең, милләттәр менән милләттәрҙең тиңлеге. Шул бәхеткә ирешеү өсөн күпме быуаттар буйы күпме халыҡтар ҡан түкте, зар-иланы, емеректәр аҫтында күмелеп ятып ҡалды. Ләкин кешелек донъяһы һаман халыҡтарҙың тиң ғаиләһе, дуҫлығы хаҡына йән атып, көрәшеп йәшәне. Ата-бабалар шул изге юлда аҡты ҡаранан, дуҫты дошмандан айырырға өйрәнде. Улар Башҡортостан намыҫы өсөн генә түгел, ә Рәсәй намыҫын һаҡлап Кузьма Минин һәм Дмитрий Пожарский ополчениеларында, Петр I батшаның төрөк, швед походтарында һәм Наполеонға ҡаршы Ватан һуғышында ҡан ҡойғанда ла, батшалыҡтың нигеҙен дер-ҡаҡшатып тетрәткән Иван Болотников, Емельян Пугачев кеүек ҡыйыу уҙамандарҙың яуҙарында урыҫ һәм башҡа милләт туғандары менән ҡуша изге берҙәмлек өсөн ғәзиз баштарын һалғанда ла, икеләнеп тормай, оло бер хаҡиҡәт өсөн йән бирҙе. Ул хаҡиҡәт иҙелгән барлыҡ милләттәр өсөн дә уртаҡ, ә иҙеүселәр өсөн ҡара гүр ташы ине. Ошо хаҡ юлда минең халҡым алтындай саф аҡ күңелен сағыу Ленин нуры менән балҡытып, совет Ватаны өсөн Шәһит батырҙарын, Шайморатов генералдарын бирҙе, СССР-ҙың гражданы тип аталыу хоҡуғын үлемесле оло яуҙа ҡулына ҡорал тотоп, ҡайнар ҡандарын түгеп аҡланы. Шуға ла бөгөн совет кешеһенең тормошҡа ышанысы ныҡ, барыр юлы яҡты, тороро ере киң. Халыҡтарҙың быуаттар буйы килгән хыялы күкрәп тормошҡа ашты: ерҙә туғанлыҡ иле бар, ул ил беҙҙеке, исеме уның — СССР.

Яңы йыл менән күрешкәндә беҙ иҫке йылды ла хөрмәтләп оҙатабыҙ, сөнки ул бөтөн совет халҡы өсөн бик иҫтәлекле булды. 1971 йылда беҙ һигеҙенсе биш йыллыҡты уңышлы үтәнек, киләсәккә яңы пландар ҡороп ҡуйҙыҡ. Партияның XXIV съезы ул планды хуплап, алдыбыҙҙа офоҡ ҡапҡаларын асып ебәрҙе. Бөтөн ил берҙәм һулыш менән тын алып, эш өҫтөндә күкрәк киреп, бәрәкәтле Яңы йылға аяҡ баҫты. Башҡортостан кешеләре лә илдең тигеҙ, тыныс ритмы менән берҙәм юл ала. Беҙ беләбеҙ: 1972 йылдың саҡрым бағанаһынан алға ҡарай һәр бер совет гражданын башланмаған бөп-бөтөн бәхет көтә.

Бер үк ваҡытта Ер шарының миллион-миллион ир һәм ҡатындары был саҡрымды, күҙҙәренә аҡ күренмәй, ҡара ҡайғы йотоп тешләнеп уҙалар. Ҡара капитал сылбыры быуған бәхетһеҙ илдәрҙең кешеләре улар. Монополиялар, концерндар, синдикаттар — империализмдың ҡара һөлөктәре — был илдәрҙең күкрәк ҡанын эсә һурып. Капиталдың аҡса сейфынан төшкән шомло күләгә кешеләрҙең барыр юлдарын быуып, күҙ алдарын ҡараңғылата. Долларҙар һәм фунттар астарҙың, яланғастарҙың өҫтөнә, аҡ япма йәки аҡ икмәк булып түгел, ҡара ҡурғаш булып атыла. Вертолеттар бамбук үҫкән ауылдарға, кендек әбейе алып түгел, ә ҡатын һәм сабыйҙарҙың өҫтәренә ут ишелдереү өсөн напалм тейәп оса. Ер шарының байтаҡ ҡара ҡитғалары уймаҡтай аҡҡа зар әле.

Ватаным минең, бөйөк Совет иле! Диңгеҙҙәрҙән диңгеҙҙәргәсә ниндәй аҡ булып сикһеҙ йәйрәп ятаһың һин. Хатта төпкөл ер аҫтың да тик аҡлыҡтан ғына хасил төҫлө. Ошо бөйөк Ватан хаҡына ҡайнар хеҙмәткә генә түгел, ә утҡа ла, һыуға ла, үлемгә лә инеү тәүәккәллеге ярала йөрәктәрҙә. Күҙ ҡарабыҙҙай күреп һаҡларбыҙ, Ватан, һине!

Беҙҙең эшсән йоҙроҡ һымаҡ йомарланған Ер шары һаман дауам итә үҙенең ҡыҙыу хәрәкәтен. Ал да, ял да юҡ уға — фәҡәт хәрәкәт, тайпылышһыҙ алға хәрәкәт кенә. Беҙҙең Ватан хәрәкәте лә Ер шарының мәңгелек хәрәкәте менән бергә ҡушыла, ә һәр совет кешеһенең эш-хәрәкәте — Ватандыҡы менән бергә. Был алға барыш мәңгелек, уны туҡтатыр, йәки тайпылдыртыр ҡеүәт юҡ. Эшсе йоҙроҡ-планета саҡрымдарға бағаналар ҡаҡҡан һайын, Ер шарында тутыҡ сылбырҙар өҙөлөп, ҡара таптар ҡойолоп төшә, аҡлыҡ арта бара. Беҙҙең йөрәк уты менән аҡҡа һалған ҡултамғалар бөйөк Ватан иңендә яңы

заводтар, ҡалалар, иген баҫыуҙары булып әүерелеп, уҙылған йылдың һәр көнөндә мәңге янар факелдар ҡабыҙып, бер ҡулдың биш бармаҡтарылай йомарланған, һаман-һаман бер-береһенә яҡыная барған биш ҡитғаны ҡомарлап йылыта. Был бармаҡтар яҙлыҡмаһын өсөн, Ер шары эшсе йоҙроҡ булыуҙан туҡтамаһын өсөн ырыҫлы үҙ тамғанды яҙ, Башҡортостан!

Ҡайһындай ғына булһа ла, ихлас йөрәк хистәремде һалғайным шул, Башҡортостаным менән ғорурланып...

Телеп һалыр телебеҙ...

Ләкин ҡыуанысым оҙаҡҡа барманы, күңелем күген интектергес ҡара болот ҡапланы. Гәзитселәрҙең әйтеүенсә, мәҡәләмдең сыҡҡан көнөндә үк, юлына кемдер арҡылы төшкәндәй ярһып-туҙынып, әҙәбиәтебеҙ генералы Мостай Кәрим редакцияға килеп кергән; тура редактор бүлмәһенә *лап-лоп* атлап уҙып, тауыш күтәргән. Беренсенән, минең текстағы: «Сал Иртыштан алып көр Иҙелгәсә, йор Яйыҡтан алып тын Ҡамағаса, Чукот диңгеҙенән алып Балтиҡ диңгеҙенәсә, Төньяҡ Боҙло океандан һәм Аҡ диңгеҙҙән — Ҡараҡом һәм Каспийгәсә ике ҡитғаны иңләп-буйлап яткан икһеҙ-сикһеҙ бөтәеребеҙ»... — тигән, асылында бер юлы *тарихи* Башҡортостаныбыҙға *ла*, хәҙерге СССР-ға *ла* ҡағылышлы шағирәнә һүҙҙәрҙе даһи В.И. Ленин үҙе һыҙып биргән Башҡорт АССР-ы территорияһын баш-баштаҡланып киңәйтергә маташыусы милләтселек шауҡымы, тип атап, шуға юл ҡуймыш редакцияны партиябыҙ күрһәтмәләренән тупаҫ тайпылыу, сәйәси зыян эшләүҙә ғәйепләгән. Быға йәнә Мостай Кәримдең баяғы классикаға әйләнгән, Башҡортостан картаһын Рәсәй ҡайынының бер япрағына тиңләгән шанлы йырын күрәләтә кире ҡағыу, ә, уныңса һәм күптәребеҙсә, «Бөйөк Октябрь революцияһынан һуң ғына барлыҡҡа килгән» башҡорт халҡын «һин мәңге булған, барһың һәм мәңге буласаҡһың», тип мәңгеләштереү бәләһе *лә* өҫтәлгән... Дөрөҫөн генә әйткәндә, шағирәнә ҡоласы киң, белем даирәһе тар инсан -- әҙәбиәтебеҙ генералы тарафынан яһалған бик ауыр һәм ҡурҡыныс ғәйепләү ине был... Әле әйткән “белем” мәсьәләһен уйлап сығармағанмын, уҙаманыбыҙ ул хаҡта үҙе үк ихлас таныны:

“05.05.86. Белем запасым һәр ваҡыт әҙ булды... Әлбиттә, бында нимәлер бар, хатта яҡшыһы ла бар: мин үҙемдең беләмемде максимум файҙаланам. Шул уҡ ваҡытта ҡурҡып та йәшәнем: бына-бына юҡҡа сығырмын төҫлө” -- “Ағиҙел” 2006/11, көндәлектәр.

Ошо ғына ла етмәһә, ике ай ҙа үтер-үтмәҫтән, «ябай ауыл малайы»ның ауыртҡан башына ауырттырып тимер таяҡ һуғылды -- эш шунда: намыҫлы һәм тәртипле коммунист булараҡ, партбюробыҙ сәркәтибе Фәрит Иҫәнғолов тәҡдимен кире йыҡмай, әҙәби телебеҙҙең бөгөнгө хәле һәм бурыстарыбыҙ тураһында яҙыусыларҙың февраль айында буласаҡ ҙур йыйылышында сығыш яһарға әҙерләнеп, төп докладтан һуң фекер алышыуҙа ун биш минутлыҡ телмәр уҡып ташланым...

Милли әҙәбиәтебеҙҙәге тел сәйәсәтенә туранан-тура ҡағылышлы һәм үҙем өсөн ифрат күңелһеҙ эҙемтәле беренсе ҙур сығышым булды был (миҫалға бер-нисә абзацын ғына күсерәм).

Халыҡ теле — океан

Бөгөнгө был йыйылыштың хәйерле сәғәттә йыйылыуын, көн үҙәгенә ҡуйылған мәсьәләнең мөһимлеген, докладсының ул мәсьәлә буйынса бик актуаль проблемалар ҡуҙғатыуын, шуның менән ошонда үткер һөйләшеү өсөн фекер уятыуын ыңғай билдәләп үтмәй мөмкин түгелдер. Ул ҡуҙғатҡан проблемалар һаны байтаҡ һәм уларҙың һәр береһе айырым доклад талап итерлек. Шуның өсөн бында һәр кем үҙен үтә борсоған бер йүнәлеште һайлап алып, эс серҙәрен сисер, тип уйлайым. Мин дә һуңғы ваҡытҡа тиклем көндәлек эш тәжрибәмдә осрата килгән, күҙгә күренеп бармаһа ла, яҙыусылар араһында яҡшы ғына бәхәс тыуҙырған, күп ваҡытта аңлашылмаусанлыҡҡа килтергән, һәр беребеҙгә, ҡул-аяғы менән булмаһа, итәге менән булһа ла ҡағылып үткән, бәлки, бөгөнгө йыйылыштың да көн тәртибен билдәләүҙә ҙур урын тотҡан бер мәсьәләгә ҡағылмаҡсымын. Был мәсьәлә беҙҙең үҙебеҙ — яҙыусылар тарафынан тыуҙырылған, ҡырҡыулаштырылған һәм яҙыусылар тарафынан хәл ителергә лә тейеш. Был иһә уҡты сәпкә яҙа атмайынса, йәки йомшаҡ түшәк йәймәйенсә, туранан-тура бәхәс алып барыуҙы һорай. Шуға ла мин телмәремде күрәләтә ҡырыҫ ҡорҙом.

Бөгөн башҡорт яҙма әҙәби теленә көтөлмәгән яҡтан һөжүм башланды.

Башҡорт әҙәби теленең именлеген, көрлөгөн, ғүмерен ҡурсалау бурысын йөкмәүселәр — яҙыусылар үҙҙәре һөжүм итә.

Ҡыуанып ҡул сабырға тейешме беҙ хәҙер, әллә ҡанлы йәштәр түгеп иларғамы?

Юҡ, беҙ быны икеһен дә эшләмәйәсәкбеҙ, сөнки башҡорт әҙәби теле тигән мәғрур Уралтауҙың ҡаяларының ныҡлығын, уның тамыры Ер-әсәнең нәҡ үҙәгенә — башҡорт халҡының йәнле һөйләшеү теленә барып тоташҡанлығын һәм уның гранит итәгенә бәрелеүсе мәшәҡәтле тулҡындарҙың күбек булып ситкә һирпеләсәген беләбеҙ. Башҡа нәмә борсой беҙҙе был юлы: нимә мәжбүр ҡыла хөрмәтле аҡһаҡалдарыбыҙҙы (бында йәш самаһы һәм ҡайһы быуын вәкиле булыу күҙ уңында тотолмай: улар араһында төклө эйәклеләр ҙә, төкһөҙҙәре лә бар), быуынһыҙ урынға бысаҡ менән һелтәнеп, һөрәнләп ел тирмәне өҫтөнә яуға ташланырға? Донкихотлыҡмы? Ләкин мин улар араһында моңһоу йөҙлө, хуш күңелле идальгоны күрмәйем. Беҙҙең һаҡаллы һәм һаҡалһыҙ рыцарҙарыбыҙҙы һөрән һалдыртып яуға әйҙәгән нәмә, минеңсә, бүтәндә. Ҡылыстарҙы сатрашларға мәжбүр ҡылған был сәбәп — башҡорт теленең диалекттары һәм уның яҙма әҙәби телебеҙгә мөнәсәбәте мәсьәләләре. Шуға булған ике ҡараш, уны ике төрлө аңлау — баррикаданың ике яғына өйөрә яугирҙәрҙе.

«Башҡорт яҙма әҙәби теле тупланып, ҡалыплашып бөткән — диалект һүҙҙәрен яҡын юлатмаҫҡа кәрәк!» — тип сың ора һаҡаллы һәм һаҡалһыҙ аҡһаҡалдарҙың бер килкеһе.

«Башҡорт яҙма әҙәби теле әле ҡалыплашып бөтмәгән, ул һаман тупланыу, формалашыу өҫтөндә, тимәк, диалект һүҙҙәренә аҡ юл булырға тейеш!» — тип рельс һыныҡы ҡаға һаҡал үҫтергән һәм үҫтермәгән һаҡалтайҙарҙың бер килкеһе. Ҡалған халыҡ, ҡап-уртала ҡалып, эштең ни менән бөтөрөн көтә. Ике яҡтың ҡайһыныһы хаҡлы һуң? Икеһе тиң хаҡ та, нахаҡ та һымаҡ...

...«Диалект һүҙҙәрен яҡын юлатмаҫҡа кәрәк!» Ниндәй пафос, ниндәй яугир ынтылыш менән һуғарылған һөрән! Ошо һөрән һөрөлгәндән һуң, һурмай ҡара хәнйәр һәм ҡылыстарҙы!.. Ләкин беҙҙең алмас ҡылыстар ниңәлер, хас дошман муйынында түгел, ә бер-беребеҙҙең танау осонда осҡон сәсрәтә. «Диалект һүҙҙәре», «диалектизм» тигән төшөнсә, дошман яҡ булаһы урында, ике-ара ҡап-уртала баррикада булып ҡалҡып сыға. Бына шул саҡ йөрәкте ғәм семетеп ала ла инде: йәғни беҙ, ҡәләм эйәләре тип аталған әҙәмдәр, «диалект һүҙҙәре», «диалектизм» тигәндең бөтә мәғәнәһен һәм унан сыҡҡан

бурыстарыбыҙҙы тулы мәғәнәһендә аңлап етәбеҙме икән?.. Әммә көндәлек эш тәжрибәһендә редакцияларҙа ҡылыс сатрашлатыуҙарҙың сәбәбенә күҙ һалыу — үҙе үк беҙҙең был мәсьәләлә бер ҡатлы сабыйҙар икәнлегебеҙҙе асыҡ дәлилләй. Бындай сабый (һаҡаллымы ул, әллә юҡмы — эш унда түгел), әҙәбиәт донъяһына тәпәй баҫып ҡалғып тороуҙың икенсе көнөндә тирә-яғына ҡаранып, күңеле ҡанғансы ярға ятып һүҙ ағымынан бер һемерә лә үҙ иңкәйе һыйҙыра алғанса ҡосаҡлай даръяны, шуның менән оло диңгеҙҙе ҡосоп алдым тип уйлай. Ғәмәлдә иһә ҡосағында ҡорсаңғы тай ҙа эсеп туймаҫлыҡ шәрекүләүек кенә. Диңгеҙ тигәне лә уның диңгеҙ түгел, ә океандан бүленеп ҡалған, аҡрынлап ҡорорға дусар ҡылынған Арал, йәки Каспий күле генә. Шул бер ҡолас диңгеҙе менән бындай «белгес» халыҡ теле океанының лоцманы булыу вазифаһын ала үҙ өҫтөнә. Яныпкөйөп эшкә тотона. «Тонған таҙа диңгеҙебеҙҙең сафлығын һаҡлайыҡ, болғансыҡ сит ағымдарға юл ҡуймайыҡ!» — тип ысын күңелдән ҡурсалап яр һалыр ул, ләкин шул «сит ағым»дарҙың -- үҙен оло океанға тоташтырғыс йәншишмә икәнлеген, «болғансыҡ» менән ҡуша диңгеҙгә йәшәү алып килгәнлеген һис абайламаҫ. Әгәр шулай түгел икән, ниңә беҙҙең мәрхәмәтле редакцияларҙа һаман да шул өс мең һүҙле эсперанто теленә тартымлыҡ көслө, ә редактор ҡулы һәр бер өс мең беренсе «шыршау» һүҙҙе ҡулъяҙманан ҡыя сабып ырғыта?..

Ун биш минутҡа һуҙылған телмәремде урыҫсанан миҫал килтереп тамамлағанмын:

...Ошо залда ултырып беҙ тыңлаған, беҙ күтәргән, беҙ бәхәсләшкән мәсьәләләр фәҡәт беҙҙең һәр беребеҙгә генә, хатта башҡорт әҙәбиәтенә генә лә ҡайтып ҡалмай, ә бөтә совет әҙәбиәтенә лә ҡағыла, бөтәбеҙ өсөн уртаҡ улар. Беҙ беләбеҙ: яҙыусы ҡулланған һәр «яңы» һүҙ әҙәбиәттең ҡырҡ иләгенән иләнеп, ҡырҡ һелкеүесенән һелкелеп, үҙенең яйын, урынын, баһаһын табасаҡ, кәбәктәре елгә осасаҡ. Игендең иләккә ишелеп инеүе ҡаза түгел — инмәй ҡалыуы ҡаза. Былтырҙан биреле «Литературная газета»ла «Язык и время» рубрикаһы аҫтында бөйөк урыҫ теленең океанын һайыҡтырыусыларҙан ҡурсалап алып барылған ҡыҙыу дискуссия үҙе шуға ҙур дәлил. Евгений Винокуровтың шул гәзиттә быйыл 16 февралдә баҫылып сыҡҡан «Со словом шутки плохи» тигән мәҡәләһендәге ҡайбер борсоулы һүҙҙәре, моғайын, беҙгә лә ҡағыла.

«Я боюсь, — тип яҙа ул, — *как бы после нашей дискуссии о языке редакторы не взялись с новой силой выправлять стихи начинающих, не начали бы с еще большим рвением обстругивать молодых. Есть редакторы, которые до того «добросовестны», что не оставляют в стихах ни одного живого слова.*

Лев Толстой писал о придирающихся критиках: «Они хотят, чтобы я стругал, а стружки не было».

Если все одухотворено большой мыслью, «стружка» не страшна».

Эйе, хаҡ һүҙҙәр: ҡоласы киң моряктарға ҡурҡыныс түгел океан! Улар барыбер күбектәрҙе ярып алға барасаҡ, төбәлгән ярға сығасаҡ. Тик бының өсөн һәр беребеҙ үҙенең заман яҙыусыһы булараҡ туған тел алдында йөкмәгән ауыр һәм яуаплы вазифаһын һуңғы сиккәсә еткереп аңларға, күңелендә ойоп ятҡан ғәмһеҙлеккә, наҙанлыҡҡа ҡаршы үлемесле яуға сығырға бурыслы.

Йыһат Солтанов.

Өфө, 23 — 27.02.1972.

Әлбиттә, күренеп тора, Коммунистар партияһының һәм совет хөкүмәтенең илдә аҫтыртын үткәрелгән ваҡ милләттәрҙең телен бөтөрөү, урыҫлаштырыу сәйәсәтенә ҡаршы һәм уны Башҡортостанда үткәреүселәргә ҡаршы йәшерен баш күтәреү — «улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла» тип өндәшеү һымағыраҡ ине был. Сөнки ул ҡурҡыныс сәйәсәт шул тиклем дә тамыр йәйгән, хатта урамда транспорт туҡталыштарында башҡортса һөйләшеп торһаҡ, «ниңә былдырлайһығыҙ, ниңә урыҫса һөйләшмәйһегеҙ?» тип килеп бәйләнерҙәр ине; ә мин йәшәгән коммуналь фатир кухняһында: «Башҡорт бөтә икән — быйылдан башлап паспорттарына милләттәрен «урыҫ» тип яҙасаҡтар», — тигән хәбәрҙе кинәнеп тәкрарланылар...

Телмәрем артынса уҡ бик ҡабалан тәнәфес иғлан ҡылынып, президиумда ултырғандарҙың (КПСС өлкә комитеты секретаре Т.И. Ахунйәнов, әҙәбиәтебеҙҙең тере классигы Мостай Кәрим дә бар), ҡобаралары осоп, түрәләр бүлмәһенә ашығыс йүнәлеүҙәренән үк, ҡыйыш атып та тура тейҙереүемде, үҙем өсөн һөҙөмтәләре һис тә яҡшы булмаясағын шәйләнем. Йыйылыштың төп докладсыһы, партия ойошмабыҙҙың бюро секретаре Фәрит ағай Иҫәнғолов эргәмдән йөҙө томһорайып үтеп китте. Мин трибунанан төшөү менән үк, залдағы ҡәләмдәштәр, миңә тап булмаҫ өсөндәр инде, ташҡа бәрелгән терегөмөштәрҙәй, юлымдан сәсрәнеләр; әммә кеше күрмәгәндә килеп ҡулымды ҡыҫыусылар ҙа булды... Елкәм сымырҙап тойҙом: “һалҡын һуғыш” һулышы... Шомло тынсыу мөхиттән арынмаҡҡа, елтерәп ишек алдына сыҡтым, унда ҡорҙашым Рәми Ғарипов, ғәҙәтенсә, ҡуйы төтөн араһында тәмәке борлатып тора ине. Күҙендә йылылыҡ тойолмай: «Бынамын тигән памфлет бит был!» — тине лә ашығып китеп барҙы. «Совет Башҡортостаны» гәзитендә әҙәбиәт бүлеге мөдире булып эшләһә лә, ул да, башҡалар кеүек үк, ошо памфлетты ташҡа баҫып сығарырға тип, күңел өсөн генә булһа ла, ауыҙын да асманы — ҡулъяҙмала көйөнсә ҡалды ятып... Ишек алдында яңғыҙлыҡта бер аҙ тумбығып торғас, сығышымдың шомло һөҙөмтәләрен уйлай-уйлай, яй ғына атлап ҡайтып киттем, алда нимәләр көткәнен һәм кем тарафынан көтөлгәнен яҡынса һиҙенә инем...

Редакциялағы реакциялар

Сүп өҫтөнә сүмәлә, тигәндәй, башҡорт әҙәби теле тураһындағы был «крамолалы» сығышымдан һуң дүрт ай үтер-үтмәҫтән, үҙ башыма үҙем теләп тағы ла бәлә алдым — «Ағиҙел»дең 6-нсы һанында Назар Нәжмиҙең яңы поэмаһына һәм «Ҡарҙар яуа» исемле шиғри йыйынтығына бағышланған «Бөйөк туғанлыҡ тураһында йыр» тигән ҙур ғына күләмле (бер табаҡлыҡ) мәҡәләм донъя күрҙе лә үҙемде яңы ҡойон эсендә ҡалдырҙы. Эш шунда: икеһе лә сағыу талантлы фронтовик шағирҙарыбыҙ Назар Нәжми һәм Мостай Кәрим араһында, бер ҡаҙанға ике тәкә башы һыймай, тигәндәй, башҡорт шиғриәтендәге лидерлыҡ өсөн йәшерен көрәш барғаны, был аҫтыртын алышта тәүгеһе япа-яңғыҙы ҡалып, республика түрәләренә ныҡ яраҡлашҡан икенсеһе иһә үҙенең буйтлы сәйәси суҡмарын ышаныслы нөгәрҙәре — журналдың даими редколлегия ағзалары Муса Ғәли, Ғилемдар Рамазанов, Ғайса Хөсәйенов, Рафаэль Сафиндар ҡулы менән «ҡундырыуы», шул арҡала Назар Нәжми ижадына «Ағиҙел»дә һәр төрлө кәртәләр ҡоролоуы редакцияла эшләгәндәрҙең береһенә лә сер түгел ине. Был хәрәкәт баш редактор Мирзаһитовты алмаштырған йәштәшем Рәйес Низамов заманында ла һүрелмәй

дауамланды, шуны дәлилләүсе итеп ошо урында Назар Нәжмиҙең редакцияға атҡарған бер нисә дана рәсми хатын килтерәм (бер ҡайҙа ла ташҡа баҫылмағандар):

1. ***«Агиҙел» журналының редакторы иптәш Рәйес Низамовҡа.***

Уҙган йылдың декабрь урталарында, тейешле сотрудниктарығыҙҙың урынында булмауы гына сәбәпле, «Һәр нәмәлә шигыр ята» тигән циклымды [шәхсән] үҙегеҙгә тапшыргайным. Шул көндән һуң биш ай вакыт үтеп бара.

Март урталарында журналдың шигриәт бүлеген алып барган һеҙҙең сотрудник иптәш Абдулхаҡ Игебаев менән шигырҙар тураһында һөйләшеү булды. Һөйләшеү ваҡытында иптәш Игебаев: «Шигырҙар минән үттеләр, ләкин редколлегияла шундай фекерҙәр булды», — тип, шигырҙарым тураһында замечаниеларын әйтте.

Был һөйләшеүҙәргә тиклем Мостай Кәрим дә, редколлегия агзаһы буларак, журналдың һорауы буйынса укып сыккан икән. Ул кайһы бер һүҙҙәрҙе алмаштырганын һәм «Ҡайҙа барырга?» тигән шигырга бер-ике позитив строфа өҫтәү теләген белдерҙе. Уның теләге тураһында мин уйланым һәм ундай теләктең шигырга сит тән (ятбауыр) булып инәсәген Мостай Кәримгә иҫбат иттем.

А. Игебаев иптәш менән һөйләшкән саҡта ла уның шигырга булган ҡайһы бер замечаниелары ышандыра алманы. Шулай булгас, мин: «Шигырҙар, үҙегеҙҙең әйтеүегеҙгә карағанда, һеҙҙән үткән икән, редколлегияның фекере тураһында башкалар, һуңгы һүҙҙе әйтә торган кешеләр, һөйләшһен», — тинем. Шунан һуң Абдулхаҡ Игебаев өс тапҡыр өйгә шылтыратҡан (игтибары өсөн уга ҙур рәхмәт) һәм: «Шигырҙар тураһында һөйләшергә ине», — тигән. Тимәк, мин тагы Игебаев менән һөйләшергә тейеш булам дабаһа.

Шигырҙарҙы, гөмүмән, әҙәби әҫәрҙәрҙе, төп ике осраҡта: 1) ул әҙәби әҫәр булыуҙан алыҫ торһа; 2) үҙенең идея сатаҡлыҡтары арҡаһында беҙҙең ысынбарлыҡ өсөн зарарлы булһа, баҫырга мөмкин түгел.

Ул журналда мин дә эшләп киткән кеше. Бынан 24 йыл элек һеҙ ҙә, Игебаев та тәүге әҫәрҙәрегеҙҙе килтерә инегеҙ. Шул әҫәрҙәрҙе, бик йомшаҡ һәм өйрәнсек булыуҙары арҡаһында, бик оҙаҡҡа һуҙмайынса, яңынан эшләп, баҫып сыгарыу хәленә килтерергә тура килә ине. Журнал эшендә ундай хәлдәр йыш осрай. 24 йыл эсендә һеҙ ҙә, берегеҙ яҙыусы, берегеҙ шагир булып, кешеләргә ярҙам итерлек, шул иҫәптән минең шигырҙарҙы ла баҫып сыгарырлыҡ хәлгә килтерерлек кимәлгә күтәрелгәнһегеҙҙер, тип уйлайым.

Әгәр ҙә биш ай буйы уларҙы бер ни ҙә эшләтә алмаһагыҙ (редакция шигырҙар менән бик тулмагандыр, минең шигырҙарҙы ла ҡарап сыгырга ваҡытыгыҙ булгандыр, тип уйлайым), шул «бер ни ҙә эшләтә алмауыгыҙ»ҙың сәбәптәрен хат аша (телефон аша йәки өҫтәл янында һөйләшеүҙе кәрәк тапмайым) яҙып ебәреүегеҙҙе, зинһар, түбәнселек итеп һанамагыҙ.

Сәләм менән: ***Назар Нәжми.*** *8 апрель 1974 йыл.*

Күп тапҡырҙар «атылған ҡарт бүре» төп сәбәптең ниҙән һәм шәхсән кемдән торғанлығын белә, әлбиттә, тик шуны редакция хеҙмәткәрҙәренән рәсми рәүештә атап әйттертергә теләй. Әммә... суҡмарсының исем-шәрифен асып һалырға уларҙың да башы ике түгел бит...

2. ***«Агиҙел» журналы редакторы иптәш Р. Низамовҡа.***

Рәйес ҡустым!

Уҙған йылдың декабрь айында уҡ һеҙгә бирелгән шиғырҙарымдың ни өсөн баҫылмауҙары тураһында һорап, ошо йылдың апрель башында яҙған минең хатыма быға тиклем бер ауыҙ һүҙ ҙә яҙмауығыҙҙы бер нисек тә аңлатып булмай.

Минең һеҙгә хат яҙғаныма тиклем үк, шиғырҙарым редколлегияла ике тапҡыр тикшерелгән икән дә шунан һуң да, кем тура килә шунан шиғырҙар тураһында фекер һорап, үҙегеҙҙең шикләнеүҙәрегеҙҙе белдергәнһегеҙ икән. Һеҙҙең әҙип һәм кеше булараҡ, шулай уҡ редактор булараҡ та иң башта үҙ фекерегеҙ, үҙ инаныуығыҙ булырға тейеш түгелме һуң? Унан һуң алты ай буйына шул тиклем шикләнеп ҡарарға, мин башҡорт поэзияһының шундай намыҫын юғалтҡан шағирына, уның бер ҡараҫҡыһына әйләндемме ни? Был ҡыланышығыҙ мине бик ныҡ йәберләне. Артабан да йәберләнеүҙәрҙән үҙ-үҙемде яҡлап алып ҡалыу өсөн берҙән-бер сарам ҡалды — шиғырҙарымды кире алырға мәжбүрмен.

Назар Нәжми. *7.06.1974.*

3. ***«Ағиҙел» журналы редакторы иптәш Р. Низамовҡа.***

Рәйес ҡустым!

Мин һеҙгә икенсе хат яҙып (7.06.1974), шиғырҙарымды редакциянан кире алыуым тураһында хәбәр иткәйнем һәм һеҙҙең ул хатты уҡығанығыҙҙы беләм. Мин ысынлап та шиғырҙарымды кире алдым, ләкин, ни эшләптер, уларҙы (ниндәйҙер экземпляры ҡалғандыр, ахыры) 28 июнь көндө редакцияла тағы тикшергәнһегеҙ һәм «Ҡайҙа барырға?», «Имән» тигән шиғырҙарҙы шәлкемдән алып ташлап, 10-ынсы номерға баҫырға хәл иткәнһегеҙ икән.

Шәлкемде һеҙҙең журналда баҫтырыуҙан ошо хатым менән, официаль рәүештә, баш тартам һәм, авторлыҡ хоҡуғымдан файҙаланып, улар менән минән башҡа шундай мөғәләмә итеүҙе тыям.

Ишетеүемсә, минең беренсе хатыма яуап яҙырға ла (Мостай тәҡдиме буйынса) булғанһығыҙ икән, ләкин бынан һуң инде ул хаттың да әһәмиәте-хаҡы тишекле бер тин икәнлеге үҙенән-үҙе асыҡ.

Һеҙ редакторлаған осорҙа журналда башҡаса художество әҫәрҙәре тәҡдим итмәҫкә вәғәҙә бирәм һәм шул уҡ ваҡытта быйылғы йылда ике генә үтенесемде үтәүегеҙҙе һорайым: апрель айында журналға «Кем уйлаған?» тигән автобиографик уйланыуҙарымды һәм уҙған ай башында яҡут шағиры Михаил Тимофеев шиғырҙарының тәржемәләрен тәҡдим иткәйнем. Беренсеһе журналдың яртылаш тәҡдиме менән эшләнгән эш һәм эстәлеге менән минең өсөн (бәлки, минең өсөн генә лә түгелдер) бик мөҡәддәс әйберҙәр тураһында яҙылғанға һәм, башҡорт шағиры булараҡ, фәҡәт үҙебеҙҙә генә баҫтырырға мөмкин булғанға күрә, ҡарап сыҡһағыҙ, баҫырға мөмкин тигән хәлдә оҡшамаған урындары булһа (уның бер-ике урында булыуы бик мөмкин), редколлегия ултырышына саҡырһағыҙ ине.

Икенсеһе тураһында, А. Игебаев менән һөйләшкәндән һуң, «Ағиҙел»дә баҫыласаҡ, тигән хәбәрҙе авторына ебәреп, фотоһүрәтен дә һоратҡайным. Уны кире ҡағыу минең өсөн түгел, ә автор өсөн күңелһеҙ булыр, тип уйлайым.

Назар Нәжми. *1 июль 1974 йыл.*

Әммә-ләкин ул заманда, ҡайһындай ғына талантлы һәм исемле әҙип булһаң да, елгә ҡаршы төкөрөп йәки маңлай менән таш ярып булмай ине шул: шағирыбыҙ ҙа билдәле бер төптән эш ҡылыусы редколлегия ағзаларының ҡаршылығын улар ҡуйған талаптарҙың бер килкеһен ҡабул ҡылыу юлы менән ашатлап үтергә тырыша:

4. *Рәйес ҡусты!*

Бына сәғәт ярымдан яңы йыл башлана, ә мин һиңә ошо хатты яҙып ултырам. Редколлегия ағзалары яҙған фекерҙәр менән бергә кире ҡайтарылған ҡулъяҙмамды бөгөн алдым. Уны Яңы йыл алдынан, байрам алдынан юрый ебәргәндәй, ебәрмәһәгеҙ һәйбәтерәк булыр ине лә; ләкин мин, барыбер, байрам итмәй, ауырып постелдә ята инем. Шул килеш бөтәһен дә ентекләп бер нисә тапҡыр уҡып (шул иҫәптән ҡулъяҙмамды ла) сыҡтым.

Минең уйымса, редколлегия ағзалары яҡшы ниәттән сығып, бик диҡҡәт менән уҡығандар, күптәренең фекерҙәре үҙемдең икеләнеүҙәрем һәм шикләнеүҙәремә тура килә. Уны яҙғанға бер айҙан теүәл бер йыл тула һәм ул ваҡыттағы минең йәнемдең ниндәй хәлдә булыуын бик иғтибар менән уҡыусы кеше аңларға ла мөмкин ине (редколлегия ағзаларын әйтәм). Бына хәҙер йөрәк әҙерәк урынына ултырғас, әле редколлегия ағзалары күҙенә салынмаған сатаҡлыҡтар ярылып ята. Мин, әлбиттә, ҡарап сығасаҡмын.

Шул ғына күңелдә төйөр ҡалдырҙы: минең алда ғына түгел, хатта башлап яҙыусылар араһында ла ижади авторитеты булмаған Ғ. Рамазановтан (һинең өсөн, бәлки, авторитеттыр) уҡытмаҫҡа ла мөмкин ине. Үҙегеҙ ҙә күргәнһегеҙҙер, ул үтә асыулы (раздраженный), фекерҙәрен һис төрлө лә нормаль тип иҫәпләп булмай. Ни эшләйһең инде — һәр кемдең үҙ фажиғәһе булмайынса булмай. Уның фамилияһын индереү (ифрат хәҡиҡәт булһа ла) минең тарафтан йомшаҡлыҡ булғандыр. Мин уны (шул урынды) бер кем әйтмәгәндә лә алып ташлар инем.

Иң оҙон яҙғаны һәм фәлсәфә һатҡаны — М. Ғәли. Уның ҡайһы бер фекерҙәренә ҡолаҡ һаласаҡмын. Ләкин миңә ни эшләргә? Минең шәхесемде йәберләүгә (оскорбление) тиклем барып еткән урындар һәм фекерҙәр хаҡында ҡайҙа һөйләшергә? Уны редколлегия рамкаһында хәл итеп буламы? Шул турала, бәлки, яҙып та ебәрерһегеҙ? Үтенесем шул.

Шул тиклем оҙаҡҡа һуҙғанығыҙ өсөн үпкәм бик ҙур. Уны бынан биш-алты ай элек тә ҡайтарып була ине бит.

Сәләм менән: ***Назар Нәжми.*** *31.12.1974.*

Күренекле шағирыбыҙҙың сағыу ижадына ҡарата бына ошондай яһалма тотҡарлыҡтар, рәнйетеүҙәр булғанда, башҡаларға ниндәй һан инде!.. Шуларҙы күрә-йөрөй тороп, үҙ намыҫым ҡушыуынса, шағир яҡлы булмайынса ҡала алманым ләкин һәм, әйтеп үтеүемсә, «Ағиҙел»дә, ҙур ҡыйынлыҡтар менән булһа ла, баяғы ҙур мәҡәләмде сығарыуға өлгәштем. Шуның ҡыуанысынан алйып йөрөп, тигәндәй, уны-быны белештермәй йәмле йәйҙе лә үткәргәс, көтмәгәндә, көҙгө болотһоҙ бер көндә баш осомда тертләтеп күк күкрәне: КПСС-тың өлкә комитеты секретаре Т.И. Ахунйәновҡа минең өҫтән ғәрәсәтле ялыу яҙған бер бәндә. Етәкселәребеҙҙе (Мирзаһитов, Низамов, Ибраһимов) Т.И. Ахунйәнов бүлмәһенә дәррәү саҡыртып алып, «ниндәйҙер Йыһат Солтановтың ылғый милләтсел рухлы һәм эстәлеге үтә шикле мәҡәләһен» ташҡа баҫып сығарғандары өсөн бик нык «бешкәндәр». Өлкә комитетына был мәкерле ялыуҙы, йәштәшем Рәйес Низамовтың миңә сер итеп кенә тишеүенсә, «күренекле шағир, ғалим, журналдың редколлегия ағзаһы Ғилемдар Рамазанов яҙған»; сәйәси ғәйепләүенән тыш, ул хатта минең мәҡәләләләге бер нисә тапҡыр ҡабатланмыш *«асыл»* (сущность) һүҙенә лә, уның артында урындағы юғары хакимиәткә ҡаршы йәшерен мәғәнә һалыныуын тойоп, бик ҡаты бәйләнгән икән. Мәсьәләнең сәйәси яғы әһелдәргә асыҡ булғанғалыр инде, үҙемде тик бер йүнәлеш буйынса — баяғы серле һәм сетерекле һүҙ «асыл»дың «крамола» асылын асырға саҡырттылар, буғай: быны минән өгөт-нәсихәт бүлеге инструкторы Биктимеров иптәш бик оҙаҡ һәм бик ныҡлап ныҡып төпсөндө. Быға яуап итеп әҙәби тел нормалары тураһында «Правда» гәзитенең 1972 йыл 9 октябрь һанындағы

«Любить, беречь, знать» тигән мәҡәләһен күрһәткәс (һүҙҙең ни хаҡта барырын киҫәткәйне бер иптәш) һәм: «Әгәр авторҙың идея позицияһы дөрөҫ булһа, айырым һүҙҙәренә бәйләнеү — наҙанлыҡ йә ахмаҡлыҡ билдәһе ул», — тип нәҡ «Правда»лағыса баҫымлыҡлап аңлатҡас, йөҙө ҡапыл бурҙатланған түрәм гәзитте тотоп та ҡараманы, ләкин: «Нимә тора ул «асыл» тигән һүҙеңдең аслан артында?» — тип үҙ сиратында ныҡыны. «Тыуған илеңде, туған халҡыңды, туған телеңде һөйөү — йәғни ысын совет патриотизмы», — тигәс, өндәшмәй, китергә мөмкинлекте белдереп ҡул һелтәне.

Шуның менән осланды, тип еңел һулап йөрөүем бушҡа булды, сөнки үҙем баш баҫып эшләгән «Ағиҙел»ебеҙҙең киләһе 1973 йыл 1-енсе һанында уҡ баш редакторыбыҙ Әсғәт Мирзаһитовтың Йыһат Солтановҡа туранан-тура ҡағылышлы баш мәҡәләһе баҫылып сыҡты. КПСС Үҙәк Комитетының «Әҙәби-сәнғәт тәнҡите тураһында»ғы ҡарарына өлгөр яуап итеп, *«журнал биттәрендә тәнҡит материалдарына киңерәк урын бирелә башланы, — тип әйтелгәйне унда. — Ләкин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әҙәби тәнҡиттең идея-теоретик сифатын күтәреү әлегә хәл ителеп бөтмәгән мәсьәлә булып тора.* ***Фәнни йәһәттән бәхәсле, социаль-синфи характеристикаһы төҫһөҙ һәм буталсыҡ мәҡәләләрҙең (Йыһат Солтанов. «Бөйөк туғанлыҡ тураһында йыр».*** *«Агиҙел» журналы, 1972 йыл, 6-нсы һан)* ***баҫылып сығыу факты шуның менән аңлатыла»***. *Ләхәүлә!.. -- ләкин күҫәгенең* еле быны менән генә лә осланманы —Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының сектор мөдире, партия өлкә комитетының элекке әүҙем хеҙмәткәре Нур Зариповҡа әҙәби тәнҡитебеҙҙең бөгөнгө торошон, уңыштарын һәм етешһеҙлектәрен асыҡ билдәләп, баяғы Йыһат Солтановтың тәнҡиттәге зарарлы ҡылығын сәйәси һәм ғилми яҡтан нигеҙләп фашлау, зарарһыҙландырыу бурысы рәсми органдар тарафынан махсус йөкмәтелгән икән -- ашығыс рәүештә нәшер ителгән ҙур күләмле мәҡәләһенең өстән бер өлөшө фәҡәт шул бурысты үтәүгә сарыф ителеү ҙә асыҡ һөйләйҙер быны...

Заманаһының әҙәбиәтебеҙгә тоталитар режим идеологияһы һулышын өрөүсе өлгөлө бер әҙәби-сәйәси ҡомарҡыһы булараҡ, шул бер өлөшөн килтереп үтеү фарыздыр.

«Әҙәби тәнҡиттә иң алама күренеш, — тип билдәләй ғалимыбыҙ, *— тәнҡитсенең субъектив бер яҡлылылығы, әҙәби әҫәрҙе баһалауҙа ниндәйҙер тар ҡараштан сығып ҡына эш итеүе. Ошоноң гәҙәттән тыш бер миҫалын мин былтыр «Агиҙел» журналының 6-нсы һанында баҫылган Йыһат Солтановтың «Бөйөк туғанлыҡ тураһында йыр» тигән мәҡәләһендә күрәм. Был мәҡәлә... үҙенең предметына ла, сәнғәт закондарына ла, яңы талаптарга ла битараф түгел түгелен. Асылда Назар Нәжмиҙең «Дуҫ тураһында ун бер йыр» тигән лирик поэмаһына ҡарата яҙылһа ла, уның төп объекты ошо бер әҫәргә генә лә ҡайтып ҡалмай. Солтанов, Н. Нәжмиҙең «Ҡарҙар яуа» тигән китабына таянып, шагирҙың үҙенсәлекле поэтик таланты хаҡында уйлана.*

Мәҡәлә бер поэтик асыш менән башлана, шуның менән уҡыусының күңелен баштан уҡ үҙенә ылыҡтыра. «Ҡурайсылар иле» Йәнсура районында шигыр байрамында булган бер хәлде яҙа автор. Байрамга килгән шагирҙар иртән йоҡонан уяныуга хужа «бер ҡосаҡ һуйҙан ҡурай» күтәреп инә. Инә лә бәйләмдән көпшәләрҙе берәм-берәм алып тарта башлай. Бер үк көйҙөң төрлө көпшәнән төрлөсә сығыуын ишетеп, тыңлаусылар хайран ҡала. «Бер үк сагыл башында үҫкән бер үк оҙонлоҡтагы таҡыябаш ҡурайҙарҙың һәр ҡайһыһының тик үҙенә генә тартым сихри моңо бар ине. Бәйләмдәге ахыргы ҡурай барыбыҙҙы ла әсир итте, уйга ҡалдырҙы», — ти автор.

Тап ана шул һуңгы ҡурай һүҙ барасаҡ шагир ижадына аһәңдәш йәнәшәлек — ассоциатив образ итеп алына, тәнҡитсенең шигриәт донъяһына юл башы булып тора.

Һүҙ юҡ, уңышлы башлам. Ысынлап та Назар Нәжмиҙең башҡаларҙа ҡабатланмаҫ үҙ тауышы, үҙ моңо бар. Мәҡәләнең маҡсаты — ана шул үҙенсәлекле поэтик тауыштың төп мәғәнәһен, идея-эстетик айышын, авторса әйткәндә, **асылын** *табыу, шуны уҡыусыларға еткереү. Күренеп тора, маҡсат һис шикһеҙ изгелекле.*

Ләкин тәнҡитсе, үҙе лә нескә күңелле шағир булғанға микән, баштан уҡ хистәргә бирелеп, оло шағирҙың бай ижадына бары теге нәҙек ҡурай көпшәһенән ҡарарға тотона. Назар әҫәрҙәрендәге унһыҙ ҙа нескә ҡылдарҙы тәнҡитсе шул саҡлы нескәртеп ебәрә, улар инде, үтә нык тартыуҙан шартлап өҙөлөр сиккә етеп, йөрәк әрнеткес гел бер төрлө моң-зар, ысынлап та нәҙек ҡурайҙан сыҡҡан әсе тауыш һымаҡ яңғырай башлайҙар. Һөҙөмтәлә күп ҡырлы, күп ҡыллы Назар Нәжми поэзияһының асылы башлыса бер нотаға — шағир күңеленең ниндәй сәбәптәндер үтә нескәргән бер мәлен, ҡаршылыҡлы кисерештәрен сағылдырған «Ҡарҙар яуа» шиғырына ҡайтарып ҡалдырыла. Шуныһы ғәжәп, был шиғырҙа асылған моңло япраҡтарҙың «күҙгә күренер бөрөһө булып йомарлана башлауын» мәҡәлә авторы шағирҙың «Ике һыбай» тигән шиғырында күрә. «Шағир зиһенен ике тарихи шәхестең (йәғни Петр I менән Салауат Юлаевтың. — Н.З.) халыҡ аңындағы һәм бронзалағы монументаль бөйөклөгө арбап билә, уны яңы асышҡа әйҙәй, — ти тәнҡитсе һәм, шиғырҙан өҙөк килтергәндән һуң, шулай дауам итә: — *Беҙҙең алда үҙенең арҙаҡлыһын, йән әсеһен быуаттарҙың рәхимһеҙ елдәре аша именлек фатихаһы һыбайлатып алға сығарыр ике көстөң, ике титандың барлығы бермә-бер беленде — бөрө йомарланды...»*

Цитатаны өҙөп, фекерҙе асыҡлап үтәйек. Тәнҡитсенең әйтергә теләгәне — шағир ижадында «йомарланған бөрө» — донъяла ике көс, ике титандың йәшәүе. Уларҙың береһе батша булһа, икенсеһе — халыҡ иркен яулап, батшаларға ҡаршы барыр Салауат ише батырҙар. Ярайһы, мәғәнәле фекер. Ләкин тәнҡитсе туҡталып ҡалмай, әҫәргә бәйләнеше булмаған, тәтәй һүҙҙәргә төрөп өс һорау ҡуя. Береһендә постаментҡа баҫтырылған ҡайһы һыбайлы — Петр I-енсеме, әллә Салауатмы — «киләсәклерәк» булыуын, икенсеһендә ҡайһы титан киләсәк өсөн «түтә юлдарын түшәп, киң офоҡ ҡапҡаларын» асып ҡалдырыуын, өсөнсөһөндә «бәндәләрҙең хакимдары — тере батшалар үҙҙәре изге фатиха биреп баҡыр атҡа атландырған, баҡыр көптә мәңгеләштерелгән «батшаларҙан да юғары» ҡалҡыныуҙың мәғәнәһе, һуңғы **Асылы** *нимәлә» булыуын һорай. (Солтанов «асыл» һүҙен һәр урында баш хәреф менән яҙа).*

Мәҡәлә авторы был һорауҙарға яуап биреүҙе кәрәкле һанамай, әммә уның тел төбөн аңлауы ҡыйын түгел. Беренсе һәм икенсе һорауҙарында автор, әлбиттә, ***Салауатты Петр Беренсенән өҫтөн ҡуймаҡсы****. Ләкин мәсьәләгә тарихи күҙлектән ҡарайбыҙ икән, бер-береһенә нисбәттәш булмаған Петр менән Салауатты сағыштырыу, төрлө дәүерҙә йәшәп, төрлө яҫылыҡта дан ҡаҙанған был тарихи шәхестәрҙе бер-береһенә ҡаршы ҡуйыу — үҙе үк ҙур хата, уларҙың һәр ҡайһыһының үҙенә башҡа ҙур тарихи хеҙмәттәре булғанлығын танымау тигән һүҙ. Был инде тарихҡа* **марксистик фәнни методологиянан** *түгел, ә әлеге-баяғы* ***таҡыябаш ҡурай*** *көпшәһе аша ҡарау бәләһе генә.*

Өсөнсө һорауҙың айышын мәҡәләләге бирелеш формаһында тиҙ генә аңларлыҡ түгел. Һүҙ бында, әлбиттә, шул уҡ Салауат батыр тураһында бара. Ләкин тәнҡитсе уның үҙ ваҡытында башҡарған эштәренең тарихи мәғәнәһен түгел (уныһы инде һәр кемгә билдәле), ә уның «һуңғы асылын», йәғни, шиғырҙа әйтелгәнсә, «Иҙел ярында батшаларҙан да юғары» баҫҡан һыбайлының мәғәнәһен һорай. Әлбиттә, беҙ, Салауат һәйкәленә шиғырҙа бирелгән поэтик характеристиканан ситкә тайпылмайынса, был мөһәбәт һәйкәлдең мәғәнәһен, халыҡтың азатлыҡ юлында ҡорбан булған ҡаһарман улдарына бөгөнгө хөрмәте, тәрән ихтирамы, уларҙың ил ҡаршыһындағы батырлыҡтарын мәңгеләштерергә теләүе ул, тип кенә аңлатыр инек. Ләкин тәнҡитсе башҡасараҡ яуап көтә кеүек. Уйын метафораларға төрөп, ул дауам итә: «Шағир бына ни хаҡта өҙәләнә. Тынғы белмәҫ йырсы йөрәгенең иң түренә инеп йомолған бөрө, асылыу

сәбәптәрен кисереп, йән яргыс елдәр һорай. Ҡай саҡ шагирга был бөрө елдәре мәңге иҫмәҫ, япраҡ ярылмаҫ, яҙҙы көтмәйенсә үк зәһәр ҡыш биләп алыр төҫлө тойола».

Был зәһәр юлдарҙы уҡыгас, авторҙан һорамайынса һис булмай: Шагирҙы шул саҡлы «өҙәләндергән» нимә һуң ул? Ниңә ул бөрөләрҙең асылыуы өсөн, шул ҡәҙәр «йән яргыс елдәр» кәрәк, ниндәй елдәр улар?

Әлбиттә, тәнҡитсе быларҙы асыҡлап тормай, әйткән фекерҙәрен артабан шагирҙың «Ҡарҙар яуа» шигыры менән раҫларга тырыша. Ләкин «Ҡарҙар яуа» тәнҡитсе уйҙарын һис кенә лә раҫламай. Әйтеп үткәнебеҙсә, был әҫәр шагир күңеленең бер моңһоу мәлен, асыгыраҡ әйткәндә, гүмер уҙыуга бәйле булган эске кисерештәрен генә сагылдыра:

О, миндә лә ҡарҙар яуа,
Яуа ҡарҙар — йылдар ҡары.
Ғүмер тигән урманымда
Ҡойола агас япраҡтары.

Бындай кисерештәр — һәр кемдә була торган тәбиги кисерештәр. Әммә Солтанов был хаҡта уйланып тормай, Нәжми ижадына иҫ китерлек операция яһай. Үҙ күңелендә тыуган «Асыл»га яраҡлаштырып, шагирҙың төрлө шигырҙарынан айырым строфаларын йолҡоп ала ла яңы композиция төҙөй: «Ҡарҙар яуа» шигырына — «Ниндәй хәл был?..» тип башланган шигырынан беренсе строфаһын:

Ниндәй хәл был?
О көндән-көн
Ҡайгы баҫа мине,
Тиҫкәре яҡтан иҫәме
Әллә заман еле?..

һәм уныһына «Мин дә ҡалам...» тигән шигырының урта еренән:

Моңһоҙ ҡоштар! Һеҙҙең менән бергә
Мин дә ҡалам — китер ерем юҡ.
Минең дә бар осор ҡанаттарым,
Ләкин ташлап китер ерем юҡ.

Булмаһын да! Ә бит ер ни күрһә,
Беҙгә яҙган шуны күрергә.
Беҙгә яҙган ошо ерҙә тыуып,
Ошо ерҙә йәшәп үлергә, —

тигән ике строфаһын килтереп ялгай. Ялгай ҙа (ана шулай! тигәндәй) «йөрәк йыртып өндәшергә мәжбүр шагир», тип ҡуя. Һәм, ниһәйәт, композиция тәнҡитсенең шундай нарыгы менән ослана: «Ул (йәгни Н. Нәжми. — Н.З.) эсендә нимә бар — шуны һөйләй, йөрәген һыҙлатҡан хистәрҙе зирәк уҡыусы менән уртаҡлаша. Һәм уҡыусы уны аңлай».

Юҡ, аңламай һәм аңларлыҡ та түгел был. Сөнки Солтанов композицияһында беҙҙең бай рухлы хөрмәтле шагирыбыҙ үҙенең күп ҡырлы поэтик һынында түгел, ә, салыш көҙгөләге һымаҡ, гәҙәттән тыш салшайтылган ҡиәфәттә, хәҙерге тормоштан йәм тапмайынса төңөлгән, төшөнкөлөккә бирелгән пессимист шагир ҡиәфәтендә күҙ алдына баҫтырыла. Юҡ, юҡ, Назар Нәжми — «Ҡапҡалар», «Йыр тураһында баллада», «Байраҡ менән һөйләшеү», «Дуҫ тураһында ун бер йыр» һәм «Күлдәк» кеүек мәшһүр поэмаларҙың, меңәрләгән уҡыусыларҙың күңел түрендә урын алган тәрән йөкмәткеле нәфис шигырҙарҙың авторы ундай түгел! Республикабыҙҙың иң югары бүләге Салауат премияһы менән бүләкләнгән «Ҡарҙар яуа» китабында ла беҙ, Солтанов уйлаганса, «тынгы белмәҫ йырсы йөрәгенең иң түренә инеп

йомолган» бөрөләрҙең, «асылыу сәбәптәрен кисереп, йән яргыс елдәр» көтөүен дә, шагирҙың үҙ укыусыларына «йөрәк йыртып» өндәшеүен дә, «йөрәген һыҙлатҡан» хистәрҙе лә күрмәйбеҙ. Әгәр һарыҡ түшкәһен балта менән тураҡлаган һымаҡ, поэтик контексты ла ваҡлап, өҙөп-йолҡоп алмаһаң, ундай гәҙәттән тыш әсе тауыш Солтанов композицияһына ингән шигырҙарҙа ла һис һиҙелмәй. Ул шигырҙарҙың мәгәнәһен тәнҡитсенең прозаик теленә күсереп бер һүҙ йәки хатта шигырҙың үҙенең теге йәки был строфаһы менән генә лә әйтеп еткереп булмай. Уларҙың тәрән поэтик мәгәнәһен, нәфислеген тоташлай алганда гына тойорга һәм дөрөҫ аңларга мөмкин.

Солтанов мәкәләһендә Н. Нәжми ижадының партиялылыгын «аңлатыуы» шулай уҡ гәҙәттән тыш субъектив характерҙа.

«Назар Нәжми поэзияһына ла бына ошо «бер бөтөн»лөк, икенсе һүҙ менән әйткәндә, баштан-аяҡ партиялылыҡ тойгоһо хас, — ти тәнҡитсе һәм дауам итә. — Ләкин ул үҙенең партиялы поэзияһын, лирик шагир булараҡ, бүтәндәрҙекенә оҡшамаганыраҡ, шөйлә нескәрәк һәм нәзәкәтлерәк үҙ ҡурайы менән раҫлай. Ысын затлы ҡурай моңон яндан көйәҫләп иҫкән елдәр түгел, ә көпшәнең урта-үҙәген буйлатып өргән тыуган ерҙең утлы һулышы үҙе тарта үҙәкте өҙгөс итеп».

Күрегеҙсе, ҡурай моңона бәйләп, йәнә күпме метафора, ни саҡлы кинәйәле образдар: «яндан көйәҫләп иҫкән елдәр» һәм шул елдәргә ҡаршы — «тыуган ерҙең утлы һулышы»! Нисек аңларга инде уларҙы?

Үҙ ижадындагы изге һәм шул уҡ ваҡытта бөтә ысын совет шагирҙарыныҡынан принципиаль айырылмаган партиялылыҡ тойгоһон шул ҡәҙәр «нәзәкәтләндереүгә» Н. Нәжми нисек ҡарай торгандыр, уныһы беҙгә мәглүм түгел. Әммә бында бөтә ҡатгилыгында шуны әйтмәй сара юҡ: партиялылыҡ — яҙыусыларга гына түгел, ә бөтә совет халҡына, үҙенең граждамлыҡ бурысын, социаль яуаплылыгын тәрән аңлаган һәр совет кешеһенә ***уртаҡ*** *тойго, коммунизм идеалдарына тогро хеҙмәт итеү теләге. Шуга күрә, инде ярты быуаттан ашыу ең һыҙганып, бөтә Рәсәй халҡы менән бер төптән, бөгөн коммунизмдың нигеҙ таштарын һалыусы башҡорттарҙың ҡайнар һулышын прогрессив кешелектең яҡты идеалдарына ыңгай иҫеүсе заман елдәренә ҡаршы ҡуйыу — төптө хата.*

Килтерелгән факттарҙың мәкәләләге бирелешендә эҙлекле рәүештә үҫтерелә килгән тыгыҙ бәйләнеш һиҙелеп торһа ла, мин уларҙы, әлбиттә, авторҙың нимәгәлер иҫәп тотоп, алдан уйланган ниндәйҙер идеологик концепцияһы тип һанарга теләмәйем. Улар — һәйбәт шагир, әммә әҙәби тәнҡит өлкәһендә тәжрибәһе етешмәгән Солтановтың артыҡ хистәргә бирелеп эш итеүе, ҡатмарлы мәсьәләләргә үтә бер яҡлы, тар ҡарашы арҡаһында килеп сыҡҡан аймылышыуҙыр тип кенә уйлайым.

Мәкәләгә шул саҡлы ентекләп туҡталганбыҙ икән, был, беренсенән, бер Солтановты гына түгел, ә башҡа таланттарҙы ла артабан хата юлга төшөп китеүҙән һаҡлау, иптәштәрсә ихлас күңелдән иҫкәртеү өсөн кәрәк булһа, икенсенән, беҙҙең редакцияларҙа авторҙар менән эштең әлегәсә тейешле югарылыҡҡа ҡуйылмауын, принципиаль талапсанлыҡ етешмәүен күрһәтеү өсөн эшләнде».

Был «иптәштәрсә» киҫәтеүҙең мәгәнәһен тылҡып тороуҙың кәрәге юҡтыр, моғайын...

Шуныһы серле һәм ҡыҙыҡ: ошо оло тәнҡиткә осрамыш мәҡәләмдән күпкә һуңыраҡ — йәғни йыл аҙағындараҡ, дуҫым Рәми Ғарипов та минең «тайғаҡ юл»ға баҫты ла ҡуйҙы — баяғы Н. Зарипов ҡамсылауына эләккән минең Салауат һәм Петр I һәйкәлдәрен «сағыштырыуым» менән бер үк аһәңле лә, яңғырашлы ла «Салауат батыр» тигән шиғырын яҙып, уны телевидениеның тура эфирында уҡып, ғауғалы тарихҡа

тарыны. Рәмигә хас булмаған был ялҡытҡыс оҙон шиғыр ҙа, Рәмиҙең күпселек «сәйәси» шиғырҙары кеүек үк, әҙәбиәттең социалистик реализм ҡанундарына ныҡ тура килтереп һәм совет хакимиәтен данлап йырлауға ҡоролһа ла, ленинизм идеяларын ел иҫмәҫе борон уҡ елдән ҡурсаларға күнеккән рәсми әһелдәрҙе уның ни бары ике юлы ғына һиҫкәндертеп сығырынан сығарҙы:

«Батшаларга башын эймәгәнде,
Башҡаларга башҡорт баш эймәҫ!»

Авторҙың шул «башҡалар» тигәненән, әгәр ҙә теләгең булһа, замананың телдән төшмәгән «океан аръяғы империалистары»н да, шулай уҡ Рәми үҙе «Ахун таяғы» тип атаған һәм уға һөнәре буйынса эш бирҙертмәй йөҙәткән республикабыҙ күләмендәге бер фирҡәле етәксене лә, һәм, әлбиттә, хатта Кремлдекен дә тоҫмалларға мөмкин ине — әһелдәрҙе ана шул өркөттө лә. Мәҙәниәтебеҙ тарихындағы был эпизод төрлөсә боҙоп һөйләүҙәргә дусар ителгәнлектән, ҡырыҫ документ теле менән сикләйек:

Х04 1972 г.

В ОТДЕЛ ПРОПАГАНДЫ И АГИТАЦИИ
ОБКОМА КПСС

тов.БАКИРОВУ У.Н.

С целью постоянного ознакомления телезрителей с лучшими образцами башкирской поэзии мы почти ежемесячно передаем новые стихи башкирских поэтов. Обычно эти стихи читают сами авторы. В последние месяцы на голубом экране выступили поэты Назар Наджми, Муса Гали, Ангам Атнабаев, Рафаэль Сафин и др.

16 ноября этого года со своими новыми стихами, которые одобрены в секции поэзии Союза писателей, выступил Рамий Гарипов.

В его произведении под названием "Салават-батыр", посвященном лауреату Государственной премии тов.Тавасиеву, есть такие строки:

"Хас дошмандар әле хөр халкымдың
Юлдарына күпме таш өймәҫ,
Батшаларға башын эймәгәнде,
Башкаларға башкорт баш эймәҫ!"

Это четверостишие, не отвечающее идейной требовательности нашей поэзии, было вычеркнуто. Во время подготовки передачи (перед трактовой репетицией) в присутствии режиссера Сайфуллина и ассистента режиссера Насретдиновой, старший редактор литдрамы еще раз предупреждал автора о том, что он не должен читать эту строфу. Рамий Гарипов согласился и дал слово не читать эти строки. Несмотря на неоднократное предупреждение, автор прочитал их в эфире.

Я, будучи редактором этой передачи, на другой же день после передачи связался по телефону с товарищем Гариповым и спросил у него: "Почему же Вы, несмотря на предупреждение, прочитали зачеркнутые строки?" Он ответил, что помнил о предупреждении, но прочитал их намеренно и всю вину берет на себя. Т.е. автор поставил работников



2.

телевидения в такое положение, когда ничего уже нельзя было изменить. Если бы он не дал согласия на сокращение стихотворения, то, естественно, не был бы допущен к экрану. А так мы были уверены, что он слово свое одержит.

Ст.редактор художественных передач студии телевидения – (Р.ХУСАИНОВ)

Гл.редактор художественных передач студии телевидения – (Р.СТРИЖКОВА)

Ошо шағирәнә «гөнаһы» өсөн Рәми Ғариповты Т.И. Ахунйәнов саҡыртып алып, «башҡорт милләтсеһе» рәүешендә «ҡыҙыу таба»ға баҫтырғас, шағир юғалып ҡалмаған: *«Атам татар, әсәм урыҫ мәрйәһе, ҡатыным украинка — ҡайҙан килеп мин башҡорт милләтсеһе булайым?!»* — тип, төтәһә лә, янмайынса ғына ысҡынған, тинеләр... Ысынлап та, уның милли сығышы мәсьәләһе бәғзеләрҙең башын ҡатырғыс ине шул: рәсми яҙыуын асып ҡарарға уның паспорты булманы (бергәләшеп райондарға йәки башҡа ҡалаларға командировкаға барғаныбыҙҙа ҡунаҡханаларға урынлашҡанда ғәҙәттәгесә паспортын талап ҡылһалар, берҙән-бер документын — «СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы» тигән танытмаһын биреп ҡотолор ине), һәм ул тыуған Салауат районының Загс бюроһы архивында ла уның шәжәрәһенә ҡағылышлы һис бер яҙыу-мәғлүмәт юҡ, ә ул саҡта уларҙың ауыл Советы үҙәге булған Илтәй ауылындағы барса Ғариповтар иһә милләттәре буйынса саф *татарҙар* имеш... «Башҡорт милләтсеһе» рәүешендә даны сыҡҡан шағирҙың төбө-тамырын юллау менән шул саҡтың партия өлкә комитеты секретаре Т.И. Ахунйәновтың да шөғөлләнеүен шағирҙың тол ҡатыны иҫтәлегендә шәйләйбеҙ. Һөйләшеү Рәми үҙе иҫән сағында, партия өлкә комитетында бара. Текста ҡыҫҡартып бирелгән **«Т.И.»** — Т.И. Ахунйәнов, **«К.Т.»** — Культура бүлеге мөдире Клара Төхфәтуллина, ә **«Н.В.»** — ҡағылып-һуғылып эшһеҙ йөрөгән Рәмигә эш биреүҙәрен һорап килгән уның ҡатыны Надежда Васильевна Ғарипова.

*«**Т.И**. Он пишет стихи, от которых веет не нашим, не советским, в них боль за ушедшее, которое он хочет вернуть, он против советской власти.*

***Н.В**. Но ведь мы читаем с большой любовью и интересом Черкасова «Хмель» и можно не раз перечитывать этот роман, хотя он начинается с декабристов.*

***К.Т**. Почему он видит мир не таким, как я, например?..*

***Т.И**. Мы хотим, чтобы он больше обращался к нам и писал то, что нам надо, о том, что вокруг нас... Мы хотим склонить его на нашу сторону, поэтому «бьем рублем»...*

Н.В. *Но вы бьете рублем не только его, но и наших детей.*

К.Т. *Мы слышали, что вы голодаете.*

Н.В. *Сколько же можно бить? Не издавать, не выпускать в эфир и не давать работу?*

К.Т. *Почему он так старательно воспевает свое, башкирское? Вы и детей своих отдали в башкирскую школу учиться, зачем?*

Н.В. *Язык отца они обязаны знать.*

Т.И. *Кроме того, я* ***изучил биографию Рами, у него башкирского очень мало.*** *Это нас и удивляет.* ***Писал бы он на татарском — все было бы по-другому.***

Н.В. *Ну что же здесь плохого? Атнабай... всегда остается самим собой, говорит только на татарском.*

Т.И. *Да, Атнабай самый порядочный в этом отношении, хотя по документам он — башкир».* (Рәми Ғарипов. Әҫәрҙәр, III том. Өфө «Китап», 2001; 343, 344-енсе биттәр).

Ата-бабаһы аҫаба башҡорт булып та, татарса һөйләшеп йөрөгәс, башҡорт телен үҙенеке һанамағас, шағир Атнабай тап шуныһы менән шағир Ғариповтан шәберәк тә, ҡәҙерлерәк тә икән, тимәк...

Тамырҙарҙы тикшереп белмеш секретарҙең тел төбөндә шул ята: Рәми Ғариповтың атаһы яғынан ғәзиз бабаһы — ҡасандыр ошо яҡҡа күсеп килмеш «ҡазан кешеһе», ә әсәһе тарафынан олатаһы — башҡорт, оләсәһе урыҫ мәрйәһе икән. Хәйер, шағирҙың үҙ шиғри билдәләмәһе лә тап килә: *«Миндә татар хәйләһе бар, уҫаллығы урыҫтың,/Башҡорт башы, башҡорт йәне — бәлки, шул да ырыҫтыр».* (Рәми Ғарипов. Әҫәрҙәр, II том. Өфө «Китап» 1998; 506-нсы бит). Йәғни татар, урыҫ, башҡорт ҡаны бергә ҡушылыуҙан хасилмын, шул өс милләттең төп сифаттарына эйә булыуым, бәлки, минең өсөн бәхеттер...

Зәңгәр экрандан баяғы шиғырын уҡыу һөҙөмтәһендә Рәми 1973 йылдың-йылы буйына эшһеҙ йөрөп ғүмер уҙғарҙы — бер редакцияла ла ҡосаҡты киң йәйеп ҡаршыламайҙар ине. Аҙ-маҙ гонорар алыр өсөн әҫәрҙәрҙе лә баҫтырып булмағанлыҡтан, Яҙыусылар берлеге янындағы әҙәбиәтте пропагандалау бюроһы аша райондарға һәм ҡалаларға сығып китеп, әҙәбиәт кисәләрендә шиғыр уҡып аҙ-маҙ аҡса табыу әмәле генә ҡалды, ә был иһә «әсе һыу» эсергә һәүәҫ шағирҙы хәмер һаҙлығына уғата нығыраҡ этәрҙе...

Ә уның ҡорҙашы Йыһат?..

Алдымда бына ошо оло афиша ята шаҡырайып:

«11 гинуар 1974 йыл. Башҡортостан Яҙыусылар союзы.

Актерҙар йортонда (Пушкин урамы, 94)

Шиғыр байрамы

Тимер Арслан, Әнгәм Атнабаев, Рауил Бикбаев, Муса Ғәли, Рәми Ғарипов, Әхмәт Ғайсин, Абдулхаҡ Игебаев, Мостай Кәрим, Марат Кәримов, Ирек Кинйәбулатов, Рафаэль Сафин, Йыһат Солтанов, Әнисә Таһирова, Тимер Йосопов.

Кисә сәғәт 7-лә башлана.

Рәхим итегеҙ!»

Исемлек «аршын буйлы» эре хәрефтәр менән яҙылған. Шағирҙар араһынан өсөһөнөң (икеһе — Рәми Ғарипов менән Йыһат Солтанов, өсөнсөһө — эсмәйенсә лә иҫереп йөрөмөш бахыр бер мәхлүҡйән ине, аҙаҡ килеп “халыҡ шағиры” исемен алды)

исем-фамилияһы ҡара ҡәләм менән уратып һыҙылған. Һәм шул шиғыр байрамы көнөндә үк афиша ситенә үҙ ҡулым менән сәпәлгән аңлатмам да бар:

«Был исемлектәге ҡара түңәрәк менән уратылған өс шағирҙың трибунанан халыҡҡа шиғыр уҡыуын КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты секретаре Т. Ахунйәнов тыйҙы (был өсәүҙе исемлектән үҙ ҡулы менән һыҙып ташланы).

Йыһат Солтанов. 11.01.1974.»

Үҙебеҙҙән бер иле лә ҡалмайынса йөрөгән «ҡара һаҡал»ыбыҙҙың — оҙонаяһ, ҡара көндәребеҙҙең ҡуйыра төшөүен күрһәтте был.

Бер килке шул ҡаралыҡтарҙың күңел даръяһынан йәнде рәнйетеп ағылышын эҫе мәлендә үк аҡ ҡағыҙға теркәп тә ҡуйғанмын икән, бына ул шәхсән кисереш:

«15.11.1972.

Дело: ***«Мине гәйепләйҙәр»...***

Бер ваҡытта ла үҙемә үҙем былдай «дело», «досье» асырмын тип башыма ла килмәгәйне.

Тормош тигәнең уйламағандарыңды һала икән алдыңа.

40 йәшем тула торған йылда, әллә аҡыллыланыуым, әллә аҡылһыҙланыуым сәбәпле, баш осомда ҡара болоттар ҡуйырып, КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты һ.б. тарафынан мине системалы рәүештә эҙәрлекләү башланды. («Һәнәк» журналында эшләгәнемдә үк, өлкә комитетының яңы секретаре Т.И. Ахунйәнов миңә ҡарата үҙенең был һәләтен күрһәтә биреп ҡуйғайны, хәйер). Сәбәбен үҙемә әйтмәй эҙәрлекләйҙәр — *идет организованная травля тихой сапой.*

Парадокс: коммунисты коммунистар эҙәрлекләй, ниндәйҙер ярлыҡ йәбештерергә теләй...

Эш ныҡлап бына ниҙән башланды.

Өҫтәрәк әйтеүемсә, Башҡортостан Яҙыусылар союзының партбюроһы, 1972 йылдың ғинуарында — февралдең аҙаҡтарында асыҡ партйыйылыш була, унда хәҙерге башҡорт әҙәби теленең хәле төп мәсьәлә итеп ҡуйыла; шуға алдан уҡ фекер туплап килеп, йыйылышта сығып һөйләрһегеҙ тип ышанабыҙ, тигән стандарт хат менән мөрәжәғәт итте яҙыусыларға. Бюро ағзаһы Ноғоман Мусин үҙе лә күреп, мине йыйылышта актив ҡатнаширға өндәне. Мин риза булдым һәм үҙемде борсоған ҡайбер фекерҙәрҙе ҡағыҙға һалып, ун биш минутлыҡ телмәр әҙерләп килдем. Йыйылыш Актерҙар йортонда булды. Башланыр алдынан Н. Мусин һәм партбюроның яңы һайланған секретаре Ф. Иҫәнғолов төп докладтан һуң беренсе итеп һүҙҙе миңә бирәсәктәрен иҫкәрттеләр. Һәм шулай булды ла. Мин, бик ныҡ тулҡынланып, «Халыҡ теле — океан» тигән телмәремде һөйләнем трибунанан. Коммунистар бик ҡәнәғәт тыңланы, оҙаҡ ҡул сапты. Залға төшкәс тә, һуңынан да аулаҡ урында күптәр минең ҡулды ҡыҫтылар. Уйламағанда, төпдокладсы күтәреп сыҡҡан «төп йүнәлеш» онотолоп, бөтә коммунистар һәм партияһыҙҙар мин ҡуҙғатҡан мәсьәләне төп йүнәлеш итеп күтәреп һөйләнеләр. Тик Ф. Иҫәнғолов һ.б. бер нисә кеше генә мине бысраҡҡа һалып тапарға тырышты, ләкин күпселек минең яҡлы булып ҡалды. Бына шунан һуң ҡуйыра башланы ла инде баш өҫтөмдә болоттар... КПСС өлкә комитеты бюроһында «Совет Башҡортостаны» гәзите редакцияһының йыллыҡ эше тикшерелдә, шунда, башҡа бер нисә иптәштең (Р. Бикбаев, И. Ғиззәтуллин, Р. Әхтәров) ыңғай ҡабул ҡылынған әҫәрҙәре менән бер ҡатарҙан, минең яңы йыл һанында («Сов. Башҡ.», №1, 1972) сыҡҡан «Яҙ,

Башҡортостан!» тигән публицистик мәҡәләмә (ул редакция заданиеһы менән бик ашығыс, бер төндә ултырып яҙылғайны) ҡарата ғәйепләү ташланды: ул мәҡәләлә башҡорттар йәшәгән ер итеп «Иртыштан — Волгағаса, Яйыҡтан — Ҡамағаса» араны алыуым кемдеңдер сикәһен ҡыҫҡан. Шуныһы ҡыҙыҡ, шул уҡ, тип әйтерлек, положение шул уҡ 1972 йылдың 1 Май байрамы уңайы менән Мостай Кәримдең «Тепло родного очага» тигән мәҡәләһендә ап-асыҡ ҡабатланды һәм АПН агентствоһы тарафынан бөтә ғәләмгә таратылды (Башҡортостан үҙәк матбуғатында бөтә өс телдә баҫылып сыҡты). Шул уҡ ваҡытта... минең «Совет Башҡортостаны»нда сират көтөп ятҡан әҙәби әҫәремде — нәшриәттә сығып килмеш «Таң нурҙары» китабынан өҙөктө (ә ундай өҙөктәр ғәҙәти рәүештә баҫыла килә ине) оторо кире ҡаҡтылар, һәм унан һуң да үҙҙәренең заказы буйынса (заказды редактор түгел, ә ауыл хужалығы бүлеге хеҙмәткәре Аҫылғужа Баһуманов биргәйне) яҙылған хикәйәмде («Ҡотлобикә») редактор А. Исмәғилов ҡотороноп алып ташланы (ул, бик ныҡ ҡыҫҡартылып, шаҡтай бәҫһеҙләнеп, «Ҡыҙыл таң» гәзитенең 1972 йыл октябрь айы һандарының береһендә «Солдат хатыны» исемендә донъя күрҙе) һәм гәзиттә әҫәрҙәремә тулы бойкот иғлан ҡылдылар. Ул ғына ла етмәһә, «Ағиҙел»дең 1972 йыл 6-нсы һанында сыҡҡан мәҡәләмде («Бөйөк туғанлыҡ тураһында йыр» — Назар Нәжми ижадына ҡарата) үҙем больницала ятҡан саҡта «Ағиҙел» редколлегияһы ағзаларын һәм хеҙмәткәрҙәрен саҡыртып алып, КПСС-тың өлкә комитетында секретарь Т.И. Ахунйәнов кабинетында Ахунйәнов инициативаһы һәм ҡуҙғатыуы менән махсус тикшергәндәр, пропаганда бүлеге мөдире У.Н. Бакиров доклад яһаған. Нигеҙе — Ахунйәновҡа кемдәрҙер тарафынан (Ахунйәнов фамилияларын әйтмәгән) урыҫ телендә яҙылған биш битлек донос-хат. Ахунйәнов мине бик ҡаты ғәйепләп һөйләгән, уға ҡушылып, мине туҡмаҡ аҫтына һалып, Яҙыусылар союзының партбюро секретаре Фәрит Иҫәнғолов «ялҡынлы» телмәр тотҡан. Нәтижәлә минең больницанан сығыуға сюрприз: административ киҫәтеү һәм баш редактор Ә. Мирзаһитовтың: *«Бынан һуң һине* ***айырым контроль*** *аҫтына алырға!»* — тигән күп мәғәнәле янауы...

Сылбыр реакцияһы дауам итә: 1972, 1973 йылдар планынан китап нәшриәтендә лә китаптарымды һыҙып ташлағандар; 1974 йылға ғына вәғәҙә итәләр «Минең шәжәрәм»де сығарырға, ләкин ул да ҙур ҡурҡыныс аҫтында: сөнки Башҡортостан китап нәшриәте директоры Нуритдинов, йыллыҡ план тураһында һүҙ барғанда, бөтә редакторҙарына минең хаҡта бөтә ғәләмгә ишеттереп киҫәтеү яһаған: *«Ул егетте ныҡ ҡарарға* (тикшерергә. — *Й.С.*) кәрәк, ***он не так думает!»*** Был — уның һүҙҙәре. Тимәк, мин, Коммунистар партияһының фиҙакәр бер боецы булһам да, башҡа идеология кешеһе булып сығам түгелме?..

Шуны коммунист кеше, ҙур етәксе кеше әйтә...

Өлкә комитетында, «Бөйөк туғанлыҡ тураһында йыр» өсөн ғәйепләгәндә, журналда минең бүлектән сыҡҡан тағы ла бер материал — шағир Н. Нәжми менән әҙәби тәнҡитсе К. Әхмәтйәновтарҙың диалогтары ла «крамола» билдәләмәһенә дусар ҡылынған. Унда мине, журналдың бүлек мөдире булараҡ, субъективизмға юл ҡуйыуҙа ғәйепләгәндәр (Н. Нәжми башҡорт шағиры Шәйхзада Бабичты бөйөктәр араһында телгә ала, ләкин Мостай Кәрим дә бит уға мин әйтеп үткән «Тепло родного очага» мәҡәләһендә шундайыраҡ юғары баһа биргәйне!.. Әйткәндәй, 1968 йылда Назар Нәжмиҙең «Һайланма әҫәрҙәр» томының тиражы ташҡа баҫылып һәм китап итеп төпләнеп бөткәс, Т.И. Ахунйәнов бойороғо менән бөтә тираждан Шәйхзада Бабич

шиғырынан эпиграф бирелгән бер битен йыртып ташланылар ҙа урынына «битараф» бит йәбештереп сыҡтылар)...

Хәҙергә шул».

Ошо урында өҙөлгән күңелһеҙ сәхифәм...

КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетының, КГБ-ның (йәки МГБ-ның? -- исеме әллә нисә тапҡыр үҙгәртелһә лә, асылы бер килеш ҡалды) һәм улар күрһәтмәһен туранан-тура тырышып бойомға ашырыусы Яҙыусылар союзы һәм уның "генералитет"ының, башҡорт милләтле әҙиптәрҙән "башҡорт милләтселеге" эҙләп, ижадсыларҙы тонсоҡторғос ҡыҫым аҫтында тотоуҙарынан интегеп йәшәгәнемдә сәләмәтлегем һиҙҙертеп ҡаҡшай башланы. Быға яҙыусылар араһында өмөтһөҙлөктән киң таралған эскеселек тә булышлыҡ итте, әлбиттә... Бөтә нәмә сағыштырғанда асыҡ беленә, тигәндәй, бер көн бинаның "Ағиҙел" журналы редакцияһы урынлашҡан бишенсе ҡатына текә баҫҡыстан ҡорҙашым Әнүр Вахитов менән ҡушарлап менеп барғанымда хәлдәребеҙҙең хәтәрлеген ныҡ тойҙом да тетрәнем: Әнүр Вахитов, тыны быуылып, туҡтай-туҡтай ғыж-ғыж һулыш ала, үҙемдең дә шөйлә тын ҡыҫылыуы һиҙелә... Ошонан һуң ҡырҡа ҡарар иттем: етте, эсмәҫкә! Һәм алдағы ун йыл буйы тамсы ла хәмер ҡапмайынса йөрөнөм (үҙ ваҡытында Рәми дуҫыма ла етди тәҡдим иткәйнем дә, тыңламаны). Хәлемдең ыңғай яҡҡа үҙгәреүенә йәнә бер яҡшы сара булышлыҡ итте – Ағиҙел буйында Өфөнән түбәндәрәк урынлашҡан Бочарово тигән ерҙән баҡса һатып алып, физик хеҙмәт һәм саф һауаға өлгәштем. Баҡсалы булыуыма, гәрсә үҙе быны шәйләмәһә лә, Ғәйнан ағай Әмириҙең нәүбәттәге игелеге туранан-тура булышлыҡ итте, сөнки мин ул сафлыҡ төйәген Ғәйнан ағай арҡаһында донъя күргән "Минең шәжәрәм" (тәүге исеме "Ерем, һиңә өндәшәм" ине) тигән китабымдың гонорарына һатып алдым, ә был иһә йонсоҡос ҡара көндәремде аҙ ғына булһа ла яҡтыртты. Хакимиәт тарафынан аҫтыртын ҡара исемлеккә теркәлеп, ҡағылып-һуғылып йөрөгәнемдә китап нәшриәтенә Ғәйнан Әмири яҙған рәсми рецензия күрмештәремде бераҙ ыңғай яҡҡа үҙгәртте. Был ваҡыт мин, күңел тынысһыҙлығынан ауырыуға һабышып, больницаға яткайным, ағайымдың, мине эҙләп килеп, редакцияла ҡалдырған сәләмен алдым:

19.09.1973.
Йыһад, ауырыйһың икән... Тиҙерәк сәләмәтлән инде бер үк!
Бына рецензияны ҡалдырам. ***Ғ.Ә.***

Рецензия. "ЕРЕМ, ҺИҢӘ ӨНДӘШӘМ".
Йыһат Солтанов. Шиғырҙар һәм поэмалар.

Йыһат Солтанов башҡорт әҙәбиәтендә яңы исем түгел. Уның ижади яҙмышы бик оригиналь. Әҙәбиәткә ул китап биттәре аша түгел, ә тормоштоң үҙенән – уның да тәрән төбөнән, шаулы тулҡындарын, ташҡындарын үтеп килде.

Й. Солтанов башта уҡ ике жанрҙа ла – поэзия һәм прозала – көсөн һынап ҡараны. Һәм башта уҡ икеһендә лә һиҙелерлек уңыштар ҡаҙанды. Бына тиҫтә ярым йыл инде поэзияга ла, прозага ла хыянат итмәй эшләп килә.

Солтановтың прозаһын төплө өйрәнеп ҡараганым юҡ, шуга күрә уның был жанрҙа ниндәй ҡаҙаныштарга өлгәшеүен өҙөп кенә әйтә алмайым. Әммә поэзияла ул ҡолас киреп йөҙә ала. Солтанов-шагирҙың тауышын хәҙер бер кемдеке менән дә бутау мөмкин түгел.

Солтановтың поэзияһында, гөмүмән, һәм ошо яңы китабында шундай сифаттар күҙгә нык ташланып тора: киң ҡоласлылыҡ, граждандлыҡ пафосы, халыҡсанлыҡ һәм идея асыҡлығы. Был сифаттар "Ерем, һиңә өндәшәм" йыйынтығында тағы ла ҡалтайыбыраҡ күренә башлағандар.

Йыһат Солтанов тыуған ерен – Уралын уллыҡ һөйөүе менән һөйә, уға бөтә йөрәгенән дан йырлай. Тик ул, башҡа ҡайһы бер йәш шағирҙар шикелле, Башҡортостанды "өҙөп алып" йырламай, ә Ҙур Тыуған илдең – Россияның, СССР-ҙың, хатта донъяның бер өлөшө итеп күрә, шуға ҡыуанып, шуның менән ғорурланып йырлай.

"Уралыма" тигән шиғырҙа шундай юлдар бар:

Уралҡайым,
Тартты Ҡояш, Айың:
Хаҡ ҡулымды ҡуйып ҡашыма,
Офоҡтарың байҡап менеп баҫтым
Күккә ашҡан сағыл ташыңа.

Донъя иркен, донъя ниндәй иркен,
Бейектәрҙән баҡһаң, Уралым.
Ҡояш, Айың – яҡын менгән һайын,
Нурға ҡанып ҡарап торамын.
...
Күрһен донъя – беҙҙең ҡулда улъя,
Бөгөн беҙ көр, ғорур, байбыҙ ҙа.
Урал батыр бөрккән йәншишмәнең
Шифалары етә Союзға.

Күкрәп ҡалҡкан илең-тиңең менән
Һин кирәһең, Урал, күкрәк.
Беҙҙең ҡараш инде – үткерерәк,
Беҙҙең тауыш инде көрөрәк!

Түбәндәге строфа айырыуса характерлы, унда шағир ҡайһы бер ҡараштар менән туранан-тура полемикаға инә:

Һине йырлау, һинең өсөн үлеү –
Ҡалыр һаман ерҙә иҫкесә.
Ләкин Урал аша офоҡ күрмәү –
Яңы түгел инде, минеңсә.

Шағир Й. Солтанов бик дөрөҫ – партиялы, интернациональ позицияла тора.
Был яҡтан "Ҡурай" шиғыры ла бик әһәмиәтле:

И ҡурайым, йөрәк ҡағышым,
Салт тояһың заман ағышын.
Ленин моңо менән ҡауышһың –
Һине тотмаҫ үлем биҙгәге.

Икенсе бер шиғырында Й. Солтанов үҙенең граждандлыҡ позицияһын ошолай билдәләй:

Ҡурай тартып,
Ҡымыҙ сиртеп кенә
Йәшәү бөттө йырсы, шағирға.
Заман шундай:
Барабандар тауышын да һорай
Яуға барырға!

Й. Солтановтың поэзияһында патриотизм темаһы үҙәк урындарҙың береһен алып тора. Һәм ул интернационализм темаһы менән органик үрелеп бара:

Терһәктәргә терһәк терәп бпаҫтыҡ,
Яурындарға яурын ялғап баҫтыҡ
Нисә йыһан,
Нисә мәмләкәт –
Баррикада ташына.
Күпме устар ҡыҫып тотҡан тыуҙа
Күпме милләт ҡаны уттай ҡыҙа,
Күпме халыҡ хисе ташҡына
Капиталдың ҡара башына!

Был юлдар Солтановтың күп шиғырҙары өсөн – лейтмотив.

Йыйынтыҡ ҙур. 5-6 табаҡ тәшкил итәлер, моғайын. Унда бик яҡшы, уртасараҡ һәм йомшағыраҡ әҫәрҙәр ҙә бар.

Хәҙер китапҡа тупланган әҫәрҙәр хаҡында конкрет фекерҙәр.

Арала мәғәнәләре аңлашылмаған шиғырҙар осрай. Мин уларҙы “ребус-шиғырҙар” тип атар инем. Ундайҙарға түбәндәгеләр инә: “Революция”, “Осорт, атым”, “Галлей кометаһы”, “Һаҡмар-һыу”, “Мин үҙемде беләм”, “Үле тимер”. Был шиғырҙарҙы китапҡа бөтөнләй индермәү хәйерле булыр, тип иҫәпләйем.

Й. Солтановтың ҡайһы бер шиғырҙары өсөн үтә, саманан тыш оҙонлоҡ характерлы. Бындайҙарҙы ҡыҫа, йыйнаҡлай төшөргә ине...

“Күңел ҡитғалары” тигән бүлектә бик яҡшы лирик парсалар бар. Әммә уларҙың күбеһенең эсеү тураһында булыуы (эсеүҙе данлау) күңелде бераҙ ҡытыҡлай. Эсеүгә ҡаршы бик актив көрәш барган бер мәлдә нисегерәк яңғырар икән улар?..

“Өндәшәм” тигән бүлек китапта тәүге булып тора. Унда 50-гә яҡын шиғыр тупланган. Улар темалары менән бик төрлөләр. Был хәл бүлекте бик сыбар, тарҡау яһай. Бәлки, уларҙы тағы ла бүлексәләргә айырырға кәрәктер?

Башҡа әҫәрҙәргә ҡарата минең бер төрлө лә замечанием юҡ. Бындай гүзәл, яҡшы әҫәрҙәр китапта күпселек тәшкил итә. Айырыуса “Шәжәрә” поэмаһы китаптың күрке буласаҡ. “Портреттар” тигән бүлексәгә ингән әҫәрҙәр ҙә бик ыңғай тәьҫир ҡалдыра. “Ленька – Луңке”, “Кәримәкәй һылыу”, “Эт йәнле”, “Өҫтөнбикә” тигән әҫәрҙәр үҙҙәре бер кескәй поэмалар булып торалар, бик колоритлылар.

Й. Солтановтың теле яҡшы. Ғөмүмән, ул юғары тел культурпаһына эйә булған шағир, әҙип. (Шулай ҙа, йәйәләр эсендә генә әйтеп китергә кәрәктер: шағир ҡайһы саҡта

диалектизмдар менән кәрәгенән артыҡ мауыҡмаймы икән? Хәйер, был өлкәлә мин үҙемде специалист һанамайым, шулай булғас – хөкөм сығарыусы ла була алмайым. Был мәсьәләне нәшриәт редакторҙары ҡарамағына ҡалдырам).

Китапҡа ҡарата минең бүтән бер төрлө лә күрһәтмәләрем юҡ. Әйтелгән етешһеҙлектәрҙе иҫәпкә алып, ҡулъяҙма өҫтөндә бер тын эшләгәндән һуң, китапты мотлаҡ баҫып сығарырға кәрәк. Бөгөнгө башҡорт поэзияһына ул яңы бер ҡаҙаныш булып өҫтәләсәк.

Ғәйнан Әмири. 07.08.1973.

Ни тиһәң дә, Хоҙай Бабай бар бит ул: бирәһе килгән ҡолона – сығарып ҡуйыр юлына! Әҙәбиәтебеҙ "генерал"ы Мостай Кәрим һәм уның эйәрсендәре мине төрлө мөнбәрҙәрҙән "милли яҡтан сикләнгән" ("национально ограниченный") тип тамғалап, төпкә батырырға, ижадымды тонсоҡтороп ҡалдырырға ҡәһетләнгәндә, нисәмә йылдар донъяға сыға алмай ҡаҡланып ятҡан китабыма ҡарата Ғәйнан Әмириҙең китап нәшриәтенә биргән ошо рәсми рецензияһы, әйтерһең дә, минең өҫкә өйөлгән баяғы ҡара яланы алып ташлау өсөн махсус яҙылғайны! Һөҙөмтәлә, урыҫтар әйтмешләй, "лед тронулся" – шул китабым 1974 йылда "Минең шәжәрәм" тигән исем менән донъяға сыҡты...

...Назар Нәжми менән Мостай Кәримдең ҡапма-ҡаршылығы, үҙ-ара «борсаҡтары бешмәүе»нең ҡара шауҡымы Мостай Кәримде «как с гуся вода» сылатмайынса үтһә лә, бер Назар Нәжмиҙе генә түгел, ә бөтә әҙәбиәтебеҙҙе киңгәтә — гөнаһһыҙйән башҡаларға ла һөрөмө һылана ине. Хәтерҙә: 1976 йылда «Ағиҙел» журналының редколлегия ағзалары һәм хеҙмәткәрҙәре ҡатнашлығында Назар Нәжмиҙең «Урал» исемле өр-яңы поэмаһын авторҙың үҙе уҡыуында тыңлап тикшереү ойоштороллдо, ул сараның йәшерен бар маҡсаты — әҫәрҙе журналға үткәртмәү икәнлеге ап-асыҡ ине. Был йәһәттән авторҙың төп оппоненты — Ғайса Хөсәйенов икәнлеге алдан уҡ билдәле булды. Мостай (ул үҙе юҡ ине) нөгәрҙәре, автор позицияһынан милләтселек еҫе аңҡый, тип, яҡшы һунар эттәреләй тырышып еҫкәнделәр. Ғайса Батыргәрәй улы үҙенә бойоролған бурысты ышаныслы үтәне — аңлашылып торған нәмәләрҙе лә аңлашылмай тип, әҫәрҙең идея үҙәге ныҡ аҡһай тип, яуаплы төп мәсьәләләрҙә гелән ҡаршы һөйләне. «Бының менән нимә әйтергә теләүегеҙ аңлашылмай!» — тип поэма авторының сабырлығын тамам ҡаҡшата башлағас, үҙем тороп яуапламайынса түҙмәнем: «Әгәр тыуған Уралыңды, тыуған Башҡортостаныңды, туған милләтеңде йәнең-тәнең менән бирелеп һөйһәң, аңлашыла ул, хөрмәтле Ғайса ағай!» — «Бының менән нимә әйтергә теләйһең?» — тип күҙлегенең быялаларын тап уҫал Берияныҡылай һалҡын ялтыратып киршәлгәс: — «Бының менән мин шуны әйтергә теләйем: белеүемсә, Мәскәүҙән уҡып ҡайтҡас һеҙҙе «буласаҡ Белинскийыбыҙ» тип йөрөткәндәр. Әммә һеҙ, үкенескә ҡаршы, Виссарион Белинский ҙа, Ғайса Хөсәйенов та була алманығыҙ!..» — тинем. Күҙҙәрен бер аҡырайтып ҡараны ла өндәшмәне, ә Назар Нәжми, үҙенең йор ғәҙәтенсә, бөтә залды яңғыратып шарҡылдап көлөп ебәрҙе. Гүзәл поэмаһын ул, «Ағиҙел»гә үткәртә алмаған ҡарауы, күпмелер ваҡыттан һуң «Совет Башҡортостаны»нда ташҡа баҫтырҙы; ә минең өлөшкә ғүмере буйына ҡуйынында таш йөрөтәсәк йәнә бер яһилйән өҫтәлде...

Әммә "бөйөк Мостафа Сафич"ка яуҙырылған мәҙхеселәр хорын боҙоп, хаҡлыҡты күҙенә тура ҡарап бәреүселәр ҙә бөтмәгәйне, был хаҡта уның баяғы көндәлектәр битенә лә теркәлгән:

“25.10.91. …Өфөләгә минең “коллега”лар бер нисә тапҡыр шундай ғәйеп тақты, туранан-тура: “Халыҡ өсөн һин нимә эшләнең?” – тигән һорау ҡуйҙы”. Бындайҙарҙың иң сағыуы Зәйнәб апай Биишева ине, әлбиттә. Хәйер, Мостай Кәримдең үҙенә һүҙ бирәйек:

“5.02. 79. Малеевкаға гинуарҙың 18-ендә килгәйнем. Төп корпустың икенсе ҡатына урынлаштырҙылар. Ишек асып, коридорға сығыуым булды, ҡаршы яҡтан да ишек асылды. Бүлмәнән Зәйнәб Биишева килеп сыҡты.

-- Һаумыһығыҙ? Һеҙ ҙә бында икәнһегеҙ, -- тинем.

Сәләмемә шундай яуап алдым:

-- Һеҙҙең ни хаҡығыҙ бар минең менән исәнләшергә? Нимәгеҙ бар һеҙҙең, бахыр. Минең халҡым бар. Мине халҡым ярата.

-- Ярай улайһа, мин һеҙҙе күрмәнем дә, белмәнем дә.

“Фекер алышыуҙар” ошоноң менән бөттө. Мин яңы корпуска күстем. Ул бүлмә генә түгел, бер бүлмәле квартира булып сыҡты. Иркен, якшы. Тыныслыҡта һәм яңғыҙлыҡта рәхәт сигәм…

Биишева менән ашханала ғына осрашабыҙ. Урамда мине күреп ҡалһа, әллә ҡайҙан кире боролоп китә. Ни зыяным тейҙе икән минең уға? Бирҙе миңә Хоҙай бер “дошманды”. Уның менән дошманлаша ла алмайым. Дошман булғас, ул үҙеңдән ҡайтыш булмаһын. Шулай ҙа был кеше миңә нисәмә йыл бәйләнә инде”.

Ил инәһе булырҙай апаның “бәйләнеүе” юҡҡа ғына түгелдер! Көндәлектәрҙең авторы үҙе үк шуны әйтеп биргән дәбаһа:

“30.04.90. …Үҙемә үҙем эпитафия сығарҙым:

“Был ҡәберҙә Мостай Кәрим үҙе ята,
Үлеүе хаҡ, тик тыуыуы булған хата”.

Афарин! Үҙе хаҡында үҙенән дә мәргәнерәк әйтеүсе булмаҫ ине.

Партия өлкә комитетының «башҡорт милләтселегенә» ҡаршы көрәшеүсе идеология фронтында төп көҙ-ҡолағы һәм уҫмаҡсыһы — трибуналарҙан трибуналарға йөрөп тамаҡ ярыусы һәм әҙәбиәтебеҙҙәге алмаштырғыһыҙ трибун-шағир Мостафа Сафа улы Кәримов (Мостай Кәрим) ине шул. Милләт, тел мәсьәләләрендә үҙенең оҙон ғүмере буйына әсә телен яҡлап бер генә шиғри юл да, хатта һүҙ ҙә яҙмаған, бер кемдең дә бер ниндәй ҙә яҡлауына мохтаж түгел «бөйөк урыҫ телен» кемдәрҙәндер үҙенең күҙ ҡараһындай ҡурсалап, рәсми трибуналарҙан гел шапырынып ғауға һалған, ә башҡорт теле файҙаһына үҙ ғүмерендә тик бер тапҡыр юл ыңғайында ғына, ғәйбәткә юл ҡуймаҫ өсөн генә өлөш сығарған (1954 йылда партконференцияла “гәпергән” телмәре) йылғыр сәйәсмән, партия һәм совет тотанағы, органдарҙың рупоры һәм күҙәтсеһе Мостай Кәрим «һөрһөп бөткән башҡорт милләтсеһе Мөхәммәтша Буранғолов»ҡа ҡаршы уңышлы көрәштә туплағайны сәйәси капиталын. Ҡоро ҡалаҡ ауыҙ йырта, тигәндәй, ҡоро һүҙ генә булмаһын өсөн, бер документтан аяныс ғибрәтле өҙөк:

Первому секретарю ЦК КПСС, Председателю Совета Министров СССР т. Хрущеву Н.С. —

от писателя, народного сасяня Башкирской АССР Бурангулова Мухамедши Абдрахмановича, г. Уфа, ул. Мингажева, 125, кв. 45

Заявление

...Однако некоторые клеветники, любители дешевой славы, которые занимались творением из мухи слона и пользуясь жестокостью Сталина беспощадно клеветали на честных людей и умывались их слезами. Именно такие, как Сайфи Кудашев, Мустай Каримов, Кирей Марган, Бакир Усманов и Ахняф Харисовы в 1946 году 26 августа представили в ЦК КПСС доклад о репертуарном плане драмтеатров. В этом докладе они взяли на замечание мою драму «Идукэй и Мурадым» и в этой связи пытались меня оклеветать и обвинять в чем то. И действительно в 1950 году по их инициативе, по приговору особого совещания я был осужден на 10 лет и был выслан в лагерь. Освободился после смерти Сталина, в 1956 году. По приезде из места заключения в Уфу, где я и жил, обратился с заявлением о реабилитации к прокурору Баш. АССР. Тогда он по телефону обратился к выше упомянутому председателю правления Союза писателей Башкирии Мустаю Каримову. После этого разговора, через три дня прокурор республики мне заявил, что «не нахожу основания реабилитировать Вас». Тогда я был вынужден обратиться к прокурору РСФСР, он также в моей просьбе отказал. Тогда я был вынужден обратиться к Вам, Никита Сергеевич, по Вашему указанию Генеральный прокурор СССР по моему делу сделал протест и по этому протесту Верховный Суд Баш. АССР 30 октября 1959 года меня реабилитировал полностью»... (Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми архивы, ф. 25, оп. 1, ед. хр. 58).

Халыҡ сәсәне бөйөк Мөхәммәтша Буранғолов яҡты донъянан киткәндән һуң бушанып ҡалған “ҡоторонҡо милләтсе” урынына яңы «һөрһөп бөткән»дәрҙе эҙләп табыу (табылмаһалар, яһау!) һәм баяғы сәйәсәттәге мөҡәддәс көрәшен дауам итеп, бөйөк ҡыҙыл империяның ҙур сәйәсәт үрҙәренә өҙләкһеҙ күтәрелеү сәме тынғы бирмәй ине, ахырыһы, сәйәсмәнлек нәфсеһе нығ ҡуҙғалған һәм ҡыҙышҡан халыҡ шағирына. Шуға күрәлер ҙә ул, Мәскәүҙең һәм урындағы партократияның аҫтыртын милли сәйәсәте хорына ҡушылып бар көсөнә йырлау өсөн, башҡорт халҡының тарихын эстән емертергә тотона — үткәнен юҡҡа сығара, ә юҡҡа сығарып булмаҫтайын тырышып түбәнһетә — Бөйөк Октябрь революцияһынаса башҡорттоң бер нимәһе лә булмаған, ә үҙе ҡырағай булған, тигән «дөйөм йыр»ға ауаздашланып көсәнә:

«По обе стороны от Урала — от Волги до Иртыша (шулай ҙа ҡабул ҡылған бит минең теге билдәләүҙе! — *Й.С.*) — *на протяжении тысячелетия* ***скитались*** *башкирские племена, гонимые всеми ветрами исторической судьбы* (Башҡортостан тигән илебеҙ булмаған!.. — *Й.С.*)... *Вплоть до 1919 года...* ***не имели*** *ни своей собственной крыши над головой, ни прочной ограды на рубежах, иными словами,* ***не имели*** *своей государственности».* (М. Карим. Тепло родного очага. «Советская Башкирия» гәзитенең 1972 йыл 1 май һаны). Һәм йәнә:

«Беҙ ***фәҡир*** *булдыҡ... Беҙ* ***артта ҡалғайныҡ...*** *Беҙ...* ***белемле түгел инек...*** *Әлбиттә, ул алыҫ замандарҙа ла, мәҫәлән, Парижга беҙҙең йырсыны йәки ҡурайсыны алып барыр булгандар, ләкин бүтәндәрҙе шаҡ ҡатырган өсөн* ***ҡырағай кеше*** *итеп күрһәтергә саҡыргандар».* (Мостай Кәрим. Бөйөк Октябрь революцияһының 70 йыллығы айҡанлы Башҡорт опера һәм балет академия театрында тантаналы ултырышта һөйләгән телмәренән. «Совет Башҡортостаны» гәзитенең 1987 йыл 6 ноябрь һаны).

Париж сәхнәһендә париждарҙы үҙенең юғары сәнғәте, таланты менән ысынлап та шаҡ-катырған башҡорттоң бөйөк ҡурайсыһы Йомабай Иҫәнбаевты «ҡырағай кеше» ҡатарына ҡуйып түбәнһеткән «әҙәпле» телмәрсебеҙ башҡаларҙы әҙәпһеҙлектә ғәйепләргә, уларға әҙәплелек һабағы бирергә бик нығ ярата... Шул йәһәттән 1988 йылдың 29 авгусында сәғәт 18.40-та зәңгәр экрандан (1-енсе программа) ғибрәтле бер тапшырыу булды:

«Время больших перемен». *Интервью с народным поэтом Башкирии Мустаем Каримовым.*

(Журналист Марсель Ҡотлоғәлләмов менән әңгәмәләшеүенең ҡыҫҡаса мәғәнәүи йөкмәткеһен башҡортсалаштырып һәм йәйәләр эсендә шуға үҙ ҡарашымды өҫтәкләп бирәм. — *Й.С.*).

1. М. Кәримгә, ул ниндәй генә «бөйөк» булмаһын, уның «эшмәкәрлеген» тәнҡитләп яҙған хаттар килә икән хеҙмәтсәндәрҙән. Шуға күрә ул (М. Кәрим) халыҡ вәкилдәрен «әҙәпһеҙлек»тә гәйепләй.

(Ә уның үҙенең бөтә милләтте түбәнһетеп мәсхәрәләгән сығыштары әҙәплелек була, күрәһең... Әгәр Мостайҙы маҡтаһалар — әҙәплелек, тәнҡитләһәләр — әҙәпһеҙлек)...

2. Экология мәсьәләһенә ҡағылып, әйе, бөгөн зыянлы тип табылған Иштуған һыу һаҡлағысын төҙөүҙе юллап үҙ ваҡытында РСФСР Верховный Советы ултырышында сығыш яһаным, ти. Ул һыу һаҡлағыс Башҡортостанға кәрәк тип, ҡолағыма тукып, ышандырып ебәрҙеләр, ти. Ләкин мин белгес түгел, шуға күрә ышандым, тип аҡлана.

(Күренеүенсә, илгә этлек эшләр өсөн был сәйәсмәнгә белгес булыу һис тә мотлаҡ түгел).

3. Башҡорт культураһына, тарихына ҡағылып, «XIII быуатта башҡорттоң әҙәбиәте булған» тигәнгә сая ҡаршылығын, ышанмауын белдерҙе. Белгестәр мине инандырһындар, шунан һуң ышанырмын, ә былай ышанмайым, ти; үҙенең һаман был раҫлауҙарға аяҡ саласағын белдерә.

(Тимәк, башҡорт халҡының тарихи ҡаҙаныштарын кире ҡағыу, уны кәмһетеү өсөн М. Кәримгә белгес булыу ҙа, белеү ҙә һис мотлаҡ түгел һәм ул белгестәргә ҡаршы сығырға, аяҡ салырға бик хаҡлы һанай үҙен).

Ни эшләп ул әҙәбиәт башҡорттоҡо булһын, *ул татарҙыҡы ла, үзбәктеке лә, ҡаҙаҡтыҡы ла, ҡарағалпаҡтыҡы ла — бөтә төркиҙәрҙең уртаҡ әҙәбиәте бит ул, ти.*

(Әйткәндәй, беҙ ҙә быны кире ҡаҡмайбыҙ, шул уҡ ваҡытта ул әҙәбиәткә башҡорттар ҙа тос өлөш индереүен таныйбыҙ. Ә татарҙарға ҡарата бит ул бер ваҡытта ла былай «белдекле» тел сарламай, көллө сығыштарының тел төбөндә — ***бөтә төрки әҙәби мираҫ татарҙыҡы***, тигән аҫтыртын раҫлау ята. Башҡорттоҡон кире ҡаға, ә татарҙыҡын раҫлай...)

XIII быуатта кәм тигәндә лә (ә ғәмәлдә ул күпкә артығыраҡ!) 14 йыл буйына татар-монгол баҫҡынсыларына ҡаршы тороп һуғыша алған халыҡ әҙәпһеҙ һәм әҙәбиәтһеҙ буламы?!.).

Мостай Кәрим сәйәсәтенең ошо «генераль линия»һын ғүмере буйына эсе бошоп күҙәтеп барған замандашы һәм ҡәләмдәше Назар Нәжми, артабан тел тешләп йөрөүҙе түбәнселек һанаптыр инде, уға ҡарата үҙ фекерен белдерергә тәүәккәлләнгән. Мостай Кәримдең һүҙҙәре менән әйткәндә, «күренекле шағирыбыҙ Назар Нәжми бик туҙынған, бик асыуланған. Бар асыуҙарын «Ҡыҙыл таң» (27 ғинуар 1989 йыл) биттәренә килтереп түккән. Күп итеп түккән»... («Ҡыҙыл таң» гәзитенең 1989 йыл 24 февраль һаны). Быға яуап итеп Мостай Кәрим матбуғатта ҡәләмдәш оппонентына үтә мәсхәрәле һүҙҙәр яуҙыра һәм шул йылдың йәйе буйына Башҡортостандың Юғары Суды был ике шағир араһындағы йәмһеҙ ыҙғышты тикшереү, уларҙы үҙ-ара яраштырыу эше менән шөғөлләнә... Ләкин арҙаҡлы аҡһаҡалыбыҙ үҙенең шул «Ҡыҙыл таң»да ил шаулатып

иғлан ҡылған төп сәйәси принцибынан ваз кисмәй: «Назар Нәжми мине төрлө юғары йыйылыштарҙа сығыштар яһауым өсөн шелтәләй. Әйтер һүҙем, тыңлар кешем булғанда, мин съездарҙа ла, цехтарҙа ла сығыш яһайым. Ҡайҙа нәрҫә һөйләргә кәрәклекте берәүҙән дә һорап тормайым. Бынан ары ла шулай итәсәкмен». Ошо һүҙҙәрендә ныҡ тороуын ул республика һәм СССР, РСФСР күләмендәге төрлө юғары трибуналар артына баҫып милләтсе (уның үҙ термины менән әйткәндә, «милли сикләнгән») ҡәләмдәше Йыһат Солтановты (исемен атамай ғына, ләкин яҙғандарын әйтеп!..) ярһып фашлау һәм уҫмаҡлауҙары менән дә шәп дәлилләне. Мәҫәлән, Йыһат Солтановтың тарихи хеҙмәттәрендәге: донъялағы арасалы беренсе тәгәрмәсте беҙҙең башҡорт бабалар яһаған, тип иҫбатлауҙарын ошолай юҡҡа сығарырға маташты:

«Мине һәр саҡта ла күңел төпкөлөнән сыҡҡан ике тойғо етәкләне, — ти ул, — *совет интернационализмы һәм милли үҙаң. Бында мин милли үҙаңды милли ирәбелектең һәм милли тыйнаҡлыҡтың юғары сағылышы тип аңланым һәм аңлайым. Ҡайһы саҡта ана шул тыйнаҡлыҡты юғалтыуҙы төҫмөрләһәм, үкенесле булып китә. Был, мәҫәлән, ҡайһы бер әҙәбиәтсе һәм тарихсыларҙың ата-бабаларҙың культура тарихындағы сигенә сыҡҡыһыҙ мәртәбәләрен дәгүәләүҙә, дөйөм төрки, хатта дөйөм кешелек ҡомарҡыларынан бары тик үҙенекен, бары тик «беҙҙең» һыныҡты ғына һындырырға маташыуында сағылыш таба. Ундай юл менән барһаҡ, беҙҙең боронғо зат-ырыуыбыҙ тәгәрмәс майын кешелек тәгәрмәстең үҙен уйлап тапҡанға тиклем үк әҙерләй башлаған, тип анһат ҡына иҫбатларға ла мөмкин»...* (Мостай Кәрим. XXXVII Башҡортостан өлкә партия конференцияһында һөйләгән телмәренән. «Совет Башҡортостаны» гәзитенең 1984 йыл 21 ғинуар һаны).

Аңлатма: «Ағиҙел» журналының 1982 һәм 1984 йылдарҙағы дүрт һанында Йыһат Солтановтың «Урал батыр шәжәрәһе» тигән тәүәрихе ташҡа баҫылып, журналдың йыллыҡ бүләгенә лә лайыҡлы булғайны һәм был хеҙмәттә йылҡы малын беренсе башлап ҡулға эйәләштереү, донъялағы беренсе арасалы тәгәрмәсте яһау үҙебеҙҙең Уралда — башҡорт бабалар тарафынан башҡарылыуы комплекслы тикшеренеүҙәргә таянып иҫбатланғайны...

Мостай Кәрим үҙенең Назар Нәжмигә ҡарата яҙған раҫлауындағы трибунасыллығында ныҡ тороп, совет иленең уның өсөн мөмкин булған көллө форумдарында ла бөтәбеҙ исеменән лаф ороп йөрөй, бөтәбеҙ исеменән һауа ярып һөйләй ине. Яратҡан арғымағы — бер килке ҡәләмдәштәренең башҡа бер кемгә лә мәғлүм булмаған, фәҡәт ул ғына зирәк күрә алған яман сирен — *башҡорт милләтселеген* илгә фашлау; был йәһәттән уның һәр бер раҫлауы беҙҙең тынсыу мөхиттә бер кемгә лә шикләнергә ярамаған директива кеүек ҡабул ҡылыныр ҙа шулай һаналыр ине.

1984 йыл, «Совет Башҡортостаны» гәзитенең 21 июнь һанында:

«РСФСР-ҙың унынсы саҡырылыш Верховный Советының туғыҙынсы сессияһында КПСС Үҙәк Комитетының апрель (1984 йыл) Пленумы, СССР-ҙың ун беренсе саҡырылыш Верховный Советының беренсе сессияһы ҡарарҙары, КПСС Үҙәк Комитетының Генарльный секретаре, СССР Верховный Советы Президиумы Председателе К.У. Черненконың уларҙа яһаған сығыштары нигеҙендә Россия Федерацияһы халыҡ депутаттары Советтарының бурыстары тикшерелә. 20 июндә ул Мәскәүҙә Кремлдең Ҙур һарайында эшен дауам итте.

Депутаттар һәм ҡунаҡтар В.И. Воротников, Г.В. Романов, В.В. Кузнецов, И.В. Капитонов иптәштәрҙе оҙаҡ ҡул сабыуҙар менән ҡаршы алды».

Ҡайһындай ҙа ҙур форум һәм ҡайһындай ҙа мәртәбәле кешеләр! Бөйөк державаның бөйөк мәсьәләләрен уртаға һалып хәл ҡылырлыҡ был оло йыйынға Башҡортостан вәкиле лә республикабыҙҙың, халҡыбыҙҙың ошоғаса хәл ителмәгән

ихтыяждарын һәм мохтажлыҡтарын ҡыйыу илтеп һалғандыр ҙа хәл ителеүенә өлгәшкәндер, тигән өмөт уяна. Әммә-ләкин...

Бына шул бөйөк форумда Башҡорт АССР-ы Әлшәй һайлау округынан халыҡ депутаты, РСФСР Верховный Советы Председателенең урынбаҫары М. С. Кәримов (Мостай Кәрим) телмәренең «изюминка»һы:

«Ҡайһы берҙә теге йәки был йән көйҙөргөс факттарҙы осратырға тура килә... Милли республикаларҙан, милли тыйнаҡлыҡ һәм фәнни объективлыҡ тойғоһон юғалтҡан бәғзе бер тарихсылар йәки әҙәбиәтселәр тарихты күпертеп күрһәтеүгә, үткәндәрҙе ал да гөл итеп тасуирларға тотона, боронго ҡомартҡыларҙан үҙенә өлөш ҡайырырға һәм шунда үҙ мөһөрөн баҫырға тырыша; йәнәһе, улар башҡалар көнләшһен өсөн бик боронго культураға ҡыҫылышы барлығын иҫбатламаҡсы. ***Бер милли әҙип[10] нәҡ уның ата-олатайҙарының тәгәрмәсте уйлап табыуын тылҡый.*** *Бындай саҡта инде башҡа берәүгә тәгәрмәс майлау өсөн дегет ҡайнатҡандарын иҫбатларға тотоноу бер ни тормай; имеш, тегеләр тәгәрмәс менән булашҡанда уныҡылар дегетте күпкә элегерәк яһаған. Үткәндәргә ошондай, әгәр әйтергә рөхсәт икән, «киң» ҡараш — беҙҙең социалистик тормошобоҙ нормаларына бер нисек тә тап килмәгән* ***милли сикләнгәнлек***[11] *билдәһе ул».*

Иллә тапҡан даһа Башҡортостан исеменән бөйөк держава форумында хәл ҡылаһы олуғ проблеманы!..

Тап ошондай сығырынан сыҡҡандарға яуап иткәндәй, донъяға танылған әҙип Сыңғыҙ Айытматовтың әсе иронияһы яңғыраны тап шул осорҙа:

«Что же это за национальная культура, которая не имеет своей базы?

Но когда подобные болевые мысли высказываются, то тут же находятся люди, которые начинают рассматривать это как ***проявление национализма, узости взглядов.*** *К сожалению, этот зуд сверхбдительности, проистекающей в немалой степени от* ***карьеризма,*** *не встречает должного осуждения. Необходимо отметить в связи с этим, что в результате такая тенденция породила на местах особый тип* ***демагога — говоруна-трибунщика,*** *который сделал для себя восхваление русского языка к месту и не к месту и умаление собственного чуть ли не престижной профекссией».* («Литературная газета»ның 1986 йыл 13 август һаны).

Ошо бөйөк «демагог — говорун-трибунщик» бейек трибуналарҙан да, түбән һөйрәлеүсе салғый аҫтарынан да саяндай ағыулы телен һуҙып ҡанымды күп ҡайнатҡас, был ғына аҙ, тигәндәй, ул йәнә лә үҙенең кесе ҡәләмдәше Йыһат Солтановты, өс бала атаһын, «Ағиҙел» редакцияһындағы икмәк һыныҡлыҡ эшенән дә ҡыуҙыртып, заманында эшһеҙ интегеп йөрөүсе Рәми Ғарипов хәленә төшөрөргә тырышты (тик мин шул йылда уҡ эштән, һыйҙырмағастары, «үҙ теләгем» менән киттем. Ишле генә ғаилә өсөн матди яҡтан хәтәрлекле был хәл иткес аҙымымды яһауҙа хәләл ефетем Сания Ғиниәтулла ҡыҙының хәлемде яҡшы аңлауы, ихлас теләктәшлеге ифрат ҙур ярҙам итте).

Бына шул бөйөк «трибунщик» әүҙем ҡатнашҡан, Йыһат Солтановтың яҙмышы менән уйнаған “бөйөк” ултырыш протоколы:

Протокол №1, 8 июнь 1984.

---

[10] Йыһат Солтанов, әлбиттә!

[11] Көнгә ҡарап үҙ төҫөн алмаштырған хамелеон кеүек, заманаға яраҡлашып, «милләтселек» тигән боронғо терминын шулай алмаштыра.

Йыйылыш БАССР Яҙыусылар союзы идараһында (Ә.М. Мирзаһитов бүлмәһендә) бара.

Ҡатнашалар: Мостай Кәрим, Әсғәт Мирзаһитов, Әмир Гәрәйев, Ғилемдар Рамазанов, Рафаэль Сафин, Рәшит Солтангәрәйев, Булат Рафиҡов, Әнүр Вахитов, Роберт Байымов, Әсхәл Әхмәтҡужин, Муса Ғәли, Динис Бүләков, Әхнәф Дилмөхәмәтов (КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты Культура бүлегенең мөдире).

Көн тәртибе: «Ағиҙел»дең быйылғы 9-ынсы һанын тикшереү.

Н. Нәжми шиғырҙарын ҡыҫҡырып уҡыу.

Х. Ғиләжев шиғырҙары.

А. Ҡотоев шиғырҙары.

Фекер алышыуҙарҙан бер өҙөк

***Ғ. Рамазанов**. Игебай егерме йыл элек тә шулай эшләй ине, әле лә шулай. «Гений»ҙарҙан ҡурҡа ул!* («Гений» тигәндән, Назар Нәжми күҙ уңында тотола. — *Й.С.*).

***Рәшит Солтангәрәйев**. Кадрҙарҙы безболезненно алмаштырырға кәрәк, бер бүлек тә үҙ-үҙенә тура килмәй.*

***Ә. Мирзаһитов**. Беренсе сара — редколлегияны нығытайыҡ, икенсе сара — кадрҙарҙы нығытайыҡ.*

***Мостай Кәрим**. «Урал батыр шәжәрәһе»* (Йыһат Солтановтың. — *Й.С.*) *эссеһы нимә ул? Иптәш тарихсылар, аңлатып бирегеҙ! Бында бит тотош буталсыҡ, **бред**.* (Шефының ошо «тәрән ғилми» асышы булған «бред» билдәләмәһен Ә.М. Мирзаһитов Мәскәүҙәге «Литературная Россия» гәзитенең 1987 йыл 13 март һанында Йыһат Солтановтың ижадын ҡамсылағанында рәхәтләнеп ҡулланды. — *Й.С.*).

***Әнүр Вахитов**. «Урал батыр шәжәрәһе» эссеһына бүләк бирелде.*

***Ә. Мирзаһитов**. Номерҙы редколлегияһыҙ төшөрмәгеҙ. Премияларҙы ла редколлегияла хәл итеЛһен, әҫәр тормошҡа яңылыҡ бирһән булһын. Давайте, аппаратты нығытыуҙы* (йәғни Йыһат Солтановты эшенән ҡыуыуҙы. — *Й.С.*) *хәл итәйек!*

***Әхнәф Дилмөхәмәтов**. Бындай һөйләшеү һуңғыһы булмаһын ине. Журнал хаҡында съезда ла байтаҡ һөйләнде, ләкин эшкә тотонайыҡ. Редакторҙан тора бөтәһе лә: ул бөтә процесты ойошторорға тейеш! Хәҙер эшләргә ваҡыт! Беҙгә, редколлегия ағзаларына ла, эш бирегеҙ, беҙ ҙә буш булмайыҡ. Шунан килеп: бөтә эште обком алдына ла өйөп ташламағыҙ, кәрәкле эш түгел был. Журналдың күләмен арттырыу, минеңсә, иртә, булғанын яратып, матурлап сығарырға кәрәк. Оҙаҡламай подписка башлана — ең һыҙғанайыҡ, журналдың йөҙөн, оформлениеһын йәһәтләйек.*

***Әмир Гәрәйев** (баш редактор). Әйткәндәрегеҙ бөтәһе лә дөрөҫ... Солтановты алмаштырырға кәрәк. Кадрҙарҙы нығытайыҡ.*

***Ә. Дилмөхәмәтов**. Аҙаҡ ҡыйшанлап йөрөү булмаһын, джентельмен булайыҡ: нимә һөйләнелгән — ошонда ҡалһын...*

*Протоколды алып барҙы: **Әсхәл Әхмәтҡужин».***

Тағы ла бер ифрат мөһим документ -- башҡорт халҡы, республикабыҙ, мәҙәниәтебеҙ менән ҡуша шәхсән миңә ҡағылышлы:



Башкирский обком КПСС
Вх. № 41с на 10 листах
6 июля 1987 г.
Подлежит возврату в общий отдел

Контроль
БАШКИРСКИЙ ОБКОМ КПСС

т.ХАБИБУЛЛИНУ Р.Х.

Прошу Вас рассмотреть письмо т.Гареева Ю.И.

С уважением.

Е.Лигачев

"02" июля 1987 г.

тов.Султанову Ф.В.
тов.Бакирову У.Н.
тов.Дильмухаметову А.М.
тов. Аюпову ... А.М.

Прошу глубоко изучить вопросы, поднятые в письме, и дать заключение.

Р.Хабибуллин

"6" июля 1987 года

№ 270945-9л.

№ 41с

270945

ЦК КПСС

Я пишу не анонимку, но подписи и адреса под машинописью не проставил: Уфа пока не богата гласностью.

Член Союза писателей с 1936 г.

31/VI-87

Юсуф Ибрагимович
Гареев

450078, Уфа-78, Айская, №76, кв. 11

Башҡортостанды, башҡорт халҡын, башҡорт зыялыларын бысраҡҡа батырырға яҫҡанып яҙылған шикәйәтнамәнең кескәй өлөшөн күсерәм:

ЦК КПСС

Письмо подлежит возврату в ЦК КПСС вместе с пакетом

270945

СЕКРЕТНО

секретно

Прием почты 10.ИЮН 1987

С 1980 года примерно начались нездоровые тенденции среди башкир. Много татарских школ /в татарских селениях/ были переведены на башкирский язык обучения. Эти татарские деревни были заранее объявлены башкирскими. С каждой переписью населения то и дело в книге "Административно-территориальное деление Башкирии" число башкирских деревень росло, а татарские деревни исчезали.

каждом районе. Везде вырастали башкиры, исчезали на бумаге татары! Так понимал т.Шакиров, вернее, так искажал Советскую власть и политику КПСС.

А собственно почему он так поступил? /Проявления башкирского национализма видим не только в отношениях к татарам. И не только в области просвещения/.

Вот вопрос, почему так перестарался т.Шакиров. "Злые" языки говорят, что он, хотя на бумаге числится башкирином, вовсе не башкир, и как и его отец Закир Шакиров. Старик Закир учился в Казани в ветхозаветном медресе "Мухаммадия" и преподавал там после учебы. Он вырос, воспитывался в татарской среде. Только 1914 году переехал в Уфу, стал работать просвещенцем. Знакомые знают, ничего башкирского в нем не было. Мы не знаем, кто он по метрике?

Его сын Мидхат рос, учился в Уфе, работал в Уфе. Его мать - татарка. Баш. язык он не изучал, башкирской речью не

В последнее время Башкниготорг, Башпотребсоюз все меньше и меньше закупают книг из Казани. Это тоже политика. Это для того, чтоб больше читали башкирских книг. Редактор татарского журнала "Азат хатын" Э.Ихсанова в письме сообщила, что 20 тыс. подписчицам этого журнала в Башкирии выписали башкирский журнал "Башкортостан кызы". Сделать это очень легко. В колхозах подписываются обычно не на почте, а в правлении колхоза - там составляются ведомости. Перевести единицу из графы в другую, и получают не то, чего хотели.

"Башкиризация" происходит и там, где несведущие люди об этом и не мыслят. Генерал Шаймуратов, Герой Советского Союза М.Губайдуллин, дипломат Каримов, поэты прошлого века Хибетулла Салихов, Абелманих из Каргалы и др. превращены в исконных башкир, хотя они совсем не башкиры, как будто их деяния, творчество приобретают особое значение, если они станут башкирами. Нашелся ученый, который даже в Старом Египте нашел башкирского поэта. Неважно то, что человек сделал. Важнее его метрика! Если по метрике башкир, значит, знай наших.

Доказывают, что поэт Акмулла по отцу - казах. Мать его после смерти мужа вышла за башкирина Камалетдин замуж, естественно, привела малолетнего сына в эту семью. Потом этот малыш стал поэтом, писал на казахском, татарском /вернее, на языке общем для тюрков "тюрки"/. Похоронен он близкими друзьями в Челябинской области. На могиле около 90 лет простоял камень с надписью, которая доказывала, что поэт Мифтахетдин является сыном Мухамадияра, воспитанником Камалетдина. Фото этого надгробного камня можно увидеть в снимке, помещенном в журнале "Адаби Башкуртстан" /Литературная Башкирия/ номер 9 за 1959 год. Этот камень очень мешал некоторым делягам, помешанным на "башкиризме". Поэтому в Уфе изготовили новый камень, где утверждался, что поэт истинный сын башкирина Камалетдина. Вот так. Метрика важней всего творчества поэта! Поехали на место захоронения Акмуллы, и, сняв подлинный надгробный камень, установили свой "башкирский".

Три года тому назад в журнале "Агизел" были обнародованы 3 больших статьи "писателя" З.Султанова об истории башкир, об истории языка и прочая дребедень. Статьи невнятные, путаные, безграмотные, вредные. Ученый Суфиян Сафуанов сказал в разгоре очень кратко: "По этим материалам выходит, что

вся культура зародилась на Урале и распространилась затем по свету".

Как это дурь пропустили в журнале, нам непонятно. А на что смотрел секретарь обкома по идеологии Ахунзянов, тоже неведомо. Как бы ни было, автору статей этого ярого "башкириста" выдали годовую премию журнала.

Скажем о некоторых положениях этих постыдных статей:

Автор устанавливает башкирско-шумерские связи, башкирско-скифские связи. По его мнению, " просвещенному до высшего совершенства", такие связи были. Диких лошадей сделали ручными в Башкирии. Откуда брали коней цари Кир, Дарий, Чингизхан, Князь Святополк автор нег говорит. Не смейте думать что слово "сувенир" не башкирское слово. А что значит слово Афродита? Так знайте: это слово башкирское, означает "АПРА́ ТҮТӘЙ" /"из бурноподнявщегося теста тетя"/. Автор свой "открытия" в одном месте даже сравнивает с открытием Генделя. Вот так вот. Знай наших!

Прошло много времени, но кроме восхваления этих статей, никакого опровержения "глубоких истин" Султанова и возражений не было. Значит, "новоявленный башкирин Султанов изрек правду, только правду. /Он – татарин, так хорошо подделался под вкусы национализма./

у. 1987.

Гареев Ю. И. – Гареев

Уфа, -78

ул. Айская, 76 кв 11

10/VI 87.

Шулай итеп, “Йыһат татар икән”, тип ауыҙын күпертеп ғәйбәтләп йөрөүсе Рәшит Солтангәрәйев менән бер ҡатарҙан Йософ Гәрәй тигән, Сталин репрессияһы йылдарында “Октябрь” (хәҙерге “Ағиҙел”) журналында палачты данлап “Ежов иптәшкә” тип шиғыр баҫтыртҡан был һөрһөгән татар ҙа мине, аҫаба башҡортто, татар тип раҫлап, шул уҡ ваҡытта башҡорт милләтсеһе рәүешендә Мәскәүгә -- КПСС-тың Үҙәк Комитетына уҡ еткергән. Ғәмәлдә Мостай Кәрим, Ә. Мирзаһитов, шул уҡ Р. Солтангәрәйев һәм Й. Гәрәйҙәр, тимәк, Йыһат Солтановҡа ҡаршы бер төптән һөжүм иткән...

Баш осомдағы ҡара болоттарҙы кем ҡуйыртҡанын яҡшы белгәнмен — йән әсеһе менәндер инде, нәфрәтемде үҙалдыма аҡ ҡағыҙға ағылдырыуҙан тыйыла алмағанмын (башҡа сарам юҡ ине):

«Невежда и злодей, украсивший свой мундир золотыми медалями. Страшно не то, что полный невежда, а то, что он свое невежество возводит в ранг просвещенности и

превращает в эталон... Собственноручно срезать ленту собственного музея — даже латиноамериканские диктаторы не додумались до этого! Факт достойный сатиры Салтыкова-Щедрина!»

Ысынлап та, теп-тере халыҡ шағирының «үлемһеҙ» абруйын һис кенә лә биҙәмәйҙер был шанлы музей тарихы. Бына рәсми органдағы ғибрәтле бер мәҡәлә:

Улы булып илдең, замандың...

1-енсе республика мәктәп-интернатында Мостай Кәримдең тормош юлы һәм ижады кабинеты асылды.

Митинг (мәктәп директоры И. Вәлиев, уҡытыусы Р. Әсфәндиәрова, IX класс уҡыусыһы З. Сынбулатова сығыш яһай).

БАССР мәктәбенең атҡаҙанган уҡытыусыһы С.Х. Зайлалова һөйләй, М. Кәримдең тормош иптәше Роза ханыма оло рәхмәтен белдерә (экспонаттар өсөн). БАССР Яҙыусылар союзы идараһы секретаре Булат Рафиҡов... үҙенсәлекле кабинетты «сәнгәт һәм аҡыл донъяһына бер ишек» тип атаны. Һүҙ Башҡортостандың халыҡ шағиры, Социалистик Хеҙмәт Геройы, Ленин, СССР һәм РСФСР Дәүләт премиялары лауреаты Мостай Кәримгә бирелә... Почетлы ҡунаҡтар кенәгәһенә тәү башлап элек ошо уҡыу йортонда тәрбиәләнгән проф. Ғ. Хөсәйенов яҙа, башҡалар ҡултамғаларын һала... Сәхнәгә танылған артистар З. Бикбулатова, З. Мәхмүтов, О. Ханов, З. Вәлитов, Р. Фәсхитдинов, Т. Үҙәнбаева, Э. Юнысова күтәрелде, Мостай Кәрим... әҫәрен һөйләне.

Тантаналы кисәлә БАССР Министрҙар Советы Председателе урынбаҫары В.Х. Байтурина, КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетының фән һәм уҡыу йорттары бүлеге мөдире Ә.М. Аҙнабаев, КПСС-тың Өфө ҡала комитеты секретаре Р.Н. Мирсаев ҡатнашты.

С. Шәрипов. («Совет Башҡортостаны» гәзитенең 1986 йыл 21 октябрь һаны).

Ошо бөйөк тарихи ваҡиғанан һуң тиҫтәгә яҡын йыл үткәс, ошо уҡ гәзиттә ошо уҡ бөйөк шәхескә бәйле икенсе бер ҡыуанысль хәбәр иғлан ҡылына (Марат Ғафаров. Һәйкәлгә хаҡлы. — «Башҡортостан» гәзитенең 1999 йыл 24 ноябрь һаны). Шаҡтай ғибрәтле йөкмәткеһе, уны ипкә килтереп иншалағанда һәм урындағы иптәштәрҙең ваҡиғаны үҙ күҙҙәре менән күреп һөйләүенән файҙаланғанда, яҡынса түбәндәгенән ғибәрәт.

Коммунистар партияһы «эпохабыҙҙың аҡылы, намыҫы, выжданы» булып шаулаған билдәле бер заманда КПСС-тың Мәсетле райкомы секретаре, район үҙәгендә яңыртылып ҡалҡынасаҡ Ленин бюсын бронзанан ҡойҙорторға тип, Ленинградҡа юлланған. Ләкин ундағы һәйкәлдәр ҡойоу заводында бер генә даналыҡ заказды ҡабул ҡылмай, бер юлы иң кәмендә икәүгә заказ бирергә талап иткәстәре райком секретаре, күп уйлап тормай, икенсеһе итеп заманабыҙҙың бөйөк йырсыһы Мостай Кәримдең һоҡланғыс бөҙрә башын яһауҙарын үтенгән (йәнәһе ул оҙаҡламай йә үләсәк, йә икенсе тапҡыр Социалистик Хеҙмәт Геройы буласаҡ — ҡайһылай ҙа барыбер һәйкәл ҡуйырға тура килер), һөҙөмтәлә районға ике баш бронза һәйкәл ҡайтҡан. Лениндыҡын шунда уҡ күтәрткәндәр, ә икенсеһен, ул замандың партия ҡануны ҡушҡан баяғы мотлаҡ ике осраҡтың береһен көттөртөп, келәткә бикләгәндәр. Әммә көтмәгәндә коммунистар режимы түңкәрелеп, һәйкәлдәр күтәреүҙе ҡыҫымлаусы ҡанун да юҡҡа сыҡҡас, келәттәге бер иле саң баҫҡан бөҙрәле баштың баш ҡалабыҙҙағы теп-тере нөсхәһе үҙе, район администрацияһы башлыҡтарына кешеләр аша әйттертеп, йәки район түрәләре баш ҡалаға килгәндәрендә шәхсәнә үҙе ҡыҙырыҡлап, һәйкәлде тиҙерәк ҡуйҙыртырға

ныҡышҡас, көндәрҙән бер көндә тәүәккәлләп, бронза башты келәттән сығарғандар ҙа теге йылдарҙа Сталиндан бушанып ҡалған бер постаментҡа суҡайтҡан да ҡуйғандар имеш...

Үҙе тере килеш!.. Ул заманда көтөлмәгән хәл ине был, әлбиттә...

Ялағайҙары зыҡ-ҡубышып постаментҡа күтәргән бронза баштың ул саҡтағы теп-тере оригиналы тураһында уның мәрхүм ҡәләмдәше 1968 йылда уҡ яҙып ҡалдырған хаҡ һүҙҙәр иҫкә төшә:

«Ә Мостай ағай? Ул бит аҡыллы, милләттән өҫтөн булып ҡылана... Тимәк, уға ышанып булмай.

Минән дә бәхетһеҙерәк! Халҡы юҡ, ә үҙе ышанған кешеләре — барыһы ла һатлыҡ йән...» Һәм йәнә лә икенсе бер урында, 1964 йыл: *«М. Кәрим? Нишләптер уны, бик ҙур шағир итеп танығанда ла, илебеҙ төҫө итеп танып булмай әле. Халыҡтың аһ-зары юҡ унда. Бәлки, шунда уның оло талантының трагедияһылыр ҙа? Башҡорт шиғырын ул иң юғары баҫҡысҡа күтәреүсе булһа ла, ысын башҡорт халыҡ шағиры була алғаны юҡ. Президиум уға исемде Башҡортостан халыҡ шағиры тип дөрөҫ биргән.*

Ләкин донъяла ***башҡорт халыҡ шағиры*** *ла тыуырға тейеш».* (Рәми Ғарипов. Әҫәрҙәр, II том. Өфө «Китап» 1998; 493-өнсө бит һәм III том, 29-ынсы бит). Былар, әлбиттә, ул саҡтарҙа кеше күрмәгән-ишетмәгән, авторы вафатынан һуң күп йылдар үткәс кенә мәғлүм ҡылынған көндәлек биттәренән...

Яҙҙым «Ядкәр»...

Эйе, «**Я**дкәр». «**Я**дкәр» һүҙенән — «**я**ҙыу», «**я**тлау» һүҙҙәре хасил булмыш, ә һис тә «**йә**дкәр — **йә**ҙеү — **йә**тләү» түгел. Бының шулай икәнлеген шул исемле романымда (Башҡортостан китап нәшриәте. 1992, «Ядкәр») ентекле аңлатҡанмын. Шуға күрә редакциялар текстарымдағы «**я**дкәр»ҙәрҙе «**йә**дкәр» тип төҙәтмәһен, кемдәрҙеңдер наҙанлығын миңә япһармаһын ине!..

«Ядкәр»... Үҙебеҙ йәшәгән дәүерҙәге халыҡ тормошоноң ҙур ғына бер киҫәген, йәнде әрнеткән проблемаларын сәнғәт саралары менән киң ҡоласлы сағылтыу теләге яҙыусылыҡ булмышымды биләгәндән-биләне һәм тәбиғи рәүештә роман жанрына ныҡлап керешеүемә этәрҙе — прозаиктарҙың күптәре өсөн ҡануни хәл ине был. Әммә башҡорт совет әҙәбиәтендә үҙ башы һәм йөрәге менән уйлап белмәй торған, ләкин дипломлы ҡанунсылар исемлегендә йөрөтөлгән әҙәби тәнҡитселәребеҙ тарафынан барыбыҙға эталон итеп тағылыусы тере классик Мостай Кәримдең һис тә киң ҡоласлы түгел, ә аршынлап, йәки ҡарышлап ҡына үлсәмле, кеҫәгә генә һалып йөрөтмәле бәләкәс прозаһы ла бар ине һәм ул проза ҡалын китаптарға, тере классиктың үҙ һүҙҙәре менән әйткәндә, «ҡабарынҡы фолианттар»ға (мәҫәлән, Яныбай Хамматов, Ноғоман Мусин романдарына) ҡаршы ҡуйыла ине. Хамматовтың роман артынан роман сығарыуына эсе бошоп һәм уның «Бөртөкләп йыйыла алтын» тигән маҡтаулы әҫәренең алтынын «ҡом» менән бутап, РСФСР яҙыусыларының V съезында Кремль һарайынан ошолай вәғәзләне ул:

«В обстановке всевозрастающей нивелировки в искусстве, заурядность и серость, ремесленничество и подделки возводятсы в степень незаурядности, приравниваются к эталонам и, таким образом, смещаются критерии, смешиваются ценности. Если добытые уже ***золотые россыпи*** *смешивать* ***песком,*** *в выигрыше всегда будет песок, в проигрыше — золото... От подобных писаний мы высокомерно отварачиваемся: «Это за пределами*

художественной литературы!» — говорим мы. А они, локтями расталкивая робких и совестливых, выходят сначала в пределы толстых журналов, оттуда перекочевывают в пределы ***пухлых фолиантов*** *и собраний»...* («Советская Башкирия» гәзитенең 1980 йыл 12 декабрь һаны).

Әйткәндәрен һүҙҙә генә ҡалдырмай, әүҙемләнеп бойомға ла ашырҙы: мәҫәлән, Яныбай Хамматов Мәскәү нәшриәтендә сығарырға әҙерләнгән романын Мостай Кәрим нәшриәт планынан алдыртып ташлауы тураһында оҙаҡ зарланып йөрөнө (ә Башҡортостан китап нәшриәтенә һалған шауҡымы былай ҙа аңлашылалыр)... Әҙәбиәтебеҙ аҡһаҡалының «ҡалын романдар»ҙы кире ҡағыуын Башҡортостан Яҙыусылар берлеге рәйесе Әсғәт Мирзаһитов үҙенең даими эш ҡоралы итеп алды, уның ошо эш алымы, тора-бара, Мәскәү матбуғатында ла («Литературная Россия» гәзитенең 1987 йыл 13 март һаны), үҙебеҙҙә лә киң сағылды:

«Был йәһәттән иң күп шау-шоуҙы Яныбай Хамматов тыуҙырҙы. Уның тәүге әҫәре — «Бөртөкләп йыйыла алтын» романы художестволы эшләнеше яғынан яҡшы баһа алғайны. Тик ул һуңынан шул уҡ алтын йыуыусылар тураһында художестволы кимәле түбән булған йәнә дүрт роман яҙып, ***«гигантомания»*** *менән «ауырыуҙа» тамғаланды»...* («Ағиҙел» журналының 1987 йыл 9-ынсы һаны, 4-енсе бит).

Иң мөһиме, романдарҙың художество сифатын күтәреүҙән дә бигерәк, уларҙың күләмен «кеҫәгә генә һалып йөрөтөрҙәй» кесерәйтеү өсөн көрәшергә кәрәк, сөнки бөгөнгө кешенең ҡалын романдар уҡырға ваҡыты юҡ, тип асыҡтан-асыҡ раҫлап, күрәләтә тайғаҡ юлға баҫты әҙәбиәт етәкселегендәге «генерал»дарыбыҙ. Тимәк, Лев Толстой, Федор Достоевский, Иван Гончаров томдарының да көнө бөттө, тигәнгә табан юл алдыҡ...

Ошондай ғәрәсәтле шарттарҙа яҙылды «ҡалын» романым; тәүге варианттарында ул ҡәләмдәштәргә уҡытҡанымда «Ятлағандарға — ядкәр» һәм йәнә Зәйнәб апай Биишеваның тәҡдиме менән «Мотал һәм башҡалар» исеме менән дә йөрөп алды бер талай. Әммә рәсми тикшереүгә секцияға ул үҙенең берәгәй исемендә ҡуйылды:

1974 йыл. Протокол №4.

1974 йылдың 4 мартында Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының проза секцияһы бюроһының ултырышы булды. Секция эшендә Әнүр Вахитов, Яныбай Хамматов, Фәрит Иҫәнголов, Ноғоман Мусин, Шакир Янбаев, Ғәйниә Әбсәләмова, Хәкимйән Зарипов, Динис Бүләков, Йыһат Солтанов ҡатнашты.

Көн тәртибендә: Йыһат Солтановтың «Ядкәр» романын тикшереү.

Председатель: Ә. Вахитов.
Секретарь: Д. Бүләков.

Фекер алышыуҙа ҡатнашты:

1. Ноғоман Мусин. *Тәүге ике өлөштә төп геройҙар менән танышыу бирелә. Шунан ниңә «Хәреф йыйыусынан бер һүҙ» килеп инә? Сәйерерәк. Автор ҙа булып сыҡманы, абстракт һөйләүсе булып ҡалды. «Тәлмәрйен» һүҙен асыҡлау бәхәсенең кәрәге бармы икән, тип уйланылды. Шунда уҡ «ҡамса», «үрмес» һ.б. биреү, аңлатыу кәрәкме икән? Атаман Дутов, йәш Дутов, килеп инә, был — әҫәр башына бер ойотҡо һалып ҡуя, ләкин был үҫеш бирмәй. «Аҡ ҡайын» бүлегендә яңы геройҙар Иван, Яков, Люба инә. Сюжет һыҙығы — ҡыҙыҡ ҡына. Тәүге дүрт бүлекте йыйнаҡлау кәрәк. Хәреф йыйыусының икенсе һүҙе арыу ғына — бурһыҡ мәсьәләһе. Артабан автор әҙәбиәт, тарих, ижад тураһында фекер йөрөтә. Бүлек оҙон түгел,*

тәрән фекерле, матур. Ләкин ошоларҙы артабан ҡабатлай башлау ваҡлай. «Хәреф йыйыусынан өсөнсө һүҙ» — һыуыр, ҡомаҡ хаҡында. Ләкин ул нимәгә кәрәк булды икән, автор ни әйтергә теләй? Аҙаҡ әйтә: 600 меңләп башҡорт астан үлә, ләкин ниңә — позиция асыҡ түгел. Бындай фекер йөрөтөү ярамай. 8-енсе бүлектә тағы ла тарих тураһында бәхәс ҡуйырып китә. Алда телгә алынган нәмәләр ҡабатлана. «Хәреф йыйыусының дүртенсе һүҙ»е — тоже уйландыра, тик фекерҙе тарҡата төҫлө. Артыҡ байыҡтырылган — әкиәт, легенда һ.б. менән әҫәрҙең дөйөм бирелешенә зарар итмәйме? «Аҡ ҡайын төбөндә аҡ бәпес һикертеү» — матур ғына, ләкин диссертацияның тәүге өлөшөн биреү кәрәкме? Күҙ алдында барырлыҡ эпизодтар әкиәт менән өн араһында юғала кеүек. «Бишенсе һүҙ» — ҡатмарлы мәсьәләләр. Шовинизм мәсьәләһе килеп инә. Йәнә әкиәт ҡулланыла, ә уны бит төрлөсә бороп була. Бигерәк тә шовинизм мәсьәләһендә һаҡ булырға кәрәк. Аҙаҡ булган тарихи ваҡиғалар әйбәт бирелгән, шулар менән сикләнергә ине. «Катастрофа» — Әғләм улының яңы баҫҡысҡа күтәрелеүен күрһәтә, бик кәрәктер, ләкин оҙон. Гөлзифа менән айырылышыуы — төрлөсә, буталсыҡ, сиге юҡ кеүек, ялҡыта башлай. Был бүлекте саҡ ҡына уйлабыраҡ яҙырға кәрәк ине. Әҫәрҙә «Ҡара кеше» бар. Тәүге вариантта был ҡотосҡос кеше — ҡарасҡы ине. Әғләм улы Дилбәрҙе яратҡас, «Ҡара кеше» тағы күренә, килешмәй. «Хәреф йыйыусының алтынсы һүҙ»е — башҡорт хөкүмәте тураһында бара. Был урында уҡыуы ҡыйыныраҡ. Люба менән танышыу шәп, Дилбәр менән танышыу — шәп! Ләкин Әғләм улы менән Дилбәр бәхәсендә тарих тураһында йәнә ҡабатлана. Әғләм улының үлергә йөрөүе лә аҡланмай. «Хәреф йыйыусының етенсе һүҙ»е лә арыу ғына, тормошсан. «Ҡайҙа һин, Дилбәрем» матур. Бында әйбәт бара. Ләкин расаға, милләткә бүлеү килеп инә, был эш һаҡ хәл итеслә бит. «Мөғжизәнең тыуыуы» — һәйбәт. Автор нисектер ошонда әҫәрен йомғаҡлаган кеүек. «Алмас ҡылыстар ялтлаган яҡта» — артыҡ кеүек. Очеркса яҙылган. Ямап ҡуйған, йөйлө. Яңы тыуасаҡ әҫәрен төҫмөрләтеп кенә ҡуйғанда, етмәйме икән.

Йәмғеһе: Йыһат ғәжәп эш эшләгән, киң, ҙур фекер йөрөтә. Ғөмүмән, ҡайһы бер нәмәләр сәйер тойолһа ла, был — буласаҡ романдың сюжет яңылығылыр, тимен. Йыйнаҡлап, ныҡлап ҡарап сыҡҡас, әҫәр бар, тип уйлайым.

***2. Фәрит Исәнголов**. Ноғоман ентекле һөйләне, был беҙҙе күп нәмәнән ҡотҡара. **Фекерем бер: минеңсә, башҡорт романистары араһына күркәм, һәйбәт яҙыусы килә.** Роман сәйерерәк ҡабул ителәлер, беҙ бер төрлө өйрәнгәнбеҙ инде, ана шул сәйерҙән сәйерерәк нәмәләрҙе генә һәйбәтләү бурысы тора. Иң төп бурыс — әҫәргә ниндәй фекер һалған, форма — үҙенә ҡала. Уның эше. Әҫәрҙә «ҡамса» термины үҙен күтәрә алһа, аптырарлыҡ түгел. Автор тарафынан тарихҡа, шәхестәргә, матурлыҡҡа баһа биреү — трактат, монография һ.б. кеүек бара. **Автор тарихты шәп белә. Айырыуса күркәм эш итә лирик эпизодтар яҙғанда.** Әҫәр тарҡаумы? Беҙ, күнеккән традицион роман яҙыусылар өсөн — үтә тарҡау. Уҡыусылар өсөн дә тарҡау. Уҡыусыны, бәлки, күнектереү кәрәктер. Ләкин һәр саҡ мөмкинме? Был форма бар ул — ләкин ул яңы. Ләкин эш — матурлыҡҡа төрөп бирелгән дарыуҙа — әҫәр шулай ҡабул ителә.*

*Тарихҡа мөхәббәт һөйләүҙе уҡыусы яратмай. Тарихсы һөйләгәнсә түгел, ә сәнгәтсә килһә автор — һәйбәт булыр ине. Тарих һөйләү — ялангас. Фекер шул: әҫәрҙе таҙартып сыҡһаҡ, «Ағиҙел»дә баҫтыра алырлыҡ әҫәр бар. Ләкин икенсе ҡурҡыныс тыуа: социаль, политик йәһәтен, ғөмүмән, төп йәһәтен автор эстетика аша бирергә тейеш. Формаль рәүештә таҙартып сыҡһа, баналь бер әҫәр тора ла ҡала. Проблема ҡайҙа? Шул һорау тыуа. Бында саф тарих, саф политика бармай. Бында тарихтың предметы хаҡында һүҙ күп. Тарихҡа инеү — күп урын ала. Унда бәхәсһеҙ урындар күп. Былар минең ҙур шиктәр. Романдың йөкмәткеһе, форма менән эште хәл иткәс, **бик яҡты, бик матур, бөгөнгө көн художник күҙлегенән ҡаралған әҫәр тыуасаҡ.** Унан килеп, юҡҡа ғына бәхәс асылып китә. Тенденцияларыңды бик*

матур башлайһың, ләкин аҙағына тиклем еткермәгәнһең. Романды шулай күргем килә. ***Күргәне лә һәйбәт, ә күрәһем килгәне — тағы ла һәйбәтерәк.***

3. Яныбай Хамматов*. Фекерҙәр алда әйтелгәндәргә тап килә. Әҫәр формаһы ягынан яңы, ҡабул итеүе ауыр. Әҫәр бик таркау. Төрлө хикәйәт, экиәттәр кәрәгенән артыҡ. Кантчеканың үҙен тотоуы ла килешмәй.*

Ваҡиға ике төрлө бара: үҙ теле менән, образлы яҙыуы — шәп, ә инде тарихҡа инеп китһә — уҡыуы ҡыйын. Уларҙы образлаштырырға кәрәк ине. Ҡоро диалдогтар күп. Автор күберәк үҙе һөйләй. Бүлектәр ***эзопса*** *— әйтеп бөтөрмәй мәғәнәне. Ҡоро тарих. Ноғоман, бер аҙ эшләргә, ти, бында ең һыҙғанып, бөтөнләй, урыны менән таратып ебәреп, бик ныҡ ултырырға кәрәк. Дуртов тураһында кәрәкме? Партияға инеү өсөн ғариза? Политик хатаға урын ҡалдырмаймы? Иғтибар итергә. «Катастрофа» — һәйбәт. Шәмиголов тураһында асыҡланмай ҡала. Татар-башҡорт автономияһы тураһында кәрәкмәҫтер? Һаҡ булырға кәрәк. «Алмас ҡылыстар» бөтөнләй йәбешмәй.*

4. Шакир Янбаев*. Беҙҙең әҙәбиәттә был форма ниндәйҙер кимәлдә бар ул. Ләкин классик әҙәбиәттә бик хаҡлы ҡулланыла. Йыһат был форманы индерһә — ҡыйыулыҡ булыр ине. Хикәйәттәрҙең байтағының яңылыҡ булмауы күңелде ҡыра. Мәҫәлән, Хужа Насритдин тураһында. Публицистиканың, гәзит очергының инеп китеүе — шәп түгел. Тел: үтә йомарт. Буяуҙар артыҡ ҡуйырып, бөҙрәләнеп китә. Стиль, һүрәтләүҙәрҙең бер-береһенең ҡабатланыуы күп — былар натурализмға килтерә. Таҙартаһы урындар күп. Тарихҡа төпкәрәк төшәйек, ти, ләкин был күренмәй. Әллә ул яу ғына һаламы? Һуңғы глава — артыҡ. Бында кеше образы аша художестволы асыш юҡ. Әҫәрҙе шаштырыбыраҡ яҙыу ғәләмәте бар, саҡ ҡына психҡа оҡшаш итеп яҙылған, тем более «аҫылынам» тигәне — йәбешмәй. Әҫәр оҙон, уҡыуы ауырыраҡ, йыйнаҡлатырға кәрәк.*

5. Ғәйниә Әбсәләмова*. Форма тураһында һөйләшелде, образдарға ҡағылғы килә. Ваҡиға бер ай эсендә бара. Кеше яҙмыштары бик ныҡ бәрелешә. Нагрузка. Философия — уйланыусан, бәхәскә бай. Төп герой көсһөҙ күренә. Ҙур маҡсатлы кеше — бөгөлөп ҡала. «Ҡара кеше»нең бер күренеп ҡалыуы етәлер. Ул — ҙур эш эшләргә тыуған ҙур кеше, үҙен ҙур тоторға тейеш. Дилбәр образы: ул бик юғары фекер йөрөтә белә, тарих буйынса. Уның яҙмышын уйларға кәрәк ине. Үлеме ышандырмай. Роман художник исеменән алып барыла. Ул тоже бик эрудированный, ышандырмай. Быны мотивировать итеү кәрәк. Бәхәстәр күберәк ваҡ мәсьәләләр буйынса алып барыла. Даһи (гений) тураһында күп әйтелә. Яңғыҙ ҡайын тирәһе сәх-нәне хәтерләтеп ҡуйҙы.*

6. Д. Буләков*. Формаһы тураһында бында һүҙ күп булды. Әлбиттә, формаһы менән ҡатмарлы, ауырыраҡ. Ләкин, иптәштәр әйткәнсә, бөтөнләк етмәйерәк, ваҡиғалар бер-береһе менән тығыҙ бәйләнеп етмәй. Бөтә ваҡиғаларҙы бер епкәрәк теҙергә ине. Дилбәрҙең нисек итеп был ижад йортона эләгеүен нигеҙләргә ине. Уның Йәүҙәт менән бәхәсе оҙаҡҡараҡ һуҙыла, ялҡыта. Бында ҡабатлауҙар ҙа күҙгә ташлана. Йәүҙәт образы ла уңышлы ғына. Тел яғынан әҫәрҙе ныҡ эшкәртергә кәрәк (унда автор тел матурлыҡтары менән мауыға төшә). Айғыр-толпарҙарҙы урталағы бағанаға яҡшыраҡ, бергәрәк бәйләүҙе күҙ уңында тотһа ине автор. Теләк шул.*

7. Хәкимйән Зарипов*. Йыһатта Достоевский алымдары бар. Шағир хисе ныҡ ағыла романда. Бер яҡтан был — шатлыҡлы, икенсе яҡтан уйландыра. Нигеҙҙә иптәштәрҙең фекере менән килешәм. Художник шул тиклем тарихты ныҡ белә. Мотивировать итеү кәрәк. Тарихи әйберҙәрҙе, бәлки, Ғамзаттың «Мой Дагестан»ындағы кеүек бирергә кәрәктер. Главалар ҙурыраҡ. Бородиноға ике мәртәбә барыу артыҡ кеүек. Дилбәр менән осрашыу матур.*

8. Әнүр Вахитов*.* ***Роман бик уйландыра торған әҫәр. Композицияһы ҡыҙыҡлы.*** *Өс быуын вәкилен алған да — сағыштыра. Тәүгеһе легендарный итеп бирелә. Икенсеһе —*

драматизм менән һуғарылған яҙмыш. Өсөнсөһө — йәш художник яҙмышы — лирик планда бирелә. Былар һәйбәт, ләкин әҫәрҙең композицияһы уйландыра. Өс быуын да мин тип һөйләшә. Тарих күп. Әҫәрҙең конфликты булмағангамы икән, әллә ул килеп сыҡмаған? ***Бөтә алған геройҙары ла талантлы кешеләр, һәр береһенең үҙ донъяһы бар, уларҙы туплау кәрәк.*** *Әҫәр тарҡау. Артабан эшләүендә уңыштар теләйек, яңынан эшләргә кәрәк,* ***шунан шикһеҙ тәҡдим итергә нәшриәткә.***

Председатель: ***Ә. Вахитов.***
Секретарь: ***Д. Буләков.***

Ниндәйен дә егәрле, хәстәрлекле, яҡшы кешеләр булған беҙҙең заманда: ҙур күләмле һәм ҡатмарлы композициялы, формаһы менән сәйер-яңы һәм етешһеҙ яҡтары ла күп романды йыбанмай уҡып сығып, энәһенән-ебенәсә тикшереп, үҙҙәренең белеме, сәйәси инанысы, совет әҙәбиәтендә хөкөм һөргән социалистик реализм ҡанундары буйынса талапсан ҡараштарын ихлас асып һалғандар, кәмселектәрен бөтөрөргә игелекле кәңәштәрен биргәндәр.

Күренеүенсә, ғәмәлдә ыңғай баһаланған һәм нәшриәткә тәҡдим ителгән, ә барса булған килешмәгән урындарын яңынан эшләп сығырға авторҙың көсөнән килерлек. Тикшереүҙе уңышлы үтеүем тураһында республиканың көндәлек матбуғаты ла хәбәр итте:

Проза секцияһы ултырышы.

Башҡортостан Яҙыусылар союзы ҡаршыһындағы проза секцияһының сираттағы ултырышы булды. Унда яҙыусы Йыһат Солтановтың ҙур күләмле әҫәре — «Ядкәр» романы тикшерелде.

Роман хаҡында фекер алышыуҙа бер төркөм яҙыусылар һәм тәнҡитселәр ҡатнашты. Сығыш яһаусы Фәрит Исәнголов, Ноғоман Мусин, Яныбай Хамматов, Шакир Янбаев, Ғәйниә Әбсәләмова, Динис Буләков, Хәкимйән Зарипов һәм Әнүр Вахитовтар романға нигеҙҙә ***ыңғай баһа бирҙеләр.*** *Әҫәрҙе камиллаштырыу маҡсатында күп кенә кәңәштәр ҙә әйтелде. Ғөмүмән алғанда,* ***роман — авторҙың ижади уңышы тип баһаланды.*** (Ҡызыл таң» гәзитенең 1974 йыл 10 март һаны).

Башҡортостан Яҙыусылар союзында.

Башҡортостан Яҙыусылар союзы эргәһендәге проза секцияһының сираттағы ултырышы булып үтте. Унда шағир һәм прозаик Йыһат Солтановтың «Ядкәр» исемле романы тураһында һөйләшеү булды. Фекер алышыуҙа Фәрит Исәнголов, Яныбай Хамматов, Ноғоман Мусин, Шакир Янбаев, Әнүр Вахитов, Динис Буләков, Ғәйниә Әбсәләмова һәм Хәкимйән Зарипов ҡатнашты. Сығыш яһаусылар ***формаһы яғынан бик үҙенсәлекле был романды ыңғай баһаланылар.*** *Әҫәргә ҡарата ҡайһы бер кәңәш һәм теләктәр әйтелде.* («Совет Башҡортостаны» гәзитенең 1974 йыл 17 март һаны).

Ни тигәндә лә, рәсми секцияла тикшерелгән беренсе ҙур әҫәремә ҡарата шөйлә ҡыуанысла, өмөтлө нарыҡлау ине былар һәм мин ошо ҡулъяҙмамдың яҙмышы үтә ыҙалыҡлы-оҙон да, ғауғалы ла булырын, күп йылдар көрәшеп йөрөп, уның ҡыҫҡартылып имгәтелгән, «яңы форма»ның еҫе лә ҡалмаған һуңғы вариантын ифрат ҙур ауырлыҡтар аша ғына, тик *ун һигеҙ йылдан һуң ғына* көс-хәл менән донъяға сығара алырмын, тип һис кенә лә башыма ла килтерменем. (Ғөмүмән, минең мөһим әҫәрҙәрем 20 — 30 йылдан һуң

ғына — аяҡ салыусыларым хакимиәттән йә донъянан киткәс кенә сыға тора донъяға. Шөкөр, шуларҙы күрергә Дәү Хоҙай миңә оҙон ғүмер насип иткәндер).

Ғүмерем буйына холҡомдоң бер сифаты тынғылыҡ бирмәне: теләһә ниндәй шарттарҙа ла аҡты — аҡ, ҡараны — ҡара тип таныу һәм бәндәләрҙең ҡыңғырлыҡтарын, уларҙың биләгән вазифаларына ҡарамайынса, тура ярып әйтеү. Әмир Гәрәйевтең Башҡортостан китап нәшриәтендә баш редактор вазифаһы башҡарыуын һәм ундағы беҙҙең китаптарҙың яҙмышы менән теләгәнсә уйнай алыуын яҡшы белә тороп та, уның «Ҡарағайлы яҙҙары» тигән һәм графоманлыҡ кимәлендәге (хәйер, артабан да был әҙәми зат шул кимәленән күтәрелә алманы) повесен бер йыйылышта ҡаты тәнҡитләгәйнем. Шул уҡ төндә төш күрҙем: көр итеп үҙем үҫтергән, тамырҙарынан олоно буйлап ябалдашынаса көслө ағым булып күтәрелеүсе тормош һуттары үтәнән-үтә күренеп торған тере тирәгем күҙем алдында, көтмәгәндә, төбөнән ҡырҡҡандай һуттары туҡталып шиңде лә ергә лыпан йығылды. Тертләп уяныу менән үк, күңелһеҙләнеп уйланым: «Бөттө, нәшриәттәге китабым юҡҡа сыҡты!..» Юрауымдың дөрөҫлөгө шул көндәрҙә үк дәлилләнде: нәшриәттең махсус курьеры «Әүеҫлек башы аулаҡта» тигән шиғри ҡулъяҙма йыйынтығым һалынған папканы, ых-бых килеп, әллә ҡайҙа Черниковка осондағы фатирыма килтереп ташлап, ҡағыҙға ҡул ҡуйҙыртып алып китте. Бына Әмир Гәрәйевтең «сәләм»е:

Башҡортостан китап нәшриәте, №725, 7 октябрь 1974 й.

Хөрмәтле Йыһат Солтанов иптәш!

Ҡулъяҙмағыҙ менән ентекләп танышып сыҡтыҡ. Йыйынтыҡҡа тупланган әҫәрҙәрегеҙҙә байтаҡ ҡына кәмселектәр булыуы асыкланды.

Беренсенән, шигырҙар һәм поэма кесе йәштәге мәктәп балаларына тәгәйенләп яҙылһалар ҙа, улар балалар аңлап ҡабул итеү өсөн бик ауыр күренәләр.

Икенсенән, әҫәрҙәр оҙон, тарҡау, уларга фекер бөтөнлөгө етешмәй, ә айырым шигырҙарыгыҙ, йомгаҡлау өлөшө булмагангамы, тамамланмаган кеүек тойолалар.

Кесе йәштәге балалар өсөн яҙылган әҫәрҙәрҙең бер тема тирәһендәрәк ойошҡан булыуы йыйынтыҡты отошлораҡ яһар ине.

Ҡулъяҙмагыҙҙы, әлегә нәшриәттең тематик планына индереү мөмкин булмаганга күрә, кире ҡайтарабыҙ.

Эшегеҙҙә уңышлар теләп, нәшриәттең баш редакторы:

Ә. Гәрәйев.

Әмир Гәрәйев унда ултырған саҡта сыҡмаясаҡ китабың, тигән приговор ине был. Ысынлап та, кире ҡағылған ошо йыйынтығым оҙаҡ йылдар үҙемдә «ҡаҡланып» ятып, нәшриәттән Әмир Гәрәйев эҙҙәре һыуынғас ҡына, 1990 йылда «Аҡсарлаҡ» исемендәге китап булып ташҡа баҫылып сыҡты.

Күңелгә йылылыҡ биргәндәре лә булды: ул йылдарҙа республика гәзиттәре, ни тиһәң дә, әҙәбиәтебеҙгә яҡты йөҙ менән ҡарай — проза секцияһында тикшерелеп, ыңғай баһаланған әҫәрҙәрҙең ҙур-ҙур өҙөктәрен сығара ине биттәрендә. Романымды яңынан эшкәртеп ипкә килтергәнемдән һуң, олпат ҡына бер киҫәген «Совет Башҡортостаны» шул 1974 йылдың 12 октябрендә бирә башлағайны, ә 18-ендә, баҫылып бөтмәҫе борон, ҡапыл туҡталып ҡалды. Хафаланып редакцияға барғас, әҙәбиәт бүлегендә ошолай аңлаттылар: баҫманың өҙөлөүенә үҙегеҙҙең яҙыусылар берлеге рәйесе Ә.М. Мирзаһитов сәбәпсе. Ул, баҫма башындағы ғәҙәти редакция «кәрзинкә»һенә йәғни аңлатмаһына

сиктән тыш нәфрәтләнеп, гәзиттең баш редакторына шылтыратҡан һәм партия өлкә комитеты тарафынан уға бының өсөн «головомойка» яһаттырырға янаған. Баҡтиһәң, «кәрзинкә»ләге: «Яҙыусы Йыһат Солтанов үҙенең «Ядкәр» романының бишенсе китабын тамамланы. Ҙур күләмле итеп уйланылған әҫәрҙең был өлөшөндә...» тигән һүҙҙәр үҙенең төп етәкселек эшен әҙиптәрҙән «кеҫәгә һалып йөрөтмәле генә китаптар» яҙҙыртыуға ҡорған һәм билдәле «бөйөк» шефы менән берлектә шул йүнәлештә ҡыҙыу көрәш алып барған түрәбеҙҙең теңкәһенә ныҡ тейгән икән... Шул арала редакцияға килеп ингән Яныбай ағай Хамматов та үҙенең әле генә Яҙыусылар берлеге идараһында булыуын, унда Мирзаһитовтың, баяғы минең романдан өҙөк баҫыла башлаған гәзит бөкләмәһе менән өҫтәлгә һуғып, «ҡотороноп» ултырыуын һөйләне лә мине: «Инде уның тарафтан өҫтөңә бәлә-ҡазалар ябырылыуын көт, ҡустым», — тип киҫәтте. Өс көн эсендә мәсьәлә партия өлкә комитетында тикшерелеп, әҫәр өҙөгөн совет иленең йәшәйеше өсөн әллә ни зыянлыҡһыҙ, тип таптылар, буғай, сөнки гәзиттең 22 — 24 октябрь һандарында уны аҙағынаса еткереп баҫтылар. Ләкин Яныбай ағай Хамматов киҫәткән бәлә-ҡазалар миңә алдағы күп йылдар буйынса туҡталмай ябырылды...

1976 йыл буйы әҫәремә ҡарата юғары даирәләрҙән, ниһәйәт, мәрхәмәт яуыуын көтөп, ләкин уны көтөп ала алмайынса, нервыларымды сүбектәй туҙҙырып йәшәнем. Йыл аҙағындараҡ, ғәҙәттәгесә, алдағы йыл өсөн «Ағиҙел»гә яҙылыуҙы ойоштороу кампанияһы башланғас, халыҡҡа таратырға матур итеп буклет баҫып сығарылды, проза буйынса унда киләһе йыл баҫыласаҡ ошондай әҫәрҙәр күрһәтелгәйне:

Ғәли Ибраһимов. «Кинйә». Тарихи роман. Беренсе китап.
Әнүәр Бикчәнтәйев. «Хушығыҙ, көмөш ямғырҙар». Икенсе китап.
Ноғоман Мусин. «Мәңгелек урман». Роман. Икенсе китап.
Фәрит Иҫәнғолов. «Ҡышҡы йәйғор». Роман.
Йыһат Солтанов. «Ядкәр». Роман.
Ғәйфулла Вәлиев. «Өҫтамаҡ». Повесть.
Булат Рафиҡов. «Тауҙарҙа ҡар иртә ята». Повесть.
Азат Мағазов. «Атылған йондоҙҙар». Повесть.
Руслан Мәксүтов. «Такси — алтынсы яртыла». Повесть.
Вәзих Исхаҡов. «Тулҡындар ярға ҡаға». Повесть.

Беренсенән, күрһәтелгән биш романдың бер йыллыҡ журналға һыйыуы мөмкин түгел; икенсенән, ул романдар теҙмәһендә минекенең аҙаҡҡа ҡуйылыуы хәүефле ине. Баш редакторыбыҙ Рәйес йәштәш Низамов, өҫтәрәк Назар Нәжми хаттарынан асыҡ күренеүенсә, «үҙ фекере булмаған» һәм партия өлкә комитеты, яҙыусылар берлеге тарафынан иҫкән һәр елгә япраҡтай ҡалтырап торған йомшаҡ күңелле бер йән булып, 1975 йылда редакцияға яуаплы секретарь итеп әлеге лә баяғы шул карьерасы бәндә — белеме һай, илһамы тар, түрәләргә ялағайлығы көслө, миңә ҡарата ҡара эсле графоман Ә.С. Гәрәйев ҡуйылғас, шул һыҙғырып сығарған елгә буйһыныуҙан арына алмай ине. «Ядкәр»ҙе ул, баш редакторыбыҙ, 1975 йылдың ноябрендә уҡып сығып, уны 1976 йылдың икенсе яртыһында йәки 1977 йылдың тәүге яртыһында баҫып сығарырға вәғәҙә биргәйне. Ләкин Гәрәйевтең ыжғыр еле көслөрәк булып сыҡты: 1976 йылдың 31 декабрендә уның ҡоткоһо аша редколлегия ағзалары ауыҙынан романға яңы талаптар һәм дәғүәләр әйттертелде, былар барыһы әҫәрҙе фәҡәт тотҡарлау, йәки алып ырғытыу өсөн ине.

Шуларҙың бөтәһен 1977 йылдың апрелендә Башҡортостан яҙыусылар берлеге ойоштороған ҙур йыйылышта ҡәләмдәштәргә еткерергә уҡталдым:

Уртаға һалып һөйләшәйек.

Китап авторҙарының кәңәшмәһе тикмәгә саҡырылмағандыр, бында, моғайын, яҙыусының хеҙмәтенең ил алдындағы мөһимлеге, яуаплылығы, шулай уҡ автор һәм китап яҙмышы тураһында емешле фекер алышып, тәғәйен саралар күреү күҙ уңында тотолалыр. Был иһә һәммәбеҙгә ҡағылған, иң ауыртҡан мәсьәлә.

Һуңғы ваҡытта хөрмәтле идара етәкселәребеҙҙең иң ҙур трибуналарҙан тороп роман жанрыбыҙ тураһында «кирбес» тигән ләғнәтләү эпитеты ҡушып һөйләүҙәрен йыш ишетергә тура килгәнлектән, мин дә был урында үҙемде шаҡтай ғәйепле һанап баш эйәм. Сөнки 1962 йылдан биреле мин шул жанрҙа ҡарышып эшләп килдем, 1966 йылда «Ағиҙел»дә, ә 1967, 1969, 1975 йылдарҙа «Совет Башҡортостаны» гәзитендә ҙур-ҙур роман өҙөктәре баҫтырҙым. 1969 йылда «Коммунист», 1974 йылда «Ядкәр» тигән әҫәрҙәрем Яҙыусылар союзының проза секцияһы ултырыштарында тикшерелеп нигеҙҙә ыңғай баһаланды. Шунан һуң мин был ике әҫәрҙе лә артабан камиллаштырыу, матбуғатҡа әҙерләү өҫтөндә эшләнем.

«Ядкәр» романын 1975 йылдың 27 октябрендә «Ағиҙел» редакцияһына тапшырҙым.

Башҡорт һәм урыҫ халыҡтарының тәрән тарихи туғанлығын, хатта этногенетик ҡәрҙәшлеген дәлилләүҙе үҙәк проблема итеп ҡуйған был политик роман беҙҙең бөгөнгө башҡорт совет интеллигенцияһының изге социалистик Ватан, халыҡ бәхете өсөн фиҙакәр көрәше, беҙҙең сафтарҙағы идеологик таҙалыҡ, быуындарҙың күсәгилешлеге, тормошобоҙҙоң юғары әхләҡ нормаларын йәш быуынға аманат итеп биреп ҡалдырыу кеүек мөһим мәсьәләләргә арналған. Унда яҙыусылар, ғалимдар, рәссамдар, артистар, хужалыҡ һәм партия етәкселәре һәм башҡа төрлө профессия кешеләре ҡаршыһында үҙенең ҡырҡа үткерлеге менән көн үҙәгендә торған, фәнни-техник революция осоронда көсөргәнешле заманабыҙ үҙе ҡуйған мораль-этик проблемалар киң тарихи пландағы ваҡиғалар, синфи көрәш, намыҫ һәм намыҫһыҙлыҡ, мөхәббәт һәм нәфрәт, шәхес һәм йәмғиәт, кеше һәм тәбиғәт кеүек көстәр араһындағы киҫкенләшкән конфликт аша, йәнле картиналар ярҙамында сиселә. Роман формаһы буйынса бер-береһен бәйләп тултырыусы, замандарҙы берләштереүсе өс монологка — граждандар һуғышында ҡатнашҡан ҡарт быуын, бөгөнгө көрәшсе йәш быуын һәм автор монологтарына ҡоролған. Был, беҙҙең әҙәбиәт өсөн күнегелгән булмаһа ла, донъя әҙәбиәтендәге билдәле алым.

Шулай итеп, бөгөнгө көн мәсьәләләрен тарихи һәм ғилми факттар менән беркетеп күтәргән **политик роман** был.

1975 йылдың ноябрендә баш редактор (Р.Ғ. Низамов) уҡып сығып, автор менән һөйләште. Ул романды ыңғай баһаланы һәм уны 1976 йылдың икенсе яртыһында, йәки 1977 йылдың тәүге яртыһында «Ағиҙел»дең өс һанында баҫып сығарырға вәғәҙә бирҙе.

«Ядкәр» романын редакция 1977 йылда баҫырға әҙерләй тип, «Ағиҙел»дең реклама буклеттарында ла ташҡа баҫып иғлан ителде.

Романда КПСС-тың өлкә комитеты секретаре образы булғанлыҡтан, тәүҙә уны өлкә комитетындағы иптәштәрҙән дә уҡытып алайыҡ, замечаниелары булһа, төҙәтерһең, тинеләр. Мин шатланып ризалаштым һәм «Ядкәр» тейешле иптәшкә тапшырылды. Ләкин, ярты йылдан артыҡ ваҡыт үтһә лә, үкенескә ҡаршы, роман унда ҡуҙғатылмаған

булып сыҡты. Кире алып ҡайтып, фәҡәт йыл аҙағында, 1976 йылдың 31 декабрендә генә миңә редколлегия ағзаларының фекерен ишетеү насип булды. Ләкин унда, файҙалы кәңәштәр менән бергә, көтөлмәгән бәлә-ҡазалар килеп сыҡты.

Йәғни:

1. Автор тормоштан алда барырға тырышҡан; ул тормош әле үҙе хәл итмәгән проблемаларҙы (тәбиғәтте бысратыуҙан һаҡлау, тәүтел — праязык, халыҡтарҙың этногенезы) күтәрә һәм хәл итергә маташа. Ә проблемаларҙы тәүҙә тормош үҙе хәл итеп бөтмәй тороп, яҙыусы уға тотонорға тейеш түгел, имеш...

2. Геройҙарҙың артында прообраздарын төҫмөрләп булмай. Романда һүрәтләнгән яҙыусылар, ғалимдар артында беҙҙең ҡайһы конкрет яҙыусы, ғалим торғанын күрмәгәс, образдар тормошсан булмай, имеш...

3. Әҫәр стиленә ҡарата: романтик әҫәрме был, юмористикмы, публицистикмы, гротексмы, эссемы?.. Әллә бөтәһе ләме?.. Шуларҙы билдәләүе ҡыйын, алымдарҙың барыһы ла ҡулланылған һ.б.ш. туҙға яҙмаған сәбәптәр... Әйтерһең, иң оло тормош материалдарын да үҙенә һыйҙыра алған жанр (роман) художество сараларының байлығын да үҙенә мул ала алмай...

4. Композиция мәсьәләһе. Был романдың композиция теүәллеген оппонентарыбыҙ ошоғаса күнегелгән «ваҡиғалар романы»ның үрнәгенән сығып барлай; бында иһә композиция теүәллегенең умыртҡаһын ваҡиғалар теҙмәһе түгел, ә фекерҙәр ағышы һәм характерҙар полифонияһының тәшкил итеүен күрергә лә, танырға ла теләмәй. Һөҙөмтәлә авторҙың көсөргәнешле ҡыҫым аҫтында ябай күмерҙән хасил иткән алмас кристалын кире-ҡабат күмергә әйләндертергә, заурядный роман эшләтергә тырышалар, тигән йәмһеҙ тойғо тыуа. Ә баш редакторҙың тәүге позицияһынан, көтмәгәндә, 180 градусҡа боролоуы уның йәки үҙ аллы фекергә эйә булмауы, йәки ҡайҙандыр яһалған баҫымға тиҙ үк бөгөлөп төшә торған умыртҡа һөйәкһеҙлеге тураһында асыҡ һөйләй...

Автор юғарыла күрһәтелгән пункттарҙың барыһын да **хата фекер, кемдәрҙер тарафынан ҡаршы ҡоролған яһалма тотҡарлыҡ** тип иҫәпләй һәм, был осраҡта гәрсә яңғыҙ үҙе булһа ла, тулыһынса үҙ фекерендә ҡала, сөнки Хаҡиҡәт бер ваҡытта ла ябай арифметик күпселек менән билдәләнә алмай. Хатта бер үҙе генә тороп ҡалғанда ла Хаҡиҡәт мәңге Хаҡиҡәт килеш ҡала.

Оппоненттарҙың береһе (Р.Б. Байымов) әҫәрҙә обком секретаренең талантлы йәш шағирҙы ижади һәләкәттән ҡотҡарыу өсөн критик моментта уның өйөнә хәлен белергә инеп сығыуын бюрократтарса нарыҡлап: «Обком секретаре ниңә шағирға үҙе хәл белә барһын? Аппараттағы берәй кесерәк хеҙмәткәрҙе ебәрә лә ҡуя ул...» ти. КПСС Үҙәк Комитетының Генеральный секретаре Л.И. Брежнев иптәштең: «Талант — это национальное достояние, его надо беречь», — тигән бик хаҡ һүҙҙәренән һуң был оппоненттың иҫбатлауы бик тә сәйер тойола.

Оппоненттарҙың икенсеһенең (Ғ.Й. Рамазанов) романда проблема итеп ҡуйылған тәүтел (праязык) мәсьәләһенең беҙгә нимәгә кәрәге бар, ул беҙҙә проблема түгел, тип үҙенең ғилми һәм политик һуҡырлығын авторға тағырға маташыуы, шуны әҫәргә кәртә итеп ҡуйыуы ла ғәжәп иткес аңлайышһыҙ һәм аянyслы яңғырай.

Ошоға бәйләп, заманында ауыҙыбыҙҙы нығ бешергән, терһәкте тешләргә мәжбүр ҡылған рухи һуҡырлыҡтың бер нисә классик өлгөләрен иҫләйек.

1. Күп йылдар буйы генетиканы, генетика атаһы Менделдең бөйөк асышын «антинаучный фәстереү», реакцион тәғлимәт, тип һәләк итеп йөрөнөк. Аҙаҡтан, уның

бөйөк асыш икәнлеген тамам төшөнөп, генетика фәнен илдә ҡабат тергеҙеү өсөн күпме көс түктек һәм түгәбеҙ!..

2. Кибернетика фәнен — «буржуаз шарлатанлыҡ», уның атаһы Винерҙы «шарлатан» тип көлөп йөрөнөк. Аҙаҡтан, XX быуаттың был фәнни-техник революцияһы өлкәһендә йоҡлап ҡалғанлығыбыҙҙы төшөнөп, илай-илай тигәндәй, уны ҡыуып етергә мәжбүр булдыҡ...

Беҙ һүҙ алып барған тәүтел — праязык та донъялағы халыҡтарҙың этногенезын билдәләүҙәге үҙенең әһәмиәте яғынан генетика һәм кибернетика менән бер кимәлдә тора, уның киләсәге ҙур.

Тәүтел — праязык аша беҙ, был ғилми ҡорал донъяның ҡайһы лагеры ҡулында хеҙмәт итеүгә бәйле рәүештә, донъя халыҡтарын бер-береһенә яҡынайта, туғанлаштыра, йәки уларҙы бер-береһенән айыра, дошманлаштыра аласаҡбыҙ. Әгәр был идеологик ҡорал беҙҙең социалистик лагерҙа тиҙерәк үҙләштерелһә, ул баштан уҡ тулыһынса беҙгә, коммунизм идеалдарына тоғро хеҙмәт итәсәк. Ә киреһенсә булһа, ул беҙгә һөҙөмтәләрен әлегә күҙ алдына ла килтерә алмаҫлыҡ зыянлыҡ менән янай. Был — стратегик ҡорал. Бөгөнгө империализм аполегеттары тарафынан «кеше азатлыҡтары» маркаһы аҫтында глобаль кимәлдә алып барылған идеологик көрәш иртәгә тағы ла нескәрәк һәм тәьҫирлерәк хөлләгә — халыҡтарҙың «ырыу-ҡәрҙәшлеге», тел һәм тарих, этногенетик территория һ.б. мөнәсәбәтлегенә төрөнәсәк. Хәҙерге маоизм идеяларына ағыуланған Ҡытайҙың беҙҙән «үҙ территорияларын» дәғүәләүе быға бер асыҡ миҫал.

Империалистик илдәрҙең идеология штабтары шуны алдан һиҙенеп, кешелек донъяһындағы йәш фән — тәүтел (праязык) өлкәһендә интенсив эш алып бара.

Был фән беҙҙең илдә әлегә кәрәк булғанға ҡарағанда аҙыраҡ өйрәнелә, ә Башҡортостанда ул бөтөнләй юҡ: беҙҙә бер вузда ла, ғилми институтта ла уның менән планлы рәүештә берәү ҙә шөғөлләнмәй.

Тәүтел (праязык) менән беҙҙең республикала, моғайын, айырым энтузиастар ғына үҙ алдына эшләйҙер. Шундайҙарҙың араһында был фәнгә иң тәрән итеп инеүсе, иң бай фактик материал туплап, эшкәртеп, әһәмиәтле асыштарға ирешеүсеһе — (тыйнаҡһыҙлығымды кисерегеҙ!) мин фәҡирегеҙ буламдыр. Ғәфү итегеҙ: был хаҡта хәбәр итерлек мәғлүмәтле кеше булмағас, фән хаҡына үҙемде үҙем әйтергә тура килә. Тимәк, романда мин, уның художество-нәфис ҡиммәттәренән тыш, бөтә кешелек донъяһы өсөн актуаль булған һәм киләсәктә лә актуаль ҡаласаҡ ғилми проблема ла ҡуям. Шул ыңғайҙа уҡ проблеманың хәл ителешен дә бирәм. Әгәр киң полотнолы «Ядкәр» әҫәре автор тарафынан уйланылған күләмдә һәм кимәлдә донъя күрһә[12], ул бынан һуң йөҙ йыл үткәс тә кешеләргә үткер ҡорал булып хеҙмәт итәсәк, тип уйлайым.

Әйтәйек, нефтселәр тураһындағы лаф ороусан «производство» әҫәре, беҙҙең әҙәбиәттә авторҙары тере саҡта уҡ проблемаһы иҫкереүгә дусар булған «кукуруза проблематикалы» йәки нефтселәрҙең «турбобур» проблематикалы әҫәрҙәребеҙ кеүек үк, 40 — 50 йыл эсендә үҙ әһәмиәтен юғалтасаҡ, сөнки улар бөгөнгө көн өсөн күпмелер кәрәк булған, ләкин **тактика** әһәмиәтендәге генә әҫәр. Ғалимдарҙың иҫәпләп сығарыуынса, 50 йылдан һуң Ер шарында бөтөнләй нефть ҡалмаясаҡ һәм нефть сығарыу проблемаһы ла булмаясаҡ. Ә «Ядкәр» үҙенең проблематикаһы буйынса, үткән замандан бөгөнгө аша киләсәккә рухи-мәҙәни күпер һалыусы **стратегия әһәмиәтенә эйә ул.**

[12] Ә ул, үкенескә ҡаршы, 1992 йылда ғына һәм бик ныҡ ҡыҫҡартылып, имгәтелеп донъя күрҙе.

Бындай романдарға ла юл ябылмаҫҡа, уларҙың алыҫҡа ата торған стратегик ҡорал икәнен онотмаҫҡа, улар ҙа тиҙерәк донъя күрергә тейешлелер.

Ләкин, үкенескә ҡаршы, беҙҙә әҫәрҙең яҙмышын хәл ҡылғанда шәхси симпатиялар һәм антипатиялар хөкөм һөрә, буғай. Һәр хәлдә, минең үҙемдең әсе ижади яҙмыш дәлилләй шуны.

Беҙҙә күп эшләгән кешене яратмайҙар, тиҙ эшләгәнде бигерәк тә. *Ләкин* мин, документтан күрәһегеҙ, күп эшләһәм дә, тиҙ эшләүселәр, бигерәк тә әҫәрҙәрен тиҙ ташҡа баҫтырыусылар категорияһына ҡарамайым. Сөнки 1973 йылдың ғинуарында уҡ ҡулъяҙмалары әҙер булған (ә мин романдарымды 1962 йылда яҙа башланым һәм бер туҡтауһыҙ ошо көнгәсә һаман яҙам) күрһәтелгән китаптарымдың әле береһе лә ташҡа баҫылып донъяға сыҡҡаны юҡ.

Башҡорт АССР-ының 50 йыллығына арнап яҙылған, «Ағиҙел»дең 1969 -- шул оло юбилей йылғы байрам һанында баҫылып сығып, йәмәғәтселек тарафынан яҡшы баһаланған «Минең шәжәрәм» поэмаһы, күҙҙәрҙе ҡарайтып, ни бары биш йыл үткәс кенә китап булып сыға алды. Ә минеке менән бер йылда уҡ баҫылған башҡа өс иптәштең поэмаһы икенсе йылында уҡ китап нәшриәтендә донъя күрҙе.

Егерме йыл буйына яҙып, ваҡытлы матбуғатта һынау үткән хикәйәләр һәм повестәремдә әле булһа китап итеп сығара алғаным юҡ.

Сатирик повесть һәм хикәйәләр йыйынтығым да, бая аталған «Коммунист», «Кипаристар сәскә атҡан саҡта» тигәндәрем дә ята һаман.

Ләкин мин араҡы эсеп урамда эт һуғарып йөрөмәнем, «яҙыусы яҙырға тейеш» тигән девиз буйынса һаман баш ҡалҡытмай эшләнем һәм эшләйем.

Һөҙөмтәлә «Ядкәр»ҙең хәле үҙегеҙгә билдәле.

Шулай ҙа һаман эсеп-иҫереп, эт һуғарып йөрөмәйем. Эшләгәнде яратмаһалар ҙа эшләйем.

Һәм, әлеге документта планлаштырылғанса, бына быйыл, «Һаҡмар-һыу»[13] тигән яңы романымды бөттөм, иптәштәргә уҡырға тапшырам.

Шул уҡ план буйынса «Коммунист» романының ҡулъяҙмаһын камилләү эштәре бара.

Тимәк, мин яҙыусылар союзы идараһының һорауы буйынса мәғлүм иткән планымды үтәп киләм. *Ләкин* союз менән нәшриәт кенә миңә шәфҡәтлелек күрһәткәне юҡ — әҫәрҙәрем ҡулъяҙма хәлендә һаман. Әгәр игенсенең сәскән игенен урып алдыртмай яҡтырып ҡалдырһалар, йәки уны малдан тапатып мәсхәрәләһәләр, игенсе түҙер инеме?.. Ә яҙыусы түҙә... Ғәҙелһеҙлек был.

Шулай ҙа үҙ әҫәрҙәрендә уның төп хужаһына — уҡыусыларға еткерә алмай яфа сигеү, этлек күреү, материаль мохтажлыҡта интегеү — күтәреп булмаҫлыҡ йәбер.

Башҡортостан Яҙыусылар союзынан, китап нәшриәтенән «Ядкәр» романын нәшриәт планына индереп, килешеү төҙөшөп, миңә ҡулъяҙманы тағы ла ныҒыраҡ камиллаштырыу өсөн бер йыл иркенләп ултырып эшләрлек материаль мөмкинлек биреүҙәрен һорайым. Шундай гуманлы шарттар Ғәли ағай Ибраһимовҡа (иншалла!) «Кинйә» романының ҡулъяҙмаһы әҙер булмаҫы борон уҡ тыуҙырылды лаһа. Ә минең ҡулъяҙма әҙер, уның ҡайһы бер етешһеҙлектәрен бөтөрәһе генә бар.

Ҡояш бөтә кешегә лә бер тигеҙ яҡтырта бит. Шул ҡояш аҫтында уңып бешкән башаҡтарҙы төбөндә яҡтырып серетеү — аяныс хужаһыҙлыҡ был.

---

[13] "Ерем, кешеләрем"дең тәүге варианты.

1977 йыл миңә, ғөмүмән, башынан уҡ йөрәк өҙгөс шәхси ҡайғылар килтерҙе. Февраль айында мәктәпкә киткән Сабит улым урамда шағир Тимер Йосоповты осратып, ҡорҙашым һәм дуҫым Рәми Ғариповтың һис көтмәгәндә ҡапыл вафат булыуы хәбәрен алып ҡайтҡас, тетрәнеп, өйҙән сығып йүгерҙем...

Үлеренән ике йыл элек кенә тап килешкәндә, алдыма ҡуйған рюмкаһын кире этәреп, өҙә ҡырҡып әйткәйнем: «Эсеүҙе ташлайыҡ, ҡорҙаш. Һаман былай барһаҡ, түҙә алмаясаҡбыҙ — үләсәкбеҙ бит. Мин үҙем ташланым, һиңә лә бөгөндән ташларға кәңәш итәм». — «Юҡ инде, — тип ҡырт өҙҙө дуҫым, — эсеүем — эсеү, мин уны ташламаясаҡмын!» (Әйткәндәй, яҙыусы Б.З. Рафиҡов та «хәмер командировкаһынан» тамам төҙәлеп, «Ағиҙел»дә мин, Абдулхаҡ ағай Игебаев ултырған бүлмәлә өсөнсө иптәш сифатында әүҙем эшләй башлағас, ошоға оҡшаш кәңәште ысын күңелдән уға ла биргәйнем. Эш шунда: иртәнсаҡ һуңлабыраҡ килһәм, яңы хеҙмәттәшебеҙ яңғыҙы (Абдулхаҡ ағайҙың өйҙә ижад көнө ине) хозурланып, түшәмде күтәртерлек итеп тәмәке боролдатып ултыра, төтөнө балта аҫырлыҡ ҡуйырған.

Һөйләшеү ҡыҫҡа булды: «Абау, ниндәй зәхмәт ояһы был?!. Үләһең бит былайһа — ташла тәмәкене!» — «Ю-у-уҡ инде, — тине һуҙып, — ташламайым! Донъялағы берҙән-бер ҡыуанысым бит ул минең!» (Һәм шул «ҡыуаныс»ы әҙәмде ваҡытынан элек фани донъянан алып китте)...

Ә Рәми менән булған баяғы һөйләшеүҙә, уның ҡырҡа яуабынан күңелем бик ныҡ ҡайтып: «Улайһа мин бынан һуң һинең янына килмәйәсәкмен, сөнки, нисә генә ҡарама, янында — "шәкерттәрең" тигән эскесе өйөр, алдыңда хәмерле шешә!..» — тип асыуланып сығып киттем дә, ысынлап та, уға барып йөрөүемде туҡтаттым; осраҡлы тап килешеүҙәр ҙә ҡыҫҡа ғына һөйләшеүҙәр булғылай ине. Эшенән һуңғы тапкыр ҡыуылыуына тиклем бер арала ул йәнә «Башҡортостан ҡыҙы» журналында баш редактор Рәҡиә Рөстәмова ҡулы аҫтында хеҙмәткәрләнеп алды. Редакцияларыбыҙ матбуғат йортоноң бер үк ҡатында ине. Эш сәғәттәре аҙағынан бер кисәлә, яңы яҙған шиғырымды тотоп, эргәһенә кереп ултырҙым, бөтә халыҡ таралышҡан — икәүҙән-икәү генә оҙаҡ гәпләштек. Ул, бар ихласлығын һалып, киләсәктә кәрәк булырын алдан күреп, буғай, зәңгәр копировка аша (копияһын үҙендә ҡалдырырға) йәш шағирәләргә шиғриәт серҙәре буйынса йылы эстәлекле хаттар яҙып мауыға — бер нисәһен уҡып та ишеттерҙе. «Кәтибә апайҙан һуң был редактор менән эшләү ҡайһылайыраҡ?» — тип белешкәс, илар хәлгә етеп: «Их, әйтмә лә инде, ҡарт! Булыр ҙа булыр кеше, әммә былдай ҙа яуыз, ҡара йөрәкле булмаҫ! — тине лә, үткәндәрен иҫләп, буғай, бер килке тын ултырғас: — Кәтибә апай менән бергә эшләү осоро, бының менән сағыштырғанда, үҙе бер ожмах булған икән ул!» — тип өҫтәне...

Рәми Ғарипов төптән үҫкән имән кеүек таҙа кәүҙәле, бер сиргә лә бирешмәүсән зат булып, «үҙ ғүмеремдә бер тапкыр ҙа поликлиника тупһаһын аша атлап кергәнем юҡ», — тиер ине. Тик аҙаҡҡы йылдарында ғына ваҡыт-ваҡыт йөрәгенең тибеүҙән туҡтап тороуын (аритмиялыр?) һәм яңынан эшләп китеүен йылмайып ҡына әйткеләп ҡуйһа ла, табиптарға күренгәне булманы. Тажикстанға һуңғы оҙайлы сәфәрендә йөрөп ҡайтҡас, вагонда йоҡлап килгәнендә төшөндә кемдер йөрәгенә хәнйәр ҡаҙауҙан ҡаты һыҙланып уяныуын (моғайын, микроинфаркт кисергән) һөйләп тә шомландырҙы, әммә быға тейешенсә иғтибар итмәгәнлектән, төшө — төш кенә булып ҡалды ла онотолдо...

Рәми ҡорҙашым менән мин, бер үк йылда тыуған йәштәштәр генә түгел, ә фекерҙәштәр ҙә булыуыбыҙҙы артыҡ сурытып тормайым. Был хаҡта уның үҙ ваҡытында миңә бүләк итә барған китаптарындағы (уларҙы аҙаҡ шағирҙың ауылындағы йорт-музейына тапшырҙым) автографтары ла тәрән мәғәнәле һөйләй:

Рәми Ғарипов. Таш сәскә. *Лирика*. Өфө, 1958. (Китаптың корректураһы, коленкор менән тышлап төпләнгән). Титул битендәге автограф:

“Йыһатҡа – ҡаным – Рәми. 15-16/VII. Өфө”.

Рәми Ғарипов. Осоу. Шиғырҙар. Өфө, 1966. Автограф:

“Йыһат ҡарт! Шағир, әҙип тик үҙенең ғүмер юлында ҡаны менән бергә ҡушып бөтәһен татығанда ғына, шул ут йотҡандарын ҡағыҙға төрөп бирә белер теле булғандан, шул серҙе аңлар иле булғандан ғына шағир-әҙип икәнен һин беләһең. Шулай булғас, минең һымаҡ күп ҡыуыҡ осормаçһың, тим, дуçҡай. Көтәм. Ышанам! Рәми ҡартың. 28/IV – 66”.

Рәми Ғарипов. Аманат. Йырҙар, шиғырҙар, ҡобайырҙар. Өфө, 1969. Автограф:

“Йыһат ҡорҙашыма – һин йәшәгәнгә мин бәхетле!
Йәшәйек әле, йәшәйек!
Дошмандың эсе китеп ятһын!
Ни ҙә булһа әйтербеҙ!..
70-енсе йыл, 9/I – (ҡанлы көн икән...)”.

Рәми Ғарипов. Горицвет. Уфа, 1969. Автограф:

“Йыһат ҡартҡа – минең “знакум” һаҡалы[14], шулай ҙа сәс-һаҡал аçтында беҙ икенсе бер <u>донъя</u> йөрөтәбеҙ.
Шул донъя иçтәлеге!
Йәшәп ҡарайыҡ әле, -- Рәми. 13/II – 70”.

Рәми Ғарипов. Аманат. Йырҙар, шиғырҙар, ҡобайырҙар. Өфө, 1969. Был китапты шағир Шакир Ғәлингә бүләк иткән, ә ул иһә, “һаҡла” тиеп, миндә ҡалдырып торғайны, ун йыл үткәс (Рәми үлгәс) кереп алып китте. Шакирға яҙылған автограф:

“Шакир ҡартҡа, -- һине күрһәм, халҡымдың ҡот оçҡос <u>талантын да</u> күрәм, <u>фажиғәһен дә</u> күрәм; бәй, күргәс ни, <u>үҙемсә көн күрәм</u>, тик мин киткәс, юҡҡа-бушҡа күҙйәш ҡойоп ултырмағыҙ, бура бурағыҙ, итәк тулы бала-саға үçтерегеҙ!.. Ҡалғаны – Аманат! Рәми. 10/II – 70”.

«Интернат-мәктәп» (хәҙерге Р. Ғарипов исемендәге гимназия) туҡталышында «хрущевка» йортоноң беренсе ҡатындағы ике бүлмәле фатирында бала-сағалары ишәйеп һәм ҙурайып барһа ла, Яҙыусылар берлегенән киңерәк торлаҡ һорап ғариза яҙманы, сөнки быныһы өсөн дә фатир хаҡын айҙыҡын — айға үҙ ваҡытында түләргә хәле етмәй, йорттар идаралығы әленән-әле электр сымын өҙөү йәки йылы һыуҙы ябыу менән янаған хаттар ебәреп йөҙәтә ине. Ана шулай ғаризаһы булмауға ла ҡарамаçтан, көтмәгәндә,

---

[14] Мөнтәлеп сыҡҡан урыçса китабына ҡәнәғәтһеҙлек белдерә.

Яҙыусылар берлеге рәйесе Әсғәт Мирзаһитов менән Литфонд директоры Зөлфәр Хисмәтуллин ағайҙар көндәрҙән-бер көндө Рәмиҙе үҙҙәре идараға саҡыртып алып, Рихард Зорге урамындағы туғыҙ ҡатлы яңы йорттоң етенсе ҡатындағы өс бүлмәле фатирға ордер тотторалар. Нигеҙ туйына бер килке яҡын ҡәләмдәштәре үҙ-ара иғәнә һалышып, кейем шкафы һ.б. нәмәләр алып барып ҡотланыҡ...

Бына шул ҡотло төйәгендә 1977 йылдың февралендә, үҙе донъяға килгән айҙа, Рәми яңғыҙы ҡала (тыуған көнөн дә балалары менән генә үткәрә) — ҡатыны Надежда Васильевна эше буйынса аҙна-ун көнгә Мәскәүгә командировка алып, бер ыңғайҙан Мәскәү янындағы Переделкино ҡасабаһына әсәһенең хәлен белергә киткән (шул көндә Рәми командировканан ҡайтып, улар икеһе Өфө аэропортында ҡыҫҡа ғына мәлгә осрашып аймылыша). Шағир тирәһендәге шау-шоулы өйөр (“шәкерттәре”), иркенлектән файҙаланып, һәр береһе шешә ҡыҫтырып, тигәндәй, шағирҙы тыуған көнө менән ҡотларға эркелә, өйҙә ҡоролған көслө тантана, Надя әйтеүенсә, аҙна-ун көнгә һуҙыла...

Надежда Васильевнаның шул саҡтағы һөйләүенсә, ул Мәскәүҙән ҡайтып ингәндә мәжлес инде таралған, зал эсе — ҡара һөрөм, өҫтәл өҫтөндә — күбәләй өйөлгән тәмәке төпсөгө һәм рюмкалар, ә кухня иҙәнендә буш шешәләр үтеп кергеһеҙ рәүештә тумарлап ята... Ә минең тоҫмаллауымса, моғайын, был хәлгә бәйле ир менән ҡатын араһында буран да ҡубынғандыр...

Ошо урында Рәмиҙең күптәнге кисерештәрен иҫкә төшөрөү урынлы: *«Йөрәк ауырта. Миңә инде был донъянан тайырға ла ваҡыт инде».* (Әҫәрҙәр, II том, 493-өнсө бит). *«Ниндәй генә нәжестә ҡойонһам да, ниңә һуң мин бер яҡтылыҡҡа, яҡшылыҡҡа, сафлыҡҡа ышанам икән! Бәлки, минең бөтә фажиғәм дә шундалыр... Әллә минең бөтә ғүмерем ҡот осҡос бер хата микән? Ә үҙем: «Хаталар ҙа булыр тормошоңда,/Тик тормошоң хата булмаһын», — тигән булам. Инанам, яҙам. Бала саҡтан биреле ошо ғазаптарҙы кисерәм. Ниңә? Үҙеңдең бишегең тирбәлгән өрлөктәге тырма тешендә йөрәгең туҡтаған кәүҙәң тирбәлеп тороу артығыраҡ түгелме икән был донъяла?..* (Шағир аҫылынып үлеү сигенә терәлгән, тимәк... — *Й.С.*). *Инде тегендә (эрәүергә) былай ҙа күп ҡалмаған, үҙ ҡулдарым менән һыҡмайынса ла шартлар был йөрәк»...* (Әҫәрҙәр, III том, 67-нсе бит). *«Осто донъя ситлегенән тарһынып күңелем ҡошо» (Ғ. Тукай) — минең хәлгенәм ошо...*

Онотмайым тыуған көнөмдө (онотмаҫ өсөн үлер көнөңдө). [Тыуған көнөндә үлергә йыйынғандай... — *Й.С.*]. *Кешенең бөтә ғүмере ҡыҫҡа бер һыҙыҡҡа һыя: 1932 — 1999(?)»...* (Шунда уҡ, 71-енсе бит. Ләкин шағир аҙаҡҡы цифрында яңылышҡан – туҡһан туғыҙғаса барып етмәне). *«Мин кешеләр өсөн йәшәйем — кешеләр мине аңламаны... Иртәгә миңә — 45. Өфө аэропортында миңә шул тиклем ғәзиз тауыш исемемде атап ҡысҡыра: Надя.*

Беҙ инде бөтөнләй ят кешеләр, тиерлек. Ләкин үтелгән ғүмер, ғүмеремдең үткән 21 йылы 21 хәнйәр булып йөрәккә ҡаҙала.

Тағы ла мин киткәндәгесә мәғәнәһеҙ һөйләшеү. Йөрәк өҙгөс әрнеү!..» (Шунда уҡ, 76-нсы бит).

Һәр хәлдә, ҡатыны ҡайтҡандың кисенә үк Рәмиебеҙ йөрәге ауыртып йығылған; Надежда Васильевна, өйҙә телефон юҡлыҡтан, лифттағы микрофондан йорттар идаралығының диспетчерына өндәшеп, «тиҙ ярҙам» саҡырттырған һәм шағирҙы Тукай урамындағы 1-енсе больницаға илтеп һалғандар. Надежда Васильевнаның әйтеүенсә, Рәми тарафынан бер ниндәй ҙә хәүеф-хәтәр һиҙелмәгән, фәҡәт тәмәке килтереүен генә үтенеп ҡалған... Шағирҙың баяғы үҙе тураһында әйткәне аҡтыҡҡаса тура килеп,

дауаханаға ул уның тупһаһы аша *атлап* инмәгән, ә күтәреп керетеп, күтәреп алып сыҡҡандар...

Әммә-ләкин, әммә-ләкин... күп йылдар буйына тынғы бирмәгән, таныш-белеш араһында быш-быш һөйләшелгән шомло риүәйәтте лә ошо урында мәғлүм итмәйенсә булмай -- Рәмиҙең ғәмәлдә ҡайһылай үлеүе тураһындағы имеш-мимеш был, уны миңә байтаҡ ҡәләмдәштәремдән ишетергә тура килде. Бына иң ышаныслыһы -- Кәтибә апай Кинйәбулатова һөйләгәне: өйҙә ғаилә бураны уйнағанда Рәми туалетҡа инеп киткән дә, оҙаҡ ваҡыт сыҡмағас, ҡатыны Надежда Васильевна ишекте асып ҡараһа, иренең бауҙа муйынынан аҫылынып тороуын күреп, сығып югергән һәм шул уҡ подъездағы Рәмиҙең шешәләшен -- сантехникты алып килеп, мәйетте бау-боғалаҡтан алғандар. Надежда Васильевна Рәмиҙең 1-енсе интернат-мәктәптәге уҡытыусыларының береһенә (Кәтибә апай исемен дә әйткәйне, онотҡанмын, Рауза, буғай) телефондан шылтыратҡан һәм ул югереп килеп еткән...

Һәм бына өҫтәлмә мәғлүмәт: шағир вафатынан һуң егерме ете йыл үткәс яҙып алынғаны:

21.03.2004.

Надежда Васильевна Ғарипова менән уның фатирында Рәмиҙең үлеме тураһында һөйләштем (шағир хаҡындағы иҫтәлектәр йыйынтығын баҫмаға әҙерләүем барышында ҡайһы бер материалдарҙы алырға барғайным).

Рәми Урта Азиянан күпкә һуңлап ҡайтҡан, өҫтәүенә, өйөнә тура ҡайтмай, Баймаҡтағы Миңлебикә Йәғәфәрова һәм унан тыуған ҡыҙы янында булған... Надя эше буйынса Мәскәүгә командировкаға ебәрелеп, аэропортта самолетҡа ултырырға торғанында, ниндәйҙер бер самолет пассажирҙары аэровокзалға инә башлай ағылып, шулар араһында, туҡталып, портфелен иҙәнгә ҡуйған сағында Рәмиҙе күреп ҡалып: “Рәми!” — тип ҡысҡыра Надя. Рәми, тертләп, салт-әйләнеп ҡарай. Ҡабалан ғына бер-ике ауыҙ һүҙ һөйләшкәс, Надя сәфәрен дауам итергә — самолетҡа ултырырға ашыға...

Надя Мәскәүҙән, ул заманға хас, егерме килограмм ит күтәреп ҡайтып төшә. Аэровокзалдан улы Азаматҡа шылтыратып, февраль һыуығында йоҡа ғына кейенгән улы уны килеп ала (таксиҙа ҡайтып китәләр). *Лифт* эшләмәй, итте саҡ мендерәләр һөйрәкләп. Рәми өйҙә өҫтәле янында эшләп ултыра. (Иҫерек инеме, тип һораным, юҡ, айныҡ ине, тине). Надяның ошо ҡайтыу көнө нисәнсе числола булғанын һорамағанмын.

Ә үлеүен ошолайыраҡ һөйләне: эшләп ултырған еренән: “Уй-уй, эстән бөтәһе яна (жгет)”, — тигәс, ашҡаҙанылыр, тип уйланым (сөнки һуңғы йылдарында — эсә, ләкин тамағына ашата алмай инем, бөтөнләй ашамай ине). Таблетка йоттортоп, диванға һуҙылып ятты, ауырта, тип, ухылдай башланы. Ауырта, тип ныҡ ҡысҡырғас, телефон юҡ — йүгереп сығып, лифттағы мегафон аша йорттар идаралығы диспетчерынан медицина тиҙ ярҙамы саҡырыуын үтендем. Бер врач (урыҫ кешеһе) килеп етеп, ауырыуҙы ҡараны, укол менән тынысландырҙы. Борсолоп һорауыма: “Ҡурҡыныс юҡ, бер нәмә лә булмаҫ, — тип йыуатты. — Шулай ҙа больницаға илтергә кәрәк — ҡайһы больницаға?” — тигәс, 1-енсе больницаға (түрәләр больницаһына), тинем. “Юҡ, унда булмай, Туҡай урамындағы больницаға илтергә кәрәк”, — тигәс, ризалаштым. Шул саҡ Әнүр Вахитовтың өлкән улы Азамат, атайым һеҙҙе ҡунаҡҡа саҡыра, тип килеп еткәйне, күрәһең бит бында ниндәй хәлдәр, атайыңа әйт, үҙе килһен, тип ҡайтарып ебәрҙем, Әнүр тиҙҙән килеп етте (яҡын торалар). Рәмиҙе носилкаға һалып сығарҙылар, тиҙ ярҙам машинаһында үҙем һәм ҡыҙым Гөлнара оҙатып алып киттек. Машина юлдың сутырмағына тура килеп бик ҡаты

һелкеткәс, врач йәһәт Рәмиҙең беләген услап пүлсен тикшерҙе... Ә больницала бер кемдең дә ауырыуҙа эше юҡ: коридорға һалып ҡуйып, ике регистратор ҡыҙ, һис тә иҫтәре китмәй, үҙ-ара ләстит һата-һата бик оҙаҡ яҙҙылар, түҙемлегем ҡалманы. Ә беҙҙе алып килгән врач (урыҫ кешеһе) ҡайҙалыр китте лә юғалды... Ауырыуҙы, ниһайәт, бүлмәгә индереп, бәләкәй генә буйлы бер мәрйә-врач хәстәрлек күрә башланы. Укол яһарға тип шприц алдыртһа ла, был ярамай, энәһе нәҙек, тип кире бороп ебәрҙе, йыуан энәлене килтергәнсе тағы байтаҡ ваҡыт әрәмгә китте. Ә теге төп кеше, алып килгән врач (урыҫ кешеһе), һаман юҡ та юҡ, киткән еренән һаман әйләнеп килмәй зарыҡтыра... Ошо шомло юғалып тороуы бик оҙаҡҡа һуҙылып, бына саҡ килеп етте. Ҡыҙыңды илтеп ҡуйырбыҙ, үҙең ҡалып тор хәҙергә, тинеләр (Гөлнара ҡайтып китте). Иҫен юйған Рәмиҙең күкрәген "качать" итергә тотондолар, ике ҡулы ҡапыл үргә ҡалҡынды. Икенсе тапҡыр ҡулдары бик һүлпән, түбән генә ҡалҡынғас, шом бөрҙө йөрәгемде...

Шулай ҙа иҫенә килде, миңә ҡайтып китергә кәңәш иттеләр. "Наденька, иртәгә папирос килтер", — тине Рәми. "Һиңә тартырға ярамай бит", — тигәйнем: "Мин аҙлап ҡына тартырмын", — тип ҡалды. Иртәгәһенә барғанымда уға бер нәмә лә кәрәкмәй ине инде...

Шағирҙы больницаға алып килгән һәм уны ашығыс рәүештә ҡотҡарыу сараларын күрергә тейеш булған баяғы врачтың, енәйәтселәрсә һалҡынлыҡ күрһәтеп, оҙаҡ ваҡытҡа юғалып тороуы уның Ахунйәнов, йәки КГБ кешеһе менән кәңәшләшеүенә бәйле түгелме икән? — Надя Ғарипова хәҙер шул фекерҙә.

Һәр хәлдә, Зәйнәб Биишева апайыбыҙ, күпме генә ауырыһа ла, больницаға ятыуҙан ҡырҡа баш тартыр: "Унда "Күҙрәш" яһилдары — беҙҙең кеүек башҡорттарҙың башына етәләр, Жәлил Кейекбаевты ла, Сәләх Кулибайҙы ла шулар үлтерҙе", — тиер ине...

Ләкин сетерекле һорау: шағирыбыҙ, уның тол ҡатыны әле һөйләгәнсә, Өфөнөң Ғ. Туҡай урамындағы 1-енсе һанлы дауаханала вафат булған икән, ниңә уның мәйетен, шул дауахана моргынан түгел, ә ҡаланың икенсе осондағы Цветочная урамында урынлашҡан ҡала моргынан (криминал тойолғандай!) алып ҡайттыҡ (үҙем ҡатнаштым)?..

Мәҫәлән, Ғәйнан ағай Әмириҙең хәләл ефете Сара еңгәй Тихорецкая урамындағы дауаханала үлгәс, мәйетен шул дауахана моргынан алып сыҡтыҡ бит (үҙем ҡатнаштым)?!.

Мин Р. Зоргелағы фатирға барып кергәнемдә шағирҙың баяғы шешәләш тә, серҙәш тә яҡындары, шау-шоулы өйөр, ерләү кәрәк-яраҡтары артынан таралышҡайны; оло ҡустыһы Рауил да шул ауыр матәмле мәсьәләләрҙе хәл итмәккә киткәйне. Кесе ҡустыһы Урал менән икебеҙ үлек йортонан табутҡа һалынған мәйетте алып ҡайтып, йыйылып өлгөргән халыҡ менән күмәкләшеп залға керетеп һалдыҡ. Һуңғы йылдарҙа даими кейеп йөрөгән, терһәк һәм тубыҡ тәңгәлдәре ҡырылып туҙған һорғолт төҫтәге үтә таныш костюмынан, табандарының ярты яғы асфальтҡа ашалып бөткән һәм ҡыйыш баҫып йөрөмәле туфлиҙарынан, ниһәйәт, арынып, баяғы дуҫ-иш өйөрө үҙ-ара иғәнә һалышып һатып алып кейҙерткән энәнән-ептән ҡара костюм, ҡара-йылтыр ботинкаларынан ҡәнәғәт һымаҡ һуҙылып ятҡан мәрхүмдең йөҙө тыныс, күкрәгенә ҡаушарып һалынған уң ҡулының өс бармағы, тап ҡәләм ҡыҫып тотҡандай, ҡуша ныҡ бөрөләп ҡатҡайны. Әсәһе Мәрйәм апай, әленән-әле шул ҡулын һөйөп тә үбеп: «И балаҡайым, һаман ҡәләмен тотоп, шиғыр яҙып ята бит!» — тип һулҡылдай... Мәрхүмдең васыят-шиғыры буйынса, ҡустыһы Урал уны тыуған Салауат районына — Ҡаратау башына алып ҡайтып ерләү теләген белдерһә лә, Мирзаһитов иптәш: «Шағир баш

ҡалала ҡалырға тейеш — ҡәҙерле булыр, ҡәберенә сәскә һалырҙар», — тип кире кәңәш күндергән (ә мәрхүм булғасы үҙен, васыятына ярашлы, Туймазы яғына алып китеп күмделәр). Актерҙар йортондағы хушлашыу матәмендә ҡайғымдан язаланып, тәҙрә түпһаһында ҡарт шағир Мөхитдин ағай Тажи янында һыҙлаған йөрәгемде тотоп ултырыуымды ырыуҙашым журналист Азат Байсурин фотоға төшөрөп алған, шул һүрәтте теркәйем...

Ҡаратау булмаһа ла, урыны изге Ҡоба тауҙың "обсерватория" башняһы суҡайтылған иң бейек өлөшөндә, әммә, шағир өсөн ике метр ер ҙә табып булмағандай, ҡәбер сите зираттың сик һыҙығына беркетеп ҡаҙылғайны. Түмәләскә һуңғы тупраҡтарҙы өйгәс, баяғы тынғыһыҙ өйөр ("шәкерттәре"), ығы-зығы килеп, фотоаппараттарҙың күҙҙәренә эләгеп ҡалыу өсөн, ҡәбер тирәһенә ябырылды, хатта баш ҡаҙығын ҡосаҡлап тороп фотоға төшөүсе лә булды (һуңынан шулар тарафынан мәрхүм шағирҙың үтә ғәзиз йән дуҫтары булыуҙары тураһында йөҙәрләгән иҫтәлектәр яҙылды).

Надежда Васильевна үҙенең иҫтәлекнамәһендә Мәскәү яҙыусыһы Эдвард Радзинскийҙың аҡыллы һүҙҙәрен килтерә: *«Писателю должны повезти не только с женой, а и с вдовой!»* — Тап Надяның үҙе тураһында әйтелгәндәй был! Ысынлап та, беҙҙең ҡатындарыбыҙҙың шундайҙарының тәүгеһе лә, һуңғыһы ла булыр ул, моғайын...

Мәрхүмдең гүр тупрағы һыуынып та бөтмәҫе элек, уның әҫәрҙәрен нәшер итеүҙе юллап, уға дәүләт бүләге һәм хөрмәтле исем биреүҙәрен һорап, хөкүмәт йорттарының ишектәрен ныҡышмалы шаҡырға, түпһаларын шымартырға кереште. Күп тә үтмәй, тәүге ҙур йыйынтығын сығартты һәм шағирҙың гүзәл ижадына бөтә йәмәғәтселекте йәлеп иттертте. Тере сағында Рәмизҙең шиғырына берҙән-бер композиторыбыҙ көй яҙғайны («Йондоҙом», Рафиҡ Сәлмәнов музыкаһы) һәм шағир уны күңеле нескәргән минуттарында барлы-юҡлы тауышы менән мөңгөрләп ултыра торғайны, йыш ҡына шөңгөр тауышлы Надяһы ла ҡушылыр ине. Хәҙер иһә уның элек иғтибарһыҙ ҡалдырылған шиғырҙарына унарлаған композиторҙар көй яҙҙы, ул йырҙар сәхнәләрҙән, зәңгәр экрандарҙан һәм эфир тулҡындарынан халыҡ йөрәгенә үтеп керҙе. Шағирыбыҙға үлгәндән һуң Салауат Юлаев исемендәге дәүләт бүләге, Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән иң юғары исем бирелде. Был йәһәттән арымай-талмай шағир ижадын пропагандалаусы Надежда Васильевнаның һәм баяғы өйөр-өйөр шағир дуҫтарының тырышлыҡтары ҙур булды. Һәм Надежда Васильевна, үҙе төҙөп, мәрхүмдең өс томлыҡ әҫәрҙәрен донъяға сығарҙы, башҡорт мәҙәниәтендә был тәрән эҙ ҡалдырған баҫмаға әйләнде. Әммә шағир тормошоноң иң мөһим мәғлүмәттәренә эйә булған көндәлек дәфтәрҙәренең бер нисәһенең филолог Ғайса Хөсәйенов ҡулында «һеңеп» ҡалыуы һәм томдарға инмәүе бик аяныс.

Ни өсөн, тиһегеҙме?

Мәҫәлән, шағирҙың бер туған ҡустыһы Рауил иҫтәлегенән өҙөк:

«Бер ваҡыт каникулға ҡайтып төштө Рәми. Ул саҡта беҙҙең ғаилә ферма көтөүен көтә ине. Шулай Йөрүҙән буйында көтөү көтөп йөрөгәндә, беҙгә ярҙамға Рәми ағай килде. Үҙенең ҡуйын дәфтәрҙәрен дә алған (ҡуйын дәфтәре уның һәр ваҡыт үҙе менән булды).

Шул көндә яҙған шиғырҙарын уҡыны. Мин, һоҡланып, маҡтау һүҙе әйткәнмендер инде. Шул саҡ ул, туҡтап, миңә ҡарап торҙо ла: «Бына олораҡ ағайың минең был һүҙ теҙмәһе тураһында нимә яҙа», — тип, бер таныш булмаған почерк менән яҙылған юлдарҙы уҡып бирҙе. Белмәйем, ***ул дәфтәр юғалғанмылыр, архивында күренмәй.*** *Был Ғайса Хөсәйенов ағайҙың Рәми шиғырҙарына ҡарата әйтелгән беренсе һүҙҙәре ине. Ғайса ағай Рәмизҙең ижады тураһында ла, уҡыу йылдары тураһында ла яҙып тора. Ә бына шул беренсе тапҡыр әйткән тәнҡит*

һүҙҙәре тураһында бер ҙә яҙғаны юҡ. Бәлки, онотҡандыр ҙа. «Шиғыр өҫтөндә ныҡлы эшләргә кәрәк. Былай яҙғансы, ***бөтөнләй яҙмағаның артығыраҡ, шиғыр яҙып маташма»,*** *— тигәйне ул».* («Шоңҡар» журналы, 2002/1).

Ниңә көндәлектәрҙә был һ.б. күренмәй — баяғы Ғайса ҡулында «һеңгән» дәфтәрҙәргә ишара түгелме?

Хәйер, мәсьәләне асыҡлаусы документ — алдыбыҙҙа. Урыҫ әйтмешләй, что написано пером – не отрубишь топором.

Директору ИИЯЛ БНЦ УрО АН СССР доктору филологических наук, профессору Ураксину З.Г.

Секретарю партбюро института товарищу Надыргулову У.Ф.

Копия: Председателю Комиссии по милосердию при Союзе писателей БАССР товарищу Карамышевой Т.Ф.

от вдовы поэта Рамия Гарипова — Гариповой Н.В.

ЗАЯВЛЕНИЕ

Летом 1984 года пришел к нам домой Гайса Батыргареевич Хусаинов, председатель комиссии по архивному наследию Гарипова Рамия и изъявил желание познакомиться с его дневниками.

Пересчитать и записать сколько он берет тетрадей, он не предложил, а я постеснялась оскорбить его своим недоверием. Вот так я отдала ему все дневники моего мужа.

В 1985 году в журнале «Агидель» (№3) вышла его статья «Шагир шәхесе (Рәми Ғариповтың көндәлектәре буйынса)», в которой были использованы выдержки из дневников Гарипова, за что ему были благодарны читатели, поклонники поэзии поэта. Но вот уже 6 лет уважаемый Гайса Хусаинов заставляет меня умолять вернуть оставшиеся у него дневники. Дело в том, что он вернул семье поэта всего 11 тетрадей, а остальные оставил у себя и отказывается вообще вернуть, мотивировать свой поступок тоже отказывается. Сначала говорил, что у него пока времени нет, затем предложил мне самой искать у него дома (?!)... Я просмотрела всю статью Гайсы Хусаинова, выписала все цитаты, включенные в нее, сверяла с дневниками, которые он вернул. (В этих дневниках имеется нумерация, сделанная рукой Хусаинова). Всю проделанную работу показала Хусаинову и объявила о своем намерении выступить по этому поводу на X съезде писателей БАССР, который к этому времени приблизился. И только тогда он забеспокоился. На второй день съезда с утра принес один блокнот (а не тетради Рами) и пообещал клятвенно, что вернет все остальные тетради-дневники. 6 и 8 ноября 1988 г. он посвятил тому, что сидел у нас дома и выверял статью с дневниками, вынужден был согласиться со мной и сам же указал за какие именно годы тетради остались у него. Казалось бы все уладилось, но опять начались мои хождения. 24 января 1989 г. после моих требований вернул еще одну тетрадь, а остальные опять отказывается вернуть, заявив, что у него их нет.

Убедительно прошу Вас повлиять на Г. Хусаинова, т.к. дневники Рамия Гарипова — это не только семейная реликвия, а является достоянием всей башкирской литературы. Обкрадывать Р. Гарипова — это значит обокрасть башкирский народ.

Н. Гарипова. *20 февраля 1989 г.*

Ул дәфтәрҙәрҙең ҡайтарылып бирелмәүен шағир томдарындағы уларҙан ҡалған бушлыҡтар ҙа дөрөҫләй...

...Рәми дуҫымдың әжәленән әсенеп йөрөп үткәргән йылдың көҙөндә үк башҡайымды тағы ла ҙур ҡайғы баҫты — әсәйем үлеп китте. Боронғо дин китабында үҙем яҙған бер сәхифә һаҡланған:

Аңлатма.

Башҡортостандың боронғо Үҫәргән кантоны, Сәнкем-Биктимер ауылында 1895 йылдың 2 ноябрендә Ғәбиҙулла менән Бибиғәфифә ғаиләһендә тыуып үҫкән, 1977 йылдың 7 ноябрендә көндөҙгө сәғәт 3-тә Өфө ҡалаһының Уфимское шоссе, 4, 119-ынсы квартираһында үҙ ҡулымда вафат булған — ошо аҡ донъянан кискән һәм 9 ноябрҙә Өфө мосолман зиратындағы 5739 номерлы ҡәберҙә гүр эйәһе булған әсәйем Солтанова Бибисадиҡа Ғәбиҙулла ҡыҙының һуңғы васыяты буйынса, «Алты бармаҡ» китабын СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының археография бүлегенә тапшырам.

Йыһат Солтанов, СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы.

11 1977 йылдың ноябре.

Аяныс хәл: әсәйем дә, Рәми ҙә тап үҙҙәре тыуған айҙа вафат булдылар...

Әсәкәйем...

Бөтә ил-ғаләм гөрләтеп Бөйөк Октябрь революцияһының 60 йыллыҡ юбилейын тантаналы байрам иткән көндәрҙә...

Әсә үлеменең әселеген әсәһе үлгән әҙәм генә беләлер...

Тарих ене ҡағылған...

Әммә тормош дауам итә, йөрәктәрҙең ҡанһыраған яралары ла һыҙлай-һыҙлай бирсәләнә.

Әҙәби ижад, әҙәби мөхиттең сафлығы, күп хәсрәтле «Ядкәр» романымды донъяға сығарыу өсөн ныҡышмалы, өҙлөкһөҙ көрәшем менән бергә, башҡорт халҡының рухи-мәҙәни тарихы буйынса эҙләнеүҙәремдә лә дауамланым.

Боронғо рухи ҡомарткыларыбыҙҙы эҙләп Башҡортостанымдың көнсығыш, көнбайыш райондарында ер-һыу ҡыҙырып йөрөнөм...

О рукописи З.А. Султанова «Литературное наследие бурзян» (102 стр. машинописи).

В своей рукописи З.А. Султанов ставит основной задачей показать, что древние башкиры племени бурзян имели непосредственное отношение к древнейшим государствам Азии — Парфии и Бактрии, были творцами культурных ценностей этих стран, авторами (или соавторами) эпических памятников Авесты и Ригведы. Слово «парфяне» он отождествляет с башкирским родоплеменным названием «бэрйен», наименования «Бактрия — Бактра» этимологизирует, исходя из современного башкирского языка: Бэк-тора. В рукописи приводятся весьма произвольные, особенно в части терминов и наименований, башкирские переводы фрагментов названных памятников. Мысль автора — эти памятники надо считать одновременно образцами древнейшего литературного наследия башкир-бурзян. З.А. Султанов утверждает, что им открыт на берегу озера Асылыкуль древнейший храм башкир-зороастрийцев с алтарем для жертвоприношений и проторуническая надпись на камне с

поэтическим текстом (знаки и текст не приводятся), относящиеся к VII — V вв. до н.э. Этим перекидывается мост между Приуральем и далеким Средним Востоком в античности и очерчивается громадная территория обитания древних бурзян. В рукописи все это изложено без какой-либо системы, в высшей степени эмоционально, проследить нить мыслей и рассуждений автора не всегда представляется возможным.

Обращение писателя З.А. Султанова к истории народа, к литературно-фольклорному наследию и проблемам реконструкции фактов праязыка следовало бы только приветствовать и оказывать автору всяческую поддержку. З.А. Султанов в своей рукописи обнаруживает определенную осведомленность в научной литературе по этнографии, истории и филологии, есть у него и отдельные мысли, достойные поддержки, например, о необходимости комплексного изучения древности, развития исследований по исторической географии, попытка связать мотивы башкирских кубаиров с эпическими сказаниями народов мира и др.

Однако одобрить работу или рекомендовать к изданию в целом, не представляется возможным ввиду чрезмерной тенденциозности, ненаучного подхода к интерпретации исторических явлений и произвольного обращения с лингвистическими, фольклорно-литературными и историческими фактами.

Связывая бурзян, тамъянцев и усерган с древней Бактрией и Парфией, З.А. Султанов ссылается на работу Р.Г. Кузеева, на его высказывания об обитании названных племен в VII — VIII вв. в Приаралье. Но история Бактрии и Парфии — это совсем другая эпоха и другие территории. Автор, таким образом, связывает события и явления, удаленные и хронологически (более тысячелетия), и территориально, объединяет явления и факты, между которыми нет никакой лингвистической и исторической связи (Бэрйен и Фриан и т.д.), основываясь лишь на внешнем созвучии. Таких произвольных сопоставлений автор делает чуть ли ни на каждой странице, принимая их за обоснование своих положений.

О «знаках» на камнях близ оз. Асылыкуль специалисты ИИЯЛ БФАН СССР и Башпединститута свое заключение уже сделали. Никаких проторунических надписей там не обнаружено и их не может быть по той простой причине, что это рыхлые песчаные камни, и тысячелетиями на них начертания сохраниться, естественно, не могли. Правда, З.А. Султанов именует эти глыбы «монолитными валунами», а мелкие круглые углубления, которые автор называет древними «символами», вышедшими из озера «коней-звезд», образованы под воздействием корней мхов.

Для обоснования своих вольных сопоставлений языковых явлений З.А. Султанов ссылается на «ностратическую» теорию В.И. Иллича-Свитыча и выступает против традиционных методов сравнительно-исторического языкознания, против генеологической классификации языков. Между тем теория Свитыча не отрицает генетического родства тюркских, индоевропейских и др. языков, а лишь отражает более древние связи между т.н. «ностратическими» языками. Ничего общего с этой теорией приводимые сравнения, этимологические упражнения автора не имеют. В этих сопоставлениях и выкладках никакие фонетические закономерности соответствия звуков между разными языками и внутри одного языка не принимаются во внимание. Ни один лингвист-тюрколог или даже ностратист не отважился еще считать словами одного корня ут -- ат, ата; ыу — эс, эсэ, ат — тоз, эс — соль. Работа изобилует такими примерами. При таком уровне реконструкциии праформ просто невозможно спорить с автором, поскольку он не соблюдает элементарных закономерностей звуковых переходов в разных языках, все возводит к одному языку. Вот один лишь поразительный пример произвольного обращения со словом. На стр. 20 автор совершенно очевидное русское слово ***начало*** *расшифровывает следующим образом: начало — (у)н ач ало — ун*

өч алы; өч — өс, алы — алды. Затем развивает целую теорию о цифрах 12 и 13. Такие «этюды» имеются почти на каждой странице.

Для полного разбора ошибочных в своей основе сопоставлений и этимологий З.А. Султанова потребовалось бы написать работу более объемную, чем представленная рукопись. Но в этом, видимо, нет необходимости, посколку человеку, имеющему филологическое образование, очевидна полнейшая произвольность этих упражнений.

Сведения из различных исторических источников перемешаны здесь с лингвистическими «этюдами» и фольклорными сюжетами.

Безусловно, некоторые мотивы башкирских эпических сказаний перекликаются с эпическими сюжетами народов Востока. Это вполне закономерно и об этом имеются серьезные публикации. Каждый эпос — явление многослойное. Между ними прослеживаются сходства типологического порядка, мотивы и образы, проникшие через опосредствующие звенья, есть, разумеется, и генетические сходства. Для выявления этих элементов необходим тщательный всесторонний анализ с учетом длительного развития культуры каждого народа, со строгим соблюдением принципа историзма.

Рукопись «Литературное наследие бурзян» не может претендовать на роль научного исследования: в ней не соблюдены элементарные требования современной компаративистики, исторической этнографии и фольклористики. Отвергать устоявшиеся методы научного познания можно лишь на основе полного овладения ими.

Зам. Директора ИИЯЛ БФАН СССР, д.ф.н. — ***З.Г. Ураксин.***
Зав. Сектором этнографии ИИЯЛ БФАН СССР, к.и.н. — ***Н.В. Бикбулатов.*** *Ст.н.с.*
сектора литературы и фольклора ИИЯЛ БФАН СССР, к.ф.н. — ***М.М. Сагитов.***
Верно: (печать и подпись). *1 марта 1981 г.*

Беҙҙең осор Башҡортостан гуманитар фәндәренең ғалимдарының интеллектуаль кимәлен дөрөҫ төҫмөрләргә ярҙам иткән был ғилми-рәсми ҡағыҙҙы мин, бер килке йылғырланып, партияның өлкә комитетында бер танышым аша ҡулға төшөрҙөм.

Уғата ғибрәтлерәге 1987 йылда булды: бөрйәндәрҙең мин дәлилләгән боронғолоғон юҡҡа сығарырға тейешле баяғы ғилми-рәсми “мәктүп”кә ҡул ҡуйыусыларҙың береһе (тап бөрйән азаматы!), «Ст. н.с. сектора литературы и фольклора ИИЯЛ БФАН СССР, к.ф.н. М.М. Сагитов» тигәне, шул бөрйәндәр тураһындағы «уйҙырма»ларымдың төп асылын, йөмләләрен генә үҙгәртә биреп, тигәндәй, үҙ табыштары рәүешендә яңы китабына керетеп ебәргән (Мөхтәр Сәғитов. Боронғо башҡорт ҡобайырҙары. Өфө, 1987; 151 — 153-өнсө биттәр). Бынан мин шуны аңланым: арып-талып килеүсе мосафирҙы йоҙроҡлай-һуға йығып, ҡалтаһындағы тәңкәләрен алып ҡасыу була был...

Ҡазаның иң күңелһеҙе һәм ҙуры — мин асҡан һәм тәү ырын (рун) яҙыулы Сураш-Тора (Зороастр) дине доғалығын хәрефтәрен күрһәтеп уҡып биргән (ул гәзиттә сыҡты һәм башҡортса уҡыла) һәм ул хаҡтағы мәғлүмәт шөйлә таралып өлгөргән Асылыкүл ҡорамының шул яҙыулы таштары (бергә торған ике таш) күҙ менән ҡаш араһында, тигәндәй, ҡапыл юғалды; үҙебеҙҙекеләр алғанмы уны, әллә Ыҡ йылғаһы аръяғындағы күршеләрме (улар нығ ҡыҙыҡһына ине) — уныһы инде ҡараңғы...

Юлына ҡат-ҡат кәртәләр ҡороулы романыма килгәндә, көтмәгәндә, оппоненттарым яғынан йылы ипкен һирпелгәндәй булды: 1981 йылдың 7 апрелендә Башҡортостан Яҙыусылар берлеге идараһы үткәргән дөйөм йыйылышыбыҙҙа «Ағиҙел» журналында баҫылып сыҡҡан прозабыҙҙың сифаты тикшерелеп, ҡыҙыу фекер

алышыуҙар барышында Мостай Кәрим миңә «Ядкәр» хаҡында (романды ул да уҡығайны) түбәндәге фекерен яҙып бирҙе:

Йыһат!

Һинең анау йылды мин уҡыған романың ни хәлдә?

Бына әле теге йәки был әҫәрҙе онотоу-онотмау тураһында һүҙ сыҡҡас, иҫемә төштө: һинең ул романың бөтөнләй, тип әйтерлек, минең хәтеремдә икән.

Ә бит унан һуң уҡылған байтаҡ әҫәр онотолған.

Был һүҙем менән һинең әҫәреңдең «вторичное» түгел икәнлеген әйтергә теләйем.

Мостай Кәрим.

Һуңынан мин аҡһаҡалдың ошо фекерен кәрәк булғанда әҙәби йәмәғәтселек ҡарамағына еткерергә рөхсәтен һорап алдым. *Ләкин...* һуҡыр тинлек тә файҙаһы теймәне (сәбәбе алдараҡ күренер).

1937 йылдан һуң республикала ныҡлап урынлашҡан һәм, һис ҡасан да туҡталмай, теге йәки был формала йә -- йәшерен, йә асыҡтан-асыҡ бер өҙлөкһөҙ алып барылған «башҡорт милләтселегенә ҡаршы көрәш» кампанияһы, айырым яҙыусыларҙың ғына түгел, ә бөтә башҡорт яҙыусыларының йөҙө, коллектив органы, милләтебеҙ рухиәтенең көҙгөһө булған «Ағиҙел» журналының да яҙмышына ҡара дегетен һыланы.

Йәғни «Ағиҙел»ебеҙҙең ҡыуаныслы 60 йыллыҡ юбилейын тантаналы билдәләргә әҙерләнеп бөткәйнек, төрлө ойошмаларҙан, райондарҙан йыйылышҡа тәбрикләүсе вәкәләттәр килеүе көтөлә ине. Матур ҡағыҙға сағыу биҙәктәр һалып баҫып сығарылған (ләкин тиражы халыҡҡа таратылмайынса юҡ ителгән) саҡырыу билетының бер-ике данаһын һаҡлап алып ҡалғанмын:

«Ағиҙел» журналы — 60.

Саҡырыу — Приглашение. 2 кешегә.

Хөрмәтле иптәш...!

Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы һәм республиканың Культура министерствоһы Һеҙҙе «Ағиҙел» журналының 60 йыллығына арналған тантаналы юбилей кисәһенә саҡыра.

Кисә 1983 йылдың 25 мартында 18-00 сәғәттә Актерҙар йортонда уҙғарыла.

Ойоштороу комитеты.

(Ошо уҡ текст урыҫ телендә ҡабатланған).

Журналда баҫып сығарыу өсөн «Ағиҙел»ебеҙҙең ҡыҫҡаса тарихын яҙырға ҡушҡайнылар миңә, “Ағиҙел”гә мәҙхиә” тигән шул ҙур ғына публицистик мәҡәләмде бик рухланып һәм тулҡынланып эшләнем. *Ләкин был материал,* үкенескә ҡаршы, Мирзаһитовтың кире ҡағыуына (сәбәбен әйтмәнеләр, әммә унда “Ағиҙел”дең миллилегенә ныҡ иғтибар ителеп, бөйөк Мөхәммәтша Буранғоловҡа *ла* ҙур урын бирелгәйне) дусар булып, башҡа авторҙың ҡоро ғына ҡоролған (“дежурный”) мәҡәләһе матбуғатта донъя күрҙе. *Ләкин* барыбыҙ өсөн дә һис көтөлмәгәне, йөрәктәрҙе ҡанһыраткыс өйкәгәне — бер нисә ай буйына дәртләнеп йөрөп әҙерләгән тантаналы кисәбеҙҙең КПСС өлкә комитеты тарафынан ҡапыл ***тыйылыуы*** ине. Был яман сара

йәшертен эшләнгәнлектән, байрамыбыҙҙың юҡҡа сығарылыуын киң йәмәғәтселек (шул иҫәптән хатта партияның райком секретарҙәре лә) белмәй, шуға күрә 25 марттың иртәһенән үк, туй булаһы Актерҙар йортоноң «ремонтҡа ябылыуын» күреп, төрлө-төрлө иҫтәлекле бүләктәрен күтәргән тәбрикләүселәребеҙ редакцияға ағыла башланы. Уңайһыҙ хәлгә ҡалған баш редакторыбыҙ Рәйес Низамов уларҙы беренсе ҡатта уҡ ипле генә кире бороп ҡайтарып ебәреү өсөн, һәр кемгә лә яғымлы һәм таҫма телле Абдулхаҡ ағай Игебаевты шундағы ишек төбөнә киҙеүсе итеп ҡуйҙы. Килгән береһе был хәлгә албырғанып, шулай ҙа бүләктәрен ҡалдырып китә торғас, һуңынан был сувенирҙар оҙаҡ ҡына йылдар буйына баш редакторҙың эш бүлмәһендә йән көйөктәре рәүешендә теҙелешеп ултыра бирҙе (Рәйес Низамовтан һуңғы баш мөхәррирҙәр заманында эҙһеҙ юҡҡа сыҡты ул ҡомартҡылар)...

Шул йылда мин «Башҡортостан» гәзитенең элекке мөхәррире, билдәле репрессиялар ҡорбаны Ҡасим ағай Аҙнабаевтың өйөндә әңгәмәләшеп ултырғанда осраҡлы рәүештә ул миңә «Ағиҙел» юбилейы менән булған баяғы аянысла хәлдең серен систе лә һалды. «Партия өлкә комитетының Пропаганда бүлеге мөдире Урал Насир улы Бакиров минән хәҙерге «Ағиҙел» журналын кемдәр нигеҙләүенә аңлатма һорағас, уларҙың бөтәһе лә 1937 йылда ҡулға алынып юҡ ителгән «башҡорт милләтселәре» ине тип, исем-фамилияларын теҙҙем дә бирҙем»...

Абайламаҫтан ағайыбыҙ журналыбыҙға «айыу игелеге» эшләгән — партиябыҙҙың «идеология фронты»нда "башҡорт милләтселеге"нә ҡаршы яңы һаҡлыҡ сараһы үткәреүҙең йәтеш сәбәпсеһе булған...

«Әҙәби генерал»дарыбыҙ был сараның төптө нигеҙһеҙлеген һәм зарарлығын партия өлкә комитеты етәкселәренә аңлатып бирә ала, уларҙы яңылыш аҙым яһауҙан ҡурсалау ҙа ҡулдарынан килә ине, әлбиттә. Ләкин...

Үҙе өсөн генә йәшәгән аҡһаҡалыбыҙ Мостай Кәримдең шәхси хистәре, сәйәси йөҙө билдәле...

Башҡортостан Яҙыусылар берлеге рәйесе Ә.М. Мирзаһитов иптәш, юғарынан ҡушыу буйынса тырышып, башҡорт милләтселеген ифрат сая аңдыусы һәм уға ҡаршы мөкиббән көрәшеүсе «партия һалдаты» булғанлыҡтан, юғарынан бойоролғандарҙың көллөһөн дә еренә еткереп үтәне... «Ағиҙел»дең баш редакторы Р.Ғ. Низамов ҡорҙашым иһә ғүмере буйына үҙенә «башҡорт милләтсеһе» ярлығы йәбештерелеүҙән ҡурҡып, партияның тыңлаулы ла, инсафлы ла инсаны булып йәшәне...

Хаҡлыҡ өсөн утҡа кереүҙе көтөп булмай ине уларҙан.

Егерменсе быуат аҙағында «Ағиҙел»гә яһалған репрессия был өсәүҙең намыҫында ҡара тап булып ҡалды. Тарих быны онотмаҫ, үҙенең баһаһын бирер.

Әҙәби ығы-зығылар

Тарих, тарих...

Әҙәбиәтебеҙҙә тарихилыҡ бармы һуң?.. Әүҙемлекле мәсьәлә булғандыр был, сөнки 9-сы йыйынсыбыҙҙың да көн тәртибендә ине. Ҡәҙимге ғәҙәтемә барып, һөйләшеүҙән ситтә ҡала алманым. Ләкин, ғәҙәттәгесә... һүҙ бирмәй маташтылар.

Непроизнесенная (не позволили) речь на IX съезде писателей Башкирии
(на пленарном не дали слова, но сумел произнести на заседании секции прозы).

«Мы разговор должны вести по большому счету», — сказал в своем отчетном докладе наш уважаемый председатель Асгат Мирзагитов.

Да, как говорят все объективные данные, башкирская литература уже давно доросла до такого разговора.

Я хочу коротко высказаться о состоянии нашей большой прозы.

I. Историческая проза. Докладчики верно подметили: за отчетный период в этом направлении мы имеем более ощутимых успехов.

А именно романы:

Кирея Маргана «Бөркөт ҡанаты» (I — II и III — IV книги);

Ахияра Хакимова «Һауыр ҡумта».

Для экономии времени я не буду перечислять положительные стороны обоих произведений — присоединяюсь благожелательному в целом мнению докладчика Анура Вахитова.

Речь будет идти об общем и главном для них обоих недостатке.

Вахитов говорит, что Кирею Маргану недостает ***историзма*** в изображении выбранных им событий, автор больше всего опирается на фольклор.

Ахияр Хакимов, говорит он, наоборот, силен в ***историзме,*** т.е. «умеет входить в историю». Однако по-моему глубокому убеждению и сожалению, оба товарища хромают на одну и ту же ногу: страдают нечеткостью исторической концепции авторского мышления. Не ощущается в их произведениях ***ретроспектива,*** уходящая в глубину и бесконечность.

Поэтому исторический пласт они разрабатывают ***горизонтально,*** а ***глубину*** теряют...

А ведь история народа похожа на живое Дерево: есть стержневой корень, боковые (горизонтальные) корни, ствол и крона. Не надо упускать из виду то самое главное — стержень...

Ведь недаром писательскую эрудицию сравнивают с ***айсбергом:*** лишь только крошечная вершина познаний входит в произведение, а остальное остается в голове у автора.

Названные выше товарищи, по-видимому, не хотели обременять себя каторжным трудом исследователя-историка — пошли по обычному облегченному пути.

Вот почему I, II книги К. Маргана, касающиеся исторических корней народа, в качественном отношении оказались хуже, чем их продолжение, то есть III и IV книги.

Между тем, входя в противоречие с оценкой Вахитова, должен заметить: эта вторая половина романа К. Маргана в смысле ***историзма*** стоит на голову выше романа Хакимова. Почему? Потому что осуществилось здесь естественное переплетение ***историзма, фольклора*** и ***авторской додумки,*** что и дало неплохие результаты.

А от романа плодовитого писателя А. Хакимова, несмотря на тщательно разработанный язык, веет холодноватой дисцилированной книжностью... Произведение держится преимущественно на не слишком убедительной авторской реконструкции событий, чем на историзме. Этот недостаток заложен в становой хребет повествования: сюжет прочно привязывается к одному из самых неудачных в науке обывательских толкований самоназвания башкирского народа: «баш+корт» («голова волка») и этим самым автор сразу лишается доверия искушенного читателя. Значит, еще рано нам в

лаврах почивать... А примером настоящего исследователя для нас всех может служить автор романа «Кинзя» Гали Ибрагимов.

II. Романы, посвященные, как выразился докладчик, «современной колхозной жизни». Как положительное явление за прошедшее пятилетие назывались им 4 романа:

1. Т. Сагитова,
2. Б. Рафикова,
3. А. Гирфанова,
4. А. Хакимова.

Да, согласен: эти авторы делают нужное дело и пишут по горячим ***следам*** событий.

Но однако, как всем нам известно, нужно идти ***впереди*** событий, т.е. ***опережать время,*** как это делают в большой литературе Овечкин, Белов, Абрамов, Распутин, Айтматов и другие. Наши же авторы, к сожалению, «решают» преимущественно уже разрешенные руководящими органами вопросы и проблемы. От этого у них — даже положительно оцениваемых произведений — ***налет вторичности.*** А об ремесленнической поточной «литературе» и говорить не хочется. На страницы нашего единственного и как фанера тонкого журнала «Агидель», как верно сказано в докладах, широким потоком хлещет до тошноты серая, «вторичная» проза. Недаром работа писательской организации потерпела критику бюро обкома.

За этот общий «грех» главную вину несет, по-видимому, и Амир Салимгареевич Гареев — главный редактор журнала. Главным редактором может быть или большой художник, или крупный мыслитель или одновременно и то и другое. И конечно же, человек с незапятнанной честью и большим сердцем. Амир Гареев, к сожалению, ни одним из этих добрых качеств не обладает, но возомнил он себя маленьким наполеончиком. Вот это, как указали и докладчики, прискорбно отразилось и в работе редакции журнала, и в литературном процессе в целом.

И еще. «Организация быта писателей» — так определена в докладе одна из задач в работе правления. Но важнейший этот вопрос остался в скомканном виде.

Как известно, у многих писателей жилищный вопрос до конца не разрешен. Подавляющее большинство не имеет рабочий кабинет. До сих пор члены семей писателей не закреплены в нашей больнице. Не организованы профилактический медосмотр и лечение.

Пусть будет это нашим наказом для работы нового состава руководства.

Йыһат Солтанов. 23.10.1983.

“Тамам аҡылдан яҙған, үҙенең башын икәү итеп иҫәпләгән хыялый зат икән был Йыһат!” -- Сығышымлы шулай баһалаған ҡәләмдәштәрҙең береһе. Ә иң яҡын өлкән ағай туранан-тура киҫәтте: “Редакцияла үҙең уның ҡулы аҫтында хеҙмәт иткән, «Ядкәр»еңде һ.б. әҫәрҙәреңде ташҡа баҫып сығарыу йә сығармау уның ҡулында булған, ҡыҫҡаһы, яҙыусылыҡ яҙмышың менән ул үҙе теләгәнсә уйнай алған баш редакторың Әмир Гәрәйевте ниңә ***һин*** тәнҡитләйһең?! БыҒаса беҙҙең әҙәбиәттә һәм арала күрелгән эшме ни был?!.”

Эйе, күрелмәгән эш ине. Шуға күрә әхләҡи ҡалыпҡа һыймаған, намыҫлы әҙиптәр араһында булыры һис башҡа ла килтерелмәгән аҫтыртын аяҡ салыуҙарҙың осонҡырыйын күрмәнем — “Ядкәр”емдең донъяға сығыуы барған һайын нығыраҡ

тотҡарланды, кәмһенеү йәнемде иҙҙе. Намыҫлы коммунист булараҡ (һәр хәлдә, шулай тоя инем үҙемде), ауыр хәлемде рәсми рәүештә белдереп, үҙем менән бер ойошмалағы етәксе коммунист ҡорҙаштарыма ялбарырға йөрьәт иттем:

БАССР Яҙыусылар союзы партбюроһы ағзаларына

Ҡәҙерле иптәштәр!

Ун йылдан артыҡ был ҡулъяҙмам ("Ядкәр" романы, беренсе киҫәк) өҫтөндә эшләүҙең сигенә сыҡтым, буғай. Уның тәүге варианттарының береһе менән танышып, Башҡортостандың халыҡ шағиры, Социалистик Хеҙмәт Геройы Мостай ағай Кәрим үҙенең ыңғай фекерен әйткәйне инде. Үҙебеҙҙең партия ойошмаһының дөйөм йыйылышында "Ағиҙел" прозаһы хаҡында оло һөйләшеү барышында шул хаҡта миңә яҙып биргән һүҙҙәренең күсермәһен, үҙенең рөхсәте буйынса, һеҙҙең иғтибарға ҡуям. "Ядкәр"ҙең иң аҙаҡҡы эшләнеше алдындағы (предпоследний) вариантын уҡыған Х. Ғиләжев, Ғ. Әбсәләмова (1983 й.) иптәштәрҙең яҙма фекерҙәренең дә күсермәләрен теркәйем. Унан һуң автор тексты тағы ла бер ҡабат баштан-аяҡ ҡарап сыҡты, улар әйткән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөргә тырышты.

1982 йылдың уртаһында редколлегияға килгәнендә Мостай ағай Кәрим үҙе журналдың етәкселәренә (Ә. Гәрәйев, Т.Б. Сәғитов, Ә. Әхмәткужин) минең күҙ алдымда үҙ ауыҙынан: "Йыһат Солтановтың "Ядкәр" романына юл асығыҙ, ваҡыт!" — тип әйтеп киткәйне. Ошо уҡ фекерҙе минең күҙ алдымда Ә. Гәрәйев иптәшкә "Ядкәр"ҙең предпоследний вариантын уҡыған мәрхүм Фәрит Исәнғолов та еткергәйне. Ләкин һаман ана шул юл асылмағанлыҡтан, ҡәҙерле коммунист иптәштәр, ҡиммәтле ваҡытығыҙҙы исраф итеп булһа ла, "Ядкәр"ҙең ошо иң аҙаҡҡы эшләнешен уҡып сығыуығыҙҙы һәм әҫәр хаҡындағы үҙегеҙҙең фекерҙе яҙып биреүегеҙҙе үтенәм. Ҡулъяҙма бер дана ғына булғанлыҡтан, 1. Асанбаев, 2. А. Мағазов, 3. М. Садиҡова, 4. М. Ғафуров, 5. Ә. Мирзаһитов — ошо иптәштәр сиратлашып уҡыуығыҙҙы һорайым.

Оло ихтирам менән **Йыһат Солтанов.**

19 февраль 1984 й., Өфө.

Әммә быныһы ла уңышлы барып сыҡманы: партбюро ағзаһы һәм итәғәтле инсан Н. Асанбаев иптәш менән кәңәшләшкәс, ул мине партбюроға мөрәжәғәт итеүҙән төңөлдөрҙө — етәкселәр "не так поймут", үҙеңә үҙең дошмандар күбәйтерһең, тине. Сөнки уларҙың юғарынан иҫкән "елгә ҡаршы төкөрөү"ҙәре бик тә икеле ине — партиялымы, партияһыҙмы, -- бөтәһе бер сыбыҡтан ҡыуылған бит...

Сал тарихыбыҙҙың, халҡыбыҙға еткерелмәйенсә, аяҡ аҫтында тапалып ятыуынан, йәш-елкенсәктәребеҙҙең баштарына әле булһа "Октябрь революцияһына тиклем башҡорттоң тарихы ла, бер нимәһе лә булмаған" тип тылҡыуҙарынан йәнем әрнене һаман...

Тарих, тарихтың әҙәби әҫәрҙәргә кереүе һәм керергә тейешлеге («Ядкәр»ҙең тап шундай әҫәр икәнлеге) хаҡындағы фекерҙәремде ҡәләмдәштәргә тағы ла бер еткереү һәм тотанаҡ табыу өсөн, батып барыусы бәндә һаламға йәбешкәндәй, һәр осраҡтан файҙаланыуым билдәле. Бына шундайҙарҙың йәнә береһе:

Уважаемый тов. Султанов!

19 апреля с.г. в 3-00 в Союзе писателей состоится партийное собрание. Повестка дня:

1. Задачи писателей в свете решений мартовского Пленума ЦК КПСС. (Доклад секретаря партбюро тов. Гареева А.С.).

2. О ленинском субботнике. (Информация ответственного секретаря правления тов. Рафикова Б.З.).

Явка обязательна.

***Партбюро.** 15 апреля 1985 г.*

Килеүем мотлаҡ икән — фекеремде белдереү ҙә мотлаҡтыр, тип, йыйылышҡа яҙмалы телмәр әҙерләп барҙым.

Телмәрселәр исемлегенә теркәлеп, трибунанан уҡыным. Был Йыһаттан нимәлер булһа сыҡмай ҡалмай, тигәнерәк даным таралғанғамы, диҡҡәтле тыңланылар.

Мой отклик на насущные задачи

У нас у башкир есть название живительного весеннего дождя — «ләйсән ямғыры». По поверью народа, она дает жизнь всем хорошим всходам и убивает всех плохих начал. Решения настоящего мартовского Пленума нашей партии я хочу назвать вот таким же живительным дождем — «ләйсән ямғыры». Партия требует, чтобы каждый советский человек внес свой ***личный вклад*** в дело развития нашей Родины, проявил инициативу и ***конкретными делами*** боролся против ***препонов*** на пути прогресса.

В конце-то концов пора уже каждому из нас знать: не на кого-то работаем, а на себя, и не поденщиками являемся, а хозяевами своей судьбы, страны. И если личный вклад крестьянина будет оцениваться центнерами произведенного им хлеба и мяса, а рабочего тоннами угля и стали, наш писательский вклад тоже будет оцениваться конкретными произведениями, служащими великому делу партии и народа. Такими являются и произведения, на основе которых лежат поучительные факты истории. Недаром в партийных документах говорится, что *«В современных условиях КПСС придает большое значение воспитанию тружеников на героических примерах истории Отечества... Воспитание на фактах истории — это и прекрасная школа пробуждения трудового энтузиазма, развития инициативы. Партийные комитеты и Советы, профсоюзные и комсомольские организации призваны все сделать для того, чтобы эту школу прошел **каждый гражданин».***

Как известно, 23 марта 1985 года газета «Правда» выступила с редакционной статьей под названием «Воспитание историей». Однако с сожалением приходится сказать, что не все еще, даже среди нас, писателей, хорошо понимают о воспитательном значении истории. Некоторые авторы в нашем прошлом видят лишь богатырьский напиток кумыс, соловьиную мелодию курая и белоснежные юрты-теремы. Однако из истории известно и то: наш народ часто вместо кумыса глотал свою кровь, из курая тоже кровь лилась, а в белых юртах-теремах обитало черное горе. Подобный автор и историю-то нашу до периода широко известной Крестьянской войны представляет плохо. Однако ведь и до этого ***была история и не сладкая была она.*** А что касается братства башкирского народа с великим русским народом, то оно началось не в 1557 году, как принято писать, т.е. когда Башкирия добровольно вошла в состав Русского государства, а произошло это гораздо раньше — то есть еще в 1229 году, когда Русь и Древняя Башкирия почти одновременно вступили в жестокую войну против татаро-монгольских захватчиков. И, ценою своей крови спасая Западную Европу, продолжали сражаться

вплоть до 1240 года. И Древняя Башкирия пала только после того, когда татаро-монголами была завоевана и Русь. Потом установилось, как пишут историки, многовековое иго Золотой Орды, от которого наш народ был избавлен лишь, можно сказать, после добровольного присоединения Русскому государству. До того Башкирию терзали, как пишут историки, и Казанское, и Сибирское, и Ногайское ханства — являлись они продолжением той же Золотой Орды. А потом была, говоря словами Ленина, «тюрьма народов» царского самодержавия...

Да, в многовековой истории нашей Родины было много не только светлых дней, но и беспросветных черных ночей — над судьбами народов, истории, подобно черному коршуну, витала несправедливость.

И всех угнетенных народов царской России спасла великая историческая справедливость Ленина. И спасет она весь мир.

Вот об этой великой ленинской справедливости и написал я свое стихотворение «Справедливость». Думаю, для воспитания подрастающего поколения такое произведение тоже нужно. Нужно для того, чтобы верно представляли мы историю, ценили свое нынешнее историческое состояние и чтобы никто не поддавался антисоветской клевете. Чтобы не росли среди нас такие духовные уроды, вроде защищаемый радиостанцией «Свобода» так называемый «преследуемый коммунистами башкирский поэт Ахметов». Об этом духовном уродце узнал я из газетной статьи Г. Рамазанова. Да, таких людишек, если это правда, надо всенародно разоблачать. Однако гораздо важнее проводить морально-идейную профилактику — ***воспитывать историей.*** Я названное выше свое произведение считаю какраз такой работой. Однако на пути стихотворения «Справедливость» возникла несправедливость, поэтому и говорю я здесь об этом. Произведение, которое было положительно оценено и рекомендовано для напечатания в журнале редактором отдела поэзии и четырьмя членами редколлегии (Хусаинов, Бикбаев, Рафиков, Муса Гали), а также было включено главным редактором в оглавление 7-го номера, неожиданно согласно мнению двух членов редколлегии из журнала было отброшено. Роль ложки дегтя сыграло здесь пресловутое замечание Гилемдара Рамазанова. Видите ли, батыйхановых татаро-монголов, казанских, сибирских ханов и других угнетателей назвал я ***черными стервятниками.*** Вот это «черное» и не понравилось ему. Но белыми голубями, или белыми аистами что ли нужно их изображать?!. Отсюда и пошел весь сыр-бор. И такое несправедливое решение.

Я, конечно, не утверждаю, что у меня нет недостатков и написал я на сто процентов совершенное произведение. Но мне кажется, надо бы нам быть чуточку по-внимательей друг к другу, а к добрым стремлениям любого автора относиться с пониманием и благожелательностью. Потому что все мы делаем одно общее дело.

Йыһат Солтанов. 19.04.1985.

Телмәр-ҡулъяҙмам аҫтында шул йыйылыш барышында уҡ бирелгән ҡош телендәй яҙыу: «*__Й.С__! Шәп! Тексыңды күсереп бир. Йыйылыш сәркәтибе __Т.Б. Сәғитов__*».

Ләкин йәнде иң өйкәгәне лә йөҙәткәне һаман да шул «Ядкәр» ине.

Романымдың яҙмышы оҙон-оҙаҡ йылдар буйына хәл ителмәй килеүе, әммә ҡулъяҙма көйөнсә лә «ҡош-ҡорт» ауыҙына эләгеп, шуның һөҙөмтәһендә авторы өсөн күңелһеҙ хәлдәрҙең ғәйрерәк төрлөләре — тауыҡты йолҡҡандай йолҡоштороу әмәлдәре лә булғыланы. Мәҫәлән, әҫәрҙең бер бүлегенең исеме («Яҙмыштарҙан уҙмыш бар!») мәртәбәле Мостай Кәрим повесенең сәхнәләштереү вариантының исеменә әүерелде.

(Әйткәндәй, был автор З. Биишеваның «Гөльямал» поэмаһының да «Өйҙөң йәме» тигән бүлек исемен үҙенең повесенә, «Беҙҙең өйҙөң йәме» тип, исем итеп ҡушҡайны; Зәйнәб апай шуға гел асыуланып йөрөнө). Романымды секцияла тикшергәндә Яныбай ағай Хамматов беҙҙең чекистарҙың, сит илгә сығып, генерал Дутовты атып үлтереү ваҡиғаһын әҫәрҙән алып ташларға димләһә лә, аҙаҡтан шуны уҡ үҙенең романына керетеп ебәрҙе. Был ваҡлыҡтарға мин күҙ йомоп ҡараһам да, Динис Бүләковтың, «Ҡәнәфер сәскәһе» тигән беренсе хикәйәһен «Башҡортостан ҡыҙы» журналына үҙем әҙерләп биреп баҫтыртҡан шылманың, саманан сыҡҡан плагиатлығына түҙеп ҡала алманым — шул хәйерһеҙ «ижад» емешен «Ағиҙел»дән алып ташлауҙарын һорап, партия өлкә комитетына өндәштем (шуның менән яҙыусылар берлегенең буласаҡ етәксеһен ғүмерлеккә дошман яһаным үҙемә)...

Бер үк ваҡытта миңә ҡаршы яҫҡаныусы эреле-ваҡлы түрәләрҙең һүҙенән бер иле лә ситкә сыҡмаған, күҙ йомоп уларҙың ҡушыуын ғына үтәгән редколлегия ағзаларының да намыҫына тейеү, ғәҙеллек яғына ауҙарыу теләгемдән баш тартманым:

«Ағиҙел» журналы редколлегия ағзаларына.

ЯТЛАҒАНДАРҒА ЯДКӘР

(Реализм в литературе)

Не всякое изображение внешних фактов действительности реалистично. Эмпирическая достоверность художественного образа обретает смысл лишь в единстве с правдивым отражением существенных сторон действительности, которая порой требует для выявления тех или иных граней ее глубинного содержания резкой гиперболизации, заострения, гротескной утрировки «форм самой жизни». Самые различные условные приемы и образы неоднократно являлись средством точного и выразительного раскрытия жизненной правды (напр., в творчестве Ф. Рабле, Ф. Гойи, М.Е. Салтыкова-Щедрина, А.П. Довженко, Брехта), особенно тогда, когда сущность того или иного социального явления или идеи не имеет адекватного выражения в каком-либо одном единичном факте или предмете.

(Большая Советская Энциклопедия).

Роман («Ядкәр») нимә тураһында? Нимә? Нимә? Нимә?..

1. Башҡорт халҡының мәңге сал һәм мәңге йәш, үлемһеҙ ***рухи донъяһы*** тураһында.

2. Төп һүрәтләү объекты — башҡорт совет интеллигенцияһы. Төп геройҙар — яҙыусылар, ғалимдар, рәссамдар, студенттар, партия эшмәкәрҙәре.

3. Төп конфликт: кешенең үҙ эсендәге Намыҫ һәм Намыҫһыҙлыҡ, Хаҡлыҡ һәм Нахаҡлыҡ бәрелеше. Шул бәрелештең тышҡы донъяла — йәмғиәт тормошондағы көүҙәләнеше.

Сюжет

Романдағы һәр ваҡиға һәм мәғлүмәт бер-береһе менән тығыҙ бәйләнгән һәм ***автор фекеренә*** буйһондоролған — автор фекере, философияһы тоташтыра бөтәһен дә һәм сюжет бер бөтөнлөгөн, композиция теүәллеген хасил итә.

Тимәк, һеҙ күнеккән традицион романдарҙыҡынан айырмалы булараҡ, минең романдың төп сюжет һыҙығы өҫтә ярылып ятмай. Тәү ҡарауҙан күҙгә салынып бармай; ул — тәрән йомолоп ағылыусы автор фекере, автор позицияһы.

Был осраҡта һүҙ шул сюжет һыҙығын артабан камиллаштырыу йәғни ҡайбер пунктирҙарҙы тоташтырыу тураһында ғына барырға мөмкин, ә сюжеттың юҡлығы хаҡында түгел.

Улайһа, Уильям Фолькнер романдарының сюжет һыҙығы ҡайҙа? Мәҫәлән, «Шум и ярость» романының?!

Алдымда аҡты ҡаранан айырырлыҡ ғалимдар ултырғанлыҡтан, сюжет юҡ тигән һүҙегеҙҙе лә мин минең романды «Ағиҙел»дә сығартмаҫ өсөн мәкерлек ҡылып йөрөүселәрҙең ҡаҡшап бөткән тирмәненә һыу ҡойоу тип баһалайым.

Романдың төп фекере

Ҡитғаның төп халыҡтары — славяндар (беренсе сиратта урыҫтар), төркиҙәр (беренсе сиратта башҡорттар), уғырҙар борон-борон замандарҙан уҡ бер туған һәм ошо ҡитғаның төп хужалары булғандар. Башҡорт халҡы үҙенең эпосында урыҫ тоҡомон «башҡорттоң һигеҙенсе ырыуы» тип юҡҡа ғына атамай һәм ул тарихи факттар менән раҫлана. Шулай уҡ төрлө фән ҡаҙаныштарын (тарих, археология, этнография, палеография, лингвистика, топонимия, ономастика һ.б.) комплекслы өйрәнеү ҙә шул хаҡиҡәтте дәлилләй. Тимәк, башҡорт халҡы 1557 йылда үҙ теләге менән Урыҫ дәүләтенә ҡушылыу кеүек тарихи актҡа ерле юҡтан ғына түгел, ә сал быуаттарҙан килгән туғанлыҡ, ҡан ҡәрҙәшлек тойғоһона һәм бабаларҙың тарихи хәтеренә таянып барған. Ана шул тойғо, берҙәмлек тойғоһо, ошо көнгәсә башҡорт аңында һәм ҡанында һүрелмәй һаҡланып килә, быға данлы үткәндәребеҙ, бөгөнгөбөҙ ҙә дәлил. Ватансылыҡ, халыҡтар дуҫлығы, совет патриотизмы тойғоһо ана шул сал быуаттарға тоташҡан тәрән тамырҙарҙан һут ала — тимәк, ул еңелгеһеҙ, үлемһеҙ.

Иҫкәртмә. Башҡорттоң иң яҡын ҡан ҡәрҙәш туғаны — урыҫ, тигән үҙәк фекер романды уҡығанда теңкәләренә тейә, буғай, Рамазанов, Мирзаһитов, Рафиҡов, Гәрәйев кеүектәрҙең (һәм был хаҡта яҡшынан-ямандан һис һүҙ ҡуҙғатмауҙарында ла ғиллә бар!). Сөнки улар ауыҙ асҡан һайын «башҡорттоң иң яҡын ҡан ҡәрҙәше, игеҙәк туғаны — татар» тип вәғәздәр тыңлап күнеккән һәм тап шулай һөйләргә, яҙырға ҡулайлашҡан. Уларҙа был фекер инерцияһына әйләнгән. Ә мин, тарихи һәм башҡа факттарға таянып, мәсьәләгә башҡасараҡ ҡарайым. Мәҫәлән, был яҡтарға «татар» тигән тоҡом аяҡ баҫмаҫы борон уҡ әле башҡорттар һәм урыҫтар бергә аралашып (мәҫәлән, Кейәү — Киев ҡалаһы тарафында), үҙ-ара ҡыҙ бирешеп һәм килен алышып көн иткән, татар-монгол яуына ла улар бер яҡ булып ҡаршы торған, үлемесле һуғышҡан. Тимәк, был мәсьәләгә ҡарата роман авторының да үҙ фекерен үткәрергә хаҡы бар — рамазановтарға ғына үҙенекен тамаҡ ярып ҡысҡырырға, ә башҡаларға телде тешләргә тимәгән.

Йәнә килеп, «башҡорт меҫкен булған, ҡырағай булған, телһеҙ булған; уның бер нәмәһе лә — ҡалалары ла, культураһы ла булмаған, дала буйлап ҡамғаҡ кеүек тәгәрләп кенә йөрөгән» (М. Кәрим) кеүек үтә бер яҡлы һәм примитив, тарихи нигеҙһеҙ концепция бына нисәмә йылдар буйына инде үткәрелеп килә әҙәбиәтебеҙҙә, ләкин ошонда ултырғандарҙың һәм башҡаларҙың береһе генә булһа ла шуға ҡаршы сыҡҡаны бармы? Юҡ, әлбиттә. Ә минең романда башҡорттоң да үҙ цивилизацияһы булғанлығын, шуның менән ғорурланырға, бөгөн дә социализм төҙөлөшөндә шуға таянып эш итә белергә кәрәклеген дәлилләүсе фекер үткәрелгәйне, атлығып ҡаршы сыҡтығыҙ.

Берәүҙәрҙән генә лаф орҙортоп, икенселәрҙең өнөн тығылдырыу түгелме был?! Ике яҡлы элемтә булғанда ғына һаҡлана демократия. Уға китһә, ике фекер ҙә бер-береһен тулыландырып йәшәһен, кешеләрҙе уйланырға, эҙләнергә мәжбүр итһен.

Май сүлмәге тышынан уҡ билдәле, тигәндәй, миңә ҡаршы намыҫһыҙ уйын ойошторолоуы үтәнән-үтә күренеп тора. «Ағиҙел»дең 1987 йыл 1-енсе һанында наборға төшөп китергә торған ҡулъяҙманы көтмәгәндә Мирзаһитов тырышлығы менән балтанан саптыртырға Рамазановҡа тоттороп ҡуйыуҙарынан башлана был.

2 октябрҙә (1986 й.) Гәрәйев мине киҫәтте: 3 октябрҙә иртән Ғ. Рамазанов романыңды уҡып бөтөп бында килә, ултырып һөйләшербеҙ, урыныңда бул, тине.

3 октябрҙә иртүк Гәрәйев, Рамазанов, Рафиҡовтар эйәртенешеп обкомға киткәндәр, яңы ғына оҙайлы командировканан ҡайтып төшкән һәм был хаҡта хәбәрҙар булмаған Әхнәф Мөҙәрисович Дилмөхәмәтов иптәшкә барып, романды 1-енсе һанға бирҙертмәү — алдыртып ташлатыу сараһын күргәндәр.

3 октябрҙә кис Гәрәйев романды редакция хеҙмәткәре Р. Мифтахов аша Ғ. Хөсәйеновҡа уҡырға бирҙертте. Унан һуң Р. Байымов уҡырға тейеш, тине. Былар бөтәһе — комедия уйнау ғына ине, әлбиттә. Йәғни Рамазанов тарафынан романға ҡарата сығарттырылған яза приговорын тағы ла ике «присяжный»ҙан раҫлатып, рәсмиләштереп ҡуйырға — «роман барырлыҡ түгел» тигән алдан әҙерләнгән мәкерле ҡарарҙарын ҡанун хәленә килтерергә. Мирзаһитов, Рамазанов һәм уларҙың эйәрсене Б. Рафиҡов кеүектәр, башҡорттоң рухи донъяһына, тарихи хәтеренә балта сабып, башҡорттан ***манҡурт*** тәрбиәләргә тырыша һымаҡ.

Һөҙөмтәһе күҙ алдыбыҙҙа: үҙенең рухи культураһы, ата-бабаларҙың ҡаҙаныштары менән ғорурланыу мөмкинлегенән мәхрүм ҡылынған йәш быуын үҙенең әсә теленә лә, культураһына ла, атайсалына ла төкөрөп ҡарай.

Дәлил: перепистән-перепискә башҡорт телен әсә теле тип таныусы башҡорттар һаны кәмей. Һөҙөмтәлә йылдың-йылына «Ағиҙел» журналының тиражы, башҡорт китаптарының һатып алыусылары кәмей.

Икенсе миҫал: башҡорт үҙенең тыуған еренә, эскән һыуына ла төкөрөп ҡарай башланы. Мәҫәлән, башҡорттоң изге Һаҡмар һыуын башҡорттоң үҙ ҡулы менән бысратып — ағыулап үлтереүе. («Ленинец» гәзитенең 1986 йыл 9 октябрь һанындағы С. Ғафурова мәҡәләһе. Ул йәш журналист, бик хаҡлы рәүештә, ошо аянысла күренеште башҡорттоң «манҡуртлығы» һөҙөмтәһе тип атай).

Яҙыусыларҙың дөйөм йыйылыштарында, партия йыйылыштарында нисәмә мәртәбә башҡорт теленең ҡороп бөтөп барыуы, яңынан 10-15 йылдан башҡорт әҙәбиәтен уҡыусылар ҙа ҡалмаясағы хаҡында һүҙ күтәрелде! (Мәҫәлән, 1986 йылдың сентябрь айында М. Кәримдең ижади хисабын тыңлаған йыйылышта).

Күҙ алдында башҡорттоң рухи донъяһының емерелә барыуына шаһит булған яҙыусының ярала йөрәк ауазы (крик души) был роман: «Яҡшы бабаларҙың балалары бит һеҙ. Аяҡ аҫтығыҙҙа ҡайһындай оло культура мираҫы! Сал быуаттар төпкөлөнән күкрәп килгән телегеҙ, тарихығыҙ! Нисек һеҙ бөгөн шуларға һуҡыр ҡалдығыҙ, вайымһыҙ ҡарайһығыҙ?! Совет халҡын тәшкил иткән күмәк халыҡтар ҡоронда башҡорт та үҙенең телен, йөҙөн һаҡлап йәшәргә хаҡлы. Хаҡлы ғына түгел, бурыслы! Әгәр шулай итмәһә, беҙҙең быуын бөтә Тыуған ил, кешелек донъяһы алдында гөнаһ ҡылған булып сығасаҡ!..»

Рамазанов ана шул ғәҙел оранлы йөрәккә балта саба — романдың йәнен алырға, үлтерергә тырыша. Ләкин кемгә кәрәк бындай эшмәкәрлек — башҡорт халҡын, үҙенең меңәрләгән йыллыҡ тарихы, культура хазиналары өҫтөндә ултырып, бер нимәһен дә

белмәгән, хәтерләмәгән ***манҡурт*** итеп ҡалдырырға тырышыу? Урыҫҡа кәрәкме *лә* үзбәккәме? Берәүгә *лә* кәрәкмәй! Теләгән бер халыҡты манҡурт ҡылыу — дөйөм совет патриотизмына балта сабыу ул. Сөнки халыҡ үҙ телен һәм үҙ тарихын онотһа, үҙенең тыуған еренә *лә* төкөрә. Үҙенең тыуған еренән тамыр өҙһә, оло Ватандың да уға кәрәге ҡалмай башлай. Бына нәмә менән янай халыҡтың рухи донъяһының тутығып ыуалыуы!

Был — заман ҡуйған проблема!

Роман тиклем романды ***маҡтап*** һүҙ әйтер өсөн дә тәүҙә уны уҡып сығыу мотлаҡтыр. Ә инде әҫәрҙе ***үлтерә һуғырға*** яҫҡанһаң, иң кәмендә ике тапҡыр уҡып сығыу хәйерле. Бында һүҙ Булат Рафиҡов хаҡында бара. Ул, ҡасандыр бынан ун дүрт йыл элек романдың тәүге вариантына арылы-биреле генә күҙ йүгерткән әҙәм, хәҙер һүҙ барған иң һуңғы вариантын хатта ҡулына *ла* тотоп ҡарамаған килеш, орсоҡтай ғына кәүҙәһенә тауҙай ҡара мәкер туплап, үҙ буйынан да олораҡ күҫәк күтәреп, Рамазанов, Гәрәйев менән берлектә партия өлкә комитетына йүгереп барып еткән, тексын үҙе уҡып та ҡарамаған ошо әҫәрҙе, авторын хатта саҡыртып та тормаҫтан, юҡ итешеүҙә айбарланып ҡатнашҡан. Ниндәй әхләҡи ҡалыпҡа, этикаға һыя был?! Яҙыусылар етәксеһе шулай булырға тейешме?!

Шуныһы *ла* ғибрәтле: Яҙыусылар союзы идараһы, партбюроһы етәкселәре быға тиклем обкомға һәм башҡа юғары урындарға яҙыусының әҫәрен яҡлашып, уны донъяға сығартыуҙы юллап бара торғайнылар, ә был көндәрҙә беҙҙең етәксе чиновниктар шуның киреһен ҡыла. Йыһат Солтановтың романын партия өлкә комитеты, халыҡ шағиры Мостай Кәрим һәм башҡалар яҡлаған, ул роман «Ағиҙел» редколлегия ултырышында журналдың 1987 й. беренсе һанына индерелгәндән һуң да етәкселәребеҙ Мирзаһитов, Гәрәйев, Рафиҡовтар һәм уларҙың ҡойроҡтары, романға нахаҡ-ялалар яғып обкомға йүгереп бара, уны журналдан алып ташлауҙы ойоштора. Үҙҙәренең чиновник мундирҙарының бәҫен һаҡлап ҡалыуҙы был меҫкенйәндәр бөтәһенән өҫтөн ҡуя. Ниңә улар шул тиклем ҡоторона? Коммунист яҙыусы нисәмә йылдар йөрәк ҡанын һалып, нервыларын яндырып яҙған был әҫәрҙе гүргә күмеү өсөн хас та антисоветизмға ҡаршы, контрреволюцияға ҡаршы көрәшкәндәй яҫҡана?! Яҙыусыға уның ижадында игелекле ярҙам күрһәтеү, булышлыҡ итеү өсөн ҡуйылған түрәләребеҙ боронғо башҡорт тархандарылай ҡылана, юғары креслоларын үҙҙәренә ғүмерлеккә бирелгән итеп һанай, уларға олтораҡ булмаусыларҙан үс алыу өсөн файҙалана.

Етәкселәрҙе биҙәй торған күренеш түгел был, иптәштәр.

Оппоненттарыма

Һеҙҙең тарафтан романдың етешһеҙлектәре рәүешендә килтерелгән дәлилдәрҙең береһе *лә* романға ҡул күтәреп балта сабырға — журналдан алып ташларға хоҡуҡ бирмәй. Был «ҡаһарманлыҡ», билдәле булыуынса, бер кешенең ҡулы аша башҡарылды. Шуны башҡарыу өсөн ул бөтә дәрт-дарманын һалған. Беренсенән, беренсе биттә үк текст аҫтындағы «журнал өсөн ҡыҫҡартылған вариант» тигән иҫкәртмәне махсус рәүештә иғтибарға алмаған. Был иһә уға һис бер ҡыҫҡартылып ғәрипләнмәгән, тулы әҫәр ҡулъяҙмаһы алдында яҡкайндай, күҙ йомоп талап итергә, рәхимһеҙ приговор сығарырға мөмкинлек биргән. Ә бит романдың тулы тексы 650 биттән тороп, автор уны журналдың 4 һанына һыйҙырыу өсөн тәүҙә 515 биткә ҡалдырып, унан һуң йәнә редакция талабы буйынса журналдың 3 һанына һыйҙырышлы 400 битлек журнал варианты яһап мөнтәгәйне. Инде әҫәрҙең ғәйебе итеп күрһәтелгән төп «етешһеҙлектәр», билдәле, мөнтәп ҡыҫҡартыу һөҙөмтәһендә роман туҡымаһынан һурып алып ҡалынған

бүлектәрҙең һәм өҙөктәрҙең бында юҡлығы арҡаһында килеп тыуған ***мәжбүри*** етешһеҙлектәр улар асылда. Нәшриәттә тулы килеш сығарғанда мин уларҙы ҡабат өҫтәйем дә әҫәрҙе был хәлдән ҡотҡарам. Был — ҙур күләмле әҫәрҙең донъяға сығыу юлындағы була торған хәл. Ләкин ана шул ғәҙәти хәлде ғәҙәттән тыш хәлгә әйләндереп, романдың юлын бикләр өсөн сәбәп итеп файҙаланыуҙары үтә аяныс. Ә текстағы ҡайһы бер тел һәм стилистика ҡытыршылыҡтары, кәрәк булмаған техник саралар (текст аҫтындағы иҫкәртмәләр, айырым һүҙҙәргә, һөйләмдәргә баҫым яһаған разрядкалар һ.б.) йыйылмаһына килгәндә, изге күңелле редактор уларҙы әҫәрҙе тулайым кире ҡағыу өсөн ҡулланмаҫ — редакторлау барышында бөтөрөр ине. Һәм ул һеҙ әйткән «етешһеҙлектәр» йыйылмаһы иң элек романды донъяға сығарыуҙы көн үҙәгенә ҡуйып әйтелергә тейеш ине. Ә һеҙ уны киреһенсә — романды сығартмаҫ өсөн ҡулландығыҙ.

Романдағы ирония менән хикәйәләү, фантазия элементтарын оппоненттарҙың кире ҡағыуын ҡабул итә алмайым. Романдың ул сифаттары донъя әҙәбиәтендә күптән бар һәм уларҙың йәшәргә тейешлеге бер кемдә лә шик тыуҙырмай. Классик урыҫ әҙәбиәтендәге Михаил Булгаков («Мастер и Маргарита») һәм Андрей Платонов («Город Градов», «Ювеналово море») әҫәрҙәрен генә алайыҡ. Былай яҙыу манераһы беҙҙең әҙәбиәттә лә тулы йәшәргә хаҡлы, һөҙөмтәлә уҡыусыларыбыҙ алйыҡҡыс бер төрлөлөктән арынасаҡ, иң ҡатмарлы формаларҙы ла зауыҡланып уҡырға тәрбиәләнәсәк. Бөтәбеҙ ҙә бер төрлө яҙырға, бөтә романдарыбыҙ ҙа, телеграф бағаналары кеүек, бер төрлө һәм шып-шыма булырға тейеш түгел, минеңсә. Яҙыусыны уның яҙыу манераһынан ваз кисергә мәжбүр итеү — шул уҡ «урта ҡул», «икенсел», «сериялар ағымына һалынған» макулатур прозаға, төҫһеҙлеккә, кәсепселеккә киң юл асыу булыр ине. Яҙыусының үҙенсәлегенә, индивидуаллегенә ҡул күтәрергә ярамай. Был мәсьәләгә оппоненттарҙың ғына түгел, ә автор ҡарашы ла хөрмәт ителергә тейеш. Һеҙ риза булмаған, ҡабул ҡылмаған бөтә урындарҙы ла ҡалын ҡара ҡәләм менән арҡыс-торҡос һыҙып ташлау юлы менән хәл итергә тырышыу — автор ихтыярын һанға һуҡмау тигән һүҙ ул. Ә бит әҫәр өсөн беренсе сиратта автор үҙе яуап бирә. Автор ҙа, һеҙҙең кеүек үк, юғары белемле филолог — тел һәм әҙәбиәт белгесе. Шул уҡ ваҡытта ул тарихсы ла. Тимәк, роман жанрына уның да бар үҙ ҡарашы. Кем ҡарашы хаҡлылығын аҙаҡ сиктә арҡыс-торҡос һыҙып ташлаусы дыуамал ҡара ҡәләм түгел, ә тормош үҙе, әҙәбиәт тарихы үҙе хәл итер. Иң мөһиме, роман совет позицияһынан, КПСС-тың ленинсы милли политикаһы позицияһынан сығып яҙылған һәм Советтар Союзы халыҡтар дуҫлығының тәрән тамырҙарын юллап нығытыуға бағышланған. Унда урыҫ һәм башҡорт халыҡтарының бик боронғо замандарҙан уҡ ҡан ҡәрҙәш булып йәшәүе дәлилләнә, бөтә туҡымаһы тәрән совет патриотизмына һуғарылған.

Шуныһы ҡыуаныслы: теләһә ниндәй шарттарҙа ла донъя үҙ һүҙен ғәҙел әйтеүсе кешеләрҙән өҙөлмәй — улар ҙа миңә романым хаҡында үҙ фекерҙәрен яҙып бирҙе. Бына шуларҙың береһе *(өҫтәрәк бирелгән Мостай Кәрим яҙыуы килтерелә).* Хәйер, был фекерен ул 1986 йылдың 16 сентябрендә КПСС өлкә комитетында ла ауыҙ тултырып әйтте һәм шул фекерендә ҡалыуын дөрөҫләне.

Шулай булғас, ғәҙеллек инде тантана итергә ваҡыт. Йәғни был роман, роман жанрына төрлө ҡарашлы ҡәләмдәштәрҙең емешһеҙ бәхәс объекты булыуҙан туҡтап, киң ҡатлам уҡыусылар ҡарамағына сығарылырға — иң тәүҙә «Ағиҙел»дә донъя күрергә тейеш, быға тиклем 12 йыл буйы «тоҙланып» ятыуы ла еткән. Коммунист яҙыусы булараҡ, партия өлкә комитетынан, редколлегия ағзаларынан мин ана шул ғәҙел талапты ғәмәлгә ашырыуҙа ярҙам итеүҙе һорайым.

Һәм роман «Ағиҙел»дең ҡасанғы, ҡайһы һанында ташҡа баҫыла башлаясағын миңә кисекмәҫтән мәғлүм итеүегеҙҙе үтенәм.

Йыһат Солтанов. Ноябрь, 1986.

Берҙән-бер ҡалын журналыбыҙ «Ағиҙел»дең күрһәтелгән сәбәптәр арҡаһында сифат яғынан һаман йоҡара барыуы, уны алдыртыусыларҙың һаны йылдан-йыл кәмеүе, әҙәбиәт етәкселегендә нығынып алған серек рухлы өйөрҙөң намыҫлы һәм талантлы башҡа авторҙарҙы ҡыҫырыҡлауы күңелемә бер ҙә тынғылыҡ бирмәгәс, 1986 йылдың 2 декабрендә Яҙыусылар берлеге партия ойошмаһы ағзаларының йыллыҡ хисап йыйылышында сығыш яһаным тағы...

Читатель и писатель

Хочу начать с журнала «Агидель». Как известно, за последнее пятилетие мы под «мудрым руководством» Амира Салимгареевича Гареева потеряли безвозвратно около десяти тысяч подписчиков, такая тенденция продолжается. По предварительным данным подписки на 87-ой год, к сожалению, тираж журнала может еще сократиться на 2-3 тысячи экземпляров. В чем дело?

На этот вопрос нелицеприятно отвечают нам сами подписчики — не хотят они читать нашу прозу. Потому что, говорят они, она очень однообразна, примитивна, неинтересна. Герои многих романов и повестей не соответствуют современному духовному состоянию народа, а иногда искажается историческая правда. Да, бывает, публикуются и хорошие произведения, но они не спасают положение. Читатель теперь не простой — умный, образованный и мерит он все с всесоюзными да мировыми эталонами. При этом наши даже хваленные вещи оказываются в большом проигрыше. Потому что, как я думаю, мы все еще барахтаемся в болоте тридцатых годов, зачастую мешают нам застой ума, инертность, дефицит самостоятельности, дерзости в осмысливании сложных жизненных фактов и уроков истории. Если кто-то из местных корифеев что-нибудь да изрек — то считается, что этим истина исчерпана и дальше думать не стоит. Напротив, при нынешнем руководстве писательского союза и редакции «Агидель» выгоднее литератору мыслями голову не ломать, а придерживаться готовенькой отштампованной «истины», несмотря на то, что, мягко говоря, истина эта несколько прихрамывает. Как в известном королевстве: если король хромает, то и остальные должны хромать (при том на ту же ногу!), порождая в литературе умственный примитив. Вот почему теперь многие башкиры башкирскую прозу не читают. Предпочитают русскую. А проза, как известно, это основа литературы. Значит, чтобы вернуть читательское доверие, нужно всем нам, писателям, срочно измениться, то есть перестроится. Партия, страна этого требуют. Хватит нам хромать.

Вот тут и начинается трагедия, писательское бессилие. Если ты вопреки ко всему не поддаешься обязательному «обычаю» королевской хромоты, и мыслишь оригинально, а при том в никаких начальниках не числишся — горе тебе: перед тобой наглухо запирается дверь единственной нашей редакции журнала «Агидель». Главредактор Гареев сам запирает. Его принцип руководства как у старинных башкирских феодалов: если ты түрә — уважаю, если ты не түрә — не уважаю, уходи! Ему подавай лишь «людей при должностях» да «кровно» ему близких, то есть «своих». Вот и получается, в журнале

из года в год подвизаются одни и те же авторы, их публикации наводняют книжный рынок, порождая, мягко говоря, нудное однообразие и отшибая качество. Потому что указанным счастливчикам незачем думать о качестве — Гареев свой, все ровно напечатает.

Чтобы не быть голословным, возьмем журнальную прозу за текущий 1986 год. Январь: весь номер завален путевыми записками Р. Султангареева (зам. главного редактора журнала) и Р. Бикбаева (член редколлегии). Апрель, май, июнь: роман А. Хакимова (член редколлегии «Литгазеты»). Июль, август: эссе Г. Хусаинова (член редколлегии). Сентябрь: повесть А. Гареева (главный редактор). Октябрь, ноябрь, декабрь: роман Б. Рафикова (член редколлегии и оргсекретарь союза писателей). Как видно, целых десять книжек журнала из двенадцати «оккупированы» дружным кругом «людей при должностях»...

Не собираюсь я огульно отрицать все эти публикации — среди них есть и хорошие вещи, но бледненьких, серененьких, примитивных больше. Я также не говорю, что «человек при должности» не должен печататься, нет. Он тоже имеет право, но не в ущерб большинству и родной литературе. Очень некрасиво, когда автор проталкивается благодаря не таланту, и даже не пресловутым локтям и кулакам, а креслу. Здесь тоже должна соблюдаться строгая очередность как при распределении жилья, ибо у нас только один дом — тоненькая «Агидель». Поэтому его площадь надо использовать разумно. Здесь никакой групповщины допускать мы не можем, не имеем права, если бы даже состояла она из самых избранных людей.

Как известно, деятельность правления и редакции должна строго контролироваться со стороны партбюро. Делается ли это? Думаю, делается и даже горячо одобряется. Потому что ведь и заместителем председателя правления, и главным редактором журнала, и секретарем партбюро является одновременно одно и то же «многогранное» лицо — бесподобный Амир Гареев. Вот и получается: работу Амира строго контролирует Амир и горячо одобряет Амир. Воистину амир (то есть генерал) во всех отношениях! Остается лишь уповать на другого досточтимого члена партбюро и председателя правления товарища Мирзагитова. Но строго спрашивать от него не в наших возможностях: ибо он за последние годы, как говорится, оторвался от земли и витает высоко в небесах предаваясь глубокомысленным рассуждениям о сути интеллигентности (смотрите “Литературную газету”), хотя таким интеллигентным делом сподручнее было бы заниматься не кому нибудь из нас грешних, а академику Лихачеву. Нам же было бы лучще вникнуть в повседневные заботы собственного не блестящего литературного цеха. Но нашему лидеру, видать, некогда: то по Союзу перелетает в турне, то за границей, то в санаториях, то в больницах или где нибудь в почетных гостях находится. Поэтому работа с писателями почти целиком и полностью с его широких плеч переложена на узенькие плечики оргсекретаря Рафикова, который, будучи тоже очень занятым великими собственными интересами, ко всем остальным собратьям совсем интерес потерял. Как сказал о нем один товарищ, «канцеляристом быть он может, но канцлером — никогда». Для этого ему просто человечности нехватает. Раз так, как же он может быть организатором, проводником курса председателя? Да и сам курс-то взят ли правильно? В этом меня терзают сомнения, ибо, к глубокому прискорбию, я сам стал свидетелем, как наш председатель в принципиальном вопросе литературной политики придерживался устаревшей установки 30-х годов, которая была в свое время декларирована устами Даута Юлтыя: «Сегодны героями поэмы должны стать ***азот,***

мазут, гигантские заводы!». Правда, Мирзагитов обмолвился только о ***нефти.*** Происходило это в обкоме партии, когда решалась судьба моего многострадального романа «Ядкәр». *«Наша республика это **республика нефти,** провозгласил он, — поэтому на первом месте должен стоять **роман о нефти!».*** На что я там же резко возразил: «Нет, наша республика прежде всего это ***республика людей,*** на первом месте должен стоять ***человек*** с его героическим трудом и богатым духовным миром. Мой роман и является таковым».

Подобная оторванность от насущных литературных забот дала знать о себе в речи нашего руководителя на VIII съезде писателей СССР, когда сильно сокрушался он об отсутствии интеллигентноси в писательских рядах. «Мы всегда гордились тем, — сказал оратор, — как русские классики с большой любовью изображали представителей разных народов. Эта хорошая традиция сегодня не продолжается на том уровне, которой мы хотели бы. Нас беспокоит, как часто образы некоторых нерусских людей изображаются карикатурно, даже глупыми».

Не русские или другие писатели, а мы сами виноваты, товарищ Мирзагитов! Ведь современные иногородние и иноязычные писатели-то в большинсве случаях общаются лично с Вами, или же представителями выпестованной лично Вами же так называемой «обоймы». И очень часто информацию о нашем народе черпают они через них или через их книжек. А в тех устах и книгах очень часто мы сами же изображаем наш родной народ убогим, диким, невежественным, примитивным. Ничего не стоит ведь нам печатно разглагольствовать, что *«у башкир раньше ничего не было — ни истории, ни культуры, ни письменного языка, ни литературы, ни городов и сел»,* что *«они по степям как перекти-поле носились»* (М. Карим). Кто же будет уважать такой народ? Где уж тут думать об интеллигентноси!

Вот и вспоминаются некрасовские слова: «Ты и убогая, ты и могучая — матушка Русь!». Вот что верно то верно! Так ведь о всех народах можно говорить — больших и малых, в том числе и дореволюционном башкирском народе. Но мы, по причине нашей умственной косности и трусости, приспособились твердить лишь первую часть некрасовской строки — «убогая». А чтобы досказать «и могучая» и с тем самым преодолеть нашу инттеллектуальную инертность, никак не поворачивается язык, хотя исторические факты того позволяют, даже вопиют об этом. Как будто мы до сих пор еще боимся, как бы нам вдруг не приклеили ярлык *национализма.* Но теперь уже нет и не может быть национализма в таком понимании, каким он понимался до революции и в 30-х годах, а есть *национальное самосознание* советских народов, которое является неотъемлимой частью интернационализма и советского патриотизма.

Однако, к сожалению, по не известным мне причинам у нас все еще беспрепятственно публикуется негативный взгляд на башкирский народ, его историю. Позитивному взгляду, если он еще и оригинален, очень часто пути-дороги закрыты. Так случился и с моим романом, где я в силу моих возможностей пытался с позитивных позиций изобразить совместную богатую духовную жизнь башкирского и братского русского народов, доказывал не только их многовековую дружбу и духовное родство, но также их родственность даже по крови, древнему языку. Парадоксально? На то и оно роман-эссе, чтобы парадоксальные явления рассматривать. Смею заверить, в этом произведении сочетаются ***новая форма с новым содержанием.*** При этом я относительно своего народа не только светлые краски, но и темные применил. Но плевательством на свой родной народ не занимался и был строго наказан: роман-эссе, который, после 12-

летних мытарств, наконец, благодаря прямому вмешательству обкома партии был принят для публикации начиная с январьского номера 1987 года журнала «Агидель», опять приостановлен перед самой отправкой в набор. И не только это. Меня еще заставили «по собственному желанию» уволиться с работы. Но я не претендую обратно на это место — констатирую только факт.

Товарищи, должны Вы понимать, сколько трудов, крови и нервов затратил я созадавая свое крупное произведение. Сколько новых замыслов моих остались не осуществленными в связи с долгой задержкой опубликования его. С тем самым, смею утверждать, нанесен непоправимый урон не только автору, но и читателям, всей нашей литературе. Ибо с задержкой произведения любого писателя задерживается и сама литература. Своей новизной, может быть, и спорное оно, это произведение, может быть и некоторые недостатки есть, но не контрреволюционное же оно! Не надо держать его под домашним арестом, а опубликовать. Пусть читатель сам рассудит, кто прав, а кто не прав.

Вот скоро стукнет уже тринадцатый год с того памятного мне дня, когда в 1974 году мой роман был обсужден на заседании бюро секции прозы и получил положительную оценку. Об этом сообщали республиканские газеты. Но руководство правления во главе с Мирзагитовым в течении этих тринадцати лет, вместо того, чтобы помочь, делал и делает все для того, чтобы многострадальный труд писателя окончательно был зарезан.

А говорим об интеллигентности...

Йыһат Солтанов. 2.12.1986.

Күренеүенсә, ҡулға-ҡул тотоношоп йәшәгән, бер табаҡтан ашаған, бер шешәнән эскән һәм күҙ йомоп бер-береһен яҡлашҡан юғары вазифалы әҙәби чиновниктарыбыҙ өйөрөнә күрәләтә киҙәндем... Һәм беләм: ошо көндән үк миңә ҡаршы асыуҙары һәм үстәре уғата ҡабарынып, улар яңы һөжүмгә күсергә тейеш. Әммә мин дә йоҡлап ятыусыларҙан түгел. Шуны күҙ уңында тотоп, иртәгәһенә үк (тыуған көнөмдә!) контрудар әҙерләнем.

В Башкирский обком КПСС — от члена КПСС писателя Султанова Зигата Адигамовича.

Большой отрывок из моего романа «Ядкәр» был опубликован на девяти номерах газеты «Совет Башҡортостаны» с 12-го по 18-ый и с 22-го по 24 октября 1974 года. Предложенный тогда мною кусок увидел свет полностью, со стороны обкома КПСС никто не запрещал и не прерывал. Правда, в промежутке между 18-го и 22 октября на несколько дней публикация была задержана, но как потом объяснили мне товарищи из газеты, по вине нашего председателы Союза писателей БАССР т. Мирзагитова: он, разъяренный с «недозволенным» содержанием редакционной «корзинки» предварившая публикацию, по телефону обругал редактора газеты и пригрозил, что устроит ему «головомойку» со стороны обкома партии (эти два редактора между собой не ладили.). Через несколько дней выяснилось, что обком партии не видит ничего крамольного ни в «корзинке», ни в тексте самого произведения, публикация была продолжена и доведена до конца.

А что касается «недозволенного» (по мнению т. Мирзагитова) в «корзинке», то по неопытности и наивности (а теперь могу сказать, и по нескромности) автора там было сообщено, что «писатель Зигат Султанов завершил *пятую книгу*[15] своего романа «Ядкәр». В этой (пятой) части произведения, задуманном в большом объеме, изображена высокоинтеллектуальная жизнь современной башкирской интеллигенции, а главным конфликтом романа является схватка двух противоборствующих мировых идеологий». Писательскому руководителю не понравилось выражение «пятую книгу... романа... задуманного в большом объеме» и, как свидетельствовал тогда один авторитетный мой коллега (Я.Х. Хамматов), Мирзагитов был «взбешен и дальше жди себе больших бед»... Как мне кажется, нашему высокому начальнику, прежде чем пойти на указанную акцию, разумнее было бы якобы провинившегося писателя (т.е меня, его собрата по перу) пригласить к себе, спокойно расспросить о творческих планах и завершенных уже работах, а если нужно, по-товарищески крепко и пожурить за промах... Однако раздражительность его брала верх. Но самое печальное состоит в том, что эта волюнтаристская выходка руководителя сыграла роковую роль в моей дальнейшей творческой судьбе: с того злополучного дня прошел слух обо мне как о «неугодном для обкома КПСС писателе», в редакциях стали меня избегать, перестали печатать... Такая напасть продолжается до сих пор, причем некоторые нынешние «деятели», как оргсекретарь правления Союзв писателей Б. Рафиков, указанную зловещую легенду обо мне всячески муссируют. Чем я заслужил такую звериную ненависть Рафикова — мне не известно.

Теперь относительно «пяти книг». Хотя уже понимаю, что говорить так нескромно, но нынешние роковые обстоятельства вынуждают меня раскрыть «секреты» своего творчества.

Заявка о «пяти книгах» хотя и явилась моей оплошностью, но не является голословной, имеется под ней своего рода основание:

1-я книга (текст требует некоторой доработки) — «Коммунист», 182 стр. машинописного текста, о гражданской войне в Башкирии. 5 февраля 1971 года рукопись была обсуждена на заседании бюро секции прозы СП БАССР и рекомендована для опубликования в Башкнигоиздате. Большой отрывок опубликован в пяти номерах (с 17 по 23 марта 1971 г.) газеты «Совет Башҡортостаны». До сих пор рукопись лежит у меня, т.к. директор Башкнигоиздата не опубликованные в журнале «Агидель» рукописи не принимает. Тогдашний главный редактор журнала А. Мирзагитов тоже не опубликовал (а ставший потом председателем правления СП и другим не рекомендовал), мотивируя тем, что разгребать такой сложный материал преждевременно. Кстати, до этого в 60-х годах он же зарезал сразу два моих сатирических повестей, причем первая из них под названием «Пены на высоких волнах» точно так же, как и теперешний мой роман, была снята с производства перед самой отправкой в набор. Мотивировка: «надо быть осторожным, за сатиру теперь нас по головке не гладят».

2-я книга — «Земля моя, люди мои» (другое название «Сакмара-река»), 450 стр. машинописного текста[16]; крупные куски были опубликованы в журнале «Агидель» и

---

[15] Роман был по счету пятой книгой задуманного тогда мною большого полотна (включая обсужденного уже в бюро секции прозы и получившего положительную оценку произведение «Коммунист»), но это не означало, что все пять книг уже написаны.

[16] Был романым 1996 йылда ғына Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә донъя күрҙе.

газете «Совет Башҡортостаны». Полный текст прочитал писатель Г. Ибрагимов и оценил положительно. Текст требует некоторой доработки.

3-я книга об участии башкирского народа в составе башкирской кавалерийской дивизии в Великой Отечественной войне, книга еще в начальной стадии: автор совершил поездку по местам боевой славы дивизии, в течении многих лет он тесно общался со многими участниками войны, собрал обширный материал. В процессе собирания материала оказал непосредственную помощь в подготовке к печати двух книг-воспоминаний ветерана дивизии С.Р. Кадирова: «Через огонь и воды» (литературная обработка З. Султанова) и «Орел Урала» (литературная запись З. Султанова, книга издана на башк. и рус. языках). Пробная часть задуманной мною книги о войне была опубликована под названием «Там, где сверкали алмазные клинки» в семи номерах (с 29 августа по 7 сентября 1971 года) газеты «Совет Башҡортостаны». Однако продолжающаяся до сего дня многолетняя борьба за судьбу романа «Ядкәр» отняла у меня много сил и здоровья, поэтому завершение книги о войне задерживается.

4-5 книги — только что названный и теперь уже известный и Вам роман «Ятлағандарға ядкәр» (или «Ядкәр»). Сегодня некоторыми коллегами против него ведется беспощадная война на полное уничтожение.

А если товарищ Мирзагитов все еще сомневается и убежден в том, что говоря о своих работах я обманываю, может послать официальную ревизию в мой «рабочий цех» и проверить все на месте. Что касается его рецензии на роман (рецензия написана в 1984 году, после этого я роман переработал), главная пртензия рецензента сводится к следующему: «сатира, или реалистический роман?!.» В таком случае куда девать М. Булгакова («Мастер и Маргарита»), А. Платонова («Город Градов», «Ювеналово море») и других, которые свои сугубо реалистические романы написали в таком неугодном А. Мирзагитову, говоря его же словами, «ироническо-сатирическом жанре»?!.

С глубоким уважением член КПСС писатель **Йыһат Солтанов.** 03.12.1986.

«Заговор обреченных»

Шул исемле кинофильм киң танылыу ҡаҙанғайны ул саҡта — йәшерен һүҙ ҡуйышҡан, ләкин мәкерле эштәрендә еңелеүгә дусар ителгән фетнәселәр хаҡында.

Әлеге йыллыҡ партия йыйылышынан һуң, һарыуҙары ҡайнаған баяғы начальник-түрәләребеҙҙең миңә ҡаршы яһилланып ни ҡыласаҡтарын алдан уҡ төҫмөрләүем дөрөҫкә сыҡты тәки — өйөрҙәре менән бер төптән ҡубынып ҡылдылар үҙҙәре уйлаған «иң һуңғы һәм иң хәл иткес» һөжүмде:

Секретарю Башкирского обкома КПСС тов. Ахунзянову Т.И.[17]

Уважаемый Тагир Исмагилович!

Доводим до Вашего сведения свою оценку отчетного партийного собрания писателей, состоявшегося 2 декабря 1986 года[18]*. Фактически оно провалилось, было уведено в сторону насущных проблем дальнейшего развития башкирской советской литературы демагогическими*

[17] Текст өҫтөнә: «Получено 11 декабря 1986 г.» тип билдәләп ҡуйылған.

[18] Күрәҙәсе икәнмен дә: баяғы партия йыйылышынан һуң уларҙың ошолай ябырыласағын алдан уҡ дөрөҫ күргәнмен.

выступлениями некоторых коммунистов, выдвинувших на первый план свои сугубо личные корыстные интересы...

Теперь очевидно, что среди писателей сложилась группа, поставившая перед собой цель очернить руководство Союза писателей и редакции журнала «Агидель»...

В этот раз для нападков была использована 12-летняя история с рукописью так называемого романа-эссе «Ядкарь» Зигата Султанова. Это произведение, не имеющее каких-либо художественных достоинств (ни сюжета, ни одного героя с более или менее приемлемой нравственностью, карикатиурное изображение секретаря обкома, трудно читаемое, правда, не содержит в себе высмеянного Мустаем Каримом[19] *султановского утверждения, что башкиры первыми придумали колесо и мазь для него, но целиком подчинено той же глобальной султановской мысли: вся цивилизация началась с башкир, полно унизительных намеков в адрес соседних народов*[20]*... И это произведение в 1974 году было обсуждено на заседании секции прозы и получило одобрение (по словам одного из оставшихся в живых участников обсуждения Нугумана Мусина — с многочисленными серьезными замечаниями). Тогда же роман начал печататься в газете «Совет Башҡортостаны», в предисловии автор заявил, что он задуман из 20 (двадцати) книг*[21]*, но газетная публикация была прервана по указанию обкома партии*[22]*...*

В течение многих лет Зигат Султанов молчал и года 2-3 назад вновь принес свою рукопись, уверяя, что она переписана заново. Роман прочитали, подробно отрецензировали Булат Рафиков[23] *и Асгат Мирзагитов. Было сказано, что роман нуждается в серьезной переработке и в идейном, и художественном аспектах. Автор согласился с доводами рецензентов. Но через некоторое время поведение Зигата Султанова неожиданно преобрело агрессивный характер...*

В истории с этим романом нас особенно удивляет позиция Кадима Аралбаева[24]*. После второй жалобы Зигата Султанова в обком партии на Асгата Мирзагитова и Амира Гареева, которые якобы мешают публикации романа из-за личной вражды автору, он (Аралбаев) стал настаивать на немедленном печатании этого произведения в журнале, пугая тем, что иначе автор напишет и в ЦК КПСС. Более того, на заседании редколлегии настойчиво требовал начать его публикацию немедленно, с январского номера, доказывая, что это произведение о становлении башкирской советской интеллигенции и явится хорошим подарком 70-летию Великого Октября. У членов редколлегии создалось впечатление, что Кадим Аралбаев или толком не прочитал этого произведения, или не смог разобраться в нем*[25]*. Было решено отдать «Ядкарь» еще на одну рецензию — доктору филологических наук Гилемдару Рамазанову,*

---

[19] Эврико: Мостай Кәримдең күп тапҡырҙар юғары партия һәм дәүләт трибуналарынан, исемемде әйтмәйенсә, "национально ограниченный" тип тәғәйен мине күҫәкләгәнен уның мөриттәре йәшермәй әйтеп һалды!

[20] Һүҙ барған партия йыйылышында идара оргсәркәтибе Б.З. Рафиҡов белдереүенсә, «Ядкәр» романының авторы, имеш, башҡорт милләтсеһе булараҡ, күрше татар халҡына яла яҡҡан. Бының нахаҡлығын йыйылыш барышында уҡ фашланым. Ә теләгән һәр кем быға әҫәрҙе (Йыһат Солтанов. Ядкәр. Роман-ҡисса. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1992) үҙе уҡып инана ала.

[21] Ә дөрөҫө, ҡамса — биш китаптан торасаҡ, тип әйткәйнем.

[22] Теүәлерәге, рәйесебеҙ Ә.М. Мирзаһитовтың партия өлкә комитетына барып ошаҡлауы буйынса ваҡытлыса туҡтатылып, күп тә үтмәй, аҙағынаса еткереп ташҡа баҫылды.

[23] Ялған һүҙ: Булат Рафиҡов уғаса бер ваҡытта ла романды уҡыманы һәм рецензия яҙманы, ләкин һәр саҡ уны ташҡа баҫтыртмаҫ өсөн көрәште.

[24] Ул саҡтағы партия өлкә комитеты Культура бүлегенең инструкторы һәм Яҙыусылар берлеге, «Ағиҙел» журналы буйынса куратор, билдәле шағир.

[25] Йәғни Йыһат Солтановтың «башҡорт милләтселеге» шауҡымына күҙ йомған.

который тоже пришел к мнению, что роман в таком виде печатать нельзя[26]*. То же самое сказали профессоры Гайса Хусаинов и Роберт Баимов, прочитавшие роман позже...*

Так вот, на отчетном собрании Зигат Султанов выступил с пространной речью. Изрядно поехидничав по поводу «мудрости» Амира Гареева, болезней и заграничных поездок Асгата Мирзагитова, узости плеч Булата Рафикова, он, уволенный недавно из редакции журнала по собственному желанию, а фактически за развал работы отдела критики, взялся за критический разбор работы отдела прозы, а уменьшение тиража журнала объяснил тем, что не публикуют его роман.

Тон был задан. Зайнаб Биишева объявила Зигата Султанова великим тружеником, по своему обыкновению прошлась по адресу Мустая Карима («ваш кудрявый», «ваш герой»), свое падение с лестницы в здании Союза писателей СССР в начале VIII съезда представила чуть ли не организованным покушением на нее (какой-то знакомый высокий мужчина с портфелем в руке, о ноги которого она споткнулась), заявила, что в республике ее не признают, притесняют, лишь Москва ее спасает. Ее слово кое-кому пришлось по вкусу, и они пытались организовать массовую овацию... Тайфур Сагитов предложил ввести в решение отчетного собрания специальный пункт о романе «Ядкарь», отстранить от этого дела редколлегию журнала, к которой теперь Зигат Султанов не питает доверия.

Таким образом, собранию вновь был навязан роман «Ядкарь», который и так заслонил собой наиболее актуальные вопросы литературного процесса, которые пытается решить правление и редколлегия журнала... К сожалению, оскорбления в адрес нынешних руководителей Союза и редакции, выпады против Мустая Карима, вся эта работа локтями не были замечены лишь руководящими партийными работниками, присутствовавшими на собрании. Зав. отделом Культуры обкома КПСС тов. Дильмухаметов А.М. назвал все выступления хорошими, принципиальными.

Получилось так, что он молча одобрил и то, что Зайнаб Биишева начисто отрицала целесообразность решения партийных органов после гражданской войны об образовании комиссии по реализации башкирского языка и ее работы во главе с Шагитом Худайбердиным, а также призвала собрание брать пример с татарских писателей и перестать ругать эмигрировавшихся после революции башкирских деятелей, то бишь Заки Валидова[27]*. Мы понимаем, что демократизация советского общества предполагает открытое выслушивание всех мнений, но всему должна быть дана партийная оценка.*

Обструкция, устроенная на партсобрании группой себялюбцев, не стесняющихся в выборе средств для прокладки себе пути, прямо скажем, не лучших представителей нашей литературы, конечно же, преследуют цель ***свалить нынешнее руководство Союза и редакции***[28] *еще до съезда писателей Башкирии, который не за горами. А приход таких людей в руководство чревато многими осложнениями для всей башкирской литературы*[29]*.*

Тов. Дильмухаметов А.М., видимо, из-за своей перегруженности работой слишком полагается на мнение своего инструктора Кадима Аралбаева, на его партийную объективность

---

[26] Ғ. Рамазанов, шул «əҙəбиəт генералдары» өйөрөнөң айырылғыһыҙ бер вəкиле булараҡ, əҫəрҙе тотҡарлау буйынса өйөрҙөң заказын, əлбиттə, еренə еткереп үтəне.

[27] Был шикəйəтнамəгə ҡул ҡуйған яһил дүртəү, тимəк, Зəйнəб Биишева ла, совет хакимиəтенең «ҡан дошманы» Əхмəтзəки Вəлидов кеүек үк, һөрһөп бөткəн башҡорт миллəтсеһе ул, тимəккə баралар һəм бер киҙəнеүҙə уны ла юҡ иттертергə яҫҡаналар.

[28] Меҫкендəр: туған əҙəбиəтте түгел, ə ултырған креслоларын һаҡлап ҡалыуҙы ҡайғырталар.

[29] Үҙ баштары һəм йөрəктəре ҡушыуынса, Намыҫ бойороуынса эшлəрҙəр, тип ҡурҡалар, гəрсə беҙ етəкселеккə килергə уйламаһаҡ та.

и прозорливость. Но член СП СССР Кадим Аралбаев, любящий часто повторять «обком так думает!», в некоторых случаях показал себя совсем иным. Являясь куратором журнала «Агидель» он не может идти дальше мелочной опеки, придирок по поводу знаков препинания. Его же предложения по содержанию журнала часто дают отрицательный результат. Так, 60-летию журнала он опубликовал материал со ссылкой на ***буржуазного националиста*** *Х. Габитова. Его хлопоты по поводу романа «Ядкарь» также вызывают сомнения относительно его компетентности*[30]*...*

А. Мирзагитов.
А. Гареев. Т. Юсупов.
Б. Рафиков.

Ошоноһо ғына ла етмәһә, өҫтәүенә, баҫылып сыҡмаған романымды яманлап (ә был бөтөнләй хилаф эш!) һәм «Урал батыр шәжәрәһе» өсөн миңә «Ағиҙел» журналының йыллыҡ бүләге бирелеүенә асы нәфрәт белдереп, рәйесебеҙ Әсғәт Мирзаһитов исеменән Мәскәү-мәркәздең үҙенә үк емерткес мәҡәлә-шикәйәтнамә атҡарылған булып сыҡты (ләкин ул Өфөләге ваҡиғаларҙың эҫе мәленән ике айға һуңлап ташҡа баҫылды — «Литературная Россия» гәзитенең 1987 йыл 13 март №11 һаны). Әйтелгән шикәйәтнамәләрҙең икеһе лә, был осорҙағы миңрәүләнгән (был хаҡта хатта рәсми органдарҙа ла беләләр ине) Мирзаһитов үҙе ҡәләм тибрәтеп фекерләй алмағанлыҡтан, эргәһендәге «серый кардинал» тип аталмыш (был ләҡәп Тайфур Сәғитовтың романында ла бар, буғай) әлеге лә баяғы шул Б. Рафиҡовтың ҡәләме аҫтынан сыҡҡанлығы күптәргә билдәле ине. Заманында «йәшел йылан» тәьҫиренә ныҡ бирелеүе арҡаһында (быны ул аҙаҡ үҙе лә яҙып ҡалдырҙы) алтындай йылдарын ижадһыҙ яндырғаны өсөн, хәҙер килеп, уға тамсы ла зыяны теймәгән, әммә айныҡ ҡалып ижад иткән ҡайһы бер ҡәләмдәштәренән үс алғандай ине был... Һәм бына килеп яҙыусыларҙың бер үҙҙәре генә түгел, ә етәкселек итеүсе партияның өлкә, баш ҡала, район комитеттары вәкилдәре, матбуғат органдары хәбәрселәре лә ҡатнашлығындағы шул оло йыйылышта ижадыма ҡарата ҡылынған ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы мин сығып телмәр тотҡас һәм залдағы ипле генә коммунистар: «Ни өсөн һуң тотҡарлайһығыҙ уның романын, аңлатып бирегеҙ?» — тип идара етәкселәренән һорағас, идараның оргсәркәтибе булмыш баяғы Б. Рафиҡов, күҙ ҙә йоммай: «Беҙ Йыһат Солтановтоң романын шуның өсөн баҫтыртмаҫҡа ҡарар ҡылдыҡ, сөнки унда милләтселек көслө — күрше туғандаш милләтте түбәнһетә", — тине, күҙен дә йоммай. — "Ҡайһы милләтте, әйтеп бир!" — тип мин ныҡығас: — "Татар милләтен", — тип яуапланы. Мин, аптырап: "Юҡты һөйләмә! Тәғәйенен әйтеп бир: романдың ҡайһы урыны йәки образы ул?" — тип ҡыҫмаҡлағас, саҡ ҡына уйланып торҙо ла: — "Килмешәк образы", — тине. Шуға хайран ҡалып: "Романдағы ул кире образ — башҡорт бит, бөтөнләй татар түгел!" — тип асыҡлыҡ керетергә итһәм дә, ҡолаҡҡа элмәнеләр кеүек — партия өлкә комитетының, район комитетының вәкәләтле вәкилдәре (күбеһе татар милләтенән!) йыйылыштан ошо шомло уй менән ҡайтып киттеләр — мине тамам һәңкәҙетә һуғыу, романымдың башына етеү ине был. (Аҙаҡ архивта шул партия йыйылышының протоколын ҡараным: партбюро сәркәтибебеҙ Ә.С. Гәрәйев, намыҫһыҙ рәүештә ялғанлап, Рафиҡовтың сығышының асылын йәшереп: "Тов. Рафиков. Я сам был

[30] Заманаһының халыҡ шағиры (20-нсе йылдарҙың рәсми ҡағыҙҙарында ул тап шулай «халыҡ шағиры» тип атала), ләкин 1937 йылда «башҡорт буржуаз милләтсеһе» итеп юҡ ителмеш Хәбибулла Ғәбитовҡа һылтаныусы Ҡ. Аралбаев та, эш буйынса уның башлығы Ә. Дилмөхәмәтов та, һәм улар тарафынан яҡланған Й. Солтанов та, тимәк, «башҡорт милләтселәре» кәштәһенә һалына бер юлы.

свидетелем обсуждения многострадательного романа", тип кенә сонторлап теркәгән). Үҙем кеүек үк ҡәләмдәштең күрәләтә яла яғыуы рәнйетте күңелемде, көтмәгәндә йөрәгемде йылан саҡҡандай булды. Ошоғаса һәр төрлө ҡыйырһытылыуҙарҙы сабыр кисерә тороп та, был юлы хәтәр яҙмышҡа дусар ҡылыныуымды яҡшы тойоп, Лев Толстойҙың: «Уң сикәңә һуҡһалар — һуҡтыртырға һул сикәңде ҡуй», — тигәненең оторорһон ҡылырға — һуғыусыға уның үҙенең миңә киҙәнгән «милләтселек» суҡмары менән уғата ҡатыраҡ ҡундырырға ҡәһәтләндем һәм йәберсемдең шул арала журналда сыҡҡан романының тупаҫ кәмселектәре тураһында ул үҙе үк йөрөп шымартҡан юлдан партияның өлкә комитетына мин дә хат яҙып күндерҙем. Асылда башҡорт араһына килмешәк-ятбауыр булып кергән ялғый аферист-шпионды башҡорт халҡының милли геройы итеп күтәрергә, төрлө уйҙырмалар аша башҡорт халҡын — урыҫ халҡына, урыҫ дәүләтенә ҡаршы ҡуйырға маташыуын төрлө тарихи документтарға таянып дәлилләнем[31]. Был аҙымым иһә баш бирмәүсән ("строптивый") коммунист Йыһат Солтановтың ярамаған ҡылығын Яҙыусылар союзының партия бюроһында махсус комиссия тарафынан тикшереп, хөкөм ҡылыуға килтерҙе.

Суд над строптивым или спасение Карасакала

Карасакал не был ни башкиром, ни батыром, а был проходимцем-авантюристом, провокатором, тайным шпионом князя Урусова и генерала Соймонова... Для того, чтобы восстановить историческую правду и раскрыть подлинное лицо Карасакала, требуется заново написать историю данного восстания. Такую большую работу смогут совершить только те историки, которые верны исторической правде.

Ахмет-Герей Янгалин,
кандидпат исторических наук (журнал "Агидель", 2010 №6).

Первому секретарю Башкирского обкома КПСС тов. Шакирову М.З. 14.04.1987.

Хочу обратить Ваше внимание на серьезный просчет в идеологической работе республики, а если конкретно — в нашем литературном цехе. С этим очень серьезным и ответственным вопросом я счел нужным обратиться непосредственно к Вам, ибо надеюсь, что наш обком сумеет исправить допущенную ошибку на месте. Ведь речь идет о ставшем уже достоянием тысячей читателей нездоровой публикации (Б.Рафиков. Карасакал. Исторический роман, журнал «Агидель» номеры 10,11,12 за 1986 г.), грубо исказившей историческую правду о башкирском восстании первой половины 18-го века и тем самым нанесший вред основам дружбы башкирского и русского народов — делу интернационального воспитания, ибо в этой публикации сделана попытка воспеть как национального героя зловещего пришельца — направленного на Урал для подрыва Россию изнутри турецкого тайного агента Карасакала, который, коварно объявив себя потомственным башкиром и поборником башкирской свободы, сумел временно обмануть часть народа и выступил под исламским флагом за отделение Башкортостана от России и провозглашение там отдельного мусульманского ханства под эгидой оттоманской Турции... К сожалению, благодаря прямой поддержки руководителей

[31] Ҡыҙыҡһынғандарҙың иғтибарын «Башҡорт батыры Йеҙекәй (Едигей)» тигән әҫәремә («Ағиҙел» журналының 1999/12, 2000/1 — 5 һандары) һәм тарих фәндәре кандидаты Әхмәт-Гәрәй Йәнғәлиндең "Ҡараһаҡал: ҡаһарманмы, әллә үткенсеме?" -- "Ағиҙел" 2010/6, "Һуңғы башҡорт ханы йәки Аҡай -- Ҡараһаҡал яуына яңы ҡараш" 2009/10 исемле хеҙмәттәренә йүнәлтәм.

Союза писателей (А.М.Мирзагитов, А.С.Гареев) и их приспешников (Р.Г.Султангареев, Р.Н.Баимов, Г.З.Рамазанов) полусырой опус этот в спешном порядке был опубликован в самый канун 70-летия Великого Октября... Кампания умиленного восхваления злополучного сочинения по телевидению и радио была начата еще с конца 1985 года, несмотря на то, что к тому времени опус не был еще даже завершен, не говоря уже об элементарной правиле порядочности восхвалителей — предварительного обсуждения текста в творческой секции прозы. Дело дошло до того, что еще никому не известное сие «произведение» высокопоставленного автора (секретаря правления Союза писателей) выше указанными его приятелями высокого ранга в нарушение писательской этики было восхвалено с трибуны партсобрании (27 января 1986 г.), а в проект решения собрании был навязан пункт, отметивший злополучный «Карасакал» как выдающееся достижение башкирской исторической прозы. Одним словом, руководство усиленно толкало литературного «кота в мешке» к немедленному изданию. Осознав пагубности такого опрометчивого шага, я, как коммунист и писатель, был на приеме у главного редактора журнала и секретаря партбюро тов. Гареева и предупредил: «Прежде чем опубликовать, семь раз отмерьте, ибо Карасакал — сомнительная личность, а автор, к сожалению, не блещет эрудицией». На что Гареев отрезал: «Это не твое дело. Мы, руководители, сами знаем, что нам делать!» Главредактору, чтобы убедиться в несправедливости своих слов, было бы достаточно полистать доступные труды специалистов и документы о башкирских восстаниях 1704-11 и 1735-40 годов...

Такой принцип деятельности руководства и послужило главной причиной появления на страницах журнала в 1986 году ряда серых и по сути вредных опусов, сочиненных «людьми при должностях», в том числе названный здесь «Карасакал» и другой явный литературный брак — повесть самого главредактора Гареева «По ухабистым дорогам»...

Өҫтә әйтелгән хатым, барыһынан да элегерәк, тәнҡитләнмеш роман авторы Булат Рафиҡовтың үҙе өсөн фәһемле лә файҙалы булды: журналдағы мин күрһәткән етди етешһеҙлектәрҙең байтағын бөтөрөп сығарҙы ул китабын (ләкин рәхмәт урынына яуызлыҡ!).

Әйтелгән романдың тарихи, сәйәси, художество кәмселектәрен асып һалған оҙон ғына был тексымды ошо урында өҙәм. Ҡараһаҡалдың ғәмәлдә кемлеген белергә теләүселәр «Башҡорт батыры Йеҙекәй (Едигей)» тигән хеҙмәтемде уҡыһын («Ағиҙел» журналы, 1999/12 — 2000/1 — 5). Ә.В. Туғандың башҡорттар тарихы тураһындағы билдәле китабынан ҡараһалар ҙа була.

Булат Рафиҡовтың һәм өйөрҙөң бәхетенә, донъялар болғанып китеп, Мәскәү тарафынан КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты аппаратына көслә удар яһалған, М.З. Шакировтың да, Т.И. Ахунйәновтың да кәмәләре бата башлаған саҡ ине, шуға күрә хатты тикшереп хәл ҡылыу Яҙыусылар берлеге партбюроһына — Б. Рафиҡовтың һәм өйөрҙөң үҙҙәренең ҡулына тапшырылып, тынғылыҡ бирмәй өйөр менән алышыусы Йыһат Солтановты башҡа һис бер баш күтәрмәҫлек итеп һеңкәҙетә һуғыу, өйөрҙөң абруйын һәм йылы урынын әүәлгесә һаҡлап ҡалыуҙың уңайлы форсаты тейҙе уларға һәм ултырыш ныҡлап ойошторолдо. Төп консультант вазифаһын үтәүсе тарихсыларыбыҙҙан башҡорт күтәрелештәренең белгесе тип һаналған Ирек Аҡманов был мәсьәләлә миңә ҡапма-ҡаршы позицияла торғанлыҡтан һәм «Ҡараһаҡал» авторының ижади кәңәшсеһе булғанлыҡтан, ә күренекле тарихсы Әнүәр Әсфәндиәров

бөтөнләй башҡа йүнәлештәрҙә эшләгәнлектән һәм Рафиҡов менән йылы мөнәсәбәттәрен боҙмаҫҡа тырышҡанлыҡтан, минең файҙаға һөйләмәйәсәктәре көн кеүек асыҡ ине. Зәйнәб апай Биишева, тарихты йүнләп белмәүе менән бергә, улдарының береһенә идаранан фатир юллап интегеп йөрөй һәм Рафиҡов уға шуны вәғәҙә иткән (вәғәҙәһен ул үтәне — Зәйнәб апайҙың яңғыҙ башына өс бүлмәле фатиры булыу өҫтөнә, Ә.М. Әминовтан бушанған бер бүлмәлене уға бирҙеләр), шуға күрә апайҙың да флюгеры ҡайһы яҡка бороласағы билдәле. Ултырышҡа алдан уҡ әҙерләп саҡырылғандарҙың башҡалары ла тарих диңгеҙенең йәки күбектәре өҫтөндә генә йөҙә, йәки өйөр менән бәйле кешеләр. Унан килеп, башҡорттоң милли геройҙарының һанын арттырыу яҡлы ялған патриотизм тойғоһо ла бик көслө...

Һәм бына:

Само судилище

Зал “суда”: Дом Союза писателей БАССР. 28 мая 1987 г. Повестка дня: Историческая концепция романа Б.Рафикова «Карасакал» на основе письма т.Султанова З.А. первому секретарю обкома КПСС.

Протоколист — А. Филиппов. (Так как протокол для меня остался не доступным, излагаю процесс по своей записи, сделанной по ходу обсуждения).

Секретарь партбюро **М. Гафуров** оглашает письмо Султанова и один за другим прочитывает отзывы на роман следующих историков (сами они не присутствуют):

1. Акманов, Рахматуллин. Вывод: никаких материалов об отделении от Росси нет. (Дипломированные лжецы! -- З.С.).

У Игнатьева есть, однако это не подтверждается историческими документами. Миндигул Юлаев — башкир, его объявили ханом.

Ссылка на «Материалы по истории БАССР»: восстание распространяется по Сибирской, Ногайской дорогам. Провозглашение хана сыграло положительную роль. Анализ романа — положительный, все дается там правильно на основе исторических источников.

Роман написан со знанием дела, автор основательно изучил исторические материалы.

2. Асфандиаров. Роман — положительное явление. Большая изыскательская работа проведена автором. Ему удалось.

Главная сила в романе — народные массы.

Все имена соответствуют исторической действительности. Стремление оставаться в составе России. (Вот лжец!.. -- З.С.). Идейно выдержан.

Прения:

1. А.Филиппов. Большое расхождение между письмом З.Султанова и отзывами ученых. Это может быть, потому что это — история, мало освещенная.

Далее А.Ф. анализирует причины башкирских восстаний первой половины 18-го века в сравнении с восстаниями яицких казаков. Казаки как будто подопытные.

Цитата от Оренбургского писателя Пистоленко об Урусове (восхваляет Карасакала как молодого башкира). Объективная оценка, говорит Филиппов. Споры, говорит он, по-моему из-за каких-то мелочей. Карасакал, Батырша — были на уровне Салавата.

З.Султанов. Хо!

М.Гафуров. Что?!

З.Султанов. Ху, говорю!

2. Г.Ибрагимов (отсутствует, его письмо провозглашает публике **М.Садыкова**).

Дается анализ романа «Карасакал». «Батша тарихсыларының баһаһына таянып, башҡорт күтәрелештәрен хөкөм иттеләр быға тиклем. Был хата булды».

«Царистская иллюзия».

(Положительная оценка романа).

3. Г.Хусаинов. Султанов и остальные стоят на противоположных рубежах в трактовке истории. Методика исследования Султанова какова? Цель письма?

Неужели мы, писатели, до такого уровня опустились? Султанов показал свое моральное лицо. (В своей реплике З.Биишева поддерживает Г.Хусаинова).

Далее Г.Хусаинов прославляет Карасакала. Говорит, что даже буржуазные историки его прославляли. Некоторые из них Карасакала называли авантюристом.

Мы — советские писатели, мы должны разобраться, кто такой Карасакал?

Султанов следует по толкованиям буржуазных историков.

Роман идейно выдержан со своей концепцией.

Делает анализ романа (положительный).

Обращаясь злобно Султанову: «Карасакал — турецкий агент», — говорите, но таких документов нет. Например, Шамиля тоже объявляли английским агентом.

Султанов придерживается *сталинской концепции* относительно истории, говорит он.

Очернительством нашей истории занимаешься ты, товарищ Султанов!

4. З.Биишева. Читала исторический очерк Г.Хусаинова (о Карасакале), роман Рафикова, очень понравились мне. (Роман Б.Рафикова она оценивает очень высоко).

З.Султанов. Зайнаб-апай, этого ведь недостаточно, чтобы дать верную оценку историческим событиям.

З.Биишева. Султанов занимается мелочами.

З.Султанов. Нет, грубое искажение исторической истины – это не мелочи!

З.Биишева. Писатель не обязан придерживаться документов, он должен творить образ. Имеет право на вымысль.

З.Султанов. Зайнаб-апай, Вы в своем романе “На берегах Ика” касательно событий 1919 года Ваших земляков братьев Каримовых назвали “красными партизанами” и возвели в ранг героев, но в действительности были они обыкновенными бандитами-убийцами, которых военком Н.Салтяшев заслуженно застрелил.

З.Биишева. Роман очень хороший. Мы не должны очернить своих героев, таких, как Карасакал. Наш патриотический долг требует этого.

5. **Г.Шафиков**. Большая ответственность эта — тема Карасакала.

Говорит с некоторым оттенком критики романа, но в целом положительная оценка.

6. Р.Баимов. Роман обсудили в секции. Провакационное обвинение Султанова, мы должны будем это осудить. Такие поступки должны быть осуждены.

Но есть еще и другая хорошая поговорка: дело нашего счастья в наших же собственных руках. Сейчас же, не выходя из зала съезда, мы должны начать решительное самооздоровление нашего организма. Для этого нам требуется полностью пересмотреть и обновлять состав правления союза, редколлегию журнала, выбирая туда только достойных, способных покончить с коррупцией. Отчитывающееся руководство во главе с его председателем, надо прямо сказать, было некомпетентным и провалило дело — об этом всем известно. Писателями несколько раз за последние годы был поставлен вопрос ребром о смене председателя и лишь благодаря позорной круговой поруки удался ему удержаться на плаву. Да, некомпетентные люди очень долго оказались во главе союза, потому что выборы были непрямыми, недемократичными. Фактически председателя правления и главного редактора журнала выбирали не мы, а, путем административно-командного нажима на членов правления, назначала партийно-бюрократическая мафия. Поэтому наш т.н. избранники в своей деятельности не зависели от нас, от большинства, поэтому неизбежно было загнивание. Чтобы раз и навсегда покончить с этим и руководствуясь решениями XIX партконференции, предлагаю:

1. Работу правления за отчетный период оценить неудовлетворительной.

2. Председателя правления избрать путем прямого тайного голосования всех писателей-делегатов из числа нескольких кандидатур, выдвинутых ими путем открытого голосования. Для этого тайного голосования иметь отдельний бюллетень. При том фамилии кандидатов на пост председателя правления должны автоматически включаться и в другую бюллетень в список кандидатов в состав правления, ибо выдвинутый товарищ может быть не избран председателем, но может быть избран членом правления.

А призывать писателей погасить свою гражданскую активность, утихомириться и сойти с высоких трибун, как пытались добиться этого товарищи Буляков, Бикбаев, бесполезно и вредно. Это есть западня на пути перестройки. Беспокойное состояние

наше будет продолжаться до тех пор, пока не восторжествует справедливость и не установится нормальная творческая атмосфера.

Мостай Кәрим тураһындағы билдәләмәм сәбәпсе булғандыр инде, моғайын, «Литературная газета» хәбәрсеһенең, баяғыса, «үкенескә ҡаршы, шәхестәргә ҡағылыу ҙа булды», — тип үкенеберәк яҙыуына...

Тәнәфес ваҡытында фоела бөтә йәмәғәт алдында асыуынан ҡыҙара бүртенгән Мостай Кәрим миңә ҡаршы атлап килеп, йоҙроҡ болғап ажғырҙы: «Султанов, ты бил меня, но запомни: Мустай никогда ничего не забывает, Мустай все помнит!»

Аптырап ҡалған ҡәләмдәштәремдең иҫтәрен китәреп мин дә, үҙемә күрә лайыҡлы яуап итеп, «тере классик»тың үҙе һымаҡ уҡ, йоҙроғомдо юғары сөйөп әйттем: «Йыһат Солтанов тоже ничего не забывает и все помнит!»

Һуңынан Назар ағай Нәжми гел генә, мине осратҡаны һайын, йоҙроғон тап минең һымаҡ күтәреп, баяғы һүҙҙәремде ҡабатлап мәрәкәләр ҙә кинәнеп көләр ине... Ә Мостай Кәрим үҙе? Түҙмәгән, көндәлегенә теркәгән: “04.11.89. Әүәле ауылда киске уйындарға ҡайһы бер егеттәр гармун, икенселәре итәк аҫтында кистендәр килтерә торғайны. Хәҙер төрлө йыйылыштарға яҙыусылар һәм башҡа “интеллигенттар” шулай йөрөй: берәүҙәр – яҡшы ниәт менән, икенселәр күрә алмаусылыҡ һәм үс алыу теләге менән (Яныбай Хамматов, Йыһат Солтанов һымаҡтар)”.

Ағайыбыҙ шаштыра, сөнки итәк аҫтында киҫтән йөрөтөүселәр итәк аҫтынан киҫә, ә беҙ оло йыйындарҙа бөтә ҡәләмдәштәребеҙ алдында трибунаға сығып әйтә инек әйтеребеҙҙе. Шуныһы ла фәһемле: баяғы көндәлектәргә теркәлеүенсә, ҡәләмдәштәр араһынан “тере классик”тың күҙҙәренә ҡарап һәр саҡ тураһын ярып һалыусылар өсәү генә икәнбеҙ ҙә: Зәйнәб Биишева, Яныбай Хамматов, Йыһат Солтанов...

«Тере классик» менән булған хөрт хәлдән нәфрәтләнеп, һәм “һис бер нәмәне лә онотмаусан”дың тиҙләтеп үҙемә ҡаҙаласаҡ зәһәр йылан ағыуын алдан уҡ ҡайтара торайым, тип, йыйын барышында уҡ КПСС Үҙәк Комитеты вәкиленә фоелағы әлеге йәмһеҙ күренеш хаҡында белдереү яҙып бирҙем:

Инструктору ЦК КПСС тов. Филину Александру Сергеевичу от делегата X съезда писателей Башкирии Султанова Зихата Адигамовича ЗАЯВЛЕНИЕ.

Глубокоуважаемый тов. Филин!

После моего выступления с трибуны съезда с критикой народного поэта Башкирии Мустая Карима он встретил меня на перерыве в фое и, подняв кулак над головой, заявил:

«Султанов, ты бил меня, но запомни, Мустай Карим никогда ничего не забывает!»

Это является прямой угрозой расправы.

С уважением: **Зихат Султанов.** 28 окт. 1988.

Һәм Филин иптәш мине үҙе айырым күреп һөйләшеп, миңә ҡайтарған шул уҡ ҡағыҙымдың аҫҡы мөйөшөндә эҫе мәлендә үк теркәлгән аңлатмам бар:

По этому поводу тов. Филин мне сказал, что, такое поведение Мустая Карима, наверное, рузультат его старческого маразма, поэтому не стоит придать ему большое значение. И я с этим согласился.

З. Султанов. 28 окт. 88.

Биш киҫәктән хасил ошо мемуарымдың мин “нейтраль” аһәңле беренсе киҫәген генә “Ағиҙел”дә сығара алдым, ә “тере классик”ка күпмелер мөнәсәбәтле икенсеһе һәм халҡымдың йәнле тарихына бәйле ҡалғандары ла хәйерле сәғәт һуҡҡанын көтөп ята бирә. Ә ул хәйерле сәғәттең уҡтарын әле булһа Мостай мәҙәхселәре ебәрмәй тота: “Ағиҙел”дең 2006 йылғы 11-енсе һанында уны “Урал батыр тоҡомонан” тип һайраған Әхмәт Сөләймәновтың шәрбәтнамәһен генә алығыҙ! Әмәлһеҙҙән иғтибар тағы ла “россиян”дың әлеге лә баяғы шул көндәлегенә төбәлә:

“Төш күрҙем. Мине ерләргә тейештәр. Әммә мин тамам үлеп етмәгәнмен. Рус побы йыназа сығырға тейеш. Ул ныҡ иҫерек көйө килде. Мин ҡаршы төштөм: “Мин иҫерек поп уҡыуын теләмәйем”. Өлкән поп килде лә: “Бөгөн минең айныҡ побым юҡ. Ул һәйбәт поп. Һин иртәнсәккә тиклем түҙә алаһыңмы? Ул йоҡлар ҙа айныр, шунан уҡыр”. Мин түҙә алам, нисек тә тырышырмын, тинем. Мин иртәгә тиклем көтөп ятып ҡалдым, ә үҙем уйлайым: “Әле үлмәгәнмен, поп уҡыгас, ер аҫтында үлермен инде”.

Ошо һуңғы көндәлектәрендә үҙе әйткән ҡурҡаҡ һәм ялағай-ялған мәҙәхселәре “үлемһеҙ”ҙе ер аҫтында ла үлмәгәндер тип, ғәҙел һүҙ әйтеүҙән ифрат ҡурҡалар, ахыры, сөнки бит ул үҙенең васыят шиғырында, итектәремде бергә һалып күмегеҙ – шуларҙы кейеп, янығыҙға ҡайтып йөрөрмөн, тип яҙғайны лаһа...

Инде йыйыныбыҙға әйләнеп ҡайтһаҡ, идараның яңы етәкселәрен һайлау барышында (был эштең формаль яғы мин тәҡдим иткәнсә башҡарылды, буғай) беҙ, бер килке делегаттар, күпме генә тырышып ҡараһаҡ та, рәйес итеп Азат Абдуллинды үткәрә алманыҡ (ул үҙе ғәйепле, сөнки сығышында: «Өфөгә күсеп ҡайтмай ғына Мәскәүҙән йөрөп эшләйәсәкмен», — тип, делегаттарҙың күңелен һүрелдерҙе), ә ҡулы оҙон, нәфсеһе аҙғындар ҡоронан булған хәмер ҡоло Динис Бүләков был юлы ла партия өлкә комитетының (Ә.М. Дилмөхәмәтовтың) аҫтыртын теләктәшлеге һәм асыҡтан-асыҡ һайлау комиссияһы эшенә ҡыҫылып булышлығы, шул арҡала һайлаусылар тауышының уға күберәклеге менән үтте. «Ағиҙел» журналының баш редакторы итеп тә баяғы Б.З. Рафиҡов һайланды (ҡарға күҙен ҡарға суҡымай)...

Иҫ китә — бөтәһе лә иҫкесә — яңыртылған етәкселегебеҙ башында ла шул уҡ йылғыр өйөр кешеләре ултыра...

«Ағиҙел»дең яңы редакторы үҙ тирәһенә өйөрөп алған «яңы» редколлегия ағзаларының исемлеге лә, ниһәйәт, мәғлүм булғас, һөрһөп бөткән шул уҡ кешеләр тәғәйенләнеүенә мөнәсәбәтемде белдереп, «Башҡортостан» гәзитенә бер памфлет яҙып биргән булғайным (ташҡа баҫып сығырманылар):

Реплика!

ӘҘИПТӘРСӘ ӘҘӘПЛЕЛЕК

«Әҙип — әҙәпле булырға тейеш!» (М. Кәрим). — Заманабыҙҙың бөйөк аҡыл эйәһенең ауыҙынан сыҡҡан был ҡанатлы әйтем бейек трибуналарҙан, бөйөклөккә почти яҡын сәсмә әҫәрҙәрҙән әҙәби ҙә, әҙәби түгел дә мөхиткә уңышлы сәселеп, әҙәбиәтебеҙ даирәләрен әҙәпһеҙлек шойҡанынан шөйлә «курсалап» килде. Һөҙөмтәлә һуңғы ун йылда әҙиптәребеҙ әҙәбиәтебеҙҙең көҙгөһө булған «Ағиҙел» журналы биттәрен ифрат әҙәпле әҫәрҙәр — хикәйәләр, повестәр, романдар, поэмалар һәм шуларҙы йор баһалаусы әҙәпле әҙәби тәнҡит тип аталған мәҙхнамәләр менән байытты, байытты ғына түгел, сифаты менән уҡыусыны әҫәрләндереү урынына һаны менән иҫәрләндереп, редколлегия

кәртәләрен бар тип тә белмәй, «Ағиҙел»де алдырыусыларҙы бер туҡтауһыҙ әҙәпле «әҙәбиәт» тип аталған, әммә хатта һыйыр ҙа көйшәмәҫ «ҡыу һалам» өйөмөнә күмде, сөнки ул йәмғе һаламсылар — «Ағиҙел»дең әҙәпле генә редколлегия ағзалары үҙҙәре үк ине. Тик уларҙан башҡалары (журналды уҡыусылар) әҙәпһеҙерәк булып сыҡты: шанлы ун йыл эсендә егерме мең, ә аҙағында бер юлы һигеҙ мең әҙәпһеҙ йән, әҙәби һаламды сәйнәргә теләмәй, «Ағиҙел»де яҙылып алдырыуҙан туҡтаны, йәғни һалам ҡаплаған әҙәби күҙгөбөҙгә елкә соҡорон күрһәтте. Шуға ла ҡарамай, һаман әҙәплелек һаҡлап, мәжмүғә биттәрен үҙ исемдәре менән һаламлап ҡайыуҙы дауамлаған, ә «ят»тарҙың «әҙәпһеҙерәк» ынтылыштарын һәүетемсә ситкә тибәргән редколлегия ағзаларының ныҡышмалы эшмәкәрлеген лайыҡлы баһалау мәсьәләһе үҙгәртеп ҡороу осорондағы әҙәпһеҙ әҙиптәр йыйылыштарында бер нисә тапҡыр күтәрелеп, һаламдары аҫтан ҡуҙрап төтәгән мәсьәләгә Яҙыусылар союзы идараһы, партбюро ағзаларының иғтибары бер юлы йәлеп ителһә лә, әҙәпле генә рәүештә ул янғын һүндерелә торҙо, сөнки шул уҡ бик әҙәпле редколлегия ағзаларының күбеһе үҙҙәре үк бер үк ваҡытта идара һәм партбюро ағзалары ла ине... Төтөнлө мәсьәлә аҙаҡ килеп яҙыусыларҙың X съезд трибунаһында гөлтләп, бер һаламды ла имен ҡалдырмаҫтай хәтәр янғынға әүерелде, үҙгәртеп ҡороу осоронда журналды ла заманса үҙгәртеп ҡороу, бының өсөн беренсе сиратта баяғы йылғыр һалам торхандарҙан торған редколлегияны һаламһыҙландырып яңыртыу кәрәклеге үҙҙәренең үк тырпай һалам ҡамылдары менән күҙҙәренә төртөп әйтелде. Шунан һуң ике айға яҡын тәрән тынлыҡ һөрҙө «Ағиҙел» тәңгәлендә. Әҙәплеләр быны яҡшыға юраһа ла, әҙәпһеҙҙәр борсолоп ҡыҙышһа ла, ике уртала тороусы күпселек үҙгәртеп ҡороу тантанаһына инанды, сөнки юғары даирәләр инде әҙиптәрҙең эшенә ҡыҫылмауын, ысын әҙәп үҙаллы тантана итеренә ышаныуын белдергәйне. Һәм бына шулай булды ла: Яҙыусылар союзының съезда һайланған яңы идараһы ултырышында «Ағиҙел»дең редколлегия ағзаларын бигерәк әҙәпле рәүештә «яңыртып» тәғәйенләү башланды. Һәм заманса үҙгәртеп ҡороуҙың әҙиптәр өсөн дә әҙәпле эш түгеллеге бына ҡайҙа күренде: ҡайһы бармаҡты тешләһәң дә ауырта, ә «мин-мин» тигән шайтандың башына баҫыу уғата ҡыйын икән... Ошо драматик мәлдә бөйөк аҡыл эйәһенең ҡанатлы әйтеме тағы ярҙамға килде: «Әҙип — әҙәпле булырға тейеш!» Һәм әҙәпле ултырҙаштар бер бармаҡты ла ауырттырып тешләмәне, «мин-мин» тигән шайтанды ла бармағына элеп бырҡтырманы: бер-береһен, әҙәпле генә бармаҡ төртөп күрһәтеп, «редколлегия ағзалары» тигән исемлеккә теркәтте. Һөҙөмтәлә «редколлегия» көлтәһе шул уҡ элекке башаҡһыҙ-емһеҙ һәм йүнһеҙ ҡыу һаламдарҙан бөрөп бәйләнде. Алфавит һәм әҙәп тәртибе буйынса ошоғаса икеһе бергә ошо юғары әҙәпле көлтәнең тап урта билендә булып килгән әҙәпле генә икәүҙең яҙмышы әҙәпһеҙлеккә дусар була биреп ҡуйҙы-ҡуйыуын, хатта тәҙрәгә бәрелгән серәкәй безелдәүе ишетелерлек шаҡтай шомло тынлыҡ урынлашты. Сөнки ошбу азаматтарҙың икеһе тиң әлеге съезда ревизия комиссияһы тарафынан «Ағиҙел» менән нәшриәтте шәхси һауын һыйырына әйләндереүҙә һәм ғәйре егетлектәрҙә лайыҡлы баһаланып, яңы идара ағзалығына һайланмай ҡалғайнылар...

Һаламторхан ҡорҙаштар, ниһәйәт, әҙәпле генә көрһөнөп һулыш алды:

— Йәмәғәт, был икәү әүәл-әүәлдән әҙәпле көлтәнең тап уртаһында торҙо лаһа, бынан һуң да әҙәпле алфавит тәртибен боҙорға ярамаҫ, күсәгилешлелек дауам итергә тейеш, — тине ипле генә берәү. Әҙәпле генә тотанаҡлап, был элекке икәүҙе лә элекке урындарына теркәткәс кенә, съезд заңы талап иткән баяғы төп бурысҡа — редколлегияны ***яңыртырға*** йәғни әҙәплеләрҙән әҙәплерәк яңыларҙы өҫтәргә керештеләр һәм бөтөнләй әҙип булмаған бәғзе бер ике әҙәбиәтсе-һаламсы теркәлде көлтәгә бер тауыштан. Уларҙың

да оҙаҡламай «әҙип» булып китеренә өмөт ҙур, сөнки һуңғы бер-ике йыл араһында «әҙәби тәнҡит» баҫыуында ҡамылдары ғына ҡалған бер нисәүҙең дә ҡамыл-мәҡәләнән — дәррәү һалам-повескә һәм хатта романға күсеп, һаламдан биҙгән уҡыусыларыбыҙҙың «Ағиҙел»гә елкә соҡорон борошоуҙа тос өлөш индереүҙәренә үҙебеҙ шаһит булдыҡ бит... Ҡыҫҡаһы, үҙ-ара аңлашып әҙәпле эш ҡылыу һөҙөмтәһендә «һалам генерал»дарыбыҙ кәштәләй яурындарына бер юлы идара һәм редколлегия ағзалығының һаламдан ишкән эполеттарын үҙ ҡулдары менән тағып алырға ла әүәлгеләй башаҡһыҙ бер ҡыҫыр көлтәгә тупланырға өлгөрҙө; инде журнал уҡыусыларына дәрәжәле көлтәселәребеҙҙең һалам-ҡамыл хикәйәләрен, повестәрен, романдарын, поэмаларын һәм мәҙехнамәләрен уларҙың шул әҙәпле ҡулы аҫтындағы «Ағиҙел» биттәренән бер-бер артлы ҡабул ҡылып алаһы ғына ҡалды, сөнки маңлайҙарына талант мөһөрө баҫылып та, маңлайҙарынан әҙәпле генә тибеп ебәрелгән автор-әҙәпһеҙҙәрҙең, серәкәйҙәй күпме генә тыҙылдап бәрелһәләр ҙә, һалам эполеттар аша «Ағиҙел»гә үтеп кереүе икеле.

Йыһат Солтанов,

әҙәпһеҙерәк әҙип...

М. Буранғоловто ололау

Был йылыбыҙ шуныһы менән ҡыуаныслы булып иҫтә ҡалды: ғинуар айы Зәйнәб апай Биишеваның 80 йәшлек юбилейы менән башланһа, декабре Мөхәммәтша Буранғоловтың 100 йыллығы менән осланды. Әйтергә кәрәк, 1983 йылда уның 95 йыллығын «Ағиҙел календары» рубрикаһы аҫтында ғына булһа ла билдәләргә тырышыуыбыҙ уңышһыҙ тамамланғайны. Бына шуның күңелһеҙ бер шаһаҙәтнамәһе:

Ип. Солтанов!

Был әйбер барырлыҡ түгел. Баш менән түгел, ә... к... менән эшләнгән.

Журнал бите менән бер бит календарь әҙерләйек, Ғөбәй Дәүләтшинга ла шулай — бер бит.

Әмир Гәрәйев.

19.09.1983.

Яҙыу аҫтына М. Буранғолов датаһына ҡарата Абдулхаҡ ағай Игебаев әҙерләп биргән шул «к... менән эшләнгән» материал үҙе теркәлгән: мин белмәгән «Ләлә Фәрзүтдинова. Моңло бер йыр уның исеме (Мөхәммәтша Буранғоловтоң тыуыуына — 95 йыл)». 7,5 бит, А. Игебаев тарафынан журналдың 12-нсе һанына тәғәйенләнмеш.

Ҡағыҙ битенә үҙем дә яҙып ҡуйғанмын: «Хәсән Назарҙан шул әйтелгән күләмдә һәйбәт мәҡәлә әҙерләткәйнем, ташҡа баҫылып сығып та килә ине, корректуранан кинәт алып ташланылар, сөнки Мостай Кәрим: «1952 йылдың 19 июлендә ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты ҡарары менән Мөхәммәтша Буранғоловтың «Башҡортостандың халыҡ сәсәне» тигән исеме тартып алынды, ул быға лайыҡ түгел», — тип ҡырҡа ҡаршы төшкән (баш редактор Әмир Гәрәйев үҙе әйтте)». Бик үкендем...

Мәшһүр фольклорсы һәм драматургыбыҙҙың яҡты иҫтәлеген томалаусы был ғәҙелһеҙлек күңелемде биләп алып, тынғылыҡ бирмәгәнлектән, «Башҡортостан» гәзитендә «Мөхәммәтша Буранғоловтың «Зәңгәр шәле» тигән сәмле мәҡәләмде сығартыуға өлгәштем. Бер-ике ай үтеүгә үк, Татарстандың Яр Саллы шәһәрендә «Аргамак» атлы сүп-сар кәрзиненең (йәғни журналының) баш редакторы булып алған

әлеге «ике халыҡтың улы» Айҙар Хәлим үҙенең шул керле баҫмаһының 1994/2 һанының 102 — 105-енсе биттәрен миңә бысраҡ атыуға бағышланы:

Көпә-көндез ҡычҡыртып талыйлар яки «Зәңгәр шәл»не кем язган?
Татарстан мәдәният министры Марсель әфәнде Таишев игтибарына.

«Тугандаш» башҡорт матбугатының «тугандаш» татар халкына, аның мәдәниятына пычраҡ атуы һәм, аҡылсыз ҡашынып, ике милләтне ничек кенә булса да маңгайга-маңгай чәкәштерергә тырышуы яңалыҡ түгел. Ғабдулла Тукай, Мәжит Ғафуриләрнең башҡорт булуын инде алар «раслады». Ҡол Ғали һәм Риза Фәхретдиннәр белән дә алар мәсьәләне «ачыҡлады». Күптән түгел башҡорт тел белгече Рәшит Шәкүр, Салих Сәйдәшевнең «Совет Армиясе маршы»н башҡортныҡы «итте».

Менә тагын бер «ачыш». Башҡортның күптән инде «тиле бәрән орлыгы ашаган» язучысы, публицисты, тел галиме, этнографы, фотографы, социологы һәм тагын да әллә кемнәре, әллә кемнәре сыйфатында йөрегән Жиһат Солтанов «Зәңгәр шәл» пьесасының авторы Кәрим Тинчурин түгел, ә... Мөхәммәтша Буранголов икәнлеген ачыҡлады.

...Татарстан мәдәният министрлыгы мондый оятсыз акцияне жавапсыз ҡалдырырга тиеш түгел, ул, махсус комиссия төзеп, газетаны һәм авторны тирән тикшеренүләр нәтижәсендә хөкемгә тапшырырга тиеш, диб исәплибез.

Искәндәр Камский.

Артабан гәзиттән мәҡәләм күсереп баҫылған, ләкин, «Аргамак»тың үҙ ысулы буйынса, ике урында текстың иң мөһим өлөштәрен «техник сәбәптәр» арҡаһында төшөрөп ҡалдырғандар.

Арыраҡ 106-нсы биттә баҫманың урыҫ телле уҡыусылары өсөн татар телендә баҫылғандар тураһында аңлатма — «анонс» бирелгән:

Сенсация номера: *Уфа. «Кто написал «Голубую шаль?» Перепечатка из газеты «Башкортостан». Известный башкирский мифотворец Зигат Султанов через 74 года «доказывает», что жемчужина татарской драматургии «Зәңгәр шәл» («Голубая шаль») написана не Каримом Тинчуриным, а мифологом Мухаметшой Бурангуловым.*

«Аргамак» талап ҡылған «хөкөмгә» тарттырыу була ҡалһа, баҡтыртып күрһәтергә, тип, тейешле дәүләт органынан тарихи документтың рәсми күсермәһен алып әҙерләп ҡуйҙым:

Комитет по делам архивов Совета Министров Республики Башкортостан
Центральный Государственный Исторический Архив Республики Башкортостан.
450000, г. Уфа, ул. Карла Маркса, 4, тел. 23-39-22; 22-41-96.
24.03.94 г. №95/Т
г. Уфа, ул. Уфимское шоссе, 4, кв. 119, **Султанову З.А.**

Архивная выписка из отчета Башглавлита за декабрь 1924 года о разрешенных к публичному исполнению и демонстрированию произведений:

№ п/п 20, автор пьесы Бурангулов, наименование произвед. Зангар-шаль, форма и характер произведения — в 2 действиях.

П/п Зав. главлит — подпись (неразборчива).

Основание: Ф. Р-798, оп. 1, д. 1248, л. 9. Директор архива А.А. Хисматуллин. Зав. архивохранилищем Г.Ш. Габ.

(Круглая печать).

Ләкин мине Ҡазанға «ҡунаҡҡа» саҡырманылар — әллә «Аргамак»тың ҡойроҡ аҫтын ҡорт саҡҡандай сапсыныуын һанға һуҡманылар, әллә аҡыл-фәлән яғынан камилыраҡ булдылар...

Ошо урында кире-ҡабат үҙебеҙҙең мөхиткә ҡайтып, заманында Мөхәммәтша Буранғолов менән Мәжит Ғафури араһында булған бер хәлде һөйләргә тура килә. Ғафуриҙы күреп белгән өлкән быуын яҙыусыларыбыҙҙың бер килкеһе уның Башҡортостан автономияһын үҙһенмәүен, “йәшел йылан” тәьҫиренән ҡыҙмасаланыбыраҡ алған бер осрағында, шәлдәүен ысҡындырып, “мона башҡыртҡа автономия!” тип сығарып күрһәтеүен һөйләйҙәр ине. Шул иләмһеҙ ваҡиғаны Мөхәммәтша Буранғоловтың үҙ ауыҙынан ишеткән кешене осратып, көндәлек рәүешендә теркәнем:

25.07.2005

Өфөнөң Аврора урамында шағир яҡташым Мәхмүт Һибәт менән күрешеп, йәйҙең эҫе көнө ине, бер ихатаға инеп, ҡуйы миләш күләгәһендәге эскәмйәлә төрлө темаға һөйләштек. Мәхмүт Һибәт бер иҫтәлеге менән уртаҡлашты:

“Йәш сағымда шағир Батыр Вәлид фатирында уның поэмаһын эшләшеп ултыра инем, телефондан Мөхәммәтша Буранғолов шылтыратып, Батыр Вәлидкә инеп сығасағын белдерҙе.

Бер шешә ҡыҫтырып килгән икән, хужабикә-еңгәй ҙә, йүгереп сығып, “ярты” алып ингәйне -- хозур табын ҡороп һөйләшеп ултырҙыҡ. Шунда Буранғолов Мәжит Ғафуриҙы иҫкә алды:

-- Башҡорт халҡының тере дошманы ине, шул бәндәгә Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән исем бирҙеләр...

Мөхәммәтша Буранғолов

Оло Башҡортостан төҙөлөп, хөкүмәтебеҙ Эстәрлетамаҡтан Өфөгә күсенеп килгән саҡ, хәҙерге Карл Маркс һәм Пушкин урамдары мөйөшөндәге матбаға йортонда матбаға көнөн байрам итергә йыйылдыҡ. Докладтан һуң тәнәфес иғлан ителеп, ағай-эне тәмәке тартырға туалет бүлмәһенә ағылды. Шунда күрәм: эсеп-ҡыҙышып алған Мәжит Ғафури, шәлдәүенән ағзаһын сығарған да: “Мона башҡыртҡа автономия, тотсоннар төбөннән!” -- тип һүгенә (үҙенең татар телендә, әлбиттә). -- “Мәжит ағай, тыйыл инде, шәлдәүеңде эләһәңсе!” -- тип үтенәләр яҡындары. Ләкин теге уғата ярһына: “Мона башҡыртларға автономия, тотсоннар...”

Түҙмәнем, елкәһенән бөрөп алып, асыҡ тәҙрәнән тышҡа быраҡтырҙым: “Әгәр кире боролоп керһәң, тетмәңде тетәсәкмен!” Сатанлай-сатанлай ҡасты... -- Шулай һөйләне Мөхәммәтша Буранғолов олатай”...

Ә инде халыҡ сәсәненең 100 йыллығына килгәндә, ул арыу ғына кимәлдә үткәрелде, тантанаға саҡырыу билеты ла шаһитлай быны:

Мухаметша Бурангулов, народный сэсэн Башкирии — Мөхәммәтша Буранғолов, Башҡортостандың халыҡ сәсәне.

1888 — 1988.

Хөрмәтле иптәш Солтанов!

СССР Фәндәр академияһы Урал бүлеге Башҡортостан фәнни үҙәгенең «Почет Билдәһе» орденлы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты һәм Башҡортостан Яҙыусылар союзы Һеҙҙе Башҡортостандың халыҡ сәсәне, билдәле фольклорсы һәм яҙыусы Мөхәммәтша Буранғоловтың тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған ғилми конференцияға саҡыра.

Конференция ошо йылдың 22 декабрендә Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының конференц-залында (Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 71-енсе йорт) иртәнге сәғәт 10-да асыла.

16 ғалим сығыш яһарға тейеш икән (исемдәре, темалары күрһәтелгән).

Башҡортостан Яҙыусылар берлеге был мөһим ғилми конференцияны ойоштороусыларҙың береһе итеп күрһәтелһә лә, уның етәкселәре генә түгел, хатта үҙбелдекле минән башҡа бер яҙыусы ла килмәне, шуға күрәлер инде, Яҙыусылар берлеге исеменән һөйләргә миңә һүҙ бирҙеләр.

Гәзиттәге баяғы 1983 йылғы мәҡәләмдә үк мин, тарихыбыҙҙа беренсе булыптыр, моғайын, халыҡ сәсәненең дәрәжәһен «бөйөк» тип билдәләгәйнем (редакцияға рәхмәт: ул “бөйөк” билдәләмәһен билдәле тере «бөйөг»өбөҙҙөң асыуы ҡуҙғалыуҙан ҡурҡып һыҙып ташламанылар). Ошо 100 йыллыҡ юбилей ғилми конференцияһында ла шулай уҡ, бөтәһенән айырмалы рәүештә, ауыҙ тултырып «бөйөк Мөхәммәтша Буранғолов» тип һөйләнем, был иһә артабан яҡын киләсәктә башҡаларға ла уның бөйөклөгөн лайыҡлы баһаларға прецедент булды, буғай. Шулай уҡ мин ғалимдар ҡарамағына: «Мөхәммәтша Буранғоловтың «Башҡортостандың халыҡ сәсәне» тигән хөрмәтле исеме 1952 йылда юғары органдар тарафынан юҡҡа сығарылыуы дөрөç булһа, Башҡортостан Юғары Советынан уның ул исеменең кире ҡайтарылыуын юлларға кәрәк», — тигән тәҡдим кереттем. Институт етәкселәре быны бойомға ашырҙымы, юҡмы — уныһы миңә ҡараңғы.

Юғары Совет рәйесенә өндәшеү

Әммә ике ай уҙыу менән үк, 1989 йылдың 25 февралендә әҙәбиәтебеҙҙең һәм сәнғәтебеҙҙең башҡа бер мөһим мәсьәләһе буйынса минең үҙемә баяғы юғары органға тура мөрәжәғәт ҡылырға тура килде:

Председателю Президиума Верховного Совета БАССР

тов. Султанову Ф.В.

Уважаемый Файзул Валиевич!

21 февраля 1989 года в Башакадемтеатре драмы им. М. Гафури состоялся просмотр сдаточного спектакля по пьесе А. Халима «Пәрей туйы», где присутствовала большая группа писателей, журналистов, театроведов, в том числе и я, зав. отделом Литературной критики журнала «Агидель». Представление ошеломило нас своей необузданной антихудожественностью и безидейностью и никто толком не смог понять, почему подобная халтура-драматургия принята академтеатром. При обсуждении спектакля, где

присутствовал и министр Культуры республики С. Аминов, мы высказали единое мнение: из-за уродства драматургии спектакль не имеет права быть представленным со сцены академтеатра. Однако руководство театра, как выяснилось позже, пошел наперекор общественному мнению — на другой же день (22 февраля) состоялась премьера спектакля. В связи с этим я написал статью «Кому нужно было это?», где как писатель выразил свое отношение к спектаклю, а также действительному положению национально-культурного дела в республике в целом. Наши республиканские газеты, как Вам известно, несколько раз уже перепечатывали из центральной прессы статьи собственного корреспондента газеты «Правда» В. Прокушева, усиленно муссирующего о якобы имевшем место в республике «башкирском шовинизме», что является сплошной клеветой, ибо истинное положение таково, что как раз башкиры сами являлись и являются жертвами шовинизма. В моем статье доказательно говорится и об этом. Однако наши республиканские газеты, (например, «Совет Башкортостаны») боятся горькой истины и отказываются опубликовать такой материал. Я думаю, гласность и плюрализм, широко шагающие по стране, позволяют говорить нам народу правду, независимо от того, нравится она или нет А. Халиму, В. Прокушеву и их сторонникам, ибо и в прессе должно существовать обратная связь. Поэтому прошу Вас как глава государства ознакомиться с текстом предлагаемой статьи и соодействовать ее опубликованию в Вашем печатном органе «Совет Башкортостаны».

С гл. уважением **З. Султанов,** писатель.

Адрес: 450055, Уфа — 55, Уфимское шоссе, 4, кв. 119, Султанову Зигату Адигамовичу. Телефон: 31-45-97 (квартира). 25 февраля 1989 г.

Әлбиттә, ғәҙәттәгесә, хатыма бер ниндәй ҙә яуап-фәлән булманы...

Һәм бына шул «Совет Башҡортостаны»н (һәм башҡаларын да) өркөткән текстың үҙе:

Кемгә кәрәк был пәрей туйы?

Владимир Ильич Лениндың туранан-тура ҡатнашлығында Башҡорт АССР-ын төҙөү тураһындағы Килешеүгә ҡул ҡуйылған тарихи көндөң 70 йыллыҡ юбилейын ҡаршыларға теүәл бер ай ҡалған саҡта милләтебеҙ яҙмышына, культураһына ҡағылышлы күп нәмәләр тураһында етди уйланырға, берсә, һөйөнөп, берсә, көйөнөп, бөгөнгөбөҙ менән бергә киләсәгебеҙҙе ҡайғыртырға тура килә. Таң һарыһында күҙҙе тырнап асыу менән бала-сағаларыбыҙҙың өҫтө бөтөн, тамағы туҡ, тубырсыҡтарҙай тупырлап үҫеп килеүенә ҡыуанһаҡ, ауыҙ асып өндәшеү менән үк уларҙың телһеҙлегенә — әсә теленән мәхрүм ҡалыуҙарына йөрәк әрней. Башҡортостан тупрағында башҡортса һөйләштергән ясле, балалар баҡсаһы, мәктәптәрҙең аҙайыуы йәки онотҡанда бер осрауына ғәжәпләнмәй ҙә башланыҡ шикелле. Кескәйҙәр һәм үҫмерҙәр өсөн үҙ телебеҙҙә гәзит-журналдар сыҡмауына, балалар әҙәбиәтенең махсус нәшриәте, йәш тамашасы өсөн милли театрыбыҙ булмауына ла күнегеп барабыҙ кеүек. Шулай уҡ райондарыбыҙҙа урыҫ һәм татар телдәрендә әллә нисәләгән тиҫтә гәзит нәшер ителгән ваҡыттарҙа башҡорт телендә ике генә район гәзите баҫылып, ҡалғандары башҡа телдәрҙән тәржемә ителеүенә (дубляж), ә башҡорттар 43 процент, татарҙар — 31, урыҫтар 11 процент тәшкил иткән 21 көнбайыш райондарыбыҙҙа татар телендә — 21, урыҫ телендә 18 район гәзите уҡыусыларын туплағанда, башҡорт телендә ни бары бер генә гәзит (ул да булһа дубляж!) быҫҡып янған һуҡыр шәмдәй яңғыҙ үҙе йәшәүенә лә

иғтибар итмәйбеҙ кеүек. Ә мәктәп мәсьәләһе? 1925 йылдан алып 1968 йылға тиклем урыҫ мәктәбе һаны 788-ҙән 1914-кәсә, татар мәктәбе 582-нән 1117-гәсә гөрләп артһа, башҡорт мәктәбе һаны 572-нән 785-кә тиклем генә ыраны... Билдәле булыуынса, ленинсы милли политиканы тупаҫ боҙоуға юл ҡуйылған торғонлоҡ йылдарында Башҡорт АССР Мәғариф министерствоһы әсә телендә уҡытыуҙы ҡырҡа сикләп, элек милли телдә уҡыған мәктәптәрҙә балаларҙы урыҫ телендә уҡытыуға күсереү эшен ҡыҙыулатты, был зыянлы эшмәкәрлек беренсе сиратта башҡорт теленә һуҡты. Миҫал өсөн 1973-74 уҡыу йылын ғына алайыҡ: ул йылда республикабыҙ буйынса 650 милли мәктәп урыҫ телендә уҡытыуға күсерелһә, шуларҙың 112-һе генә татар, ә 420-һе башҡорт мәктәбе ине. Өҫтәүенә, бына ғына торған 1988 йылда көнбайыш башҡорт ауылдарындағы тиҫтә йыл буйы әсә телендә эшләп килгән 200 башҡорт мәктәбе бер юлы татар телендә уҡытыуға күсерелеп, милләтебеҙҙең көнбайыш диалектында һөйләшеүсе өстән бер өлөшө үҙенең милли телендә уҡып белем алыуҙан, ул ғына ла түгел, үҙ милли телен дәрес кенә итеп булһа ла өйрәнеүҙән мәхрүм ҡалды... Оҙаҡ йылдар һуҙымындағы ошондай кире күренештәр арҡаһында халҡыбыҙҙың һуңғы өс быуын кешеләренең байтағы башҡа телдә уҡып һәм һөйләшеп үҫте, милли телен танымаған, милли культураһын һанға һуҡмаған, шул нигеҙҙә башҡа милләттәрҙе һәм милли культураларҙы ла ихтирам итмәҫтәй нигилистар, сепрәк-сапраҡ һөйәрйәндәр, ҡорһаҡ ҡолдары булып етеште. Ундайҙарға һәммәбеҙ өсөн изге һаналған интернационализм төшөнсәһе лә дәүләт кеҫәһен ҡармағанда, тамаҡ ярып үҙ мәнфәғәттәрен даулағанда битлек итеп ҡулланыу өсөн генә кәрәк... Ҡыҫҡа ғына әйткәндә, ысын интернационализмдың төп нигеҙен тәшкил иткән ысын миллилекте аяҡ аҫтына һалып тапаныҡ, шуны, аяҡ аҫтынан алып, кешеләрҙең үҙҙәренә ҡайтарырға ваҡыт етте — миллилеккә дефицит ҡырҡыулашты. Ошо яуаплы осорҙа ике күҙебеҙҙең береһе өмөт менән республикабыҙ етәкселегенә төбәлһә, икенсеһе культура әһелдәребеҙгә уҡтала — үҙ иңенә артҡан әхләҡи-политик йөктө намыҫлы егелеп тартамы һуң милли әҙәбиәтебеҙ, сәнғәтебеҙ маһирҙары? Уҡыусы һәм тамашасы күңелендәге ысын мәғәнәһендәге миллилеккә дефицитты, һыуһауҙы ни рәүешле ҡәнәғәтләндерә был зирәк ҡор? Яҡынлап килгән оло юбилей айҡанлы милләтебеҙгә, бәғере ҡата барған йәш быуын кешеләребеҙгә ҡайһындай ижади бальзам алып киләбеҙ?

Диңгеҙҙең бер тамсыһынан да диңгеҙ күренә, тигәндәй, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байрағы орденлы һәм М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының быйылғы яңы эше менән танышырға саҡырылғас, беҙ, бер төркөм яҙыусылар, журналистар, театр белгестәре, ана шул турала ғәмләнеп, оло өмөт бағлап барҙыҡ. Ысынлап та, театр ул әҙәбиәт, тылсымлы һүҙ сәнғәте, музыка, һынлы сәнғәт һәм башҡаларҙың бөтәһе бер төйөнгә сатрашланған балҡышлы дәү мәҙәниәт түре бит. Театрҙан милли культура кимәлен, илдең сәләмәтлеген йәки сирен асыҡ төҫмөрләп була, академия исемен йөрөткән театр иһә иң юғары мәғәнәлә милләтебеҙҙең көҙгөһө. Милләттең үткән һәм хәҙерге хәлен баҙыҡ сағылдырып күңелдәрҙе зауыҡландырыу менән бергә ул халыҡтың өмөт иткән яҡты киләсәген дә сағыу һынландырып баҡтыртырға, рухландырырға бурыслы. Милләтебеҙ кисергән хәҙерге милләтһеҙлек ауырыуы осоронда академия театры, хәстәленең башы осонда ясин сығыусы түгел, ә тылсымсы-табип булырға тейеш. Шуға ла беҙ А. Хәлимдең «Пәрей туйы» пьесаһы буйынса (режиссеры Абдулла Ғиләжев) әҙерләнгән спектаклдә атаҡлы театр коллективы юғарыла әйтелгәндәрҙең барыһын да күҙ уңында тотоп эш иткәндер ҙә Башҡорт АССР-ы юбилейына лайыҡлы ижад емеше менән килгәндер, тип көткәйнек. Әммә сәхнәнән күргәндәребеҙ башҡа шаңҡыта һуғып,

йөрәкте ауырыу ҡылды. Ысынлап та, ауыҙ-моронға, ике күҙгә саң тултырғыс ҡара ҡойон уйнатып, төрлө ташландыҡ әйберҙәрҙе, сүп-сарҙы, ҡалай-ҡолай ярпыларын һауаға сөйөлдөрөп, бер-береһенә бәрелештертеп өйөрөлдөргән шау-шоулы ытырғаныс пәрей туйын хәтерләтте сәхнәләге ҡәһәрле был тамаша — пьеса авторының бәйһеҙ хис-хыялы тарафынан ниндәйҙер һаташыуҙар донъяһынан йыйып-ҡоршап бирелгән, драматургия ҡанундарынан яҙлыҡҡан ала-ҡола ҡорама. Хәйер, драматургия тигән нәмә үҙе бынан йәйәүләп ҡасҡанлыҡтан, тамашаның сәхнәләрен, айырым күренештәрен дә ентекле анализлау, бизмәнгә һалып һәлмәкләтеү мөмкин түгел, сөнки нимә ҡымшатһаң да усыңда уҡ тарҡала ла рухи-әхләҡи бизмәндәге бер табаҡҡа өйөрөлә, йүнһеҙ тарафҡа тарта...

...Сәхнә ҡырына шаҡырайтып ҡуйылғандыр Милос Венераһының билдәле шыма таш һыны. Йәнәһе күктең етенсе ҡатын ишаратлаған сәхнә түрендәге бейек һәндерәлә тора ҡайҡайып ошо һынды кәүҙәләндермеш әртисбикә — боронғо грек хөлләһенә төрөнмөш ярым-яланғас тәнле, тереләрҙән тере мөхәббәт хоҙайбикәһе. Баштүбән һөйәп теҙеп ҡуйылған ҡалай табуттармы ни — ҡалай ҡапҡаслы бүлкәләргә бүленгән сәхнә төбө. Заманабыҙҙың уртансы һәм йәш быуынын күҙалландыртырға тейешле йәнә бер өйөр ярым-яланғас һылыубикәләр, уларҙың ыҫпай кейенгән ир-ат затлы һөйәркәләре һәм хәләл ефеттәре шул «табут»тарҙың ҡалай ҡапҡастары артынан дөһөр-шатор атлығып сығалар ҙа, көллөһө лә бер-береһе менән хәтәр әүмәкләшеп, баяғы етенсе ҡат күккә — һәндерәгә менәләр, һәндерәнән төшәләр ҙә, пәрей туйын уғата ныҡ туҙғытып, ҡотһоҙ ҡалай өңдәренә кире кереп китәләр — ытырғанып шаңҡытылған тамашасы аңы сәхнәләге хәрәкәттәр сеймәлешен ни бары ошо «логика»ға һалып юҫыҡларға һәләтле. Көллө ҡойон зәхмәттәре күҙ ҡырҡырлыҡ ут-оҫҡон, музыка ҡоралдарының ярһыу гөрөлтөһө, шул мәхшәрҙе еңеү өсөн көсәнеп, буғай, артистарҙың һәм артискаларҙың тамаҡ ярып ҡыҫҡырыуҙары, иҙән тибеүҙәре хасил ҡылмыш дөйөм ғәрәсәт, какофония ике шаршау дауамынса бер туҡтауһыҙ ҡубарыла тамашасы башына. Пьеса авторы тарафынан киң билдәле «Ҡанатлы һүҙҙәр» йыйынтығынан, йыртмалы календарь биттәренән, тип әйтерлек, сүпләп алынған боронғо грек аҡыл эйәләренең әйтемдәрен геройҙарының телмәренә услап-услап һибеү ҙә, тел төбөнә һәм осона шул уҡ боронғо грек мифологияһы үрнәктәрен йәбештереп һалыу ҙа тамашасыны шаҡ-ҡатырырға көсәнеүҙең саманан сыҡҡан өйөрмәһен ауыҙлыҡларлыҡ тос аҡыл һәм логикаға ирештермәй. Бер ыңғайҙан шуны ла әйтергә кәрәк: сәхнәләгеләрҙең телмәренә көрмәлтелгән был үтә «аҡыллы» тел байлығы, әйләнгән һайын, башҡорт теленә тәбиғи булмаған һүҙҙәр, сит тел ҡалыбына һипләп һөйләм төҙөү шойҡаны менән ҡолаҡты ярып, автор тексының башҡорт теленә тәржемә ителмәйенсә, «башҡорт таҡыяһы кейҙертеп» кенә сығарылыуын фашланы — был да, әлбиттә, академия театры сәхнәһен биҙәмәне. Дер-һелкеткес мәғәнәһеҙ шул бәләнән йәнең миңтәп көйөнөп тә ҡуяһың: был сәхнәлә быға тиклем дә ете диңгеҙ аръяғындағы грек мифтарын тергеҙеп ҡарауҙар булды, әммә улар милли сәнғәтебеҙ хазинаһына иш өҫтөнә ҡуш булып кërә алдымы һуң?.. Милли үҙаң шишмәләребеҙ ҡорғаҡһыған заманала милли аңға һәм зауыҡҡа һуҡыр тин дә өҫтәмәгән нәүбәттәге был «греклаштырыу» ынтылышы мотлаҡ кәрәк инеме? Гректарҙыҡынан ҡалышмаҫлыҡ (хатта уҙып та киткән!) башҡорт мифологияһына, гүзәл халыҡ ижадына нигеҙләнгән классик әҫәрҙәребеҙ ҙә ошо сәхнәлә һынланырға юл яра алмай ята бит... Аптырап, рәнйеп, баш ҡатып, берсә, таш Венера баҫып торған ергә, берсә, ымһындыртҡыс тере Венера ҡалҡынған түргә зарлы күҙенде төбәйһең, әммә хоҙайбикәләр икеһе тиң йәнһеҙ, вайымһыҙ — таш һындар рәүешенән уҙҙыра алмаған

уларҙы пьеса авторының ярымһаташыулы ҡөҙрәте. Уның ҡарауы ерҙәге иҙәндә лә, үрҙәге һәндерәлә лә бер ниндәй ҙә аң ҡалыбына һыя алмаған пәрей туйы туҡтауһыҙ ҡоторона — кешелек әхләгенән төңөлдөртөп ғәүрәт хәленә төшөрөлгән ялтыр-яланғас кәүҙәләр һаман бер-береһенә ҡылйыландарҙай көрмәлеп әүмәләшә, әйтерһең, пьеса авторы бөгөнгө көн йәмғиәтебеҙҙең ыңғай кәүҙәләнешен дә, кире һынланышын да тере көйөнә тотоп алып мендерә алмаған сәхнәгә, ә уның, үлеклектән дә үтеп, емтектәй бурһып тарҡалған, әхләҡи умыртҡа һөйәгенән арынған киҫәк-ярпыларын ғына көрәп килтереп өйгән. Тамашасы күңеленә таяныс бирерлек идея умыртҡаһы булмаған ана шул емтек касафаты бөгөнгө мещан күренешенең ҡайһы бер атрибуттарына төрөнөп, ҡайраҡташтай шымарған һүҙҙәрен ҡысҡырып, бәүелһеҙләнеп тантана ҡыла сәхнәлә, бәүелһеҙлектең иң юғары кәүҙәләнеш нөктәһендә тамаша залына ул: «Алға, коммунизмға!» — тип һөрәнләп тә ебәрә...

Кире ҡағыу юлы менән дә илдең яҡты идеалын раҫлау мөмкин икәнлеге билдәле. Ләкин «Пәрей туйы»нда ул раҫлау заңы зыңламай, сөнки пьеса авторы күҙ уңында тотҡан идеал, умыртҡа һөйәге юҡ. Шуға күрә сәхнәләге өс быуын әһелдәребеҙҙең дә иҫ киткес шәп уйнауы ла, үкенескә ҡаршы, мәйетте терелтергә тырышып уға тын өрөү, күрәләтә мәғәнәһеҙгә йән атып көсәнеү кеүек. Ансамблдең иң юғары кимәлдәге төҙөклөгө, профессиональ ҡеүәте, әйтерһең дә: «Бына беҙҙең талант-һәләт, ә һеҙ беҙҙән шуны нимәгә сарыф иттертәһегеҙ!..» — тип бер юлы әҙиптәргә, Культура министерствоһына, театр етәкселегенә рәнйеүен белдерә һымаҡ.

Ҡабул ҡылыу спектаклен ҡарағандан һуң, фекер алышыу бүлмәһенә күптәребеҙ ана шулай шаңҡытылып килеп индек. «Академия» исемен йөрөткән, милли культурабыҙҙың шифалы йәншишмәһе булырға тейешле театрыбыҙ сәхнәһенә бындай йән иҙгес мажараның дөрөп килеп кереүе бөтөнләй аңлайышһыҙ, иҫ киткес сәйер ине. Күрәләтә етлекмәгән пьесаға нисек итеп Яҙыусылар союзының драматургия секцияһы үҙенең абруйлы фатиха ҡағыҙын биргән? Режиссер А. Ғиләжев, режиссер ғына түгел, ә профессор һәм граждан да булараҡ, ни ҡулы барып шуны ҡуйырға алған? Академия театрының баш режиссеры Р. Исрафилов, милли драматургтарыбыҙҙың ҡайһыларының иң яҡшы тип нарыҡланған әҫәрҙәрен дә был сәхнәгә үткәрмәйенсә сос һаҡта торған Исрафилов, был юлы ни сәбәпле юл асҡан икән күрәләтә бракка? Аҙаҡ килеп, Культура министерствоһы ниңә күҙ йомоп ҡалған? Өҫтәүенә, спектакль тигән нәмәләре әле өлгөрөп тә етмәҫе, белгестәр һәм йәмәғәтселек хөкөмөнә ҡуйылмаҫы, үҙ баһаһын алмаҫы элек үк, ниңә уны республика матбуғаты тамашасыларға тәҡдим ҡылырға ашыҡҡан, билеттар ҙа ай элгәре һатылған? Хатта танылған драматургтарыбыҙҙың да әҫәрҙәренә бындай иҫ киткес ыңғай шарттар тыуҙырылмай, ишектәр ҙә үҙҙәренән-үҙҙәре шартлап асылып бармай бит. А. Хәлим шул ҡәләмдәштәренән ни яғы менән айырыла, әллә уның кемдәргәлер күрһәткән айырым хеҙмәте, оло ҡаҙанышы бармы?..

Фекер алышыуҙа ана шуларҙың барыһы ла тура ярып әйтелде, күпселектең тәҡдиме лә бер булды: А. Хәлимдең «Пәрей туйы» пьесаһы буйынса әҙерләнгән спектакль, драматургияһының художество һәм идея-политик зәғифлеге арҡаһында, Башҡорт академия театры сәхнәһендә күрһәтелергә һис тә лайыҡлы түгел.

Әммә ләкин... шул йыйылыштың иртәгәһенә үк шул уҡ театрыбыҙ сәхнәһендә «Пәрей туйы»ның тантаналы премьераһы булып үтте — Культура министерствоһы менән театрыбыҙ етәкселеге Башҡорт АССР-ының 70 йыллығы айҡанлы халҡыбыҙға ана шундай бүләк әҙерләп бирҙе. Ошо хәл күңел төйәгебеҙҙә намыҫ экологияһының да боҙолоуы тураһында һөйләмәйме? Төрлө сәбәптәр арҡаһында милли тел һәм милли

үҙаң биртенеү кисергән был осорҙа ҡойон уйнатып милләтебеҙҙең күңел усағын емертергә, рухыбыҙҙы ҡаҡшатырға ынтылыш түгелме был? Йәмәғәтселек фекерен аяҡ аҫтына һалып тапау ҡасанға тиклем барыр?!

Милли театр милләт алдында үҙ бурысын намыҫлы үтәргә тейеш.

Йыһат Солтанов. 24.02.1989.

Хөрмәтле дәүләт эшмәкәребеҙ Фәйзул Вәли улының Юғары һәндерәһенән, билдәле, бер ниндәй ҙә яуап та бирелмәне, сара ла күрелмәне, буғай, — күнегелгән күндәмлек. Тормошобоҙ һәүетемсә үҙ ыңғайына аҡты. Тиҙ үк арала сәхнәбеҙҙән үҙенән-үҙе төшөп ҡалған «Пәри туйы» урынына икенсе «туй»ҙар килде...

Ә мин иһә, төрлө яҡтан ҡағыла-һуғыла, туған әҙәбиәтебеҙҙең төрлө жанрҙарында ла йән атып эшләүем менән бергә башҡорт халҡының рухи-мәҙәни тарихын тәрәндән тикшереү, шуны яҙып халҡыма еткереү юҫығындағы үҙемә күрә фиҙакәрҙәрсә юлымды дауамланым (хеҙмәттәремдең бер килкеһе журналдарҙа донъя күрҙе). Бер үк ваҡытта ҡаным ҡыҙышып утлы-дауыллы сәйәсәткә тартылдым...

Сумамын сәйәсәткә

1989 йыл; балыҡ башынан серей, тигәндәй, торғонлоҡтан һәм ҡартлыҡтан әлһерәп бөткән юғары етәкселек әһелдәре Коммунистар партияһының йылдар буйынса һуҙылып килгән кризисын үҙҙәренең әрпешлеге менән уғата көсәйтеп, күп милләтле Советтар Союзы халыҡтарының ҡыҙыл империя ҡыҫымына ҡаршы туплана килгән нәфрәтен һуңғы сиккә еткерҙе — илдә ижтимағи-сәйәси хәл ҡырҡа үҙгәрҙе. Шундай елле-дауыллы замана килде -- Башҡортостан республикаһын юҡ ителеүҙән ҡурсалап ҡалыу өсөн һәм республикабыҙға үҙаллылыҡ (суверенитет) даулап халыҡ урамға сыҡты, майҙандарҙы һәм залдарҙы илдең изге талаптары тетрәтте. Бындай хәлдә яҙыусының урыны, әлбиттә, халыҡ араһында ине; халыҡ беҙҙән замана заңын яңғыратҡан ҡыйыу һәм хаҡ һүҙ көттө, телмәрҙәребеҙҙе йотлоғоп тыңланы. Арабыҙҙа, әлбиттә, “как бы чего не вышло” тип, үҙ тиреләрен һаҡлап, әсе араҡы шауҡымында өйҙәрендә боҫоп ятыусылар ҙа булды (аҙаҡ улар “беҙ алыштыҡ!” тип күкрәк һуғып йөрөнөләр һәм түрәлек креслоларына үрләнеләр), ләкин эсендә йәне барҙар аҙаҡкаса кереше тартылған уҡ ине. Дары һымаҡ гөлтләп ҡабынырға әҙер торған массалар алдында хаҡлыҡты ғына ярып һалған йәнле һүҙ, тере һүҙ кәрәккәнлектән (ә ундайҙы матбуғатта ташҡа баҫтырыу беҙҙең өсөн тыйылғанлыҡтан), эштән ҡайтҡас төнөн ҡағыҙға яҙып, ә иртәгәһен янып-көйөп трибуналарҙан һөйләргә -- телмәр публицистикаһына күстем, ә был иһә йөрәгемде, мейемде яндырып үткән һәм керешенән атылған уҡтай киләсәккә төбәлгән заманабыҙҙың изге шаңдауы ине. (Уҡыусыны алдан уҡ киҫәтәйем: мемуарҙың нәүбәттәге был киҫәге, тулыһынса тип әйтерлек, ана шундай туранан-тура заман заңдарына ауаздаш телмәр публицистикаһынан хасил).

Бөтә союздаш һәм автономиялы республикаларҙа, тап ошо беҙҙәгеләй, суверенитет, үҙ аллылыҡ өсөн хәрәкәт көсәйҙе. Большевиктарҙың Башҡортостанда башҡорт халҡына ҡарата 70 йыл буйына асыҡтан-асыҡ та, аҫтыртын да геноэтноцид сәйәсәте үткәреүе һөҙөмтәһендә йән иҫәбе яғынан ныҡ кәмегән һәм кәмей барған, гүр ҡырыйына килтереп еткерелгән милләтебеҙҙе һәләкәттән ҡотҡарыу, артабанғы үҫешен тәьмин итеү ғәме борсоно манҡортлоҡҡа бирешмәгән, намыҫын юймаған

зыялыларыбыҙҙы. Күп милләтле Башҡортостан суверенитеты менән бергә башҡорт халҡының йәшәүе өсөн мотлаҡ булған милли консолидация, башҡорт теленә дәүләт теле статусы, ергә аҫабалыҡ хоҡуғын тергеҙеү мәсьәләләре лә ҡалҡып сыҡты көн үҙәгенә. Ошо йылдың аҙағындараҡ үткәрелергә тейешле халыҡ иҫәбен алыу (перепись) эше халҡыбыҙҙың йән иҫәбен кәметкән һәм кәметәсәк ассимилияцияның сәбәптәрен һәм уны туҡтатыу юлдарын эҙләргә, башҡорттан башҡа милләт кешеләре яһаусыларҙың ысын йөҙҙәрен асырға этәрҙе. Хәйер, был оло ғәм минең өсөн яңы түгел — 1974 йылда уҡ «Ядкәр» тигән романымда (ун дүртенсе сәхифә) күтәреп сыҡҡайным уны, хатта көнбайыш диалектты ла әҙәби телебеҙгә керетеү өсөн ниндәй тәғәйен саралар күрелергә тейешлеген дә кәңәш иткәйнем, үҙемә ҡалһа... Бына шул ғәм, был юлы инде башҡаларҙың да башын ныҡ ауырттырып, 15 йылдан һуң кире әйләнеп ҡайтты, ә мине йыл башынан уҡ баяғы урам публицистикаһы өлкәһендә ең һыҙғанып яңынан-яңы рухи-ижтимағи һөжүмгә күсергә этәрҙе. Республика гәзиттәрендә тура һүҙҙе һөймәүҙәренә лә ҡарамаҫтан, урыҫ телле “Советская Башкирия”ла юл ярырға тырышып, түбәндәге мәҡәләмде илтеп ҡараным:

Думы о переписи

Когда думаю о предстоящей переписи населения республики, о будущем Башҡортостана, башкирской нации, невольно приходит на ум положение из статьи русского публициста Владимира Вострухина «Что вепсы нам? Что мы вепсам?» (журнал «Молодой коммунист» №9, 1988 г.). Оказывается, на территории нынешней Ленинградской области когда-то существовала страна Вепсария и многочисленный вепский народ. Теперь уже давно нет Вепсарии, а вепсов осталось всего лишь 8 тысяч душ, но вскоре их вовсе не станет — идет безудержная сплошная ассимиляция, то есть, как пишет автор статьи, вепсы «стали бежать из вепсов в русские».

Публицист, обратившись к одному из последних вепсов, дает ему такой риторический вопрос: «Но вместе с языком исчезнут и вепсы как народ. Останутся людские единицы и будут жить, есть, пить, спать, но не вспомнят никогда, что они — вепсы. Неужто не восстает ваша национальная гордость при мысли, что будут русские, грузины, литовцы, туркмены, башкиры, но не будет вепсов?»

Как видите, башкиры здесь перечисляются в ряду наций благополучных, гарантированных от исчезновения. Но так ли на самом деле? Уважаемый автор статьи, по-видимому, начитался писаний собственного корреспондента «Правды» Прокушева и небезизвестного «сына двух народов» некоего Айдара Халима о якобы могучих и свирепых башкирах, жестоко властвующих в своей республике над бедными русскими и татарами, закрывая их школы и лишая их родного языка.

Но так ли в самом деле? Если обратиться к фактам (а факты — упрямая вещь!), то они свидетельствуют о небывалом в истории кризисном состоянии башкирской нации. Вопрос стоит так: быть или не быть башкирскому национальному языку, самой башкирской нации.

Если в конце прошлого века в 1897 году на территории только одной Уфимской губернии проживали 899 тысячи башкир (41% к общему населению губернии) и только лишь 184 тысячи татар (11%), то к 1970 году примерно на той же территории численность башкир стала 892 тысячи (23% к общему населению), а татар 944 тысячи (24%). Как видно, за годы советской власти в Башкирии прирост татар составлял в 5 раз, но в то же время

численность башкир стала меньше, чем было их в самодержавном 1897 году. А за пределами республики наблюдался полное их исчезновение. Например, если 1897 году в Мензелинском уезде, сплошь населенном башкирами и в советское время отошедшем в состав новообразуемой Татарской АССР, насчитывалось 193 тысячи башкир, то в 1926 году по переписи их стало только 1752 человека, а в 1939 году там башкир совсем не стало... то есть, в годы советской власти мензелинские башкиры все поголовно были переписаны как татары. При этом до 1926 года численность и восточных башкир сократилась в 2,5 раза!.. В то время, когда до 1970 года общая численность башкир сократилась, каким же образом получилось так, что численность татар в республике увеличилась в 5 раз?

Не будем касаться разительных фактов экономической политики в республике, классическим воплощением которой является процветание отатаризованного запада и знаменитые хайбуллинские землянки башкирского востока.

Возьмем школы.

В 1925-26 учебном году количество школ в республике было башкирских 572, а в 1967-68 учебном году их стало 785 (137% прироста); соответственно татарских школ было — 582 и стало 1117 (192% прироста!); русских школ — 788 и стало 1914 (243% прироста!). Как видно, прирост численности башкирских школ в сравнении с татарскими тоже отстал примерно в три раза. А в годы застоя, когда в республике был взят курс на ликвидацию национальных школ, опят-таки главный удар наносился башкирской школе. Например, в числе 650 национальных школ, переведенных на русский язык обучения лишь в одном 1973-74 учебном году, башкирских оказалось 420, а татарских — всего 112. А вот самое свежее данное. На новый 1988-89 учебный год число школ с обучением на башкирском языке вновь сокращается — еще на 300 единиц. Как было справедливо сказано на страницах «Литературной газеты» от 7 сентября 1988 года, такая тенденция может иметь катастрофические последствия.

Как видно, и послешакировское руководство республики (Р.Х. Хабибуллин) нанесло удар в первую очередь башкирским школам в исконно башкирских деревнях запада, сотнями и сотнями превращая их обратно в татароязычные. Вместо того, чтобы действовать по благоразумному принципу: башкирской деревне — башкирская школа, татарской деревне — татарская и т.д., партбюрократия все еще действует по старому принципу: башкирской деревне — татарская школа...

А как обстоит там дело с языком местной печати?

У меня есть данные по 21 районам западной Башкирии. Как было сказано, из общего числа населения этого региона башкиры составляют 43%, татары — 31%, русские — 11%. Очевидно, башкиры здесь составляют подавляющее большинство. Однако на башкирском языке издается (дубляж) лишь одна — единственная альшеевская газета, в то же время на татарском — 21, на русском — 18. Напрашивается вопрос: мать или мачеха для нас, башкир, Башкортостан?

За 70 лет существования Советской власти западные башкиры так и не смогли иметь возможности обучать своих детей на национальном языке — уже три поколения западных башкир пропущены через мельницу татарской школы. В то же время партийное и советское руководство республики до сих пор упорно придерживается когда-то кем то выработанной антинаучной концепции, согласно которой отстраняя их, западных башкир, от общенационального башкирского языка, а в то же время навязывая им татарский язык. (Смотрите «Открытое письмо министру просвещения» западной

башкирки Раузии Гилфановой, требующей обучения детей западных башкир на башкирском языке. — Журнал «Агидель» 1988/8. Кстати, министр Гарданов до сих пор не ответил ей). Самым справедливым решением было бы придерживаться, как уже было сказано, благоразумного принципа башкирской деревне — башкирская школа, татарской деревне — татарская и т.д., независимо от заблуждения отдельных родителей относительно роли национального языка. Ведь, не зависит же от их прихоти, например, должны ли их дети изучать в школе английский, немецкий, французский языки; а вот свой национальный язык поставлен в прямую зависимость от прихоти родителей. При этом не надо забывать что вот уже три поколения часть родителей не знает и не уважает свой национальный язык, ибо они с детства воспитаны русской и татарской школой. Но я твердо убежден, ни великий русский народ, ни 6-ти миллионный татарский народ в лице простых людей не нуждаются в том, чтобы уже в конце просвещенного XX века раздроблять и ассимилировать один из древнейших, но уже составляющий меньшинство на своей же родине башкирский народ. Корень этого вопроса уходит в глубину истории и она питается ядовитым выделением дореволюционного и послереволюционного пантатаризма, одним из идеологов которого был гитлеровский прихвостень Гаяз Исхаки. Как известно, в результате сталинских репрессий 30-х годов выдающиеся башкирские национальные кадры были ошельмованы как враги народа и физически уничтожены, в результате чего реальная власть в республике перешла в руки противников башкирского самоопределения, то есть скрытых сторонников слияния башкир в татарскую нацию, а двух республик — в единую Татарскую республику. Вот они и довели башкир до настоящего кризисного состояния. Разве можно назвать все это ленинской национальной политикой?!.

Из всего высказанного вытекает: в республике произошло глубокое искривление ленинской национальной политики. Более того, в отношении башкир это есть духовный, национально-культурный геноэтноцид, проводимый со стороны некоторых руководящих представителей так называемого “брата-близнеца” татар при молчаливом согласии русского “старшего брата” — это есть некоторый горький результат 70-летнего успешного решения национального вопроса в Башкирии. При таком положении и в будущем можно ожидать грубых искривлений в пользу татар, например, в предстоящей переписи населения республики, ибо после упомянутых печатных выступлений Прокушева, А. Халима и других, а также после агитпоездок на запад некоторых татароязычных писателей типа Атнабаева, резко настроенных против башкирского языка, а также имея в виду их сторонников в местных руководствах, не приходится надеяться на объективность переписчиков и самой переписи. И на это важное дело будет давить груз негативного прошлого и он может оказаться решающим. И тогда мы можем оказаться в положении исчезающих вепсов.

Использованная литература:

1. Р.Г. Кузеев. Этнографическая история башкирского народа. Уфа, 1978.

2. Материалы Миннаробраза БАССР.

Примечание. *Данная статья 3 января 1989 г. была предложена для публикации редакции газеты «Советская Башкирия», но 4 января автору было отказано в этом. Мотив: «слишком резок тон статьи».*

Эйе, мәҡәләмдә нисек кенә баҫалҡы булырға тырышһам да, шул уҡ Коммунистар партияһы етәкләгән һәм ҡыҫҡа ваҡыт эсендә республикала башҡорт теленең, башҡорт

мәктәптәренең ҡороҡкосо рәүешендә танылып өлгөргән беренсе секретарь Р.Х. Хәбибуллин мөхитендә былдай мәҡәләләр менән матбуғатҡа юл ярыуы икеле ине, әлбиттә. Шуға күрә аяныслы хәлебеҙҙе тура Мәскәүгә — Кремлгә еткерергә тәүәккәлләндем. Әллә ҡасандан йыйналып килгән материалдарыма таянып, Генеральный секретарь М.С. Горбачевтың үҙенә атҡарырға «Думы о народе» тигән исем аҫтында машинкала 75 битлек текст әҙерләгәйнем (VII том аҙағындағы «Ҡушымталар» бүлегендә бирелә), шуны конвертлап, Өфөләге оҙон ҡуллар тотоп ҡалдырмаһын өсөн, адресатҡа тапшырылыуын үҙемә хәбәр итәсәк «уведомление» менән 23 февралдә ебәрә һалдым Мәскәүгә. Төп текст алдынан бирелгән аңлатмам ошондай:

Генеральному секретарю ЦК КПСС тов. Горбачеву М.С.

Дорогой Михаил Сергеевич!

Это Вам пишет башкирский писатель-коммунист, не скрывая правду, чтобы помочь партии выработать на предстоящем Пленуме ленинскую национальную политику в новых условиях.

Это о трагической судьбе башкирской нации.

Башкирский народ сегодня остался в меньшинстве на своей же собственной земле — разьве этому есть оправдания?!

Современная Башкирия с обостренными отношениями между башкирами, доведенными до грани исчезновения, и татарами, захватившими реальную власть и проводившими скрытую ассимиляторскую политику в республике, — это пороховая бочка, готовая взорваться в любое время, ибо долготерпению башкирской нации уже приходит конец.

С глубоким уважением **Султанов Зигат Адигамович**, член КПСС, член СП СССР. 1 февраля 1989 г. Уфа.

Адрес: 450055. Уфа — 55, Уфимское шоссе, 4, кв. 119, Султанову Зигату Адигамовичу.

Телефон (квартира): 31-45-97.

13.03.1989 йыл 16 сәғәт 50 минутта фатирымда телефон шылтыраны — Мәскәүҙән, КПСС-тың Үҙәк Комитетынан А.Ф. Солодовников иптәш. Хатты алғандар, аҙағындағы тәҡдимде Пленум ҡарамағына бирәләр. Ә тулы күсермәһен, минең менән һөйләшһен һәм саралар күрһен өсөн, КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты секретаре Ә.М. Дилмөхәмәтовҡа ҡайтаралар...

Төңөлөүемде әйтеп тораһы ла түгел...

М.С. Горбачев иғлан ҡылған бөйөк үҙгәртеп ҡороуҙар осоро бара һымаҡ, ләкин бөтәһе лә иҫкесә, тамсы ла үҙгәрмәгән: һөйөклө партиябыҙ, кемдән зарланып ялыу бирһәң, ялыуыңды шул кем-бәндәгә «мәсьәләне хәл ҡылырға» йүнәлтә бирә һаман... Нәфрәтемдең иге-сиге юҡ ине:

Зав. сектором ЦК КПСС по межнациональным отношениям тов. Солодовникову А.Ф.

Уважаемый Аркадий Филиппович!

13 марта с.г. после Вашего телефонного звонка мне стало известно, что Вы мои «Думы о народе», адресованное тов. Горбачеву М.С., из-за нехватки времени полностью прочитать не смогли (ознакомились лишь с началом и концом) и по этой причине для

принятия мер отослали в наш Башкирский обком КПСС, тем самым предав меня на верное растерзание. Ибо, если бы Вы смогли прочитать мое послание, легко убедились бы, что я критикую не что иное, как линию Башкирского обкома КПСС, приведшую к искривлению ленинской национальной политики, в результате чего в целях обеспечения великодержавнических интересов замаскированных пантатаристов грубо ущемлены насущные интересы башкирской нации; при том я нелицеприятно критикую нынешнего первого секретаря обкома КПСС тов. Хабибуллина Р.Х., продолжающего проводить указанную линию. Эсли бы все это можно было решить в нашем обкоме, не стал бы я обратиться прямо к тов. Горбачеву. Получается, что я критикую тов. Хабибуллина за грубые недостатки в его работе и с этим обращаюсь в суд высшей инстанции, а судьей там назначается сам критикуемый тов. Хабибуллин... Здесь на местах укрепляется впечатление, что ЦК почему-то упорно не желает вникать в башкирские дела, однако в то же время проявляет завидную чуткость устремлениям татарской стороны...

Еще Вы дали понять, что ЦК КПСС искренно хочет, чтобы башкиры и татары жили в дружбе и согласии, как и прежде. Законное желание. Но мне хорошо известно, — и это подтверждается историческими фактами, — что такой многожелаемой «дружбы и согласии» в подлинном смысле этих слов, к сожалению, у нас никогда не было даже в советское время (смотрите резолюции Пятнадцатой Башкирской конференции ВКП(б), Уфа, 17-25 января 1932 г.). А было лишь подобие дружбы, камуфляж, основанный на подавление национальных чаяний башкир. В настоящее время башкирская нация, доведенная процессом татаризации до крайней черты, отбросила камуфляж, открыто проявляя свои национальные интересы, поэтому и возник в республике татаро-башкирский конфликт. А Вы хотите, как понял я по телефонному разговору, реставрировать этот камуфляж, то есть показуху. Справедливые межнациональные отношения в республике начинались складываться и укрепляться только в тридцатых годах до 1937 года при подлинно ленинском первом секретаре обкома КПСС тов Быкине Я.Б., но после ждановской кровавой бани в Башкирской АССР в руководстве взяли верх замаскированные пантатаристы (замеченные еще В.И. Лениным) и их засилие продолжается до сих пор... Чтобы добиться настоящей дружбы, необходимо восстановить попранную справедливость. А почему и как она попрана, и как можно ее восстановить — объяснено на основе подлинных фактов истории в моей вышеназванной строго документированной работе.

На основе изложенных причин считаю необходимым с Вашей стороны срочно истребовать из Башобкома обратно на рассмотрение в ЦК КПСС выше названное мое послание тов. Горбачеву М.С. Уверен, приведенный там фактический материал и мои личные наблюдения в какой-то мере помогут ЦК и его предстоящему Пленуму выработать более верный курс для улучшения межнациональных отношений в Башкирии и в других республиках.

Надеюсь получить Ваш ответ.

С глубоким уважением **З.А. Султанов**, член КПСС, писатель.

Адрес: 450055, Уфа — 55, Уфимское шоссе, 4, кв. 119. Султанов Зигат Адигамович. Телефон: 31-45-97 (квартира). 14 марта 1989 г.

Бөтәһе лә тоталитар партияның Сталин ҡуйған ҡануны буйынса бара: шул айҙа уҡ мине КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты Пропаганда бүлегенә саҡыртып, шуның инструкторы Уразаев тигән башҡортмо, манҡортмо милләтле бер иптәш, өҫтәл аша

ҡаршыһына ултыртып ҡуйып, 99 тапҡыр тыңланған һәм билдәле булған һөрһөү ҡалыптан вәғәзен миңә үсәгәндәй уҡыны (ҡулында минең «Думы о народе» копияһы):

— Күрҙеңме инде үҙеңдең ҙур хатаңды? Бейек тауҙың башына таш бәрергә ярамай — ул таш барыбер, кире тәгәрләп, үҙеңдең башыңа төшә...

Ҡыҫҡаһы, партия этикеты буйынса тейешле «һөйләшеү» үткәреп, «һөйләшеү булды» тигән минең ҡултамғамды алып (Үҙәк Комитетҡа хисап биреү өсөндөр), бер ниндәй ҙә һөҙөмтәгә килмәй ҡайтарып ебәрҙе — шуның менән эш тә бөттө. Мин дә, әлбиттә, партиямдың ҡәҙимге эш алымының һис кенә лә үҙгәрмәүенә инанып, быны өсөн Үҙәк Комитетҡа нәфрәт белдереп хат яҙыуҙың һуҡыр тингә лә тормағанлығын аңланым. Урамға сығып ҡысҡырыһы ғына ҡалды...

Шеш тә тамам тулышҡас ҡына ярыла, вулкан да һыйыша алмайынса атыла. Ойоштороусыһы кемдәр булғандыр — иҫемдә һис ҡалмаған. Шуныһы ғына хәтерҙә: телефон аша бер-беребеҙгә өндәшеп, «мотлаҡ иртәгә иртән» тигән шартҡа килешеп, бер төркөм (утыҙлап инсан) башҡорт зыялылары 1989 йылдың 10 апрелендә Башҡорт академия драма театры алдындағы Ғафури һәйкәле янында (урам аша) *рөхсәт ителмәгән* митингыға йыйылдыҡ. Радиокомитеттан бер нисә кеше (мәҫәлән, журналист Ринат Камалов), Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтынан бер нисә ғалимә һәм Башҡорт дәүләт университетынан байтаҡ студент килгәйне. Яҙыусыларҙан бер үҙем генә инем, буғай. Һәм был һиммәтле төркөм — ғәзиз Башҡортостаныбыҙҙа сәйәси яҙ башланыуын хәбәр иткән беренсе ҡарлуғастар инек ғәмәлдә. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының диалектология секторы мөдире филология фәндәре докторы, Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары комитетының рәйесе профессор Нәжибә Хәйрелзаман ҡыҙы Мәкстүтованың Башҡортостаныбыҙға үҙ аллылыҡ талап итеп, шуны яулап алырға саҡырып ялҡынлы телмәр һөйләгәне онотолмай. Мин иһә, бындайын да яуаплы заманда халыҡ алдында сығыш яһағанда уйланылмаған һәм осраҡлы бер генә һүҙ ҙә әйтелмәһен, юҡ-бар һөйләп бер генә секунд та сарыф ителмәһен, тигән ҡәҙимге ҡағиҙәмә ярашлы, алдан әҙерләп килтерелгән тексымды уҡыным. КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты милли мәсьәлә буйынса үҙенең элек ҡабул ҡылған ҡарарҙарын ғына булһа ла еренә еткереп үтәһен, тигән талап һәм партияның оҙаҡламай буласаҡ пленумына сәйәси тәҡдимдәр бар ине телмәремдә. Оҙон ғына булһа ла (машинкала биш бит тирәһе), аяғөҫтө торған йәмәғәт шаҡтай ҡыҙыҡһынып һәм сабырлыҡ менән аҙағынаса тыңланы, сөнки торғонлоҡ йылдарында барыһы ла тура һүҙгә сарсағайнылар:

10 апрель 1989 йыл митингыһында телмәр

Владимир Ильич Лениндың туранан-тура ҡатнашлығында Башҡорт АССР-ын төҙөү тураһындағы Килешеүгә ҡул ҡуйылған тарихи көндөң 70 йыллыҡ юбилейын билдәләгән ошо айҙарҙа милләтебеҙ яҙмышына, культураһына ҡағылышлы күп нәмәләр тураһында етди уйланырға, берсә, һөйөнөп, берсә, көйөнөп, бөгөнгөбөҙ менән бергә киләсәгебеҙҙе ҡайғыртырға тура килә. Таң һарыһында күҙебеҙҙе тырнап асыу менән бала-сағаларыбыҙҙың өҫтө бөтөн, тамағы туҡ, тубырсыҡтарҙай тупырлап үҫеп килеүенә ҡыуанһаҡ, ауыҙ асып өндәшеү менән үк уларҙың телһеҙлегенә — әсә теленән мәхрүм ҡалыуҙарына әрней йөрәк. Башҡортостан тупрағында башҡортса һөйләштергән ясле, балалар баҡсаһы, мәктәптәрҙең аҙайыуы йәки онотҡанда бер осрауына ғәжәпләнмәй ҙә башланыҡ шикелле. Кескәйҙәр һәм үҫмерҙәр өсөн үҙ телебеҙҙә гәзит-журналдар сыҡмауына, балалар әҙәбиәтенең махсус нәшриәте, йәш тамашасы өсөн милли театрыбыҙ булмауына ла күнегеп барабыҙ кеүек. Шулай уҡ райондарыбыҙҙа урыҫ һәм

татар телдәрендә әллә нисәләгән тиҫтә гәзит нәшер ителгән ваҡыттарҙа башҡорт телендә ни бары ике генә район гәзите баҫылып, ҡалғандары башҡа телдән тәржемә ителеүенә (дубляж), ә башҡорттар 43%, татарҙар — 31, урыҫтар 11% тәшкил иткән 21 көнбайыш райондарыбыҙҙа татар телендә — 21 район гәзите, урыҫ телендә 18 район гәзите уҡыусыларын туплағанда башҡорт телендә бер генә гәзит (ул да булһа дубляж!) быҫҡып янған һүкыр шәмдәй яңғыҙ үҙе йәшәүенә лә иғтибар итмәйбеҙ кеүек. Ә мәктәп мәсьәләһе? 1925 йылдан алып 1968 йылға тиклем республикабыҙҙа урыҫ мәктәбе һаны 788-ҙән 1914-кәсә, татар мәктәбе 582-нән 1117-гәсә артһа, башҡорт мәктәбе һаны 572-нән 785-кә тиклем генә ыраны. Күренеүенсә, татар мәктәптәре һаны был осорҙа башҡорт мәктәптәре менән сағыштырғанда өс тапҡырҙай артты. Ленинсы милли политиканы тупаҫ боҙоуға юл ҡуйған торғонлоҡ йылдарында Башҡорт АССР Мәғариф министерствоһы әсә телендә уҡытыуҙы ҡырҡа сикләп, элек милли телдә уҡытҡан мәктәптәрҙә балаларҙы урыҫ телендә уҡытыуға күсереү эшен ҡыҙыулатты, был зыянлы эшмәкәрлек беренсе сиратта башҡорт мәктәбенә, башҡорт теленә һуҡты. Миҫал өсөн 1973-74 уҡыу йылын ғына алайыҡ: ул йылда республикабыҙ буйынса 650 милли мәктәп урыҫ телендә уҡытыуға күсерелһә, шуларҙың 112-һе генә татар, ә 420-һе башҡорт мәктәбе ине. Өҫтәүенә, тиҫтә йыл буйы көнбайыш башҡорт ауылдарында гөрләп эшләп килгән 200 башҡорт мәктәбе бер юлы татар телендә уҡытыуға күсерелеп, милләтебеҙҙең көнбайыш диалектында һөйләшеүсе өстән бер өлөшө үҙенең милли телендә уҡып белем алыуҙан, ул ғына ла түгел, үҙ милли телен дәрес итеп кенә булһа ла өйрәнеүҙән мәхрүм ҡалды... Оҙаҡ йылдар һуҙылып килгән ошондай кире күренештәр арҡаһында халҡыбыҙҙың һуңғы өс быуын кешеләренең байтағы башҡа телдә уҡып һәм һөйләшеп үҫте, милли телен танымаған, милли культураһын һанға һуҡмаған, шул нигеҙҙә башҡа милләттәрҙе һәм милли культураларҙы ла ихтирам итмәҫтәй нигилистар, сепрәк-сапраҡ һөйәрйәндәр, ҡорһаҡ ҡолдары булып етеште. Ундайҙарға һәммәбеҙ өсөн изге һаналған интернационализм төшөнсәһе лә дәүләт кеҫәһен ҡармағанда, үҙ шәхси мәнфәғәттәрен даулағанда битлек итеп ҡулланыу өсөн генә кәрәк. Ҡыҫҡа ғына әйткәндә, ысын интернационализмдың төп нигеҙен тәшкил иткән ысын миллилекте аяҡ аҫтына һалып тапанылҡ, шуны, аяҡ аҫтынан алып, кешеләрҙең үҙҙәренә ҡайтарырға ваҡыт етте — миллилеккә дефицит ҡырҡыулашты. Ошо яуаплы осорҙа ике күҙебеҙҙең береһе өмөт менән республика етәкселегенә төбәлһә, икенсеһе культура әһелдәребеҙгә уҡтала — үҙ иңенә артҡан әхләҡи-политик йөктө намыҫлы егелеп тартамы һуң аҡ һарайҙа ултырған политиктарыбыҙ, милли әҙәбиәтебеҙ, сәнғәтебеҙ, фәнебеҙ маһирҙары?.. Мәрмәр көплө аҡ һәм ҡыҙыл һарайҙарҙа әле булһа милләттән айырылғанлыҡ, томора торғонлоҡ хөкөм һөрә түгелме? Әгәр шулай булмаһа, ниңә һаман башҡорт теле көнбайыш башҡорт ауылдарынан ҡыуылған хәлдә ҡала? Ниңә һаман ғәҙел принцип: урыҫ ауылдарына — урыҫ мәктәбе, татар ауылдарына — татар мәктәбе, башҡорт ауылдарына — башҡорт мәктәбе тигән принцип тантана итмәй?!. Һуңғы етмеш йыл эсендә ана шулай башҡорт телен башҡорт мәктәптәренә индермәү арҡаһында Киров өлкәһендә тороп ҡалған 54 мең башҡорттоң, Татар АССР-ында тороп ҡалған 193 мең минзәлә башҡорттарының башҡа милләткә күсерелеп юҡҡа сығарылыуын, бөгөн иһә республикабыҙҙың үҙ эсендәге 300 мең көнбайыш башҡорттарҙың шундай уҡ хәлгә ҡуйылыуҙарын хөрмәтле етәкселәребеҙ ниңә белергә теләмәй? Ҡасан улар көнбайыш башҡорттары телен, башҡорт милли теленең өсөнсө диалектын, татар теле итеп эш ҡылыуҙан, фәнгә һәм хаҡиҡәткә ҡаршы ҡоролған, башҡорт милләтен эстән тороп емерткән һәм бөлдөрткән зәғиф милли политика алып барыуҙан туҡтар ҙа башҡорт милләтенә йөҙ менән

боролор?!. Ғәҙел политика төҙөргә ҡыйыулыҡтары етмәһә, ВКП(б)-ның 1932 йылғы XV Башҡортостан конференцияһы ҡарарын ғына булһа ла тормошҡа ашырыуҙы тәҡдим итәм. Бына ул:

«...Конференция считает препятствием в области осуществления решений партии по национальному вопросу: совершенно недостаточные темпы коренизации госаппарата и реализации башкирского языка... и все еще недостаточную прослойку башкир в некоторых учебных заведениях и школах повышенного типа, совершенно недостаточный рост башкир в составе рабочих на отдельных крупных предприятиях, ...все еще медленный рост башкирских преподавательских кадров... Отдельные низовые парторганизации не проявили достаточно решительной борьбы с извращениями национальной политики, с проявлением великорусского шовинизма, ...с татарской великодержавнической тенденцией...

В области подбора и подготовки кадров конференция выдвигает перед обкомом и всей парторганизацией основные задачи:

Борьба с извращениями ленинской национальной политики в школе, с великорусским шовинизмом, как главной опасностью, татарской великодержавнической тенденцией по отношению к башкирам...

Решительное усиление темпа коренизации соваппарата, введение практики составления контрольных цифр коренизации по отдельным учреждениям, усиление выпуска учебников на башкирском языке, ...усиление подготовки квалифицированных преподавателей, главным образом из среды коренной национальности — башкир.

***Культурное строительство**. Конференция констатирует медленность темпа развертывания печати, особенно книгоиздания на башкирском языке и его низкое качество, узость полиграфической базы и поручает обкому развернуть книгопечатание в соответствии с задачами коренизации низших, средних и высших учебных заведений...*

Конец цитаты.

Предлагаю от имени собравшихся на митинге принимать такую резолюцию:

1. Просим бюро Башкирского обкома КПСС осуществить по национальному вопросу резолюцию XV партконференции.

2. Обратиться предстоящему Пленуму ЦК КПСС по национальному вопросу следующими предложениями:

а) в национальных республиках (автономных, союзных), а также областях, округах и других образованиях гарантировать законом в партийных, советских и правительственных руководящих органах не менее 50-и процентное представительство этноса, давшего название данной национальной республике, области, округу и другим образованиям. Остальные 50 процентов мест пропорционально разделять между представителями остальных национальностей, населяющих данную территорию;

б) язык этноса, давшего название данной национальной республике, области, округу и другим образованиям, должен быть взят под охрану государства. Для достижения этого установить законом языку этноса, давшего название данной национальной республике, области, округу и другим образованиям, статус государственного языка (наряду с русским) с обязательным преподаванием его в школах данной национальной республике;

в) Центральному Комитету КПСС и Верховному Совету СССР принять необходимые долговременные меры, чтобы навсегда исключить из нашей жизни и искоренить пантатаризм и другие подобные «измы», то есть насилие одной нации над другой;

г) обеспечить подлинное равноправие всех народов Советского Союза, наделив автономные республики всеми правами и обязанностями союзных республик. То есть гарантировать законом автономным республикам статус союзной республики...

Рөхсәт ителмәгән митинг был, тип әйткәйнем. Башҡорт АССР-ы Эске эштәр министры полковник Әнәс Хәсәнов иптәш бер взвод милиционерҙары менән беҙҙе килеп баҫҡанда, ниһәйәт, әйтәһеләребеҙҙе әйтеп бөтөргәйнек инде. Полковник Хәсәновтың яңғыраҡтыс рупор аша ҡалын көр тауышы рөхсәтһеҙ митинг яһауҙың ҡанунға һыйышһыҙ икәнлеген киҫәтеп, беҙҙе тиҙерәк таралышырға саҡырҙы.

— Һеҙ бит Меңле башҡорто — ниңә татарса сусылдайһығыҙ?! — тип ҡысҡырҙы аранан берәү. Хәсәнов шунда уҡ саф башҡортсаға күскәс, саҡ ҡына тыңлап торҙоҡ та, яй ғына таралыштыҡ. Беҙ белгән осорҙа республикалағы беренсе сәйәси оппозицион митинг һәм, инсафлы ғына булһа ла, беренсе тапҡыр уны ҡыуып таратыу осрағы ине был.

1989 йылдың 17 — 18 декабрендә Өфөлә хәҙерге Ҡоролтай йортоноң (Фрунзе урамы, 40) ҙур залында башҡорт халҡы вәкилдәренең 1-енсе йыйыны үтте (1917 йылдағы тәүге ҡоролтайҙарҙың дауамы итеп, артабан уны IV башҡорт ҡоролтайы тип һананыҡ). Республиканың ҡалаларынан, районадарынан, башҡорттар күп йәшәгән күрше өлкәләрҙән 989 делегат килгәйне, араларында (Өфөнөң Киров районынан) мин дә делегат инем. Йыйындың төп ҡарары — «Урал» Башҡорт халыҡ үҙәген ойоштороу булды. Ҡоролтай шулай уҡ «Урал» башҡорт халыҡ үҙәгенең программаһын һәм уставын раҫланы. Ҡабул ҡылынған резолюцияла республикабыҙға суверенитет яулау, Башҡортостанға — союздаш республика, башҡорт теленә дәүләт теле статусын алыу, башҡорт халҡын сәйәси, социаль һәм рухи яҡтан үҫтереү хәрәкәтебеҙҙең төп бурыстары итеп ҡуйылды. Ошоларҙы алға һөрөп ҡыҙыу фекер алышыуҙарҙа үҙ өлөшөмдө индерҙем:

Башҡорт халыҡ үҙәге «Урал» йыйынында телмәр. 18.12.1989

Башҡортостанда башҡорт теленең дәүләт статусын ҡабул итеү тураһында һүҙ барғанда Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһы етәкселәре, йәғни партия һәм совет аппаратсылары, «быны халыҡ теләрме икән һуң?..» ти ҙә, күҙен тултырып ике тарафҡа ҡарай: ғәзиздәрҙән ғәзиз татар ҡәрҙәштәребеҙ ни әйтер? Урыҫ өлкән ағайҙарыбыҙ ни әйтер?..

Аппаратсыларыбыҙ фәҡәт тура ҡарарға, ошо ерҙең, республиканың төп халҡының күҙенә тура ҡарарға, ғына «онота»...

Белергә теләмәһәгеҙ ҙә белегеҙ, хөрмәтле етәкселәр: был мәсьәлә башҡорт халҡының мәңгелек бөйөк референдумында — быуаттар референдумында әллә ҡасан уҡ тайпылышһыҙ һәм кире ҡаҡҡыһыҙ рәүештә хәл ителгән. Таш быуатта уҡ бабаларыбыҙ Урал батырыбыҙ толпары Аҡбуҙаттың Таш Өйө Шүлгәнташ мәмерйәһе ҡаяларына үҙенең ҡан төҫлө ҡыҙыл буяуы менән шул Аҡбуҙатты изгеләштереп һүрәтләгәндән алып — ошо көндәге рәссамыбыҙ Әхмәт Лотфуллиндың «Ауылда беренсе Май байрамы» исемле сағыу ҡыҙыл байраҡлы картинаһынаса булған тиҫтәләрсә мең йылдар буйынса барған ул бөйөк референдум. Туҙға яҙған һәм ташҡа яҙған, ҡайһы берҙәре бөгөн дә Урал ҡаяларында ҡысҡырып-шаңғырып торған, китаптарыбыҙ аша, үлемһеҙ эпостарыбыҙ, йыр-моңдарыбыҙ, йолаларыбыҙ, биҙәү сәнғәттәребеҙ аша уҙған ул бөйөк референдум. Түгелгән ҡандарыбыҙ, өҙөлгән баштарыбыҙ, емертелгән, яндырылған иҫәпһеҙ күп ауыл

һәм ҡалаларыбыҙҙың харабалары аҫтында ла күмелеп ҡалмай үтәлгән ул бөйөк референдум. 1919 йылдың 22 мартында суверенлы Башҡорт Совет Республикаһының, суверенлы башҡорт теленең мәңгелек йәшәү хоҡуғы булып ҡыҙыл нәшриәттең үҙендә ташҡа баҫылып сыҡҡан ул быуаттарҙың бөйөк референдумы һөҙөмтәһе. Һәм иманыбыҙ камил: бер ниндәй ҙә яһил аппаратсының, йәки аппаратсыларҙың хитлығы ла сикләй алмаҫ ерле халыҡтың үҙ ерендә үҙ теленең үҙ аллылығына изге хоҡуғын! Башҡортостанда башҡорт халҡының бөгөнгө көн аҙсылыҡ тәшкил итеп, беҙгә өйҙәш булып килеп ингән башҡа халыҡтарҙың һан яғынан күпселек алып китеүен башҡорт халҡына ҡаршы мәкерле рәүештә файҙаланырға тырышыусы политикан-демагогтар ҙа яҡшы белһен: башҡорт халҡының ихтыярынан тыш башҡорт ерендә «яңы тәртип» урынлаштырыу бер ҡасан да, бер кемдең дә ҡулынан килмәйәсәк! Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы Генеральный Ассамблеяһының ҡарары бар был хаҡта — аҙсылыҡлы ерле милләттең күпселектәр ҡыҫымындағы изге хоҡуғын ҡурсалау-яҡлау хаҡында.

Эйе, беҙҙең борондан килгән, мәрхәмәтле бабаларыбыҙ ишекте киң асып индергән ҡәҙерле өйҙәштәребеҙ бар был илдә. Татарҙарға, удмурттарға, марийҙарға, сыуаштарға һәм хатта урыҫтарға ла яуыз батша-батюшка тарафынан золом күнә, ғәрәсәт күнә ҡупҡан һайын, һыйыныр ер эҙләп улар һеперелеп бында килгәне һайын, асылған ул миһырбанлыҡ ҡапҡаһы. Яуыз батша һәм уның сатраптарының тыйыуҙарына, башҡортҡа ҡаршы ысын геноцид үткәреүҙәренә лә ҡарамай.

Бына шундай бер документ:

1730 йыл. — *«Записка о башкирском вопросе в Российской империи и о наилучших способах его разрешения, составленная казанским губернатором А.П. Волынским.*

Уповаю я, что несовершенно известно о состоянии башкирского народа... народ их такою жестокою злобой исполнен, а время от времени непрестанно умножается и растет... А ныне ужа русские немалое число от подушных податей беглецов в Башкиры перешло...

И хотя ныне видим, что башкирский народ является кроток, однако же не возможно сказать, что оной был в совершенном и послушании, понеже беглых принимает, несмотря ни на какие указы»...

Күренеүенсә, батша указдары тыйыуына ла ҡарамай, урыҫ һәм башҡа милләт ҡаҫҡындарын күпләп-күпләп үҙ иленә индергән, һыйындырған башҡорт уҙамандары; хәҙергесә әйткәндә, урыҫ самодержавиеһы ҡорбандарына «политическое убежище» биргән, йылыға йылан эйәләй, тиһәләр ҙә, үҙенең йылы ҡуйынына алған. Башҡорттоң ошоғаса һаҡланған аҫыл милли һыҙаттарының береһе — ысын гөманлылығы түгелме ни был?!

Һәм шул үҙенең йылы ҡуйынына алған, өйҙәш иткән, табындаш иткән ҡайһы бер милләт кешеләренең бәғзе бер Айҙар Хәлим, Сергей Матюшин кеүек бөгөнгө игелекһеҙ вә белекһеҙ тоҡомдары башҡорт халҡының шул гөманлылығына ҡарата ҡайһылай итеп белдерә һуң рәхмәтен?!. Уларҙың «рәхмәт»енең ниндәй икәнлеге барығыҙға ла мәғлүм — изгелекһеҙҙән игелек көтөү икеле.

Кисә бында, уйынлы-көлкөлө генә, хөрмәтле мөфти хәҙрәттәренең кемдәргәлер (әммә башҡортҡа түгел!) йомарт һәм мул иғәнәһе тураһында ла һүҙ ҡуҙғалып ҡуйғайны. Абруйлы тарих китабынан шуға бәйле тағы ла бер сәхифәне бәйән ҡылыуҙы кәрәкле һанайым. 1755 йылғы ҡөҙрәтле башҡорт восстаниеһы тураһында бара һүҙ:

«Особую активность проявили башкиры Гайнинской волости Осинской дороги. Они организовали повстанческий отряд во главе с Чурагулом Минлибаевым... События... серьезно встревожили оренбургского наместника И.И. Неплюева... Власти обратились с грамотой

казанским татарам. Правительство, кроме того, пошло им на ряд уступок. Было облегчено положение служилых мурз и татар, приписанных к корабельным лесам. Слишком рьяно проводившие политику христианизации Казанский и Тобольский архиереи были переведены в другие районы. Указом от 23 августа 1756 года мусульманам было разрешено строительство мечетей. Было также несколько облегчено положение податного населения Казанской губернии».

Бына шулай — башҡорт халҡының азатлыҡ өсөн фиҙа ҡылған йәне, түккән ҡаны арҡаһында беҙгә ҡәрҙәш татар халҡы һәләк иткес тоталь каторга режимынан, көсләп суҡындырылыуҙан, тимәк, телен һәм динен юғалтып тулыһынса урыҫлаштырылыуҙан — йәғни геноэтноцидтан ҡотолоп ҡалған. Өҫтәүенә, элекке ҡәтғи тыйылыуҙан арынып, ауыл һәм ҡалаларҙа мәсеттәр, мәҙрәсәләр һалырға, ташҡа баҫмаханалар асып, китаптар баҫтырып сығарырға хоҡуҡ алған. Ҡайһы бер татар авторҙары башҡа ҡәрҙәш халыҡтарҙың мәҙәниәтен түбәнһетеү, кәмһетеү ниәтенән яһилланып, революцияға тиклем үк татарҙың күпме мәсете, мәҙрәсәһе, матбағаһы булғанлығын һанап маһая икән, уларҙың был ысындан да ҙур ҡаҙанышын ҡайһы халыҡ үҙенең ҡайнар ҡанын түгеп тәьмин иткәнлеген онотмаһын ине. Әммә уларҙан рәхмәт һүҙе ишетеү өмөтө юҡ...

Башҡорттоң ҡанлы ҡорбандары арҡаһында ғына был ерҙә төйәкләнеү, идара ҡылыу хоҡуғы алған, һәм әлегәсә бында — Өфөлә суҡайып ултырған, ләкин йөҙө Ҡазанға боролған мөфтиҙән дә игелек көтөүе ҡыйын: ул үҙенең бай иғәнәһен, кисә бындағы телмәрселәрҙең береһе әйткәне хаҡ булһа, туранан-тура Ҡазанға юлландырыуына ла аптырамайыҡ.

Ошо көндәрҙә мин Алматыла ҡаҙаҡ халҡының бөйөк улы Жосопбәк Аймауытовтың тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы булып ҡайттым. Бик күп союздаш республикаларҙан, сит илдәрҙән йыйылғайны ҡунаҡтар. Татарстан күршеләребеҙҙән дә бар ине яҙыусылар вәкиле, баяғы яманатлы Ғаяз Исхаҡиҙың ялалы мәктүбен ташҡа баҫып сығарып, башҡорт халҡының йөҙөн йыртып мәсхәрәләгән «Ҡазан утлары» журналының бүлек мөдире Тәүфиҡ Әйди тигән мөртәт. Шул яһилдың кулуарҙарҙа төрлө республика вәкилдәренә Башҡортостан, башҡорт халҡына ҡарата белдергән ҡәбәхәт «ихтирам»ын ишетеп, Өфөләге былтырғы тантаналарҙа башҡорт халыҡ шағиры Мостай Кәримдең, беренсе секретарыбыҙ Хәбибуллин иптәштең «татар игеҙәк туғандарыбыҙ» хаҡында күпертеп туҡыған ҡыуаныслы вәғәздәрен ытырғанып хәтерләнем.

Баҡтиһәң, «иҫәүән» башҡорт халҡының яҙмышы бында Өфөлә түгел, ә Ҡазанда, кәм тигәндә ниндәйҙер шул Тәүфиҡ Әйдиҙәр тарафынан әйҙәлеп хәл ҡылына икән дә.

Беренсенән, татар халҡының йән иҫәбен улар бөгөндән үк теүәл ун миллионға еткергән (бығаса алты миллиондан ашыу тип белә инек). Ә «игеҙәк туған»дары башҡортто улар биш йөҙ меңгә ҡалдырған да һөҙөмтәлә теүәл бер миллион башҡортто татар итеп иғлан ҡылған һәм үҙҙәренә «ҡушҡан».

Икенсенән, Татарстан АССР-ы сиктәрен улар көнсығышҡа ҡарай Уралғаса киңәйтеп, башҡорттарға Урал артындағы административ өс районда ғына ил ҡороп йәшәргә рөхсәт ҡылғандар. «Бына шунда үҙегеҙҙең боҙоҡ телегеҙҙә һөйләшегеҙ, беҙ бығa ҡаршы түгел», тип, күңел иреткес татар миһырбанлылығын да белдерҙе миңә Тәүфиҡ. «Беҙ — ун миллионлы халыҡ, бергә тупланыр өсөн беҙгә йәшәү киңлеге кәрәк!» тип нигеҙләп тә ҡуйҙы дәғүәһен... Мин ҡан ҡәрҙәш татар халҡын, уның яҙыусыларын хөрмәт итәм, ә шулай ҙа ҡыйын булһа ла әйтәйем: шанлы 1945 йылда үҙ өңө Берлинда муйыны һындырылған биреле бер ефрейторҙың «йәшәү киңлеге» хаҡындағы билдәле

доктринаһын, «драң нах остен» (көнсығышҡа поход) пландарын хәтерләтте был яман ашҡынмыштың дәғүәһе...

Ана шул дәғүәле фронтҡа ҡаршы фронт ҡора алдымы һуң беҙҙең республиканың етәкселек штабы?

Эйе, фронт бар, әммә уның кемгә ҡаршы тороуын аңлау ауыр. Сөнки:

ошоғаса егерме бер көнбайыш райондарыбыҙҙа, башҡорттар күпселек тәшкил итеүгә ҡарамай, ун һигеҙ урыҫ гәзите, егерме бер татар гәзите һәм... бер генә башҡортса (ул да булһа дубляж!) гәзит сығарыла;

фәнни яҡтан әллә ҡасан уҡ дәлилләнеп, тарихи факт булыуға ҡарамаҫтан, башҡорт теленең бер йән, бер тән тәшкил итмеш өсөнсө диалектын — көнбайыш диалектты — милли башҡорт теле тәненән яһил рәүештә ҡырҡып ташлап, уны татар теле итеп иҫәпләүҙәрен, көнбайыш диалект башҡорттарын татар телендә һөйләшә тип раҫлауҙарын һәм шул нигеҙҙә һаман яһил политика үткәреүҙәрен дауам ҡыла ошо үҙебеҙҙең етәксе-аппаратсылар;

фән ҡаҙаныштарын ана шулай танымай, инҡар итеп, беренсе секретарь булып эшләй башлаған йылында уҡ ике йөҙ, ә шунан һуң тағы ла бер нисә йөҙ башҡорт мәктәбен яптырҙы ла татар мәктәптәре итеп астырҙы ошо үҙебеҙҙең үк тәүфиҡлебеҙ Хәбибуллин иптәш;

башҡорт халҡы күпләп Урал артына — Силәбе, Свердловск өлкәләренә ҡасып сығып бөтһөн, Башҡортостан башҡорттарҙан арынһын өсөн бөтә мөмкин булған экономик шарттарҙы ла тыуҙырҙы, тормошҡа ашырҙы етәксе аппарат.

Шулай булғас, биреләнмеш Тәүфиҡ Әйдиҙәр ҡайҙан — бында сығыш яһаусы хөрмәтле делегат Мир Мөхәмәтйәнов ағай әйткән баяғы Ыҡ йылғаһы аръяғынанмы, әллә бирьяғынанмы тороп эш ҡылғанлығын айырыу ифрат ҡыйын...

Бына ниңә кисәге бер оратор, күңелендә партияға ышаныу кризисын кисереп, «Башҡорт компартияһы» төҙөү тураһында һүҙ ҡуҙғалта. Ләкин Хәбибуллин иптәш һәм ул етәкләгән аппарат бөтә КПСС түгеллеген, һәм булмаясағын да белһен ине ул иптәш. Башҡортостанда ленинсы Быкиндар, Иҫәнсуриндар, Афзал Таһировтар компартияһы ла булған. Быны бөгөнгө яҙыусы-коммунистар һәр ваҡытта ла аппараттың күҙенә ҡарап әйтте һәм әйтә, ысын үҙгәртеп ҡороу, билдәлелек, ғәҙеллек, хаҡлыҡ өсөн көрәшен дауам итә. Етмәһә, бына ошо йыйын түрендә ултырған иптәштәрҙең, ғәмәлдә яңы тыуып килгән Башҡорт халыҡ үҙәге «Урал» етәкселәренең дә, байтағы коммунист икәнлеген онотмағыҙ. Коммунистар партияһының ысын милли политика платформаһы беҙгә һөйөклө Башҡортостаныбыҙ, халҡыбыҙ, башҡорт теленең һәм мәҙәниәтенең артабан ҡаҡшамай йәшәүе, сәскә атыуы хаҡына ең һыҙғанып эшләү хоҡуғы бирә. Быны мин һеҙгә үҙем дә коммунист яҙыусы, КПСС ағзаһы булараҡ әйтәм.

Йәнә шуны ла өҫтәйем. Кисәге бер хөрмәтле ораторыбыҙ, артыҡ хисләнеп китеп, буғай, үҙе лә теләмәйенсәлер, туҙға яҙмағаныраҡ һүҙҙәр ҙә ысҡындырғаланы.

Ун һигеҙенсе быуаттағы геноцид тураһында. Уны уҙғарған яуыз урыҫ батшаһы ла, татар мырҙаһы ла юҡ инде хәҙер. Урыҫ халҡы һәм татар халҡы ул палачтар өсөн яуаплы түгел. Ул халыҡтар беҙҙең ут күршеләребеҙ, туғандарыбыҙ.

Америка аборигендарына теләктәшлек белдереүебеҙҙе бер оратор тәҡдим иткән рәүешле яҙып ебәрһәк, бөтә донъя бот сабып көләсәк беҙҙән. Сөнки АҠШ резервацияларындағы индейҙарҙың тормош-көнкүреш хәле беҙҙекенән кәм тигәндә биш тапҡырға яҡшыраҡ. Быйыл Өфөгә килгәнендә СССР халыҡ депутаты, Америкала булып ҡайтҡан Давид Кугультинов үҙе һоҡланып әйтеп китте быны.

Инде йыйын ҡарарына керетергә бер тәҡдим: «Халҡыбыҙҙың ҡоролтайының йәғни ҡоролоуының артабанғы тупланышын һәм ныгынышын өҙлөкһөҙ дауам иттереү өсөн, үҙәгебеҙҙең үҙ матбағаһын — журналын булдырырға. Ул журналды «Ҡоролтай» тип атарға[40]»... -- тамам.

Ҡоролтайыбыҙҙың изге ҡарарҙарын мин, уның Комитет ағзаһы булараҡ, бойомға ашырыу өсөн, күберәген ҡәләмем менән эш итергә кәрәклеген яҡшы аңлағанлыҡтан, яңы йылды ҡаршылағас уҡ, Мәскәүгә тағы хат яҙа һалып ебәрҙем:

Секретарю ЦК КПСС тов. Манаенкову.

1. До сих пор, не смотря на 5 лет перестройки, в СССР неизменно продолжает существовать сталинское разделение наций на три категории:

нации I категории — это союзные республики;

нации II категории — это автономные республики;

нации III категории — это автономные области и округи.

Такая унизительная для любой нации несправедливость нашла себе оправдание даже в Платформе КПСС по национальному вопросу якобы тем, что «различия в форме самоопределения нации отразили ту жизненную реальность, что в период становления Союза народы находились на разных уровнях социально-экономического развития, существенно различались по численности, не все прошли этапы национальной консолидации, имели в прошлом или были готовы создать собственную государственность».

Но, как известно, выше названную «собственную государственность» (Автономный Башкортостан) башкиры имели уже 15 ноября 1917 года, то есть еще до Великой Октябрьской революции и также прежде чем образования самой Советской России. Впоследствии (22 марта 1919 г.) Автономный Башкортостан как государство с его правительством был признан центральной советской властью во главе с Лениным и по обоюдному Соглашению *как федеративная республика* вошла в состав РСФСР. При том государственный статус Автономной Башкирской Советской Республики в сравнении с современными союзными республиками был несравнимо выше, ибо она имела национальную армию. Однако уже в 1920 году правительство РСФСР в одностороннем порядке грубо нарушило Соглашение, отняв суверенитет республики. Таким образом, «статус автономной республики, полученный Башкирией по Соглашению 22 марта 1919 года, при Сталине, Хрущеве и Брежневе превратился лишь в ничего не дающую декларацию, еще точнее — в простую бумажку» (газета «Вечерняя Уфа» от 14 сентября 1989 г.).

В Платформе КПСС по национальному вопросу выше указанный исторический факт полностью проигнорирован — поэтому мы продолжаем числиться нацией II категории.

2. Начиная с кровавого 1937 года и вплоть до наших дней в республике сделано все для того, чтобы Башкирию оставить без башкир — ее коренных жителей. Этот вопиющий факт со всеми его цифровыми данными широко опубликован в печати и известен народу (также ЦК КПСС).

[40] Был тәҡдим бер нисә йылдан һуң бойомға ашырылды — «Ватандаш» исемле журнал сыға башланы.

Поэтому извингите меня за резкость и разрешите спросить: что делает ЦК, Политбюро и Советское правительство для того, чтобы спасать башкирскую нацию от полного исчезновения между тисками двух братских народов — русских и татар?

Кстати, Пятнадцатая Башкирская конференция ВКП(б) в своих резолюциях уже в далеком 1932 году поставил верный диагноз этой межнациональной смертельной болезни («великорусский шовинизм и великодержавническая тенденция татар по отношению к башкирам») и определил метод ее лечения («усиление темпов коренизации совгосаппарата и реализация башязыка»). Что думает по этому поводу уважаемый Секретарь: может быть, наконец-то, пора приступить к исполнению этих резолюций?..

Зигат Султанов, писатель-коммунист. 13 января 1990 г.

(Хәтирәләрҙең тулы тексы Әҫәрҙәремдең VII томында -- интернеттағы сайт <**зигатсултанов.рф**> *-- файлы -- VII том; күсереп алыу -- түләүһеҙ).*

Уҙамандар уҙаманы

С.Ш.Мырҙабулатов

Мин белгәндән әсәйем, олатайҙарым һәм оләсәйҙәрем, ғөмүмән, бөтөн Үҫәргән төбәге аҡһаҡалдары уны шулай тип ололап хәтерләй ине. Йылдар уҙа килә тарих менән ныҡ мауығып, архивтарҙа ярайһы уҡ соҡсонғас, был инсандың бөтөн башҡорт халҡы өсөн уҙамандарҙың уҙаманы булғанлығына инандым.

Сөләймән Шаһингәрәй улы Мырҙабулатов элекке Ырымбур гөбөрнәһенең Орски өйәҙе 1-енсе Үҫәргән ылыҫы (волосы) Абзан-Мырҙабулат ауылында 1890 йылдың 15 апрелендә донъяға килгән. Был датаға айырым иғтибар кәрәк, сөнки ул, заманында минең аша киң матбуғатҡа сығарылһа ла, ҡаһармандың хатта осло ҡәләмле ауылдаштары тарафынан да ниңәлер иҫәпкә алынмай, шулар нәшер иткән “Башҡортса календар”ҙарҙа, улар артынса шулай уҡ “Башҡортостан. Ҡыҫҡаса энциклопедия”ла, яңылыштырылып, “6 октябрҙә тыуған”, “Шәңгәрәй улы” тип яҙылып килде; Башҡортостандың Ҙур Энциклопедияһында ла, датаһы төҙәтелһә лә, “Шәңгәрәй улы” килеш ҡалған. Оло шәхес биографияһында кескәй кәмселектәргә лә юл ҡуйылмауы хәйерле.

Әсәһе Шәрифә инәй

Ул замандарҙа Мырҙабулат ауылынан 18 саҡрымға көньяҡтараҡ Ҡаҫмарт йылға тамағында Һаҡмар буйлап урынлашҡан һәм был яҙманың авторы ла тыуып үҫкән 6-сы Үҫәргән ылыҫы Сәнкем-Биктимер ауылында тирә-яҡҡа даны таралмыш Мөхәммәткамал хәҙрәт Мөхәммәтшаһ улы Дәүләтшин (1912 йылда вафат) ахундың мәҙрәсәләре була (айырым башҡорт һәм ҡаҙаҡ), Сөләймән шул мәҙрәсәлә тәүге белемен ала; башҡорттоң да, ҡаҙаҡтың да буласаҡ зыялылары менән бергә ҡайнаша (был иһә уға революция йылдарында Башҡортостан көньяғының рухи юлбашсыһына әйләнергә ярҙам итә). Заманында бында танылған башҡорт шағирҙары Әбүлмәних Ҡарғалы (1782 — 1833), Һибәтулла Сәлихов (1794 — 1869) үҙҙәренең туған-тыумасаларына килеп йөрөгән, төбәктең рухи мөхитенә шағирәнә тәьҫирҙәрен һалған. Һибәтулла Сәлиховтың Сөләймән менән бергә уҡыған ейәне Ғәбдел-Әхәт Мөхәммәт-Садиҡ улы Сәйетбатталов та һуңынан, Сөләймән һымаҡ уҡ, фиҙакәр большевикка әйләнеп, 1918 йылда ошо Сәнкем-Биктимерҙә С.Ш.Мырҙабулатовтың рухи тәьҫирендә төҙөлгән көньяҡ Башҡортостан ҡыҙыл гвардияһының командиры һәм аҡтар ҡамауында ҡалмыш Орск ҡала оборонаһы башлығы булып китә, ә һуңынан Башҡортостан совет автономияһына аяҡ салыусы урыҫ һәм татар шовинистарына (шәмиғоловсыларға) ҡаршы фиҙакәр көрәшә (ул 1921 йылдың 6 февралендә Эстәрлетамаҡта Башглавмилиция башлығы вазифаһында вафат. — ЦГИА Р.Б., ф. Р-1252, оп. 2, д. 23, л. 2). Әйткәндәй, ахун Мөхәммәткамал Дәүләтшиндың иртә үлгән улы Фатих мулла, үҙенең ырыуҙашы юрист Юныс Юлбарыҫ улы Бикбов кеүек үк, Башҡортостан автономияһын һәм уның Хөкүмәтен ойоштороусыларҙың береһе була һәм Хөкүмәттең Финанс комитетын етәкләй; һәм шул уҡ ахун хәҙрәттең “Ҡөрьәнелхафиз” (Ҡөрьәнде яттан белеүсе) ләҡәбен алған ейәне Ғөбәйҙулла Тажи улы Ураҙов иһә баяғы ҡыҙыл гвардияның ҡыйыу рухлы большевигы сифатында граждандар

һуғышында, М.Мортазин бригадаһының полк комиссары рәүешендә советтарҙың Польша фронтында батырлыҡтар күрһәтеп, 1920 йылда (Ә.Вәлидов хөкүмәте таралғас) Башҡорт Ваҡытлы Революцион Комитетының (БВРК) секретары булараҡ билдәле. Ә был ҡыҙыл гвардиясылар бөтәһе лә С.Ш.Мырҙабулатов-большевикты үҙҙәренең рухи тәрбиәсеһе, етәксеһе итеп таныҡлай. Н.Р.Бикбаевтың “Два периода контрреволюционной валидовщины, 1917 — 1920 г.г.” тигән ҡулъяҙма хеҙмәтенә теркәлмеш Хәмзә Мусаев (Яңы-Ғафар ауылынан башҡорт, шул әтрәт һуғышсыһы, 30-ынсы йылдарҙа Өфөләге Ҡыҙыл профессура вузы ректоры) рецензияһынан күренеүенсә, бындай ҡыҙыл гвардия әтрәттәре ул саҡта Башҡортостандың өс төбәгендә генә төҙөлгән: “Белоретта эшселәрҙән А.В. Пирожников иптәш командалығындағы ҡыҙыл партизан полкы... Тамъян-Ҡатай ылыҫы үҙәге Сермәндә — башҡорттарҙан Дауытов Шәйәхмәт етәкселегендәге ҡыҙыл партизан әтрәте... һәм йәнә 1918 йыл башында хәҙерге Йәнсура[41] районында (Үсәргән кантоны) Яңы-Ғафар (аҙаҡ татарға әйләндерелгән боронғо башҡорт ауылы — заманында беҙҙең Сәнкем-Биктимерҙән күсенеп ултырғандар. — Й.С.), Сәнкем-Биктимер, Һунарсы һәм Ырыҫҡол ауылдарында башҡорт Әхәт (Ғәбдел-Әхәт. — Й.С.) Сәйетбатталов етәкселегендәге һәм Жултый разъезы башлығы большевик Расщепкин иптәш ярҙамында башҡорт һәм татарҙарҙан ҙур ҡыҙыл партизан әтрәте ойошторолдо, һуңынан ул Орск атлы һәм йәйәүле ҡаһарман ҡыҙыл гвардия полктарының нигеҙен тәшкил итте”. Күренеүенсә, бында Сөләймән Мырҙабулатовтың исеме телгә алынмай, сөнки Бикбаевтың хеҙмәте яҙылған утыҙынсы йылдарҙа С.Ш. Мырҙабулатов күптән үк инде “Солтанғәлиевсы-яуыз милләтсе” рәүешендә Мәскәү Лубянка төрмәһендә ВОГПУ (һуңынан НКВД һәм КГБ) тарафынан язалап үлтерелгән, исеме тыйылған була. Минең яҡын ағайҙарым, олатайҙарымдың бөтәһе лә шул ҡыҙыл партизан әтрәте яугирҙәре булып, Ғәбдел-Әхәт Мөхәммәт-Садиҡ улы Сәйет-Батталовты — үҙҙәренең ҡыҙыл ғәскәри командиры, ә Сөләймән Шаһингәрәй улы Мырҙабулатовты рухи юлбашсыһы итеп таныйҙар ине...

Сәнкем-Биктимерҙә Мөхәммәткамал хәҙрәт мәҙрәсәһен тамамлағас, С.Ш.Мырҙабулатов йәне һөйгән уҡытыусылыҡ эшенә мөкиббән бирелә, Башҡортостан ауылдарында, Ҡаҙаҡстан далаларында уҡыта. Батша хөкүмәте урыҫ уҡытыусыларын хәрби хеҙмәттән азат итһә лә, был ҡанун мосолман мөғәллимдәренә тәтемәгәнлектән (геноцидтың бер төрө), 1913 йылда уҙаманыбыҙ һалдат итеп алына ла 1917 йылдың аҙаҡтарынаса империалистик һуғыштың ҡанлы окоптарында ҡала. Шуның менән уның педагоглыҡ хыялы емерелә, мөғәллим булаһы урында шинель кейгән сәйәсмәнгә — инҡилапсыға әйләнә. Ҡанлы герман һуғышының үлемесле окоп һабаҡтарын баштан ашҡансы алып, үҙенән-үҙе сәйәсәткә ылығып, 1916 йылда уҡ ул үҙен большевик һанай (партияға рәсми теркәлеше 1918 йылда), фронттағы һалдат массалары араһында Бөйөк Октябрь революцияһын әҙерләүҙә әүҙем ҡатнаша. Шул маҡсат менән 1917 йыл аҙағында Көнбайыш фронттың бер төркөм большевиктары Рәсәй баш ҡалаһы Петроградҡа йүнәлтелеп, Смольныйҙағы “революция штабы”нан артабанғы сәйәси эш йөкләмәләре алып, Мәскәү аша үҙ яҡтарына — тәрән тылға оҙатыла. Шул иҫәптән С.Ш.Мырҙабулатов Ырымбур ҡалаһына ҡайтып, урындағы большевиктар менән тығыҙ элемтәгә керә лә мосолмандар араһында большевизм идеяларын тарата башлай, фронтта саҡта уҡ

[41] Йәнсура — 1934 йылда Ырымбур өлкәһенә “ҡырҡып” ҡалдырылған район һәм район үҙәге исеме. Урыҫтарҙа — “Зиянчура” тип, ә хәҙерге Башҡортостан рәсми органдары, шуларға эйәреп, “Ейәнсура” тип ҡабул ҡылһа ла, ғәмәлдә ул шәжәрәләге тарихи шәхес Йәнсура бабабыҙҙың исеменән килә һәм ерле халыҡ телендә лә Йәнсура булып ҡала — автор ҙа шулай яҙа.

тырышып үҙе әҙерләшкән Октябрь түңкәрелешен шунда ҡаршылай. Сөләймәндең үҙенең дә, уның өгөт-нәсихәтен йотлоғоп тыңлаған яҡташтарының да күңеленә большевизм төшөнсәһе иң беренсе нәүбәттә шул партияның программаһында йән арбаҡыс сағылған, ә һуңынан Иосиф Джугашвили (Сталин) ҡулынан аҡ ҡағыҙға яҙылып, Ленин менән икеһе бергә ҡул ҡуйған "Рәсәй халыҡтарының хоҡуҡтары Декларацияһы" рәүешендә йөрәктәрҙе елкеткес үтеп инә:

"...Ошо йылдың июнендә Советтарҙың 1-се йыйыны Рәсәй халыҡтарының ирекле үҙ билдәләнешенә хоҡуғын иғлан ҡылды.

Ошо йылдың октябрендә Советтарҙың 2-се йыйыны Рәсәй халыҡтарының был тартып алынғыһыҙ хоҡуғын уғата теүәллеклерәк һәм тәғәйенерәк дөрөҫләне.

Шул йыйындарҙың ихтыярын бойомға ашырып, Халыҡ Комиссарҙары Советы Рәсәй милләттәре мәсьәләһе буйынса үҙенең эшмәкәрлек нигеҙенә түбәндәге башланғыстарҙы һалырға ҡарар итте:

1. Рәсәй халыҡтарының тиңлеге һәм суверенлығы.

2. Рәсәй халыҡтарының айырылып сығыуға һәм үҙ аллы дәүләт төҙөүгә тиклем ирекле үҙ билдәләнешкә хоҡуғы.

3. Бөтә һәм теләһә ниндәй милли һәм милли-дини өҫтөнлөктәрҙе һәм сикләүҙәрҙе ғәмәлдән сығарырға.

4. Рәсәй территорияһында йәшәгән милли аҙсылыҡ һәм этнографик төркөмдәрҙең ирекле үҫеше...

Республика исеменән Рәсәйҙең милли эштәр буйынса Халыҡ Комиссары: ***Иосиф Джугашвили (Сталин).***

Халыҡ Комиссарҙары Советы Рәйесе: ***В. Ульянов (Ленин)".***

Фронттан фиҙакәр коммунист булып ҡайтҡан Сөләймән Мырҙабулатов үҙенең партиялаштарының был декларациялағы ике йөҙлөлөгө хаҡында шәйләмәй әле, милли мәсьәләлә Ленин партияһының халыҡтарға азатлыҡ, ирекле үҙ билдәләнеш хоҡуғы биреүенә мөкиббән ышана һәм ғорурлана, һөйөклө Башҡортостанын бойондороҡһоҙ социалистик дәүләт итеп ҡорорға хыяллана. Уның алданыраҡ ҡайтып өлгөргән окопташы Ғәлиәхмәт Айытбаев был ваҡытта Ырымбурҙа Башҡорт Ҡоролтайы тарафынан раҫланмыш Башҡорт Йөмһүриәтенең 22 инсандан хасил предпарламент (ваҡытлы хөкүмәт) ағзаһы булып өлгөргән (ер эштәре буйынса), Шәриф Манатов етәкселек иткән (урынбаҫары — Әхмәтзәки Вәлидов) хөкүмәт идараһына Сөләймән Мырҙабулатов та ингеләп йөрөй, ҡайһы бер көндәлек әңгәмәләрҙә милләт, ер, милли үҙ билдәләнеш тураһында ҡыҙыу фекер алыша. Бөтә донъя революцияһын дөрләтеү юлы менән Ер шарында пролетариат диктатураһын урынлаштырыуҙы маҡсат итеп ҡуйған ленинсы-большевиктарҙың донъя-ғаләм тотҡаһы итеп *ярлыларҙы ғына* иғлан ҡылыуы Рәсәйҙең Сөләймәндәй ябай-ялпы күпселегенең күңел ҡылдарына сиртеп, уларҙы байҙарға ҡаршы аяҡландырған һәм синфи дошманлыҡ тәрбиәләгән ҡырҡыу дәүерҙә, моғайын, Шәриф Манатовтың, Әхмәтзәки Вәлидовтың, башҡорт йәмғиәтендә, большевиктар өйрәткәнсә, синфи ҡаршылыҡты, юҡтан булһа ла, эҙләп табып үҫтереү һәм һәр ерҙә синфи көрәш дөрләтәһе урында, "башҡортта бер генә синыф бар — башҡорт милләте" тип, синфи көрәштә үҙҙәренә таянсыҡҡа иң түбәндән фәҡир-фоҡор ҡатламы ғына эҙләп маташмауҙары, ә, байғуралар ҡатламы тип тартынмай, дәүләт төҙөү эшендә милләттең Урал тау түбәләреләй өҫкә сурайған иң өлгөр һәм булдыҡлыларына

(йәғни “бай һәм кулак”тарына) таяныуҙары С.Ш.Мырҙабулатов һымаҡ окоптарҙа дары төтөнөнән ыҫланып һәм Ленин һүҙҙәренән таҫланып ҡайтҡан “фронт большевиктары”на үтә лә яманһыу һәм ятбауыр тойолғандыр… Һәр хәлдә, уҙаманыбыҙ, үҙе мөкиббән бирелгән коммунистар партияһының программаһына ярашлы, ерҙе миллиләштереү һәм ярлыларға бер тигеҙ итеп бүлеп биреү яғында тора, ә вәлидовсылар иһә ҡәҙимге йәмәғәти (община) һәм хосуси милекселекте һаҡлап ҡалыу яғында...

Икеһе тиң бер үк Ырымбурҙа, бер үк осорҙа сәйәсәт йөрөтһәләр ҙә, сәйәсәттең икеһе ике ҡаҙанында ҡайнағанлыҡтан, башҡорт милли хәрәкәтенең юлбашсыһы менән уның араһында яҡын танышлыҡ булмай әле: Әхмәтзәки Вәлидов уға, һуңынан С.Мырҙабулатовтың үҙенең хәтерләүенсә, әллә ни иғтибар ҙа итмәй шикелле, сөнки уны саф башҡорт рухлы “революционер тип һанамай”. Сөнки, “Ярлы ыҙмаларға — тыныслыҡ!”, “Ер — уны эшкәртеүселәргә бирелһен!”, “Халыҡтарға — ирекле үҙ билдәләнеш хоҡуғы!” кеүек гүзәл шиғарҙарға (лозунгыларға) төрөнөп, шул хис менән фронттан ашҡынып ҡайтмыш Сөләймән Мырҙабулатов, Муса Мортазин, Харис Йомағолов, Таһир Имаҡов һымаҡ фиҙакәр большевиктар Башҡортостан үҙ билдәләнешен “Рәсәй-әсәй” Советтар хакимиәтенең үҙ йылы ҡулынан — Үҙәк (Мәскәү) менән туғандарса аңлашып-килешеп кенә ҡороп алырға эскерһеҙ ышана, шул юлда ең һыҙғанып көрәшә, сөнки улар тәү мәлдәрҙә төҫөн генә ҡыҙылға үҙгәрткән шул уҡ “Рәсәй-үгәй әсәй” империяһы ҡулындағы уйынсыҡ-курсаҡ булып хеҙмәт иткәнлектәрен йәки итәсәктәрен белмәй (тора-бара ауыҙҙары бешкәс кенә төшөнә). Һәр хәлдә, С.Ш.Мырҙабулатов шул ваҡытта уҡ коммунистик идеологияға һуҡыр инаныусы булмай, ахыры, сөнки, үҙе үк хәтерләүенсә, 1918 йылда Көньяҡ Урал большевиктарының атаҡлы башлыҡтары С.М.Цвиллингка, П.А.Кобозевҡа Орск өйәҙендә ҡыҙыл гвардия әтрәте төҙөү барышындағы милли мәсьәләлә ебәргән “хаталарын” (Баймаҡтағы Мағазов әтрәтен атыуҙарын) күҙҙәренә төртөп әйтә. Былар менән шулай тиң һөйләшкәс, әлбиттә, Мырҙабулатовтың абруйы ҙур булған.

Ырымбурҙа аҡ казак Дутов диктатураһы ҡарпығандан һуң сәйәси хәлдәр хөртәйеп, шуға тырышып хеҙмәт ҡылған татар Мосолман хәрби комитеты, Ырымбурға дөрөп килеүсе ҡыҙыл ғәскәрҙәргә ҡаршы тороу өсөн, мосолмандар араһында дөйөм мобилизация иғлан ҡылып, 1200 һалдатлыҡ полк төҙөгәс, Дутов хакимиәтендәге ҡалалағы большевиктарға һәм шулар яҡлыларға ысын һунар башлана. С.Ш.Мырҙабулатов, аҡ террорҙан йәшеренеп, үҙенең тыуған өйәҙ үҙәге Орск ҡалаһына күсә, ундағы тәүге большевиктар Степан Андреевич Долгоруков, Аркадий Николаевич Малышевский менән тығыҙ бәйләнешеп, Орск өйәҙенең компартия ойошмаһын башлап төҙөүҙә һәм 1918 йылдың 1 апрелендә тәүге ойоштороу йыйылышын үткәрешеүҙә әүҙем ҡатнаша. Һөҙөмтәлә аҡтар тылында РКП(б)-ның Орск комитеты донъяға тыуып, 1-се номерлы партия билете (архивта һаҡланған) ялҡынлы революционер С.Ш.Мырҙабулатовҡа хөрмәтләп тапшырыла. Ошонан һуң яҡташтары араһында “беренсе номерлы большевик” тип танылған уҙаман, өйәҙ буйынса артабан ниҙәр эшләргә иптәштәре менән һүҙ ҡуйышып, партияға башҡорттарҙы күберәк йәлеп итеү өсөн, тыуған ауылы Мырҙабулатҡа[42] ҡайта, бөтә Үҫәргән кантонына сәйәси эшмәкәрлеген йәйелдерә. Дары төтөнөнә ыҫланып ҡайтҡан һалдаттарҙы һәм ялҡын йөрәкле теләктәш йәштәрҙе әүҙем большевиклаштырырға керешә. Һөҙөмтәлә шул кешеләрҙән әле өҫтәрәк әйтелгән, командиры Ғәбдел-Әхәт Сәйетбатталов булған ҡыҙыл ғәскәр туплана, ул иһә

[42] Хәҙерге Абзанға.

артабан Орскиҙағы баяғы атлы һәм йәйәүле ҡыҙыл гвардия полктарының йәҙрәһен тәшкил итә. Шул уҡ ваҡытта Ырымбурҙағы Каруанһарайҙа урынлашҡан, тәүге мәлдәрҙә большевиктарҙың Советтар хакимиәтен таныған һәм аҙаҡ килеп Дутов менән дә уртаҡ тел таба алған Башҡорт Хөкүмәте лә кантондарҙа үҙенең ғәскәрҙәрен ырата, Ырымбур большевиктарының йөрәгенә шом һала. Башҡортостан автономияһына ҡаршы айырыуса үсләнеп йоҙроҡ төйнәгән, башында Самуил Цвиллинг торған Ырымбур большевиктары, ерле милли азатлыҡ даулаусы башҡорттарҙы күрә алмаç татар шовинистарын һәм уларға эйәрмеш Ғ.Шәмиғолов, Б.Нуриманов, Б.Шәфиев кеүек “башҡорт” ялағайҙарын үҙ сәйәсәттәрендә мәкерле файҙаланып, 1918 йылдың иҫке стиль менән 4 февралендә Башҡорт Хөкүмәтенең күренекле ағзаларын, шул иҫәптән Әхмәтзәки Вәлидовты, төрмәгә яптырта. Уларҙы үҙҙәренең Өлкә Шураһына (Советына) һайлап ебәргән башҡорт халҡының күҙен буяп аймылыш ҡылыр өсөн, “тулыһынса советтар нигеҙендәге” ҡурсаҡ автономия хөкүмәте – Башҡортостандың Ваҡытлы Революцион Советы (БВРС) әтмәләнә, бына уның етәкселек даирәһе: Ғәли Шәмиғолов (башҡорт битлеге кейгән татар, сәйәси һөнәре буйынса Башҡортостан автономияһының дошманы), Ғабдулла Дәүләтшин (А.Дәүләт, башҡорт казагы), Фәйзрахман Солтанбәков (татар), Ҡыҙрас Юлмөхәммәтов (башҡорт), Бәхтегәрәй Шәфиев (мишәрҙән әүерелмеш башҡорт), Ғариф Алпаров (татар), Хәйретдин Ильясов (башҡорт), Ж.Шәрипов (башҡорт), Сәғдислам Таһиров (татар), мәшһүр йырсы Ғәзиз Әлмөхәммәтов (башҡорт) һәм журналист Вәлирахман Ғәбитов (башҡорт). Һуңғы икеһе, күп тә үтмәй, яңы “хөкүмәт”тең асылына төшөнөп, буғай, БВРС-та эшләүҙән йәһәт тайшана — Әхмәтзәки Вәлидовсылар яғына сығып китә... БВРС-та иң юғары етәкселек вазифалары ошо рәүешле бүленә: Ғ.Дәүләтшин — БВРС рәйесе, Б.Шәфиев — уның урынбаçары, Ғ.Алпаров менән Ж.Шәрипов беренсе һәм икенсе сәркәтиптәре була. Ошо етәкселек БВРС президиумын да тәшкил итә. Шуныһы ла фәһемле: 1918 йылдың ғинуар аҙаҡтарында Өфө өйәҙенең башҡорттары йыйынында шул өйәҙ шураһы рәйесе Баһау Нуриманов (Башҡортостан автономияһына аяҡ салыусы бәндә, Ғәли Шәмиғоловтың ялағайы) үҙенең дорфалығы, ҡылған эштәренә ил алдында хисап биреүҙән баш тартҡаны өсөн рәйеслектән бушатылғас (“Тормош” гәзитенең 1918 йыл 28 ғинуарҙағы 807-се һаны), сәйәси остазы Ғ.Шәмиғолов тәкдиме буйынса уны, БВРС-та эшләргә тип, Ырымбурға саҡырып килтерәләр. “Ләкин Нуриманов Ырымбурға килгәндән һуң, БВРС-тан бөтә юл сығымдарын һәм подъемныйҙарын ала тороп та, шул үҙе алған аҡсаларын аҡлар өсөн генә булһа ла, БВРС-та бер генә көн дә, хатта бер генә сәғәт тә эшләмәне... — тип әсенә һуңынан Ғ.Дәүләтшин (уның ҡарауы, Башҡортостандың ысын автономияһына ҡаршы тырышып эшләй). Шәмиғолов үҙе лә был уйынсыҡ “хөкүмәт”тә, рәсми яҡтан ағза булып торһа ла, эшкә тигәндә хатта ҡыл да ҡыбырлатмай, сөнки... Ғ.Шәмиғолов менән Б.Нуримановтарҙың, ғөмүмән, Башҡортостан үҙ аллылығының (ул хатта советтар ерлегендә төҙөлһә лә!) яуыз дошмандары булыуҙарын эш үткәс, һуңлап ҡына аңлағанына үкенеп, Ғ.Дәүләтшин фекерен ошолай дауамлай. — Ғәмәлдә партияға ҡаршы, Ленинға ҡаршы һәм советтарға ҡаршы (?.. – Й.С.) был *татарҙарҙан* хасил ваҡ буржуаз авантюрасы төркөмдөң башында билдәле авантюрист Шәмиғолов һәм уның ярҙамсыһы Баһау Нуриманов торҙо, ярлы башҡорт халҡына улар күпме бәхетһеҙлек, ҡан һәм күҙ йәштәре килтерҙе”...

Уйынсыҡ хөкүмәт БВРС-ҡа күҙҙәре ҡыҙып алданыусылар араһында С.Мырҙабулатовтың телгә алынған окопташ-арҡадашы, Ә. Вәлидов менән бергә төрмәгә ябылып сыҡҡан Башҡорт Хөкүмәте ағзаһы Ғәлиәхмәт Айытбаев, Мырҙабулатовтың

студент яҡташы Усман Ҡыуатов, билдәле “милләтсе” Таһир Имаҡов һәм ғәййәр большевик Муса Мортазин да бар ине: 1918 йылдың мартында улар ҙа ҡапыл ғына БВРС ағзалары булып ала. Шуға тиклем Т.Имаҡов менән М.Мортазиндың Ҡазанда 1918 йылдың февралендә йыйылған 2-се бөтә Рәсәй мосолман һалдаттары йыйынында башҡорттарҙан делегат булып ҡатнашыуы, шундағы Имаҡов етәкләгән һәм ун кешенән торған башҡорт фракцияһында Башҡортостан ерле милли автономияһы өсөн ҡырҡыу көрәшкәнлектәре билдәле. Мәҫәлән, татарҙарҙың “татар-башҡорт — бер милләт ул, шуға күрә айырым башҡорт автономияһы кәрәкмәй, ә берлектәге Иҙел — Урал штаты төҙөргә кәрәк”, тип дөрөүҙәренән бер тамсы ла ҡаҡшамаусы башҡорт Т.Ғ.Имаҡов, бөтә йыйын ҡолағына һеңдереп: “Башҡорттар — үҙҙәре айырым бер милләт. Уларҙың үҙ ғөрөф-ғәҙәттәре, мәҙәниәте, сәнғәте һәм башҡа үҙенсәлектәре бар”, — тип дәлилләп, йәтеш тәҡдим дә керетә: татарҙар әйткән ундай штат төҙөлә ҡалһа, “иң башта Башҡортостан штатын раҫларға, ә шунан һуң шул Башҡортостан штатына Ҡазанды килтереп ҡушырға”...

Тап ошо көндәрҙә Каруанһарайҙағы вәлидовсыларҙың ҡулға алыныуы йыйынға мәғлүм булғас, башҡорт фракцияһының тәҡдиме буйынса, ҡулға алыу ваҡиғаһын тикшереү өсөн Ырымбурға ебәрергә тип, Таһир Имаҡов, Муса Мортазин, Мөхәммәтхан Ҡулаев, Усман Ҡыуатовтарҙан торған делегация билдәләнә. Әгәр улар Ырымбур большевиктарының яуыз акцияһын нахаҡ ҡылыҡ тип тапһа, ваҡиға бөтә Рәсәй күләмендә киҫкен шауҡымланып шаулар, Цвиллинг етәкселегендәге Ырымбур большевиктары Башҡорт Хөкүмәте ағзаларын, ғәфү үтенеп, тотҡонлоҡтан бушатыр, һөҙөмтәлә башҡорт милли хәрәкәте лә ҡырҡа боролош яһамаҫ — асыҡтан-асыҡ советтарға ҡаршы китмәҫ кеүек ине. Әммә, күктән таш яуғандай, Каруанһарай тәңгәлендә көтмәгәндә пәйҙә булған баяғы Ҡазан делегацияһына Ырымбур большевик етәкселеге тарафынан үҙҙәренең сәйәси уйынсығы БВРС аша ультиматум ҡуйыла: Ҡазандан килгән делегация ындағы вәлидовсыларҙы ҡулға алыуҙың һәм улар урынына яңы иғлан ҡылынған БВРС-тың ҡанунилығын дүрт сәғәт эсендә рәсми танырға тейеш, юғиһә...

Ҡыҫҡаһы, Ырымбур етәкселеге тарафынан үҙ кешеләрен өҫтәп керетеп “киңәйтелгән” тикшереү комиссияһында күшеккән тауыҡтарҙай мәсхәрәле аҙсылыҡта тороп ҡалған Ҡазан делегацияһы Зәки Вәлидов хөкүмәтен тыйырға һәм уның урынына БВРС-ты танырға ризалыҡ бирә лә... шуның хаҡына икеһе (Т.Ғ.Имаҡов, М.Л.Мортазин) БВРС ағзалары итеп үткәрелә һәм, үҙҙәре теләйме-теләмәйме, шәмиғолов-шәфиевсыларҙың шаҡшы сәйәси арбаһына мисәүләнә... Эйе, улар, моғайын, фронттан ҡайтҡан “үтә ҡыҙыл” большевиктар булараҡ, буржуаз автономияға ҡаршы, совет автономияһы яҡлы. Сөнки совет автономияһын юллау ышаныслыраҡ, хәүефһеҙерәк — РСДРП(б)-ның программаһына милләттәрҙең ирекле үҙ билдәләнешкә хоҡуғы ап-асыҡ яҙылған бит (уның да ябай алдаҡсыҡ ҡына икәнлеген был башҡорт уҙамандары әлегә белмәй)... Һәм бына өс ай үтер-үтмәҫтән БВРС тигән ҡурсаҡ автономия уны төҙөп уйнатыусы Ырымбур большевиктары тарафынан уҡ сүплеккә ырғытыла:

“1918 йылдың 30 мартында киске сәғәт 10-да Эшсе, Крәҫтиән һәм Казак депутаттары Советының Цвиллинг рәйеслегендәге ултырышының 3-сө һанлы протоколонынан күсермә.

Тыңланыҡ:

2. Революцион Автономиялы Башҡортостандың (йәғни ҡурсаҡ БВРС-тың. – Й.С.) Мосолман хәрби-революцион комитеты (татар шовинистарының ойошмаһы. – Й.С.) менән дәғүәләшеүе.

Ҡарар ҡылдыҡ:

Урыҫ революцияһының социаль тәбиғәте төрлө халыҡтар һәм милләттәр араһындағы ерле сиктәрҙе емереүен иҫәпкә алып, башҡорт хеҙмәтсән массалары аңының сиктән тыш түбән кимәлдә булыуы һәм башҡорт халҡы араһында синфи көрәштең булмауы сәбәпле, Гөбөрнә башҡарма комитеты федератив ерле-милли татар-башҡорт республикаһын төҙөүҙе революция мәнфәғәттәре өсөн *зыянлы* тип таный[43]. Шул сәбәпле Гөбөрнә башҡарма комитеты милләттәр эше буйынса комиссарға (Ғ.Шәмиғоловҡа. — Й.С.) бер үк ғәмәлдә Мосолман революцион комитетты ла, Автономиялы Башҡортостан Ваҡытлы Революцион Советын да *кисекмәҫтән таратырга* һәм улар урынына Мосолман эштәре буйынса Гөбөрнә комиссариаты ойоштороп, унда Башҡортостан эштәре буйынса өс кешелек коллегия билдәләргә, был коллегия составын раҫлауҙы Гөбөрнә башҡарма комитетына тапшырырға бойора" (ЦГАОО Р.Б., ф. 9776, оп. 2, д. 393, л. 78).

Ошо ҡарар нигеҙендә бер юлы Ырымбур гөбөрнәһенең дә, Башҡортостандың да барлыҡ башҡорт һәм татарҙары өҫтөнән идара ҡылыусы Ырымбур Гөбөрнә башҡарма комитетының Мосолман эштәре буйынса комиссары булып алған элекке татар байҙары кибетендә аршинлап ситса һатыусы приказчик Ғәли Шәмиғолов башҡорттарға ҡарата үткәрелгән был мәкерле сәйәсәттең асылын аса төшә: "Ырымбур советтар ҡулына күскәс, улар (советтар), Башҡортостан Хөкүмәтенең (йәғни вәлидовсыларҙың. — Й.С.) насар эшен күреп, Башҡортостандың Ваҡытлы Революцион Советын ойошторҙо, ләкин был Совет шул уҡ элекке автономиялы Башҡортостан хөкүмәте эҙенән китте һәм, башҡорт демократияһының (йәғни Башҡортостан автономияһы дошмандары Ғ.Шәмиғолов, Б.Нуриманов һәм башҡаларҙың. — Й.С.) талаптарын бойомға ашырыу, башҡа милләттәр демократияһы (йәғни Башҡортостан автономияһын күрә алмаусы урыҫ һәм татар шовинистары. — Й.С.) менән килешеү һәм яҡынайыу өлкәһендә уңышлы эшләү урынына, Башҡортостандың дәүләт сиктәрен һыҙып билдәләү менән шөғөлләнделәр (былары ла шовинистар ҡулындағы уйынсыҡ ҡына булып ҡалырға теләмәгәндәр, күрәһең. -- Й.С.)...

Советтарҙың Гөбөрнә башҡарма комитеты әгәр ҙә был Башҡортостан Советының эшен дауам иттерткән сүрәттә, ниндәй ҡурҡыныс янағанын һәм уларҙың дутовсылар (йәғни вәлидовсылар. — Й.С.) менән берлектә контрреволюция әҙерләүен алдан күреп, бөтә Ырымбур гөбөрнәһе буйынса Башҡортостан Советын (БВРС-ты) юҡ итергә лә уның бөтә эштәрен һәм мөлкәттәрен Ырымбур гөбөрнәһенең Милләттәр эштәре буйынса Гөбөрнә комиссариатына[44] тапшырырға ҡарар ҡылды.

---

[43] Ошо уҡ шовинистик фекер Орск өйәҙендәге Йылайыр урыҫтарының, Башҡортостан автономияһына ҡаршы көрәшеү өсөн, Ырымбурға итәғәтле "Преображенский Урыҫ Өйәҙе" һәм "Преображенский әтрәте" төҙөлөүен иғлан ҡылған 1918 йыл 20 февраль "крәҫтиәндәр йыйыны" ҡарарына керетелә: "1) Октябрь революцияһы яулауҙарын, 2) башҡорттарҙың культураһы түбәнлеген,... 5) башҡорттарҙың ерле үҙ аллылыҡ уйынын иғтибарға алып, йыйын кире ҡаҡҡыһыҙ рәүештә Башҡортостандың ерле автономияһына ҡаршы сыға, шул уҡ ваҡытта башҡорттарҙың тулыһынса мәҙәни үҙ билдәләнешен һүҙһеҙ таный" (ЦГАОО Р.Б., ф. 1832, оп. 4, д. 300, л. 5). Ергә табаның теймәһен, күктәге хоҙайҙарыңа — мәҙәниәтеңә генә йәбешеп йәшәргә иреклеһең, тимәк...

[44] Йәғни Ғ. Шәмиғолов ҡулына.

Ырымбур гөбөрнәһенең Милләттәр эштәре буйынса Гөбөрнә комиссары: **Шәмиғолов**" ("Известия Оренбургского Ревкома" гәзитенең 1918 йыл 21 апрель 58-се һаны, 3-сө бит).

Тап шул осорҙа Сөләймән Мырҙабулатовтың тәғәйен ҡайһы автономия яҡлы булыуы, ҡатнашлығы асыҡ ҡына билдәле түгел, сөнки уны, Ленин-Сталин репрессияларының Башҡортостандағы буласаҡ беренсе ҡорбанын, ҡыҙыл хакимиәтебеҙ егерменсе йылдарҙан уҡ эҙәрлекләй башлаған һәм, ниһәйәт, 1930 йылда алып китеп яуыздарса юҡ итәндән һуң, уның менән ҡыҙыҡһыныу хәтәрләнә, шуға күрә уны белгән кешеләр ҙә белмәмешкә һалыша, белгәндә лә, һаҡлыҡ өсөн, рәсми хакимиәт үҙе ҡушҡанса, баштан-аяҡ "дошман" итеп тамғалай — ошо арҡала мәғлүмәттәр юйыла. Шулай ҙа репрессияларға тиклем яҙылған ҡайһы бер сығанаҡтарҙан күренеүенсә, С.Мырҙабулатов үҙ ауылында балалар уҡыта башлаған ул болғансыҡ осорҙа ла "ҡыҙыл большевик" көйөнсә ҡалып, Үҫәргәндең бөтә алты ылыҫында ла большевик түңәрәктәре ойошторған, улар дәррәү эшләгән. Иң ҡыҙығы, 1918 йылда Башҡортостан тупрағы аҡтар ҡулына ҡалып, Башҡортостанда "большевизмдың хас дошманы" Әхмәтзәки Вәлидов хөкүмәте идара ҡылған заманда ла Үҫәргәндәге был большевик усағы ләүкеп-дөрләүҙән туҡталмаған. Ә бит Сөләймән һымаҡ фронттан большевиклашып ҡайтҡан башҡорттарҙы Башҡорт Хөкүмәте эҙәрлекләргә тотона. Хөкүмәт ағзаһы, "Башҡорт тауышы" гәзитенең (3-сө һаны, 1918 йыл) мөхәррире Хәбибулла Ғәбитов был хаҡта бына нимә белдергән: "Беҙ, Башҡорт Хөкүмәте эшмәкәрҙәре, осрашып, эшләгән эштәребеҙҙән хисап бирҙек, кәңәштәребеҙ һәм шатлыҡтарыбыҙҙы уртаҡлаштыҡ... Ҡарамышев әйтә, фронттан ҡайтҡан башҡорт һалдаттары халыҡты болғата башланы, ти. Большевизм менән зарарланған был ағымдар, төркөмдәр менән көрәшеү өсөн киҫкен саралар күреү кәрәк. Әгәр ошо мөҙҙәтте ысҡындырһаҡ, теләһә ниндәй ваҡиғалар килеп сығыуы ихтимал (дөрөҫ һиҙемләй: тап шундай большевиктарҙан торған альтернативлы БВРС — ялған хөкүмәт төҙөлә бит. — Й.С.). Беҙҙең беренсе бурыс шунан ғибәрәт: ялан хөкөмдәре аша был "халыҡты талаусылар"ҙы һәм большевик эйәрсендәренең тамырын ҡоротоРға". Ысынлап та, шул уҡ йылда Башҡорт Хөкүмәте кешеләре Башҡортостан автономияһына аяҡ салмыш Б.Нуримановты, уйынсыҡ юлбашсы Б.Шәфиевты һәм С.Әнфиҙе тотоп аталар, ә беренсе һанлы партия билетына эйә булған "отъявленный большевик" имен ҡала (бәлки, ауылда юғалып тороуы арҡаһындалыр? Йәки уны яҡшы белгән элекке окопташы, хәҙер Башҡорт Хөкүмәте ағзаһы Айытбаев арҡаһындамы?). Ә инде С.Ш.Мырҙабулатов 1921 йылда үҙ ҡулы менән яҙған докладта ошо хәленә аптырай биреп тә ҡуя: "Эшем буйынса бөтә кеше тарафынан мин ғәййәр ("отъявленный") большевик тип танылғанлыҡтан, халыҡ араһында большевистик өгөт-нәсихәт алып барыуым хаҡында оҙаҡламай Башҡортостан Хөкүмәтенә лә еткерә башланылар. Әммә Башҡортостан Хөкүмәте, үҙемә билдәһеҙ ниндәйҙер сәбәп арҡаһында, мине имен ҡалдырҙы һәм мин баяғы эшемдә дауамланым". Бының сәбәбе, минеңсә, Ырымбур большевиктары Цвиллинг, Кобозев, Шәмиғолов, Нуримановтарҙың мәкерле асылын яҡшы белгән большевик Мырҙабулатовтың улар әтмәләгән БВРС-ҡа ышанмай, уға ылығып бармай, шикле ҡурсаҡ уйынын үтәнән-үтә күреүендә, ә вәлидовсылар хәрәкәтенең күпселек халыҡ хәрәкәте икәнлеген шәйләп, халҡы өсөн йөрәге менән янып, гәрсә үҙе, инанған большевик булараҡ, социалистик ирекле үҙ билдәләнеш яҡлы фиҙакәр көрәшһә лә, тормош үҙе көн тәртибенә ҡуйған, "буржуаз милләтсе" вәлидовсылар беренсе булып яулаған Башҡортостан автономияһына күңел төпкөлөнән ихлас теләктәшлек ҡылыуындалыр. Уның ошо ҡарашы һәм тойғолары халыҡтыҡы менән

бергә уҡмашҡан, үрелгән, Көньяҡ Урал башҡорттарының дөйөм рухи донъяһын сағылдырған. Сөнки ҡыҙыл гвардиясы Ғариф Бесәнсе улы Сәйфетдинов (Сәнкем-Биктимер ауылынан) 1921 йылда үҙ фекерҙәрен ошолай теркәп ҡалдырған: “Башҡортостан Шураһын ҡыуып таратыуҙары башҡорт ялпыһын ҡаты ҡайғыға һалды. Көтөлмәгән хәлдән рухы төштө күптәрҙең. Ләкин Мырҙабулатов иптәш үҙенең хаттарында беҙҙе йыуатып: “Ваҡытлыса хәлдәр былар бөтәһе. Ваҡытлыса аймылыш. Оҙаҡламай көллөһө асыҡланыр, төҙәтелер. Беҙ, большевиктар, принципиаль рәүештә ваҡ милләттәрҙең ирекле үҙ билдәләнеше яҡлы”, — тип нығыта килде. Һәм бына ошо ваҡытта Мырҙабулатов иптәштең арымай-талмай эшләүе арҡаһында Үҫәргән төбәге большевизм усағына әйләнде”.

Милләттәрҙең Рәсәй эсендәге үҙ билдәләнешкә ынтылышын кире ҡағыу ғәләмәте, ғөмүмән, Урал большевиктарының ҡанына һеңешкән күптәнге сир икәнлеген 1918 йылдың 8(21) февралендә Екатеринбургтағы Урал Өлкә хәрби комиссариатынан совет Рәсәйенең Хәрби эштәр буйынса халыҡ Комиссары Лев Троцкийға атҡарылған белдереүе асыҡ һөйләй:

“Татар һәм башҡорт буржуазияһы Дутов менән тығыҙ берлектә Башҡортостандың һәм Уралдың башҡа төбәктәренең автономияһын иғлан ҡылырға йыйына. Беҙҙең контрреволюционерҙар тарафынан ҡыҙҙырылған был милли мосолман хәрәкәте -- советтарға ҡаршы үтәнән-үтә күренмәле сифатта. Шул уҡ ваҡытта ул Дутов авантюраһына ҡарағанда ла хәтәрерәк янаулы. Өфөлә, мәҫәлән, яҡшы ҡоралланған, тәртипле, автономия иғлан итеү айҡанлы әҙерләнгән биш мең кешелек татар-башҡорт полкы бар. *Татарҙар һәм башҡорттар менән беҙҙең бәрелеш ҡотолғоһоҙ...*

Шулай итеп, өлкә хәрби комиссариаты алдында Дутов башлығындағы контрреволюцияны быуыу һәм Уралдағы Советтар хакимиәтенә янаған татар һәм башҡорт буржуазияһының милләтсе ынтылыштары менән көрәшеү бурысы тора.

Хәрби эштәр буйынса комиссар: (ҡултамға).

Комиссар ярҙамсыһы: **Н.Уфимцев**” (Гражданская война в Оренбуржье (1917 — 1919 гг.). Документы и материалы. Оренбург, 1958, 111-се бит).

Автономиясы башҡорттарҙы (ә улар — күпселек!) ҡанға тонсоҡтороп баҫтырыу өсөн, Башҡортостан урыҫтарын ашығыс рәүештә ҡоралландырыу башлана, мәҫәлән:

“Ырымбур Хәрби-Революцион комитетының 1918 йыл 23 февраль ултырышы 12-се һанлы протоколынан күсермә.

Тыңланыҡ:

1) Преображенский заводы делегацияһының контрреволюцияны баҫтырыу өсөн ҡорал һорап Хәрби-Революцион комитетҡа үтенесе.

Ҡарар ҡылдыҡ:

1) 100 мылтыҡ һәм һәр мылтыҡҡа тейешле 25-әр дана иҫәбенән патрондар бирергә” (ЦГАОО Р.Б., ф. 9776, оп. 2, д. 393, л. 79).

“Бөтә ылыҫ, станица, ҡасаба идараларына, советтарға, комитеттарға, бөтәһенә, бөтәһенә, бөтәһенә!

Революцион Комитет мәғлүмәттәре буйынса, Ырымбур гөбөрнәһе Орск өйәҙе башҡорттары крәҫтиән ҡасабаларына сапҡындар яһай, офицерҙар, юнкерҙар һәм һәр төрлө *сволочтар* менән бергә совет халыҡ хакимиәтенә ҡаршы әтрәттәргә ойоша. Революцияға ҡаршы көрәш алып барыуҙа авантюрасы Дутовҡа ярҙам иткән элекке Башҡортостан Өлкә Советы бында Революцион Комитет ҡарары менән ҡулға алынды.

Революцион Комитет бөтә башҡорттарға һәм уларҙың ойошмаларына кисекмәҫтән ҡоралһыҙланырға, бөтә ҡоралды урындарҙағы Советтарға һәм ҡыҙыл гвардияларға тапшырырға, уларҙа боҫоп ятҡан бөтә офицер һәм юнкерҙарҙы тотоп бирергә һәм юлбаҫарлыҡ сапҡындарын туҡтатырға бойора.

Әгәр өс көн эсендә ошо үтәлмәһә, Революцион Комитет *ҡулға алынған бөтә Башҡортостан Өлкә Советын атасаҡ, совет хакимиәтенә ҡаршы тороусылар рәүешендә шик аҫтына алынған ауылдар артиллерия һәм пулеметтар уты менән ер йөҙөнән һепереп түгеләсәк*[45].

Ырымбур Хәрби-Революцион Комитеты.

Телеграмма 1918 йылдың 5 мартында (иҫке стиль менән 20 февралдә. — Й.С.) киске сәғәт 6-ла һуғылған" (шунда уҡ, *л*. 92).

Үҙҙәрен ҡурсаҡ итеп уйнатыусы Ырымбур большевиктары тарафынан ҡыуып таратылғас, Башҡортостанға (Мәләүезгә) күсенгән БВРС рәйесе Ғ.Дәүләтшиндың 1919 йылдың 26 июнендә Мәскәүгә Советтарҙың Бөтә Рәсәй Үҙәк Башҡарма Комитетына атҡарған белдереүендә Башҡортостандағы ҡанлы ваҡиғаларҙың төбөндә нимә ятҡанлығы фашлана:

"1918 йылдың 3 февралендә 17 кешелек Башҡортостан Өлкә Шураһы (вәлидовсылар хөкүмәте. – Й.С.) ҡулға алына, ә һуңынан Иҙелбаев, Мағазов башында торған әтрәт кулактар Баранов һ.б. тарафынан атыла. Улар Орскиҙа һәм Ново-Покровский ҡасабаһында урыҫтарҙың милли йыйынын саҡыра, йыйын башҡорттарҙың автономияһын булдырыуға ҡаршы сыға. Улар православный Преображенский ревкомы төҙөй, унығы башҡорттарҙың автономияһына ҡаршы аяҡлана — күсеп килеп төпләнеүсе кулактар, эсерҙар улар: доктор Остренко, Куликов, Правдухин" (ЦГИА Р.Б., ф. 1107, оп. 1, д. 75, *л*. 22 — 24). Әйткәндәй, телгә алынған Правдухин (әҙибә *Л*.Сейфуллинаның ире, 1937 йылда репрессияланған), башҡорт халҡын язалаусы палачтарҙың береһе А.Голиков (Аркадий Гайдар) кеүек үк, совет яҙыусыһы Валерий Правдухинға әйләнә. Баймаҡтағы ошо ҡанлы фажиғә оҙаҡламай Башҡортостанда тоҡанасаҡ ҡан ҡойошло граждандар һуғышының башланғысы булды һәм, күренеүенсә, уны Ырымбур большевиктары башланы.

Аҙағыраҡ Башҡорт АССР-ында 1920 йылғы хөкүмәт түңкәрелеше һөҙөмтәһендә Шәмиғолов — Мансырев режимы урынлашҡас, үҙе юҡтан файҙаланып коммунистар партияһынан сығарылған Сөләймән Мырҙабулатов 1921 йылда үҙенең партия ағзалығын тергеҙеүҙәрен һорап ғариза бирә, уны яҡшы белгән башҡорт революционерҙары иһә партияның юғары органдарына тотанаҡлау ҡағыҙҙары тапшыралар. Коммунист, элекке ҡыҙыл партизан Ғариф Бесәнсе улы Сәйфетдинов (Сәнкем-Биктимер ауылынан) ошолай шаһәҙәтнамәләй:

"РКП(б)-ның Өлкә комитетына, Үҙәк Комитетына.

Революцияның тәүге мәленән үк башҡорт массаларының хәсрәттәрен һәм хыялдарын төрлө бәндә төрлөсә аңланы һәм аңлатты. Уҙған 4 йыл һуҙымында Башҡортостанда ниндәй генә сәйәси ағымдар булманы! Күптәр яңылышты, күптәр

---

[45] Һәм бына шундай уҡ икенсе бер документ — 1919 йылда Башҡорт Хөкүмәте Ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сығыуы айҡанлы аҡ "Верховный Главнокомандующий" Колчак штабынан 1919 йылдың 26 февралендә атҡарылғаны: "Беҙгә хыянат ҡылған һәм большевиктар яғына сыҡҡан башҡорттарға ҡарата уларҙың ауылдарын һәм ҡасабаларын бөтә халҡы менән ҡуша юҡ итеүгә тиклем булған иң рәхимһеҙ саралар ҡулланылырға тейеш" (ЦГАОО Р.Б., ф. 9776, оп. 2, д. 394, *л*. 20). Тимәк, башҡорттарға ҡарата сәйәсәттә Рәсәйҙең аҡ империяһы һәм ҡыҙыл империяһы араһында һис айырма юҡ икән.

күрәләтә хата юлдарҙан китте... Мин, коммунизм идеялары өсөн ҡорбан бирергә һәр саҡ әҙер коммунист булараҡ, үткәндәр тураһында, ул сәйәси ағымдар һәм эшмәкәрҙәр, уларҙың бер-береһенән ҡайһылай айырылыуҙары тураһында үҙемдең күҙәтеүҙәремде һәм фекеремде асып бирергә тейешмен.

Октябрь революцияһынан һуң, беҙҙең Ырымбур һәм Өфө гөбөрнәләрендә ниҙәр булғанлығы бөтәбеҙгә билдәле. Бер яҡтан, Учредительный собрание комитеттары ойошторолоп, үҙ эшенә ҡыҙыу тотондо, икенсе яҡтан, Октябрь революцияһы шиғарҙарына (лозунгыларына) ҡаршы яҫҡаныусы уғата ныҕыраҡ реакцион элементтар көсәйҙе. Төрлө миҫалдар ярҙамында улар Октябрь революцияһының һәләкәтле һөҙөмтәләр менән янауын дәлилләргә тырышты, Октябрь революцияһы яҡлыларҙы тантаналы рәүештә мылтыҡ көбәгенән үткәрҙе.

Кем һуң беҙҙең арала, батша сәйәсәте менән иҙелгән, һәр яҡлап артта ҡалған ҡараңғы халыҡ араһында, бөтәбеҙ өсөн аңлайышлы әсә телендә быларҙың барыһын дөрөҫ итеп аңлата, коммунизм рухында беҙҙе тәрбиәләй һәм тәғәйен был төбәктә эшләй ала ине һуң? Ул саҡ беҙҙә “Учредителселәр” хакимлыҡ ҡыла, ә Ырымбурҙа һәм уның төбәктәрендә Ырымбур Мосолман хәрби советы ҡанаты аҫтында ойошҡан мосолман донъяһы хәрәкәт итә ине. Бына тап ошо осорҙа — 1917 йылдың 20 октябрендә Көнбайыш фронттан Ырымбур аша беҙҙең Үҫәргән төбәгенә электән үк беҙгә таныш С.Мырҙабулатов иптәш үҙенең арҡадаштары менән ҡайтып төштө һәм беҙҙә башында Мырҙабулатов иптәш торған сәйәси ағым башланды. “Учредиловсы” иҫке йүнәлеш Ырымбур Каруанһарайында эшләнеп таратыла ине, яңыһы — беҙҙәге Мырҙабулатов иптәш эшмәкәрлегенән. Революцион ялҡын алып ҡайтты ул һәм беҙҙе лә, Үҫәргән төбәге халҡын, революцион хәрәкәткә өндәне. Ауыл балаһы һәм уҡытыусы, ябай һалдат, шул уҡ ваҡытта талантлы өгөт-нәсихәтсе булараҡ, ул беҙҙе яңы хәрәкәткә ылыҡтыра алды һәм уҡытыусыларҙың, фронттан ҡайтҡан һәм революцияға көйләнгән һалдаттарҙың бер өлөшөн большевистик шиғар[46] аҫтында тупланы.

Күпмелер ваҡыт үтә, большевиктар шиғары Орск тимер юлы буйындағы бөтә башҡорт ауылдарын, тип әйтерлек, иңләп ала. Мин дә электән үк Мырҙабулатов иптәште үҙенең революцион түңәрәген ойошторған большевик булараҡ белә инем, уның эшмәкәрлеге менән ҡыҙыҡһынып, Бер-нисә иптәшем менән бергә уға ылыҡтым. Көнүҙәк шиғарҙары уның ошолар ине: “Бөтһөн һуғыш, бөтһөн Учредилка, бөтә хакимиәт — Советтарға!” “Йәшәһен большевизм, иптәш Ленин!” һ.б. Мәғәнәһеҙ һуғыш теңкәләренә тейгән халыҡ ысынлап та был шиғарҙарға ифрат ыңғай ҡараны һәм уның яҡлылары туҡтауһыҙ арта барҙы.

Октябрь түңкәрелешенән һуң, Ырымбур тирәһендә большевизмға ҡаршы көрәш көсәйә. Был реакция башында казаксылыҡ һәм уға буйһонған Ырымбур Мосолман хәрби советы тора ине. Каруанһарайҙағы Башҡорт Үҙәк Советы һәм Мосолман хәрби советы араһында ыҙғыш башланды. Башҡорт Советы Башҡортостан автономияһын иғлан ҡыла һәм үҙ ғәскәрен төҙөргә теләй. Мосолман советы берҙәм мосолман хәрби көсөн тарҡатыуға ҡаршы нәфрәт белдерә. Көрәш икеһенең дә файҙаһына булмағанса хәл ителә: Дутов тимер ҡулы менән Ырымбурҙа бойора һәм большевизмға ҡаршы аяҡлана. Большевиктар йәшеренергә, подпольеға китергә мәжбүр була; Мырҙабулатов иптәш, йыш урын алмаштырып, Орск ҡалаһы һәм Үҫәргән ылыҫы араһында боҫоп йөрөй, беҙгә йәшерен күрһәтмәләр бирә, йәшерен өгөт-нәсихәт алып бара. Ниһәйәт, Дутов һәм уның

[46] Шиғар — лозунг.

арҡадаштары ҡыйратыла, Мосолман хәрби советы ҡыуып таратыла, ләкин, һис бер көтмәгәндә, “мосолман хәрбисоветсылар” (татар буржуазияһы. – Й.С.) үҙҙәренең аҡ төҫтәрен ҡыҙылға алмаштырып, үҙҙәрен большевик тип иғлан ҡылып, элекке эшмәкәрлектәренең бөтөнләй киреһен ҡылырғы тотоналар, элекке уңышһыҙлыҡтары өсөн үс алып, Башҡорт Советына ябырылалар.

Башҡорттар араһында революцион большевик түңәрәктәре ойоштороу осоро ине был. Башҡорт Советын ҡыуып таратыу башҡорт массаларына ҡотосҡос ауыр тәьҫир итте. Көтөлмәгән хәлдән күптәр төшөнкөлөккә бирелде. Һәм бына ошо ваҡытта Мырҙабулатов иптәштең арымай-талмай эшләүе арҡаһында Үҫәргән төбәге большевизм усағына әүерелде. Уның даими эш урыны (уҡытыусылыҡ) булған 1-се Үҫәргән ылыҫында большевиктар ойошмаһы асыҡтан-асыҡ һәм рәсми төҫтә йәшәп килде, ул “ үҙ теләкле йәштәр түңәрәге” тип аталып, программаһы — большевиктар программаһы ине. Башҡа ылыҫтарҙа ячейкалар йәшерен эшләне. Мырҙабулатов һәр саҡ “Большевик” ләҡәбе менән ҡултамға ҡуйыр, шуға күрә уны ул эш йәйелдергән төбәк кешеләре, хатта бала-сағаға тиклем, тап ана шулай “Большевик” тип атарҙар ине.

Мырҙабулатов иптәш, уҡытыусы булараҡ, бер ниндәй ҙә башҡа вазифалар биләмәне, ләкин халыҡтың, бигерәк тә һалдаттарҙың, бөтә йыйылыштарына ла килә һәм фекер алышыуҙар менән етәкселек итә ине. Шуға күрә лә, большевиктар Ырымбурҙы алыу менән үк, Ырымбур тимер юлы буйындағы башҡорт массалары үҙҙәре теләп Ҡыҙыл Гвардияға яҙылдылар, улар бигерәк тә Мырҙабулатов иптәш шәхсән үҙе ҡайнап йәшәгән 1-се һәм 6-сы Үҫәргән ылыҫтарында күп булды. Ҡайһы бер урындарҙа ҡыҙыл гвардиясылар йәмһеҙ ҡыландылар[47], шуның менән халыҡ нәфрәтен ҡуҙғаттылар — Мырҙабулатов иптәш был хәлдәр менән һис килешә алманы һәм үҙенең хаттары менән уларҙы артабан булдыртмаҫҡа тырышты. Бында мин уның үҙемдә һаҡланып ҡалған, беҙҙең өсөн тарихи булған бер хатын килтерә алам: «Ғариф иптәш! Күп урындарҙа беҙҙең иптәштәребеҙ революцион эштә хата аҙымдар яһай, бигерәк тә *Абдулхай Батталов*[48]. Әгәр был юл менән китһәк, иртәгә үк алдыбыҙҙа ҡанлы йәштәр ағыҙған хисапһыҙ йөҙҙәр хасил буласаҡ. Беҙгә үҙебеҙҙең элекке план буйынса барырға, ойошҡан килеш, күпселек халыҡты үҙебеҙҙең яҡҡа ылыҡтырырға һәм улар ярҙамында өҫтөбөҙҙән революция дошмандарын һелкеп ташларға кәрәк. Әгәр ҙә ки массаларға таянмаһаҡ, ә алдан ныҡлап уйламайынса анархистарса хәрәкәт итһәк, ул саҡта халыҡ үҙе беҙҙе алып быраҡтырасаҡ. Ошоно һәр саҡ күҙ алдында тоторға һәм әҙәпле, һаҡ хәрәкәт итергә кәрәк. Ҡулыңды ҡыҫып — Большевик. 1918 йылдың 10 феврале”.

Датанан күренеүенсә, С.Ш.Мырҙабулатов Орскиҙағы ҡыҙыл гвардиясыларҙың Баймаҡтағы Мағазов кешеләренә ҡаршы мәкерле әҙерлектәрен ҡанлы фажиғә булмаҫы элек киҫәтә, ләкин...

“Өҫтә телгә алынған Батталов иптәш, — тип асыҡлыҡ индереп дауамлай Ғ.Сәйфетдинов, — ул саҡта Үҫәргәндә ҡыҙыл гвардия әтрәтенең башлығы ине, һуңынан ул Эстәрлетамаҡта Башглавмилиция башлығы вазифаһында вафат булды” (ЦГИА Р.Б., ф. Р-1107, оп. 1, д. 113, л. 10). Башҡорт АССР-ы тарихында шаҡтай эҙ ҡалдырған, ҡағыҙҙарҙа Ғәбдел-Әхәт Садиҡ улы Сәйет-Батталов, Ғәбделхәй (Абдулхай) Батталов (Баталов, Батулов), Арыҫлан Баталов тип төрлөсә яҙылып йөрөгән был шәхесте ҡайһы бер тарихсылар, шул исем-ләҡәптәре буйынса өс кешегә һанап, тупаҫ хата ебәрә. Уларса

---

[47] Баймаҡ төбәгендәге башҡорт әтрәтен атыу күҙ уңында тотола.

[48] Йәғни беҙ белгән Ғәбдел-Әхәт Мөхәммәт-Садиҡ улы Сәйет-Батталов.

барһаҡ, Сталинды ла (Джугашвили, Коба, Сталин), Ленинды ла (Ульянов, Иванов, Ленин) бер юлы өсәр кеше итеп ҡарарға тура килер ине...

Ырымбур большевиктарының башҡорт халҡын ҡанға батыра башлауын үҙ халҡының тоғролоҡло улы булған коммунист С.Ш.Мырҙабулатов тыныс ҡына кисерә алмай, әлбиттә -- репрессияларға сик ҡуйҙыртыу теләге менән Ырымбурға юллана. Бына уның үҙ ҡулы менән 1921 йылдың 28 ғинуарында яҙып биргәне: “Үҫәргән кантонында бер талай эшләгәс, *Ырымбурга Цвиллинг һәм Кобзев иптәштәргә барҙым, ҡыҙыл гвардия ойоштороу өсөн урындарга ебәрелгән иптәштәрҙең яңылыш эш ҡылыуҙарын уларга күрһәттем.* Шунан һуң улар минең үҙемә ҡыҙыл гвардияны ойошторорға тәҡдим иттеләр, ләкин мин ҡабул ҡылманым, ә өгөт-нәсихәт эше алып барырға йөкләмә алып ҡайттым” (шунда уҡ, л. 2). Быныһы инде ҡанлы Баймаҡ ваҡиғаларынан һуң һәм тап шуға бәйле булғанлығына шик юҡ.

Ырымбур большевиктарының һәм, ғөмүмән, Ленин партияһының боҙоҡ милли сәйәсәте арҡаһында Башҡортостанда граждандар һуғышы ҡабынғас, С.Ш.Мырҙабулатов та, уның үҙе әйтмешләй, атаһының яңғыҙ атын менеп сығып китә лә ике йыл буйына өҙләкһеҙ һуғыш ҡырҙарында аҡтарға ҡаршы көрәшә. 1918 йылдың икенсе яртыһында беҙ уны, фиҙакәр большевик буларак, көньяҡ Башҡортостандағы Ҡыҙыл Армия ғәскәри бүлектәренең тилбер ойоштороусыһы, сәйәси эшмәкәре, яугире итеп күрәбеҙ. Сөнки советтарға ҡаршы чехословактар фетнәһе һәм аҡ казактар хәрәкәте көсәйгәс, ул үҙенең мөғәллим арҡадаштарын һәм урындағы ҡыҙыл гвардиясыларҙы яҡындағы Төркөстан фронтына -- Ырымбурҙан сигенгәндән һуң Орск ҡалаһында аҡ ғәскәрҙәргә ҡаршы тороусы ҡыҙылдарға ҡушылырға эркелдерә, Орск өсөн бер-нисә айға һуҙылған ҡаты һуғыштарҙа мылтыҡ-ҡылыс тотоп үҙе лә ҡаһармандарса алыша. Үлемесле киҫкен мәлдәрҙә ҡаушап төшкән ҡыҙыл яугирҙәрҙе үҙенең шәхси батырлығы, ялҡынлы коммунист һүҙе менән рухландыра ул. Өҫтә килтерелгән Ғариф Сәйфетдинов шаһәҙәтнамәһенән тағы бер өҙөк:

“1918 йыл баштарында чехословак хәрәкәте башланды, Ырымбур төбәге халҡы ла баш күтәрҙе. Беҙҙең ҡыҙыл гвардиясылар Көнсығышҡа сигенде. Мырҙабулатов иптәш үҙенең хаттарында беҙгә Төркөстан фронтына китергә кәңәш итә. Бына бер хатының йөкмәткеһе: “Ғариф Сәйфетдинов, Ғәбделәхәт һәм башҡа иптәштәр! Беҙҙең бөтәбеҙгә лә көнсығыш йүнәлешендә күсенергә тура килә. Кем беҙҙең менән булды, беҙҙең менән эшләне — бөтәбеҙгә лә Орск ҡалаһына юлланыу фарыз. Уҡытыусылар “курстарға кереү өсөн” һылтауы менән китһендәр. Ә беҙҙең ҡоралды иптәштәр, паролебеҙгә ярашлы, күсенеүселәргә юл асыуҙа ярҙамлашырға тейеш. Беҙ тиҙҙән Үҫәргән төбәгенән китәбеҙ. Бөтәгеҙҙең ҡулын ҡыҫам. “Большевик” иптәшегеҙ. 1918 йылдың 18 июле”.

Уның күрһәтмәләренә ярашлы, бөтә иптәштәр ҙә, тип әйтерлек, Үҫәргән төбәгенән китәләр. Был план дошмандарға ла мәғлүм булғандыр, сөнки юлда ҡайһы бер уҡытыусыларға һөжүм иттеләр. Мәҫәлән, Ғимадислам Әхмәров[49] иптәш казактар ҡулына эләкте һәм йыртҡыстарса үлтерелде. Мырҙабулатов иптәш тарафынан элемтә өсөн ҡалдырылған бер-нисә әҙәм тап шулай уҡ үлтерелде йәки үлемесле туҡмалды. Казактар ҡулы аҫтында тороп ҡалған ҡайһы берҙәре[50] йәшеренеп һәм, ниһәйәт, ҡасып китеп, 1919 йылда ғына килеп ҡушылдылар беҙгә”. Аҡ казактар һәм башҡорттар ҡамауын көскә

---

[49] Ырыҫҡол ауылының “большевик-мулла”һы, хәҙерге Йәнсура районының “Һаҡмар” совхозы үҙәгенән Йәнсура (Бәкәтәр) ҡасабаһына барған юлда аҡтар һағауылы тарафынан атып үлтерелгән.

[50] Мәҫәлән, Сәнкем-Биктимер ауылынан большевик Ғөбәйҙулла мәғзүм Ураҙов, Ҡөрьәнде яттан белеүсе. 1920 йылда Башҡортостан Ревкомы сәркәтибе була.

ярып сығып, Сөләймән батыр хеҙмәт иткән Ырымбур һәм Орск ҡыҙылдары көньяҡҡа — Аҡтүбәгә сигенә, 1918 йылдың 28 сентябрендә Ә.Вәлидовтың аҡ башҡорт ғәскәрҙәре ҡаланы ала; дөйөм аҡтар армияһы тарафынан йәнә Силәбе, Екатеринбург ҡалалары, Өфө, Ырымбур, Самара гөбөрнәләре һәм Пермь гөбөрнәһенең башҡорттар йәшәгән көньяҡ өлөшө ҡыҙылдарҙан азат ителә. Әммә 1918 йылдың июлендә Иҙел буйындағы бөтә совет ғәскәрҙәре дөйөм Көнсығыш фронтына берләштерелә һәм советтарҙың иң мөһим хәрби көс-ғәйрәте шул йүнәлешкә туплана. Сентябрҙә ҡыҙыу һөжүмгә күсеп, Ҡазан, Сембер ҡалаларын, октябрҙә — Самараны һәм Сызранде, ә ноябрҙә Өфө менән Силәбене ала, аҡтарҙың йәйге еңеүҙәре көҙөнә үк юҡҡа сыға. Был осорҙа С.Ш.Мырҙабулатов Орскиҙы ташлап ҡасҡан ҡыҙыл ғәскәрҙәр сафында Аҡтүбә ҡалаһына сигенеп, йәнә ҡамауҙа ҡала. Шуныһы ла фәһемле: бында ла улар, тап Орскиҙағы кеүек үк, “ҡыҙыл башҡорттар” сифатында үҙҙәренең туғандары аҡ башҡорт һәм аҡ казак ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғыша.

Батырыбыҙ ҡамауҙағы аслыҡ-яланғаслыҡты, һәләкәтле алыштарҙы алғы һыҙыҡта ябай яугирҙәр менән бергә кисереп, йыш ҡына ут эсенә үҙе башлап инеп, һынмаҫ ғәййәрлеге менән ҡыҙыл әрмистәрҙең рухын күтәрә. Шул уҡ ваҡытта ул көслө сәйәсмән, талантлы өгөт-нәсихәтсе булып та ҡала бирә: марксизм-ленинизм тәғлимәттәрен урыҫсанан башҡортсаға ауҙарып таратыу, мосолман яугирҙәрен коммунистар партияһы сафына әҙерләп керетеү буйынса арымай-талмай эшләй. Ғариф Сәйфетдинов ошолай яҙа:

“Чехословак хәрәкәте көсәйгәндән көсәйҙе. Казактар тупландылар, беҙгә һөжүм иттеләр. Беҙ Орскиға сигенәбеҙ. Бер талай ваҡыт Батталов[51] иптәш Орск төркөмөнөң башлығы булды. Орск һәр яҡлап казактар менән сорнала. Ҡайһы бер ҡыҙыл әрмистәр ҡаса, шуның менән беҙҙе хәлһеҙләндерә. Ҡыҙылдарҙың рухы ҡаҡшай Орскиҙа. Ул рухты Мырҙабулатов иптәш һәм арҡадаштары өҙлөкһөҙ өгөт-нәсихәттәре менән нығыта. Егерме бишләп уҡытыусыны үҙе тирәһенә туплап, ҡоралландырып, үҙе алдан башлап һуғышҡа әйҙәй. Ҡыҙыл яугирҙәрҙең рухы күтәрелә, өгөт-нәсихәт эштәре ҡеүәтләнә. Резервтарҙан һәм төп көстәрҙән ярҙамһыҙ ҡалған аҙ һанлы ҡыҙыл ғәскәр ҡамаулы Орскиҙа оҙаҡ ҡала алмағанлыҡтан, ҡамауҙы йырып, Аҡтүбә ҡалаһына барып керәбеҙ. Тап бына шунда Мырҙабулатов иптәш үҙенең бер-нисә йөҙ генә башҡорт арҡадаштары менән бергә төп эште башҡарҙы. Ул, коммунистар партияһының урыҫ телендә яҙылған программаһын һәм шиғарҙарын башҡорттарҙың аңламауын иҫәпкә алып, үҙенең бер килке иптәштәре менән бергә уларҙы башҡорт теленә тәржемәләне, типография юҡлыҡтан, уларҙы ҡулъяҙма хәлендә яугирҙәребеҙ араһында таратты. Тәржемә эштәрендә Әхмәтшин, Хөсәйенов, Мусин, Мырҙабулатов иптәштәр ҡатнашты.

Мырҙабулатов иптәш, төп көстәргә ҡушылғанға тиклем, Аҡтүбә ҡалаһында үҙенең арҡадаштары менән бергә ябай ҡыҙыл әрмис сифатында эшләне. Ҡыҙыл гвардиясылар уларҙы күп тапҡырҙар командалыҡ һәм башҡа вазифаларға күтәрҙе, ләкин улар, ҡулдарына ҡорал тотоп фронтта булыу өсөн, ул вазифаларҙан баш тартты. Беҙгә уларҙың маҡсаты асыҡ ине: массалар араһында ҡалыу, сөнки яугирҙәр араһында үҙ теләклеләрҙән башҡа мобилизацияланғандары ла бар ине. Элемтә өҙөлөү сәбәпле, кейем-һалым да, аҡса ла, башҡа кәрәк-яраҡтар ҙа юҡ ине. Шуға күрә ябай яугирҙәр араһында ҡәнәғәтһеҙлек көсәйә, уларҙы инандырыу һәм тынысландырыу өсөн, шулар

[51] Беҙгә мәғлүм Ғәбделәхәт Мөхәммәтсадиҡ улы Сәйетбатталов.

кеүек үк ябай яугирҙәр исеменән һөйләргә кәрәк ине, һәм бына тап ошо бурысты Мырҙабулатов иптәш үҙенең төркөмө менән үтәне лә инде".

Коммунист С.Ш.Мырҙабулатовтың әлеге Ғариф Сәйфетдинов әйткән өгөт-нәсихәт төркөмө, үҙҙәренең Аҡтүбә фронты ҡыҙыл ғәскәрҙәре араһында эш алып барыуҙан тыш, фронт аръяғындағы аҡтар сафында быларға ҡаршы һуғышыусы башҡорт полктарында ла йәшерен өгөт-нәсихәтен көсәйтә, ҡыҙылдар яғына сығырға өндәй уларҙы. Мырҙабулатов өгөтсөләре (заманында Сәнкем-Биктимер мәҙрәсәһендә ҡаҙаҡтар менән бергә уҡыған һәм ҡаҙаҡ телен, йолаларын яҡшы белгән кешеләр), ҡаҙаҡ далаларына ла үтеп инеп, Ырғыҙ, Турғай өйәҙҙәре ҡаҙаҡтарын аҡрынлап советтар яғына ауыштыра. Билдәле, ҡыҙылдарға ҡаршы Алаш-Урҙа менән берегеп көрәшеүсе Башҡорт Хөкүмәте лә йоҡлап ятмай. "Шул уҡ ваҡытта, — тип яҙа "Хәтирәләр"ендә (254-се бит) Әхмәтзәки Вәлидов Туған, — Алаш-Урҙа менән бергә Аҡтүбә фронтында еңеп, Төркөстан көстәре менән берләшеү юлындағы тырышлығыбыҙҙы ла кәметмәнек. Турғайҙа беҙҙән Ғәбделхаҡ Ғәбитов менән ҡаҙаҡ Азимбәк Биремжанов үҙҙәрен аямай эшләне. Алаш-Урҙа менән бәйләнеште, ул саҡ тимер юл аша элемтә ҡатмарлашҡанлыҡтан, атсапҡын менән тәьмин иттек. Ваҡиғалар ҡурҡыныс бер тиҙлектә үҫеүен дауам итте. Һамар, Аҡтүбәләге ҡыҙылдар, Дутов һәм Колчак кеүек дүрт дошман араһында ҡалдыҡ. Был ҡатмарлы дәүерҙә бәғзе ышаныслыҙ элементтарҙан да һаҡланыу кәрәк ине"...

1919 йылдың февралендә Башҡорт Хөкүмәте, Совет Хөкүмәте менән Килешеү төҙөшөп, ҡыҙылдар яғына сыҡҡандан һуң (бер үк ваҡытта, башҡорттар менән алдан һөйләшеп ҡуйыу буйынса, ҡаҙаҡтарҙың Алаш-Урҙа Хөкүмәте лә советтар яғына сыға), Аҡтүбә фронты бөтөрөлә; С.Ш.Мырҙабулатов һәм арҡадаштары, урындарҙа Советтар хакимиәтен тергеҙеү өсөн, үҙҙәренең Орск өйәҙенә ҡайтарыла. Ҡыҙылдарҙың 1-енсе армия командиры Г.Д.Гай яҙыуынса, "Башҡорт корпусының ғәскәри бүлектәре, Муса Мортазиндың кавалерия полкынан тыш, аҡрынлап ҡына Эстәрлетамаҡҡа, ә унан — Тоцкая станицаһы төбәгенә (Тоцкий лагерҙарына) күсерелде, шунда яңынан ҡыҙыл башҡорт полктары ойошторола башланы. Был полктар 1919 йылдың йәйендә үк Саранскиҙа ойошоп бөттө. Үҙгәртеп ҡороуҙан һәм таҙартыуҙан һуң, башҡорт йәйәүле һәм кавалерия полктары Петроград янына генерал Юденичҡа ҡаршы ебәрелде" (ЦГАОО Р.Б., ф. 1832, оп. 3, д. 162, л. 14 — 15).

В.И.Ленин етәкләгән Совет хөкүмәтенең башҡорт халҡына ҡарата үткәргән мәкерле сәйәсәтен бер йәшерен документ асып һала:

"Протокол закрытого заседания президиумов губисполкома, губкома, высшего командования фронта, 1-ой Армии и Оренбургских ответственных работников с участием товарища Калинина.

Повестка: 2. Башкирский вопрос.

Тов. Калинин. Вопрос о доверии или недоверии к Оренбургу Центром нет и быть не может. Автономия Башкурдистана – буфф (көлкөлө ҡыланыу, мәсхәрә. – Й.С.) для восточных народов. Мы башкирам не верим, гоним их солдат под Питер (ҡырҙыртыуға, әлбиттә. – Й.С.). Попытка Оренбургского губкома РКП создать башкирский партийный центр крайне важна и нужно, чтобы она дала реальные результаты.

Нам надо играть в их автономию, повсюду пролезать к ним и коммунизмом парализовать корни и остальные вредные стороны" (ЦГАОО Р.Б., ф.9776, оп.2, д.393, л.40).

Ғазраилдан да хәтәр – бер юлы тоташ халыҡтың йәнен алыусылар!..

1919 йылдың мартында советтарҙың Көнсығыш фронтында Колчак армияһы көслө һөжүмгә күсә, Ҡыҙыл Армия ғәскәрҙәре, ҡаршы тора алмай, Самараға табан сигенә

башлай. Үҙенең Орск өйәҙе 1-се Үҫәргән ылыҫында урындағы советтарҙы аяҡҡа баҫтырып эшләп йөрөгән ҡыҙыл яугир Сөләймән батыр Мырҙабулатовты ла утлы өйөрмә ҡыҫҡа ғына ваҡытлы тыныс тормошонан кире ҡабат һурып ала: тимер юлдан Орск – Ырымбур – Самара йүнәлешендә тәртипһеҙ сигенеүсе ҡыҙыл ғәскәрҙәрҙең именлеген тылдан тороп тәьмин итеү өсөн ҡоралды әтрәт туплауға һәм тимер юлды киҫергә ынтылған аҡтарҙы тотҡарларға. Ҡаһарман үҙе ваҡиғаларҙы ошолайыраҡ тасуирлай: "Мин, аҡтар тарафынан ҡыйратылған ҡыҙыл ғәскәри бүлектәрҙең Эйек буйындағы ҡалдыҡтарын йыйнап, шулар менән бергә Эйекте кисеп, бөтә борам кәмәләрен яндырырға бойорҙом, шул арҡала дошман, Эйек менән Һаҡмарға килеп терәлгәс, ташҡын һыуҙы кисә алмай, ун көн торҙо тотҡарланып; шунан Һарыҡташҡа киттем, Орскиға һәм Ырымбурға телеграммалар һуғып, ғәскәр һораным. Орскиҙың күренекле коммунистары, үҙ вазифаларын ярҙамсыларына ташлап ҡалдырып, Ырымбурға тайған икән. Минең һорауға Ырымбурҙан бер пулеметлы утыҙ яугир ебәрҙеләр. Булған әтрәт менән бер талай ваҡыт Һарыҡташ һәм Дубиновка станциялары араһындағы тимер юл һуҙымын аҡ казактар һөжүменән ҡурсалап, аҙаҡ Ырымбурға сигендек"...Эйек буйындағы Сөләймән Мырҙабулатовҡа бәйле был дәһшәтле ваҡиғаларҙың шаңдауы шуларҙың шаһиты булған Ғәбиҙулла Биишевтең ҡасандырғы көндәлектәренән ҡыҙы тарафынан буталсыҡ итеп күсерелгән инша рәүешендә 90 йыл үткәс донъяға сығарыла: "Шулай бер көн Нуҡай ауылына ҡыҙылдар килеп инә. Ҡотҡосолар ҡотортоуы арҡаһында ауыл кешеләре төнө менән ҡыҙылдарҙың эйәр өҙәңгеләрен, айылдарын ҡырҡып сығалар ҙа *үҙ белдеге менән йөрөгән Сөләймән исемле кешегә хәбәр итәләр.* Ул шунда уҡ ауылға килеп, йоҡлап ятҡан, атһыҙ ҡалған ҡыҙылдарҙы ҡырып сыға. Ҡыҙылдарҙан бер-нисә кеше генә ҡасып ҡотола. Ә Сөләймән әтрәте менән Темәс яғына китә" (Башкирское воинство на защите интересов России. Уфа, 2007, 94-енсе бит). Бында, күренеп тора, ҡыҙыл Сөләймән ҡырған бәндәләрҙе "ҡыҙылдар" тип атау яңылыш.

Сөләймән батырҙың беҙгә таныш яугире Ғариф Бесәнсе улы Сәйфетдинов иһә ошолай яҙған: "...Беҙҙең фронт өҙөлдө, тип әйтерлек. Орск өйәҙендәге ҡыҙылдар Орск тимер юлы буйлап ағылды. Ырымбурға ҡарай сигенеүсе шул ҡыҙылдар тимер юл буйлап шылырға өлгөрә алмай ҡалды, бер-нисә аҡ казак полкы Һаҡмар йылғаһы буйлап Һарыҡташ, Дубиновка станцияларына ташланды. Һаҡмар йылғаһының ҡотороп ташҡан мәле ине. Тимер юлды казактар ҡулға төшөрһә, Орскиҙағы ҡыҙыл ғәскәрҙәр бүленеп ҡалыр ҙа ҡамауға алыныр, йәки бөтә эвакоорудиеларҙы һәм ылауҙы Дутовҡа ташлап ҡалдырырға тура килер ине. Һәм бына шул көсөргәнешле мәлдә Мырҙабулатов иптәш үҙенең ҡорҙаштары менән ярҙамға килеп өлгөрҙө. Ул үҙ кешеләре менән Һаҡмар аша һалынған күперҙәрҙе шартлата, йылғаларҙағы борам кәмәләрен юҡ итә лә тимер юлды (атап әйткәндә, Дубиновка һәм Һарыҡташ станцияларын) аҡтарҙан һаҡлай. Уның ныҡышмалы үтенесе буйынса, Ырымбурҙан ярҙамға ҡырҡ кеше, бер пулемет ебәрелә һәм Мырҙабулатов иптәш бөтә яр буйҙарын һаҡлауҙы ойоштора, аҡ казактарҙан Һаҡмарҙы кистертмәй тота. Ғәжәп ҡеүәтлелек күрһәтә ул бында. Дутовҡа ярҙам ҡылған казактарға штраф һалына, халыҡ араһынан бөтә ҡорал һәм бомба монаяттары йыйып алынып, ҡыҙыл яугирҙәр ҡоралландырыла, яр буйҙарын ҡурсалаусы сапҡын эскадрондар төҙөлә, уларҙың төрлө хәйләкәр маневрҙары дошманды аймылыш ҡыла, сиркәү һәм мәсет манараларына күҙәтсе постар ҡуйыла. Бәләкәй генә төркөм менән ике аҡ казак полкы ҡыҫымын Һаҡмар аша үткәрмәйенсә тотоп тора ул ике аҙна буйынса, шулай итеп. Орскиҙа ҡалған ҡыҙыл ғәскәрҙәр шул арала Мырҙабулатов ҡурсалауында Ырымбурға эркелеп, бер өлөшө иһә уға (Мырҙабулатовҡа) ҡушыла ла эшелондарҙы

арттан һаҡлап һуғыша-һуғыша сигенә Ырымбурға. Һыуыҡта көн-төн батҡаҡ йырып, ямғыр аҫтында күшегеп, ал-ял белмәй эшләү Мырҙабулатов иптәштең һаулығына эҙһеҙ ҡалмай, әлбиттә: Ырымбурҙа ул ҡаты ауырып йығыла ла дауаланырға Самараға оҙатыла”. Был ваҡытта ул, һыналған һәм фиҙәкәр коммунист булараҡ, Ырымбурҙағы 1-се Ҡыҙыл Армия (сәрдары Гай) штабының сәйәси бүлегенә эшкә беркетелгән була. Аҙаҡ мәғлүм булыуынса, Октябрь түңкәрелеше осоронан Ырымбур большевиктарының күптәренә билдәле С.Ш.Мырҙабулатовты Көнсығыш фронт етәкселеге айырым иҫәпкә ала һәм Башҡорт Хөкүмәте менән ике-ара Килешеү буйынса яңыраҡ ҡына танылған Автономиялы Башҡорт Совет Социалистик Республикаһына яуаплы эшкә тәғәйенләүҙе күҙ уңында тота. Шул йәһәттән Әхмәтзәки Вәлидовҡа ваҡытлыса Сарански ҡалаһында урынлашҡан совет башҡорт хөкүмәтенең ғәҙәттән тыш комиссияһы (БЧК) рәйесе итеп үҙҙәренең ышаныслы кешеһе коммунист Сөләймән Шаһингәрәй улы Мырҙабулатовты тәҡдимләйҙәр ҙә Вәлидовтың бер шарты менән килешәләр — Мырҙабулатовты һынау мөҙҙәте үткәнгә тиклем рәйес вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы итеп алырға. Вәлидовтың был һаҡсыллығына 1917 — 1918 йылғы Ырымбурҙағы ҡайнап торған башҡорт милли хәрәкәте осоронда Сөләймәндең уға килеп ҡушылмауы, һуңғы сәғәттәргәсә Ырымбур большевиктары араһында ҡалыуы сәбәпсе булғандыр... Шулай итеп, шул уҡ айҙа ВЦИК вәкилдәре рәүешендә Н.В.Зарецкий менән башҡорт коммунисы Харис Йомағоловты ла күҙ-колаҡ булырға БВРК-ға юлландырғандары кеүек үк, йәшермәйек, Сөләймән Мырҙабулатовты ла партияһы йәш республика нигеҙҙәрен Мәскәү сәйәсәтенә йәтешләп һалышырға ебәрә. Эйе, иң беренсе сиратта Мәскәү сәйәсәтен үткәрттерергә...

С.Ш.Мырҙабулатов үҙенә хас егәрлелек менән яңы эшкә тотона. Бер үк ваҡытта ул РКП(б)-ның Башҡортостан республика ойошмаһының урындарҙағы тәүге ячейкаларын төҙөшөүҙә лә үҙенең коммунист ҡорҙашы — Башревком рәйесе һәм бер үк ваҡытта ВЦИК-тың һәм РКП(б) Үҙәк Комитетының Башҡортостандағы вәкиле Х.Й.Йомағолов менән ҡулға-ҡул тотошоп эшләй; бик күп башҡорт уҙамандары партияға туранан-тура Мырҙабулатовтың тәҡдиме, улар өсөн яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алыуы аша ҡабул ҡылына (хәҙерге коммунистар иғтибарына!). Шул йылдарҙың шаһиты (коммунист) Ғ.М. Рәхмәтуллин Сөләймән Мырҙабулатовтың тап Саранск осоро тураһында 1921 йылда ошолай яҙып ҡалдырған: “...Мырҙабулатов иптәш бында ҡыҙыл әрмистәр араһында *коммунистар партияһы исеменән эш итеүсе һәм партия программаһы менән таныштырыусы берҙән-бер өгөтсө булды.* Бына шуға күрә лә уны башҡорт ярлылары революция түңкәрелешенең иң тоғро улдарының береһе һананы, шулай уҡ хәҙер ҙә башҡорт ялпыларының тормошон еңеләйтәсәк яҡты юлға алып барыусы тоғро етәксеһе һанай. Шуға ла уның партия эшмәкәрлеге башҡорттар араһында ғәжәп ҙур тәьҫирле, партия өсөн дә ифрат ҡиммәтле булды. Тап уның тәьҫире һәм өгөтө арҡаһында ошоғаса бик күп башҡорт ярлылары партия сафтарына ылыҡтырылды, әгәр шулай артабан да дауам итһә, киләсәктә уғата ҙурыраҡ уңышҡа ирешер инек. Бөтә намыҫлы башҡорт коммунистары ғына түгел, ә башҡа милләтле иптәштәр ҙә ысын йөрәктән уның үткән эшмәкәрлеге тураһында, коммунистик идеалдарҙы башҡорт ялпылары араһында таратыусы ҡиммәтле эшмәкәр булыуын хәбәр итерҙәр, тип ышанам” (ЦГИА Р.Б., ф. Р-1107, оп. 1, д. 113, л. 12).

Шул рәүешле, 1919 йылда БВРК-лағы иң яуаплы вазифаларҙың икеһен “Мәскәүҙең ике ҡулы” биләй. Әммә был ике ҡул (Йомағолов, Мырҙабулатов), Мәскәүебеҙҙең бөйөк юлбашсылары һис кенә лә көтмәгәндә, РКП(б) Үҙәк Комитетының йәшерен

мәнфәғәттәрен төптө онотоп, Башҡортостан автономияһын нығыту яғына ҡайыра башлай; өҫтәүенә, дәүләтселлек өлкәһендә генә түгел, ә партия ҡоролошонда ла ирекле үҙ билдәләнешкә ынтыла. Башҡортостан хөкүмәтен күҙәтергә һәм йүнәлтергә Йомағолов менән бергә шымсы-вәкил итеп юлландырылған инструктор-ревизор Н.В.Зарецкийҙың Мәскәүгә ҡайтҡас та яҙып тапшырған һәм 1919 йылдың 29 октябре менән тамғаланған докладына ҡарағанда, унда башҡорт автономияһы рухындағы "Совет Башҡортостаны коммунистарының Ваҡытлы Үҙәк Бюроһы" төҙөлгән (5 кешелек, араларында Н.В.Зарецкий ҙа бар) һәм уның үҙ органы — "Башревком һәм Совет Башҡортостаны коммунист-большевиктарының Үҙәк Бюроһы Хәбәрҙәре" тигән, редколлегияһында Х.Йомағолов та ағза булып торған үҙ гәзите булдырылған... Инструктор-ревизор шул эштәргә бәйле ныҡ киҫәтә Мәскәү түрәләрен: "Вәлидовта Ҡырғыҙ[52] Ревкомы менән берләшеү ынтылышы бар (бына ни өсөн аҙаҡ Башҡортостан һәм Ҡаҙағстан араһына Ырымбур, Силәбе, Свердловск буфер өлкәләре ҡороп айырғандар туғандаш ике халыҡты! – Й.С.) һәм әгәр Башревкомдың Ырымбурға күсеүенә юл ҡуйһаҡ, был хәлдәр был республикаларҙың ҡушылыуына мөмкинлек бирәсәк, йәғни, минең фекеремсә, улар менән айырым-айырым эш ҡылыу еңелерәк, шуға күрә Башревкомдың Ырымбурға күсеүенә юл ҡуймаҫҡа кәрәктер... "Башҡорт юлбашсылары" тип йөрөтөлгәндәргә әйләнеп ҡайтып, шуны әйтәм: беҙгә улар менән яҡшы мөнәсәбәттә ҡалыу икеле... Әммә бөтә был эш, һис шикһеҙ, автономия флагы аҫтында барырға тейеш" (ЦГАОО Р.Б., ф. 9776, оп. 2, л. 38 — 40). Һәм шул мәкерле эштәрен тырышып үтәйҙәр ҙә: Ракай (Рычков К.М.) 23.01.1920 Өфөнән Мәскәүгә -- Ленин, Троцкий, Енукидзе иптәштәргә һуҡҡан телеграммаһында былай ти: "...русские власти и группа стали усиленно информировать центр неправильно, а на месте держали себя самым вызывающим образом, благодаря чему был вызван целый ряд недопустимых недоразумений, особенно ярко выявились враждебные отношения с приездом товарища Артема... Накануне моего отъезда из Стерлитамака тов. Артем на пленарном заседании Башревкома от имени обкома, которого в действительности нет и членом которого не состоит, и группы центровиков ультимативно предъявил ряд требований Башревкому, дав на размышление пять минут. Башкиры были озадачены и не успели обменяться мнениями в такой краткий срок, после этого Артем объявил от имени центрального правительства РСФСР, что все сношения с Башревкомом отныне прерываются, что Башревком отныне считается незаконным правительством Башреспублики, после этого от башкирских учреждений именем тоже [не]сущест[вующего обкома] были отозваны коммунисты..." (Б.Х.Юлдашбаев төҙөгән документтар йыйынтығы,3 (II) том, №679. Артабан бирелә: Б.Х.Ю.). Был юлдарҙан РКП(б) Үҙәк Комитетының һәм Совет хөкүмәтенең Башҡортостан автономияһының киләсәгенә ҡайһылай ҡарауҙары асыҡ күренә... Мәскәүҙән тәғәйенләнгән һәм үҙҙәрен РКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты ағзалары итеп һанаған, Башҡорт Хөкүмәте өҫтөнән бойороп ҡына ултырырға керешкән урыҫ-татар большевиктар төркөмө менән бер тигеҙ һөйләшерлек башҡорт коммунист Башревком ағзалары араһында тик берәү – Сөләймән Мырҙабулатов ҡына булғанлыҡтан, БВРК рәйесе Харис Йомағолов башҡорт лидерҙарын тиҙләтеп партияға алыу бурысын ҡуя һәм был бурыс коммунист С.Ш.Мырҙабулатов тарафынан еренә еткереп үтәлә. Әле әйтелгәндәр Мәскәү эмиссары Э.М.Юхневич шикәйәтнамәһендә дөрөҫләнә: "Я в то время

[52] Ҡырғыҙ — хәҙерге ҡаҙаҡ.

поступил на службу в секретариат Башревкома (теперь управделами). Юмагулов почему-то в то время не обращал внимания на партийную работу. По инициативе некоторых товарищей была все-таки организована коммунистическая ячейка при Башревкоме, в которую вошло около десятка партийных товарищей, но действительных членов РКП было только трое, именно: тов. Мурзабулатов (б. председатель Башчрезвычкома), тов. Мажаев (секретарь наркомпроса) и я" (шунда уҡ, №677, 419-ынсы бит). Шул йылдарҙың шаһиты (коммунист) Ғ.М. Рәхмәтуллин Сөләймән Мырҙабулатовтың тап Саранск осоро

Саранскиҙағы туйҙа ҡатнашыусылар, арттағы буйҙа һулдан беренсе С.Ш. Мырҙабулатов.

тураһында 1921 йылда ошолай яҙа: "...Мырҙабулатов иптәш бында ҡыҙыл әрмистәр араһында *коммунистар партияһы исеменән* эш *итеүсе һәм партия программаһы менән таныштырыусы берҙән-бер өгөтсө булды.* Бына шуға күрә лә уны башҡорт ярлылары революция түңкәрелешенең иң тоғро улдарының береһе һананы, шулай уҡ хәҙер ҙә башҡорт ялпыларының тормошон еңеләйтәсәк яҡты юлға алып барыусы тоғро етәксеһе һанай. Шуға ла уның партия эшмәкәрлеге башҡорттар араһында ғәжәп ҙур тәьҫирле, партия өсөн дә ифрат ҡиммәтле булды. Тап уның тәьҫире һәм өгөтө арҡаһында ошоғаса бик күп башҡорт ярлылары партия сафтарына ылыҡтырылды, әгәр шулай артабан да дауам итһә, киләсәктә уғата ҙурырак уңышҡа ирешер инек. Бөтә намыҫлы башҡорт коммунистары ғына түгел, ә башҡа милләтле иптәштәр ҙә ысын йөрәктән уның үткән эшмәкәрлеге тураһында, коммунистик идеалдарҙы башҡорт ялпылары араһында таратыусы ҡиммәтле эшмәкәр булыуын хәбәр итерҙәр, тип ышанам" (ЦГИА РБ, ф. Р-1107, оп. 1, д. 113, л. 12).

Саранскиҙа саҡта Мырҙабулатовтың шәхси тормошонда ла бер үҙгәреш була: Башҡорт хөкүмәтендә эшләгән фарсы революционере Исмәғил Муһлиә менән Ғәрифә Мансурованың никах туйында Сөләймән үҙенең буласаҡ хәләл ефете Фәриҙә (Ғәрифәнең бер туған апаһы) менән таныша, ике йылдан һуң өйләнешәләр. Ә.В.Туғандың "Хәтирәләр" китабына теркәлгән туй ҡатнашсылары фотоһында был туташ туй күлдәкле һеңлеһе янында ултыра, артҡы буйҙа һулдан беренсе -- С.Ш.Мырҙабулатов (С.М. тип билдәләнде).

Фәриҙә Мырҙабулатова

Хөкүмәтебеҙҙең Саранскиҙан Башҡортостанға (Өфө гөбөрнәһендә килеш ҡалдырылған Эстәрлетамаҡ ҡалаһына) күсеп ҡайтыу мәсьәләһе Башревкомдың 1919 йыл 31 июль ултырышында ҡаралып, күскендәрҙең бер өлөшө — 4 августа, икенсеһе 5-дә сәфәр сыға. "Саранск ҡалаһынан эвакуацияланырға тейешле кешеләрҙең 1919 йыл август айына ҡарата исемлеге" тигән документта Башҡортостан Хөкүмәтенең һәр органының аталышын, уларҙың кешеләренең фамилияларын күрәбеҙ (ЦГИА Р.Б., ф. 1107, оп. 1, д. 102, л. 99).

Өфө етәкселеге башҡорт автономиясыларын штыктар тоҫҡап ҡаршылай, тиһәк тә яҙыҡ булмаҫ:

"Мәскәү, Кремль, наркомпрод Цюрупаға Өфөнән хәрби телеграмма. Алыныу номеры 9564/т, 12 сентябрь 1919 йыл.

Йомағолов һәм Ҡарамышев йөҙөндәге Башревком Губревкомға килде, Бәләкәй Башҡортостан территорияһындағы бөтә совет аппараттарын үҙҙәренә тапшырыуҙы талап иттеләр... Башревкомдың ҡылығы йүнһеҙ, улар, йәнәһе, урыҫ совет хөкүмәте башҡорттарҙы талай һ.б. тип һанай... Башревком менән конфликт буйынса, Сембер аша тура үткәргестән бөтә тулылығы менән директивалар биреүегеҙҙе һорайбыҙ.

Өфө Губревком рәйесе: **Евлампиев**.

Губкомпартия рәйесе: **Кривов**" (ЦГИА РБ, ф. 1107, оп. 1, д. 102, л. 89.).

Һуғышҡа әҙерлек тап һуғыш сыҡҡандағыса ҡыҙыу бара:

"Йәшертен. Доклад.

Гарнизон башлығының доклады буйынса, хәҙерге ваҡытта Өфөлә 16000 һалдат, 5 900 мылтыҡ, 4 туп, 5 пулемет, 150 000 мылтыҡ патроны һәм 75 дана йәҙрә бар. Башҡортостандың яуға ҡуҙғалыуы осрағында беҙ 5 000 штыкка иҫәп тота алабыҙ, һәр һалдаттың 30 дана патроны буласаҡ.

Башҡортостандың ике бригадаһы һәм бер еңел батареяһы (4 туп) һ.б. булыуын иҫәпкә алғанда... беҙ ошо көс һәм сарыфка иҫәп тота алабыҙ".

Өфөнән тороп Автономиялы Башҡорт Совет Социалистик Республикаһын *РСФСР-га дошман* сит дәүләт рәүешендә ҡарау, шуға бәйле Башҡортостан территорияһында темеҫкенлек агентуралары йәйелдереп, йәшертен мәғлүмәттәр йыйыу һәм шулар нигеҙендә *башҡорттарға ҡаршы һуғышҡа әҙерләнеү*...

Шуныһы мөһим: йәш республика етәкселәре Өфө большевиктарына башҡорт халҡын көпә-көндөҙ үкертеп талауҙарын ап-асыҡ итеп әйткән. Өфө етәкселеге Мәскәүҙән һораған ул директивалар, бәлки, алынып та өлгөрөлмәгәндер (ә бәлки, өлгөрөлгәндер?), ләкин ғәйәр өфөләр, уткүршегә ҡарата тыныс сәйәсәт үткәреүҙе ситкә ташлап, башҡорттарҙы ***ҡоралды көс менән*** *тар-мар ҡылырға* ***ысын һуғыш*** *әҙерләй.* Хөкүмәтебеҙ урынлашҡан Эстәрлетамаҡҡа Мәскәү шымсы-вәкиле һәм бойорманы итеп ебәрелгән бер төркөм большевиктар, Өфө һәм Ырымбурҙыҡылар менән аҫтыртын берләшеп, башҡорт лидерҙарын быраҡтырырға хөкүмәт түңкәрелеше әҙерләй, ләкин Туҡ-Соран ревкомы рәйесе Мөхәммәтша Буранғолов (булсаҡ башҡорт халыҡ сәсәне) тарафынан фетнәләре көнәлгәре фашланып, 1920 йылдың 16 ғинуарында БВРК-ның ашығыс ултырышында мәкерле төркөмдө (Измайлов Абдрахман, Шәмиғолов Ғәли, Мостафин Сәғди, Муценок) "ваҡытлыса ҡулға алырға"

ҡарар сығарыла (шунда уҡ, №634, 369-ынсы бит), әммә шулар араһында төптө нахаҡтан Сөләймән Мырҙабулатов та төрмәгә ябыла. Фетнәселәрҙең ҡулға алынмай ҡалғандары (Мәскәү вәкилдәре Сергеев-Артем, Самойлов, Дудник, Ярослав) ваҡиғаларҙың тиҫкәреһен әйләндереп, “башҡорт фетнәһе” тураһында мәркәзгә яр һала, һөҙөмтәлә тоҭҡондарҙы кисекмәҫтән азат итеү тураһындағы Ленин телеграммаһы һуғылып һәм башҡорт милләтселәрен ауыҙлыҡларға Төркөстан фронтынан Фрунзеның 200 һыбайлы ғәскәре ебәрелеп, бөтә ғәйеп “милләтсе Йомағолов” өҫтөнә өйөлә һәм ул мәңгелеккә ҡайтмаҫҡа Мәскәүгә “саҡыртып алына”; һәм бына РКП(б) өлкә комитетының 20 ғинуар ултырышында сығарылған ҡарар: ”Командировать тт. Измайлова и Мурзабулатова в ВЧК, тт. Шамигулова и Мустафина -- в политуправление Республики, тов. Шамигулова -- в ЦК, тов. Ярослава -- в ЦК РКП и ВЦИК со всеми материалами”. Күренеүенсә, Башҡортостандағы киҫкен ваҡиғалар тураһында мәғлүмәтте Мәскәүҙә, башҡорттарҙың үҙҙәренән түгел, ә Башҡорт Автономияһы дошмандарынан алалар. Юламандарҙың Шәмиғолов менән Ярославынан башҡаларын Өфөлә тоҭҡарлап, эшкә димләһәләр ҙә, С.Ш.Мырҙабулатов ҡырҡы баш тарта -- кире Эстәрлетамаҡҡа ҡайта һәм 30 ғинуарҙа республиканың Мәғлүмәттәр идаралығында инструктор булып эш башлай (ЦГИА Р.Б. ф. Р-1252, оп.2, ед. хр.14, л.52). Оҙаҡламай уны Тамъян-Ҡатай кантонындағы тәртипһеҙлектәрҙе тикшерергә хөкүмәт һәм партия өлкә комитеты тарафынан махсус вәкәләтле ревизор итеп ебәрәләр һәм ул ундағы В.Поленовты, алдағы көндәрҙә башҡорттарҙың ҡанын эсәсәк яуызды, “республиканың дошманы” рәүешендә фашлай, уны хөкөмгә тарттырыуҙарын һорай, ләкин партия әһелдәре буласаҡ палачты ел-ямғыр тейҙертмәй ҡурсалап, Башҡортостанда Шәмиғоловтың ҡанлы диктатураһы ҡоторонған осорҙа Бөрйән-Түңгәүер кантонына сикләнмәгән хоҡуҡлы хаким итеп тәғәйенләйҙәр...

Уҙаманыбыҙҙың артабанғы тәржемәи хәлен, артыҡ оҙонға һуҙмаҫ өсөн, тәрәнерәк ҡыҙыҡһынғандарға документтарҙан ғибәрәт китапты (Йыһат Солтанов. Сөләймән Мырҙабулатов: заманы һәм көрәше. Өфө - 2006) күрһәтеп, ваҡиғаларҙы урыҡ-һурыҡ хәбәрләүгә күсәйек.

Шул 1920 йылда Шәмиғолов – Мансырев диктатураһына ҡаршы башҡорт халҡының ҡоралы милли-азатлыҡ көрәше – ихтилалы башлана һәм Сөләймән Мырҙабулатов туған халҡының шул дәһшәтле һуғышы менән етәкселек итеп, ике йөҙ йыл дауамындағы башҡорт ихтилалдары тарихында беренсе тапҡыр уны еңеүгә килтерә. Ошоноң арҡаһында башҡорт халҡы үҙенең милли йөҙөн, автономиялы Башҡортостан республикаһы рәүешендәге үҙ дәүләтселлеген, ер йөҙөндә үҙ еренең аҫаба-хужаһы булып йәшәү хоҡуғын мәңгелеккә юҡ ителеүҙән ҡурсалап ҡала алды, был ихтилал бөгөнгө Башҡортостан Республикаһының булмышын һәм яҙмышын тәьмин итте. Еңеүле ихтилал арҡаһында Мәскәүҙең милли сәйәсәте йомшарып, совет тарихында беренсе тапҡыр республика хакимиәте башына башҡа милләт килмешәктәре түгел, ә башҡорттарҙан Әхмәҙулла Биишев (партияның өлкә комитеты сәйәси секретары), Муса Мортазин (БашЦИК рәйесе), Муллаян Халиҡов (Башсовнарком рәйесе) һ.б. килде; башҡорт теле, тарихта беренсе тапҡыр, урыҫ теле менән бер ҡатарҙан республиканың дәүләт теле итеп раҫланды. Башҡорт телендә матбуғат, китап баҫыу эштәре яйға һалынды. Башҡорттарға юғары уҡыу йорттарына кереү өсөн өлөштәр (вакансиялар) булдырылды һәм башҡалар, һәм башҡалар...

Тора-бара хөкүмәттә Наркомзем булып эш башлаған С.Ш.Мырҙабулатов Советтарҙың 1921 йылдың 1-4 июлендә барған II Бөтөн Башҡортостан йыйынында шул вазифаһында раҫлана. Күп ғазаптар кисереүсе халҡы өсөн йәне әрнегән уҙаман 1921

йылғы аслыҡта башҡорт халҡын ҡырып бөтөрөү өсөн Мәскәү вәкилдәре аҫтыртын бойомға ашырған геноцидты, тәғәйен һандар килтереп, асыҡтан-асыҡ фашлай, аслыҡ касафатын бөтөрөү, бигерәк тә ер мәсьәләһендә ғәҙел закондар булдырыу хаҡына ныҡышмалы көрәшә. 1922 йылдың 28 февралендә партия Өлкә комитеты оргбюроһының Е.Г.Пестун (Мәскәү вәкиле) ҡатнашкан ултырышында тап ошо хаҡта Башнаркомзем С.Ш.Мырҙабулатовтың тәрән эстәлекле доклады тыңлана, уның фиҙаҡәр эшмәкәрлегенә «Наркомземдың удар эше итеп танырға» тигән юғары баһа бирелеп, ер тураһында ул күтәргән бөтә мәсьәләләр буйынса ла эшлекле ҡарар ҡабул ҡылына. Әммә иң-иң мөһиме -- Башнаркомзем С.Ш.Мырҙабулатов тәкдим иткән ер тураһындағы хөкүмәт фармандарының проекттарын хуплау һәм: «Был фармандар РКП обкомы тарафынан хупланды һәм партияның бөтә ағзалары, уларҙы тормошҡа ашырыу өсөн, көстәрен егергә бурыслы», -- тигән ҡушымта менән нығытылып ҡуйылыуы ине (ЦГАОО РБ, ф. 22, оп. 6, д. 4, л. 29.). Һөҙөмтәлә шул уҡ 1922 йылдың 2-4 мартында БашЦИК тарафынан «Ерҙе баҫып алыуҙар тураһында», «Үҙ белдекле күсеп килеп ерегеүҙе тыйыу тураһында», «Биләмә эсендәге ҡортом тәртибе тураһында» башҡорт халҡы яҙмышындағы тарихи 5, 6, 7-се фармандар бер-бер артлы матбуғатта илгә иғлан ҡылына, фармандарға БЦИК рәйесе эштәрен ваҡытлыса башҡарыусы Хоҙайбирҙин, Совнарком рәйесе Халиҡов, Башнаркомзем Мырҙабулатов, ВЦИК-тың тулы хокуклы вәкиле Пестун үҙе ҡул ҡуйған һәм БЦИК сәркәтиплеге мөдире А. Львов дөрөҫләгән. Ерекмән улы, ер кешеһе С. Ш. Мырҙабулатовтың иң мөҡәддәс ниәтенә ирешеү көнө ине был -- документтарҙың бөйөк баһаһын, ***Халыҡ тантана итте,*** тип кенә билдәләү мөмкиндер. Совет Башҡортостаны осоронда һәм, ғөмүмән, Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң, ер мәсьәләһе буйынса, ниһайәт, төп халыҡтың мәнфәғәттәрен дә ғәҙел иҫәпкә алыусы иң тәүге лә, һуңғы ла була шикелле был канундар (1922 йылдың 27 апрелендә ВЦИК Президиумы ҡарары менән юҡҡа сығарыла). Туранан-тура Мәскәүгә буйһондортолған һәм башҡорт автономияһының дошмандары оялап алған Башчека темеҫкәндәре Мырҙабулатовтың һәр аҙымын һағалап “компромат” эҙләй, ҡаһармандың башы осонда ҡара болоттар ҡуйырғандан-ҡуйыра...

«Ғәҙәттән тыш йәшертен. 1922 йылдың... апрель көнө (махсус рәүештә числоһы ҡуйылмай ҡалдырып яҙылған -- алдан алдыртып, ер тураһындағы баяғы тарихи фармандарҙың Үҙәктән кире ҡағылыу мәленәрәк тура килтереү өсөн әтмәләнгән булһа кәрәк был ҡағыҙ. -- Й.С).

Башобком Контроль комиссияһына № 165 меморандум.

Баш. ОГПУ (БашЧК-ның яңы исеме. -- Й.С) агентура мәғлүмәттәренән -№... (тағы номер һаны ҡуйылмай ҡалдырылған. -- Й.С) агентура эше буйынса, 456,45,260,426,629 һәм 738-се номерлы (һәй, маладис чекистар – нисәмә-нисә агент егелгән эшкә! -- Й.С.) шикайәтнамәләр буйынса.

Башнаркомземда нарком Мырҙабулатов һәм уға буйһоноусыларҙың ҡылыҡтары һәм эше тураһында...»

Ошондай оҙон баш аҫтында чекистарҙың артабан дүрт пункттан ғибәрәт «фашлау»ҙары килтерелә (иншалап бирәбеҙ):

1. Мырҙабулатов һәм уның урынбаҫары Хәсәнов ҡала ойошмалары хеҙмәткәрҙәренән хасил «коллективтарға» (йәғни ҡомһоҙ чиновниктарға. – Й.С.) Наркомзем фондынан орлоҡ игене биреүҙән баш тартып, бөтә ғаризаларын ҡала хужалығы идараһына йүнәлтә (бик дөрөҫ, ғәйепләргә нигеҙ юҡ бында, беҙҙеңсә! – Й.С.), шул уҡ ваҡытта «хосуси хужалык эйәләре булған үҙенең яҡындарына һәм таныштарына, мәҫәлән,

Фәхретдиновка, Ибраһимовҡа, Хәйҙәр Ҡолсуринға һәм Ҡыуатовка орлоҡ игене бирҙертәләр». Быныһы ла бик ғәҙел һәм канунлы, сөнки һаналған фамилиялар ныҡ асығыусы Үҫәргән кантоны ерекмәндәре, ә был кантон иң таланған, иң асыҡҡан, иң күп ҡырылғандарҙың береһе бит. Ошоно дөрөҫләгәндәй, Мәскәү вәкиле Е.Г.Пестун 1922 йылдың 6 мартында «Петроградская правда» гэзитенең мөхәрририәтенә былай тип яҙа: «Башҡортостан иң ауыр айҙар кисерә, бер *Үҫәргән* кантонында ғына ла 1000 кеше астан үлде, 27 кешене үлтереп ашау осраҡтары теркәлгән. Ауылдарҙа РКП һәм РКСМ ағзалары хәйерселектә, халыҡ менән бер ҡатар ҡырылалар. Апреддә ни булырын күҙ алдына килтереү ҡыйын...» (ЦГАОО РБ, ф. 22, оп. 5, д. 23, л. 57). «Меморандум» пункттарын барлауҙы дауамлайыҡ.

Каптенармус Лосянский әйтеүенсә (ғәййәр чекистар документҡа нигеҙләнеп түгел, ә кемдеңдер ғәйбәт һүҙенә таянып ғәйепләйҙәр), Наркомзем Мырҙабулатов үҙенең асығыусы хеҙмәткәрҙәренә Башнаркомзем келәтенән он бирергә рөхсәт иткән. Быныһы ла урынлы, сөнки тоташлай аслыҡ йылында үҙ хеҙмәткәрҙәренең аска үлеүен, йәки эште ташлап аҙыҡ эҙләп сығып китеүен көтөп ултырмай уңған етәксе.

3. Башнаркомземдың Хужалыҡ бүлегендә ***«документтар буйынса»*** 23 шешә спирт, бер-нисә (ниңә «бер-нисә», ә тәғәйен һан түгел?) мең бот иген сарыф ителгән, ә шулар бүлек кенәгәһенең керемдәр исемлегенә теркәлмәгән, тип, аппарат бүлек мөдиренең иҫәп-хисап буйынса әрпешлеген дә туранан-тура Наркомземдың үҙенә йәбештермәкселәр. Наркомземда асығыусылар файҙаһына аҡса йыйыу өсөн кисәләр (бал кисәләре, лотерея кисәләре һ.б.) уҙғарылыуы, шуның өсөн, «ҡайҙандыр алынып» (документ юҡ, ә «моғайын, ветбүлектәндер», тип юрала!..), табынға спирт ҡуйылыуы шикәйәт итеүлә лә шунда уҡ шул спирттың нәҡ шунда (асығыусылар файҙаһына үткәрелгән кисәләрҙә) тотонолоуы төптө «онотолоп», әлеге 23 шешә спирт йәнәһе Мырҙабулатовтың кәләш алыу туйында эселгән, тип, фокуссылай бармаҡ осонан һурып алып раҫлана. Туй үткәреү өсөн нарком 16, 17 һәм 20 февралдә бөтәһе ике ярым бот (ҡырҡ кило!) он яҙҙыртып (урлап түгел!) алған, тип тә оло ғәйепләнә (туй табынында бөтә дәүләт эшмәкәрҙәре, тип әйтерлек, катнашҡан). Канцелярияға ҡағыҙ-ҡәләм һатып алыу өсөн тотонолған аҡсаның да бер өлөшөн йәнәһе Мырҙабулатов, Хәсәнов, Сәлихов үҙләштергән, тип, бер ниндәй ҙә дәлилһеҙ (документтарға һылтаныуһыҙ) ғәйепләйҙәр.

4. Эстәрлетамаҡтан мөфтөй Халиҡов (Башҡортостандың беренсе үҙ аллы Дини идаралығының беренсе мөфтөйө) тигән ерекмәнгә 32 бот сәсеү орлоғона рөхсәт биреп ярҙам күрһәтеү ҙә оло гонаһ һанала.

«Меморандум»дың ҡойроғона һөйрәлтке лә тағылған:

«Кемгә нимә йөкмәтелеүе:

Башобкомдың Контроль комиссияһына -- РКП(б) ағзаһы Мырҙабулатов иптәш тарафынан ҡылынған енәйәттәрҙе партдисциплина көсө аша туктатыу йәһәтенән тейешле саралар күреү бурысы. БОГПУ-ға ғәйепләүнамәләр килә тора (темеҫкендәре шәп эшләй! – Й.С.) һәм улар артабан да, килеп етеүе менән үк, һеҙгә ебәреләсәк. Карарығыҙ тураһында БОГПУ-ға хәбәр итеүегеҙҙе һорайбыҙ.

Аңлатма: БОГПУ-нан Контроль комиссияһына шул уҡ әҙәмдәр тарафынан 200 бот совхоз ононоң (баяғы тәүге документтағы асығыусы дәүләт һәм хөкүмәт эшмәкәрҙәренә таратып бирелгән он. – Й.С.) урланыуы тураһында ғәйепләүнамә ебәрелде.

ОГПУ-ның Иктисад бүлеге башлығы: **Аксенов**» (ЦГАОО РБ, ф. 22, оп. 2, д. 488, л. 5).

Иғтибар итәйек: «*РКП(б) ағзаһы Мырҙабулатов*» тураһында һүҙ бара бында -- 1921 йылғы «бөйөк таҙартыу»ҙан һуң да ул партия сафында тора биргән. Һәм был юлы ҡаһарманды бер һуғыуҙа юҡ итеү -- партиянан да сығарыу, Ревтрибуналға ла тарттырыу өсөн мәкерле эш ҡуйыртыла.

Ул аслыҡ ғәрәсәтендә дәүләт органдары эшмәкәрҙәрен аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеүсе махсус хеҙмәт булмаған, уҙамандарҙың ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү Башнаркомзем хәстәрлегенә ҡараған. Шуны бик яҡшы белә тороп, бәләһеҙгә бәлә өйәләр:

«Башнаркомзем Мырҙабулатов иптәште, нарком урынбаҫары Төхвәтуллин иптәште, начглавсельхоз Сәлиховты, завхоз Таһировты һәм хозподотдел мөдире Урманцев иптәште 200 бот он һәм 40 бот бәрәңге байлығын әрәм-шәрәм итеүҙәре өсөн ғәйепләүсе 1958-енсе номерлы эш буйынса доклад.

Эштең асылы. 1921 йылдың 20 октябрендә Константин совхозынан билдәһеҙ маҡсат өсөн 100 бот он һәм 40 бот бәрәңге ҡайтарылған... Бер-нисә көндән һуң, Башнаркомзем урынбаҫары Төхвәтуллиндың әмере менән һәм нарком Мырҙабулатовтың хәбәрдарлығында завхоз Таһиров ул ондан, алдан әҙерләнгән исемлек буйынса, эшсе Йәғәфәров аша түбәндәгеләргә өләшеп биргән:

Наркомвоен һәм БашЦИК рәйесе Мортазинға дүрт бот он (бер бот үлсәм 16 килограмға бәрәбәр. — Й.С.).

Наркомздрав Ҡыуатовҡа ике бот он.

БашЦИК рәйесе урынбаҫары Халиҡовҡа дүрт бот он.

Наркомзем Мырҙабулатовҡа бер ярым бот он.

Һәм яуаплы вазифалы кешеләргә:

Ғәлекәйевкә (РКИ-ҙан) дүрт бот.

Сәлиховҡа (Наркомземдан) бер ярым бот. Бөтәһе ун ете бот он.

Бәрәңге:

Ҡыуатовҡа ике бот.

Ибраһимовҡа биш бот.

Ивановҡа биш бот.

Сәлиховҡа биш бот.

Мутинға ике бот.

Мырҙабулатовҡа биш бот.

Төхвәтуллинға биш бот. Бөтәһе утыҙ туғыҙ бот бәрәңге»...

29 октябрҙә төндә Урманцевтың келәтендәге ҡалған алтмыш бот ондо, тип әйтелә темеҫкеннамәлә, билдәһеҙ бәндәләр урлап алып киттеләр (чекистарҙың үҙҙәренең ҡылығы булыуы ихтимал). Чекистар Урманцевтан йәнә Наркомзем келәтендәге йөҙ бот ондоң төрлө наркоматтарҙа эшләүсе хеҙмәткәрҙәргә исемлек буйынса таратылып бирелеүен дөрөҫләүсе документтар алалар. Күренеүенсә, 200 бот он менән 40 бот бәрәңгене бер кем дә бер ҡайҙан да урламаған, ә, күренекле хөкүмәт эшмәкәрҙәре һәм уларҙың ғаиләләре, шулай уҡ хөкүмәт аппаратының башҡа хеҙмәткәрҙәре аска үлмәһен өсөн, заманаһы тәртибендәге ҡағыҙҙарға теркәлеп, шуларҙы тәьмин итеүгә тотонолған. Әммә ғәйепләүнамәнең йомғаҡлауында наркомдарҙың был ҡәҙимге көнкүреш сараһына әүерелмеш үҙтәьминәт ысулы менән тамаҡ туйҙырыуҙарын «халыҡ милкен урлау менән бәрәбәр» тип тамғалайҙар; ә аҙыҡ-түлекте совхоздан ҡайтартып тараттырыусы Башнаркомзем Мырҙабулатов менән уның урынбаҫары Төхвәтуллинды һәм

Мортазиндың урынбаҫары Халиҡовты үҙҙәренең юғары вазифаларын шуға файҙаланыуҙа ғәйепләйҙәр (ЦГАОО Р.Б., ф. 22, оп. 5, д. 8, л. 65).

Башнаркомземды алмаштырыу мәсьәләһе Башобком бюроһында ике тапҡыр -- 1922 йылдың 17 май һәм 9 июнь ултырыштарында ҡарала ла һуңғыһында Башнаркомзем эшен ваҡытлыса башкарыусы итеп уның урынбаҫары Төхвәтуллин раҫлана, ә «Мырҙабулатов иптәш Обкомпомголда эшләргә ҡалдырыла» (ЦГАОО РБ, ф. 22, оп. 6, д. 3, л. 70, 80). Ошонан һуң уҙаман ул ойошмала бөтә көсөн һәм талантын асығыусылар хәлен яҡшыртыу хеҙмәтенә арнай. Билдәле булыуынса, күпме генә көсәнеп бысраҡ атһалар ҙа, дошмандары С.Ш.Мырҙабулатовтың аҡ намыҫын керләй алмаған, шуға күрә ул партиянан да сығарылмаған, Ревтрибунал хөкөмөнә лә тарттырылмаған. Улай ғына ла түгел, Башҡортостан күгендәге яҡты есемдәр араһында ул, әүәлгеләй, беренсе дәүмәлле йондоҙ булып балҡыуын дауам иткән: Өфө гөбөрнәһен Бәләкәй Башкортостан республикаһына ҡушып Оло Башҡортостан - БАССР барлыҡҡа килгәс тә ул 1922 йылдың 6-7 июлендә партияның шул ике өлкә ойошмаһы пленумдарының берләштерелгән ултырыштарында бер тауыштан БЦИК Президиумы ағзаһы итеп раҫлана, шул ҡарар 18 июлдәге БЦИК ултырышында һәм берләштерелгән яңы БашЦИК-тың 21 июлдәге №2 фарманында раҫлана (ЦГАОО РБ, ф. 122, оп. 1, д. 6, л. 1-4; ЦГИА РБ, ф. 394, оп. 5, д. 10, л. 380 һәм ф. 101, оп. 1, д. 83, л. 6). Уҙаман һаман халыҡ файҙаһына арыу-талыу белмәй эшләй, уның һынмаҫ рухы һаман ғәҙеллек, халыҡ бәхете өсөн көрәшкә өндәй. Ул һаман үҙенең арҡадаштары араһында -- фидаиланып Башҡортостанға хеҙмәт итеү юлында.

Әммә Кремль мыйыҡлыһының мәкерле ғәмәл дәфтәрендә ҡаһармандың исеме күптән үк ҡара исемлеккә теркәлгәйне шул. Державаның дилбегәһен яйлап ҡына Лениндың ҡулынан һыпырып ала башлаған «милләттәр белгесе» Сталиндың ҡаҡшамаҫ ҡануны бер: державаның офоғона уның ҡулы һыҙып сикләгән хаҡ кимәлдән бер кемдең дә башы өҫкәрәк сурайып сығырға хаҡы юҡ (милли республикаларҙан – бигерәк тә!)... Сурайған баштарҙың береһе, Е.Г.Пестун, шул йылда уҡ Башҡортостандан алынып, түбәнерәк вазифаға Донбасс яғына олаҡтырыла, ә ныҡ сураймыш милли кадр С.Ш.Мырҙабулатов иптәш Сталиндың бына-бына киң ҡолас йәйәсәк тоталитар репрессияларының 1923 йылғы генераль репетицияһындағы тәүгеләрҙән-тәүге ҡорбан ролен үтәргә тәғәйенләнә -- бер атыуҙа нисәмә ҡуянды алмаҡсы мәкерле йән. Эш шунда: автономиялы республикаларҙы баяғы үҙе һыҙған кимәлдән сығартмай тотор өсөн, артыҡ сәмле милли эшмәкәрҙәрҙе бөтәһен бер юлы өркөтмәккә, бөтөн Союз күләмендәгерәк ҡуркыныс ҡараскы кәрәк; быға тиклемге «вәлидовсылыҡ» караскыһы, беренсенән, тәьҫир көсө Башкортостан менән генә сикләнеп, икенсенән, Вәлидов үҙе сит илгә олаҡҡанлыҡтан, дөйөм өркөткөс вазифаһын үтәй алмай башлаған, быныһы бер. Икенсеһе, Вәлидовһыҙ ҡалғанда ла Башҡортостан, бөтә донъя ялпыларына Ленин үҙе өлгө ҡылған иң беренсе автономиялы республика рәүешендә, улар өсөн иң мөкәддәс *милли* һәм *ер* мәсьәләләрендә, баяғыса, ауыҙлығын сәйнәп өҙөргә үрһәләнеп, зарарлы өлгө бирә бит башҡаларға. Өсөнсөһө, былтыр ғына РКП(б)-ның X йыйынында Сталин иптәш «Милли мәсьәлә буйынса партияның нәүбәттәге бурыстары тураһында» доклад яһағандан һуң, фекер алышыуҙа ҡупҡан зарарлы бәхәс. Наркомнац Сталин иптәштең үҙ ҡулы аҫтында эшләгән татар коммунисы Мирсәйет Солтанғәлиев, Сталин иптәштең заманға ифрат мөһим ҡалтайтылмыш «бөйөк державасы шовинизм» һәм «буржуаз милләтселек» терминдарын партияға аслан аңлатып биреүенән ҡәнәғәтһеҙлек белдереп,

уларҙы үҙенсә тылсымлап, бигерәк тә «буржуаз милләтсе» термины тәңгәлендә зарарлы һүҙ ҡуйыртты... Һәм бына күҫәк:

«Вәлидов һәм Солтангәлиев (татарлашҡан башҡорт) -- иҫке дуҫтар, фекерҙәштәр ине. Вәлидов та, Солтангәлиев та бер маҡсат ҡуйҙылар үҙ алдарына -- «Туран дәүләтен төҙөү».

Башҡортостанда вәлидовсы контрреволюцион ойошмалар йәнәшәһендә Солтангәлиевтың контрреволюцион төркөмдәре йәшәне һәм хәрәкәт итте. Был төркөмдәр менән Әҙеһәмов, Мортазин, Халиҡов, ***Мырҙабулатов*** *һ.б. етәкселек итте»* (КГБ белешмәләренән).

Сөләймән Мырҙабулатов яҙмышы БАССР-ҙың баш ҡалаһы Өфөлә 1923 йылдың 28 майында РКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты президиумының ябыҡ ишек артындағы ифрат йәшерен ултырышында ***коммунист Мырҙабулатовтың*** үҙенән башҡа хәл ҡылына. Ултырҙаштар: президиум ағзалары Герасимов, Халиҡов, Ашрапов, Беляев, Ҡушаев, Фогель, Нехаев, Трегубенков, Бычков; Контроль комиссияһы ағзалары Юрцен, Готовцев, Опарин; саҡырылып килеүселәр: А.Х.Белогуров (БОГПУ башлығы), Ю.Н.Паперный (Аҙыҡ-түлек наркомы), А.К.Әҙеһәмов (Мәғариф наркомы) һәм... кем тип уйлайһығыҙ?!. -- әлеге лә баяғы шул Шәмиғолов -- 1920 йылда геноцид сәйәсәте үткәртеп башҡорт халҡын ҡырҙыртҡан һәм С.Ш.Мырҙабулатов ихтилалы арҡаһында Башҡортостандан тәкмәстерелеп олаҡтыртылған, шунан һуң РКП(б) Үҙәк Комитеты янындағы Көнсығыш халыҡтары коммунистик ойошмалары бюроһына ҡара йыландай кереп оялаған советтар осоро тәфтиләүе Ғ.К.Шәмиғолов... Емтек таҙғараһылай, ҡан еҫен танһыҡлап, Сталиндың тоғро ҡулы, күҙ-ҡолағы булып ҡыйғырлап килеп төшкән... Шулай ҙа был хөкөм залына, әле әйтеүебеҙсә, төп ғәйепләнеүсе С.Ш.Мырҙабулатовтың үҙен яҡын юлатмайҙар, ҡурҡалар...

Ултырҙаштар, юғарынан төшөрөлгән милли-сәйәси йөкләмәне ҡаршылыҡһыҙ теүәл үтәп, ҡырҡыу милли мәсьәләне хәл ҡылыу буйынса Сталин иптәш тәжрибәһен ифрат байыҡтыралар (был тәжрибә, әлбиттә, 1937 йылғы репрессияларҙа уларҙың үҙҙәренең дә башына етә). Ултырыш ҡарарының тейешле өлөшө ашығыс рәүештә тейешле органға атҡарыла:

«Ифрат йәшертен.

РКП(б) Башобком президиумының 1923 йылдың 28 май ябыҡ ишек артындағы ултырышының №26/46 протоколынан күсермә.

Тыңланыҡ: милли мәсьәлә буйынса партияның XII йыйыны резолюцияларын тормошҡа ашырыу өсөн ғәмәли саралар билдәләүгә бәйле ошо йылдың 7 июнендә Мәскәүҙә милли өлкәләр һәм республикаларҙың яуаплы эшмәкәрҙәренең кәңәшмәһен саҡырыу хаҡындағы; шулай уҡ Наркомнац Коллегияһының элекке ағзаһы, партияға ҡаршы һәм советтарға ҡаршы эше өсөн ғәйепләнгән һәм шуға күрә партиянан сығарылған Солтанғәлиев эше буйынса ЦКК рәйесе докладын тыңлау тураһындағы РКП Үҙәк Комитеты телеграммаһы. Герасимов иптәш доклады.

Ҡарар ҡылдыҡ: ...4. Мырҙабулатов һәм Бикбауов тарафынан Солтанғәлиев менән элемтә тотоуҙы, улар тарафынан татар-башҡорт массалары араһында яуаплы совет башҡорт эшмәкәрҙәрен күҙҙән төшөрөүҙе теүәл аныҡлап, Мырҙабулатовты һәм Бикбауовты яуаплы вазифаларынан бушатыуҙы, артабан Башҡортостанда бер ниндәй ҙә эштә файҙаланыуға юл ҡуймай, уларҙы ***ҡоторонҡо һәм зарарлы милләтселәр рәүешендә*** БССР сиктәренән тышҡа бөтөнләй һөрөргә кәрәкле тип һанарға.

Күсермә дөрөҫ һәм БОГПУ башлығы Белогуровҡа йүнәлтелә.

РКП(б) Башобкомы эштәре менән идаралыҡ ҡылыусы: (ҡултамға)» (ЦГИА РБ, ф. Р-1107, оп. 1, д. 113, л. 16).

Ошоғаса башҡорт дәүләт эшмәкәрҙәренән бер кем дә -- Вәлидов та, Йомағолов та -- ошондай рәсми ҡарар менән олактырылмағайны, ә «саҡыртылып» ҡына алынғайны. Хатта яһил БашЧК, ҡабаланып, ваҡытынан элек ҡулға алып өлгөргән Ә.Ә.Биишевте лә, М.Мортазин, М.Халиҡов кеүек арҡадаштарының тырышлығы арҡаһында, Эстәрлетамаҡ төрмәһенән сығарып, дәүләт эшмәкәрҙәренә тәғәйенләнмеш уңайлы вагонда оҙаткайнылар бит Мәскәүгә...

Мәскәү сәйәси һөргөнөндә интеккән Мырҙабулатовтар ғаиләһе, ниһәйәт, тыуған илгә ҡайтырға рөхсәт ала: 1926 йылдың 7 июнендә Мәскәүҙәге Башвәкәләтлек тарафынан бирелгән танытмала уның Йылайыр Сельпромхозы (хәҙерге Ҡыуандыҡ ҡалаһында урынлашҡан) һорауы буйынса иленә ҡайтарылыуы әйтелә, был -- ҡаһармандың Мәскәүҙәге сәйәси һөргөнөнөң ахыры, иң һуңғы эҙе, буғай. Ҡыуандыҡҡа ғаиләһе (әсәһе Шәрифә инәй ҙә бергә) менән килеп ерегеүен 1927 йылдың ғинуарындағы һайлау хоҡуғынан мәхрүм ҡылыныусылар исемлеге дәлилләй:

«...958. Мырҙабулатов Сөләй.

959. Мырҙабулатова Фәриҙә, 26 йәштә.

960. Мырҙабулатова Шәрифә, 67 йәштә» (ЦГИА РБ, ф. Р-834, оп. 2, д. 4а, том. 2, л. 603).

Тоталитар режимдың рәхимһеҙ ҡанундарына ярашлы, ҡаһарман менән бергә уның һис бер сәйәсәткә ҡатнашмаған ҡатыны, әсәһе лә граждандыҡ хоҡуҡтарынан мәхрүм ҡылынған...

Тыумыштан уҡ ерекмән һәм мөкиббән мөғәллим булараҡ, тыуған төбәктә кооперативтар, колхоздар ойоштороу, ауылдарҙа яңы мәктәптәр һалдыртып астыртыу (мәҫәлән, Иҫәнғол, Муйнаҡ, Сураш, Юлдаш, Мырҙабулат-Абзан, Самаҙы, Аҡбирҙе, Бужан, Ергәйеш, Үтәғол, Ҡыуандыҡ, Әлибай, Элмәле, Ҡалмаҡ ауылдарында) эшенә еҥ һыҙғанып керешә, ерле халыҡ ихтыяждарына юғарынан эшлекле иғтибар юллап, һәр урында якташтарының абруйлы һәм ҡеүәтле яҡлаусыһы, илсеһе булып йөрөй. 1928 йылдың мартында уны Йылайыр кантон аппаратына эшкә алалар (нәшриәт эштәре буйынса). Шул 1928 йылдың 13 октябрендә, 14 ноябрендә, 11 декабрендә һәм 1929 йылдың 30 ғинуарында бирелгән танытмалар буйынса, уның *башҡорт телен ғәмәлгә ашырыу һәм башҡорт яңы әлифбаһы* комиссияларының сәркәтибе булып эшләүе күренә. Ләкин әсе-сөсөнө күп татыған уҙаман, тәжрибәле элекке чекист булараҡ, Мырҙабулатов үҙенең башы осонда эленеп торған Сталин балтаһының хәтәр янауын тойған һәм күҙәтсе дошмандарынан нисек тә күҙ яҙҙыртырға теләгән, буғай. Йылайыр кантон үҙәгенән ҡапыл ғына төпкөл ауылға китеүе һәм район етәкселегенән үҙе хаҡында ыңғай танытма яҙҙыртып алыуы беҙҙе шул хаҡта уйланырға мәжбүр итә:

«Был танытма иптәш Мырҙабулатов Сөләймән Гәрәй улына уның, ысынлап та 1928 йылдың 15 апреленән алып 1929 йылдың 25 ғинуарынаса Йылайыр кантисполкомында башкорт телен ғәмәлгә ашырыу сәркәтибе һәм башҡорт яңы әлифбаһы сәркәтибе булып эшләгәнлеге һәм үҙенең вазифаларын бөхтәлекле, намыҫлы һәм үҙ эшен белеп башҡарыуы һәм бер ниндәй ҙә хилафлығы булмауы тураһында бирелде.

КИК рәйесе: **Редин**.

КИК сәркәтибе: **Мөхәмәтйәнов**, № 18, 1929 йылдың 30 ғинуары» (ЦГИА РБ, ф. Р-834, оп 2, д. 69, л. 2, 6, 11, 14, 15, 28, 30, 56).

Шул уҡ йылда ул Йылайырҙан күсенеп, үҙе ҡасандыр мәғрифәтле мәҙрәсәһендә уҡыған, һуңынан уға уның ҡыҙыл гвардияһының йәҙрәһен биргән, ә 1921 йылғы аслыҡта

халҡы тоташлай, тип әйтерлек, ҡырылып бөтөп, егерме өйгә генә ҡалған һәм яйлап һүнеп барған, әммә күңеленә ифрат яҡын Сәнкем-Биктимер (Ҡаҫмарт йылға тамағында) ауылына ғаиләһе менән килеп, егеп йөрөгән һарысай атын дөйөм маяға һалып, элекке ҡыҙыл гвардиясы ҡорҙаштарын шундағы тәүге «Большевик» колхозына берләштерә, уның тәүге рәйесе итеп һайлана. 1930 йылдың йәмле йәйендә ул бөтөн Башҡортостан советтарының баш ҡалабыҙ Өфөлә сакырылған X юбилей йыйынында ҡунаҡ рәүешендә ҡатнаша, шундағы бер төркөм делегаттар һәм ҡунаҡтар бергәләшеп төшкән фото (унда минең атайым да бар) -- ҡаһармандың беҙгә билдәле булған һуңғы һүрәте...

КГБ белешмәләренән:

«1929-1933 йылдарҙа Өфөлә һәм БАССР-ҙың Йылайыр районында вәлидовсылар Әҙеһәмев Абдулла, Мутин Илдархан, ***Мырҙабулатов Сөләймән,*** *Бикбаев Рәшит, Теләүбирҙин, Имаҡов, Муллабаев һ.б. етәкселегендәге контрреволюцион милләтселекле баш күтәреү ойошмаһы, 58 кешеһен ҡулға алып, фашланды һәм юҡ ителде».*

1992 йылда КГБ-нан (Мәскәү) алынған мәғлүмәт: "Мурзабулатов Сулейман Шахингареевич... к моменту ареста проживал в дер. Чанкино Сунарчинского сельсовета Усергенской волости Зилаирского кантона.

Арестован 30 февраля (көн һаны яңылыш, сөнки календарҙа 30 көнлөк февраль юҡ. – Й.С.) 1930 года и как активный участник так называемой "султангалиевской контрреволюционной националистической организации" постановлением ОГПУ от 28 июля 1930 года осужден к расстрелу". Ҡайһы бер авторҙар ошо датаға һәм чекистарҙың приговорҙы көнөндә үк ғәмәлгә ашырыу йолаһына таянып, быны С.Ш.Мырҙабулатовтың атып үлтерелеү датаһы итеп яҙалар, ләкин был дөрөҫ түгел: ярты йыл буйына уны язалайҙар, нимәләрҙер әйттертергә тырышаларҙыр – яла яҡтыртып бөтә башҡорт етәкселәрен репрессияларға тырышыу булһа кәрәк.

Кремлдең мыйыгклы ҡатилы ҡабат ҡуҙғаткан баяғы шул «солтанғәлиевщина» ялаһы менән иң юғары язаға дусар ҡылынған һәм, дәүләт именлеге өсөн ифрат хәтәр дошман рәүешендә, хатта төрмә эсендә лә исем-фамилияһы йәшерелеп, яңғыҙаҡлы камерала 51-се номер менән ултыртылған, палачтарына баш бирмәүсе был ғорур тоткон, халҡыбыҙҙың милли ҡаһарманы Сөләймән Шаһингәрәй улы Мырҙабулатов, дәһшәтле Лубянка зинданында 1931 йылдың 9 ғинуарында боҙ ҡатҡан тар карцерҙа түшәмдән өҙлөкһөҙ ағыҙылған боҙло һыу аҫтында аяҡ өҫтө тороп ҡата...

Милли каһарманыбыҙ Сөләймән Шаһингәрәй улы Мырҙабулатовтың шанлы исеме Өфө, Эстәрлетамаҡ, Белорет, Баймаҡ, Ырымбур, Орск, Ҡыуандыҡ ҡалаларының, Иҫәнғол, Темәс, Йылайыр ҡасабаларының ғорурлығы булырлык һәм, ғөмүмән, бөтөн башҡорт халҡының намыҫы ул. Батырҙар һәм уҙамандар менән тулы тарихыбыҙҙа уҙамандар уҙаманы булып ҡалды һәм ул мәңге онотолмаҫ.

23.03.2011



Йыһат Солтанов

АҘНАМӨХӘМӘТ, САЛАУАТ ҺӘМ ЮЛАЙ ЙОНДОҘЛОҒО

МӘСЬӘЛӘГӘ ЯҢЫСА ҠАРАШ

Өфө «ҒИЛЕМ»2011

УДК 93/99 ББК 63.3(2) Баш С60
Йыһат Солтанов
Аҙнамөхәмәт, Салауат һәм Юлай йондоҙлоғо. Мәсьәләгә яңыса ҡараш. - Өфө: БР ФА, «Ғилем» нәшриәте, 2011. — 56 б.

Был хеҙмәт милли геройыбыҙ Салауат Юлаев биографияһындағы ҡайһы бер буталсыгк урындарҙы асыҡлау өсөн эшләнде.

АВТОРҘАН

Ошо баҫманы донъяга сыгарыуҙа туранан-тура ярҙам иткән игелекле игәнәсем Р.С. Исхаҡовка оло ихтирамымды, рәхмәтемде белдерәм.

Тема буйынса тикшеренеуҙәремдә һәм сәйәхәттәремдә арымай-талмай булышлыҡ курһәткән Фаил Солтан улы Тикеевка, Әнәс Ғабдулла улы Вәлиуллинга һәм Иглин район музейы директоры Флузә Нурулла ҡыҙы Хәкимоваға ҙур рәхмәт.

ИЗГЕ ЙӘНДӘР ЮЛЛАЙ ҒӘҘЕЛЛЕК

Етегән йондоҙ ете әйләнә ете төн уртаһында...
Башҡорт халыҡ доғалығы.

Баш осонда әруах оса нисә-нисә...
Шәйхзада Бабич.

Төн уртаһы...

Башҡорттоң бөйөк Ҡобау-Мең ырыуы илен иңләй серле ете төн уртаһы...

Фани донъяның ҡош-ҡорто, бөжәктәре, хатта өрәгәс эттәренә тиклем, барса йән эйәһе талығып шымған...

Кешеләре өнһөҙ-тынһыҙ төш донъяһында ойоған...

Бөйөк Ҡобау-Мең ырыуы иленең көнсығыш сиген билдәләүсе Йүрүҙән һыуы, көнбайышын кәртәләүсе Өфө һыуы, йырсан Эҫем, Баш йылғалары тулҡындарын ярға сиртеп сылтырауҙан тыйылған...

Башҡортостан күгендәге ергә бағып емелдәгән меңәрләгән йондоҙҙар ҙа инсафланып күҙ йомған...

Сихри-серле ҡараңғылыҡ...

Тып-тынлыҡ...

Шул тынлыҡта алыҫ-алыҫ көнбайыштан, әстиҙәрҙең ҡурғаш һыулы Балтик диңгеҙе яғынан өҙөлөп-өҙөлөп үкһеүле ике ауаз:

-- Атайым!..

-- Ҡартатайым!..

Ҡобау-Мең иле Йүрүҙән буйынан изге Аҙнамөхәмәт-бабанан яуап:

-- Әү балаҡайым, Юлайым! Әү ейәнкәйем, Салауатым!

—Ҡартатайым, минең тыуған ауылым — Эҫемгә ҡойған Баш йылғаһы тамағывдағы ауылҡайым Тәкәй иҫәнме?

-- Атайым, минең дә тыуған ауылҡайым — шул Тәкәйем именме? Үҙең тыуған Ҡобау ауылың аманмы? Үҙең барып нигеҙләгән Аҙналы ауылың бармы?

-- Барыһы ла үҙ урынында, ейәнкәйем, улҡайым. Әммә хәлдәре ауыр — быуҙы яҙмыш-билғауыр...

-- Яҙмыштарҙан уҙмыш булманымы ни?

-- Яҙмыш үҙе ил башында аҙмышланып бойорғас, уҙа алманылар шул...

-- Ни будды? Ни булды?

-- Гөрләп торған Ҡобауыбыҙ уртаһынан тимер юл ярып үтте, илебеҙгә көнөбеҙҙе тоташтырған тура юлдар киҫелде, ауылыбыҙҙың идаралыҡ теҙгердәре ҡулыбыҙҙан ыскынып, уҫлап ауыҙ килмешәктәрҙең «Сыуаш-Ҡобау»ына, Ауструмына ҡайырып алынды, Ҡобауыбыҙ кәрәкмәгән Иҫкегә әүерелде... Йүрүҙән яғына етеп үҙем нигеҙләгән Аҙналым да бар-барын...

-- Атайым, Аҙналыңдың заманында, мине шундағы Шайтан-Көҙәй ылыҫының да старшинаһы яһағас, Юлай ауылы тип йөрөтөлөүен дә беләһең...

-- Беләм, улым, беләм. Бына хәҙер икебеҙҙең дә исеменән арындыртып, Әлкә ауылы итеп яһап ҡуйҙылар...

-- Әбей батшаға йәнен һатып тоғро хеҙмәт итеүсе, шуньщ яуыз ҡырғын ғәскәрҙәре сафында беҙҙең азатлыҡ яуҙарын баҫтырышыусы Әлкә...

-- Тап үҙе! Ә беҙгә (йәғни минең Аҙналыға) күрше ауыл - ерҙәребеҙҙе урыҫ заводсыларына йәшерен-батырын һатып ашаусы дошманыбыҙ старшина Шығанай Бурһыҡовтың Шығанай ауылын «Юлай ауылы» иттеләр...

-- Ҡартатайым, ә минең тыуған ауылым?

-- Шул Шығанай тоҡомдары саманан сығып аҙҙы - ошондағы Күҫкунды — Һороҡондоҙ йылғалары сатаһындағы ҡәрҙәштәребеҙ шайтан-меңдәр нигеҙләгән, заманында Шайтан тип тә, шундағы түрә исеменән Токос тип тә йөрөтөлгән биш-алты өйлө боронһо Шайтан-Мең ауылын «башҡорт халҡының милли ҡаһармандары Юлай менән Салауаттың тыуған ауылы Тәкәй» тип иғлан ҡылдылар, тарих китаптарына ла яҙҙылар...

-- Ялған бит! Беҙ, Ҡобау-Мең ырыуы аҫабалары, нисек итеп Шайтан-Мең ырыуы ауылында тыуайыҡ? Ҡолаҡҡа якмаған яла! Үҙең яҡшы беләһең, беҙҙең тыуған Тәкәйебеҙ Йүрүҙән яғында түгел, ә Эҫемгә ҡойған Баш йылғаһы тамағында бит...

-- Ялғанға ялған ялғана, ялғанда ил болғана, тигән ата-бабаларҙың һүҙе алдыбыҙға килде, ялған тарих ҡаңғырта инде илде... Шайтан-Көҙәй ылыҫында уйлап сығарып яһалған Тәкәй ауылын «ысын» итеп ил аңына беркетмәккә, Ҡобау ылыҫындағы хаҡ-ысынын хәтерҙән тамам юйҙыртмаҡҡа тырышып ҡыландылар: ысын Тәкәй, ҡуҙына утын өҫтәлмәгән усаҡтай, үҙенән-үҙе һүрелеп һүнергә, ер йөҙөнән ҡырсып ташланырға тейеш йәнәһе! Икегеҙҙе бығаулап алып киткәс, һеҙҙе тамам онотторторға теләп, яуыз батша хөкүмәте ауылдаштарығыҙға төрлө афәттәр һалды, хатта исемдәрегеҙҙе телгә алыуҙан, балаларына ҡушыуҙан тыйҙы... Ә «бөйөк инҡилап» тип аталмыш ҡара сәкмәнлеләр болаһы батша ғали янаптарын тәхётенән быраҡтырғас, көн күрмәгән күҙҙәребеҙ асылыр, тип, Тәкәйегеҙ халҡы иркен һулағайны, әммә «совет», «большевик» намлы яңы хакимиәт ҡәһәрҙәре батшаныҡынан да яманыраҡ булып сыҡты — ауылығыҙ күҙгә күренеп бөлөргә, һүнергә дусар ҡылынды. Колхозлашып аҫыраған малдарын,

келәттәргә һалынған байлыҡтарын кафыр ҡасабаларына ҡырсып алып киттеләр ҙә халыҡты эшһеҙ-ашһыҙ ҡалдырҙылар. Балаларын — башланғыстан ары мәктәпһеҙ, үҫмерҙәрен - клубһыҙ, йәмғеһен тиң оҙаҡ йылдар һуҙымында магазинһыҙ, дауаханаһыҙ, йүнле элемтәһеҙ, күңелдәрен йылы мөнәсәбәтһеҙ ҡаңғыртып-интектерҙеләр...

-- Ни өсөн?!

-- Һеҙ китеп юғалған көнбайыштан Гитлер тигән ҡара ҡорттоң ҡара яуы Рәсәйгә баҫып кергәс, дөйөм Ватанды үлеместән арсаларға Тәкәйебеҙҙән 370 (өс йөҙ етмеш) ир-ат — һуғышҡа, 60 (алтмыш) ҡарт-ҡоро хеҙмәт фронтына китеп, Еңеү хаҡына күбенеһе йәндәрен ҡорбан ҡылып, шул дүрт йөҙ утыҙ уҙамандың йөҙ етмеше генә әйләнеп ҡайтты. Шуның өсөн интегәлер тәкәйҙәр — шул булалыр большевиктар рәхмәте...

-- Батша ғали янаптары ауҙарылғас, бөтә Рәсәйҙә ғәҙеллек тантана итте, Башкортостан йөмһүриәте төҙөлөп, башҡорт халкы үҙ яҙмышын үҙ ҡулына алды, хатта беҙҙең ҡәһәрләнгән исемдәр ҙә милләт данына, ғорурлығына әйләнде, тигәйнеләр ҙәһә? Килмешәктәр кинәнеп ырағанда, ниңә беҙҙең тамырҙар ҡоротола? Ауструмдар, Сыуаш-Ҡобауҙар күкрәп сәскә аткан саҡта беҙҙекеләр ниңә бөткәндән-бөтә? Милләт данын, ғорурлығын тыуҙырыусы Тәкәйебеҙҙе барса милләтебеҙ ниңә ҡайғыртмай? Йөмһүриәт башындағы ил ағалары ни ҡарай?

-- Күҙ йомоп, йәки күҙгә ҡаҙалған оторо дегәнәк һанап ҡарай, шуға күрә ошо теп-тере Тәкәйебеҙҙе ғәзиз Ҡобау-Мең иленең тупрағынан йолҡоп алып ташлау яғын ҡармалай...

-- Булмаҫ ул!

-- Булдырмаҡта уйҙары - шул йәһәттән ҡылана хатта ғалим-ғоләмәләре. Ялағайланып ялған тарихтар әтмәләүҙәре етмәгән, карталарҙан ҡырсый яһил ҡулдары...

-- Батша ғали янаптары заманында ла карталарҙан китмәне ауылыбыҙ.

-- Хәҙергеләр китәрә — бөтмәгәнде бөтөрә. һеҙ, уланым-ейәнем-ғәзиздәрем, ят яҡтарҙа аҙаштырылып ҡалдығыҙ, күп нәмәнән хәбәрдар түгелһегеҙҙер. Башҡортостан йөмһүриәтенең әленән-әле күркәмләп ташҡа баҫылған, күҙгә салынған хариталарын барлайыҡ, бына улар:

1. Размещение колхозов и совхозов Башкирской АССР. М., 1972;
2. Атлас Башкирской АССР. М., 1976;
3. Башкирская АССР, туристская схема. М., 1979;
4. Республика Башкортостан. Самара, 2006;
5. Республика Башкортостан, административная карта. Екатеринбург, 2009;
6. Республика Башкортостан, атлас. Екатеринбург, 20010.

Замананың ошо олуғ һәм һиммәтле баҫмаларының тәүге дүртеһендә лә һеҙҙе тыуҙырып үҫтергән Тәкәй ауылыбыҙ юҡ, сөнки ул табаҡ-табаҡ хариталарға сәйәсәт тотҡондарының — Башҡортостан йөмһүриәте ғалимдарының ҡулсырлығы ҡыҫылған. Һуңгы икеһендә генә Тәкәй ауылыбыҙ һап-һау тора үҙ урынында, сөнки баяғы ҡулсырлыҡ ҡулы барып етмәгәндер уларға. Хатта туған йөмһүриәтебеҙ баш ҡалаһы үҙе 1999 йылда нәшер иттерткән «Административно-территориальное устройство Республики Башкортостан» тигән ҡалын китаптағы «Иглин районы картаһы»на ла һыймаған Тәкәй ауылыбыҙ. Ғәзиз ауылдаштарыбыҙ, һеҙҙең эштәр даны менән ғорурланып, әүәлге беҙҙең заманда «Себер юлы» тип аталмыш хәҙерге оло таш юлдағы тукталыштың өшәләгенә «Салауат Юлаев тукталышы» тигән яҙыу семәрләп, эргәһенә

Салауат ейәнемдең күркәм бюсын һынландыртып, постаментына алтын хәрефтәр менән «По преданию, в этой деревне родился и вырос великий сын башкирского народа Салават Юлаев» тигән хитапнамәле мәрмәртаҡта беркеткәйне; әммә быйыл шул хак таҡтаны ҡулсырҙар ватып ташлап, «Салават Юлаев, великий сын башкирского народа» тигән генә сонтор-һүрән йөмләгә алмаштырып, тукталыш исемен ҡырсып ук ташлағандар, һөйөклө ейәнемдең, ҡайҙағылыр Шайтан-Көҙәй яғындағы Шайтан ауылында түгел, тап ошонда тыуып үҫкәнлеген илебеҙҙән йәшергәндәр...

Күк йөҙөнөң алыҫ Балтиҡа яғынан Салауат менән Юлайҙың хәсрәтләнеп иңрәүе ишетелде, был яҡтағы Аҙнамөхәмәт-бабаның һулығыуын ҡеүәтләне. Бөйөк Ҡобау-Мең иленең күк ҡабағы күкрәп-күкрәп асылды һәм әруахланған изге өс йәндең был тәңгәлдә берегешеп иләүләнеүе күреңде лә күк ҡабағы шымып ҡабат ябылды, ҡап-ҡара төн асманында өс аҡйондоҙ буҙарынып айкалды. Йөмһүриәттең Иглин районындағы Иҫке Ҡобау күгендә, Салауат районындағы Аҙналы (хәҙерге Әлкә) күгендә әйлән-бәйлән килешеп, аҙаҡ Тәкәй ауылы өҫтөндә буҙарынды йондоҙлоҡ:

—Рәнйенек! Рәнйенек! Рәнйенек!..

Ишетмәне берәү ҙә... баш ҡаланың зыяратында ерләнгән яһил большевик әруахтарынан ғәйреһе. Фанилыҡтың бойороусы ил ағалары булып баҡиға күскән, «үҙ хөкөмкәйҙәре үҙ ҡулында» саҡта Бөйөк Ҡобау-Мең иленә зәһәр шаукымын бөрккән мәркәздәге оло түрә ялағайҙарының ләхеттәрендә ыңғырашып-тулғаныуы, еңмешләнеп ҡарыулашыуы ап-асыҡ ишетелә:

—Ышанмайбыҙ, килешмәйбеҙ! Әруахтар юҡ, йөрөр юлдары ла юҡ! Бөтәһенән өҫтөнлөклө марксизм-ленинизм-сталинизм тәғлимәтенә шик-тап төшөрмәгеҙ! Олаҡтырылған бәндәләрҙең йәндәре кире әйләнеп ҡайтмай, яткан яҡтарында ҡата! Сафсатауи сафсата!

Ни ғәжәп: ошбуҙарҙың ҡарыулығын йыға баҫып алыҫ Санкт-Петербург тарафынан мәғлүмәтле замандашының киҫәтеүе яңғырай ҙа «өҫтөнлөклө» тәғлимәт ҡолдары өшәнеп дер-ҡалтырай:

—Һеҙҙең серек фәлсәфәне ыуалтырлыҡ башҡорттоң үҙ ҡанун-тәғлимәте бар. Үҙ күҙегеҙ менән тарих уҡымаған, үҙ башығыҙ менән уйлап ҡарамаған көнлөксө түрәләр инегеҙ бит һәммәгеҙ! Шуға күрә килген кеше акылында, кеше телендә аңлашып ғүмер һөрҙөгөҙ. Әммә башҡорт тәғлимәте бөлмәне, һүнмәне — әсә телендә һөйләште! Тыңлағыҙ: фанилыҡта үҙегеҙҙең әсә телен аяҡ аҫтында тапап, әсә телле мәктәптәрегеҙҙе алҡышлап яптыртып, мәркәздәге көслө түрә телен генә көсәнеп үҙ итеүсе һеҙ-бахырҙарға хәләл башҡорт булмышын үҙегеҙ өсөн шул үтемле телдә еткерәм:

«Понятие о двойственности человеческой природы, о самостоятельном существовании души (йән) и тела выражается чрезвычайно определенно в некоторых рассказах башкир. По их убеждению, как только человек засыпал, душа оставляла тело и свободно странствовала; все, что она видела и делала, башкир, проснувшись, хотя и называл сном, но глубоко верил в несомненность и реальность его. Иногда даже можно было видеть душу, вылетающую изорта засыпающего человека, то в виде неопределенной формы белого комочка, то в виде мухи; при пробуждении она тем же путем возвращалась в человека.

Спящих башкиры никогда не будили быстро, сразу; сначала окликали по имени, потом произносили его имя громче и затем уже начинали энергично будить. Считалось, что сразу будить спящего нельзя, ибо душа его в настоящий момент может

быть далеко, не успеет вернуться в тело пробужденного, и он неминуемо и немедленно умрет...

Душа умершего, по представлениям башкир, нередко оставалась жить на земле среди людей, принимая своеобразный вид [әруах]» (С.И. Руденко. Башкиры. Историко-этнографические очерки, М.-Л., 1955, 320-321-нсе биттәр).

Һәм шуныһы ла билдәле: әруахтарҙы рәнйетергә ярамай, ярамай!

Әруахтарыбыҙ асманда — беҙ-бәндәләр еткеһеҙ бейеклектә. Ә мин, яҙыусы-фәҡирегеҙ, уйҙарымды бер тәңгәлгә төйөнләп, изге йәндәр тупрағынан сакрымдарҙы һанаулап китеп барам.

Баш осомда изге рухтар тынғы бирмәй әйләнә, ауаздары йөрәгемә йөйләнә:

— Рәнйейбеҙ! Рәнйейбеҙ! Рәнйейбеҙ!..

Был ниндәй хәл, ни ғәмәл? Рәнйеүҙәре күңел күгемде гиҙә, үҙәккәйемде өҙә. Бер-бер артлы ағылыусы көндәрем дә, төндәрем дә йөрәгемде һыҙлатып, башты баҫып ғәмләнергә, ҡулыма ҡәләм алырға мәжбүр итә. Изге йәндәр ни өсөн рәнйеүлеләр, ни өсөн? Беҙ бәндәләрҙең аҡылы һай, күңеле тар, хәтере сонтор өсөн. Изге йәндәр ҡайтып байҡар, тынысланыр ысын тыуған ауылдары Тәкәйҙе һанламағаныбыҙ, хәтерҙәргә изгеләп беркетмәгәнебеҙ, батырҙарыбыҙ тыуған ерҙәге хаҡ Тәкәйҙән йәш быуындарҙы биҙҙертергә тырышып, улар аҙаҡ торған ерзә ялған Тәкәй яһағаныбыҙ, һөмһөҙлөктө ашып китеп табаҡ-табаҡ аҡ ҡағыҙҙа шуны рәсмиләштергәнебеҙ, географик карталарҙа нығытырға көсәнеп-маташҡаныбыҙ өсөн...

Зыялылар ҡайҙа һуң, тарихсы тип аталғандарыбыҙ ниңә хаҡлыҡ көҫәмәй?.. Үҙемә ҡалһа, яңы быуаткаса уйланып йөрөп, 2003 йылда, түҙә алмай, аҡ ҡанаттай ак ҡағыҙҙы һырлағайным - «Салауат Юлаевтың улы ҡалған...» тигән Салауат Юлаев шәжәрәһен юлларға маташҡайным (интернеттағы <**зигатсултанов.рф**> тагән сайтымдағы Әҫәрҙәремдең ун дүртенсе томында). Әммә тыныслыҡ килмәне, асмандағы серле әруах-аҡйондоҙҙар һаман-һаман тынғыһыҙлап, әхүәлдәрен минең аша башкорт иленә белдертергә ашҡынып, күңелемде хыялыйҙарға һалды...

Бөйөк Ҡобау-Мең иленә сәйәхәт

«Бөйөк, тиһең, ете ырыулы ҡәбиләнең бер ырыуын шапыртып бөйөкләйһең!..» - баяғы «тәғлимәт» эйәләренең ҡарыулашыуы килә.

Бөйөк шул! Әгәр бөйөк булмаһа, Өфө йылғаһынан алып Йүрүҙәнгәсә (ҡобауҙар үҙҙәре әйтеүенсә, Златоусткаса) йәйрәп яткан таулы-урманлы-яланлы икһеҙ-сикһеҙ ер йөҙөн - Көнбайыш Европа дәүләттәренең бер-нисәһе урынлашырлыҡ иркен-ирәүән арауыҡты бер үҙе биләй алмаҫ, үҙләштерә алмаҫ ине.

«Ниңә шуны ҡулынан ысҡындырған - биләменең өлөштәрен бер-бер артлы юғалткан?»

Бының сәбәптәре яҡшы билдәле: Америка индейҙары бөйөк империяларын, хатта ҡитғаларын да юғалткан бит. Ҡасандырғы икһеҙ-сикһеҙ Башҡортостан иле менән дә шулай.

«Тимәк, ҡаршы тороп көрәшергә ҡыйыулыҡтары етмәгән.»

Ҡыйыуһыҙҙар араһынан Юлайҙар, Салауаттар сыҡмаҫ ине. Боронғораҡтарын әйтеп тормайым.

«Акылдары һайлыҡтанмы, әләйһә?»

Белмәйем, белмәйем, үҙебеҙҙең аҡылдар һайлыгктан шулай уйламайбыҙмы?..

«Знаю!» — тигән көслө-күкрәү тауыш ер аҫтынан ярып сыкҡандай булды - боронғоноң баҡи киткән мәшһүр урыҫы, мәғрифәтле аҡыл эйәһе ҡапыл ярҙамға килде:

— Если говорить правду, это вы сами, чертова дюжина, нынешних кубовцев довели до того состояния... Да, не были они такими! Позвольте привести отрывок из моей книги, было это во времена Кирилова — в связи с заложением на башкирской земле Оренбургской крепости. Думаю, перевод здесь не нужен...

«Извольте, достопочтенный!» — тинеләр.

— 25. Между тем башкирския старшины и народ многочисленно в город Уфу приезжали, являясь, якобы они прибытием его, Кирилова, на Уфу, также и определенным оренбургским строением весьма довольны, и тарханы в поход с ним, Кириловым, записывались, которым при записке на их тарханство давались от него, Кирилова, подтвердительные указы. Но при всем том многие из тех старшин внутренне в ином мнении и намерении состояли, ибо тогда же, отъехав из Уфы, умышляли, коим бы образом ему, Кирилову, в строении помянутаго города возпрепятствовать, разсуждая, что когда русские люди позади их и между ими поселятся, то вольность их отымется. Особливо же к такому их противному разсуждению возбудил их наипервее бывшей в Санктпетербурге Нагайской дороги Телекой-Кубовской волости башкирской старшина Токчура, которой в Санктпетербурге еще будучи, послал возмутительное письмо к Килмяку-абызу и к другим бывшим в бунте предводителям, возбуждая их сими словами, чтоб во всей Башкирии чистую пшеницу, отделя от куколя или плев, особо хранить, а солому зжечь. То есть над находящимися между башкирцами пришельцами, яко татарами, чувашами и другими им подобными, иметь бы смотрение, и чтоб четыре лошади, то есть четыре дороги, во всякой исправности были, объявляя при том, яко он, Токчура, в Санктпетербурге живучи, уведомился, аки бы всеми их землями хотят завладеть, и того б ради всеми силами противиться, и город Оренбург строить не давать, толкуя, что из-за того уже им никакой воли не будет. Оное возмутительное письмо предупомянутой Килмяк-абыз, получа еще 1734 года, о бунте умышлять начал, прибрав в сообщество свое подобных себе из башкирских старшин Бепен Сюянгулова, Сейтбая Ераткулова, Рысанбая Гимбетева, Кусакбая-батыря, Аминя - беглеца из Казанскаго уезду, и часто толкуя то письмо на Нагайской дороге при Азиевой мечете и ведая чиненныя от статскаго советника Кирилова к намеренному его походу приуготовления, умыслили кончае в 1735 году бунтовать и его, Кирилова, к реке Орь не допустить. Однако сие злое свое намерение разсевали так тайно, что до самой весны никакого подлиннаго о том известия не было, кроме немногих объявителей. Но понеже по видимым тогда башкирским поступкам сообразить сего было невозможно, ибо показывали себя все верными и к службе радетельными, то оныя известия больше почитались за несправедливыя.

Бына һеҙгә ҡобауҙар — ошо буламы аҡылдарҙың һайлығы?!.

42. Башкирцы, жители ...деревни Сеянтюсь, уведав, что злое их намерение явно учинилось, тотчас на противность отважились, учали было на бывших в квартирах их людей убивственно нападать, и несколько человек ножами поранили. Другия за ружья ухватились и бежать в лес вознамерились, чтоб ведомость подать бывшему на Аю воровскому их собранию, но потому тотчас по всей команде учинилась тревога, и все они, башкирцы, осаждены были командою, и по кратком супротивлении захвачены, близ тысячи человек с женами и с детьми их во оной деревне перестрелено, и от драгун

штыками, а от верных башкирцев и мещеряков копьями переколото. Сверх того сто пять человек забраны были в один анбар, и тут огнем сожжены. Понеже все сие случилось ночною порою, и деревня вся зажжена была, то от великаго их вопля и от оружейной стрельбы самое ужасное тогда было позорище. Причем всего удивительнее, что многие из тех воров будучи в огне, имевшиеся в анбаре копья со многими хульными и с бранными словами на стоящих тут драгун выбрасывали и несколько тем поранили. И таким образом все оной деревни Сеянтюсь жители с их женами и с детьми от мала до велика чрез одну ночь огнем и оружием погублены, а жилище их в пепел обращено.

Бына һеҙгә Ырымбур ҡәлғәһенең хаҡы! Шундай уҡ хәл хәҙерге Ырымбур өлкәһе Һарыҡташ районы Ҡасанҡи-сала (хәҙерге Һунарсы ауылы) төбәгендә лә булып, бер юлы 1200 (мең дә ике йөҙ) башҡорт үлтерелә...

После того на другой день в имевшемся воинском совете разсуждено, чтоб далее бывшими тут ускими проходами не ходить, но, возвратясь по старой дороге, изыскать другой удобнейшей путь, и все в той Балакчинской волости деревни раззорить. И тако команда возвратилась, и занят был главной лагерь в мещерской деревне Кундешляк, куда следуючи, и бывшими в той деревне от команды реченнаго Тевкелева посланными партиями, близ пятидесяти воровских деревень раззорено, и все при них имевшияся сена выжжены, и около дву тысяч воров в тех деревнях побито, а пойманные с женами и с детьми к нему, Тевкелеву, привожены, из которых возрастные по надлежащим розыскам казнены, а жены их и дети розданы бывшим в том походе воинским людям. Сие все происходило в феврале месяце того 1736 году.

Как скоро оное действо между башкирцами известно учинилось, то воры башкирцы пришли в наибольшее отчаяние, и под городом Уфою великия пакости и раззорение чинили. Главное их собрание имелось в башкирской их деревне, называемой Кубов. Туда из Уфы послана была партия в немалом числе регулярных и нерегулярных людей под командою секунд-маиора Ртищева. От сей команды посланные наперед под командою капитана Карьгина люди, нечаянно на то воровское собрание наехав, имели с ворами башкирцами сильной бой, но, со всех сторон многолюдством того башкирскаго собрания будучи окружены, стоять против их не могли, и прежде, нежели помянутой маиор на вспоможение к ним подоспел, означенной капитан Карьгин и с ним порутчик Аничков, уфинской атаман Кадомцов и лучшие из уфимских дворян и казаков люди, всего регулярных и нерегулярных человек более ста, при означенной деревне Кубов побиты, которым авантажем воры башкирцы к наибольшим тамо злодействам ободрились и премногия пакости около города Уфы делали.

Күрәһегеҙ: ҡобауҙарҙың ҡыйыулығы бөтә башҡорт халкына бүлеп бирерлек!

Ҡобау ҡаһармандары азатлыҡ өсөн бөйөк һәм дәһшәтле көрәштең иң алғы сафында барған. Шуға күрә Юлай Аҙналин һәм Салауат Юлаев кеүек донъя күләме ғорурланыр милли батырҙарыбыҙҙың тәғәйен Ҡобау ауылында үә ҡобауҙарҙың тарихи Тәкәй ауылында тыуып үҫеүе, ҡыйыуланып ҡанат киреүе һис кенә лә ғәжәп түгел!

45. Тогда ж ворам и удалось команде Тевкелева вред учинить, над одною партиею командированную от него из деревни Куядешлеи к другой мещеряцкой же деревне, Богдан Кощи именуемой, от первой верстах в пятнадцати, куда воры подступили в намерении, чтоб содержавшихся тут под караулом воровских жен и детей свободить. Оная партия состояла в одной роте регулярных без артиллерии и при том командировано было человек со ста нерегулярных. Как дошло до сражения с теми ворами, то они по малом супротивлении сделали такой вид, акибы пошли на побег, за

которыми командовавшей тою партиею порутчик и с ним прапорщик один да драгун человек до тридцати погнались вдаль, где у воров нарочно приготовлено было к наибольшему супротивлению на поле отворенное место, на котором оных порутчика и прапорщика и всех при них имевшихся драгун копьями покололи. По получении о том известия Тевкелев командировал против их еще драгунскую роту с пушками и несколько сот нерегулярных под командою капитана Батова, которая партия, пришед на означенное место, имела со оными ворами несколько часов бой с пушечною стрельбою. И хотя притом несколько их, воров, было побито, однако большаго вреду и поиску над ними учинить было невозможно за бывшими тогда необыкновенно глубокими снегами, и все те воры ретировались во имеющияся тамо, а наипаче в Айлинской волости, лесныя места, о которых после получено было известие, что они, убоясь поисков, уведомясь, что Тевкелева команда многими командированными к нему военными людьми умножена, в крепких тамошних местах до весны с женами и с детьми засели, а как снег сойдет, намерялись с прочими ворами соединяться и бунтовать по-прежнему. (П.И. Рычков. История Оренбургская по учреждении Оренбургской губернии. Уфа, 2006).

Бына һеҙгә Ҡобауҙар һәм башҡалар!

Ҡобау-Мең иленең аҫабаһы — Тәкәй ауылын нигеҙләгән Тәкәй-бейҙең туранан-тура тоҡомо, тарих фәндәре кандидаты доцент Тикеев Фаил Солтан улы менән бергә «тимер арба»ла ҡобауҙарҙың боронғолоғо тураһында талғын ғына һөйләшеп китеп барабыҙ, ул миңә үҙенең ташҡа баҫылған мәҡәләһенең башланышын күрһәтә:

«В Иглинском районе расположены три села, названия которых образованы от основы Кубово (Кобау): Кубово (ныне Старокубово), 2-е Кубово (ныне Чуваш-Кубово) и Новокубово. От поселения Кубово в разные годы выделялись деревни Мелекес (на ее территории возникло село Иглино), Иляй аул, Сабит, Ширшилы (этих деревень сейчас нет), Субакаево, Тавтиманово, Тауш. Ширшилы и Мряево затем вошли в состав поселка Иглино. Наш предок Текей-баба переехал на устье реки Баш и основал там всем известную деревню Тикеево...

Название села Кубово происходит от «Кобау» (подразделение башкирского племени Мин).

Согласно легенде, гора, на которой ныне расположен Уфимский телецентр, в старину называлась Кубовской горой, и у ее подножия находилась деревня Кубово. Кубовцы после 1574 г. в связи закладки там русскими Уфимской крепости оставили эти места и поселились на землях нынешних Иглинского и Уфимского районов»...

Ҡобау-Мең ырыуы аҫылдарының шәжәрә тирәгенән һуңғы бейгә килеп еткән быуындарын барлайым: «Ҡәнзәфәр-бей -- Ҡаҙаш-кенәз -- Йәнбаҡты-кенәз — Ҡоръямал-бей — Ҡолсар-бей — Маңкай- бей — Тәкәй-бей...».

-- Тәкәй-бейҙең ҡәбере билдәлеме?

-- Әлбиттә, барғас күрербеҙ.

Бына район үҙәге - Иглин ҡасабаһы, ул Мәләгәҫ тигән боронғо башҡорт ауылынан шулай көрәйеп үҫешкән, үҙәктәге матур һәйкәл ошо турала һөйләй (баҫмаға беркетелгән биттәрҙәге фотоларҙы ҡарағыҙ). 1770 йылдың 16 майында Себер юлы буйлап сәфәр сыҡҡан академик П.С. Паллас ошо ауылда ҡунып киткән. Юлдашым иҫкәртеүенсә, урыҫ яҙмаһында Мәләгәҫ ауылы беренсе тапҡыр 1663 йылда теркәлгән - район үҙәге үҙенең йәшен шунан башлап иҫәпләргә, ҡасаба тап шуның исемендә йөрөтөлөргә хаҡлы.

Ауылдар боронғоһо

Иҫке Ҡобау — бындағы Ҡобауҙарҙың төп йорто икәнлеген әйткәйнек. Юлдашым Ф.С. Тикеевтың тикшеренеүҙәренә ярашлы, төп йорттан 1730 йылдан элегерәк -- Ҡоҙашман (ҡатай-көҙәйҙәр ерендә — хәҙерге Белорет районы), 1773 йылға тиклем — Тәкәй һәм 1795 йылға ҡәҙәр Таутөмән ауылдары бүленеп сыҡҡан. Тикеевтар шәжәрәһенә ҡарағанда, Тикеев Ғәбдрәшит — 1735, Тикеев Ҡоҙашман -- 1710, аталары Тәкәй -- 1682, ҡартаталары Манҡай - 1654 һәм Манҡайҙың атаһы (исеме билдәһеҙ) 1624 йылдар тирәһендә Ҡобауҙа тыуғандар. Тәкәй-баба нәҫелдәре хаҡында дөйөмләштереп ошоларҙы әйтеп була: Тәкәй нәҫеленең тик тәүге өс быуын ир-аттары гына 40-лап зат һаналган. Шуларға ревизия документтарында теркәлмәгән ҡатын-ҡыҙҙарҙы индерһәк, һөҙөмтә уғата дәлиллерәк булыр ине. Тәкәй нәҫелдәре бөгөн Иглин, Нуриман, Белорет, Бүздәк, Бәләбәй, Салауат районларында, Өфө, Стәрлетамаҡ, Ағиҙел, Мәскәү, Ҡазан, Һамар ҡалаларында, ә Өфө ҡыҙы Фәимә Тикеева Францияның баш ҡалаһы Парижда йәшәй.

Темам буйынса мине ҡыҙыҡһындырғаны — милли ҡаһармандарыбыҙ тыуып үҫкән Тәкәй ауылы, әлбиттә.

Тәкәй-бейҙең исеме, бәғзеләр уйлағанса, һис тә «тәкә»нән түгел, календарға бәйле ул: «таҡ» (тәк) — таҡ һан, унарлыҡтың беренсе һаны; «ай» (әй) иһә күк есеме Ай; бергә ҡушып әйтһәк, Таҡай (Тәкәй) — Ай календарының беренсе айында тыуған ир балаға ҡушылған исем. Шунан килә Тукай ҙа. Ошоға ярашлы, ғаиләлә беренсе булып тыуған ир баланы Таған, Туған тип тә атағандар. Йоп (икенсе) айҙа тыуған сабыйға йыш ҡына Йопай (Яфай) ҡушҡандар. Ғаиләлә йоп һандағы икенсе бала иһә Йопан (Япан) исемен алыр булған - Юлай Аҙналиндың күп һанлы уландарының береһе 1756 йылғы рәсми документа - Япан Юлаев тип, ә икенсеһе (моғайын, ҡунакка барғандағыһы) Ҡунакбай Юлаев тип теркәлгән (Материалы по истории Башкирской АССР, IV, часть первая, № 78). Тимәк, Япан — Юлайҙың йоп (икенсе) булып донъяға килгән улының исеме.

Тәкәй ауылының үҙәк урамы оҙон — Эҫемгә ҡойған Баш йылғаһы тамағынан алып йылға үренәсә ике километрҙай арауыҡҡа һуҙылған (фото). Ауыл аҡһаҡалдарының мәғлүмәтле береһе Нәзир Сәмиғулла улы Салихов (1953 йыл тыуған), ата-бабаларҙан ишеткән тәүәрихтәргә таянып, ышаныслы рәүештә, Юлайҙың да, Салауаттың да тап ошо ауылда донъяға килеүҙәрен, ә Салауаттың, анығыраҡ әйткәндә, йәйҙең йәмле көндәренең береһендә Юлайҙың ошондағы гүзәл йәйләүе Аҡҡош Яланында тыуғанлығын ҡәтғи раҫланы; уның 1932 йылғы ауылдаштары Нәзифә Сәмиғулла ҡыҙы менән Әмир Сафиулла улы Фәрхетдиновтар ҙа (фото) ошоно ук ҡайнар хикәйәтләп, Нәзифә ханым бер мәғлүмәт өҫтәне: ҡытлыҡлы Бөйөк Ватан һуғышы осоронда күршеһе Зиннуров Зөфәр бабайҙың ҡышҡыһын иламһырап килеп инеүен, үҙе юҡ саҡта бәләкәс ҡыҙҙарының, тимер мейескә яғырға маташып, кәштәләге бер бәйләм ҡағыҙ менән ут тоҡандырыуҙарын, шунда ауыл тарихы, Салауат Юлаев аманаты ла юҡҡа сыҡҡанлығын әйтеп әсенеүен иҫкә алды. Ә Нәзирҙең бер туған ағаһы (фото) Нәүфәл Сәмиғулла улы Салихов (1939 йылғы) биргән, оләсәһе Фәрхиназ Абдрафиҡ ҡыҙы Иҙиәтуллина (ҡыҙ фамилияһы Салихова, 1885 - 1964) әйтеп ҡалдырған мәғлүмәтте алтын бөртөгөләй ҡиммәтле күрәм: «Салауат Эҫем буйындағы Аҡҡош Яланында йәйләүҙә тыуған, ошонда уйнап үҫкән. Салауатты, кешегә эйәреп, бер ваҡытта ла яманлама - ул минең бабайым»,

— тигән. Аңлашыла: оләсәһе ейәненә үҙенең Салауат Юлаев нәҫеленән икәнлеген белдергән...

Түбәнге Ләмәҙ ауылынан 1942 йылғы Рәшит Әбүбәкер улы Хәзиев та был яҡтарҙа киң таралып нығынған риүәйәтте хабатлай: «Бабайым Зәйнәғәбдин һөйләп ҡалдырыуынса, Салауат Юлаев хәҙерге Иглин районындағы Тәкәй ауылында тыуған, шундағы йәмле Аҡҡош Яланында уйнап үҫкән. Шуға тиклем Юлайҙың нигеҙе Иләй ауылында булған». Уның ауылдашы, Тау (Хөснулла) Ҡаҙаяҡта тыуып үҫкән 1937 йылғы Хәҙисә Шәмситдин ҡыҙы Нәзмитдинова ла (фото), Хәзиевтың әйткәндәрен дөрөҫләп, бығаса билдәһеҙ бер яңылыҡ та бирҙе: «Тыуған ауылым янындағы Йылантауҙың Эҫем йылғаһы киҫеп үткән морононда бөркөтлө текә сағыл, туннель һымак оҙон Салауат мәмерйәһе бар. Ауыл ҡарттары һөйләүенсә, үҫмер Салауат Тәкәйҙән (туранан алты сакрым) һыбай ошонда йыш килгән, һунарсылыҡ ҡылырға, мәмерйәгә инеп сығырға яраткан».

Тәкәйҙә сағыбыҙҙа баяғы Нәзир уҙаман ауылды нигеҙләүсе Тәкәй-бейҙең беренсе йорт урынын алып барып күрһәтте (фото) — Баш йылға тамағының уң ярында хәҙерге асфальт заводы төтәтеп ултырған төбәк икән. Тәкәй уҙаман менән бергә бында ағай-энеләре Ғәйнислам (Ғәйнан), Йыһангар, Әбелнәғам, Байтағол һәм инде исеме онотолған тағы берәү Ҡобауҙан күсеп килгән; һуңғыһы, минеңсә, Тәкәй-бабаның ҡорҙашы Аҙнамөхәмәт (Аҙналы) булһа кәрәк. Тора-бара Тәкәй-баба урынынан ҡубынып, йылға үренәрәк күсеп ултырған, ул өй урыны ла билдәле (фото). Вафат булғас, аҡһаҡалды тыуған ауылы Ҡобауға ҡайтарып ерләгәндәр...

Ептең осон юллап Иҫке Ҡобауға барғас, орденлы элекке комбайнер, хәҙерге абруйлы аҡһаҡал Марат Хөснулла улы Әхмәтйәнов (1934 йылғы) ауыл зыяратына юл башлап, Тәкәй-бейҙең ҡәбере янына килтерҙе (фото), уның һәм улы Әбдрәшит кантондың баш остарына оҙаҡламай иҫтәлекле таштар ҡуйыласаҡ икән. Марат Хөснулла улынан Юлай Аҙналинға бәйле ифрат мөһим мәғлүмәттәр алынды. Баҡтиһәң, зыяраттан ары ике саҡрымдай алыҫлыҡта ошо Ҡобауҙан бүленеп сыҡҡан Иләй ауылы булған, хәҙер унда Иләй баҫыуы. «Иләү» түгелме, тип ныҡыуыма уҙаман аныҡ яуапланы: «Иләү түгел, ә Иләй». Шундағы әлегәсә шылтырап ағып яткан Гәрәй шишмәһенең эргәһендәге Гәрәй ҡарттыҡына күрше Юлайҙың өйө булған, Иләйҙән Юлай Тәкәйгә күсеп киткән, шунан һуң ауыл бөткән, тигән хәбәрҙе ишеткәс, «Иләй» ауылының ысынында «Юлай» ауылы булғанлығын, батша хөкүмәте тарафынан Юлайҙың исемен телгә алыу тыйылғас, халыҡ уны, моғайын, Иләй итеп үҙгәртеүен тоҫмалланым... Киң күңелле оҙатыусыбыҙ халыҡ батырына бәйле тағы ла бер урынды -- төньяҡ-көнсығыш тауға менгәс киң панорама рәүешендә асылған тәрән соҡорло үҙәнде апарып күрһәтте -- Юлай соҡоро (фото). 1774 йылда Өфө ҡалаһын ҡамауға алырға йыйынған пугачевсыларға ярҙамға килмеш Юлай Аҙналиндың ғәскәре тап шунда урынлашҡан, ҡобауҙар сиреүҙе икмәк, башҡа кәрәк-яраҡ менән тәьмин иткән, тиҙәр...

Юлайҙың, Салауаттың тәржемәи хәлдәрен дөрөҫ аныҡлау өсөн, тыуған йылдарын теүәл белергә кәрәк, әммә-ләкин был тәңгәлдә тарихи әҙәбиәттә оҙайлы буталыш хөкөм һөрә. Мәҫәлән, абруйлы рәсми тарихсыларыбыҙ коллективы төҙөп 2004 йылда донъяға сығарған «Салават Юлаев. Энциклопедия» фолиантында Юлай Аҙналиндың тыуған йылы 1729 йәки 1730 итеп күрһәтелеп, тупаҫ хата ебәрелһә, Салауат Юлаевтың да тыуған йылы, һис бер документ-дәлилһеҙ, тарихсы И.М. Гвоздикованың фаразын аксиомалаштырып, 1754 итеп күрһәтелә, был да һис дөрөҫ түгел. Шул ук ваҡытта рәсми тарихсыларыбыҙ, күрәһегеҙ, иғтибар итергә теләмәгән һәм 1797 йыл менән тамғаланған

кире ҡаҡҡыһыҙ ышанысլы документ бар: шул йылда Рогервик ҡатырында Юлайға --75, Салауатҡа 45 йәш булған (Крестьянская война 1773—1775 гг. на территории Башкирии. Уфа, 1975, стр. 340, № 215); тимәк, ысынында Юлай Аҙналин — 1722, Салауат Юлаев 1752 йылда донъяға килгәндәр.

Юлай Аҙналиндың тәүҙә Ҡобау ылыҫы старшинаһы булыуы киң билдәле, ошо вазифала ул 1770, 1773 йылдарҙағы ер һатыу-алыу документтарына теркәлгән (Материалы... IV том, часть первая, стр. 345 № 314, стр. 371 № 339, тәүгеһендә Ағиҙел, Йүрүҙән, Лаяҙы йылғаларының буйҙары Ҡобау ылыҫы башкорттарының аҫаба ерҙәре икәнлеге аныҡ әйтелә), ләкин Юлай Аҙналин был түрәлеген нисәнсе йылдан башлап башҡарыуы әлегәсә асыҡланмаған. Миңә ҡалһа, ошо мөһим датаны арыу ук теүәллекле билдәләү мөмкинлеге бар. Эш шунда: «Материалы по истории... IV том, часть первая» йыйынтығына ҡушымта итеп бирелгән, 1737 йылда Ерофей Струков төҙөгән Өфө провинцияһы картаһында Тәкәй-бейҙең тап баяғы һуңғы йорто тәңгәлендә мөһөрләнмеш, тарих өсөн ифрат мөһим ауыл исеменә рәсми тарихсыларыбыҙ, төпсөнөп баш ауырттырырға теләмәү арҡаһындалыр, күҙ йомоп үтәләр, буғай: шаҡырайтып яҙып ҡуйылған «д. ЕлаЕ» — Юлай ауылын (фото) «күрмәйҙәр»! Ни өсөн Тәкәй түгел, ә Юлай? Моғайын, был саҡ мөхтәрәм Тәкәй-баба мәшәҡәтле фаниҙан баҡиға киткән, ә шуның һуңғы нигеҙендә төйәкләнмеш Юлай Аҙналин оло түрә — Ҡобау ылыҫы старшинаһы булып торған. Боронғо башҡорт ауылдарына хас күренеш буларак, был ауыл, минеңсә, бер юлы ике төрлө — Тәкәй тип тә, оло түрә исеме менән Юлай тип тә йөрөтөлә башлаған да Ерофей Струков картаһына һуңғыһы менән теркәлгән. Ошолай тип ҡараһаҡ, Юлай ун биш йәшендә үк ил ағаһы дәрәжәһенә етешкән — Ҡобау ылыҫы старшинаһы булған... Ә шунан һуңғы беҙгә билдәһеҙ йылдарҙың береһендә, Юлайҙың атаһы Аҙнамөхәмәт уҙаман гүр эйәһе булғас, старшина Юлай Аҙналин кинйә улы Салауатын эйәртеп шул Йүрүҙән буйына — атаһының йорто Аҙналыға күсә. 1766 йылда Шайтан-Көҙәй ылыҫының да старшинаһы итеп тәғәйенләнгәс, Аҙналы ауылы ла, минеңсә, түрә исемендә Юлай ауылы (П.С. Паллас сәйәхәтнамәһендәге Гулей-аул) тип йөрөтөлгән, ә Баш йылға тамағындағы тыуған ауылына уның әүәлгесә Тәкәй исеме ҡалған. Шуға күрә 1770 йылғы сәйәхәтендә академик П.С. Паллас уны ҡәҙимге үҙ исемендә яҙған. Атамаларҙың береһен-бер ҡалдырмай ентекле теркәп барған ғалимдың сәйәхәтнамәһендә шунан башҡа бер ниндәй ҙә Тәкәй ауылы юҡ, шуға тиклемге һәм унан һуңғы карталарҙа ла, «ревизские сказки»ларҙа ла икенсе бер Тәкәй ауылы күренмәй. Был тәңгәлдә бына нәмә ифрат ғибрәтле: хәҙерге Салауат районы халҡы үҙ ерендә Тәкәй исемле ауыл нигеҙләүсе Тәкәй-баба булыуын хәтерләмәй, сөнки ундай булмаған; һәм бында уның зыяраты ла, уның һәм ауылының исеме яҙылған шәжәрә текстары ла, шәжәрәһен дауамлаусы Тикеевтар фамилияһы ла юҡ. Быларҙың барыһы фәҡәт Иглин районы Тәкәй ауылына бәйле. Ошо ғына ла күрһәтә был мәсьәләлә ҡайһы берәүҙәрҙең юҡты бар ҡылырға маташыуҙарының нигеҙһеҙлеген, ялғанлығын...

Салауат районынының шул Әлкә ауылына барып әйләнеү форсаты тейгәндә уның боронғо Аҙналы-Юлай (П.С. Палластағы «Гулей-аул») икәнлегенә тамсы ла шигем юҡ ине. Билдәле булыуынса, Пугачев яуы еңелеп, баш күтәреүселәр язаға тарттырылғас, уларҙың донъялары һәм ерҙәре батша яҡлыларҙың ҡулына күсә һәм Аҙналы-Юлай ауылы ла күтәрелеште баҫтырыусыларҙың береһе, Әлкәй Булатов төйәгенә әүерелеп, Әлкә ауылы булып китә.

Әлкәгә мин Юлайҙың атаһының ҡәберташын табырмын тип өмөтләнеп килгәйнем, һиҙенеүем алдаманы. Ауыл ҡарты Миңнехәмиҙулла Кәлимулла улы Закировты (1931 йылғы) күреп һөйләшкәндә зыяратта иң боронғо ике генә таш барлығы асыҡланып, бейек үлән араһынан шуларҙы саҡ эҙләп таптыҡ, аҡһакалды мин кесе таш янында фотоға төшөрөп алдым (ҡарағыҙ). Был иһә 1920 йылда Башкортостан Ваҡытлы Революцион Комитеты (рәйесе Х.Й. Йомағолов) ҡарары менән атылған башҡорт монархисы Ғәбиҙулла Ҡорбанғәлиевтың бер туған апаһының ҡәбере ине, буғай — ғәрәп хәрефтәре менән ошо һүҙҙәр яҙылған (таш битендә текст юлдарының сиратланышын һандар менән билдәләйем): «1. Мәрхумә Мәфтуха Ҡорманбайев Ҡорбанғали ҡызы 2. 1849 хисабенә донъяға килеб 3. 1919 йыл 19 май 70 йәшендә донъя ҡуйды 4. Кучи жәнат доғалар...»

Икенсе ҙурыраҡ таш шаҡтай боронғораҡ булып, эпитафия мәрхүмдең шәжәрәһенән башлана: «1. Мөхәмәдрәхим -- Ҙәғәфәрулла -- Рәхмәтулла -- 2. Рустәм -- Аҙнамөхәмәд», — күрәһегеҙ, ауылды нигеҙләүсенең -- Юлай атаһының тулы исеме! Текстың артабанғы юлдарын укыуы ҡыйынлашты. — «3. фиатау ике мөхидики Мөхәмәт Ғата Тнбик 4. әмриначә мөхәмәҙрә... фәнли 5... 6...» -- Ярым юйылған текстың ҡалған өлөшөн таныманым, был иһә күҙҙәре күнеккән махсус белгестәр эше...

Старшина Юлай Аҙналин һәм үҫеп еткән улы Салауат аҫаба ерҙәрен Эҫәм заводын төҙөүсе урыҫтар ҡулына тарытып әрәм иткән Шайтан-Көҙәй ылыҫы старшинаһы Шығанай Борсаҡовты хөкөмгә тарттыралар, ләкин эш Шығанай файҙаһына хәл ҡылынып, Юлай менән Салауатка 600 һум штраф һалына. Шул ук ваҡытта бөтә Себер юлында абруй ҡаҙанған Ҡобау ылыҫы старшинаһы Юлай Аҙналинды, өҫтәрәк әйтеүебеҙсә, Ырымбур түрәһе Путятин, урындағы башҡорттарҙың һорауын ҡәнәғәтләндереп, 1766 йылда бер юлы Шайтан-Көҙәй ылыҫының да старшинаһы итеп раҫларға мәжбүр. Әйткәндәй, Шайтан-Көҙәй башҡорттарының байтағы ҡобау-меңдәргә туған — элекке шайтан-меңдәр икәнлеге билдәле.

Шайтан-Мең ырыуы һәм Шайтан ауылдары

Ырыуға «Шайтан» атамаһының ҡайҙан килеп йәбешеүе тураһындағы риүәйәтте 1770 йылғы сәйәхәтендә башкорттарҙан беренсе башлап П.С. Паллас яҙып алған: «О сем названии рассказывают башкирцы: бесенку будто предок сея волости, нашед в пещере поблизу лежащей горы дочь горного духа или черта (шайтан), на ней женился и сие потомство с нею расплодилось».

«Шайтан» атамаһы, әлбиттә, иҫке (яҙыҡ) динле башҡорттарға ислам дине кергәс кенә тағылған, ә унан да алдағы риүәйәттәребеҙҙә шүрәле ҡыҙы тураһында һүҙ бара. Һүҙ асылында шүрәле — шыралы (шыр-урманлы; шырпы, шырау, шыра/сыра тигән һүҙҙәребеҙ ҙә шунан), йәғни Мең ҡәбиләһе егете шыр-урман яғынан (Урман-Көҙәйҙәндер) кәләш алған да шулар нәҫеленән Шайтан-Көҙәй (ислам дине кергәнгә тиклем Шүрәле-Көҙәй) башҡорттары үрсегән булып сыға. Урман (ирәкте) башҡорттары шәжәрәһендә ҡыҙыҡлы мәғлүмәт бар: «Потомки Майкы-бия до Ахмед-шейха его потомков называют башкирами иряктe. Они разделились на степных иряктe (Мензелинский уезд), лесных иряктe (Бирский уезд) и танып иряктe... Потомки внука Ахмед-шейха Чулман-бия в Осинском, Бирском уездах и в стороне Уральских гор» (Башкирские родословные. Уфа — «Китап», стр. 17) — һуңғылары беҙгә яҡындан таныш

урман-көҙәйҙәр булһа кәрәк. Меңдәрҙең урмандан «кәләш алыу» осоро, күрәһегеҙ, «шүрәле»ләргә ислам дине кермәҫ боронға оҡшай, шуға күрә лә уларҙы ҡушаматлаған ислам динлеләр өсөн улар йә шүрәле, йә шайтан. Башҡорттарға күрше йәшәгән мариҙар хатта ошо көнгәсә яҙыҡ дин тотканлыҡтан, ислам динле һуңғараҡ быуын шайтан-көҙәйҙәр «шайтан» атамаһынан биҙәрләп (улар хәҙер ҙә ул һүҙҙе телгә алмай, үҙҙәрен «Мең ырыуы» тип кенә атай), боронғо яҙыҡ динле башҡорт бабаларын, яңылыш, мариҙар имеш, тип һанаған, шуға күрә Шайтан-Көҙәй ерендәге иң боронғо (моғайын, ислам диненә тиклем үк нигеҙләнгән) өс ауылды «Ҡазан яғынан килмеш Тәкәш, Туйыш, Ҡотош тигән бер туған өс мариҙың» исеме менән бәйләгән. Ләкин улар, ҡабатлайым, бер ниндәй ҙә мари түгел, ә исламға тиклемге бик боронғо дәүерҙә үк Көҙәй ҡәбиләһенә килеп ҡушылған Мең тармағы башҡорттары. Ислам динен ҡабул ҡылғас, был башҡорттар, мосолман зыяраты асып, мәйеттәрен әүәлге «яҙыҡ динле» (шайтан) бабаларының зыяратына ерләмәгәндәр, шуға күрә Иҫке Мең (хәҙерге Меңйетәр) ауылында XIX быуатта ла «шайтан» бабаларҙан ҡалмыш айырым иҫке зыярат билдәле булған (Р.Г. Кузеев. Происхождение башкирского народа. М., 1974, 212-нсе бит). Ә «көҙәй»гә килгәндә, IX—XII быуаттарҙа көнсығышта Ҡытайға сиктәшләнеп Һары диңгеҙҙән Каспий диңгеҙенәсә һуҙымлы ер йөҙөн ғәйрәтле һәм шанлы биләгән һәм, һуғыштарҙа ҡытайҙарҙы йыш ҡына еңеп, Ҡытай императорҙары булып та тәхеттә ултырған бөйөк Ҡатай-көҙән (кидань) империяһының ҡалдыҡ башҡорттары улар, был хакта мин «Дәү-Олояу - Ҡатай-көҙән башҡорттарының бөйөк дәүләте» тигән әҫәр яҙғанмын (баяғы сайтымдағы XIII томда)...

Шайтан-Көҙәйҙәрҙең йәшәү ҡеүәте, туғандары Ҡобау-Меңдәрҙеке кеүек үк, ифрат көслө булған: Өфө йылғаһының һул ярына сығып, үргә табан яңы ерҙәр үҙләштереп, хәҙерге Екатеринбург ҡалаһының төньяғына барып еткәндәр -- XVIII быуатта шул яҡтарҙа башҡорттарҙан алдап-йолдап, талап алынған ерҙәрҙә бер түгел — өс «шайтан» заводы эшләгән: Шайтанский Нижний, Верхне-Шайтанский, Висимо-Шайтанский (Роже Порталь. Урал в XVIII веке. Уфа-2004, 102— 103-нсө биттәр). 1716 йылда төҙөлгән Шүрәле заводы (Шуралинский завод. А.И. Андрущенко. Крестьянская война 1773—1775 гг. М., 1969) иһә алыҫ тарихтан шайтан-меңдәрҙең Шүрәле-Мең осоро тураһында һөйләйҙер...

Шайтан-меңдәрҙең икенсе бер көслө тармағы, хәҙерге Нуриман районынан күсенеп, Иглин районы Иҫке Мең (Меңйетәр) ауылын нигеҙләгән. Ауылдың абруйлыһы 1952 йылғы Миҙхәт Мөхәмәт улы Мирғәлиев (фото) барса һорауҙарыбыҙға тейешле яуапланы:

Р.Ғ. Кузеев китабында телгә алынған иҫке «шайтандар зыяраты» хәҙер «Балтағолдар зыяраты» тип йөрөтөлә имеш, ә шулай ҙа яҡындағы «Шайтан соҡоро» һаҡланған. Башҡорт тарихын сонторайтыу өсөндөр инде, 1945 йылда урындағы ҡөҙрәтле большевиктар иҫке зыяраттың әллә ҡайҙан ук һерәйеп ауылға күренеп торған 1,5—2 метр бейеклек ҡәберташтарын, трактор менән ауҙартып, зыярат башындағы соҡорға һөйрәтеп ташлап күмдерткәндәр ҙә иген баҫыуы яһағандар; инде шул таштарҙы ҡаҙып сығарып яҙыуҙарын укыйһы бар.

Иҫке Мең ауылы «шайтандары», яңы ерҙәр үҙләштереп, көнсығышҡа табан хәрәкәт иткән; Тәкәйҙәге баяғы Нәзир уҙаман беҙгә, ҡасандыр Оло Тәләк һәм Тәкәй араһында Шайтан ауылы булған -- хәҙер унда Шайтан күле, тип һөйләнә. Ҡобауҙар кеүек үк, шайтандар ҙа алыҫ китә, хәҙерге Силәбе өлкәһендәге Меңьер (әүәлге Шайтан-Мең-ер) йылғаһы, Мең (Шайтан-Мең) ҡасабаһы, рәсми тарихсыларыбыҙ күрәләтә алдап

Тәкәй тип һанаған боронғо Шайтан (П.С. Паллас булып киткән) ауылы исемдәре шуға һәйкәлдер. Тарихи бер ҡыҫҡа осорҙа һуңғыһы Шайтанлар ылыҫының старшинаһымы, муллаһымы Тоҡос/Тәкәс (1752 йылғы Красильников картаһындағы «ТъкЕсва») исеме менән дә йөрөтөлгән һәм тарихыбыҙҙағы беҙҙең заман хаталарына юл аскан -- был хакта һүҙ алдараҡ.

Хаталарҙы төҙәтергә һуң түгел

Милли ғорурлыҡтарыбыҙ Салауат Юлаев һәм Юлай Аҙналин тәржемәи хәлдәренә бәйле тарихнамәләребеҙҙә күрәләтә ебәрелгән хаталарҙың асылы ысынбарлыҡты һәм тарихты сәйәсәткә алмаштырған, зыялыларын теләһә ниндәй фәндәрҙе лә большевизм идеологияһына тоғро хеҙмәт иттертергә күндергән тоталитар режимға тамырлана. Үткән быуаттың 40-нсы йылдарында ук Салауат Юлаевтың милли герой икәнлеге киң танылып, Бөйөк Ватан һуғышы осоронда һәм һуғыштан һуң даны арткандан-арткас, ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты ҡаршыһында батырыбыҙҙың яҡынлап килгән 200 йыллыҡ юбилейын лайыҡлы билдәләү мәсьәләһе килеп тыуа. Мәскәү ҙә хуплай быны. Шул айҡанлы республиканың етәксе әһелдәрен сетерекле хәл борсой: Салауаттың тыуған ауылын сәйәсәткә ярашлы урында кире ҡаҡҡыһыҙ мөһөрләп рәсмиләштереү. Дөрөҫ, 1941 йылда ук партия өлкә комитеты билдәләгән һәм үҙәк комитеты раҫлаған, батырҙың тыуған төйәге итеп йөрөтөлгән Салауат районы бар-барын, әммә тәғәйен Салауат тыуған Тәкәй ауылы унда түгел шул -- Нуриман (хәҙерге Иглин) районында... Ошо әрпешлек тураһында Мәскәүгә лә етешһә... Ниңә алдан күрелмәгән, Тәкәй ауылһыҙ Малаяз районына Салауат исеме бирелгән?.. Күҙгә тегәнәк булып төшкән был хәйерһеҙ Тәкәйҙең тейешле районда урынлашмауын ҡайһылай төҙәтергә?..

Рәсәйебеҙҙә бит билдәле: хаталарҙы үҙебеҙ яһайбыҙ ҙа батырҙарса көрәшеп төҙәтәбеҙ...

Бөйөк ғалим П.С. Палластың яҙмаларынан күренә:

Башкирцы разделяют сами себя на некоторые поколения, имеющие по горам и рекам свои пределы им по точности известные. Каждое поколение имеет свое название и разделяется опять по некоторым странам или обстоятельствам на общества, кои либо с прилагательным именем соединенное, поколения название или и другие имена заимствуют. Разделения на поколения под Российскою державою оставлено, и для введения порядочного распоряжения над каждым поколением определен старшина, коему прочие сотники подчинены. Поколения, чрез которые от Уфы до Исетской провинции ехал, по порядку так следуют: Кудей или Кезей, Аиле, оба сии разделяются на двенадцать меньших родов, Куакан, Каратабин, Баратабин и Катай. Владение каждого поколения нарицают они и именем оного: Айлеягир, Куакандзгир и проч.

Ана шул көҙәйҙәрҙең Өфө йылғаһынан алып кәм тигәндә Йүрүҙәнгәсә һуҙылған аҫаба ерҙәре бер бөтөн кантон йәки район рәүешендә һаҡланһа, батшалыҡ заманында ла, совет осоронда ла төрлө ылыҫ һәм райондарға бүлгесләп тарҡатылмаһа, Баш йылға тамағындағы Тәкәй ауылы ла, Йүрүҙән яғындағы Аҙналы-Юлай ауылы ла бер үк Көҙәйҙә булып, әле әйтелгән сетерекле хәл дә килеп тыумаҫ ине...

Әлхасил, Тәкәй ауылын сәйәси яҡтан партияға кәрәкһеҙ урындан лайыҡлы урынға (Салауат районына) ҡарпытыу, ә Баш йылға тамағындағының ысынлап та

Салауат ауылы икәнлеген халыҡ хәтеренән юйҙыртыу йүнәлешендә большевиктарса ҡыҙыу хәрәкәт башлана; мәсьәләне урындан тороп ҡуйыртырға Йүрүҙән буйы патриоттары йәлеп ителәләр ҙә Өфөбеҙҙән тын өрөп дәртләндерелә. Әлбиттә, сәйәси юрғанды үҙ яғына тартып егеттәрсә көрәшеүе менән улар ҙа хаҡлы ине: милли ҡаһармандарыбыҙ ғүмерҙәренең һуңғы бер өлөшөн шунда йәшәп үткәргән, халыҡ азатлығын даулап тап шул ерҙән изге яуға күтәрелгән. Салауат һәм Юлай данын юғары баһалауҙары, уларға арнап музейҙар, һәйкәлдәр асканы, йыл да гөрләтеп Салауат көндәре үткәргәне өсөн район кешеләренә ысын күңелдән рәхмәт, сөнки хәҙерге Салауат районы — батырҙарыбыҙҙың хак торған ере. Ләкин ***торган ер*** бар һәм ***тыуган ер*** бар. Атай-әсәй, тыуған ер һәр кемгә лә донъялағы бөтә нәмәнән дә ғәзизерәк. Ҡайҙа ғына китеп сәсәп ауһаҡ та, йәндәребеҙ тыуған ергә ҡайта әйләнеп. Шуға күрә Иглин районы халкының йөрәкһеү кисереше, ҡыйырһытылып әрнеүе намыҫлы һәр кеше өсөн үҙенекеләй яҡын. Милли геройыбыҙ тормошо тарихына бәйле сетерекле хәлде асыҡларға тырышҡаныбыҙ өсөн хөрмәтле Салауат районы халҡы үпкәләмәҫ тип ышанам, сөнки Салауат районы уға лайыҡлы, Салауат батырыбыҙҙың даны үҙ урынында ҡала — ярты иле лә кәмемәй. Ҡайһы саҡ мин, ошоларҙы интегеп уйлайым да, шомло-ҡурҡыныс хәүеф кисереп тетрәнәм. Миңә ҡалһа, теге бер йылда лыҡама тулы ике пассажир поезы тамук киҫәүенә әүерелгән Олотәләк фажиғәһе, быйылғы йәмле май айында шулай ук тамук утынан ялманған Урман катастрофаһы һәм тағы ике ай үтер-үтмәҫтән Әшә янындағы тимер юлда ике поездың төкәлешеп ҡыйралыуы — баяғы өс изгебеҙҙең рәнйеүенең ауыр ҡоһоро түгелме? Аллам һаҡлаһын!

Тарихыбыҙға килгәндә, партия өлкә комитеты теге илленсе йылдарҙа милли батырыбыҙ өсөн район-ара ҡупҡан бәхәсте большевиктарса хәл ҡылды: бындай ике полярлыҡҡа ул һис тә юл ҡуя алмай, монолит совет йәмғиәтендә хистәр ҙә бер көйлө булырға тейеш!

1952 йылда ике тарафтың да үткер тешле вәкилдәре Өфөлә осраштырылып, Салауаттың тәғәйен ҡайҙа тыуғанлығын раҫлаусы дәлилдәре ихтирамлы «тыңланыла», әммә Салауат районыҡылар иглиндыҡыларҙан тешлерәк булып сыға, сөнки партия аппараты маһирҙары уларҙыҡын нык үткерләп ҡайраған. Һөҙөмтәлә мәсьәлә шулар файҙаһына сиселә — аталы-уллы батырҙарыбыҙ икеһе тиң боронғо Шайтан-Көҙәй ылыҫы, хәҙерге Салауат районында тыуған, Иглин районы Тәкәй ауылының быға һис ҡыҫылышы юҡ!

Кәрәкле район тупрағында һис бер Тәкәй юҡлыҡтан, уны һис бер кисекмәҫтән эҙләп табыу, бар һәм булған тип дәлилләү ихтыяжы идеология фронтының алғы һыҙығына ҡуйыла. Мыйыҡлы бөйөк юлбашсының «Большевиктар яулап ала алмаған ҡәлғәләр юҡ!» тигән ҡанатлы мәкәленән ҡанатланып, итәғәтле төбәк ғалимдарына мөһим бурыс йөкмәтелә — боронғо урыҫ яҙмаларында, карталарҙа беҙгә кәрәкле ысын Тәкәй ауылының тап Йүрүҙән буйҙарында булғанлығын иҫбатлау.

Профессор, география фәндәренең бына-бына академик булыры ихтимал мәртәбәле белгесе, Өфө фәндәр үҙәгенең һирәк китаптар бүлегендә төйәкләнеп, үҙе белгән иҫке карталарҙы ҡабат-ҡабат аҡтарып, ниһәйәт, 1755 йылғы тип тамғаланып (ғәмәлдә ул 1752 йылда төҙөлгән), 1880 йыл Ырымбурҙың Б. Бреслин типографияһында донъя күргән Красильников картаһында (шифр: р6кг-317) «Адналы», «ТъкЕсва» атамалары аҫтына ҡалын ҡыҙыл ҡәләме менән һыҙып (фото), һуңғыһының «Текеева» тип уҡылырға хаҡлы икәнлегенә, партия талабына тап килеүенә үҙен-үҙе ышандырып, «Эврико!» тип һөрәнләй ҙә олпат атлап ҡайтып китә, әммә шик-шөбһәһе тынғылыҡ

бирмәй: ҡыҙыл ҡәләм эҙен ҡалдырмаҫҡа ине — оппоненттары шәйләп, был бит Тәкәй түгел, ә Тоҡос йәки Тәкәс, ә улар икеһе ике нәмә, тип ғауға ҡуптарһалар... Әммә партиябыҙ ҡуйған изге бурыстан нисек баш тартһын — академик булаһы бар. Башҡалар ҙа бөткән ахмакбаш түгел — үҙ күлдәктәре яҡын...

Ә шулай ҙа фирҡә фекерен һанламайынса көнө эт типкеһендә ҡалған айыҡ акыллы бер һантый ҙа бар икән -- күҙгә төртөпме-төртә: «Һинең «Тәкәй» тигәнең — шул боронғо Шайтанлар ылыҫындағы Шайтан ауылында йәшәгән Тоҡос түрәнең ауылға ваҡытлыса йәбештерелгән тоҡос исеме бит ул; аҙаҡ ауыл барыбер әүәлге Шайтан исеменә ҡайткан, 1770 йылда унда Паллас та булып киткән. Унан килеп, уйлап ҡара әле үҙең: ырыу-ара сиктәр ныҡлы ул заманда Шайтан ауылында ҡобау Юлай һәм Салауат тыуа аламы?!. Тәкәс тә һис Тәкәй түгел!» -- Икеһе лә бер инде, тип тайшанырға иткәйне, эт ашағыр филологы киҫәтә: «Таҡ-ос/Тоҡос/Тәкәс — таҡ һандарҙың осо, осланышы йәғни «туғыҙ» тигән һүҙ, ғаиләләге туғыҙынсы балаға шулай ҡушкандар. Ай календарының туғыҙынсы айында тыуған бәпес иһә Таҡ-ос-ак («аҡ» -- иҫке телебеҙҙә «ай» тигән һүҙ) исемләнгән, хәҙерге Туғыҙаҡ инде. Тимәк, таҡ (икенсе) айҙа тыуған Тәкәй менән туғыҙынсы бала булып тыуған Тәкәс һис кенә лә икеһе бер була алмай». Әммә туған партияһының изге бурысын йөкмәгән йән, бына-быны буласак академик, былдай нескәлектәрҙе кире ҡағып, артындағы мәғрур көстән ҡанатланып ҡул һелтәй: партаябыҙ үҙе ҡушҡас, Токос та Тәкәй була — большевиктар яулап ала алмаған ҡәлғәләр юҡ!

Өлкә комитетында күңелле ығы-зығы: картограф табышын инде килеп архефакттар менән нығытыу мотлак. Һәләтле йәш археологка ла үҙ сиратында фән кандидатлығына диссертация яҡлайһы бар икән — партияһы ҡушҡанса ҡоралланып, иҫке карталағы ҡыҙыл ҡәләм менән һыҙып билдәләнгән буласаҡ «ысын Тәкәй» ауылының урынын, уның изге ҡадыҡтарын һәрмәнеп сәфәр сыға ла, боронғо Шайтан (ТъкЕсва) тупрағында соҡсоноп, кире ҡаҡҡыһыҙ дәлил — «Ҡырғынсылар тарафынан яндырылған Тәкәйҙең» беләк буйы бер торомбашын алып ҡайта. Был торомбаш, моғайын, 1740 йылғы Ҡараһаҡал яуын баҫтырғанда яндырылған йөҙәрләгән башҡорт ауылдарының ҡалдығылыр. Әбей батша заманында ундай хәл ҡабатланмаған йәки бик һирәк булған, хатта иң яуыз дошман һаналған Юлай, Салауат ауылдары ла йәшәүен дауам иткән, тигән һирәк-мирәктәрҙе нигилисҡа һанайҙар, хатта Юлайҙың үҙенең ауыҙынан (Крестьянская война..., 304-нсе бит), батша ғәскәриҙәре донъяһын бөтөрә талап сыҡһа ла, йортона, ауылына ут һалыу тураһында ләм-мим һүҙ булмауын да иғтибарһыҙ ҡалдыралар, сөнки Тәкәйҙе яндырып юҡ иткәндәр, шуға күрә ул бер ҡайҙа ла иҫәпкә алынмаған, тигән тәғлимәт еңә. П.С. Паллас сәйәхәтнамәһенән ул яҡшы аттар алырға тейешле Шығанай һәм Юлай ауылдары бер-береһенә яҡын төбәктә урынлашыуы, ә «Гулей-аул» (Юлай ауылы) береһен-бер ҡалдырмай теркәп барған сәйәхәтсе яҙмаһында сағылмаған Аҙналы ауылына башкөлләй тап килеүе үтәнән-үтә шәйләнһә лә, ә ул иһә хәҙерге Әлкә булһа ла, күрәләтә Шығанай ауылын Юлай тип исемләйҙәр, һыу аръяғы Силәбе ерендә (фото) ҡалған элекке Шайтан ауылы тәңгәленә бирьяҡлап: «Тәкәй ауылы урыны», — тигән яҙыулы һәйкәлташ (фото) торғоҙалар. Әммә-ләкин быныһы ла аҙ икән...

Эш шунда, әлеге Иглин районындағы хәйерһеҙ Тәкәй кешеләре Салауаттың ҡайҙа тотолоуын да үҙҙәренә яҡыныраҡ япһарып, йәғни Салауат районынан ситләштереп, эшсән массаларҙың аңын партия һыҙған тура юддан тайпылдырталар. Бының шулай икәнлеген ярты быуаттан артыгк ваҡыт үткәс тә, 2011 йылда ла, онотмағандар, тәкәйҙәр-хәйерһеҙҙәр — ҡолағымда зыңлап тора ауыл инәһе Нәзифә Сәмиғулла ҡыҙы

Фәрхетдинованың һүҙҙәре: «Ҡартәсәйем Фәрхиназ Ғәбдрафиҡ ҡыҙы (1964 йылда һикһән йәшкә етеп үлде) бабаларынан ишеткәнен һөйләп ҡалдырҙы: ҡырғынсылар ауылды килеп баҫҡас, Салауат, уларҙан ҡасып, урмандағы ҡарт өйәңке ҡыуышына йәшенгән. Әминәһе уны юғалтып: «Салауат! Салауат!» тип ҡысҡырып йөрөгәнендә «Әү!» тип тауыш биргәс, һағалаған эҙәрләүселәре килеп уны тотоп алған...»

Булһа-булыр ҙа, сөнки Ҡатаутамак заводына һөжүм иткән Салауат яуы ҡыйратылып, ҡалдыҡтары төрлө яҡҡа һибелгәс, Салауат та, бәлки, үҙенең тыуған Тәкәйенә ыңғайлағандыр, ошонда Мөҡсин Абдусәләмов әтрәте ҡулына төшөп, Миндәш ауылына килтерелгәндер? Партия өлкә комитеты, әлбиттә, имеш-мимештәргә юл ябыр өсөн, рәсми тарихсыларына бойора...

Батырҙың шанлы юбилейы айҡанлы «Салават Юлаев — 250» тигән мәртәбәле китап (фото) нәшер ителеп, унда һөйөклө партиябыҙ йөкләмәһен тулыһынса үтәп биргән тарихсының ижад емеше баҫыла, Салауаттың нисек тотолоуы тураһында үҙе һөйләгән төп нөсхә протоколдың тексын был авторыбыҙ хәҙерге яҙыуға күсерешендә мошенниктарса эш ҡылып, партияһы ҡушҡан бурысты үтәй — «блис деревни Каратавлы» тигән туҙға яҙмаған һүҙҙәрҙе өҫтәй ҙә батырыбыҙҙың һис тә кәрәкһеҙ яҡта түгел, ә кәрәкле Салауат районында тотолоуын «тарихи нигеҙҙә иҫбатлай». Шул ук биттә йәнәшә бирелгән төп нөсхәнең фотокопияһын укый алыусы табылмаҫ, табылһа ла, партия уға юл ҡуймаҫ, тип уйлағандыр мошенник, әммә барыһын күреүсе Хоҙайыбыҙ бар: Иглин район музейы директоры Ф.Н. Хәкимова ханым да, һәм бәғзе берәүҙәр ҙә ныҡышмал йән булып сыға. Шуныһы аяныслы, был оятһыҙ фальсификация Башҡортостан тарихында аксиомаға әүерелде, хатта Салауат энциклопедияһында ла (17-нсе бит) кире ҡаҡҡыһыҙ факт итеп нығытылған...

Моғайын, инде эштәр теүәлләнде тип торғанда, тарих ҡатламы аҫтынан, тоҡ эсендә яткан осло беҙҙәй, сетерекле бер ғәм төртөп сыға тағы ла — күренекле яҙыусы, ҡалын тарихи роман авторы, Салауаттың тыуған йылы тураһында тарихсылар раҫлаған дата башҡорт халыҡ йырындағыға тап килмәүен, ике йылға айырма барлығын дәғүәләп, зыялылар зиһенен болоҡһота. Әммә большевиктар яулап ала алмаған ҡәлғәләр юҡ — гармония урынлаштырыу сараһы тиҙ табылды. Әмәлгә ҡалғандай, Салауат темаһына яҙылған бер мыҡты монография, авторының талантлы булыуына ла ҡарамай, нәшриәттән үтә алмай тоткарланып ята имеш. Ҡуҙғалтып ебәреү өсөн, текст ҡыҫаһының тейешле егенә, туранан-тура һөйләүсе ышаныслы-тәғәйен документ табылмауға ҡарамаҫтан, бик күп төрлө ҡыйыҡ мәғлүмәттәр дөрөҫтәрҙән-дөрөҫ датаны иҫбатлай: Салауат Юлаевтың тыуған йылы 1752 түгел, ә 1754 тигән фәлсәфәүи өҫтәлмә керетелә лә монография дәррәү тиҙлектә китап булып килеп сыға...

Ниңә ҡалдыҡ быңдай аяныс хәлгә? Маҡсат хаҡына сараларҙың барыһы ла ярай, тигән боҙоҡ ҡанунға ярашлымы?!. Әммә хаталарҙы төҙәтеү һис ҡасан да һуң түгел!

Бер саҡта ла онотмайыҡ: Юлай менән Салауат ошо хәҙерге Иглин районындағы Тәкәй ауылында донъяға килгән, ошо Тәкәй тупрағында беренсе тәпәй баҫкан, ошо Тәкәй тупрағынан башҡорт ерҙәрен талауға ҡаршы изге көрәшкә укталған. Тап Салауатыбыҙ донъяға килгән 1752 йылда төҙөлөп, Өфө провинцияһы ауылдарының береһен-бер ҡалдырмай мөһөрләгән Красильников картаһында Баш йылғаһы тамағындағы ғына Тәкәй ауылы бар, ундай исемле башҡа ауыл юҡ. Бер генә Тәкәй ауылы булғас, икенсе Тәкәй ауылында тыуыуы мөмкинме һуң?!. Күгебеҙҙән күҙ йоммайынса күҙәткән, ҡылыҡтарыбыҙҙы күреп буҙарынған өс изгенең аҡтарҙан-аҡ йөңдоҙлоғо намыҫтарыбыҙҙы гел паклап ҡурсалаһын!

Салауат та, Юлай ҙа Пугачев баш күтәреүенә ҡушылғас, 1774 йылда Көҙәй ылыҫы старшинаһы вазифаһында икенсе бер түрәне — Рәсәй батшаһына тоғролоҡло Малай Әсәновты күрәбеҙ (Крестьянская война 1773—1775 гг. на территории Башкирии, Уфа—1975, 215-нсе бит):

№ 135

Рапорт Уфимской провинциальной канцелярии
генерал-майору П.М. Голицыну о действиях отрядов
Салавата Юлаева, Канзафара Усаева, Канбулата Елдашева,
Караная Муратова в 50—70 верстах от Уфы
24 июля 1774 г.

Копия с рапорта Уфимской провинциальной канцелярии, писанного к генерал-майору и кавалеру князь Голицыну от 24-го, а полученнаго 28-го числа сего июля месяца.

21-го и 24-го чисел сего месяца репортуют сюда нижеписанные начальники башкирского народа о следущем.

1. Сибирской дороги Кудейской волости команды старшины Малая Асанова деревни Текеевой правящей сотническую должность Кунаккузя Мустафин, что в близости оной деревни Текеевой под предводительством Салавата Юлаева начали оказываться злодейский зборищи. Которая деревня от города Уфы за Уфою рекою состоит в 70 верстах.

Арба юлынан Өфөгә 50—70 сакрым —Тәкәй ауылы тап үҙе!

Йәмәлкә Бүгәсәү яуы баҫтырылғас, Салауат менән Юлайҙан 1775 йылдың 25 февралендә батша сатраптары алған тәфтишнамәнән:

...2. Означенного башкирца Юлая сын показал: Салаватом его зовут, Юлаев сын, от роду ему двадцать первой год. Жителъство он имел при отце своем, Оренбургской губернии в Уфимской провинции, в деревне Юлаевой, состоящей на большой Сибирской дороге.

Атаһы ла шулай ук:

1. Природою он башкирец, зовут его Юлай Азналихин сын, от роду ему сорок пять лет. Жительство он имел Оренбургской губернии Уфимской провинций в деревне Юлаевой, состоящей на большой Сибирской дороге. Бывшим оренбургским губернатором князем Путятиным произведен он, Юлай, над башкирцами, живущими поблизости его деревни, старшиною... (Крестьянская война..., 300, 303-нсө биттәр).

Икеһе лә, моғайын, тыуған йылдары тураһында батша тәфтишселәрен албырғаткан, ә күп йылдарҙан һуң ҡатырҙа үткән ғүмерҙәренең ахырында биргән мәғлүмәттәре — тап ысынылыр.

Иғтибар итегеҙ: батша тәфтишселәре уларҙан «ҡайһы ауылда тыуҙың?» тип төпсөнмәгән, ә баш күтәреү алдынан торған ауылдарын белешкән — яуаптар ҙа шул һорауҙарға ярашлы ғына бирелгән. Ә ул сакта улар торған ауыл - өҫтәрәк күрһәтелгәнсә, Аҙналынан әүерелмеш Юлай (Гулей-аул), әлбиттә.

Юлай менән Салауат, Рогервик ҡатырында интегеүҙән әжәлдәре яҡынлашҡас, мәғлүмәтгәрҙе йомоуҙың кәрәге ҡалмағас ҡына, үҙҙәренең ысын йәшен һәм тыуған төп

ауылы Тәкәй икәнлеген сисә, был мәғлүмәт 1797 йылдың 19 майы менән тамғаланған документта сағыла (шул китаптың 340-341-нсе биттәрендә):

Юлай Азналин. — 75 [лет]. -- Оренбургской губернии правинции Уфимскаго деревни Текоевой. -- 1775 ноября 19. — При указе Московской губернской канцелярии. — Бывший в злодействиях сволочи пугачевской, — биты кнутом, ноздри вырваны и заклеймены.— Дряхл, на ногах имеет от застарелой цынготной болезни раны.

Салават Юлаев. — 45 [лет]. — Оренбургской губернии провинции Уфимскаго деревни Текоевой. — 1775 ноября 29. -- При указе Московской губернской канцелярии. — Бывшия в злодействиях сволочи пугачевской, — биты кнутом, ноздри вырваны и заклеймены. -- Здоров...

Полковник Герман Экбаум. ЦГИА Эстонской ССР, ф. 29, оп. 1, д. 42, лл. 7—8 об.— Подлинник.

Һәм бына батыр яҙмышына һуңғы нөктә:

№216

Рапорт командира инвалидной команды в Балтийском порту
майора Дитмара в Эстляндское губернское правление
о смерти Салавата Юлаева

28 сентября 1800 г. В Эстляндское губернское правление от находящегося при Балтиской инвалидной команды майора Дитмара

Сего месяца 26-го числа помре каторжной невольник Салават Юлаев. О чем сим донесть честь имею.

Майор Дитмар -- № 98. Сентября 28-го дня 1800-го года. Балтиской порт.

Над текстом отметка: № 2607. Получ[ено] 29-го сентября 1800. ЦГИА Эстонской ССР, ф. 30, оп. 1, д. 380, л. 48. — Подлинник. Опубл. в газете «Совет Башкортостаны», 11 января 1973 г.

Бына шулай.

Ҡалды Салауат менән Юлай.

Тотҡонлоҡта тынды талған тәндәре, Уралына дондо ялһыҙ йәндәре...

Тыуған ауыл Тәкәйендә осланырмы ғәмдәре?.. Баш йылғаһын балҡытырға тейеш хаҡлыҡ шәмдәре! Ғәҙеллеккә сарсай йәндең йәмдәре...

Ғәҙеллек-хаҡлыҡ йәһәтенән ҡарағанда, бөгөнгө Салауат районының милли батыр исемендә аталыуы, унда батыр иҫтәлеген ҡайғыртыусы музейҙар, һәйкәлдәр асылыуы — ҡәҙер-хөрмәт билдәләре тулайым ғәҙел һәм хаҡлы, сөнки батырҙарҙың һуңғы изге яуға күтәрелеше ошондағы улар йәшәгән Юлай ауылында булған. Ләкин, өҫтәрәк әйтелгәнсә, барҙыр ***торған ер*** һәм ***тыуған ер*** — икеһе ике нәмә. Юлай менән Салауаттың тыуған йорто һәм тирбәлгән бишеге, тәпәй баҫкан һәм донъяға атлаған ғәзиз ере — хәҙерге Иглин районының Тәкәй ауылы!

Бөркөттәрҙе осорған оя йәшереп-томаланмаҫҡа, ә бөтә донъяға балҡытылып бөйөкләнергә, ике район низағы бөтөргә тейеш. Бының иң яҡшы әмәле, минеңсә, Өфө йылғаһынан алып Йүрүҙәнгәсә һуҙылған боронғо Ҡобау-Мең һәм Шайтан-Мең ерҙәрен, Силәбе өлкәһендә ҡалған өлөшөн дә ҡосағына керетеп, берәгәй Салауат районы хасил

итеү, изге ерҙе колонизатор секунд-майор Иглин фамилияһынан арындыртыу. Әгәр ҙә ки ошо барып сыҡмаһа, хәҙерге Иглин районын барыбер **“Салауат-Юлай”** (дефисһыҙыҡса аша яҙыла) районы тип атау хәйерле булыр, шул саҡ батырҙарыбыҙҙың күгебеҙҙә өйөрөлгән изге йәндәре лә тынысланыр ине.

Родина Салавата Юлаева на географических картах и фотографиях



1. Дер. Юлай (Тикеево) у реки Баш в устье р. Сим.
2. Дер. Адналы у реки Юрюзани. 1737 г., карта Ерофея Струкова

Карта-схема из карты Ерофея Струкова, 1737 г.



К сожалению, некоторые исследователи, вводя народ в заблуждение, название деревни«ТЕмЕва» (Темеева) интерпретировали как «Текеева»

1752 г. дер. ТъкЕсва и другие на карте Красильникова, Рычкова.
Выписка из той же карты

К сожалению, наши официальные историки по указанию Башкирского обкома КПСС, фальсифицируя историю, название деревни «ТъкЕсва» (Шайтан) прочитали как «Текеева» и ввели народ в заблуждение. По-башкирски назывался «Тӧкос» или «Текес». Подробнейшая карта Красильникова исполнена в 1752 году -- в году рождения Салавата Юлаева, но нет там другой деревни с названием Текей, кроме той единственной, расположенной на устье речки Баш.



Карта юго-восточной части Сибирской дороги Уфимской провинции. Научный архив УНЦ РАН

Карта из энциклопедии «Салават Юлаев». Уфа, 2004, где четко читается деревня «ТъкЕсва» (с буквой «с»), но наши официальные историки упорно продолжают интерпретировать это как «Текеева».

Карта Красильникова по Оренбургской губернии “1755 года”. Научная библиотека Уфимского научного центра РАН, отдел редких книг

В карте Красильникова “1755 г.” (Оренбург, 1880) на листе 18 подчеркнуты красным карандашом рукою нашего официального историка четко прочитаемые там названия деревень «Адналы» и «ТъкЕсва», но последнее было преднамеренно истолковано как «Текеево».

Карта-схема (приложение) из книги И.М. Гвоздиковой «Салават Юлаев. Исследование документальных источников». Уфа, 1982.

В карте-схеме отсутствуют реки Сим, Баш и расположенная там подлинная дер. Тикеево современного Иглинского района, но в Салаватском районе на месте исторического названия «ТъкЕсва» (Тоҡос или Шайтан) нашими официальными историками «нарисовано» выдуманное ими «Текеево».

Написание названия современной д. Тикеево на картах Красильникова и Рычкова



Деревня Шайтан в одно время носила название ТъкЕсва (башк. Тоҡос), что дало некоторым ретивым «исследователям» принять его за название Текеева и внести большую путаницу в науку салаватоведения.

Стела, установленная по инициативе Ф.С. Тикеева в честь посещения академиком П.С. Палласом в 1770 г. старинной башкирской дер. Мелекес (ныне с. Иглино)

Остановка автотранспорта у дер. Тикеево Иглинского района. 2009 г.

Первоначальная памятная доска, установленная на постаменте памятника Салавату Юлаеву в дер. Тикеево

Июль 2011 г. «Крамольная» надпись на постаменте заменена усеченной, но для кого-то «удобной», «Салават Юлаев, великий сын башкирского народа», а название остановки закрашено

Хадиса Шамсутдиновна Назмутдинова (живет в дер. Нижняя Лемеза), уроженка дер. Тавлы (Хуснулла) Казаяк.

Она рассказывает: «По преданию наших аксакалов Салават Юлаев родился в дер. Текей Кубовской волости (совр. Иглинский район) на летовке «Аҡкош Яланы» (Лебединое поле), в юношеские годы был страстным охотником, любил верхом на коне добираться до нашей деревни (расстояние прямиком шесть километров), охотился там на горе Йылан-тау (Змеиная гора), где на берегу реки Сим есть отвесная скала с туннелеобразной «пещерой Салавата».

На кладбище дер. Старокубова у могилы патриарха Тикей-бия, основателя деревни Тикеево на устье реки Баш, почтили его память потомки М.Х. Ахметьянов (слева) и Ф.С. Тикеев

«Долина Юлая» (Азналина) около дер. Старокубова.

По преданию местных жителей, в 1774 г. здесь был походный стан повстанческих войск Юлая Азналина

Дер. Тикеево. Вид на реку Сим у устья реч. Баш

Вид на дер. Тикеево

Старожилы дер. Тикеево Назифа и Амир Фархетдиновы

Они рассказывают предание своих предков о том, что Юлай Азналин и Салават Юлаев являются уроженцами их деревни. При том Салават был рожден в летовке «Аҡкош Яланы» (Лебединое поле). Бабушка Назифы Фархиназ Габдрафиковна, которая умерла в 1964 году в возрасте восемьдесят лет, рассказывала услышанное от своих предков, что Салават Юлаев был пойман карателями здесь, в лесу около Тикеево.

Коренной житель дер. Тикеево Науфал Самигуллович Салихов

Он возможно один из потомков Салавата Юлаева: «Моя бабушка Идиатуллина Фархиназ Абдрафиковна (девичья фамилия Салихова), которая умерла в 1964 году в возрасте 80 лет, мне рассказывала, что «Салават-баба Юлаев» приходится ей прямым предком».

Энтузиасты-патриоты района Флюза Нурулловна Хакимова и Анас Габдуллович Валиуллин

Карта из книги «Административно-территориальное устройство Республики Башкортостан» (Уфа, 1999), в которой отсутствует дер. Тикеево

На этом месте находился первый дом Тикей-бия и его пятерых односельчан

На месте последнего дома Тикей-бия в дер. Тикеево,
которое расположено выше около двух верст от устья р. Баш

Вид на дер. Старокубово. 2011 г.

Аксакал дер. Минзитарово (Шайтан-Мин) М.М. Миргалиев и Ф.С. Тикеев на фоне бывшего «кладбища шайтанов», разрушенного большевиками — «исправителями истории» в 1945 г.

Старожил дер. Алькино (бывшая Адналы - Юлаева) Салаватского района М.К. Закиров на кладбище у надгробного камня Мафтухи – дочери Курбангалия (1849 - 19.05.1919)

На кладбище современной дер. Алькино (бывшей Адналы — Юлаева) сохранился надгробный камень основателя деревни Аднамохамад-бабая (отца Юлая Азналина)

Юлай Азналин после смерти отца с младшим сыном Салаватом переселился из их родной дер. Тикеево (Иглинский район) в Адналы, и после того, как его назначили старшиной данной Шайтан-Кудейской волости, эта деревня стала называться по имени этого тюри-старшины Юлай-аулом (по-Палласу «Гулей-аул»). Текст эпитафии начинается с краткого шежере усопшего.

Салаватский район. В так называемой «деревне Юлая» (бывший Шиганай-аул) установлен бюст Салавата Юлаева работы Т.П. Нечаевой

Салаватский район. На устье речки Хары Кундуз, впадаюшей в речку Кускунды у подножия горы (территория Челябинской области) заметны следы расположения бывшей дер. Токос (Шайтан) или ложной Текеевой

На правом берегу речки Кускунды воздвигнута стела с ложно-придуманной надписью: «Место деревни Текей»



Изданная в Уфе книга в честь юбилея Салавата Юлаева содержит грубую фальсификацию



В книге имеется фотокопия с подлинника показаний Салавата Юлаева с его подписью, где (помечено указкой) рассказывается обстоятельства его пленения, но без названия местности (нет слов «блис деревни Каратавлы»)


ною явиться к господину
то и я с товарищами моими, в
на лыжах, вслед за ним для того о
рогою, блис деревни Каратавлы,
полковника Аршеневского
оружие при себе и имел, но
И сие показываю я по самой и

Наши официальные историки в пользу выдуманной ими истории грубо фальсифицировали документ с показанием Салавата Юлаева, вставляя в текст не принадлежавшие ему и не сответствующие действительности слова: «блис деревни

Каратавлы». Сей подлог был помещен и в издании «Крестьянская война 1773-1775 гг. на территории Башкирии» (Уфа, 1975, док. № 200). Фотокопия подлинника того же документа перепечатана в энциклопедии «Салават Юлаев» (Уфа, 2004).



Протокол показаний Салавата Юлаева в Уфимской провинциальной канцелярии. 5 мая 1775 г. РГАДА

Ист.: РГАДА. Ф.6, оп.1, д.593, л.328–333.
Лит.: Гвоздикова И.М. Салават Юлаев: Исследование документальных источников. Уфа, 2004.

И.М.Гвоздикова

Протокол показаннй Салавата Юлаеиа в Уфимской провинциальиой канцелярии. 5 мая 1775 г. РГАДА

Ист.: РГАДА. Ф.6. оп.1, д.593, л.328-333.

Лит.: Г в о з д и к о в а И.М. Салават Юлаев: Исследование документальных источников. Уфа, 2004.

Фотокопия с хорошо читаемого подлинника протокола с показаниями Салавата Юлаева помещена и в Энциклопедии «Салават Юлаев», там нет упоминания дер. Каратавлы. Однако на стр. 17 этого же солидного издания повторяется старое ложное утверждение: «25 ноября 1774 года Салават Юлаев с группой своих ближайщих сподвижников был захвачен «сильной партией» из корпуса генерал-майора Фреймана и отрядом верных властям мишарских старшин в лесах Каратау (ныне Салаватский район РБ)»...

П.С. ПАЛЛАС СӘЙӘХӘТНАМӘҺЕНӘН ИНША

1. Выехал из Уфы в Исетскую провинцию 16 мая [1770 г.] в село Богородское (хәҙерге Өфө ҡалаһының Инорс бисҭәһе. — Й.С.), лежащее в 15 верстах вверх по реке Уфе.

2. Переправа через Уфу.

3. Через реки Шакша и Тогуш (впадают в Уфу).

4. Дер. Белекес — при речке Белекес (ночевка).

5. Кубаул (Ҡобау-ауыл — Второе Кубово) — башк., при ручье Лабау.

6. Проехав 25 верст мы прибыли в деревню Текей, лежащую на привольном месте в полутора верстах от реки Сим.

Тәкәйҙә (Тикейҙа) ҡуналар һәм «плот»та (һалда) Эҫемде кисәләр. Река Сим или по названию башкирцев Ессюм (Эҫем).

7. Приехали в башк. дер. Лемес (совр. Нижние Лемезы). Там же первая казарма, принадлежащая Твердышевским заводам.

8. Приехали до другой казармы, ночевка.

9. Переехали через Карамалы Зилга (совр. дер. Улу-Карамалы).

10. Через 60 верстов третья казарма у реки Ук. Переезд (несколько раз) через реку Ук. На вершине Ук — подошва Карака-Тау.

11. Верст за восемь от третьей казармы — Симский завод.

12. 21 мая поехали от Симского завода на восток к реке Юрюзени.

13. Доехали до русск. дер. Яраль (Ераль) - заведенная за восемь лет пред сим (в 1762 г.) при реке Ерал.

14. Как скоро на перемену свежие лошади из около лежащих башкирских деревень Гулей (по-видимому Юлай) и Шиганей (по ревизии 1859 г. при речке Ширдале, чуть выше дер. Ст. Каратавлы) волости Шайтан-Кудей приведены быть могли, то я, оставив здесь тяжелые повозки, отправился из деревни Ерал в Катавский железный завод, до коего летнею дорогою сорок одна, а зимою тридцать верст считают...

Юлай һәм Шығанай ауылдары бер төбәктә күрһәтелгән, шунан ғына ла Юлай ауылының элекке Аҙналы (хәҙерге Әлкә) ауылы икәнлеге күренә.

Юрюзеньский завод...

15. Поехал я от Юрюзеня обратным путем в Орловку (до 100 дворов).

16. Приехал в Миндеш-аул.

17. Оттуда — в Ерали.

18. Из Ерали повозки отправил прямою дорогою через Шиганай-аул за двадцать две версты к Юрюзянскому перевозу под башкирскою деревнею Каратавлы.

19. Оттоль далее в мещерякскую деревню Ниссебаш, а сам поехал в сторону для осмотру находящихся к юго-востоку пещер...

20. Ручей Кульмяк, у него находится маленькая башкирская деревня из шести дворов (возможно, совр. Яхъя).

21. Отсюдова отправился я вниз по речке Кульмяк, через соединяющийся с нею ручей Саракундус (Һороҡондоҙ), а потом через речку Кускинде (Күскунды), которая, сливаясь с прежде упомянутым ручьем (Һороҡондоҙ), впадает в Юрюзень.

22. Здесь, взяв несколько провожатых из лежащей на левой стороне сея речки (Күскунды) деревушки из нескольких рассеянных дворов состоящей Шайтан-аул...

П.С. Паллас яҙып ҡалдырған был Шайтан — борон заман ошо яҡтарға килеп төйәкләнгән Шайтан-Мең, йәки Шайтан-Көҙәй ауылдарының береһе булһа кәрәк («Шайтан-Көҙәй»ҙән хәҙерге ҙур ҡасаба Көҙәй исеме ҡалған кеүек, был яҡтарҙа Шайтан

исеме һаҡланған). Ҡайһы бер авторҙарҙың был ауылға Тәкәй атамаһын тағып маташыуҙары төптө буш, сөнки һәр аҙымын ак ҡағыҙға ентекле теркәп барған бөйөк ғалим Тәкәй тигәнде иғтибарһыҙ ҡалдырмаҫ ине. Шулай ук Красильниковтың 1752 йылғы картаһында ла ул "ТъкЕсва" тип яҙылған — заманында уны КПСС өлкә комитеты бойороуынса Салауат тыуған икенсе бер Тәкәй ауылы тип иҫбатларға көсәнеүҙәр урынһыҙ.

23. Поехал я обратно через Кускянде (Куҫкунды) без дороги прямо к востоку.

24. Прибыл в из немногих дворов состоящей деревню Гулей-аул, в котором живет начальник поколения Шайтан-кюдей.

Был Гулей-ауыл — һис шикһеҙ Аҙналы-Юлай ауылы; баш күтәреүселәр еңелгәнцән һуң ул атама, тыйылып, Әлкәй ауылы булып киткән. Юлай ауылы батша ҡырғынсылары тарафынан яндырылған тип фаразлау һис нигеҙһеҙ, сөнки Юлай Аҙналин батша тәфтишселәренә биргән ентекле яуаптарында ауылды яндырыуҙары тураһында әйтмәгән: «...бывшаго в их местах для успокоения тамошних жителей российскою под предводительством полковника Аршеневокаго командою дом и имение его, Юлая, все растащено, причем весь скот его, лошадей с 50, также коров и мелкого скота немалое число взято. А жену его били и спрашивали у нее денег. Почему она и открыла, что деньги его, Юлая, им положены у соседа, у котораго, также сыскав, и отняли серебреною манетою 600 рублей, серебряных старинных копеек 15 рублей. Да еще взяли у жены его медных 15 рублей и три лисицы, одна в 30 рублей, а две по три рубля. Двух же его жен и десятилетняго сына взяли в плен, и где они ныне находятся, — не знает» (Крестьянская война..., 304-нсе бит).

25. Идрис ауылы.

26. Обратный мой путь к Шайтан-аулу был тот же, что и прежде.

27. Отсель (из Шайтан-аула) поехал я по ту сторону речки Кускянде на север к Каратавлы-аулу.

28. Переехал здесь через р. Юрюзань, доехал до мещер. Деревню Ниссибаш.

29. 26 мая оттудова отправился в местность Янган-тау.

30. Обратный путь наш был по тем же местам. Из Ниссибаша — в Саткинский завод...

31.05.2011 - 16.08.2011

СОДЕРЖАНИЕ

Авторҙан
Изге йәндәр юллай ғәҙеллек
Бөйөк Ҡобау-Мең иленә сәйәхәт
Ауылдар боронғоһо
Шайтан-Мең ырыуы һәм Шайтан ауылдары
Хаталарҙы төҙәтергә һуң түгел
Родина Салавата Юлаева на географических картах и фотографиях
Написание названия современной д. Тикеево на картах Красильникова и Рычкова

П.С. Паллас сәйәхәтнамәһенән инша

Научиое издание
Султанов Зигат Адигамович

СОЗВЕЗДИЕ АДНАМУХАМЕТА, САЛАВАТА И ЮЛАЯ
Новый подход к проблеме

(на башкирском языке)

Редактор: Ф.С. Тикеев
Компьютерная верстка А.Л. Гаделовой

Подписано в печать 24.08.2011. Формат 60x84'/|6. Бумага офсетная.
Гарнитура «Таймс». Печать на ризографе. Усл. печ.л. 3,25. Уч.-изд.л. 3,35.
Тираж 1000 экз. Заказ № 396
Издательство «Гилем» Академии наук РБ 450077, г. Уфа, ул. Кирова, 15
Тел.: (347) 273-05-93, 272-36-82.
E-mail:gilem@anrb.ru


ТИКЕЕВО
р. БАШ
БАШ Й.

Улар теҙләнмәне

1735 йылда Рәсәй батша самодержавиеһы тарафынан үҫәргәндәр ерендәге Ур йылғаһы тамағына ҡала-ҡәлғә төҙөү өсөн Өфөнән юлландырылған Ырымбур хәрби экспедицияһының юлын өҙөү -- башҡорт ерендә урыҫ ҡәлғәһе суҡайтыуға ирек ҡуймаҫ өсөн, тамъян батыры Аҡай Күсемов башлап ебәргән һәм беҙҙең төбәктә Килмәк-абыз менән Үҫәргән батырҙары дауамлаған ғәрәсәтле ихтилалдың нисек итеп фажиғәле бөтөүенә туранан-тура бәйле урын был -- әүәлге Ҡасанҡый-Сала, ә хәҙерге Ырымбур өлкәһендәге тыуған ауылым Сәнкем-Биктимер (Һунарсы).

Билдәле булыуынса, 1735 йылдың июнендә Өфө ҡалаһы янында йыйылған бөтөн башҡорт ҡоролтайы (Аҡай батыр унда Ҡазан юлы башҡорттарының вәкилдәрен етәкләй) батша баҫымына ҡаршы ҡораллы баш күтәрергә ҡарар сығара һәм ихтилал Ҡазан даруғаһында Аҡай батыр етәкселегендә дөрләп ҡабына, ә ауылыбыҙ Ҡасанҡый-Сала янындағы ҡанлы һуйылыш ихтилалдың фажиғәле һуңғы аһәңе була. Тарихсы И.Ғ. Аҡманов иҫбатлауынса, Аҡай батыр, ихтилалды баҫтырырға ебәрелмеш генерал-лейтенант А.И. Румянцев менән йәнәһе тыныс һөйләшеп килешеү өсөн, 1735 йылдың сентябрендә Минзәләгә саҡыртыла һәм, мәкерле рәүештә ҡулға алынып, 1738 йылда С.-Петербург төрмәһенә оҙатыла (артабанғы яҙмышы билдәһеҙ). *Ләкин* эҙәрмән-тарихсы Рәүеф Насиров 1997 йылда Өфөлә нәшер ителгән «Уҙамандарҙы эҙләйем» тигән китабында Аҡай батырҙың, үҙе етәкләгән ихтилалдан һуң да, «тыуған яғы Әй йылғаһы буйҙарында ғүмер итеүе» тураһында байтаҡ ҡына дәлилдәр килтереп яҙһа ла, ысынбарлыҡҡа тап килмәй был фаразы; ни өсөн, тигәндә, Аҡай Күсемов һәм Аҡа (Аҡҡа, Аҡай) мулла Ҡамҡаев (Ҡыуаҡан ылыҫы Ҡамаҡай ауылы кешеһе, Бәпәнә Төрөпбирҙинден ауылдашы) — икеһе ике кеше. Сөнки 1737 йылдың 11 сентябрендә ул, Аҡай мулла, төрмәлә ултырмыш ихтилал етәкселәре Йосоп, Килмәк, Аҡай Күсемов уҙамандарҙы азат итеүҙәрен һорап В. Татищевҡа хат яҙып ебәреүҙә ҡатнашҡан...

Әммә ихтилал башлығы Аҡай батыр ғәскәренең һәм, Ә.В. Туған әйтмешләй, уның идара үҙәгенең минең тыуған ауылымдың боронғо төп-нигеҙе Ҡасанҡый-Сала эргәһендә урынлашып, рәхимһеҙ ҡырылыуы тураһында башҡорт тарихсыларының да, яҙыусыларының да хәбәрдарлығын белдерткән мәғлүмәт юҡ, әгәр ҙә ки Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың әллә ҡасан уҡ яҙылып, үҙенән һуң ҡулъяҙма хәлендә ҡалған һәм 1994 йылда ғына Өфө «Китап» нәшриәтендә донъя күргән «Башҡорттарҙың тарихы» тигән хеҙмәтен телгә алмағанда. *Ләкин* бөйөк ғалимыбыҙ ҙа, ваҡиғаларҙы ифрати дөрөҫ биреп тә, уларҙың тәғәйен ҡайһы урында барғанлығы мәсьәләһендә бутала (сит илдә ҡалып эшләүе, Башҡортостан менән бәйләнеше өҙөлөү арҡаһындалыр). Ғалимыбыҙ таянған тарихи документты мин уның әле әйтелгән китабы донъяға сыҡмаҫы элек үк ныҡлы өйрәнеп, ваҡиғаларҙың географияһын дөрөҫ билдәләгәйнем, быға минең, әлбиттә, тап шул төбәктә тыуып-үҫеүем һәм ундағы ер-һыу атамаларын, риүәйәттәрен белеүем ярҙам итте.

Әлхасил, Ә. Вәлиди Туғандың шул «Башҡорттарҙың тарихы» китабынан беҙгә ҡағылышлы өҙөк (96 — 99-ынсы биттәр:

«1736 йылдың яҙында башҡорт ғәскәрҙәре *Кинель, Һаҙлыйылға, «Кешеҡырылған»* йылғалары буйында идара үҙәге ҡорҙо. Күп мосолман һәләк булды. Бигерәк тә Кинелбашы, Һаҙлыйылға һуғышында урыҫ ғәскәре, шымсылар булышлығында башҡорт ғәскәренең идара үҙәгенә төндә һөжүм итеп, ғәскәр генә түгел, ауыл халҡын да аяуһыҙ

ҡырҙы. Шәфәҡтә йылға аръяғында ауыр һуғыш алып барған ирҙәргә ярҙам итергә теләгән ҡатындарҙы тупҡа тоттолар. Ҡатындар балалаларын һыуға батырып, һуғыш майҙанына ашыҡты. Ләкин һәммәһе лә ҡылыс аҫтында һәләк булды. Был һуғыштар тураһында һижри буйынса 1150 йылға ҡараған хәтирәләр Асылыкүл исемле ауылда Әхмәт исемле берәүҙең ҡулында һаҡланған дәфтәргә яҙылғайны. Һуғыш ҡыҙыулығында ирҙәрҙең — ҡатындарын, ҡатындарҙың үҙ балаларын үлтереү осраҡтары боронғо уғыҙҙарҙа һәм шулай уҡ ҡара-ҡытайҙар килгәндә Сәмәрҡәнд янындағы Катвен исемле ерҙә булған һуғыштарҙа күҙәтелеүе беҙгә мәғлүм... Тамъян ҡатындары, Һаҙлыйылғаның аръяҡ ярында ҡалған ирҙәре сафына ҡушылыу өсөн, балаларын йылғаға батырып, ҡаршы яҡҡа йөҙөп сығып һуғышҡан. Ҡыҫҡаһы, Һаҙлыйылға һәм «Кешеҡырылған» — башҡорттарҙың ватан һөйөү һәм уның өсөн шәһит булырға әҙер тороуҙарының үлмәҫ хәтирәһе ул. Урыҫтар был һуғыштарҙан һуң Аҡай-бейҙе Минзәлә ҡалаһында язалай. Икенсе бер риүәйәттән күренеүенсә, уны Петербурға алып килеп, шунда язалағандар...

Ошо ҙур яуҙа башҡорттарҙы ныҡ өҙгөләндергән тағы бер хәл — Минзәлә һәм «Кешеҡырылған» һуғыштарында Ҡазан татарҙарынан бер төркөмдөң, бигерәк тә Ҡорманай исемле әҙәмдең, һәм Уржум сирмештәренең урыҫҡа ярҙам итеүе, төнөн юл күрһәтеп, башҡорттарҙың идара үҙәгенә көтмәгәндә дошман килтереп, аңғармаҫтан баҫып алыуы булды. Ихтимал, улар Тевкелевтың (Тәфтиләүҙең) агенттары булғандыр...

«Кешеҡырылған» һуғыштарынан ҡалған ҡәбер таштарының... һаҡланыуы хаҡында ишеттем».

Шулай тип яҙа ғалимыбыҙ Әхмәтзәки Вәлиди Туған.

Китап авторы ҡулланған, иҫке төркисә яҙылып, урыҫсаға ла тәржемә ҡылынған ҡомартҡылағы өс йылғаның исемен, хәҙерге көндәге әйтелеш исемдәре менән сағыштырып, ысынлап та беҙҙең төбәктәге бер үк йылғалар икәнлеген асыҡлап биреү бик мөһим. Иғтибарлап ҡараһаҡ (түбәндәге географик карта буйынса барлағыҙ), китаптағыса «Кинель» — Ғәрәп хәрефтәре менән яҙылышында «Кнали», был иһә өҫтәрәк телгә алынған, һыу башы Ҡаҫмарттың уң ярынан йыраҡаланып (каналланып) ағып сыҡҡан һәм Ҡасанҡый-Сала янынан Һаҡмарға табан ағылған боронғо исемендәге «Аҡмасыҡ», ә Аҡай яуы осорондағы «Аҡмалы» булып, иҫке төркисә ҡулъяҙмала «Аҡынали» яҙылып, шул уҡ ваҡытта баштағы «А» таяғы «ҡ»-ға ҡушылып һыҙылыуы арҡаһында ошо ике хәреф бергә «К» тип уҡылып, күсермәлә «Кнали» хасил булғанлығы күренә. Тимәк, бик боронғо Аҡмасыҡ//Аҡмалы был. Ул Һунарсы ауылы көнсығышындағы «Ҡаҙаҡлар сабыны» тәңгәлендә Ҡаҫмарттан ҡаналланып-йырылып сыҡҡан һәм ауылдың Ҡаҫмарт яҡ ситен уратып аҡҡан (хәҙер уның был башланғыс өлөшө ҡороған, ә дауамы Урта тирмән тәңгәленән яңы йыраҡаланып ағылып ята).

Икенсеһе «Һаҙлыйылға» (Аҡмалыға ҡоя) әлегәсә шул көйөнсә исемләп әйтелә. Һаҙлыйылғаға ҡойған һәм ҡулъяҙмала «Кешеҡырылған» тип исемләнгән өсөнсө бәләкәй йылғабыҙ иһә хәҙерге көндә Әселе үҙәк атала, ул иһә, моғайын, «әжәл» һүҙенең үҫәргәндәр һөйләшендәге «әзәл» әйтелешенән яһалған: «Кешеҡырылған»ға алмаш «Кеше Әзәле» тигән вариант исемдән, «кеше»һе ҡыҫҡартылып, Әзәле//Әселе үҙән барлыҡҡа килгән, ә хәҙер иһә ул, һыуы ҡороп, Әселе үҙәк тип йөрөтөлә. Быларҙың өсөһөнөң дә бергә ҡушылған урыны бопронғо Ҡасанҡый-Саланан көнсығыштараҡ — хәҙерге Һунарсы ауылының көнбайыш осонда — атаҡлы илбаҫар Аҡһаҡ Тимер яуы үткән юл өҫтөндә...

Батшаға ҡаршы баш күтәргән Нуғай юлы башҡорттарының (ҡатын-ҡыҙҙары, бала-сағалары, мал-тыуарҙары менән бергә) 1736 йылдың яҙында ни өсөн тап беҙҙең Ҡаçмарт тамағында пәйҙә булыуҙарын аңлатыусы ҡайһы бер тарихи документтарға күҙ һалайыҡ.

Иң тәүҙә бер мөһим хәл: был ихтилал Аҡай ихтилалы тип аталһа ла (сөнки ул башлап ебәргән һәм башында етәкләгән), Аҡай Күсемов, әйтеп үтеүебеҙсә, 1735 йылдың 7 ноябрендә үк иң яҡын ярандары менән бергә Өфөләге генерал-лейтенант А.И. Румянцевҡа барып баш һалып, төрмәлә тотолғанлыҡтан, Нуғай юлындағы артабанғы хәрәкәттәрҙең башында Юрматы ылыçының ил ағаһы Килмәк абыҙ Нурышев тора, ихтилалсылар иләүен дә был төбәккә боронғо Муйтән бабабыҙ эҙҙәренән тап шул алып килә лә инде.

Билдәле булыуынса, үçәргәндәр ерендәге Ур йылғаһы тамағында башҡорт менән ҡаҙаҡ араһына урыç ҡәлғәһе (беренсе Ырымбур) суҡайтыу өсөн, 1735 йылдың йәйендә Өфөнән тура көньяҡҡа ҡарай статский советник И.К. Кирилов етәкселегендәге Ырымбур экспедицияһы юллана. Ул Эйек йылғаһының һул яры буйынса йылға тамағына етеп, хәҙерге Воздвиженка ҡаршыһында Һаҡмарҙы кисеп сығып һулға боролорға ла Яйыҡтың уң яры буйлап үргә — Ур тамағына барырға тейеш була. Нуғай юлындағы башҡорт болаһы экспедицияның башына етмәһен өсөн, уның артынса уҡ Өфөнән ебәрелгән 500 драгунға Мәләүез йылғаһы тамағында август айында Юрматының ил ағаһы Килмәк абыҙ ихтилалсылары ябырылып, ҡаты һуғышта 200 драгунды ҡырып ташлай ҙа 3000 яугире менән Кириловтың артынан төшә. Ә Кирилов экспедицияһы был ваҡытта Эйек йылғаһының һул яғында баяғы 500 драгундың килеп етеүен көтөп, Эйекҡә ҡойған Әселе йылғаһы буйындағы хәҙерге Петровский ҡасабаһы тәңгәлендә ыçтан ҡороп туҡталып тора икән — нәҡ минең аçаба бабаларҙың йәй уртаһы йәйләүендә (ә Кирилов тоçҡалған Һаҡмар кисеүе — көҙгө йәйләү еребеҙ)... Арьяҡтағы Һаҡмар ҡәлғәһенән урыç казактары, батша яҡлы башҡорт ҡыпсаҡтары, ҡалмыҡ, мишәр кешеләренән торған әтрәттең һәм атаман Араповтың яҡшы ҡоралланған 200 кешелек командаһының бергәләшеп йәһәт килеп етеүе һәм башлыса уҡ-һаҙаҡ, һөңгө менән генә ҡоралланған ихтилалсыларға утлы ҡоралдары менән ныҡышмалы көрәшеүе арҡаһында ғына Ырымбур экспедицияһы тар-мар ҡылыныуҙан ҡотола. Килмәк абыҙ төркөмдәренең батша ғәскәрҙәренә ҡаршы тап ошо минең бабалар ерендә һуғышыуҙарын дөрөçләүсе документ һаҡланып ҡалған — батша ғәскәрҙәре яҡлы старшиналар Муса Ҡошҡолтаев менән Ҡыҙрас Муллаҡаевтың (икеһе лә Нуғай юлы Мең ылыçынан) 1735 йылдың 10 июлендә Өфө провинция кәнсәләренә биргән шаһитлыҡтары. Улар икеһе лә И.К. Кирилов ыçтанының ***Тирәкле*** йылғаһынан 15 саҡрым алыçлыҡта тороуын, һәм үҙҙәренең ихтилалсылар тарафынан тап шул Тирәкле йылғаһы буйында әсир алыныуҙарын, ә ул саҡта Килмәк абыҙ ыçтанының иһә Тирәкле йылғаһы башында булыуын күрһәтә, ә был иһә беҙҙең ғәзиз йылғабыҙ, хәҙер ҙә ул беҙҙең колхоз баçыуҙары буйынан ағылып ята...

Бабаларыбыҙҙың ошо беҙҙең йәйләү ерҙәрендә Ырымбур экспедицияһын Һаҡмар кисеүенә үткәрмәй тотҡарлауҙары арҡаһында бер аҙ һуңлабыраҡ булһа ла, И.К. Кирилов Ур тамағына барып етә һәм унда яңы ҡәлғә Ырымбурҙың (һуңынан Орск) нигеҙләнеүе тураһында 1735 йылдың 23 сентябрендә Һаҡмар ҡәлғәһенән әбей батшаға хәбәр ебәрә. Уның Һаҡмар ҡәлғәһенә ашығыс әйләнеп ҡайтыуының сәбәбе — Нуғай юлы башҡорттарының Килмәк абыҙ етәкселегендәге ихтилалының көсәйеүе, шул арҡала Өфө менән бәйләнештең өҙөлөү ҡурҡынысы. Әбей батшаға ул баш күтәреүселәрҙе баçтырырға йүнәлеүен хәбәрләй:

«...А я, нижайший раб, сентября 7 числа пошел назад внутрь помянутых воров *иштяков,* на самые их жилища Юрматынской и Тамъянской волостей; а имею при себе драгун Вологоцкого армейского, Казанского гарнизонного, да новых всего 8 рот под командой секунд-майора *Останкова,* да нерегулярных Уфимских татар, мещеряков, кои по подданнической своей должности управлением первого их старшины Муслюма Кудайбердина в верной службе обращаются — 400, казаков уфимских, яицких, сакмарских 150 человек...» (Шуныһы ҡыҙыҡ: Һаҡмар ҡәлғәһенән 1735 йылдың 23 сентябрендә яҙып ебәрелгән был ҡағыҙ Петербурҙағы әбей батшаға бер ай эсендә үк — 26 октябрҙә барып еткән!).

Әммә ихтилал Башҡортостандың йәмғе дүрт юлында ла дөрләгәнлектән һәм ҡыш башланыу сәбәпле, И.К. Кириловҡа Өфө ҡәлғәһенә ҡайтырға һәм, барлыҡ көстәрҙе туплап, киң фронтлы һөжүм ойоштороу тураһында уйларға кәрәк була. Сөнки әбей батша Анна Иоанновна баш күтәреүсе башҡорттарҙың тоҡомон тамам ҡоротторға әмер биргән, һәм бындағы сатраптарын һүлпән ҡуҙғалыуҙа шелтәләй... Шул йәһәттән 1736 йылдың 5 мартында генерал-лейтенант һәм Ҡазан гөбөрнәтере А.И. Румянцев, статский советник, Ырымбур экспедицияһы башлығы И.К. Кирилов Алабуға ҡалаһында осрашып, ихтилалсы башҡорттарҙы шул уҡ йәйҙә ҡырып бөтөрөү тураһында һөйләшеп килешә лә кем ҡайҙа нимә эшләргә тейешлеген аныҡ билдәләй:

А.И. Румянцев ғәскәре менән Ҡазан юлы башҡорттарын баҫтыра-баҫтыра Нуғай юлына барып етәсәк.

И.К. Кирилов кисекмәҫтән Өфөгә йүнәлеп, ундағы ғәскәрҙең иң ҙур өлөшөн алып, Нуғай юлындағы Табын ҡәлғәһе аша юрматы һәм башҡа ылыҫтарҙың аҫтын өҫкә килтерә.

Полковниктар П. Мартаков (Әстерхан драгун полкы), Тевкелев Алексей Иванович (Ҡотломөхәммәт мырҙа Тәфтиләү. И.К. Кириловтың ярҙамсыһы) үҙҙәренең ҡул аҫтындағы ике меңләп драгун менән Уса һәм Себер юлы башҡорттарының көлөн күккә осора.

Ике меңлек Яйыҡ казактары һәм улар менән бергә урыҫтарға хеҙмәт иткән ҡалмыҡтар март аҙағы — апрель баштарында Һаҡмар ҡәлғәһенә килеп етергә лә, унан Ағиҙел тарафына юлланып, өҫтә әйтелгән А.И. Румянцев һәм И.К. Кирилов командаларына ҡушылырға тейеш. Әстерхан яғындағы өс мең ҡалмыҡ та, Һаҡмар ҡәлғәһенә ашығыс килеп, Нуғай юлына сығасаҡ...

Ниәттәренең үтәлеше тураһында А.И. Румянцевтың батшаға хисапнамәһенән: «...чрез всю Казанскую дорогу шел благополучно со удовольством — на станциях приготовлено фуражу и подвод (сөнки Аҡай Күсемов етәкселегендәге Ҡазан юлы ихтилалы баҫтырылған, етәкселәре килеп баш һалған. — *Й.С.*)... Пошел 3 апреля сего года к Деме реке (Нуғай юлына. — *Й.С.*) в самые воровские жилища... И где их собрания были, нимало не стояли, а бежали вперед, уповая тамо живот свой спасти. И не токмо по одной Деме, но и по протчим рекам, которые в Дему впали, посыланы партии были и помощию всевышняго и е.и.в. высочайшим счастием *около тысячи человек обоего пола воров побито,* и несколько десятков в плен взято, и *около ста деревень выжег, не оставляя ни единого двора.* Тако сии злодеи за бунтовское свое воровство пред в.и.в. от меча и огня конец восприяли, разве только те спаслись, которые не в проходимые ущелья забежали... От статского советника господина Кирилова получил письмо, что он с командою ходил по Уршаку реке, и тако же по оной реке воровских деревень выжег 42 и воров несколько побито... *И тамо воры также бегут, и домы свои и фураж жгут, и тем ему припятствие в*

пути чинят. А главный вор Кильмяк-абыз за Белую реку ушел, и за ним от него (от Кирилова. — *Й.С.*) послана немалая партия, и что воспоследует, еще ведомости не имею...»

Күренеүенсә, Килмәк абыз Ағиҙел аръяғына — беҙҙең Ҡаҫмарт йылғаһы тамағындағы Ҡасанҡый-Салаға табан сигенеп бара боласыл иләүе менән...

Ә бына И.К. Кириловтың 1736 йылдың 20 майында яҙған шундай уҡ хисапнамәһенән:

«Е.и.в., самодержице всероссийского всеподданнейшее в Кабинет доношение.

...Дождався драгунского Вологодского полку... на Нагайскую дорогу для искоренения воров башкирцов вышел того же марта 24-го, где счастием в.и.в. *воров башкирцов* разными партиями так, *как скот гнали*, не имея никаких от них отпору (гөнаһһыҙ бала-саға, ҡатын-ҡыҙ, ҡарт-ҡоро һәм ихтилалда ҡатнашмаған тыныс тормошло башҡа кешеләрҙе ҡырып йөрөйҙәр. — *Й.С.*), но одно было у них, что спасали себя, жон и детей своих, бегая в леса и в другие места. И так по рекам Белой до урочища Бубульжан (Бөгәлжән. — *Й.С.*), по Уршаку, по Негушу, Тору, Селеуку, где самое воровское гнездо было, около *двух сот деревень, в них близ 4000 дворов раззорено и сожжено*, в том числе главных воров Кильмяка, Бепеня, Рысая жилища и *первая по всей орде мечеть*, называемая Азиева, в которой в прежней и нынешние бунты воры о бунтах советовали и Куран целовали. При чем воров кажнено 158, побито обоего полу близ 700 человек, живых ясырю взято и ныне в Табынску 160 человек, да роздано в Уфе 85, в ссылку из Уфы в Остзею послано в службу годных 81, да женок с малолетними детьми 34. Ныне посылается в Остзею ж осмнадцать лошадей. От многих тысяч по нужде под безлошадных драгун и под артиллерию отобрано 237, а протчия оставлены в степях, а иныя служащим татарам в пищу роздованы, ибо по здешнему обычаю к весне лошади в степях едва бывают живы. Сие, и что от главной команды генерал-лейтенанта и казанского губернатора Румянцова по Деме и впадающим в нее рекам и речкам учиненное такое же ворам раззорение, также особое командою полковников Мартакова и Тевкелева на Осинской и Сибирской дорогах и от Сибири разными тамошними командами под управлением действительного статского советника Татищева, действительное ворам искоренение (во всех местах ужа около 4000 человек пропало) привело к тому, что не знали куды воры скрытца, ибо от самого начала подданства ни за которыя бунты (коих в разные времена многажды было, и окончание имели отпущением вин) *никогда таковой казни и раззорения не видали.* По сему началу несумнненная надежда есть, что сии плуты в совершенное подданство приведены будут...»

Ә Уса һәм Себер юлдарын айҡап йөрөүсе бәдбәхет Тәфтиләүҙең 500 башҡорт ауылының көлөн күккә осороуы, мең кешелек Сейәнтусы ауылы халҡының береһен-бер ҡалдырмай ҡылыстан тураҡлатып, 105 кешене, мәсеткә бикләп, тереләй яндырыуы һәр кемгә лә мәғлүмдер...

Килмәк абыҙ менән бергә Ағиҙелде ашып киткән Дим, Юшатыр, Нөгөш, Ҡана, Тора, Эйек буйҙары башҡорттарының да береһен-бер ҡалдырмай ҡырып бөтөрөү бурысы ҡуйыла. Килмәк абыҙ баш күтәргән халыҡтың иҫән ҡалғандарын бына шул тулайым геноцидтан ҡасырып, былтырҙан уҡ үҙенә яҡшы билдәле Ҡасанҡый-Сала төбәгенә килтергән булырға тейеш — алдағы дәһшәтле көрәш алдынан тын алыу, көстәрҙе туплау йәһәтенән. Ә бәлки, батша ҡырғынсыларының хәттин ашҡан яуызлығы тынмаһа, Муйтән бабаның юлы буйынса Урта Азияға сығып китергә лә булғандыр ниәттәре. Ләкин...

1736 йылдың 2 июнендә И.К. Кирилов әбей батшаға кинәнесле хәбәрләй:

«Ее императорскому величеству, самодержице всероссийской всеподданнейшее в Кабинет доношение.

После всеподданнейших нижайшего раба репортов и отъезду отсюду генерала-лейтенанта и казанского губернатора Румянцева получил известие от майора *Останкова,* что яицкими казаками вступя от Сакмарска Нагайской дороги в Башкиры *19 мая,* ушедших с Демы реки воров, на которых *пришли внезапно,* в горах *между Ика и Сакмары рек,* добита *мужеска полу с 600, женска немалое число,* причем получено лошадей, скота и пожитку довольно...»

Иғтибар итегеҙ: 600 ир-ат һәм унан да кәм булмаған һанда (тимәк, тағы 600) ҡатын-ҡыҙ — бөтәһе 1200 кеше, көтмәгәндә баҫып алып, бер юлы үлтерелгән, һәм был ҡанлы фажиғә ошо беҙҙең төбәктә — Эйек менән Һаҡмар аралығындағы минең бабалар ауылы Ҡасанҡый-Сала ерендә булған... Ә Ырымбур экспедицияһының 1736 йыл 30 июндә яҙылған икенсе бер документында: «Майор *Останков* с яицкими казаками после первой над ворами победы *от 22* по 30 числа мая ходил по реку Яику, где воровских разорил и выжег 113 деревень, и с башкирцами, коих было 1000 человек, бились и побито больше двух сот...» — тип әйтелә. Тимәк, ауылыбыҙ Ҡасанҡый-Салала ҡырғынсылар тарафынан 1200 ир-аттың, ҡатын-ҡыҙҙың, бала-сағаның үлтерелеүе, Ҡасанҡый-Сала ауылыбыҙҙың сираттағы яндырылып юҡ ителеүе 1736 йылдың иҫке стиль менән 22 майында булған, был иһә Себер юлы Балыҡсы ылыҫы Сейәнтусы ауылы фажиғәһенән кәм түгел. Айырма шунда ғына: Тәфтиләү менән бергә йөрөгән П.И. Рычковтың яҙма-шаһәҙәтнамәһе арҡаһында ғына Сейәнтусы тарихҡа керһә, Ҡасанҡый-Сала фажиғәһе тарихтан ситтә ҡалған. Әммә ихтилал етәксеһенең (Килмәк абыз үҙе булһа кәрәк) йөрәккәйе ҡанһырап ядкәрләгән, Әхмәтзәки Вәлиди Туған файҙаланған баяғы ҡулъяҙма ҡомартҡыһы тарихыбыҙҙың был аҡ тошона асыҡ яҙыулы сәхифә булып өҫтәлһен (башҡортсанан ауҙарылмыш урыҫсаһынан ҡабат башҡортсалап тәүге тапҡыр бирелә):

Башҡорттарҙың Күсем улы Аҡай етәкселегендәге ихтилалы

Ҡолһары-бәктең кәңәше буйынса, урыҫтар Өфө йылғаһы тамағында ҡала төҙөнөләр һәм уны Өфө тип атанылар. Йыйылған яһаҡты шул ҡалаға тапшыра инек. Дим йылғаһы тамағындағы Бөрсуан йылғаһы буйында башҡорт халҡы йыйылып кәңәшләшер, унда бөтә дүрт даруға башҡорттары ағылыр ине. Шул кәңәшмәлә эшлекле ҡарттар, һыналған ирҙәр үҙ-ара кәңәшләшеп, ҡайһылай итеп быйыл урыҫтар араһында темеҫкенеү ойошторорға һәм үткәрергә, тигән берҙәм фекергә килде.

Әлхасил, юлбашсылыҡ Улаҡай улы Күсемгә күсте. Уның заманында башҡорттар мохтажлыҡ һәм ҡыҫыуҙарҙан ҡурсаланғайны. Уның заманында урыҫтар ҙа әлегеләй ҡыйыулыҡ ҡылманылар: сиктән бер аҙым сығырға ла баҙнат итмәйҙәр ине. Ул (Күсем. — *Й.С.*) бөтә дүрт даруғала ла хөрмәт ҡаҙанды, уҙаман булып танылды. Ҡазанлылар, сыуаштар, сирмештәр, муҡшы һәм уржумлы халыҡтар, урыҫтарҙың иҙеменә сыҙай алмай, уға килеп һыйына ла ҡотолоу таба ине...

Күсембәттең, Иләүкәй улының, йорто Минзәлә ҡалаһынан 50 — 60 саҡрымда ине. Уның заманында бөтә дүрт даруға бер фекерҙә булды, башҡаса булманы. Бөтәһе үҙ старшинаһын тыңланы, сөнки уның заманында башҡорттар, һис шикһеҙ, иркен йәшәне. Урыҫтарҙы тыңламаны, хаҡлыҡ өҫтөнлөк итте, ә нахаҡлыҡ еңелде. Бәлә-казаларҙан бит Хоҙай үҙе һаҡланы. Күсембәттең, Иләүкәй улының, өс улы бар ине: береһе Атха — яуыз

иҙеүсе булды, икенсеһе Аҡай — урыҫтар ҡулына эләкте, өсөнсөһө — Сыуаш. Һуңғыһы айырым әһәмиәтле түгел. Ул, сыуаш ҡатындан тыуғанлыҡтан, Сыуаш тип йөрөтөлдө.

Әлхасил, Күсембәттең вафатынан һуң, ифрат ғәййәр ҡараҡтар Аҡайҙың аттарын урланылар. Ҡазанлы сыуаштар ине был ҡараҡтар. Аҡай уларҙы Ирнә йылғаһы буйындағы Ураҙ ауылында ҡыуып етте, ләкин ҡараҡтар, Аҡай ҡулына эләкмәҫ өсөн, мөс[53] һәм уҡтар менән ҡарыулаштылар. Аҡай әмере буйынса, улар бөтәһе дөмөктөрөлдө. Араларынан нисектер ҡотолоп ҡалған береһе Минзәләгә барып, унда Аҡай өҫтөнән шикәйәт ҡылды, унда ул Аҡай, күп һанлы әтрәте менән улар ауылында пәйҙә булып, ауылдың тыныс халҡын ҡырҙы, ә уны бер нимәһен дә ҡалдырмай таланы, тип яҙҙы. Был шикәйәт тураһында урыҫтарҙың кенәзенә еткерҙеләр. Шул сәбәпле кенәз, ғәскәр йыйып, Аҡай өҫтөнә йүнәлтте. Ғәскәр башына Румянцев ҡуйылды. Был эште аҙағына еткереү өсөн, Аҡайҙың ауылын ҡаманылар һәм уны ҡулға алдылар. Ошонан һуң Аҡайҙы бер кемгә лә күрһәтмәнеләр, берәүҙәр — уны аҫҡандар, тип, икенселәре — ул һуҡтырылыуҙан һуң үлгән, тип һөйләнеләр.

Аҡайҙы ҡулға алыу хәбәре тирә-яҡҡа тиҙ таралды. Ярлылар ҙа, хәллеләр ҙә бер-береһенә был хаҡта хәбәр ҡылды. Кәңәшмәгә йыйылдыҡ. Һәр ырыуҙан вәкилдәр килде. Фәҡәт дала ҡанлылары ла ҡобауҙар ғына килмәне. Күтәрелешкә риза түгел ине улар. Шул саҡ уларҙың алдында байраҡтар күтәреп: «Әҙерме һеҙ һуғышҡа?» — тип оранланыҡ. Һәм улар, теләһә-теләмәһә лә, төрлө сафтарыбыҙға ҡушылдылар. Бында Бәкәтиндән, Ҡыпасаҡтан, Тамъяндан, Бөрйәндән, Пчҡаҡтан (шулай яҙылған. — *Й.С.*), Урандан, Ҡаршынан, Күриҙән, Ҡобауҙан, Ҡарайҙан, Шурандан, Ҡырғыҙҙарҙан өс төркөм, Йыландан дүрт төркөм һәм башҡалар бар ине. Бөтәһе лә, һүҙ ҡуйышып, һуғышҡа әҙерләнделәр. Әлбиттә, улар араһында батырҙар, тәжрибәле аҡһаҡалдар, белемле ғалимдар бар ине. Улар бөтәһе лә килделәр был кәңәшмәгә; атаҡлы батырҙар: Пчҡаҡтан (шулай яҙылған. — *Й.С.*) — Ураҙман батыр, Тамъяндан — Сәлим батыр, Йыландан — Абдулла батыр, Байларҙан — Килмәк абыз. Улар бөтәһе бер фекергә килделәр. Кәңәшмәнән һуң, урыҫҡа хат менән илсе ебәрергә ҡарар ҡылынды, түбәндәгеләр яҙылғайны унда: «Бисмилла, башлайбыҙ. Беренсеһе — Күсем улы Аҡайҙы ҡайтар беҙгә; икенсеһе — Минзәләгә ҡайтып кит һәм шул сиктән сыҡма. Әгәр ҙә ошо талаптарҙы үтәмәһәң, ул саҡта, Хоҙай ярҙамына өмөтләнеп, һинең менән һуғышҡа керешәбеҙ». Урыҫтар ошолай тип яуапланылар: «Миңә Яйыҡ йылғаһынаса юл бирегеҙ. Унда мин бөйөк батшабыҙҙың әмере буйынса ҡәлғә ҡорорға урын эҙләйем. Шунан һуң Аҡайҙы ҡайтарырбыҙ, әммә хәҙергә уны урыҫтар араһында тотабыҙ». Ошонан һуң кесеһе лә, олоһо ла, ярлыһы ла, хәллеһе лә, ғалимы ла, ябайы ла — бөтәһе лә кәңәшләште яңынан.

Хәлле инсандар әйтте: әгәр урыҫ-кафыр өҫтөнлөк алып, йорттарыбыҙҙы яулап алһа, ҡарауыл ҡуйыр ул унда. Балаларыбыҙ бөтәһе кафырҙар ҡулына ҡалыр һәм уларға хеҙмәт итер...

Кәңәшләшеп, урыҫтар өҫтөнә һуғыш менән барырға ҡарар ҡылдыҡ. Был хаҡта бөтә ырыуҙарға: «Таң атыуға һуғышҡа әҙер булығыҙ!» — тип хәбәр иттек.

Һуғыш башланыҡ. Урыҫтар йырып сығырға ынтылдылар, ләкин башҡорттар бер кемде лә үткәрмәй нык торҙолар, үҙ-ара вәғәҙәләренә тоғро булдылар. Урыҫтарҙың күптәрен әсир иттеләр, күптәрен яраланылар. Йыл буйына уңышлы барҙы эштәр. Бер саҡ бөтәбеҙ берҙәм фронт менән һөжүмгә күстек: ҡулсаға (кольчуга. — *Й.С.*) кейгән, уҡ-

---

[53]Мөс (меч) — сәнсеү ҡоралы (төҙ ҡылыс).

һаҙаҡ һәм мөстәр менән ҡоралланған егеттәр урыҫтарға ташланды һәм, уларҙың фронтын емереп, тар-мар ҡылды уларҙы.

Бәғзе бер тәжрибәһеҙ, наҙанлыҡта тәрбиәләнгән яугирҙәр талауға керешеп китте. Шул форсаттан файҙаланып, урыҫтар мылтыҡ һәм туп уттары астылар һәм мосолмандар мәжбүр булды сигенергә. Артабан уңыш ҡаҙанманы мосолмандар. Әлбиттә, урыҫтар Минзәләгә ҡайтып китте һәм Аҡайҙы сығарманы.

Ағиҙел йылғаһы Нуҡрат (Ҡама. — *Й.С.*) йылғаһына ҡойған тәңгәлдә урыҫ ғәскәрҙәре пәйҙә булды. Мосолмандар, Ағиҙелде буйлар өсөн, улар менән һуғыш алып барҙылар. Танылған башҡорт батырҙарының күптәре һәләк булды: Тамъян батыры Сәлим Наҡаҫ урманында һәләк булды. Башҡорттар бер нисек тә кәртәләй алманы урыҫ юлын, һөжүмдәрен тотҡарлай алманылар. Шул сәбәпле башҡорт йорттарында тыныслыҡ булманы һәм күп бәлә-ҡазаға тарыны улар. Әгәр инде иҫке ҡанундар нигеҙендә иҫке ерҙәребеҙҙә урыҫтарҙан тыныслыҡ һәм бәхет күрмәгәс, был күп бәхетһеҙлектәргә килтерәсәк, тип һөйләнеләр; ҡарт-короларыбыҙҙы, бала-сағаларыбыҙҙы, туған-тыумасаларыбыҙҙы урыҫтар иҙеүенән ҡотҡарыу өсөн, беҙгә яңы ерҙәр эҙләп табырға кәрәк, тип тә һөйләнеләр. Ошондай уйҙар менән күпмелер ваҡытҡаса иҫке урындарҙа ҡалдылар. Ҡышҡыһын бик ныҡ йонсонолар. Урыҫтар даими һөжүм итте уларға. Урыҫ ҡулына ҡалмаҫ өсөн, алты ай буйы һуғыш алып барҙы башҡорттар. Ҡышҡыһын бик күп урыҫтарҙы ҡырҙылар, шуға күрә был ҡышта урыҫ ҡулына ҡалманылар. Яҙғыһын көндәр йылынғас, мосолмандар хат яҙышып, берҙәм күтәрелеүҙең көнөн, урынын билдәләнеләр. Бөтәһе лә Аҡыналы (Аҡмалы. — *Й.С.*) йылғаһына йыйылдылар (беҙҙең төбәккә. — *Й.С.*); һуғышырға теләмәүселәр урманға ҡасты, ҡайһыларын көслөкләп килтерҙеләр. Улар араһында *ҡазан татарҙары һәм уржум сирмештәре* бар ине, үҙҙәренә файҙалы саҡта башҡорттар араһына йәшеренә ине улар. Араларында шымсылыҡ ҡылыусы һәм ғәскәребеҙҙең йыйылыу урынын урыҫтарға еткереүсе һатлыҡ йәндәр табылды, шуға күрә урыҫтар таң тишегенән беҙҙең өҫкә ябырылды. Аҡыналы (Аҡмалы. — *Й.С.*) тамағында бер бәләкәй йылға бар, Һаҙлыйылға тип атала, һәм тағы бер бәләкәй йылғаны «Кешеҡырылған» (хәҙерге Әселе үҙәк. — *Й.С.*) тип ләҡәпләйҙәр, сөнки һуғыш ваҡытында был йылғала бик күп мосолман ҡырылды. Мосолмандар, урыҫтарҙың бында пәйҙә булмаҫына инанып (бер кем дә быны хатта башына ла килтерә алманы), тирә-яҡҡа ҡарауылдар йүнәлтмәнеләр. Бында теләгән берәү килде лә үҙе теләгәнсә йәшәне, ә теләгән берәү китте. Ирекһеҙләп йыйналған бәғзе берәүҙәр хыянатсылыҡ ҡылды һәм урыҫтарға хәбәр бирҙе, улар иһә яйлап ҡына һуғышҡа әҙерләнде. Мосолмандар иһә бер ни ҙә белмәне. Һатлыҡ йәндәрҙең береһе Ишривандан ине, *Ҡорбанай* тип исемләнеләр уны, кемдең улы икәнлеген мин белмәйем. Ул мосолмандар йәшәгән урынды күрһәткән һәм урыҫтарҙы һуғыш хәйләһенә өйрәткән. Урыҫтар төндә үҙҙәренең туптарын килтерҙе лә иртәнсәк шуларҙан ата башланы. Бахыр башҡорттар, был атыуҙың ҡайҙан ҡупҡанлығын аңлай алмай, төрлө яҡҡа һибелеп ҡаса башланы; күп ҡатындар балаларын ҡосоп йылғаға ташланды. Яралылар ҙа йылғала һәләк булды. Был һуйышта Һаҙлыйылғала мәйеттәрҙән күпер хасил булды. Ҡарттарҙы эт урынына таштар һәм күҫәктәр менән һуғып үлтерҙеләр, күкрәк сабыйҙарын ҡылыстар менән тураҡланылар, гөманлы бисара ҡатындарҙың ҡорһаҡтарын ярҙылар, йәш-елкенсәкте мауығып үлтерҙеләр. Шәһиттәрҙең мәйеттәрен ҡарғалар суҡыны һәм төлкөләр кимерҙе. Ошо көндә лә унда ул кешеләрҙең һөйәктәрен табырға мөмкин...

Көнө буйы барҙы шулай. Шунан һуң урыҫтар ҡалғандарға тын алырға форсат бирҙе күпмелер. Урыҫ башлығы указ уҡып ишеттерҙе, ошолай тиелгәйне унда: «Батша

һеҙҙең гөнаһтарҙы кисерҙе, үҙегеҙҙең әүәлге йорттарығыҙға ҡайтығыҙ, бер кем дә теймәҫ һеҙгә». Урыҫтарҙың һүҙенә ышанып ҡайтып киткән күптәребеҙ аслыҡтан һәләк булды. Был көндәрҙә тамъяндар өйҙәренә ҡайтырға ҡурҡты, әммә тыуған ерҙәренән бөтөнләйгә өҙөлөргә теләмәгәнлектән, йәйләүҙә үткәрҙеләр йәйҙе. Ҡышҡыһын Ағиҙел буйҙарында ла тыныслыҡ тапманы тамъяндар, һуғыштан күп ҡайғыларға тарынылар. Уларға һис кем ярҙам ҡулы һуҙманы, һис кем яҡты йөҙ менән ҡаршыламаны. Кемдәрҙе дуҫ күрһәләр, күберәк шуларҙан дошманлыҡ осраттылар...

Минзәләгә яҡыныраҡ йәшәгән тамъяндар башлағайны бит һуғышты (күтәрелештең тәүге осоро тураһында бара һүҙ. — *Й.С.*). Өс йөҙ алтмыш дүрт атлының башында торған атаҡлы батырҙар, уҡ-һаҙаҡтар, мөстәр менән уңдан һәм һулдан да, алдан һәм арттан да ҡурсаланып, бер кемдән дә ҡурҡмайынса, елдәй елдерҙеләр. Күп осраҡтарҙа дүрт даруғаның да ғәскәр башлыҡтары шуларҙан тәғәйенләнде. Шуға ла әйтерҙәр ине: «Һуғышырға теләһәң, тамъяндарҙан кәңәш һора, бәхәсләшкең килһә, сарайлыларға өндәш».

Ҡыпсаҡтар, үҙҙәренең урыҫтар яҡлы булыуынан маһайып, Хоҙай уларға тыныслыҡ һәм бәхет килтерҙе, тип һананы һәм тамъяндарға ҡаршы көрәште. Тамъяндарҙан үс алырға теләп, Һаҡмарға барып еткән (йәғни Ҡасанҡый-Салаға йүнәлгән. — *Й.С.*) урыҫтар менән берләшеп, тамъяндарға ябырылды. Һуңғылары үҙҙәренә ҡотолор урын таба алманы...

Улар (тамъяндар. — *Й.С.*), күсенергә теләп, ҡыпсаҡтарҙың тарафына (баяғы беҙҙең Һаҙлыйылға буйына. — *Й.С.*) килгәйне, ләкин көтмәгәндә ҡыпсаҡтарҙан булған һатлыҡ йәндәр (тимәк, майор Останковтың ҡырғын әтрәтенә юл күрһәткән Ҡорманай — Ҡыпсаҡ ырыуынан. — *Й.С.*) Һаҡмарға килеүсе урыҫтарға хәбәр иткән улар хаҡында. Улар уларҙың мал-тыуарын ҡыуалап алып китте, ҡатын-ҡыҙҙарын ҡол итте, эшкә яраҡһыҙ ҡарттарҙың бөтәһен ҡырҙы. Тамъян аҡһаҡалдарынан Аҡманай, Йәнғол ҡаҫҡын, Кинжәғол, Солтанғол — бөтәһе шунда һәләк булды. Ҡатындар, урыҫтарҙан ҡоттары осоп, үҙ балаларын һыуға аттылар; бәғзеләренең сабый балалары тирәк ботаҡтарына эленгән сәңгелдәктәрҙә ҡалды — бөтәһе лә шунда һәләк булды, сөнки әсәләре уларҙы үҙҙәре менән алырға өлгөрмәнеләр. Күксә-тархандың ҡатынын — Сураҡайҙың әсәһен — әлһерәп бөткән ҡарсыҡты, урталай яра сабып, юлдың ике яғына быраҡтырҙылар. Тамъяндан Ҡорманғолдо, Аҡмайҙың улын, был фетнәле көндә урыҫтар ҡамап алған; үҙенең һөйләүенсә, ул, ике янды бер юлы ҡармап алып, керешен бөтөрә тартып, шуларҙан уң яҡлап — урыҫтарға, һул яҡлап мишәрҙәргә атып, үҙенә юл ярған. Бер мишәр уның артынан: «Ах, ни эшләнең һин, яуыз башҡорт?! Һеҙҙе аҫып бөтөрөргә тирәктәр ҙә етмәй бит!» — тип ҡысҡырып ҡалған. Тап шулай уҡ был көндә Күксә-тархандың туғаны Китһентүрә Тамъяндан күп иптәштәре менән бергә дошмандарға ҡаршы һуғышта ҡатнашты. Һәм улар дошман ҡулына эләкмәне — икенсе яҡҡа китте. Урыҫтар уларҙы эҙәрлекләне. Улар үҙҙәренең ауылдарына әйләнеп ҡайтҡас, улар урыҫтарҙан хат алды: Аҡыналы (Аҡмалы. — *Й.С.*) йылғаһы буйындағы һуғышта булыусылар кисекмәҫтән Минзәләгә килеп күренһен, үҙ ихтыярҙары менән килмәһәләр, этап менән килтереләсәктәр, тиелгәйне унда.

Бахыр мосолмандар! Урыҫтарҙың был хәбәре уларҙы үҙ баштарынан ваз кисергә мәжбүр ҡылды. Һатлыҡ йәндәр көлдөләр һәм уларҙың ҡайғыһынан ҡыуандылар. Был эштең башында торған урыҫ яҡлылар: Киршмәнән — Мөхәммәт Шәрифи, Түбәләстән — Мәсғүт, Аҡсар ауылына Ҡазандан килде улар. Шулай уҡ Нарыз Уразмәтов тигән берәү һәм уның кеүектәр хеҙмәт итте урыҫтарға. Хатта шуға тиклем барып еттеләр: үҙ

әтрәттәрен төҙөп, бахыр мосолмандарҙы ҙур тырышлыҡ менән ауланылар һәм уларҙы урыҫ ҡулдарына һаттылар. Шулай уҡ Саратов яғынан пәйҙә булмыш казактар һәм мишәрҙәр, урыҫтарға тотоп биреү өсөн, дала мосолмандарын ауланылар (һуғыш суҡмарҙары тип йөрөттөләр уларҙы; *улар көслөк менән башҡорт ерҙәрендә ҡалды һәм бөгөн дә күп әле улар*); башҡорт ауылдарында берәүҙе лә тере ҡалдырманылар, бигерәк тә Ҡазан даруғаһында халыҡ аҙ ҡалды. Ҡалһа ла, ауыл һайын ике-өс кешенән артыҡ түгел. Ул заманда ун кешегә бер тун да, ун йортҡа бер балта ла булманы. Сәсеү өсөн орлоҡто ла Ҡазан еренән килтерҙек. Ауыр булды йәшәүе, тамаҡ туйҙырырлыҡ һис ни булманы, һәм шундай ҡара аслыҡ — әҙәм балаһы әҙәм итен ашай, тип һөйләнеләр. Ошо ауыр көндәрҙә мохтажлыҡтан дворяндарға ҡоллоҡҡа яҙылдылар. Дворяндарҙың ҡулында ҡолдар күп булды...

Сылбырлап бығауланған мосолмандар Минзәләгә күп килтерелде, бөтәһен дә төрмәләргә быраҡтырҙылар, ә яугир егеттәребеҙҙе ер аҫты зиндандарына яптылар. Ҡала тышына алты мөйөшлө бина ҡорҙолар, һәр мөйөшөнә тимер ҡаҙыҡ һерәйттеләр. Урталыҡта торған бер ҡаҙыҡ әйләнәһенә бейек дар ағастары ҡуйҙылар. Шунан һуң музыка шаулатып, батыр мосолмандарҙы килтерҙеләр, артынса указдар уҡып, урыҫтар үҙ ҡатиллыҡ эштәрен башҡара башланылар.Иң әлек беренсе һуғыш башлағанды ултырттылар урталыҡтағы осло ҡаҙыҡҡа, уның ярҙамсыларын әйләнәһендәге осло ҡаҙыҡтарға ултырттылар. Ҡаҙыҡ уларҙың яурынынан килеп сыҡты; ә үҙҙәрен ҡаһармандарса тотҡандарҙы киҫәктәргә тураҡланылар, аҙаҡ баштарын сабып өҙҙөләр. Ҡайһыларын ҡабырғаларынан тимер ырғаҡтарға аҫып, баштарын өҙә саптылар, бәғзеләрен таштар бәреп үлтерҙеләр. Бер кемде лә аяманылар. Хоҙайым, урыҫ ҡулдарында ҡалғандарҙы ярлыҡа!

Мосолмандар Хоҙайға ялбарып ҡына йыуандылар. Яҙалауҙан азат булған ҡазан кешеләре, уржум сирмештәре үҙҙәренә башҡорттарҙың ҡатындарын һәм ҡыҙҙарын күпләп һатып алып, өйҙәренә алып ҡайтып киттеләр. Быларҙан тыш, Минзәлә ҡалаһы тышында күптәрҙе фронтҡа теҙеп ҡуйып, береһен-бер ҡалдырмай, мылтыҡтарҙан һәм туптарҙан атҡандар, тип һөйләнеләр.

Шул тиклем дә күп халыҡ ҡырылды ки, мәйеттәрен хайуан урынына сүплеккә ауҙарҙылар. Минзәлә йылғаһында боҙға мәке уйып, һәр ҡырҡ кешенән береһен генә ҡалдырып, утыҙ туғыҙын мәкегә батырҙылар. Мәйеттәр менән быуҙылар йылғаны. Шундайын да ҡот осорғос эштәр ҡылынды ки, әҙәм теле менән генә тасуирлап булмай уларҙы. Булғандарҙың йөҙҙән бер өлөшө генә мәғлүм ҡылынды бында... Ҡалған мосолмандарҙы, муйындарынан бер-береһенә бығаулап тағып, Ҡазанға ҡыуаланылар. Ҡазанға барып етә алмағандары юлда аслыҡтан һәм һыуһауҙан һәләк булды. Йығылғандарҙы ҡарауыл командаһы осло мөстәре менән сәнсеп үлтерҙе. Саҡрым һайын ун һәм унан да артыҡ кеше йығылды. Йылғаларға яҡын ебәрмәй һыуһатып, Ҡазанға килтереп үлтерҙеләр. Бер урыҫ ауылында ҡарауыл үҙе айырым йортҡа урынлашып, икенсеһенә башҡорттарҙы тултырып, тәҙрә ҡапҡастарын һәм ишектәрен ныҡытып бикләп, өйгә ут төрттөләр һәм өйҙәгеләрҙең бөтәһе лә утта янып һәләк булды.

Ошонан һуң әмер бирҙе урыҫтар: тере ҡалған башҡорттар ҡаҙнаға берәр ат тапшырырға тейеш. Даланың һәр башҡорто, бер ат тапшырып, яҙыулы ҡағыҙ алды, унда ни өсөндөр уны «хыянатсы-боласы» тип яҙҙылар. Урыҫтар яҡлы булған башҡорттарҙың һәр береһен ул ҡағыҙҙа «инабатлы башҡорт» тип нарыҡланылар. Ҡаҙнаға ат тапшырғанлығы тураһында ҡағыҙы булмаған башҡорттарҙы ҡулға алдылар ҙа һис бер аяуһыҙ рәүештә урыҫтарға тотоп килтерҙеләр. Һәм улар шунда һәләк булды. Шундайын

да заманалар килде ки, әгәр мосолман ҡайҙа ла булһа урыҫ урамынан үтеп барһа, кесеһе лә, олоһо ла туҡманы уны, башына таш яуҙырҙы. Былырҙан тыш, ихтилал ваҡытында Тамъяндан һәм Ҡыпсаҡтан күптәр бәрелештәрҙән һуң ҡырғыҙ (ҡаҙаҡ. — *Й.С.*) еренә ҡасты. Һуңғылары уларҙы, ике йөҙләнеп, ҡайғыларын уртаҡлашҡан булып: «Бахырҙар, урыҫ ҡулында интегәһегеҙ, һыуһынығыҙҙы ҡандырырбыҙ, тамағығыҙҙы туйҙырырбыҙ», — тигән булып ҡаршыланылар. Бахыр башҡорттар уларҙың ялған һүҙҙәренә ышандылар, ә ҡырғыҙҙар (ҡаҙаҡтар. — *Й.С.*), йәнәһе башҡорттар менән туғанлашҡан булып, уларҙың ҡоралдарын тартып алдылар, артабан үҙҙәренә эшләргә мәжбүр ҡылдылар, ә ҡатындарын тартып алдылар һәм мөлкәттәрен таланылар. Йәштәребеҙҙе эттәренән талаттылар, таштар бәреп һәм күҫәктәр менән һуғып үлтерҙеләр. Китсентүрә менән Сура ошонда һәләк булды. Уларҙың ҡатындары фарсыларға (тажиктарға. — *Й.С.*), ҡараҡалпаҡтарға, төркмәндәргә һәм башҡа ҡырғыҙҙарға ҡалды. Уларҙы шуларға һаттылар, балаларын әсәләре, ҡайғыларына сыҙай алмай, үлтерҙеләр. Унда уларҙы ҡарғалар, һайыҫҡандар суҡыны, төлкөләр ашаны. Башҡорттар, шул тиклем дә ҡайғыға дусар булғас, урыҫтар яғына киттеләр, ҡайһылары далаларҙа күскенселектә ҡалдылар, ҡайһылары, ҡырғыҙҙар (ҡаҙаҡтар. — *Й.С.*) менән көрәште ташлап, улар араһында тыныс тормош ҡорҙолар. Хәҙер ҙә уларҙың бер килкеһе осрай ҡырғыҙ (ҡаҙаҡ. — *Й.С.*) араһында. Күренеп тора: ҡырғыҙ (ҡаҙаҡ. — *Й.С.*) батырҙары — тамъян башҡорттарының нәҫеле улар».

Тимәк, был тәүәрихте, йөрәге ҡанһырап-һыҙлап, ихтилалда үҙе әүҙем ҡатнашҡан тамъян башҡорто яҙған, әммә исеме билдәһеҙ.

Секунд-майор Б.Л. Останков командалығындағы Яйыҡ казактары менән мишәрҙәр әтрәте бергәләшеп 1200 башҡортто бер юлы ҡырған урын (хәҙерге Һунарсы ауылы ултырған ер) төбәгебеҙҙең һыҙмаһында (һүр.6.1.) – тәре тамғаһы менән, ә Һаҡмарҙың һул ярынан ҡырғынсылар килгән юл пунктирлап күрһәтелде. Ҡорбанай тигән хыянатсы ҡырғынсыларҙы аҫтыртын килтергән йәшерен юлды төртөклө пунктирҙар менән билдәләнек; шул кисеү һәм уның аръяғындағы төбәк хәҙер ҙә *Ҡормантай* тип атала («Ҡорбанай»ҙан үҙгәргән булһа кәрәк). Хәҙерге Һунарсы ауылынан Сәнкем-Биктимергә табан Әселе үҙәкте сыҡҡас та, юлдың һул яғында һөргән ер эсендә (хәҙер инде һөрөлмәй — ауыл өйҙәре аҫтында ҡалып бара) эре-эре таштар менән уратылған, арҡырыһы — биш, буйы ун метр самаһындағы оҙонса-түңәрәк (овальный) уба, ә уның ян-яҡтарында шулай уҡ таш бураулы бәләкәйерәк ике уба бар ине — «Сәғир-Сағаид» зираты. Ҡайһы берәүҙәр уны, «Сағаид»ә һүҙен боҙоп әйтеп, «Сәғиҙә зираты» тип йөрөттө, шуға күрә унда, имеш, «атаһы менән ҡунаҡтан ҡайтып барышлайы юлда үлеп ҡалмыш Сәғиҙә тигән ҡыҙ күмелгән», тип һөйләне (бер юлы өс зиратҡамы?!.). Әммә зираттың бабаларыбыҙ ҡушып ҡалдырған ғәрәпсә исемендәге «Сәғир» — «ғазап уты», ә «Сағаид» — «бейек урын, уба» тигән һүҙ икән. Фани донъяла уҡ ғазап утында янып-язаланып үлеүселәрҙең — изге шәһиттәребеҙҙең уба-зираты, тимәк...

Һүр.6.1. Карталағы түңәрәк төртөклө пунктир -- Аҡһаҡтимер яуының юлы. Тәреле пунктир -- Кириловтың Ырымбур экспедицияһы юлы. Уҡлы һыҙыҡ -- батша ҡырғынсыларының Ҡасанҡый-Салаға (башҡорт яуының төбәгенә) уҙған юлы. 1. Сәнкем-Биктимер. 2. Ҡасанҡый-Сала -- батша ҡырғынсылары 1200 башҡортто ҡырған урын. 3. Ҡаҫмарт йылғаһының иҫке үҙәне. 4. Тәре-билдә -- Тирәкле йылғаһы янында Кирилов драгундары Килмәк-Абыз яуы менән һуғышҡан урын. 5. Тәреле түңәрәк-билдә -- Аҡһаҡтимер һәм Туҡтамыш-хан ғәскәрҙәре бәрелешкән урын.

Миң дә ике йөҙ шәһит күмелгән был убаның эре-эре бура таштарын үткән быуаттың алтмышынсы йылдар уртаһында Хәмитов Миңнебай тигән кеше ташып алып, саҡ ҡына үрҙәрәк Әселе үҙәктең һул ярында өйөнөң нигеҙенә һалған (башҡорт маңҡортҡа әүерелә -- ата-бабалар тарихын тойомламай). Шул йылдарҙа Һунарсы ауылы Әселе үҙәктең уң ярынаса ҙурайып китеп, шәһиттәрҙең изге зираттарына еткерә яҙып кемдәрҙеңдер йорттары төҙөлгән һәм улар, изге зираттар, бура таштарының урланып бөтөүе сәбәпле, ер менән тигеҙләнгән -- зират булыуынан туҡтаған. Ошо көндә ул урынды ауылдың бер нисә ҡарты ғына (мәҫәлән, минең замандаштарым Сөйәрембәтев Фәсхитдин, Ҡыуатов Атауылла, Мостряков Алексей-Лүңке — ғүмерҙәре буйына шул зиратты уратып үтеп ер һөргән тракторсылар) күрһәтеп бирә алыр ине (ул изге урынды 2003 йылдың июлендә ғаиләм менән ауылға ҡайтҡаныбыҙҙа баяғы уҙамандар менән берлектә урта тәңгәленә бүрәнә киҫкәһе һалып билдәләп киткәйнек. Аҙаҡ 2008 йылда Фәсхитдин һәм Атауылла вафат булған тип ишеттем). Халҡыбыҙҙың ҡаны аҡҡан изге зират мотлаҡ тергеҙелергә һәм унда мәңгелек матәм һәйкәле ҡуйылырға тейешле, тип һанайым.

Һаҙлыйылға буйындағы ҡанлы еңеүенән рухланған секунд-майор Б.Л. Останков үҙенең ҡырғын әтрәте менән май айының аҙаҡҡы аҙнаһында Һаҡмар менән Яйыҡ аралығынан үрләп китә лә 113 башҡорт ауылын яндырып, 200 башҡорттоң башына етеп ҡайта. Үҫәргән ерендәге ҡырғын киләһе йылында ла шул рәүешле ҡотороа.

Баяғы секунд-майор Останковтың хисапнамәләре буйынса, Һаҡмар ҡәлғәһенән ул монаятлап юлландырған казактар һәм батша яҡлы (“доброжелательные башкирцы”) *башҡорт ҡыпсаҡтарынан хасил 700 ҡырғынсы* 1737 йылдың август аҙаҡтарында Ағиҙел аръяғынаса дөрөп, Нөгөш, Мәләүез йылғалары буйындағы ихтилалсы башҡорттарҙың ҡанын ҡойоп ҡайта.

2 сентябрҙә шул уҡ Останков ойоштороған батша яҡлы (“доброжелательные башкирцы”) *700 башҡорт ҡыпсағы* (шуға тиклем Ырымбур арты далаларында йәшәгәндәр; үҙҙәре ҡырған ихтилалсы-үҫәргән башҡорттарының ерҙәрен батшанан бүләк рәүешендә алып, хәҙерге Йәнсура, Күгәрсен, Бөрйән районадырында ереккән ҡыпсаҡтар), 300 казак, бергәләшеп, баяғы Эйек тамағындағы Һаҡмар кисеүенән уң яҡ ярға сығып, Ҡаҫмарт һәм Эйек йылғалары буйында йәйләгән Алғушай батыр Наҙаровтың иләүенә ябырыла; ошо хаҡтағы урыҫса документтан өҙөктө тәржемәһеҙ бирәбеҙ: “Майор Останков 2 сентября из Сакмары писал: ...собравший он, майор, доброжелательных башкирцев з 700 же человек да яицких казаков с 300 человек, отправил на вора Алгишея по другую сторону реки Сакмары, о котором де есть известие, что кочует на реке Космарке и Оняку (дөрөҫө Эйек. – Й.С. [Материалы по истории Башкортостана, том VI, автор-составитель Н.Ф. Демидова. Уфа – 2002, №312, 475-енсе бит])”. Һөҙөмтәлә минең тыуып үҫкән төбәктең үҫәргәндәре йә ҡырылып, йә төрлө яҡҡа һибелеп бөтөп, бик һирәкләнеп ҡала, урындарына ерҙәребеҙгә баяғы батша яҡлы ҡыпсаҡтар килеп төйәкләнә (хәҙер һәр ауылда, тип әйтерлек, ҡатнаш йәшәйбеҙ). Соран йылғаһы буйы ҡыпсаҡтарының тап шул осорҙарҙа Башҡортостандың хәҙерге Күгәрсен, Көйөргәҙе һ.б. районадарына, мәҫәлән, Көйөргәҙе йылғаһы буйына күсенеп килеп урынлашыуы тураһында уларҙың шәжәрәһендә мәғлүмәт бар (“Ватандаш” журналы №2/2001 йыл, 164-енсе бит). Батша ҡырғынсыларының ҡанлы язаларынан ҡасып киткән Үҫәргән ырыуы Бишәй араһы башҡорттарының бер өлөшө көнсығышҡа -- Урал тауҙарына барып һыйына, хәҙерге Салауат районында шулар нигеҙләгән Бишәйләр ауылы (ул исемде, боҙоп, Бишәүләр тип тә яҙып йөрөтәләр) әле лә бар. Был ауыл кешеләренең тап Үҫәргән бишәйҙәре икәнлеген абруйлы ғалимдар раҫлай: “V ревизией 1795 г. была зафиксирована деревня под названием **Бешевлярово.** Член-корреспондент РАН, профессор Р. Г. Кузеев на основании информации самих жителей этого селения считает, что часть рода бишей (Усерганского племени), продвинувшись на северо-восток Башкортостана с бассейна р. Сакмары, обосновалась на берегу р. Юрюзань и основала д. Бешевлярово. Два родовых подразделения в деревне называются бишей и бурес (буре - волк)”. Ҡарағыҙ: А.З. Асфандияров. История сел и деревень Башкортостана. Уфа “Китап” -- 2001, 112-нсе бит. Ошоноң һымаҡ уҡ, тарихи Башҡортостандың көнбайышындағы Минзәлә өйәҙендә йәшәгән, Аҡай Күсемов күтәрелешендә әүҙем ҡатнашҡан Тамъян ырыуы ла тулыһынса көнсығышҡа -- Урал артына китеп төйәкләнергә мәжбүр була.

Ырымбур ҡалаһын төҙөүгә ҡаршы күтәрелеш 1735 йылда беҙҙең Үҫәргән ерендә башланыуын, унып башында тәүгеләрҙән булып Үҫәргән ылыҫы старшинаһы Алғушай батыр Наҙаров, Кәлсер ылыҫынан — Килдеш, Дыуандан — Солтан батыр Арыҫланбәков

тороуын әйтеп үтәйек. Эйек тамағындағы Һаҡмар кисеүенә китеп барған Кирилов экспедицияһының юлына арҡылы төшөп, Вологда роталарын тар-мар ҡылыусы 2 — 3 меңлек ғәскәрҙе лә Килмәк абыз, Бәпәнәйҙәр менән бергә Үҫәргәндән — Алғушай батыр, Тамъяндан — Сәйет бай, Ҡатайҙан — Көләүкәй, Йәнбәк, Күсәкәйҙәр юл башлап килтергән. Ихтилалсылар яуында батша ғәскәрҙәренә ҡаршы беҙҙең төбәктән йәнә Алғушайҙың улы Солтанаҡбирҙе, бер туғаны Морат Наҙаров, шулай уҡ Ишмәк батыр Теләшев, Зыянғол, Ишәй (бөтәһе лә Үҫәргән ылыҫынан), Сәнкем ылыҫынан Аҡбаш Солтан батыр (1738 йылдың 20 апрелендә яҙылған мәғлүмәт буйынса, шул йылдарҙа Ҡыҙыл йылғаһы буйында вафат була), Үтәғол бай тархан Шөкөров, Теләүембәт, Бужан бай, Усман батырҙар йәндәрен аямай һуғышҡан. 1737 йыл аҙаҡтарында бер нисә мең ихтилалсы-башҡорт ғаиләһен, ҡаҙаҡ ханы Әбелхәйерҙең вәғәҙәләренә ышанып, ҡаҙаҡ урҙаһына алып сығып китеүсе һәм, баяғы тәүәрихтә яҙылған ҡаҙаҡ хыянатына дусар булып, ҙур яфа һәм юғалтыуҙарҙан һуң, ҡалғандарын Башҡортостанға ҡабат алып ҡайтыусы ла — Алғушай батыр Наҙаров.

Һунарсы ауылы осондағы Һаҙлыйылға яры башында Ҡасанҡый-Сала фажиғәһенең тере шаһиты — түбәһе күккә терәлгән, тамыры ергә көрмәлгән, дүрт кешенең ҡоласы етмәҫлек йыуан олонло баһадир Тирәк бар ине. Мин Өфөгә күсеп киткәс, бер дауылда төнө буйына шаулап, гөрһөлдәп ауҙы, тинеләр...

САЛ ӨФӨ
(Тарих һәм мифология буйынса)

Изге Өфө -- иң тәүге Ер Кендеге

Тәүдингә табынған бик боронғо бабаларыбыҙҙың фәлсәфәүи тәғлимәте буйынса, **Донъя-Ғаләм-Тереклек --** өс ҡатламдан ғибәрәт икән:

1. **Урта Донъя (Ер)** – бәндәләр (кешеләр) иле – **Евразия ҡитғаһы (иң тәүге үҙәге изге Өфө).**
2. **Өҫкө Донъя (Күк) –** илаһиҙар (хоҙайҙар) иле – **Африка ҡитғаһы.**
3. **Аҫҡы Донъя (Ер-һыу аҫты) –** үлектәр иле – **Америка ҡитғаһы.**

Ер Кендеге йәғни Ерҙең *Көн-үтәге* (Көндөң йәғни Ҡояштың Ер үтәләй Өҫкө һәм Аҫҡы Донъяларға керә торған *үҙәге* – иң тәүге замандарҙа Көн-Өфө (хәҙерге Өфө) ҡалаһы урынлашҡан тәңгәл һаналған. Баяғы *Көн-үтәге* тигән һүҙҙән *Көн Үҙәге* һәм **Кендеге** тигән төшөнсәләр хасилдыр.

Шуны ла әйтеп-иҫкәртеп үтеү зарур: донъяның Ер Кендеге өсәү икән:

а) ошо изге Көн-Өфөлә -- Көн (Ҡояш) менән Ай (Луна) юлы үткән;

б) изге Туҡан тауында - Әсә-Бүре менән Инә-Болан (Һыйыр) юлдары сатрашланған;

в) изге Арҡайым ҡалаһында – бәндәләрҙең (кешеләрҙең) Көн-Өфө (Ҡәнифә) һәм Ҡуңыр-Буға юлдары сатрашланған.

Тимәк, баш ҡалабыҙ **Өфө** - ҡитғабыҙҙың донъя яратылғандан уҡ хоҙай-ҙарыбыҙ төйәкләнгән **изге үҙәге.**

Билдәле булыуынса, бик боронғо замандарҙы тикшереп өйрәнеүсе ғалимдар тарихи Башҡортостан тупрағын **кешелек донъяһының бишеге** тип һанайҙар һәм был иһә комплекслы тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә табылған мәғлүмәттәр менән раҫлана. Шуларҙың тик береһен генә -- б.э. тиклем XVII быуат емеше булған һәм башҡорт ерендә тыуып үҫкән пәйғәмбәр Сураш-Тора (Зороастр) диненең салдарҙан-сал изге китабы Авестаны алып ҡарайыҡ. Имеш яҡшылыҡ хоҙайы Аһура-Маҙда (беҙҙеңсә Урал батыр) хасил итмеш тәүге 16 илдең иң беренсеһе "гүзәл Даитья (Яйыҡ. – *Й.С.*) йылғаһы буйындағы **Айриана Ваего** иле" икән. Шул уҡ ваҡытта яманлыҡ хоҙайы "Аңра-Майнью (беҙҙеңсә Шүлгән батыр. – *Й.С.*) иһә унда ил яфаһын – ҡыҙғылт йылан (Ҡыҙыл йылғаһы? – *Й.С.*) һәм зыянлы ҡыш һыуығын булдыра". Был төбәк – үтә күренеп тора – Яйыҡ йылғаһы башындағы хәҙерге Усалы районы. Сөнки тап шунда бынан биш мең йылдар элек төҙөлгән таш обсерватория һәм ҡала барлығы асыҡланды. ("Уфимские ведомости" гәзите №32, 10 август һәм №33, 17 август 2004 й.)

Шул уҡ Авестала яҡшылыҡ хоҙайы "Аһура-Маҙда барлыҡҡа килтергән ун алтынсы ил – **Упа Аодаешу Рангая.** Был ил өсөн Аңра-Майнью үҙ сиратында хасил ҡылған ил яфаһын – үтә һыуыҡ ҡышты".

Был текстағы "Упа" -- Өфө ҡалаһы, "Аодаешу" – Ауҙа йәшәү йәғни һыу ҡамауында йәшәү (Өфө ҡалаһының һыуҙан уратылып ултырған урыны), ә "Рангая" – Ағиҙел – Иҙел йылғаһының Авесталағы исеме ул (шуға һәйкәл булып еребеҙҙә Ағиҙелгә ҡойоусы хәҙерге **Ра** йылғаһының атамаһы ҡалған).

Донъя-Ғәләм-Тереклек яратылғандан уҡ ошо изге Көн-Өфөлә -- Ер Кендегендә Шүлгән башбабабыҙҙы имеҙеп-тәрбиәләп үҫтереүсе изге Әсә-Бүре һәм Шүлгәндең игеҙәк туғаны Урал башбабабыҙҙы имеҙеп-тәрбиәләп үҫтереүсе изге Ана-Болан (Һыйыр) төйәкләнеп (тояҡланып) йәшәгән имеш (Шүлгән менән Уралды имеҙеп үҫтереп, донъяға биргәндән һуң). Ошо ***Әсә*** (Ер-Һыу хоҙайбикәһе Бүре) менән ***Ана*** (Күк-Ут хоҙайбикәһе Болан-Һыйыр) икеһе бергә Әсә-Ана аталған (Төрки Ҡағанат дәүләтен нигеҙләүсе Әсә-Ана [Әсинә//Ашина] тоҡомло бабаларыбыҙҙың (үҫәргән-башҡорттарҙың) изге хоҙайбикәләре.

Улар имеҙеп үҫтергән башбабаларыбыҙҙың береһе (Шүлгән) тәүҙә Аба (Апа) исемләнеп, икенсеһе (Урал) иһә Алан (Улан) аталған. Ошоларҙы бергә ҡушып әйтеүҙән мифологик термин *Әсә-Ана-Аба-Лан* – Ашана-Балан – **Шанба-ла//*Шамбала*** килеп сыҡҡан. Күптәребеҙгә яҡшы мәғлүм булыуынса, кешелек донъяһының Будда динен тотоусы өләшөнөң аңында был изге атама ***Шамбала*** – шул уҡ **Ер Кендеге** (тәүгеһе), йәғни кешелек донъяһы изге күреп табынған Көн-Өфө ҡалаһы, хәҙерге баш ҡалабыҙ Өфө үҙе. Уны ҡайҙандыр Тибеттан йә башҡа урындан эҙләп маташыусылар яңылыша.

Әле генә күрһәтелгән *Әсана-Абалан* тигеҙләмәһенең һул яғында, күренеүенсә, *Әсана//**Ашина*** – әйтеп үтеүебеҙсә, Төрки Ҡағанат дәүләтен нигеҙләүселәрҙең изгеһе ул; ә тигеҙләмәнең уң яғындағы *Абалан (Болан)//**Апол-лон*** – беҙҙең яҡтан боронғо Грецияға тәүдинебеҙҙе илтеп еректереүсе изге Болан ҡиәфәтендәге Аполлон-хоҙайыбыҙ. Боронғо гректар ҙа хоҙайҙарыбыҙ төйәкләнмеш *Ер Кендеге* тап беҙҙең Өфөлә икәнлеген белгәндәр. Әйткәндәй, гректарға дин килтергән Аполлондың икенсе исеме лә бар – *Феб*, ә был иһә Өфө-Аба – Эфеба – *Феб* рәүешле барлыҡҡа килгәндер. Гректарҙың Дельф утрауы изге ҡорамында данлыҡлы әжер-әсә (жрица) *Пифия* булған, быныһы ла Әби-Өфө-эйә ләҡәбенең Пифия тип үҙгәртелеүенә оҡшай. Йәнә шул уҡ *"Аба-Лан" (Аполлон)* беҙгә бирә: Аба-Әрә (Әрә -- Ер тигән һүҙ) – барә//***бүре;*** бер үк ваҡытта Апа-Әрә (Рә) -- Өҫкө Донъяның (боронғо Египет диненең) Көн-Ҡояш хоҙайы ул. "*Лан*"ға (боланға) Күк "һыуы" төшөнсәһен биргән "Аҡ"ты теркәп *Лан-Аҡ* (Аҡ Болан) тип әйтһәк, хасил була *Лана//Луна* ("*Ай*"ҙың урыҫсаһы) һәм *Аҡ//Ай* ("*Луна*"ның башҡортсаһы). Көн-Ҡояш (Шүлгән) һәм *Луна-Ай* (Урал) ғаләмдәге үҙҙәренең мәңгелек хәрәкәтендә Урта Донъялағы Ер Кендеге (Өфө, һуңғараҡ Арҡайым) аша Өҫкө һәм Аҫкы Донъяларға үтеп-әйләнеп йөрөйҙәр. Урта Донъяла (Ерҙә) саҡта Аба-Рә (Ҡояш) – Бүре ҡиәфәтен ала ла ҡитға буйлап тартылған Көн-Өфө юлынан кешеләргә юл башлап бара; Өҫкө Донъяла (Күктә) ул – Ҡояшҡа, Аҫкы Донъяла (Ер-Һыу аҫтында) Балыҡҡа – *Абаг-Әрә//Багыраға* әүерелә. *Лан-Аҡ* (Ай) ҙа үҙ сиратында Урта Донъяла (Ерҙә) Болан ҡиәфәтен ала ла ҡитға буйлап тартылған Ҡуңыр-Буға юлынан кешеләргә юл башлап бара; Өҫкө Донъяла (Күктә) ул – Айға, Аҫкы Донъяла (Ер-Һыу аҫтында) Балыҡҡа – *Лан-Аҡ//Линь-Аҡҡа* йәғни *Ҡарабалыҡҡа* әүерелә...

Инде башҡа тарафтағы Һиндостанда Шива хоҙайға табыныусылар ҙа баяғы уҡ Ер Кендегенең тап беҙҙең изге Тәүтөйәктә -- Самарау (Сумеру) илендә икәнлегенә инанғандар. Уларҙың изге китабы Ригведала асыҡ әйтелә: Самарау илендә -- Ер Кендеге, Көн-Өфө (Ҡояш) юлы, Донъяның изге үҙәге; Самарау күгендә мәғрур Сәмреғош (Самарау ҡошо) оса, ерендә хоҙайҙарҙың хозур төбәге... Алыҫ Һиндостандан ошо Самарау иленә йәғни изге Көн-Өфөгә барып етеп хоҙайҙарға табыныу хыялы быуындан-быуынға өҙөлмәй дауамланған, ләкин унда барып етеүсе булмаған, сөнки хоҙайҙар төйәге сит-яттарҙан ныҡ ҡурсалап һаҡланған (Ибне Фаҙлан заманында ла, уның үҙе яҙыуынса, башҡорттар ул тыйылған яҡҡа бер кемде лә үткәрмәй ҡурсалағандар).

Һиндостандың бөйөк эпосы “Махабхарата”ла тап ошоға бәйле бер сәхифә бар. Игеҙәк туған Пандава һәм Ҡаурава ҡәбиләләре үҙ-ара ҡан ҡойошло һуғышып, пандавалар еңә, ләкин ике яҡтың да халҡы нык ҡырыла, илдәр ас-яланғас ҡала. Ошо хәлдән тетрәнеп һәм үкенеп, намыҫлы һәм ғәҙел батша Юдхиштхира тәхетенән ваз кисә лә, үҙе артынан биш кешене эйәртеп, гонаһтарын кисертергә алыҫ төньяҡҡа – хоҙайҙар иле Самарауға юллана. Оҙон, ауыр юл үтеп, төньяҡтағы офоҡ ситендә Ер Кендеге (изге Көн-Өфө) һыҙатлана башлағас ҡына, көтмәгәндә күҙ асҡыһыҙ буран сығып, Юдхиштхираның артынан эйәреп бер-бер артлы атлаған биш юлдашы сүкәйеп ултыра ла, берәм-берәм туңып, теҙелеп торған суҡай-суҡай тауҙар булып ҡатып ҡала: Тора тау, Шәке тау, Ҡуш тау (ике түбәле), Йөрәк тау... Шуныһы ла мәғәнәле: был бәхетһеҙ юлаусылар араһынан Накула һәм Сахадева тигән *игеҙәк* туғандарҙан шулай уҡ *игеҙәк* түбәле Ҡуш тауыбыҙ хасил була. Шулай итеп, алыҫ Һиндостандан килә ятыусы биш ҡунаҡ ыҙғар ҡышыбыҙҙың һуңғы апрель буранында туңып ҡала, башҡорт халҡы, мәҫәлән, үҫәргәндәр, әлегәсә был буранды “Бишҡунаҡ бураны” тип атай (ҡаҙаҡса “Аҡман-Тоҡман”). Юлбашсы Юдхиштхира ғына хоҙайҙарҙың ярҙамында Ер Кендегенә барып етеп табынған да ярлыҡанған...

Ер Кендеге – хоҙайҙар төйәге тураһында Алыҫ Көнсығышта ла белгәндәр (ҡытайҙар, корейҙар, япондар һ.б.). Шуның кире ҡағылмаҫлыҡ дәлиле – Таулы Алтай ҡаяларының береһенә сыйып ҡалдырылған бронза дәүер география картаһы (һүрәттәге яҙыуҙарҙы мин өҫтәнем).



Һүр. 1. Алтай тауы ҡаяташында Урал (хәҙерге Башҡортостан) -- Месопатамия картаһы

Унда Самарау иле Урал һәм Шумер иле Месопотамия икеһе бер өйкөмән (ойкумен) рәүешендә һүрәтләнеп, Ағиҙел – Ҡариҙел – Дим йылғалары уратаһын-дағы изге Көн-Өфө ҡалалы “утрау” ентекле күрһәтелгән. Шумер менән Самарау шулай ҡуш килгәс, шул ике остағы бабалар ҙа, уларҙың рухи мираҫтары мифтар һәм эпостар ҙа хәләл үҙебеҙҙеке, тимәк (бының тап шулай икәнлеген “Хәтер-хитап”та күрһәттем). Ошо рухи ҡомартҡыларыбыҙҙың сағыу һәм, минеңсә, сал Өфөгә бәйле береһе – шумер балсыҡ китаптарына яҙылмыш бөйөк туфан тураһындағы ҡарыһүҙ.

Туфан ҡалҡҡанда ҡотолоу

“Ағиҙел” журналының 1991 йылғы 1-енсе һанында баҫылып сыҡҡан “Тамырҙар” тигән кинопоэмамды беләләр бәғзе берәүҙәр: унда мин шумер эпосындағы Һүлгәмеш йәғни Шүлгән баш бабабыҙҙың, әжәл дарыуы юллап, мәғрур *Шүлгәнташ* мәмерйәбеҙҙең үткелеге буйынса туп-тура Аҫкы “теге” Донъяға йәғни үлектәр иленә төшөп сыҡҡанлығын, бының тап *Шүлгәнташ* мәмерйәһендә булғанлығын әйткәйнем.

Бына шул *Шүлгәнташ* мәмерйәбеҙҙең төбөндә, йәғни “теге донъя”ла, үҙенең баҡый уҙмыш игеҙәк туғаны Урал (шумерса Энкиду) батырҙы осрата ул. Шумер эпосы буйынса Урал (Энкиду) батырыбыҙ фани донъяла йәшәгән сағында Энә-Үгеҙе (Энкиду) йәғни Һыйыр-Улы мәғәнәһендә аталған булһа, мифтағы өс донъяның һәр береһендә унда үтеп кергәндәрҙең исеме *лә*, есеме *лә* киреһенсә алмашыныу ҡануны буйынса, Аҫкы йәғни “теге” донъяла иһә ул Атан-Абыҙ-Әти (Утн-апиш-ти) тип йөрөтөлә имеш.

Бына шул Урал-Атан-Абыҙ-Әти үҙе фани донъяла саҡта ер йөҙөнә ҡалҡҡан бөйөк туфан һыуы һәм шул һәләкәттән нисек ер йөҙөндәге тереклекте ҡотҡарып ҡалыуы тураһында хикәйәтләп бирә һөйөклө ҡарындашы Шүлгән-Һүлгәмешкә. Был иһә аҙаҡ Библияға *ла*, Ҡөрьән Кәримгә *лә* барып кергән, “Урал батыр” эпосында бик дәһшәтле тасуирланмыш туфан ҡалҡыу һәм, әлеге ике китаптағыса, Нух пәйғәмбәр кәмәһе тураһындағы ҡарыһүҙ булып сыға. *Ләкин* ул күпкә иртәрәк — Библиялағыға ҡарағанда кәм тигәндә *өс мең йыл элгәрерәк, ә* беҙҙең замандан *биш-алты мең йыл әүәлерәк* яҙып ҡалдырылған икән алыҫ Месопотамияла йәшәгән шумер бабаларҙың балсыҡ китап таҡталарына. Һәм ул балсыҡ китаптағы ваҡиғалар, төпсөнөп фекер йөрөтһәң, — ғәжәп! — тап ошо, әлегәсә үҙебеҙ йәшәгән гүзәл Тәүтөйәгебеҙҙә, тап ошо изге тауҙарыбыҙ сурайып торған мәңгелекле башҡорт ерендә имеш:

Атан-Абыҙ-Әти һөйләй уға, Һүлгәмешкә:
“Асам һиңә, Һүлгәмеш, нәҙер һүҙем
Һәм хоҙайҙар серен һиңә сисәмен.
Апа-Өбөрөт ярында Шәре-***Өфөк*** ҡалаһын,—
Уны бит һин беләһең, —
Ул ҡала ***бик боронғо, хоҙайҙар яҡын*** уға”...

Иғтибар итегеҙ: *Апа-Өбөрөт* яры — *Уфа-Бүрет* йәғни Ҡариҙел — Ағиҙел (Уфа — Белая) йылғалары тоташҡан һыу яры ул. Геродот географияһында *ла* Ағиҙел йылғаһы *Бүрет* йәғни бүре-эт (Бүре-ата) йылғаһы тип исемләнгән. Шул яр башындағы *Шәре-Өфөк* ҡалаһы — үҙебеҙҙең хәҙерге Өфө ҡалаһы. Ғалимдар иһә балсыҡ китаптағы был ике исемде *Евфрат* һәм *Шуриппак* тип яҙып йөрөтә, *ләкин* уларҙы өҫтәгесә уҡыуы *ла* ауыр түгел. Әгәр шулай барһаҡ, тимәк, бөгөнгө Шанлы һәм сал тарихлы баш ҡалабыҙ Өфө, шиғри текстан күренеүенсә, бынан *биш-алты мең йылдар элек* тә бабаларыбыҙҙың “бик боронғо” изге ҡалаһы һаналған, сөнки уға “хоҙайҙар яҡын” булған (хоҙайҙар шунда йыйылышып кәңәшләшәләр, имеш). Ябай ғына әйткәндә, хоҙайҙарыбыҙҙың Донъя-Ғаләм-Тереклек яҙмышын хәл иткес бөйөк йыйындары тап ошо изге Өфө ҡалаһында үткәрелер икән.

Туфан ҡалҡытырға бөйөк хоҙайҙарға
Бойорҙо йөрәктәре...
Күҙе нурлы ***Эйә*** улар менән ҡуша антлашты,
Әммә әҙәм өйөнә ул еткерҙе йыйын һүҙен:
“Өй, тим, өй, тим! Бура, бура!
Өй, тим, ишет! Бура, тыңла!
Шәре-Өфөк әҙәме, ***Уба-Ир-Түтәй***[54] уланы,
Өйөңдө һүт, кәмә ҡорша бураңдан,
Байлыҡтарыңа ҡул һелтәп, ҡурсала үҙ йәнеңде!..”

Кем һуң ул миһырбанлы ***Эйә*** Хоҙайыбыҙ, хоҙайҙар йыйынының рәхимһеҙ ҡарарын әҙәмгә еткереүсе, ер йөҙөнә үлемесле туфан ҡалҡыры тураһында иҫкәртеүсе әҙәмде?! *Эйә* (мәҫәлән, һыйыр үҙенең быҙауына имсәк һөтөн эйә) тигән исеме үк әйтеп тора: *Һыйыр-Эйә* ул, йәғни Урал батырыбыҙҙың имер имсәк эйәһе. Беҙҙекенә килеп тоташҡан иҫке грек мифында ул изге Һыйыр тап *Эйә (Ио)* тип исемләнә...

Үҙенең имеҙеп үҫтергән имсәк балаһына (Урал батырға) ана шулай хәбәр итеп өлгөрә миһырбанлыбыҙ:

“Шул кәмәңә тейә барлыҡ терене.
Һин ҡораған ул кәмәнең арҡылыһы һәм буйы
Тигеҙ булһын — ***дүрт мөйөшлө*** булһын ул”... —

ти Уралдың имсәк Эйәһе изге Һыйыр. (“Дүрт мөйөшлө” ҡоролошта ла бар ғилләә — ҡитғабыҙҙың башҡорт тәүтөйәге борон заман һәм шулай уҡ Геродот географияһында һәм Мәхмүт Ҡашғари картаһында ла дүрткел итеп күҙалланған, исламға тиклемге зороастризм диненең намаҙлыҡтары ла дүрткел булған). Артабанғы ваҡиғаларҙы ла балсыҡ китап Атан-Абыҙ-Әтиҙән (Уралдан) хикәйәтләтә:

Кәмәгә тейәнем барлыҡ ғаиләмде, ырыуымды,
Кейек хайуан, йыртҡыстарҙы, оҫталарҙың бөтәһен...
Алты көн дә ете төн туланы ел,
Дауыл сорнап алды шунан ер йөҙөн.
Етенсе көн тыумышында баҫылды
Дауыл менән туфандың бәрелеше...
Тынды диңгеҙ, тынысланды ураған —
Туфан ҡалҡыу туҡталды.
Астым төндөктө — бик сағыу яҡты бәрҙе йөҙөмә,
Баҡтым диңгеҙгә — тып-тыныс бар донъя,
Ләм-балсыҡҡа әйләнгән бар кешелек!
Түшәм таҡтаһылай таҡыр ер йөҙө...
Тубыҡланып йығылдым да иланым бер ултырып,
Ике битем буйлап аҡты күҙ йәшем.
Асыҡ диңгеҙҙә күҙемә төҫмөрләнде яр-һыҙат —

---

[54] Уба-Ир-Түтәй (Апа-Ир-Ҡыҙ) — үҙе Ир, үҙе Ҡыҙ (гермафродит) тәбиғәтле Имир тәүбаба, үҙ кәүҙәһенән бөтә Донъя-Ғаләмде хасил ҡылыусы.

Ун ике төбәкле һерәйгән атау”...

Тимәк, бөйөк туфан ҡайтҡандан һуң, тауҙары һерәйеп, *ун ике төбәкле* ҡоро ер хасил булған. Ошо *ун ике* һанында ла бар ғиллә. Был ун ике төбәк — ун ике *Эйә-Хоҙайлы* ун ике башҡорт ырыуының төйәге (*ете ырыулы* Бәжәнәк-Башҡорт тәүҡәбиләһе менән *биш ырыулы* Үҫәргән-Ҡанлы тәүҡәбиләһе). Башҡорт халҡының тап 12 (ун ике) төп ырыуҙан торғанлығын абруйлы ғалим әйтә (С.И. Руденко. Башкиры. М. – Л., 1955 г.,50-нсе бит).

Дауамлайыҡ шиғырҙы:

“Насар тауы тәңгәленә килеп терәлде кәмәм”...

Был *Насар тауы* — үҙебеҙҙең хәҙерге Яман тау ҙаһа! Эйе:

“Насар тауы тотоп торҙо кәмәне, сайҡалдыртмай.
Насар тау тота бер көн, ике көн — сайҡалмай кәмә.
Насар тау тота өс көн, дүрт көн — сайҡалмай кәмә.
Насар тау тота биш һәм алты — сайҡалмай кәмә.
Етенсе көн тыуғанда мин алып сығып сорғолттом
Күгәрсен;
Осоп китеп, тапмай төйәк, ҡайтты күгәрсен ҡире.
Алып сығып сорғолттом мин ҡарлуғас;
Осоп китеп, тапмай төйәк, ҡайтты кире ҡарлуғас.
Алып сығып сорғолттом мин ҡарғаны;
Ҡарға иһә, осоп китеп, күрҙе һыу бүҫкәргәнен,
Ҡайтмай кире һис үҙе; ашай ҙа буҡлай ерҙе”...

Башҡорт телендә был ҡоштоң исеме Ҡарға — ҡараға, ҡороға баҫ-тыртыусы йәғни ҡара-ҡоро ерҙе беренсе булып ҡотлаусы изге ҡош икәнлеген билдәләй. Һәр яҙ һайын ҡарҙан асылған ҡара ергә беренсе булып ҡарға осоп килә бит.

“Төшөп, дүрт тарафҡа ҡорбан салдым мин,
Тора тауҙа изге артыш төтәттем:
Ете һәм ете төтөнлөк көйрәтеп.
Һауыттарына һындырҙым мирт, ҡамыш, ҡәҙер-сыбыҡ...
Хоҙайҙар шул аңҡҡа эркеп, өйөрөлдө эргәмә”...

Текстағы Тора тау исеме балсыҡ китаптан урыҫсаға “На башне горы” тип йәғни манара-тау мәғәнәһендә тәржемә ҡылынған; уға ҡалһа, “манара” ла шул уҡ фаллос — Тәүбаба Имирҙың аталыҡ ағзаһы “Тора тау” тигән һүҙ бит... Баш бабабыҙ яҡҡан “ете һәм ете[55] төтөнлөк” — үҙ кәүҙәһенән Донъя-Ғаләм-Тереклекте хасил ҡылмыш Имир Тәүбабабыҙҙың ерҙән алып күккәсә урынлашҡан ун дүрт йәне рухына ҡорбан салыу ул. Башҡорт халҡы ошоғаса, яҙғы һыуҙар ташҡан (үҙенә күрә туфан ҡалҡҡан) осорҙа ҡара ер асылыу менән үк ҡырға сығып, усаҡтар төтәтеп, Ҡарға бутҡаһы тигән байрам уҙғара — туфандан һуң баш бабаға ошо изге ҡоро ерҙе йәғни Ерҙең Терәге Тора тауҙы табып

[55] 7+7 йәғни 14.

биргән изге ҡош ҡарғаларға арнап бешерелгән бутҡаны шундағы тау-таштарға һылап китә (ҡорбан сала)... Нухзамандан фәҡәт башҡорт халҡында ғына һаҡланып ҡалған туфанға бәйле йола был. Ошо ғиллә үҙе генә лә башҡорт халҡы хәтеренең оҙонлоғон — донъя яратылған замандарҙан уҡ уның ошо ерҙә төйәкләнеп килгәнлеген күрһәтә.

“Өфө” исеменең яҙыуҙарҙа сағылышы

Изге Өфө яҡтарына сит-яттарҙың аяғын баҫтыртмау ҡануны һәм уның рәхимһеҙ үтәлеше 922 йылғы Ибне Фаҙлан сәйәхәтнамәһенән үк күренә: башҡорт тигән хәтәр ҡәүемдең уҫаллығынан ныҡ ҡурҡтыҡ: еренә аяҡ баҫҡан кешенең башын өҙөп алып китә, кәүҙәһе ятып ҡала, ти ул һәм башҡорттоң барса сит ҡәүемдәр өсөн асыҡ юллы халыҡ-ара сауҙа ҡалаһы Болғарға төпкө Башҡортостандың ҡырыйынан – башҡорт үҙе рөхсәт ҡылған каруан юлынан ғына барып ирешә ул. Бына шул ҡәтғи сәбәп арҡаһында изге Өфө ҡалаһын сит-яттар белмәгән һәм тәүәрихтәренә лә, географик карталарына ла асыҡ яҙа алмаған. Әммә шулай ҙа ошо йәшерен мәғлүмәттең һирәк-һаяҡ төрлө сәбәптәр арҡаһында сиктәребеҙҙән ситкә сарпылған осраҡтары ла булған, шуларҙың күҙгә салынғандарын ҡыҫҡаса мәғлүмәтләйем.

1. Боронғо гректар мәғлүмәте.

Беҙҙең эраға тиклем VII быуатта уҡ гректарға Өфө дин үҙәге торған изге тау билдәле булған, улар уны ***Рипа*** *(Үр-Өпә//Үр-Өфө* йәғни Өфө торған үр – тау), ***Рипей*** *(Үр-Өпә-өй),* ***Рифей*** *(Үр-Өфө-өй)* тауҙары тип яҙғандар. Ғөмүмән Урал тауҙары ла шул исемдә йөрөгән.

2. XI быуаттағы Мәхмүт Ҡашғариҙың “Төрки телдәре һүҙлеге”нә теркәлгән географик картала.

Күпселек ғалимдарҙың раҫлауынса, был карта Мәхмүт Ҡашғариҙан күпкә боронғораҡ төҙөлгән булған, ғалим әҙерҙе файҙаланған. Был ҡомартҡы, моғайын, башҡорттарҙың бөйөк Ҡошан империяһы осоронда – бөйөк ҡаған Афзалдың тәхете боронғо Башҡортостан ерендә урынлашҡан IV – V быуаттарҙа эшләнгәндер, сөнки, башҡа боронғо карталарҙан айырмалы рәүештә, бында беҙҙең яҡтың ер-һыуҙары, ҡалалары һ.б. объекттары мул күрһәтелгән (әйткәндәй, Ҡошан ҡалаһы ла бар, бәлки, ул Афзал ҡағандың баш ҡалаһы булғандыр?).

М. Ҡашғари иһә Каспий диңгеҙенең төньяғынан буйлап көнбайыштан көнсығышҡа табан үткән һәм шул йүнәлештә осраған төрки ҡәүемдәрҙең бер-бер артлы урынлашыу тәртибен төньяҡҡа табан һуҙылған һыҙыҡтар ярҙамында билдәләп яҙған. Был ерҙәр – ул саҡтағы Башҡортостандың көньяҡ сиге булып тора. Төньяҡҡа табан тартылыусы Ирәмәл (Урал) тауҙары, Яйыҡ (Жайҡан), исеме күрһәтелмәгән Ағиҙел-Иҙел һ.б. йылғаларыбыҙ, исемле һәм исемһеҙ бик күп ҡалаларыбыҙ билдәләнгән. Шулар араһында беҙҙең был мәҡәлә темаһына иң ҡыҙыҡлыһы – Ағиҙелгә Өфө (исемдәре яҙылмаған) йылғаһы ҡойған ерҙә тирә-яғы һыу менән уратыулы “утрау”ҙа (тап баяғы Алтай тауындағы сал карталағылай!) урынлашҡан изге ҡалабыҙ (хәҙерге баш ҡалабыҙ) Өфө ишараты бар, әммә уның ысын исеме, дини тыйыу (табу) ғәләмәтемелер, яңылыштырылып, Ағиҙелдең шаҡтай үрге ағышында һул ярындағы Журжан (боҙоп яҙылған Үҫәргән) ҡалабыҙҙың исеме менән теркәлгән.

3. Беҙҙең эраның VI быуат башы, Ҡытай тарихнамәһе буйынса.

500 йылда, башҡорттоң бөйөк Ҡошан империяһының төньяҡ (Эске Башҡорт һәм Тышҡы Башҡорт) яртыһында тәхетләнеп ултырмыш бөйөк Афзал ҡағандың вафатынан һуң, уның вариҫтары араһында тәхет өсөн башланған болғаҡлыҡтан файҙаланып, Ҡошандың һәм Ҡытайҙың ҡан дошманы жужандар Ҡошанға ябырыла. Арал диңгеҙенең төньяҡ ярында башҡорт һәм жужан ғәскәрҙәре ҡаты бәрелешеп, башҡорт ҡағаны Ими-Бату көнбайышҡа ҡаса, ә жужан ханы Таған төньяҡ тауҙарҙағы ***Өфө (Иву)*** ҡалаһына килеп етеп туҡтала. Тап шул осорҙа көнсығыштағы Турфан ҡалаһының гөбөрнаторы, үҙен шул ***Иву (Өфө)*** ҡалаһына илтеп ҡуйыуҙы һорап, Ҡытай императорынан юл һағауылына ғәскәр саҡыртҡан булған; ошо ғәскәр тураһында мәғлүмәт алған жужандар, ҡурҡышып, кире ҡабат үҙҙәренең далаһына тәгәрләй; ә быны ишеткән Ими-Бату иһә ғәскәре менән жужандарҙың артынан төшөп, Арал диңгеҙенең төньяғында жужандарҙы тулыһынса тар-мар итә, Таған ханды үлтереп, сәсен тиреһе менән ҡуша һыҙырып (скальп) алып, Ҡытай ғәскәр башлығына улъя ҡылып ебәрә. Оҙаҡламай тағы Ҡытай императорына илселек арҡылы бүләктәр ҙә оҙатыла: биш аҫыл арғымаҡ[69], алтын-көмөш, кеш йөнлек тиреләре һәм төрлө сәнғәт әҫәрҙәре. Ҡытайҙан да йәнә илселек килеп, моң ҡоралдарының бөтә төрҙәре менән һикһән музыкант, бурҙат төҫлө — ун төргәк, төрлө төҫлө алтмыш төргәк ебәк туҡымалар тапшырыла бүләккә. Бүләктәрҙе ҡабул ҡылып алыу билдәһе итеп, Ими-Бату Ҡытай һарайына бер килке сәнғәт әҫәрҙәре менән тағы бер илсеһен оҙата. 516 йылда Ими-Бату ғәскәрҙәре жужан ханы Вафа (ҡытайҙарса Фуба-хан) ғәскәрҙәре менән бәрелешеп, Ими-Бату әсир алына. Вафа хан уны, атландырған килеш ат бауыры аҫтына аяҡтарын ҡуша шаҡарып бәйләп (иғтибар итегеҙ: эпосыбыҙҙағы Күсәк бей Ҡарағөлөмбәткә ҡулланған яза!), ат арҡаһында бер өҙлөкһөҙ һелкетеп йөрөтөп үлтерә, баш һөйәгенән эсер өсөн туҫтаҡ яһатып ала. Ими-Батуҙың яҡындары Иран яғына ҡаса. Тәхеткә Ими-Батуҙың кесе ҡустыһы ултыра, уны ***“Өфө (Иву) ҡағаны”*** тип яҙып йөрөтәләр. Һәм ул Ҡытай һарайы менән илселәр алыша. 521 йылда “Өфө ҡаған” жужандарҙы тар-мар итеп, хәҙерге монгол далаларына ҡыуа. 522 йылда Ҡытай һарайына һуңғы тапҡыр килә уның илсеһе, ыңғай һөйләшеп, бик күп бүләктәр алып ҡайтып китә. *Ләкин* ***Өфө (Иву) ҡаған*** оҙаҡламай жужандар менән нәүбәттәге бәрелештә еңелеп, ҡаш менән күҙ араһында үҙенең кесе ҡустыһы Яйыҡкай (Юегюй) тарафынан үлтерелә, тәхеткә Яйыҡкай ултыра. 534-537 йй. араһында Яйыҡкай үҙе лә жужандарҙан еңелеп һәм мәрхүм ҡаған Өфөнөң улы Бәҙи (Биди) тарафынан үлтерелеп, тәхеткә Бәҙи ултыра, ә үлтерелмеш Яйыҡкайҙың улы Һәүбән иһә Ҡытай һарайына ҡаса ла тиҙҙән ауырып үлә. Күп йылдар буйы үҙ-ара талаш-тартыш арҡаһында дәүләтебеҙ ныҡ бөлөп, жужандар уғата көс туплап өлгөрә. 540 йылғы нәүбәттәге һуғышта Бәҙи жужандарҙан тамам еңелеп, Бәҙиҙе лә тыуҙырмыш ошо шанлы “бүре малайҙары” тарафынан төҙөлгән, Бөйөк Ҡошан империяһының төньяҡ яртыһын тәшкил иткән дәүләтебеҙ йәшәүҙән туҡтап ҡыйрала.[70]

4. VIII быуат ғәрәп ғалимы Мөхәммәт ибне Муса әл-Хваризми яҙған “Ер һүрәте” китабында.

Етенсе климаттан (45 градус арҡауҙан) төньяҡтараҡ урынлашҡан ҡалалар исемлегендә:

Ауфатарийа. Географик координаттары: 55 градус 20 минут буйлыҡ (долгота), 52 градус 10 минут арҡау (широта). Был билдәләмә баш ҡалабыҙ Өфө торған координатҡа тап килеүен иҫәпкә алһаҡ:

Ауфа-тар-ийа - Өфө-Тора-өйө, йәғни *“хан тәхете торған өй* ***Өфө****”.*

5. Х быуат ғәрәп географы Ибне Һаукал яҙа:

“Хазарға яҡын, Иҙел буйында, Бертас (Бүре-Атас йәғни ата бүрегә табыныусы Күбәләк-Тиләү башҡорттары. – *Й.С.*); ләкин ул кешеләрҙең ере ғөмүмән Хазар, Ырыҫ йәғни Сәрир (Ырыҫ йәғни Сәрир – Үҫәргән башҡорттары. – *Й.С.*) тип атала... Был ырыҫтар өс ҡәүем тәшкил итә: береһе Болғар иленә яҡын; уның батшаһы ***Гунаба*** (Көн-Аба//Көн-Өфө! – *Й.С.*) ҡалаһында йәшәй, был ҡала Болғар иле баш ҡалаһынан ҙурыраҡ. Икенсе ҡәүеме ***Артандар*** йәғни ***Артайҙар*** тип атала; уның батшаһы ***Арт*** (ғәрәпсә боҙоп яҙылған, йәки боҙоп уҡылған *Артау//Уртау* – хәҙерге Орск. – *Й.С.*) ҡалаһында йәшәй. Ә ***Желәбе*** (*Силәбе. – Й.С.*) исемле өсөнсө ҡәүем үрҙәрәк урынлашҡан. Ләкин сауҙагәрҙәрҙән бер кем дә Болғар баш ҡалаһынан артабаныраҡ бармай; берәү ҙә *Артҡа* тиклем бармай, сөнки ул ерҙәрҙә йәшәгән кешеләр осраған һәр бер сит ил кешеһен үлтерә”.

Күренеүенсә, Башҡортостан тасуирланған һәм ***Көн-Өфө*** (Хәҙерге Өфө) ҡалаһы үҙ исемендә яҙылған.

6. 1221 йылда Сыңғыҙ хан ыҫтанына Ҡытайҙан илсе булып килгән Чжао Хундың яҙмаһы буйынса.

Темәсйән яуының ҡулына төшкән Үҫәргән (джургэн) кешеләре араһында Йылайырҙың (йәғни Үҫәргәндең!) Түлғата Байан улдары — Ҡоман-гүзәл, Селәүһен Ҡайсы һәм Ябаға исемле уҙамандарҙың да барлығы асыҡлана. (Алтан Тобчи, 109-ынсы бит).

«Үҫәргән тәүәрихе»ндәге шәжәрә буйынса самалаһаҡ, әле әйтелгән Түлғата Байан — Бөйөк Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡалаһы Көн-Өфө тәхетендә ултырған кенәз//көләр Ҡаҙансы Тура улына, ә Ҡоман[56]-Гүзәл — Туҡсаба Ҡаҙансы улына, Селәүһен Ҡайсы — Ҡарада Ҡиә Ҡаҙансы улына һәм Ябаға — Ислам Ҡиә Ҡаҙансы улына тап килә. Был өсәү ысынлап та Көн-Өфө тәхет эйәһенең улдары икәнлеген ышаныслы тоҫмаллатҡыс мәғлүмат бар ҡытайҙарҙың тәүәрихендә. Беренсенән, уларҙың атаһы Ҡаҙансы, ошо исеме менән түгел, ә үҙе тәхеттә ултырған баш ҡалаһының исеме менән ләҡәпләнә унда, ҡытайҙар тәүәрихендә: *«Кун-вэнь **Ку-ва**»* йәки *«Кун-вень **У-хэ**»*. Быларҙан шул күренә: Кун-вэнь тигәне — Көн-Апан (Көн-Әсә), Ку-ва тигәне — Ҡоба (хәҙерге Ҡоба тау), йәғни «Ҡоба тау ҡалаһының көнәсе//кенәзе»; ә *ләҡәптең* икенсеһе ***(У-хэ)*** *лә* шулай уҡ: «Өфө (Өхө) кенәзе...

7. “Үҫәргән тәүәрихе”ндәге батшалар шәжәрәһенән.

Трә (Тура) бин Баба Төкләҫ -- XII быуатта йәшәгән Тура-хан үҙе. Был Тура-хандың ҡәбер кәшәнәһе уның баш ҡалаһы булған хәҙерге Өфөнән алыҫ түгел Шишмә районының Түбәнге Тирмә ауылы эргәһендә һаҡланған әлегәсә, архитектор-белгестәр уның ҡоролошон ысынлап та XI — XII быуаттарға ҡарата (Б.Г. Калимуллин. Башкирское народное зодчество. Уфа, 1978; 114-енсе бит).

Боронғо башҡорт тәүәрихсеһе Ҡыҙрас Муллаҡаевтан заманында атаҡлы П.И. Рычков [Топография Оренбургской губернии, Уфа — 1999; 372 — 373-өнсө биттәр] һорашып яҙып алғанса, «хан Тура бин Баба Төкләҫ оҙонлоғо ун саҡрымға һуҙылмыш бөйөк Өфө ҡалаһының аҙаҡҡы ханы булған». Мәсетле районы Һөләймән ауылында табылған Әйле ырыу шәжәрәһендә боронғо Башҡортостан 9 ханлыҡҡа бүленгәнлеге, һәр бүлемдә кем хан булып торғанлығы күрһәтелеп, «1-енсе. Өфи ҡәлғәсен, Дим тамағын Тирәй хан биләде», — тип әйтелгән, йәғни «Тирәй» тигәне — Тора-хан. (Башкирские шежере. Филологические исследования и публикации. Уфа — 1985, 67-нсе бит).

[56] Ҡоман — ошо бабанан беҙҙең Солтановтарҙың ҡома//кама араһы киләләр.

8. XIII быуат: итальян Марко Поло китабында -- Өфө.

Билдәле булыуынса, йылғыр ике сауҙагәр – Марко Полоның атаһы Николай Поло менән уның бер туғаны Матвей Поло 1250 йылда Константинополдән (хәҙерге Стамбул) Ҡара диңгеҙ аша Солдадияға (хәҙерге Судак) килеп, Иҙел -- Урал регионына -- Алтын Урҙаның Бәркә-хан иленә йүнәлә. Ул заманда Бәркә хан, үҙе нигеҙләгән Сарай ҡалаһының эҫе һауаһынан арынмаҡҡа, иленең төньяғынараҡ йәйләүгә сығып, ***Болгар*** ҡалаһында тора икән. Сәйәхәтсе бер туғандар, Болғарҙағы шул Бәркә-хан һарайында йыл буйына ҡунаҡ булғас, Бәркә-хан менән Хулагу-хан илдәре араһында һуғыш сығыу сәбәпле, килгән юлдарынан кире ҡайтыу мөмкинлеге өҙөлөп, сәйәхәтте артабан ***көнсыгышҡа*** ҡарай дауам итергә ҡарар ҡылалар ҙа, Болғарҙан сығып, был илдең көнсығыш ҡырыйындағы ***Укака*** ҡалаһына килеп етәләр. Болғар ҡалаһынан ***көнсыгыш*** тарафтағы был “Укака” ҡалаһы һис тә, ҡайһы бер авторҙар фаразлаған Саратов йә уның янындағы башҡа ҡала түгел (сөнки Саратов төбәге көньяҡта!) ә 1298 йылда Марко Поло ауыҙынан ишетеп, уның төрмәләге ултырҙашы Рустикан тарафынан латин телендә боҙоп яҙылған (йәки тәржемәселәр боҙған) ***Уфака – Уфа*** (йәки Өфөкәй -- Өфө) ҡалаһы икәнлеге ауырлыкһыҙ аңлашыла. Сәйәхәтселәр, шул ҡаланан киткәс, ***Тигри*** һыуын кисеп сығып, ун ете көн буйына ҡола яландан баралар ҙа ***Бохарага*** килеп етәләр. (Марко Поло. Книга о разнообразии мира. Перевод И.П. Манаева, главы I и II).Әлеге ***Тигри*** тигән йылғаның да Яйыҡ икәнлеге асыҡ: был йылғаның буйҙары борон заманда, моғайын, шәжәрәләребеҙҙән билдәле ***Тогрил*** хандың биләмәләре булғандыр, шуға күрә йылға исемен дә Тоғрил (Тигри) тип тә йөрөткәндәрҙер.

Һүр. 2. Бәркә-хан ҡәбере

Марко Поло китабында әйтелгәнсә, ул заманда Башҡорт иле ысынлап та Бәркә-ханға буйһонған; Бәркә-хандың ҡәбере лә Башҡортостан Республи-каһының Усалы районындағы Әүештауҙың башында, ғәрәп графикаһындағы ядкәрташы ла һаҡланған. Бына уның тораташы һәм тексы (һүрәттә яҙыуҙың аҫҡы юлы күрһәтелмәгән):

фи зиртдә әл-Шәих
Мхәмәдғинан әл-Әүш
............әл-Шәих
Мхәмәд әл-ибн-әл-Бәркә
зирт орн Әүш әл-Мөхәмәт
фәсехбин
фи ғөмр Бәркә хан
бани Сараи
фи дәүләт Бәркә хан

Тексындың хәҙерге уҡылышы:

Был зиратта Шәйех-Мөхәмәдғайнан нәҫеле-нән -- Әүеш нәҫеленән... Шәйех-Мөхәмәд нәҫе-ленән улан Бәркәнең зират урыны. Әүеш нәҫеле Мөхәмәт нәҫеле -- уның ғүмере өҙөлгән улы Бәркә хан. Был дәүләттең Сарай ҡалаһын төҙөүсе Бәркә хан.

9. XIII быут: төрөк солтандарының бабаһы -- Өфөнән.

XIII быуат башында Ғоҫман дәүләтенең (хәҙерге Төркиәнең) беренсе нигеҙ ташын һалған һәм артабан дауам иттерткән ***Иртоғрил бәһлеүәндең*** асылда кемлеген, ҡайҙан һәм ҡайһы ырыуҙан килеп сыҡҡанлығын әлегәсә бер кем дә төплө генә белмәгәнлектән, шуны башҡорт хәтеренә таянып билдәләү мөмкин.

Иртоғрил исемен тап шул "Үҫәргән тәүәрихе"нең 60-сы битендә Мүйтән бей ейәне Йор-уҡ (Жеруҡ) исеме тәңгәлендәге тарихи аңлатма рәүешендә күрәбеҙ: "Жеруҡ, *Тоғрил хан* заманында бәк булып, хөкүмәт итер ине". Тимәк, шәжәрәне төҙөүселәр бәһлеүәнебеҙ Иртоғрилдың алыҫтағы Анталияла бөйөк хан-солтан дәрәжәһенә ирешеүен, ә Мүйтән ейәне Йор-уҡ иһә уның шанлы бейҙәренең береһе булғанлығын яҡшы белгәндәр. Ана шул хан-солтанлығын иҫәпкә алыптыр инде, "Үҫәргән тәүәрихе"ндә Иртоғрил нәҫелдәренең бөйөк төрөк солтандары рәүешендәге үҙ аллы-айырым шәжәрәһен төҙөгәндәр. Был ҡомартҡы хәҙерге ғилми белешмәгә лә (К.Э. Босворт. Мусульманские династии. Справочник по хронологии и генеологии. М., 1971, 185 — 186-сы биттәр) шаҡтай тап килеү генә түгел, хатта уны бер килке мәғлүмәттәр менән байыта ла. Әммә беҙҙе шәжәрәнең изге ҡалабыҙ Өфөгә бәйле баш өлөшө ҡыҙыҡһындыра:

1. Бәһлеүән Тоғрил (Ир-Тоғрил). --

2. Хан бин Тоғрил Ғоҫман Ғази. --

3. Солтан Ур хан Ғази бин Ғоҫман. --

(Күренеүенсә, был уның исеме түгел, ә ләҡәбе: Ур йәки Уртүбә ҡалаһының ханы, тигән һүҙ. Был Уртүбә — хәҙерге Орск ҡалаһы урынындағы боронғо ҡалабыҙ, 1391 йылда уны АҡһаҡТимер емергән. Атаһы Ғоҫман Ғази вафатына тиклем был зат Башҡортостандың Ур ханы булып торғандыр. "Ур хан тарих 724-selə" (һижрә менән) тигән аңлатмаһы бар).

4. Солтан Морат ***Өфө*** бин Ур хан Ғази. --

(Атаһы Ур хандың, йәғни аҙаҡ Ғоҫман дәүләте солтанының, вафатына тиклем был зат Башҡортостандың ***Өфө*** ханы булып торған).

5. Йылдырым Баязид... (артабан дауам итә).

10. XV быуаттағы "Өфө ханы".

Урыҫ йылъяҙмаларында 1481 йыл менән билдәләнгән "хан Тюменский" ***Ибак//Ивак//Упак*** шул йылда үҙенең улдары Муса, Ямғырсы менән бергә Азов диңгеҙе яҡаһында ҡышларға ҡалған Алтын Урҙа ханы Әхмәтте барып үлтерә.

Был *Ибак//Упак* – ***"Өфөк (Өфө) кенәзе"*** тигән һүҙ, ә асылы башҡорт Уаҡҡас хан. Өфө кенәзе булып ултырған сағында Уаҡҡас үҙенең кейәүен – Себер ханы Марҙы үлтереп, уның тәхетендә (Төмән ҡалаһы) хан булып ҡала, ләкин урыҫ йылъяҙмаларында һаман ***Ибак//Упак - Өфө ханы*** исемендә яҙылып йөрөй.

Килтерелгән бөтә мәғлүмәттәр изге ҡалабыҙ Өфөнөң саллығын, "донъя яратылған" мифик замандарҙан уҡ барлығын һөйләй.

Заманаһы ҡушыуынса

Замандаш әҙип Әмир Гәрәйев тураһында нәшер ителәсәк иҫтәлектәр китабына яҙыуымды һорап уның тол ҡатыны Фәниә ханым (уны электән беләм һәм хөрмәт итәм) телефондан ике-өс шылтыратҡас һәм йыйынтыҡты төҙөүсе ҡәләмдәшем Әмир Әминев тә иҫкә төшөргәс, уңайһыҙ хәлдә ҡалып, уйланып йөрөгәндән һуң, "быны булдыра алмам" тигән бер ҡарарға килгәйнем һәм Әминевкә лә әйткәйнем. Әммә бөгөн таң

алдынан өсөһөн дә төшөмдә күреп уяндым: әүәлге бергә “Ағиҙел” редакцияһында эшләгәндәгесә теп-тере һәм алсаҡ йөҙлө Әмир ағай, яғымлы-йор һүҙле Фәниә еңгәй күҙҙәремә ҡарап баяғыны көтә, ә яуаплы мөхәррир Әминев өндәшмәй генә бер ситтәрәк күҙәтеп тора...

Бер төркөм ҡәләмдәштәр: артҡы буйҙа уңдан һулға Әмир Гәрәйев, Йыһат Солтанов, Фәниә Гәрәйева, Абдулхаҡ Игебаев, Риф Мифтахов, Әмир Әминев “Ағиҙел” редакцияһында.

Ысынын әйтергә кәрәк: был төш миңә яңы борсолоу килтерҙе, сөнки үҙем белгәндәрҙең дөрөҫөн һөйләргә күнеккәнмен, дөрөҫө иһә заманабыҙ ҡушыуынса ҡатмарлы ла, аяныслы ла булды; баш бирмәүсән байтағыбыҙ коммунистик идеология тирмәнендә онталды, онталырға теләмәгән күпселегебеҙ тирмән таштары араһына яраҡлашып йәшәргә мәжбүр булды -- Әмир Сәлимгәрәй улы Гәрәйев тап шундай ҡорҙоң вәкиле, әүҙем береһе ине; шуға күрә күпселекте хөкөм итеүе ҡыйын, уны дөрөҫ аңларға ла аңлата белеү мөһим.

Әмир Гәрәйевтең “Ағиҙел”дә бергә эшләгән йылдарҙағы ҡиәфәте һаман күҙ алдымда тора: уртанан юғарыраҡ буйлы, ҡалын мыҡты кәүҙәле, тулыш түңәрәк йөҙлө. Тоҡанып китмәй тыныс ҡына саф башҡорт әҙәби телендә һөйләшә, ҡайһы бер өндәрен теш араһынан, үҙе лә абайламаҫтандыр, “һыуыр һыҙғырыуы” итеп шыйылдатып сығара. Ҡара-йылтыр ботинкалар, энәнән-ептән ҡара йөн костюм кейеп йөрөргә ярата (был төҫкә тартым, бәлки, флот кейеменән киләлер?), мин белгәндән ручкаһы ла (шариклыны ҡулланманы) ҡуйы ҡара төҫлө генә яҙыр ине. Икебеҙ ҙә хәрби диңгеҙ флотында оҙаҡ хеҙмәт иткәнбеҙ, Әмир ағай хеҙмәтенең һуңғы ике йылы минең тәүге ике йылға тап килә. Ул, эскадра минаносецының команда старшинаһы, әсмүхә ҙурлыҡ флот гәзитендә әүҙем яҙышҡан, ә мин, өлкән матрослыҡтан ары уҙмаған әҙәм, 1953 йылда уҡ шиғырым “Әҙәби

Башҡортостан" (хәҙерге "Ағиҙел") журналында ташҡа баҫылып сыҡһа ла, урыҫ телендә яҙыуҙы башыма ла килтермәй инем.

1965 йылда ғаиләм менән Өфөгә күсеп килгәс кенә Әмир Гәрәйев тигән журналистың "Совет Башҡортостаны" (хәҙерге "Башҡортостан") гәзите редакцияһында ауыл хужалығы бүлегенең мөдире булып эшләүен, мәҡәләләр, очерктар яҙыуын белдем, ләкин айырым иғтибарға алманым. Артабан ул гәзиттең яуаплы секретары итеп үрләтелде һәм, моғайын, яуаплы редактор вазифаһына ла күтәрелер ине, әгәр ҙә ки 1970 йылда коллективта килеп тыуған ығы-зығы арҡаһында ҡапыл ғына редакциянан һөрөлмәһә. Бының айышын байтаҡ һуңыраҡ партия архивында эшем буйынса соҡсонғанымда осраҡлы рәүештә төшөндөм: "сәбәбен ҡатын-ҡыҙҙан эҙлә", тигән боронғо мәҡәлдең асылы дөрөҫтөр.

Әмир ағай ҡыҫҡа ғына ара "вольный казак" булып йөрөнө, буғай; мин иһә "Ағиҙел" журналында эшләй генә башлағайным; журналист менән яҡындан аралашыуым редакцияның бер шүрлегендә "ҡаҡланып" ятҡан очергын соҡоп сығарыуымдан башланды һәм мин мыҡты кәүҙәле авторға ныҡлы иғтибар иттем, сөнки әҫәрҙең теле һәм стиле, хикәйәләү рәүеше гәҙәти гәзитселәрҙекенән күпкә айырылып, әҙәбилеккә ныҡлыраҡ тартым, тик әлегә "ҡоролма"ның "йәне" етешмәй, ә шулай ҙа әҙип булып үҫерҙәй ҡеүәһе бар, һымағыраҡ тәьҫир ҡалдырҙы.

Ул заманда партияның баҫма органдарынан шелтәләнеп китеү – профессияң буйынса тыйылыу, эшһеҙ ҡалыу менән янай ине (редакциялашы Рәми Ғариповтың асы яҙмышын хәтерләйек); бындай бәлә, ғәжәпкә ҡаршы, Гәрәйевте ситләтеп үтеп, коллегалары ла, башҡалар ҙа һис көтмәҫтән уны яҙыусыларҙың яҙмышын хәл ҡыла торған юғары вазифаға – Башҡортостан китап нәшриәтенең баш редакторы итеп тәғәйенләнеләр. Рәми хәленә ҡалмауының сәбәбен аңлай алмайынса, төрлөсә юраныҡ, әммә заманаһы өсөн һирәк осраҡлы ыңғай күренеш булды был, ә сере лә уның заманса ине. Эш шунда: урыҫ телендә ижад иткән башҡорт, татар прозаиктарының бер килкеһе, әҫәрҙәрен журналдарыбыҙҙа баҫтыртҡанда "тәржемәсеһе фәлән" тигәндән екһенеп, йәки ике телдә лә һыуҙағы балыҡтай йөҙөүен күрһәтергә теләпме, аласаҡ гонорарының ҡырҡ проценты хаҡына "башҡортлаштырыу"ҙа шыма ҡәләмле "невидимка"ларҙы йәтеш файҙаландылар; мәҫәлән, Әнүәр Бикчәнтәйев текстарын – Ихсан Әхтәмйәнов, Азат Мағазовтыҡын – Хәсән Назар эшләп биргәне мәғлүм. Ул саҡтағы КПСС өлкә комитеты секретарҙарының береһе, ошондайҙарҙың бәхетенә күрәме, төп эше менән бер ҡатарҙан яҙыусылыҡҡа һәүәҫләнеп, уҙамандың урыҫ телле повестарын башҡорт теленә ауҙартмаҡҡа баяғылай күренмәҫ ҡәләмдәр сифатында Ә. Гәрәйев, Т. Сәғитов кеүек егәрлеләрҙең йәлеп ителеүе сер түгел ине (тәүгеһенең ошолай маһирлығын "Ағиҙел"дә бергә эшләгәндә күреп беләм). Партия "бос"ы бының әжерен, әлбиттә гонорар иҫәбенән түгел, ә үҙенең юғарылыҡлы тотанаҡлауы менән ҡайтарыуы һиҙелде, ә хәсрәтле көнкүрештә һәр кемгә лә тәтемәгән йәлсеү, хыял ителмеш бәхет һымаҡ ине был. Һәр хәлдә, Әмир ағайҙың хеҙмәт арбаһы артабан, сутырмаҡтарға бирешмәй, гел алға тәгәрләне: башта яҙыусылар ҡоронда тормаһа ла, 1975-81 – яҙыусыларҙың төп органы "Ағиҙел" журналының яуаплы секретары, 1981-88 – яуаплы редакторы һәм Яҙыусылар берлеге идараһының партбюро секретары. Шулай юғары сорғолошона, әлбиттә, һөйөнөүселәр ҙә, көйөнөүселәр ҙә булды – бөтәбеҙ ҙә ауыр тормош баҫымынан арынырға тырышҡан, ләкин нисек итергә белмәй тыпырсынған бәндәләр инек бит; ошо хәлде архивымдан табып алынған бер текст та шаһитлай: "В 1987 году Гареев А.С.

неожиданно для литературной общественности был награжден орденом “Знак Почета”, причина такого чествования остается до сих пор тайной за семью печатями. Год спустя ему же присвоено высокое звание Заслуженного деятеля культуры РСФСР, в честь чего?”. Ҡырыҫ яҙма авторының аптырауы аңлашыла (тарихи сәбәбе билдәле): тап шул осорҙа яҙыусыларҙың күп һанлы партия йыйылыштарында һәм йыйынында Мирзаһитов менән Гәрәйев етәкләгән Яҙыусылар берлеге идараһының, партия ойошмаһы бюроһының, “Ағиҙел” редколлегияһының эше ҡаты тәнҡитләнде, ул тәнҡит хатта КПСС өлкә комитеты тарафынан дөрөҫ тип танылды. Ләкин шуныһы бәхәсһеҙ: яҙыусылар күмәкселегенең ҡаты хөкөмө ошо ике шәхес аша, уларҙан да бигерәк, замананың төп ғәйеплеһенә -- илде тынсыу мөхиттә йонсотҡан тоталитар режимға тоҫҡалғайны. Теләһә ниндәй шарттарҙа ла, тәбиғи, һәр кемдең дә кешесә йәшәгеһе, тормош һаҙлығынан өҫкәрәк күтәрелгеһе килә, ләкин һәләт тигән нәмә бәндәләргә тигеҙ бүлеп бирелмәгән. Әмир ағайҙың тыумыштан өлгөрлөгө, үргә ынтылыш ҡеүәһе ғүмеренең башынан уҡ уның ауыл тормошонда ла, хәрби хеҙмәтендә лә, гәзит редакцияһында эшләгәнендә лә асыҡ күренде; ындай шәхес һәр осраҡта үҙ юлын һәм файҙаһын таба белә, заманаһының өлгөрмәнен, лидерына әйләнә. Инде әйтә алабыҙ: ундайҙарға теге саҡтарҙа төрлө ҡараш булһа ла, хәҙерге заман хуплап маҡтай, өлгө итеп күтәрә -- алъюҫыҡтан ғәйепләргә ашыҡмайыҡ. Улар йәшәгән заман – бөтәбеҙҙең заман ине, һәр беребеҙ үҙ яҙмышына яҙылғанды үтәне. Коммунистик әфиүн менән тилертелгән бөйөк илдең күпселеге бер үк әхләҡ даирәһендә хәленән килгәнсә үҙ йүнен күреп йәшәнек.

Әмир ағайҙың журналистан яҙыусыға әүерелә башлауы ла барыбыҙҙың күҙ алдында, уның эшмәкәрлегенә тығыҙ бәйлелектә барҙы. Йәшермәйек: китап нәшриәтендә эшләүе дәүерендә әҙиптәрҙән ялағай дуҫтары күбәйҙе, улар уны, маҡтай-маҡтай, әҙәбиәткә тиҙерәк керешергә өндәне. Әмир ағайҙың үҙе үк таныуынса, ул, Яҙыусылар берлеге рәйесе Әсғәт Мирзаһитов ҡорҙашының аҡыллы кәңәшенән ҡанатланып, “Ҡарағайлы яҙҙары” исемле очергын ике киҫәкле повесть итеп дәррәү эшләп бирә һәм был әҫәр, авторын тиҙерәк Яҙыусылар берлегенә ағза итеп алырға әҙерлек йәһәтенән, “Ағиҙел”дә дәррәү ташҡа баҫылып, йыйылышта тикшереү ойошторола. Шунда ҡатнашҡан миңә лә, “беренсе ҡоймаҡ төйөрлө була”, тигән мәҡәлде иҫтә тотоп, авторға ҡаты бәрелмәҫкә кәрәккәндер, моғайын; әммә шуны белештермәй, йүнһеҙлегемә барып, мәҙхиә яуҙырыусылар араһында бер үҙем: “Повесть килеп сыҡмаған – ҙур күләмле очерк хәлендә ҡалған, ә иң мөһиме – тырпырап торған йәне юҡ”, -- тип яңғыҙ ҡарғалай ҡарҡылданым. Әшнәм бөйөргә төрттө:

-- Һантый, нәшриәттә ҡулъяҙмаң бармы?

-- Бар, балалар өсөн китап.

-- Аллаһы әкбәр, алайһа, төтөнһөҙ янды китабың. Их һин, баш редакторҙы үлтереп маҡтарға ғына кәрәклеген белмәнеңме?

Эйе, донъя – кәкере мөрйә, тигәндәй, юғарылыҡлы етәкселәр ҙә үҙебеҙ кеүек үк бәндә бит. Бер ай үтер-үтмәҫтән, төш күреп тертләп уяндым: Күккә ашҡан, мыҡты олононда йәшәү һуты тиртеп торған дәү тирәгем ҡапыл һулып ергә ҡоланы. Аңлашылды: китабым...

Иртәгәһенә үк, Черниковскиҙың арғы осондағы меҫкен фатирыма, ых-бых итеп, курьер апай килеп етте, баш редакторҙың кире ҡағыу хаты менән ҡулъяҙмамды ҡалдырҙы (“Аҡсарлаҡ” исемле был китабым Әмир ағай нәшриәттән киткәс кенә 1990 йылда баҫылып сыҡты. Әйткәндәй, халыҡ шағиры Мостай Кәримдең “Салауат” трагедияһын “Ағиҙел”дә тикшергәндә лә тиктормаҫ телем арҡаһында шулай бәләгә

тарыным). Бер ауыҙым бешкәндән һуң Әмир ағайҙың әҫәрҙәрен, дөрөҫөн генә әйткәндә, уҡыуҙан тыйыла килдем, әммә бер-бер артлы сыҡҡан китаптарына ҡәләмдәштәрҙән кире фекер ишеткәнем булманы -- моғайын, яҡшы яҡҡа үҫешеү билдәһелер. Ә шулай ҙа беҙҙең араларҙың һыуыныуының төп сәбәбе был түгел – ижадыма бәйле юҫыҡта төптәрәк ята тип һанайым. Тураһын әйткән – туғанына ярамаған, тигәндәй, әҙиптәрҙең танылған лидеры Мостай Кәрим менән мөнәсәбәтем ҡырҡыулашып, гәзит биттәренән, партияның өлкә конференцияһы һәм хатта РСФСР Юғары Советы трибуналарынан уның миңә, минең кеүектәргә йәбештерелгән “милли сикләнгән”лек мөһөрө йөҙәтте; үҙем дә абруйлыны тәнҡитләп КПСС Үҙәк Комитетына яҙҙым. Ошо ғына ла етмәгәндәй, “Башҡортостанда башҡорт халҡына ҡарата эҙмә-эҙлекле үткәрелгән геноцид” тураһындағы “Думы о народе” тигән ҙур күләмле тикшеренеүем Генеральный секретарға атҡарылып, “урында хәл ҡылыу” өсөн Мәскәүҙән кире Өфөгә -- партияның өлкә комитетына ҡайтарылғас, эштәрем эт илағыс була башланы. Әмир Гәрәйевкә тиклемге осорҙа уҡ әле баш редакторыбыҙ Рәйес Низамов әленән-әле Оло йортҡа саҡыртыла ла, йөҙө ҡара янып ҡайтып: “Ҡасан эштән китәһең? Ғариза яҙ!” – тип теңкәгә тейә торғайны; ул баҡыйға күскәндән һуң оторо “вазифа” яңы баш редактор Әмир ағайға йөкмәтелеп, ул да ныҡып игәне, хатта партия өлкә комитеты секретары һәм Мостай Кәрим, Ғилемдар Рамазанов һәм башҡалар ҡатнашлығында редакциябыҙҙан ситтә редколлегия ултырышы үткәреп, Йыһат Солтановты эшенән бушатырға, тигән ҡарар сығарғандар (протоколы бар). Ниңәлер быны үҙемә белдертмәйенсә (сөнки бәйләнер урын юҡ), һөйөкһөҙҙән шау-шоуһыҙ ғына арыныр өсөндөр инде, көндәлек эш шарттарымды түҙеп торғоһоҙ яһанылар (редакцияға көн дә иртән тетрәнеп килер инем); ижадымды быуып интектерҙеләр. Бөтәһе лә юғарынан – партия өлкә комитетынан һәм КГБ-нан һөстөртөлөүен аңланым һәм, нервыларым ҡаҡшап ауырыуға һабыша барыуымды тойоп, 1986 йылда улар көткән ғаризаны яҙып бирҙем...

Әҙиптең һуңғы йылдарында осрашыуҙарыбыҙ һирәк булды, сөнки икебеҙ тиң тейешле ялға сыҡҡан пенсионер, күберәген фатирында яҙыу өҫтәленән ҡупмай ултырыусыларға әйләндек. Уның хаҡта ҡәләмдәштәрҙән ишеткәндәрем гел ыңғай булды, йәшерәк быуындан байтаҡтары әҫәрҙәрен “Ағиҙел”дә беренсе башлап сығарыусы Әмир ағайға рәхмәтле ине. Замандашым һәм ҡәләмдәшемде һуңғы тапҡыр шул уҡ ҡара костюмында Яҙыусылар берлеге идараһында тап иттем – шаҡтай өлкәнәйеп таяҡҡа таянған, сирләштереүе тойола, әммә алсаҡлығын юймай, минең янға үҙе елтерәп килеп күреште, хәл-әхүәлдәрҙе белешеп айырылыштыҡ...

Беҙҙә сыҡҡан иҫтәлек китаптарына, ғәҙәттә, иҫтәлек әһелен маҡтаған хәтирәләр генә һайлап туплана, ә шәхесте тыуҙырған һәм йәшәткән ҡатмарлы замана сағылып етмәй ҡала; мин иһә был йоланы тотмай яҙҙым, шуға күрә аяҡ терәп йыйынтыҡтан урын дәғүәләй ҙә алмайым.

Әйтеп үтеүемсә, икебеҙ ҙә элекке хәрби диңгеҙсе инек, ҡәләмдәштәр ҡоронда быңдайҙар байтаҡ ҡына; әммә, белеүемсә, хәрби диңгеҙ флотына ҡағылышлы әҫәрҙәр ыраманы; минекеләр ҙә ни бары бер поэма, очерк, тиҫтәгә яҡын шиғырҙан ары уҙманы; ә Әмир ағай ошо юҫыҡта емешлерәк ижад итеп, әҙәбиәтебеҙҙәге һирәк теманы сағылтҡан бернисә китап ҡалдырҙы, шуныһы менән генә лә ул үҙенсәлекле айырым урын биләй.

19.02.2010

Үҙ фекере бар

(“Ағиҙел” журналына килгән бер ҡулъяҙмаға ҡарата)

Хөрмәтуллин Марсель уҙаман үҙенең “Еңеү килер. Донъя буйлап нур килә -- ислам нуры” тигән ҡиссаһында бәғзе бер башҡорт зыялылары ҡуҙғатырға баҙмаған, йәки “баштарына тай типмәгән” фәлсәфәүи темаға әүҙем тотоноп, алдына ҡуйған бурысын, минеңсә, мәғрифәтле бөгөнгө уҡыусылар өсөн ҡыҙыҡлы ғына атҡарған. Ислам фәлсәфәһендә ул тапалмаған юлдан бара, үҙ һуҡмағын яра кеүек. Концепцияһы нигеҙендә, гәрсә үҙе атап әйтмәһә лә, хәҙерге заман ғилем эйәләре араһында арыу уҡ яңғыраш алған “кешелектең бишеге, тәүтөйәге – сал Урал, халыҡтар мифологияһының тамыры – шунда ереккән, башҡортта баҙыҡ һаҡланған; барлыҡ телдәрҙең әсәһе – тәүтел, ә тәүтел һүҙ байлығының хазиналар һандығы – башҡорт теле” тигән һиҙемләү ныҡ тойола, был иһә башҡорт тамыр һүҙҙәренең бөгөнгө төрлө тел һүҙҙәренә һәм донъя яратылыу мифына, фәлсәфәһенә бәйлелеген күргәҙмәле иҫбатлауҙа сағыла. Автор нарыҡлаған ҡайһы бер “рәсми фән ғалимдарыбыҙ”, әлбиттә, бындай фекерләүҙе ҡабул ҡылмауҙары, артыш төтөнөнән шайтан ҡасҡандай һырт ҡайырыуҙары ихтимал. Ләкин матур тел менән яҙылған, бөгөнгө хәлебеҙгә тығыҙ үреп бирелгән был әҫәрҙә аҡыллы йән ялҡынланырлыҡ рациональ фекер осҡондары бар. Шуға күрә әлегәсә модаға әйләнмәгән, “туҙға яҙмаған”дарҙы яҙырға тырышыусы бының кеүек үҙ юҫыҡлы авторҙарҙы “Туҙға яҙмағандарҙан” кеүегерәк рубрика аҫтында, мөмкин булһа фотоларын да ҡуйып, күрһәтә барыу хәйерле булыр ине. Ә был мәҡәләнең исемен, ҡыҫҡартып, “Донъя буйлап нур килә” тип кенә ҡалдырыу отошлораҡ булмаҡсы.

16.11.2006.

Ваҡланмаһын Тора тау

“Киске Өфө” гәзитенең алғы битендә үк, ниһәйәт, мифтарҙағы “хоҙайҙарҙы тыуҙырыусы” изге Тора тау (самар-шумер бабаларыбыҙ мифынан) фонында төркөмләнмеш хөрмәтле аҫабалар ҡорон, шунда улар илгә мәғлүм ҡылған мөһимдәрҙән мөһим көн үҙәге шиғарҙарын (лозунгыларын) – “Тора тауҙы бирмәбеҙ емерергә!”, “Руки прочь от Тора-тау!” тигән, күптән көтөлгән йөмләләрҙе уҡып-күреп ҡәнәғәтләндем. Тимәк, рухыбыҙҙың тамырына яһил балта сабылыуын аңлай башланы халыҡ, гәрсә шаҡтай һуңлабыраҡ булһа ла. Һуңлап, сөнки рухыбыҙҙың алтын бағаналары һаналырлыҡ изгеләрҙән изге дүрт тауыбыҙҙың береһе – Шәке тауыбыҙ (уны яңылыш Шах-тау тип яҙып йөрөтәләр) Ер-атабыҙ тәненән умырып юҡ ителде, йотолдо (Эстәрлетамаҡ Сода комбинаты ашаны). Матди-иҡтисади йәһәттән төшөмлө эш булһа ла, рухи яҡтан бер башҡортҡа ғына түгел, ә дөйөм кешелек донъяһына зыянлыҡлы шул фажиғаға мин күптән инде иғтибар иттерткәйнем һәм, Хоҙай ғәфү итмәҫлек оло гонаһыбыҙҙы килер быуындарҙан кисерттермәккә, изге Шәке тауҙың әүәлге физик ҡиәфәтен ҡабат тергеҙеп, Сибай карьерынан сығарып ташланған “буш тоҡом” тауҙы бында күсереп өйөргә хыялланғайным (Йыһат Солтанов. Хәтерхитап. Башҡортостан “Китап” нәшриәте – 2002 й., 498-енсе бит). Әмир Абдразаҡовтың минең ҡатнашлығымдағы “Илгиҙәр” исемле телефильмендә лә был бөйөк рухи хазинабыҙға янаған афәт тураһында киҫәтелде. Инде килеп һәүетемсә күнегелгән битарафлығыбыҙ арҡаһында тау тиклем тауҙы ҡабып йотҡан комбинат-аждаһа оҙаҡламай Тора тауыбыҙҙы ла (ә унан һуң сиратта – Ҡуш тау, Йөрәк тау!..) онтаҡлап һоғонмаҫ тимәгеҙ –

белеп сың (колокол) ҡаға гәзит... Тимәк, арҙаҡлы Юрматы аҫабаларының был әүҙемлеге – зарури һәм ул һәр яҡлап хуплауға ла, яҡлауға ла лайыҡлы тип һанайым. Әммә мәҡәлә авторының, хискә бирелеп китепме, Тора тауҙың һәм башҡаларының хужалары, ҡурсаусылары итеп башҡорттоң фәҡәт бер ырыуын -- юрматыларҙы ғына һанауы мәсьәләне ныҡ кесерәйтә кеүек, сөнки салдарҙан сал төбәгебеҙҙең ысын хужалары ла, ҡурсалаусылары ла борон-борондан уҡ бөтә башҡорт ырыуҙары (башҡорт халҡы) һәм, улай ғына ла түгел, хатта дөйөм кешелек донъяһы ине бит (ҡарағыҙ: баяғы китап, 295 – 302-нсе биттәр). Быға миҫал итеп киң билдәле бер нәмәне – донъялағы төп алфавиттарҙың яралғыһы булған һәм тап баяғы тауҙарыбыҙҙың һүрәт-һыҙмаһынан моронлаған тәүге шумер (үҫәргән), ҡот (ҡатай) яҙыуҙарын (баяғы китап, 202-нсе бит) күрһәтеү ҙә етәлер.

Йәнә килеп шул изге дүрт тауыбыҙҙы, урыҫ һәм башҡа телдәр ыңғайына ылығып, “шихан” тип яҙып йөрөтөүебеҙ ҙә хилафтыр, сөнки аҫаба бабаларыбыҙ уларҙы “сыҡан” (Ер-атабыҙ тәненән сыҡҡан күбентеләр – сиҡандар) тип йөрөткән. Өҫтәүенә, мәҡәлә авторының да, һәм, контекстан тойолоуынса, хөрмәтле редакцияның да “Тора” (мифтар буйынса Дәү Хоҙайыбыҙ Имирҙың фаллосы) атамаһын ниндәйҙер “тра” (йәнәһе “текә”) төшөнсәһенә ҡайтарып ҡалдырыуы ла килешһеҙҙер, минеңсә. Мифтарҙа бит “Тора тау” – “Тороҡ атау” (Атайыбыҙҙың тороғо – фаллосы) икәнлеге билдәле. Шуға күрә лә 922 йылда Ибн-Фаҙлан осратҡан башҡорттар муйындарына Тороҡ-атай (фаллос) ишаратын тағып йөрөгән, ә сыуаштарҙың хоҙайы – Тора, Скандинавия халыҡтарыныҡы ла Тор булған. Ошо изге хоҙайыбыҙ Тора тау төбәгендә уҡмашҡан боронғо аҫаба бабаларыбыҙ ҙа, тап шуға бәйле, “тороҡ” кешеләре һаналып, ошонан “төрөк”, “төрки” төшөнсәләре киткән, ә Тора таулы илде Торан (Туран) тип атағандар. Һәр хәлдә, тарих буйынса етди фекер йөрөткәндә еңел-елпелеккә юл ҡуймау хәйерле булыр: еңел уйлап башҡорттоң үҙен дә, изге Тора тауын да, башҡаларын да ваҡларға һәм ваҡлатырға ярамаҫ.

22.07.2006.

Коротко о наших госсимволиках

I. Начнем с византийского двуглавого орла – герба Российской империи. Что русские цари эту символику переняли от Византии – всем уже известно. Но откуда раздобыли ее сами византийцы – у греков ведь такого не было? Ответ: символика им досталась от древних скифов-башкир – своих соседей.

Наша историческая родина, занимавшая по площади значительную часть евразийского континента, в географическом и этно-политическом аспекте представляла собой единое целое, разделенное условно на две половины: Внутренняя Скифия и Внешняя Скифия (Птолемей) или Внутренний Башкорт и Внешний Башкорт (арабские географы). Является это реликтовым этно-духовным состоянием перворода человечества, разветвленного на материнскую фратрию ***Усярган*** (мифических потомков первопредки Шульгана) и отцовскую фратрию ***Башкорт*** (мифических потомков первопредка Урала). Между ними в центре стоял мифически *оберег* Столп Имира (Мира) в виде священного *Терека/Торока,* воплощенный в виде горы *Тора-тау* (буквально Фаллос-гора, находится в Ишимбайском районе Республики Башкортостан), оно же священное дерево Терек. Ведь недаром герой усяргано-шумерского эпоса Гильгамеш на вершине священной горы

водружет магический кедровый Столп. Это был, как мы знаем из мифологии народов мира, охранный Столп-оберег для всего континента, стерегущий оба его половины, названные, как мы уже знаем, Внутренний Башкорт (юго-западная часть) и Внешний Башкорт (северо-восточная часть).

У меня нет никаких сомнений на счет того, что современный алтайский народ является единокровным осколком древних башкир, об этом свидетельствуют антропологические и этнопсихологические данные, также язык, мифология этих двух древнейщих народов, сохранившие в своей памяти множество мифов общего для нас языческого периода развития. Так вот, возведенный Гильгамешем охранный Столп Мира удивительным образом полно и ярко воспевается в героическом эпосе алтайского народа (Маадай-Кара, М., 1973):

В долине между семью большими горами-крепостями
Стоствольный вечный *Терек*
Под лучами Луны и Солнца,
Как золото сверкая, стоит...

Здесь слово “Терек”, ошибочно переведенный на русский язык как “тополь”, одновременно означает и “Дерево”, и “Опора (Земли)” т.е Столп Мира, в то же время “Терек” (Торок) это Фаллос Господа Всевышнего Имира или гора Тора-тау...

На вершине семиколенного вечного Терека
Две одинаковые, с конскую голову, золотые *кукушки*
Днем и ночью гулко кукуя,
Перкликаясь сидят...
Они знают, кто когда умрет,
Знают, кто сколько проживет.

Башкиры до сих пор верят в такую же сакрально-магическую силу кукования кукушки “сакыра”...

Посередине семиколенного железного Терека
Два одинаковых черных беркута сидят,
Когти их острые как алмаз...
Под тремя небесами они
Лунокрылых птиц не пропускают,
Через три Алтая они
Четвероногих зверей не пропускают –
Глубь неба караулят
Эти два черных беркута...
Сторожат, чтобы неизвестными путями алыпы не прошли,
Караулят, чтобы узкими тропами богатыри не прошли...
Два черных беркута моих
Землю Алтая сторожат...

Точно такой Мировой Столп с двумя орлами *посередине* присутствует на башкирских хараусах – лобных повязках наших матерей (см. Народное искусство башкир, Л. “Советский художник”, 1968, стр.74). Заметте: на узоре хárауса -- стилизованное изображене Столпа Мира в центре мифических Верхних и Нижних миров (их начертания изображают одновременно и четырех священных дорог); на верхней (правой или северо-восточной) половине пространства, олицетворявщий собой полуконтинент (Внешний Башкорт) – знакомые нам стерегущие два орла; на нижней (левой или юго-восточной) половине континента (Внутренний Башкорт) тоже те же два орла. Значит, на гербе отражено неразделимое единство двух половин одного государства и народа.

Башкирский хараус

Знаменательно то, что именно от башкирского слова “һарауыс” происходит известный всем интернациональный термин “герб”: һарауыс>һарабс>һербс>һерб/герб. Как говорится, если бы я был президентом, как раз этот хараусыс-герб сделал бы центральным узором государственного герба республики...

Как видим, из главных элементов нашего герба посредством символизации была получена и византийско-русская главная символика, только в ней двух орлиных туловищ свели к одному, но с теми же двумя головами и “острыми как алмаз когтями”... Византия была, как и сложившаяся позже нее Российская империя, многонациональной и немаловажную роль в этом государстве играли скифы-башкиры. Даже император их, византийцев, носил титул башкирского названия: ***василевс***>бас-ил-абыс (баш-ил-абыз) т.е. буквально *глава-страны-ученый муж;* есть и другая трактовка: бас-илбас т.е. буквально *глава глав всех стран* (император). Сей монарх, восседавщий на троне, держал в руке ***скипетр*** (жезл), знак неограниченной власти, что тоже назывался по-башкирски: ***скептрон***>секеп-торон (грубо говоря, трахающий-встающий т.е. Фаллос-Тора-тау)...

О новоявленном гербе Республики Башкортостан и говорить не стану – настолько он выглядит (лично для меня, конечно!) лубочным и искусственно-примитивным... Помнится, в свое время на конкурс проектов герба были представлены и другие интересные предложения, учитывающие историко-духовный мир народа в тесной связи его с мировой историей и мифологией, но по настоянию наших ученых-консультантов они были оставлены без внимания...

II. О семипалом цветке курая на флаге. К сожалению, пока все твердо уверены в том, что семипалый цветок курая символизирует *семь* родов *(семирод)*, будто бы образующих башкирский народ. Но почему только семь? Почти каждому ведь известно, что древний башкирский народ сложился из ***двенадцати*** основных родов, а не из семи. То есть семь родов из числа этой двенадцати в древности населяли северо-восточную половину прародины (Внешний Башкорт), и пять – юго-западную (Внутренний Башкорт), это было единое государство и народ. Однако современные рьяные изобретатели нашей госсимволики, может быть, не знали об этом, а может быть кое-что и слышали, но не сочли нужным углубить свое и так по их мнению глубокое знание, или же в служебной спешке они не успели заглянуть даже на всем известный фундаментальный труд профессора С.И.Руденко “Башкиры” (М.-Л., 1955, стр. 50), где ясно и понятно говорится: “В домонгольское время, по преданию, башкиры разделялись

на ***двенадцать*** основных родов, из которых ***семь*** были расположены на территории бывшей Уфимской провинции, а ***пять*** – в зауральской ее части". Выходит, семипалый цветок на флаге республики символизирует только половину народа – жителей бывшей Уфимской провинции, называемая теперь в основном Республика Татарстан, а другая половина является вроде бы как бесхозная, выброшена *за борт*, как любил говорить товарищ Сталин. Выходит, современная Республика Башкортостан юридически никого не представляет? Или же вопреки всякому здравому смыслу представляет только население зарубежной республики. Об этом я пишу уже не первый раз...

Почему так случилось? Очень просто: в начале прошлого века один наш просвещенный шакирд (потом он же известный фольклорист), записавший из уст сказителя предание о союзе *семи* и *пяти* родов башкир, почему-то на уме у себя выделяя только семерых, над текстом поставил условный рабочий заголовок "Семьрод". Но сомнительно, чтобы башкир-сказитель пользовался таким специфичным русским термином, скорее всего он рассказывал легенду без названия. Прошли годы и при издании названного текста другой советский ученый заметил этот "Семирод" и с обоими руками схватился за названный заголовок, выгрышный тогда в политическом отношении, усматривая в нем добрый признак устремления разобщенного башкирского народа к централизации под эгидой "присоединения к Русскому государству" (БХИ, эпос, третья книга, Уфа-1982, стр.21). И, как говорится, пошла гулять молва как ветер по губернии. Не смотря на то, что в другом солидном башкирском эпосе "Кусяк-би" (БХИ, эпос, вторая книга, Уфа-1973, стр.293) яснее ясного сказано, что у башкирского сюзерена Масем-хана ходили в подчинении все ***двенадцать*** вассальных биев-родоначальников, а территория государства была разделена на четыре дороги-области (с тремя родами на каждой)...

III. Следующий из всего этого вопрос: почему цветных полос на флаге именно три, а не четыре? Ведь у нас испокон веков были двенадцать основных родов разделенных на ***четыре дороги*** (из Центра континента -- Столпа Мира -- на все четыре стороны света расходились четыре дороги, являющиеся парными отрезками двух священных дорог ***Кюн-Уфи*** и ***Конгур-Буги***). А именно:

Дорога Кюн-Уфи или Шульгана – дорога Материнской (Эсэ) фратрии

Как видно из древних мифов, после рождения близнецов от первых прародителей на Континенте Евразии, их потомки раздвоились, со временем эти разошедшие концы отдалялись друг от друга, в результате чего произошли два древних перворода – фратрии. Позже главари фратрий (первопредки) в разных частях континента стали называться по разному: к примеру, близнецы Урал -- Шульган, Ромул -- Рем, Ахурамазда -- Анграмайнью…

Название дороги усярганов-башкир Кюн-Уфа (Көн-Өфө/Канифа) произошло, думается, от слов Кюн-Апа<Аба<Ама 'Солнце-Мать', а это значит, что она является дорогой Шульгана-Волчицы-Солнца, северо-восточная часть которой протянулась от «Пупа Земли» Аркаима на Дальний Восток до Желтого (Тихого) океана приблизительно по местностям Акмулла – Семипалатинск – Абакан – дальше по городам Монголии Кобоо, Улан-батор – и российским Улан-удэ – Чита – вдоль берегов Амура до устья, там переломилась направо вдоль берегов Желтого (Һары/Корейского) полуострова с продолжением до Желтого моря. Флаг этой дороги был желтого цвета, а люди носили

одеяния преимущественно желтого цвета. Вот что важно знать: река Амур прозвана именем Господа Всевышнего Имира/Умера, башкирское значение этого слова «Жизнь»... Так-как каждодневное «***желтое*** Солнце» там по утрам восходило на краю материка «из-под моря», огибая *верхушку горы* – ***ос-таг,*** то усярганцев-башкир этой земли называли также ***ос-таг>остяк>истяк,*** и их флаг желтого цвета тоже назывался ***стяг.***

Другая часть дороги Кюн-Уфа протянулась от Аркаима на юго-запад приблизительно по такому маршруту: Волгоград – Астрахань – Тбилиси – Баку – Ереван и через Кавказ, Турцию, Сирию по верховьям рек Евфрат и Тигр (древнешумерские земли) и городов Халеб – Дамаск – Амман (Иордания) – по берегам Шульганского (Мертвого) моря через городов Акаба – Эт-Тур и дойдя до мыса Синайского полуострова



Рис. Древняя наскальная карта: от Агидели до Тигра (названия объектов проставлены мною).

дорога эта перломлялась в сторону «**красно**-заходящего Солнца» -- юго-запад до устья Суэцкого канала и до реки Нила, обхватывая своей «лапой» Красное море – край Красного (Атлантического) океана. Флаг этой дороги имел красный цвет и назывался ***алям*** (от слова *алый-красный*), люди носили одежду преимущественно красного цвета. По этой дороге древние (XXIV век до н.э.) усярганцы-башкиры под руководством своего славного царя Усярган-Саргона совершили великий военный поход с завоеваниями Месопатамии, Египта и оставляя там свой глубокий след. Можно с уверенностью утверждать, что древние башкиры успешно осваивали земли от Агидели до Нила, что подтверждается наскальной географической картой, начерченной нашими предками на горах Алтая (рис.45), обнаруженная научной экспедицией под руководством известного ученого А.П. Окладникова (Петроглифы Горного Алтая, Новосибирск – 1980, стр.88, рис.3).

Дорога Кунгур-Буги или Урала -- дорога Отцовской (Ата) фратрии

Фратрия Ата, во главе которой стоял «Боз-Кар улы» 'льда-снега-сын' Урал, занимал северо-восточную часть континента (Внешний Башкорт), преклонялся своему

первопредку Уралу. От сокращенного от «Боз-Кар улы» «Кар-ул» произошел титул главаря «король»; от него также произошли названия орудий труда «корал», а также имя героя эпоса тюркских народов Гур-ул, Арал, Урал. Потомки Урала добывали руду из недр Уральских гор, отливали оружия, возделывали землю, отражали вражеские нашествия – тем и жили. Кстати, название первого орудия труда для пашни земли также произошел от того же «Кар-угл» - каруг>*кюряк* (лопата). Другой синоним слова плуг в древнерусский язык вошел как орал -- одинаковый с «Уралом», оратай же (пахарь) – произошел от «Орал-атай» (Урал-батя – отец). У нас «Орал-атай» существует как Орат – *ир-ат* (мужчины), в виде Эрота проник в древнегреческую мифологию… Мужчины Уральских гор нападали на врагов с кличем «Орал» (русское слово *орал* -- кричал); клич – оран – русские до сих пор понимают как «орать»; до сих пор наши солдаты идут на наступление с криком «Ура!».

На далеком южном берегу континента дорога Кунгур-буга, «переломившись» в устье Ганги, направляется на плодородные земли к берегам Персидского залива. «Край света» на южном кончике дороги упирается на граничивший континент Синий (Индийский) океан, поэтому людей, проживающих на этой развилке дороги Кунгур-буги, привлекал синий цвет – у них и знамя было синего цвета и называлось оно от первой части старинного слова ***болоҡ-һыу*** ′синяя-вода′>болоҡ>***флаг***. Если направиться в путь с окраины Индийского океана до Урала, то эта южная развилка великой дороги протягивается к северу с начала от города Сатагам (башк. Сата-Кан – развилина реки Канак/Ганг), что на устье реки Ганга, к северу -- мимо города Ланхпау по верховью Ганги через Кашмир-Пакистан он доходит до Кабула и простирается через Кушка – иранский Мешхед (башк. Масгут/Массагет) – Ашхабад – Кунграт – Гурьев – Орск, затем по верховью р. Яик к горе Атас (Магнитогорск). О том, что дорога проходит через эти местности, говорят названия древних городов: Башкорт (Афганистан), провинция Башгерд и гора Бажарт (Иран), город Кангырт (между Аральским и Каспийским морями)… В городе Аркаиме, что южнее горы Атас на расстоянии 200 *км* у подножья горы Аркаим, там, где соединяются реки Оло Караган с Утяганом, был расположен караван-сарай или обсерватория – место пересечения дорог Кунгур-буги с Кюн-Уфу. Процветавший цивилизованный для своего времени город существовал ещё 2 тыс. лет до времен города Трои и прославился на весь свет своими бронзой, золотом, серебром и другими сокровищами Урала. Символ свастики, олицетворяющий воссоединение четырех частей света, эти две дороги Кунгур-буги и Кюн-Уфи, часто встречаются в украшениях Аркаима (журнал «Вокруг света», №3, 1989, С.36-41). Знамя этой дороги назывался, как уже было сказано, от слова ***болак*** ′синяя вода′ – ***флаг,*** и имел синий цвет; люди носили одежду преимущественно синего цвета.

Среди эпосов «Старшой Эдды» есть чудесная «Песнь о Хледе», ее во всех отношениях можно назвать чисто башкирским эпосом. Он замечателен еще тем, что там назван древнейший наш город Аркаим/Архейм.

В эпосе даны верные географические координаты древнейшего Внутреннего Башкорта со столицей город Аркаим (готы-усяргены), а где-то далеко на востоке на другой дополнительной северо-восточной развилине дороги Кунгыр-Буга находился Внешний Башкорт (печенеги-башкиры или гунны). Эта гунно-башкирская дорога протянулась, думается, от Аркаима по направлению через современных городов Омск – Новосибирск – Томск – Красноярск – Братск – Усть-Кут – Бодойбо – Алдан – Охотск – Магадан – Эленск – Уэлен и через нынешний Берингов пролив до земли Аляска (по-

башкирски Алыска ′идти очень далеко′) и дальше по континенту Северной Америки. На Аляске у Берингово пролива имеется гора Брукс (Буре-эсэ – Волчица) и река Юкон (Йыу-Кан ′вода-река кангинцев-башкир′); от Берингова пролива до залива Гудзон обитают коренные жители *атапаски* (ата-паски-р -- «отцовские башкиры», то есть приверженцы Отца Урал-батыра). Там же в мифе индейцев *каяу* (слово кая/каяк/кейек – значит волк; они, как и усярганцы, приверженцы волка-волчицы) повторяется сюжет о двух первородах-фратрий из башкирской писаной истории «Ахуале Сынгыз»: человеческая дева, оплодотворенная лучами Солнца, рождает близнецов, одна из которых превращается «в водного дракона» (Шульган!), а другой, превратившись на десять гор (Урал!), дает тем самым обиталище для людей племени *каяу*, родоначальник которых, как у башкирских *кипчаков*, был рожден из дупла дерева.

Южные соседи (китайцы) печенегов-башкир вдоль дороги Кунгыр-буга восприняли многое из их духовной культуры, вплоть до того, что первооснователем китайской государственности является северный «варвар» (печенег-башкир) Хуан-ди (Куандык?). Китайский мифический герой Паньгу, как и башкирский Имир, был рожден из Хаос-Мрака и имел, как и Энкиду-Урал, парные бычьи рога. Он жил на высокой горе из яшмы (Уральские горы!), а после смерти его тело дало начало, как и в мифах об Имире и Урал-батыре, мирозданию со всей живностью на земле; его дыхание превратилось в ветер и облаков, голос – гром небесный, левый (женская половина Имира!) глаз – Солнце-Мать, правый (мужская половина Имира!) – Луна-Отец, руки и ноги – четыре стороны света, позвоночник – пять высоких гор (Тора-тау, Шаке-тау, двуглавый Куш-тау, Юрак-тау?); кровь – это все реки, сухожилия и кровеносные сосуды – дороги на земле, мышцы – почва, волосы – звезды на небе, зубы и кости – драгоценные металлы и камни, сперма – жемчуг и яшма, пот – дождь и роса... – все точно так же, как и в эпосе «Урал-батыр». Ученые считают, что китайцам миф о Паньгу был внесен со стороны *(140:39)*, значит, от печенегов-башкир. Китайцы считали, что далеко на западной горе (Урал!) живут люди «с варварским одеянием» (башкиры!), которые поклоняются, как и написано у Ибн-Фадлана, *двенадцати великим богам (141:347).*

И так, дорога Кунгыр-Буга это есть «Кюн-Кара-Бага» ′Солнце Темное (т.е. Луна) Оберегающее′ – дорога Коровы-Луны.

Хочу уведомить еще вот о чем: современное понятие «океан» -- бескрайняя водная гладь, на которые выходили концы всех четырех дорог, в древности назывался *тиңһеҙ/тингхез* (теперь *диңгеҙ* – море) в значении ′необъятный, несравнимый′ и каждый обозначался общепринятым своим цветом (синий, темный, желтый, красный).

Дорогу Кунгыр-Буги на ее юго-восточной (синей) оконечности омывал Кук тингхез – Синий (Индийский) океан, а на северо-западной (темной) – Кара тингхез или Черный (Сев. Ледовитый) океан, реликтовым названием которого осталось там Карское (Черное) море.

Дорогу Кюн-Уфу на ее северо-восточной (желтой) оконечности омывал Хары тингхез – Желтый (Тихий) океан (имеется там реликтовое название – Желтое море), а на юго-западной (красной) – Кызыл тингхез – Красный (Атлантический) океан, осталось там реликтовое Красное море.

Указанным цветам соответствовали цвета флагов дорог и преимущественный цвет одеяния людей.

Дорога Кунгур-Буги имел символ в виде силуэта шестиконечной человеческой фигуры (голова – две руки – две ноги – фаллос=6) Урала-мужчины – шестиконечная звезда. Главных стражей этой дороги называли *Богатырь* – от слова Буга-тур ʹБык-турʹ.



Сверху вниз символы пра-предков: Имир, Шульган, Урал

Дорога Кюн-Уфи имела символ в виде силуэта пятиконечной человеческой фигуры (голова – две руки – две ноги=5) Шульгана-женщины – пятиконечная звезда. Главных стражей этой дороги называли *Витязь* – от слова Би-атас ʹглаварь – сын славного отцаʹ.

Символом всех восьми дорог, пересекающихся якобы на пупе Имира, служила восьмиконечная звезда. Все эти символы, в том числе Свастика, представлены как национальные орнаменты башкир.

В итоге получаем:

а) на восток до Желтого моря – т.н. Желтая дорога;

б) на запад до Красного моря – т.н. Красная дорога (общее название обоих – дорога Кюн-Уфе или Канифе);

в) на север до Черного (Кара или Карского) моря – т.н. Черная дорога;

г) на юг до Синего (Индийского) моря – т.н. Синяя дорога (общее название обоих – дорога Кунгур-Буга).

Столп Мира или Центр континента имел объединенный стяг с полосами всех четырех цветов всех четырех дорог, расположенные одна за другой сверху вниз в следующем порядке:

1. Желтая полоса;
2. Черная полоса;
3. Красная полоса;
4. Синяя полоса...

Все эти данные были почерпнуты путем глубокого комплексного изучения из кладези башкирской и мировой старины.

IV. Гимн наш по своему ультрасоветскому “стандартизацию” (мне так кажется) мог бы успешно обслуживать любую постсоветскую республику: в безликой безнациональной музыке нет теплоты и *моңа* для башкирской души. Сочиненный в содружестве двух доморощенных михалкова с регистаном текст тоже отдает казенной затхлостью и дешовой бравадой...

29.03.2011

Бөйөклөгө алдыбыҙҙа

Алтмышынсы йылдар аҙағында миңә СССР яҙыусыларының Ялталағы ижад йортонда сал сәсле украин әҙиптәре менән табындаш булырға яҙҙы һәм үҙ-ара дөйөм хәлдәрҙе байҡағанда шуларҙың йөрәк әрнеүҙәре үҙемдеке менән ҡушылып һулҡылданы: баҡтиһәң, башҡалабыҙ Өфөлә бер генә лә башҡорт мәктәбе булмағандай, уларҙың мәркәзе Киевта ла украинса уҡытыу бөтөнләй юҡ икән. Күңелде мәңге ҡанһыратҡан яра ине был: тимәк, үҙе -- баш, үҙе түш булараҡ хакимлыҡ ҡылыусы Коммунистар партияһы

программаһында, шулай уҡ СССР Конституцияһында милләттәрҙең сәскә атып үҫеше, һәр кем үҙенең милли телендә теләгәнсә аралашыу, белем алыу хоҡуғының ҡануни гарантияланыуы -- күҙ буяу, фәҡәт буш ҡыуыҡ ҡына! Башҡорт күңеле, кеҫәһендә партия билеты йөрөтһә лә, партияһының милләттәрҙе урыҫлаштырыу сәйәсәтен һис тә күтәрә алмай: уҡыу йәшенә етеп килгән улдарын һәм ҡыҙҙарын ул мотлаҡан үҙенең әсә телендә уҡытырға яҫҡана, әммә изге теләге ҡоро һөйләнеүҙән, зарланыуҙан уҙа алмай -- был юлда паритияның өлкә комитеты һәм КГБ ҡорған оторо кәртәләр ныҡ-каты, ҡаршы барыу ҡурҡыныс...

Тап ошо тынсыу мөхиттә йәндәребеҙҙе интектергес ҡара болоттар ярығынан бер яҡтылыҡ күренгәндәй тойолдо: Урта Азия мәктәптәрендә үзбәк балаларына үҙҙәренең әсә телендә физиканан һабаҡтар биргән мәғрифәтсе башҡорт уҙаманы Мөхәммәтғәли Тимерғәли улы Исҡужин ҡайтҡан, ең һыҙғанып түрәләрҙең ишектәрен ҡаға-ҡаға, Өфөбөҙҙә башҡорт мәктәбе астырыуҙы юллап йөрөй, тип ишеттек; күп тә үтмәй уның үҙен дә күрҙек. Ул саҡта мин "Һәнәк" журналы редакцияһында эшләй инем, Мөхәммәтғәли Тимерғәли улы мәғрифәтселек юлындағы үҙенең фекерҙәше, әрһеҙ ярҙамсыһы Иҙел Агишев менән бергә бүлмәбеҙгә килеп инде лә тәүге һөйләшеүҙә үк ышаныс ҡаҙанды. Тығыҙ һәм мыҡты буйлы, түңәрәгерәк мөләйем йөҙлө, һәр һүҙен үлсәп әйтә торған тыныс холоҡло, алдына алғандың осона сығырға ныҡышмал, аҡыллы-тәүәккәл, ҡыйыу уҙаман ине ул. Ошо сифаттары уға башҡорт теле тураһында ишетергә лә теләмәгән, ундай һүҙҙе ҡуҙғатҡан кешене саманан сыҡмыш зарарлы милләтсе һанаған хакимдарҙың бикле ишектәрен астыртып керергә, май үҫеп тығылған ҡолаҡтарына ил талабын ишеттереп туҡырға ярҙам итте. Бер үҙе генә түгел: үҙенең баяғы алмашсыһы Иҙел Агишев менән берлектә изге эшкә ул алдынғы зыялыларҙы һәм төрлө һөнәр эйәләрен йәлеп итте; күмәкләшеп бер төптән ҡуҙғалдыҡ та үҙебеҙ белгән ата-әсәләргә ойотҡо һалдыҡ, ғаризалар яҙҙырттыҡ. Был бигерәк ҡатмарлы ла, яуаплы ла, хәтәр ҙә хәрәкәтте, әлбиттә, бер нимәнән дә ҡурҡмай, бер эштән дә екһенмәй һәм арымай-талмай, Мөхәммәтғәли уҙаман ҡыйыу етәкләне.

Шулай итеп, 1967 йылда ҡалабыҙҙа башҡорт мәктәбе астыртыуҙы юллап йөрөй башланыҡ. Ғаризаны, йөҙ илле кеше (уҡыу йәшендәге балалы ғаилә башлыҡтары) ҡул ҡуйып, КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетына, БАССР Министрҙар Советына бер юлы юлландырҙыҡ. Йөҙ иллебеҙ исеменән вәкил булып кергән дүртебеҙҙе (И. Агишев, Ә. Вахитов, К. Әхмәтйәнов һәм эшсе синыф вәкиле Аҡбашев) КПСС өлкә комитеты сәркәтибе Т.И. Ахунйәнов иптәш эттән алып — эткә һалып һүгеп сығарҙы (Әнүр Вахитовты «һинең һымаҡ эскесегә тағы ни кәрәк?!» тип битәрләгән), артынса уҡ ҡаланың бөтә чиновниктары беҙгә ҡаршы аяҡланды. «Йөҙ илле ҡултамға — фикция. Һәр кем үҙенең аслан башҡорт мәктәбенә уҡырға бирәсәк балаһының исем-фамилияһын, тыуған йылын күрһәтеп ҡул ҡуйһын!» — тип талап ҡылдылар ҙа милләтселеккә һуҡтырып төрлөсә янанылар артабан. Һөҙөмтәлә шөрләгән ағай-эненең күп өлөшө тарҡалып, талап ителгән документҡа утыҙ кеше ҡул ҡуйҙыҡ; эйе, балаларыбыҙҙы асыласаҡ башҡорт синыфына уҡырға мотлаҡ бирәсәкбеҙ, тип гарантияланыҡ -- ул хәйерһеҙ заманда иһә ошо оторо ҡылығыбыҙ "эйе, беҙ -- башҡорт милләтселәре", тип ҡул ҡуйыуға тиң ине. Әрһеҙләнеп, рәсми тупһаларҙы шымартып йөрөй торғас, Красин урамындағы 91-енсе урта мәктәптә (элекке етем балалар йорто) башҡорт синыфы асырға рөхсәт бирелде. Буш бүлмә булмағанлыҡтан, беренсе ҡаттағы киң коридорҙың бер башын арҡыры бүлеп, синыф бүлмәһе яһанылар, парталар ултырттылар. Беренсе уҡытыусы итеп — Ураҡсина Венера Заһит ҡыҙы, тәрбиәсе итеп Ишемова Роза Ғаҡил

ҡыҙы тәғәйенләнде (был эшкә тәүәккәлләнеү өсөн уларға ла йөрәкле булыу кәрәк ине). Әммә ата-әсәләрҙең беренсе йыйылышында уҡ ҡатмарлыҡ килеп сығып, башланған эш тарҡала биреп ҡуйҙы: КПСС-тың ҡала комитетынан һәм ҡала советынан килмеш ике вәкил (береһе — Зәйнәп Перчаткина), башҡорт телендә уҡытыуҙың милләтселек шауҡымы менән ата-әсәләрҙе ҡурҡытып, күпселек ата-әсәләр үҙ ғаризаларынан баш тартып ҡайтып китте, баяғы утыҙҙан ун бер бала ғына ҡалды синыфта (шуларҙың дүртәүһе яҙыусыларҙың — Йыһат Солтановтың улы Сабит, Әнүр Вахитовтың улы Азамат, Булат Рафиҡовтың ҡыҙы Гөлсәсәк, Зөфәр Ғәбсәләмовтың ҡыҙы Әлфиә ине). Баштарыбыҙға таш яуһа ла сигенмәҫкә һүҙ ҡуйышып, беренсе уҡыу йылын башлап ебәрҙек. Зөфәр Ғәбсәләмовтың ҡыҙы атлап йөрөй алмаҫлыҡ булғанлыҡтан, Зөфәр уны көн дә эшкә барырынан алда мәктәпкә елкәһендә йөкмәп килтерер һәм эш араһында килеп алып ҡайтып китер ине.

Шуныһын да әйтмәй булмай: балаларын башҡорт синыфына уҡырға биреүҙәрен үтенеп-өгөтләп йөрөгәнебеҙҙә яҙыусыларыбыҙҙың байтағы төрлө сәбәптәр табып баш тартты. Мин үҙем, мәҫәлән, Шакир Янбаев менән Рәйес Низамовҡа морон төрткәйнем, тәүгеһе үҙҙәренең янындағы урыҫ-татар мәктәбен хәләл ефете «Хәдичә Ахметовна» һәм башҡа ата-әсәләр менән бергә яҡшы итеп йыһазлап-йүнәтеүҙәрен, шуға күрә ул яҡшы мәктәптән китмәйәсәктәрен белдерҙе (Хәдичә Ахметовнаға афарин! — ике улын да сусылдап һөйләшкән татар телле итеп үҫтерҙе). Рәйес Низамов ҡорҙашым иһә «Ағиҙел» журналының редактор урынбаҫары ине — милләтселектә ғәйепләп вазифаһынан алып ташлауҙарынан шөрләне. Ул ғына ла етмәһә, партия өлкә комитетына эш менән кергәнендә ул: «Һәнәк»тә эшләп йөрөгән Йыһат Солтанов башҡорт мәктәбендә киләсәктең милли кадрҙары тәрбиәләнәсәк», — тип әйтте, тип ысҡындырған икән, Т.И. Ахунйәнов иптәш тиктомалдан минең фәҡир шәхесемә иғтибарын йүнәлтеп: «Нинди адәм ул — төсенә ҡарағанда ҡырғыҙмы, әллә нинди дә булса башҡа берәй жоратмы?» — тип, башҡортлоғомдо белә тороп та, түбәнһетеүле һорашҡан һәм был ҡәләм эйәләре араһында таралды. Шулай итеп, хатта минең ҡиәфәтемдән дә йөҙ сыйыра башланылар...

Шул заманда башҡорт мәктәбе астырыуҙы юллап йөрөгән башҡа иптәштәремдең дә, бигерәк тә ҡуш йөрәкле башлығыбыҙ Мөхәммәтғәли Тимерғәли улының ниндәй ҡыйырһытыуҙарға, ауырлыҡтарға дусар булғанлығын был хәрәкәттең бер “рядовойы” Йыһат Солтановтың ҡайһы бер күрмештәренән шәйләргә мөмкин.

«Милләтсе» булараҡ махсус күҙәтеү ҡалпағы аҫтына алыныуым яйлап ҡына һиҙҙертә башланы үҙен. Әҙәм рәтле фатир алырға сиратым етһә лә, ҡала үҙәгендә төҙөлөп бөткән һәм вәғәҙә ителгән нәшриәт йортонан өлөш сығармай, ҙур ғына ғаиләм (алты йән) менән ҡаланың шайтан барып етмәҫ Черниковка осонда «Курочкина гора» биҫтәһендәге тар ғына һәм уңайлыҡһыҙ (кер йыуырға эҫе һыуҙы күнәкләп мунсанан һатып ала инек) ике бүлмәгә күсенеп китергә мәжбүр ҡылдылар. Ул яҡҡа троллейбус та, трамвай ҙа, ҙур автобустар ҙа йөрөмәй, йоҙроҡтай ғына машинаға әҙәм балалары, күҙҙәренә аҡ-ҡара күренмәй, бер-береһен тапашып илашып менә, илашып төшөп китә — шул шарттарҙа көн дә иртән баяғы беренсе синыфта уҡып йөрөгән балаҡайымды үҙем эшкә барышлай этләнеп һәм этләндереп алып китәм, алып ҡайтам... Әммә еште ҡыҫып түҙҙек, мәктәпте ташламаныҡ. Балалар башҡортса һөйләшеп, башҡортса уҡып, башҡорт булып үҫтеләр. Өс йыл араһында өс синыфҡа ырағас, Достоевский урамында төҙөлөп ятҡан урта мәктәпте 20-нсе һанлы башҡорт мәктәбе итеп юллап алдыҡ (инде өс синыф тәшкил иткән балалар шунда күсенде), бының артынан да шул уҡ Мөхәммәтғәли Исҡужин менән Иҙел Агишев уҙамандар күп йөрөнө. Иҙел Агишев менән мин уҡыу

корпусына өҫтәп уҡыусылар өсөн ятаҡ бинаһы төҙөтөүҙе һорап ингәнебеҙҙә Министрҙар Советы рәйесенең яңыраҡ эш башлаған урынбаҫары Рамаҙан ағай Өмөтбаевтың бик ыңғай һөйләшеүе хәтерҙә (ләкин бинаны нигеҙләргә ҡаҙып өлгөрткән котловандарҙы, күрше йорттарҙағы урыҫ-татарҙарҙың хөсөтөнә күрә юғарынан тыйып, күмдертеп ташланылар).

Оҙаҡ тилмереп көтөлгән, яңы һалынған 20-се мәктәбебеҙҙе, ниһәйәт, 1970 йылдың йәмле бер көнөндә асыу тантанаһына йыйылдыҡ, эргәбеҙҙә балаларыбыҙҙың ҡыуаныслы ауаздары гөр-килә, күптәребеҙҙең күҙендә шатлыҡ йәштәре мөлдөрәй. Төн ултырып яҙғайным -- «Бәхет һарайы» тигән шиғырымды трибунанан тулҡынланып уҡыным.

Мөхәммәтғәли Тимерғәли улы Иҫҡужиндың бәрәкәтле мәғрифәт нурҙары, билдәле булыуынса, бер бында ғына түгел, бөтә республикабыҙға яҡтылыҡ һәм яҡшылыҡ сәсеп таралды. Мәҫәлән, мин һәм минең ишеләр башҡалалағы ошо бер башҡорт мәктәбен астыртыу өсөн күпме тырышлыҡ күрһәтһә, беҙҙе әүҙем етәкләгән Мөхәммәтғәли уҙаман, һис бер ҡаршылыҡ алдында баҙап ҡалмай, арымай-талмай, ауырлыҡтарҙан зарланмай, башҡа ҡалаларыбыҙҙың һәм райондарыбыҙҙың юлдарын күп тапаны, оло башын кесе итеп, өйҙән-өйгә инеп, үҙҙәренең әсә теле барлығын хатта онота башлаған ата-әсәләрҙе балаларын башҡортса уҡытыуға, шуның өсөн төбәктәрендә башҡорт мәктәбе асыуҙы юллап ғаризалар яҙырға, ең һыҙғанып көрәшергә ышандырып күндерҙе, һөҙөмтәлә республикала бындай мәктәптәр бер-бер артлы ыраны. Ошо изге, ләкин хәтәрлекле юлында ул һис бер ҡурҡыу белмәне, үҙенең яҡты аңы, изгелекле күкрәге менән Башҡортостан мәғрифәтселегенә ҡыйыу юл ярҙы. Әгәр бөгөн республикабыҙҙа халыҡ мәғарифы өлкәһендә аҙмы-күпме ғәҙеллек еңә икән, -- был уның фиҙакәр көрәше, тынғы белмәҫ эшмәкәрлеге арҡаһында булды. Шуға күрә уҙамандың данлы исеме, һоҡланғыс образы быуындарҙың күҙ алдында һүрелмәҫлек кәүҙәләнергә хаҡлы. Башҡалабыҙҙағы ошо бөйөк мәғрифәтсе йәшәгән, ләкин игелекһеҙ килмешәк-большевик Цюрупа исеме менән аталған урамға М. Иҫҡужин исеме бирелһә, берәй мәғариф усағының алдына уның һәйкәле лә ҡуйылһа, тарихи ғәҙеллек тантана итер ине. Әммә уны күреп белгән инсандарҙың күҙе алдында ул әле лә теп-тере, шәүләһе сағыу нурлы.

15.11.2008

ЗАМАНАҒА ЯРАШЛЫ
(Ойоштороусылар ҡоро исеменән яңы ойошма хаҡында)

Һәр замананың үҙ яйы һәм яйлашҡан ҡанундары бар. Уларҙың Аллаһы Тәғәләнән үк бирелгәндәренән башҡаларын әҙәм балаһы үҙ аҡылы, намыҫы менән туҙға (ташҡа, мал тиреһенә, ҡағыҙға һ.б.) яҙған, туҙға яҙмағандары иһә мәңгелеккә инсандарҙың хәтеренә, күңелдәренә уйып һалынған һәм уларҙы үтәү изге һаналған. Халыҡ рухын нығытыусы ошо изге ҡанундар намыҫ, әхлаҡ, дин, тыуған ерендә һәм телендә һөйөү, тамырыңды ҡурсалау, башҡа ҡәүемдәр менән һыйышып йәшәү кеүек тормош әмәлдәрен быуындан-быуынға еткергән. Был яҙылған һәм яҙылмаған йәшәү ҡағиҙәләренең һаҡсыһы һәм бойомсолары – башҡорттарҙың аҡһаҡалдар ҡоро булған. Мәңгелек рухи ҡиммәттәрҙе халҡыбыҙ күҙ ҡараһындай һаҡлағаны, боҙмай тотҡаны өсөн дә дәүерҙәрҙең һәләкәтле афәттәрендә имгәнмәй, бирешмәй, юғалмай йәшәп килгән һәм киләбеҙ әлегәсә.

Туҙға (ә хәҙерге заманда хатта компьютерға һ.б.) мөһөрләнгән йәшәү рәүештәре заманаға ярашлы яңыртыла йәки замана елдәренә ылығып юҡҡа сыға, урындарын яраҡлы заңдар биләй. Әммә ятбауырлы ят яҡтарҙан юлыҡҡандары – башҡорт өсөн хәтәрҙәре, зыянлылары ла бар, рухыбыҙҙы муртайтыуға, илде маңҡортлаштырыуға юҫыҡландырылған улар. Былдай саҡта баяғы туҙға яҙылмаған, аҡһаҡалдар хәтере һаҡлаған мәңгелек рухи ҡиммәттәребеҙ ышанысһы таяныс.

Ун өсөнсө быуат башында гүзәл Урал тупрағына һәләкәтле татар-монгол яуҙары ябырылғанда ла, ун алтынсы быуат уртаһында төрлө тарафтарҙан яҫҡыныусы илбаҫарҙар ҡыҫымы көсәйгәндә лә рухыбыҙҙы баяғы-шул мәңге тере таяныс ҡурсалаған. Өлөштәргә бүлгеләнеп ҡанһыраған башҡорт илен уның аҡһаҡалдар ҡоро беркеткән, туплаған: заманаһына ярашлы берҙән-бер иң дөрөҫ юлды табырға -- дәүеренең ҡеүәтле лә, киләсәге өмөтлө лә тәҫмөрләнмеш Мәскәү (урыҫ) дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылырға тәүәккәлләгән. Һәм бабалар ике-ара шартнамәгә үҙҙәренең төп сәйәси талаптарын дөрөҫ итеп ҡуя ла белгән, ҡабул ҡылыныуына ла өлгәшкән: ҡәҙимгесә үҙ ере һәм үҙ теле, үҙ дине һәм үҙ идаралығы, үҙ ҡораллы ғәскәре һәм әхлаҡи ҡағиҙәләре башҡорттоң үҙ ҡулында ҡалдырылған. Аҡһаҡалдар ҡоро ошо хоҡуҡтарҙы хәтерендә юйылдыртмай тоторға, илдән дә оноттортмаҫҡа тейеш булған. Шуның өсөн дә башҡорт халҡы үҙенең азатлығын ҡурсалап быуаттар буйына көрәшкән...

Инде ғәзиз бабаларҙың Башҡортостанына ҡарап-ҡарайыҡ: ниндәй хәлдә ул бөгөн? Үҙҙәрен торғоҙоп ултыртһаҡ, танымаҫтар ҙа ине.

Эйе, егерме беренсе быуат башы Башҡортостаныбыҙ бер илдән дә кәм түгел – цивилизацияның барлыҡ сағыу ҡаҙаныштарын кәүҙәләндерә һымаҡ үҙендә, өҫтән генә күҙ һирпеп ҡарағанда. Ә төптәнерәк барлаһаҡ, хәүеф тә баҫа йәнде – "Геродот еҫе аңҡыған башҡорт" (Л.Н. Толстой һүҙҙәре) үҙенең шул башҡортлоғонан аҙлап-аҙлап ҡолаҡ ҡаға, маңҡортлоҡҡа әүшәрелә түгелме?

Ҡайҙа беҙҙең үҙ иркебеҙ менән Рәсәйгә ҡушылғандағы Иҙелдән – Иртышҡаса, Ҡар диңгеҙенән (Карское море) Каспий диңгеҙенәсә йәйрәгән тарихи аҫаба еребеҙ?!. Ул бит ҡуҙға һалынған ҡойҡа (йәки Бальзак әҫәрендәге шағырын күн) кеүек тартышып сөрөшкән; күпме аҫаба-башҡорттарын, үкһеҙ-етем балалар рәүешендә, сиктәребеҙ тышында -- Рәсәйҙең төрлө өлкәләрендә һәм республикаларында торғоҙоп ҡалдырған... Ә шулай ҙа был йөмләне яңылыш аңларға ярамай: бер кемгә лә территориаль дәғүәләр белдерергә, үҙ заманында икһеҙ-сикһеҙ һымаҡ йәйрәп ятҡан тарихи Башҡортостанды кире ҡайтарырға йыйынмайбыҙ һәм ул инде кәрәк тә түгел. Әммә ошо бөгөнгө сөрөш йөмһүриәтебеҙ сиктәренең эсендәге ергә бәйле аяныс хәлдәр борсоуға һала беҙҙе: хатта батшалар таныған һәм ҡағылмаған аҫаба биләмәләребеҙ ошо көндә ғибрәтле Межгорье ҡалаһы, Магнитогрск аэродромы, Уралдағы саңғы шыуыу тауҙары, хатта республикабыҙ юрисдикцияһынан сығарылған урмандарыбыҙ, йылға-күлдәребеҙ һ.б., һ.б. рәүешендә, федерация милкенә күсерелеп, ҡулдан ысҡына түгелме?.. Иң гүзәл тәбиғәт ҡосағындағы башҡорт ауылдары ҡорой – төрлө яҡтан ябырылыусы ҡомһоҙ-ҡороҡҡос килмешәктәр хужа була. Еребеҙҙең ҡара һәм һары алтындарын держава һемәге һурып алып киткәндән һуң иң ҡиммәтле байлыҡтарыбыҙҙың береһен тәшкил иткән башҡорт ҡарурманы ла инде башкөлләйгә федерация ҡулында. Бөгөн ғөмүмән, белгестәр әйтеүенсә, республика биләмәләренең ҡырҡ проценты ҡулыбыҙҙан ысҡынып, федерация милкенә күсерелгән, ә ҡалғаны ла халҡыбыҙ ҡулында түгел. Ныҡ үҫешкән химия, баҡыр сығарыу тармаҡтарының да төп табышы мәркәзебеҙ Мәскәү яғына шыла, тик ер-һыуҙарыбыҙҙы, һауабыҙҙы зәхмәтләгән үлемесле ағыуы ғына ҡала. Федераль үҙәк

ҡаҙнаһына дөйөм килемебеҙҙең етмеш ике проценты ҡырсып алынып торғанлыҡтан, тормошобоҙға ҡот ҡунмай, йәшәү сығанағыбыҙ Бальзактың баяғы шағырын күнеләй наҡыҫлана. Эш хаҡы түбән, ә аш хаҡы буй етмәҫлек юғары – күпселекте йонсота. Медицина ярҙамының иң заруры -- әҙәм ғүмерен һаҡлап ҡалыуға бәйлеләре ябайҙарҙың хәленән килмәҫтәй ҡиммәт түләүле; дарыу етештереүсе һәм һатыусылар монополияһы хаҡтар бысағы ярҙамында ауырыуҙарҙы тунай. Тиҫтәләгән йылдар буйы сиратта торған ерле халыҡ яңы төҙөлгән йорттарҙан фатир һатып ала алмай, ул йорттарҙа урлашып та алдашып байыған һәр төрлө хәтәр ҡәүем -- килмешәктәр төпләнә; шул уҡ бәндәләр етештереү сығанаҡтарын, сауҙа үҙәктәрен, ауыл хужалығы байлыҡтарын ҡомһоҙ ҡулдарына ҡармай, наркотиктар тарата, боҙоҡ әхлаҡтары менән йәштәребеҙҙе аҙҙыра. Һөҙөмтәлә илдә енәйәтселек, эскеселек, наркомания ҡолас кирә, ошоғаса күрелмәгән яман сирҙәр тарала. “Йәшел йылан” быуған ғаиләләр балаларын етем ҡалдырып тарҡала, аҙған йәш әсәләр үҙҙәре тыуҙырған сабыйҙарынан баш тарта, үлтерә, йәки тере килеш сүплеккә ташлай... Бәғзе берҙәребеҙ һаман бәхет эҙләп ситкә китә, ә ҡасандыр олаҡҡандарыбыҙ кире ҡайта алмай интегеп йөрөй, һөҙөмтәлә Башҡортостан республикаһында башҡорт халҡының йән һаны кәмей, ә был иһә башҡорттарҙы күрә алмаусы шовинист-экстремистарға республикалағы халыҡтарҙың йән һаны нисбәтенә бәйле яуыздарса сәйәси уйын ҡорорға мөмкинлек бирә. Төп халыҡтың үҙ ерендә ҡыҫырыҡланып көн күреүен мәғариф өлкәһе лә ғибрәтле сағылдыра: юғары белемлеләр нисбәте буйынса башҡорт халҡы Рәсәйҙең иң артта ҡалғандарынан – туваларҙан һуң 29-ынсы урында ҡалғый...

Көрәштәрҙә яулап алынған милли хоҡуҡтарыбыҙ ҙа баяғы ҡуҙға һалынған ҡойҡалай тартышып сөрөшә бирә. Рәсәй дәүләтенең үрҙән бойороп идара ҡылыу ҡануңдары нигеҙенә урыҫ түгел милләттәрҙең ихтыяждарын танымау, уларҙы сикләү йәки кире ҡағыу заңы һалынған һәм ул ғәҙәти тормошҡа әүерелгән. Юғарынан баҫым аҫтында республикабыҙ Конституцияһы ҡырылмаһа-ҡырҡ тапҡыр ҡырҡып-беселеп, фәҡирҙең ҡораҡ юрғанына оҡшап ҡалды, инде хатта үҙебеҙҙең Президентты ла үҙебеҙ һайлап ҡуя алмайбыҙ. Президентлыҡҡа күрһәтелеүсенең Башҡортостанда күпмелер йыл йәшәүе, башҡорт телен белеүе лә шарт түгел икән инде. Һәм, ғөмүмән, башҡорт теле үҙе баяғы ҡуҙға һалынған ҡойҡалай бит: бер яҡтан – яусыл “өлкән ағай”, икенсе тарафтан йолҡош холоҡло “игеҙәк туған” өтөп-умыра. Иблес арбаһына ултырғпан шундай ҡайһы бер даирәләр Мәскәүҙән, бигерәк тә Ҡазандан Башҡортостанға, башҡорт халҡына табаҡ-табаҡ ағыулы бысраҡ ауҙарыу, башҡорт мәҙәниәтенә яла яғып аяҡ салыу, уның тарихын танымау йәки һөмһөҙ үҙләштереү, фальсификациялап боҙоу шөғөлөн үҙҙәренә көндәлек кәсип ҡылған, ерле емерткестәр элементтар ҙа уларға ҡушылған. Ә үҙ еренең хужаһы булған төп халыҡ был йәһәттән һыу уртлағандай өнһөҙ; йә иһә өҙлөкһөҙ сәскә атмыш халыҡтар дуҫлығы тураһында сүбек сәйнәп күҙ йомоу, булыр-булмаҫ түрәләребеҙҙе ҙурлау, үҙебеҙҙе үҙебеҙ хуплау кинәнесе кисереп йоҡлайбыҙ кеүек...

Әммә шанлы бабаларыбыҙ замандарында илдең мәңге уяу аҡһаҡалдар ҡоро булған, керһеҙ намыҫ, һынмаҫ рухты йоҡлатмағандар улар; ялпынан тартынмайынса һәм хакимиәттән ҡурҡмайынса, илдәге иң киҫкен хәлдәргә ҡарата тос фекерен әйтергә йөрьәт иткән, түрәләргә тура ҡарап тура һүҙен күндергән. Бөгөн дә ил мохтаж ошондайҙарға.

Булмышыбыҙ ҡуҙҙағылай ҡыҙышҡан был ифрат ҡырҡыу һәм хәүефле заманала бабаларҙың һыналған йәмәғәт институты ҡабат тергеҙелергә, йәмғиәтебеҙҙә лайыҡлы урынын алырға тейеш, тип һанайбыҙ. Ул бөтә башҡорт халҡына, уның ойошмаларына,

дәүләт органдары ярҙамына таянып үҙаллы эш итә, “Башҡорттарҙың аҡһаҡалдар ҡоро” тип исемләнә.

20.03.2007.

Һәр кемгә лә кәрәкле

Һәләтле лә, егәрле лә йәш тарихсының яңы китабын (Азат Ярмуллин. Автономиялы Башҡортостан байрағы аҫтында. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәрҙәре хаҡында ҡыҫҡаса биографик очерктар. Өфө, 2009) алып шатлыҡ кисерҙем, сөнки Рәсәйҙең совет осоро тип аталған 70 йыл дәүерендә большевиктар режимы томалаған һәм томанлаған хәтеребеҙҙең кәрәкле бер сәхифәһе балҡып асылғандай булды.



Хәтер... Кешене Кеше иткән, милләтте Милләт иткән Хәтер...

Быуын-быуын бабаларҙың үткәндәре тураһында Хәтер һаҡланғанға күрә, шул Хәтерҙе артабан килер быуындарға аманатлап ҡалдыра алғанға күрә лә барлыҡка килгән Кеше, билдәләнгән уның Милләте. Барыһынан бигерәк, ул башҡорттоң — башҡорт булып ҡалыу, азатлыҡ өсөн сая көрәшеү һәм шул азатлыҡты алыу, һаҡлап ҡалдырыу Хәтере. Ошо бөйөк Хәтерҙе юйғандар юғала, онотҡандар онтала — тәүҙә Милләт булыуҙан, аҙаҡ Кеше булыуҙан да туҡтала. Шуға күрә лә халҡыбыҙҙың иң мәкерле дошмандары баҫҡынсыға башбирмәҫ башҡорттан хәтерһеҙ маңҡорт – умыртҡаһыҙ селәүсен яһарға ынтылды.

Дөрөҫ, 1917 йылғы революцияның тәүге көндәрендә үк большевиктар, «Рәсәй халыҡтарының хоҡуҡтары Декларацияһы»н иғлан ҡылып, «халыҡтар төрмәһе»нең (В.И. Ленин билдәләүе) емерелеүен — «Рәсәй халыҡтарының империя ҡыҫаһынан айырылып сығыуға һәм үҙ аллы дәүләт төҙөүгә тиклем ирекле үҙ билдәләнешкә хоҡуғы»н һөрәнләне, тик был фәҡәт күҙ буяу, быуаттар буйына иҙелеп йәшәгән, азатлыҡҡа һәм үҙ аллылыҡҡа сарсаған урыҫ түгел халыҡтарҙы алдап-йолдап үҙ яғына ауҙарыу, ҡыҙыл империя мәнфәғәттәрендә ҡандарын һәм йәндәрен файҙаланыу өсөн эшләнде. Сөнки «ирекле үҙ билдәләнеш» тураһындағы шапырыныу — ваҡытлыса ғына алдатҡыс сара, хәйләкәр балыҡсының ҡармаҡ осона элмеш улъяһы ине. Әммә яугир башҡорт халҡы ул улъяны, хәйләкәр балыҡсы һис кенә лә көтмәгәнсә, ҡармағынан айырым ҡарпып йотто — большевиктар теләгәнсә ҡағыҙҙа түгел, ә ғәмәлдә үҙ аллы (ерле автономиялы) дәүләтен дәррәү ҡорорға, дәүләтселлегенең төп нигеҙен — ҡоралды милли ғәскәрен төҙөргә өлгөрҙө, шул ҡоралды көсө арҡаһында совет хөкүмәте Рәсәйҙәге беренсе автономиялы Башҡорт республикаһын танырға мәжбүр булды. Ҡыҙыл режимды аҡ ғәскәрҙәр ҡаҡшатҡанда әмәлһеҙҙең көнөнән,

башҡорт ғәскәрен шуларға ҡаршы файҙалпаныу өсөн генә ҡулланылған ваҡытлыса сара ине был. Фронттарҙа еңеп баш-күҙ алғас та, большевиктар партияһы Башҡорт автономияһының башына етергә яҫҡынып, автономиясы башҡорттарҙы юҡ итергә тотондо, сөнки быға Рәсәй тарихында булмаған, башҡа халыҡтарға ла үҙаллылыҡ өлгөһө күрһәткән Башҡортостан — ҡыҙыл империя тәнендәге һыҙлатҡыс шырау ине, нисек тә уны һурып алып ташларға кәрәк ине. Йәш республиканың биш йыл (1917-1922) ғүмере ана шул «һурып ташлау»ға ҡаршы аяныслы-ҡырҡыу көрәшеп уҙҙы. Дәүләтебеҙҙе башлап төҙөгән Әхмәтзәки Вәлидовтан алып шул дәүләтселлекте һаҡлап ҡалыу өсөн 1920 йылғы милли-азатлыҡ көрәшен етәкләгән Сөләймән Мырҙабулатовҡа тиклем, һәм шунан һуң 1937 йылғы Сталин ҡырғынына тиклем арауыҡтарҙа бик күп ҡаһармандарыбыҙ йәндәрен аямай алышып ҡорбан булды, шулар арҡаһында бөгөн сәскә атҡан Башҡортостан Республикаһының тулы хоҡуҡлы аҫабалары булып йәшәйбеҙ. Әммә тарихи хәтеребеҙ камилмы, изге яуҙарҙа шәһит киткән батырҙарыбыҙҙың исемдәрен беләбеҙме, иҫтәлектәрен ҡәҙерләп һаҡлайбыҙмы?!. Дөрөҫөн генә әйткәндә, ошо көндә бәғзеләребеҙ тарихи ерлектән тайып, иҫәүән иҫәрғәптәргә әүерелеп бара, тиһәк тә хата булмаҫ. Сөнки бөтәбеҙ ҙә шул-баяғы 70 йыллыҡ большевистик идеология ҡорбандары: үткәндәребеҙҙең сағыу биттәрен, бөйөк инсандарыбыҙҙың исемдәрен телгә алыуҙан тыйып та, әһәмиәтен кесерәйтеп күрһәтеп тә, халыҡ өсөн баштарын һалған батырҙарыбыҙҙы «бандит», «ат ҡарағы», «дезертир», «контрреволюционер» кеүек ҡара тамғалар менән хурлап та киленгәнлектән, хәтерҙәребеҙ аҙлап-аҙлап юйылыу хәлен кисерҙе. Шул йәһәттән ҡарағанда, Азат Ярмуллиндың ошо китабы, ҡыҙыҡһынып һәм мауығып уҡылыуы менән бергә, ыуалыуға дусар ҡылынған рухыбыҙҙы яңыртыу, терелтеү көсөнә эйә тип һанайым. Күркәм шәхестәребеҙҙең ошоғаса билдәһеҙ йәки аҙ билдәле тормошо һәм яҙмышы документар нигеҙендә баҙыҡлап тасуирланған, күптәренең фотолары беренсе тапҡыр бирелгән; этап булырҙай ваҡиғаларҙы һәм уҙамандарҙың исем-фамилияларын, матбуғат баҫмаларының йәшәү осорҙарын сағылтҡан мәғлүмәттәр бар – бигерәк тә йәш быуын һәм ғөмүмән тарих менән шөғөлләнеүселәр өсөн бик файҙалы хеҙмәттәр.

Йыйынтыҡта халҡыбыҙҙың ысын ҡаймағын тәшкил иткән илле өс инсандың тәржемәи хәле бәйән ҡылынған; ул яҙмыштар шуныһы менән ғибрәтле лә аяныслы: бөтәһенең аҙағында ҡыҙыл режим тарафынан язалап йәки башҡаса үлтерелеү билдәһе тора – ил ҡаймағын ил өҫтөнән һөҙөп алып түгеү ошо булалыр...

Миҫал өсөн бернисә яҙмышты барлайыҡ.

Башҡортостан автономияһының ғына түгел, Рәсәй федераллығының да атаһы Әхмәтзәки Вәлидов ил-еренән ситләтелеп, яҡындарын бер күрергә зар булып, сит илдә ятып ҡала...

Сөләймән Мырҙабулатов, бер түгел ике тапҡыр репрессияға дусар ҡылынғандан һуң үлем язаһына тарттырылып, февраль селләһендә Мәскәү төрмәһендә өҫтөнә боҙло һыу ҡойоп ҡатырыла...

Башҡорт хөкүмәтенең бернсе рәйесе Юныс Бикбов шулай уҡ ике тапҡыр төрмәгә ултыртылып, Ҡарағанда ҡатырының ҡараңғы күмер шахтаһында һәләк була...

Башҡорт хөкүмәтенең бернсе сәркәтибе бөйөк шағир ат ҡойроғона тағып һөйрәтелеп, язалап үлтерелә...

Хәрби Шура рәйесе Әхмәтзәки Вәлидовтың урынбаҫары Илдархан Мутин һәм Башҡорт Хәрби-Революцион Комитетының рәйесе, РКП(б) ЦК-аһының һәм ВЦИК-тың Башҡортостандағы вәкиле Харис Йомағолов, атаҡлы сәрғәскәр Муса Мортазин,

“революция бишеге” Петроградты аҡ Юденич һөжүменән һаҡлап алып ҡалған Башҡорт дивизияһының комиссары һәм башҡорт мәктәптәре өсөн беренсе дәреслектәр авторы Нуриәғзәм Таһиров, РКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитетының беренсе башҡорт етәксеһе Әхмәҙулла Бейешев, таҫыллы хөкүмәт рәйесе Хафиз Ҡушаев һ.б., һ.б. барыһы ла төрмәлә атып үлтерелә...

Халҡыбыҙҙың азатлыҡ һәм үҙаллылыҡ өсөн дәһшәтле көрәше арҡаһында мөмкин булған бөгөнгө рәхәт тормошобоҙҙоң ысын ҡәҙерен белергә, яҡты киләсәгебеҙҙе фиҙакәр ҡурсаларға өндәй был китап.

15.01.2010

Р. Байымов тәнҡитенә ҡарата

1. К. Маркс, Ф. Энгельстең “Коммунистар партияһы манифесы” 1848 йылда ташҡа баҫылып сыҡҡан. Тимәк, “коммунист” һүҙе, тәҡитсем раҫлауына ҡаршы булараҡ, һис тә “һуңғыраҡ осор” ҡаҙанышы түгел.

Донъялағы күпселек сит ил марксистик партиялар ҙа ***коммунистар*** партиялары ине (ә большевик, йәки меньшевик түгел).

Үҙем (һәм башҡалар ҙа) партияла 20 йыл коммунист булып торҙом, 60-сы йылдар ахырында ошо әҫәремде лә коммунистар күҙлегенән ҡарап яҙҙым.

Милләттәр эше буйынса нарком Сталиндың коллегаһы һәм ярҙамсыһы С. Диманштейн 1920 йылдың 6 сентябрендәге билдәле тезистарында яҙа: “***Башҡорт коммунистарының*** Вәлидов яҡлылары төрлө категорияларға бүленә...”

Билдәле коммунист-палач В. Поленов, Тамъян-Ҡатай ревкомын төҙөргә һәм шул ревкомдың рәйесе булырға ебәрелгәс, кантондан хисап бирә: “...урындағы ***коммунистик*** ячейка комитеттарын йыйыҙым... Заводтарҙың ***компартиялары*** Үҙәк Бюро фекерҙәре менән тулыһынса килештеләр һәм беҙҙең бөйөк эшкә үҙҙәренең иң шәп ***коммунистик*** көстәрен бирергә ризалаштылар... Ҡағының ышаныслы ике ***коммунисы...***” һ.б.

“Кулак”ты ла һуңғыраҡ осор “емеше” тип әйтеп булмай – 1918-19 йылдарҙағы Ленин әҫәрҙәрен ҡарағыҙ (мәҫәлән, ошо уҡ ҡулъяҙманың 110-сы битенән).

“Коммунист” тигән фильмдең булыуы ла әҫәремдең шулай аталыуына ҡамасауламай, сөнки мин уны фильмдең ҡуйылыуы менән бер үк осорҙа, йәки унан да алдараҡ яҙғанмын, исемде лә, фильмде ҡарап түгел, ә йөрәгем ҡушыуы буйынса биргәнмен.

2. Татарса һөйләү күберәк, тигәне менән дә килешмәйем – бөтәһе лә урынлы һәм тейешле урында (әгәр төптәнерәк уйлап ҡараһаҡ), реаль тормошто сағылдырыу менән бергә хикәйәләүгә күпмелер колорит та өҫтәй, йәнләндерә.

Шулай уҡ был биҙәкләүҙе ниндәйҙер сәйәси йәки милли яҡлап тамғаларға маташыу ҙа дөрөҫ түгел. Заманының тарихи документтарын күберәк уҡыған, шулар заңында һуғарылып йәшәгән әҙәм ундай һығымта яһамаҫ.

3. Жанрҙы билдәләү мәсьәләһен редакция хәл ҡылыр, ләкин “роман” көйөнсә ҡалдырырға, ҡатландырмаҫҡа ине.

4. “Метафоралар”ҙың артыҡлығын күрмәйем.

Сәлимйән Мырҙағолатовтың прототибы Сөләймән Мырҙабулатовты Сталин, тап шул осорҙа түңкәрелеш (переворот) әҙерләүсе партия етәкселәренең береһе булараҡ, белгән һәм иҫәптә тотҡан, сөнки һалдат С. Мырҙабулатов партия үҙәк комитетының

фронт менән элемтәләүсе йомошсоһо – “рассыльный”ы булған. Был хәл текста ла асыҡ әйтелә.

“Ярты саҡрым алыҫлыҡта ҡасып тәмәке тартып ултырыусының ыҫынан аллергия ҡубыуы” ла ауылыбыҙҙағы ысын хәл; ә әҫәрҙә тап беҙҙең тарихи ауыл, тарихи кешеләр, ваҡиғалар һүрәтләнә. Мәҙрәсәле, ахунлы ауылда күберәген сафлыҡ хөкөм һөргән, махрасы бер генә бәндә лә халыҡ күҙенә дегәнәктәй ҡаҙалған.

5. Редакция исеменән “кәрзин” яҙыу тәҡдиме менән килешәм.

16.09.2008

“Ағиҙел”гә. Ғәлим Хисамовтың “Аһура Мазда” тигән тарихи романы (164 бит) тураһында (уҡыусы кәңәше рәүешендә)

Тәжрибәле ҡәләмдән ыҡсым, шыма яҙылған (тел-стилгә бәйле ваҡ-төйәк иҫкәртеүҙәремде текст ҡырында билдәләй барҙым); күпселекте тәшкил итмеш һәм ҡыҙыҡлы сюжет артынан ғына ҡыуалаусы талымһыҙ-ялпы уҡыусыға иҫәп тотҡанда, ошо көйөнсә лә ташҡа баҫырлыҡтыр -- төйөр-тайырҙары менән ҡуша иҫе китмәйенсә йотасаҡ. Һәр хәлдә был яңы әҫәр жанрҙың тематик даирәһен киңәйтер, уҡыусының тарихи аң кимәлен дә тәрәнәйтер. Әммә бер ус ҡына булһа ла зыялыларыбыҙ бар, улар әле ишәйеү-артыу өҫтөндә -- киләсәктә, Хоҙай Бабай бойорһа, төп ҡулланыусы булып шулар ҡаласаҡ; бына шул саҡ әлегәсә күҙ йомоп ҡына үткәргән “төйөр-тайыр”, етди етешһеҙлеккә әүерелеп, өҫкә ҡалҡып сығасаҡ та, бер авторҙы ғына түгел, ә дөйөм жанрҙы ла биртендереүе ихтимал. Сөнки алдыбыҙҙа тарихи жанрға янаған хәүефле хәл -- үҙ-ара меңәрләгән йылдар арауыҡлы дәүерҙәр буталышы...

Әйтәйек, б.э. тиклем XVII быуатта йәшәгән реаль-тарихи герой Сураштора -- Заратустраның көндәлек тормошонда күп быуаттар һуңғыраҡҡы тарихи шәхестәр, ваҡиғалар бермә-бер аралаша (фантастик әҫәр түгел дәһә!), ә был иһә һәйбәт әҙәби туҡымаға һәр төрлө яһалмалыҡ, ҡытыршылыҡ, аҡланмаған раҫлау-фараздар керетә.

Билдәле булыуынса, пәйғәмбәр-реформатор Заратустра үҙебеҙҙең Иҙел -- Урал арауығында тыуып үҫкән, иҫке диндең ҡанундарын ныҡ үҙгәртеп яңы дин (зороастризм) ҡорған тарихи шәхес, автор быны яҡшы белә. Һәм уның бөгөнгө башҡорттарға ла аңлайышлы башҡорт телендә һөйләшкәнлеген дәлилләүсе изге тауҙарыбыҙ бар: Заратустраға тиклемге үк тәүдинебеҙҙең әҙәми кәүҙәле Дәү Хоҙайы Имирҙың тән ағзаларының тап башҡортса исемләнеше менән тап килә уларҙың аталышы (был хаҡта күп яҙылды). Йәнә килеп Асылыкүлебеҙ ярындағы зороастризм изге ҡорамының яҫы ҡая битендәге иң иҫке ырын яҙыулы текст та тап башҡорт телендә уҡылды (был хаҡта ла автор үткән быуаттағы көндәлек матбуғаттан беләлер). Ә ниңә һуң Заратустраның доғалыҡтары Авеста, Ригведа башҡорт телендә түгел, тип һораһағыҙ, сәбәптәре бик ябай: зороастризм Уралда шытып сығып, Һиндостан субконтинентында сәскә атҡанлыҡтан, унда киткән башҡорт теле урындағы аборигендар теле менән аралашып, меңәр йылдар һуҙымында уҡмаш тел -- санскрит (нигеҙендә башҡорт теле ята) барлыҡҡа килгән; тәүге башҡортса доғалыҡтар меңәр йылдар һуҙымында ауыҙ-телдән быуындан-быуынға күсерелеү, һәр төрлө тәржемәләнеүе арҡаһында тәүге хәлен юғалтып, б.э. III -- V быуаттарында ғына баяғы санскрит яҙыуында теркәлгән, шуға күрә ундағы хоҙайҙарҙың, кешеләрҙең исемдәре лә тәүге башҡортлоғон юйып үҙгәргән. Автор иһә шуларҙы иҫәпкә алмай, гәрсә романында Заратустра ғүмеренең Урал (башҡорт) осоро

тураһында яҙһа ла, әҫәрен тоташлай шау-санскрит исемдәре һәм терминдары менән тынҡыслап, ерлек тойғоһон юғалта. Һөҙөмтәлә ул, теләйме-теләмәйме, төркилекте цивилизацияның иң түбәнге баҫҡысына бырағтырып инҡар итеүсе расист-европацентристарҙың һәм шуларҙың сәйнәп ташлаған сүбеген көйшәүсе бер килке башҡорт "белгес"тәре ыңғайынан ихлас юртаҡлап, кешелек донъяһы мәҙәниәтен тыуҙырыуҙа ҙур өлөш индергән Урал аборигендары (тимәк, башҡорттар) "иран телле" булған, тимәккә бара, буғай... Сетерекле концепция эҙемтәләрен бирә, миҫалдарҙы әҫәр биттәренсә барлай барайыҡ.

3-өнсө б. Түрә-ҡара теҙеменә ҡараған терминдарҙы (хан -- ҡаған -- албашҡурт -- раға -- рабаға) ниңә сал-замандан килә-яткан үҙебеҙҙекенсә алмаҫҡа: ҡаған -- хан -- сәрғәскәр (цесарь, царь, сэр, кайзер) -- бәк (маг, бей, бай) -- әжерсе (жрец)...

10-ынсы б. Рабаға әйтә: "Кешегә исем бер генә бирелә һәм ул йәне күктең етенсе ҡатына күтәрелгәнгә тиклем үҙгәртелмәй".

Әммә, киреһенсә, бабаларыбыҙ (төркиҙәр) тыуғандан -- үлгәнгәсә әллә нисә исем төрләндергән, -- ғөмүми билдәле хәл.

23-өнсө б. Автор һауманы (соманы) "һуйма" тип ала һәм уны Заратустра исеменән ләғнәтле золомдар исемлегәнә теркәй. Тик... мал бағыусылар тормошондағы һаумал-ҡымыҙ (сома), ерекмәндәр ғәмәлендәге ҡомалаҡлап әсеткән йөҙөм (шарап), арпа (һүрә -- һыра) һуттары зараостризм динендәге иң изге эсемлектәр -- ҡорамдарҙа табыныусыларҙың ялбарыуҙарын Аһура Маҙаның үҙенә ирештереүсе ләһә!

"Гат"ты (яҙыу тигән һүҙ) "Ҡат" тип түгел, ә "Хат" (шул уҡ яҙыу) тип алыу ҡулайлыраҡтыр.

25-енсе б. Заратустра үҙе ҡорған диндең изге йолаһына -- Көнгә һәм Айға арнап ҡорбан салыуға (мал итен яндырыуға) ҡаршы сыға, үҙ диненең шул йоласыларын "вәхшиҙәр" тип ләғнәтләй (үҙен-үҙе ҡамсылаймы?..)

76-нсы б. "Тирөй -- сардарҙарҙың яуҙа йөрөткән, тире менән көпләнгән күсмә өйө. Һуңынан уны "тирмә" тип әйтәсәктәр", -- ти. Ләкин: Тор-оба (Хоҙай йәки түрә өйө) -- торба -- төрбә -- төрмә (терем) -- тирмә.

91-енсе б. "Һыр йылғаһы Яйыҡҡа ҡойған ерҙән"... Һыр (Сыр-дарья) -- Арал диңгеҙенә, Яйыҡ -- Каспийға ҡойғанлығын яңылыштырған.

92, 93-өнсө бб. Тарихи Иран дәүләтенең хасил булыуын (б.э. III быуат башы) әллә ҡасанғы Заратустра дәүеренә (б.э. тиклем XVII быуат) ҡайтарып ҡалдыра. Әммә Иран тәхетен бит "Ир" ләҡәпле башҡорт батыры Артыш-Ир ("бөрйән" түгел, ә "бер-йән" ырыуын башлаусы Күсәк-бей) беҙҙең эраның 224 йылында нигеҙләй. Аңлашыла ки, Иран (Ир иле) төшөнсәһе лә ҡуша моронлай, Туран иһә сал-борондан уҡ йәшәп килгән. Иран һәм Туран -- быуаттар буйына ҡан дошман, ә автор уларҙы йән дуҫтар итеп күрмәксе.

96-нсы б. "Туран ханы Ваһшасты"... Тарихи Артыш-Ир (Күсәк-бей) заманында Туранды тарихи Бәксәсән етәкләгән.

Туран иле, Туран ханы тураһында әҫәрҙең тәүге биттәренән үк әшкәртергә кәрәк ине (ваҡиғалар бит Туран ерендә бара!), юғиһә был ҡап-уртала ғына ҡапыл моронлай.

122-нсе б. "Уаһы Ман" ти, Ригведала ул хоҙай исеме Баһуман (Аҫылғужа Баһуманов тигән ҡәләмдәште хәтерләгеҙ).

123 -- 124-енсе бб. Заратустра кисергән дәһшәтле һынауҙарҙы реаллектән сигертеп, йә -- төшөндәге, йә мәреткә киткәндәге һымағыраҡ итәһе ине, юғиһә шыр-әкиәткә әйләнә.

154-енсе б. “Маздаға кәрәккән берҙән-бер ғәмәл -- ут яндырыу, ул беҙгә биргән ***бөрйән*** утын һүндермәү”, -- тип әйтелә, шул рәүешле заманалар һәм этнонимдар бутала. Сөнки хәҙерге “бөрйән” (бүре-йән, бүре-әсәнән таралған тоҡом) тип йөрөтөлгән ырыуыбыҙ “бер-йән” (ырыу ҡырылып бөткән саҡта яңғыҙы тере ҡалмыш бер генә йәндән таралған тоҡом) булған, йәғни “бер-йән” Артыш-Ир йәки Күсәк-бей нәҫеле; ә сал-боронғонан уҡ билдәле “бөрйән (бүре-әсән -- бүрсән, бөржән, бөрйән, бүрес, перс, прус, бурһун-бургунд) -- үҫәргәндәр, тигән һүҙ.

159-ынсы б. “Иранға Бөрйән Миһырбандан ут алып барырға рөхсәт ит”, -- тип үтенә Заратустра. Туран иле Уралда бындай исемле ҡорамдың булғанлығы билдәһеҙ, әммә “Бирджан” (“бер-йән”, ә “бөрйән” түгел!) исемле ҡорамдар Һиндостан субконтинентында ҡоролған һәм һаҡланған, “Бажгир”, “Бажгирд” (Башҡорт) тигәндәре лә бар. Ошо “бер-йән” ҡорамдары, күренеп тора, Сураштора -- Заратустраны тыуҙырмыш бик боронғо дәүер үҫәргән-бөрйәндеке булмайынса, шул тупраҡта Иран тәхетен нигеҙләүсе баяғы Артыш-Ирҙең (Күсәк-бейҙең) “бер-йән” ырыуына арналмыш ҡомарҡыларҙыр һәм утты ла улар Уралдан күсермәгән, ә үҙҙәренең ерендә тоҡандырған. Хөрмәтле авторыбыҙ ҡайһылыр С. Ғәләмов һәм уға эйәреүсе Б. Рафиҡовтар уйлап сығарғанды һис бер нигеҙһеҙ ҡабатлай.

160-ынсы б. Текстан күренеүенсә, баяғы изге утты Бәктора (Бактрия) иленә илтмәккә Асылыкүлебеҙ ярындағы баяғы башҡортса уҡылмыш ырын ташлы Анаһөтө (Анахита) хоҙайбикә изге ҡорамынан алалар; автор иһә ул утты, өҫтәрәк әйтелгәнсә, “Бөрйән Миһырбан уты” тип атай...

Шуныһын да әйтәйек: Заратустраның тыуған иле Уралдан ситкә олағыуы автор һүрәтләгәнсә һил генә шарттарҙа бармай, ә киреһенсә: реформаһы менән тәүдин ҡанундарын боҙоп, Арҡайымға барып төпләнмеш Заратустраны һәм уның ярандарын тәүдин пәйғәмбәре Муса хәҙрәт етәкселегендәгә ғәскәр тамам ҡыйратып, Арҡайымды ҡабат мәңге ҡалҡынмаҫлыҡ ҡылып ер менән тигеҙләй, кешеләренең күпселеген ҡырып ташлай; Заратустра үҙе иһә яҡындарын алып Бәктораға ҡасырға, шунда үҙенең дин үҙәген ҡорорға мәжбүр була.

Романды ташҡа баҫыр алдынан әле өҫтә күрһәтелгәндәрҙе иҫәпкә алыу-алмау, әлбиттә, авторҙың һәм редакцияның ихтыярында. Һәр хәлдә лә әҙипкә аҡ юл теләйем.

29.11.2008

“Коммунист”ҡа ҡарата авторҙан аңлатма

1. Заманаһына күрә, был романды яҙғанда уҡ цензуранан үтерлек итеп әтмәләргә тырыштым, машинкаға күсерер алдынан үтә киҫкенлектәрен алып ташланым, ә шулай ҙа... Башҡортостан Яҙыусылар берлегенең проза секцияһы ултырышында башҡалар менән бергә «Коммунист»ҡа ҡарата ыңғай фекер әйткән рәсми кеше Әсғәт Мирзаһитов (“Ағиҙел” журналының баш редакторы, аҙаҡ оҙаҡ йылдар буйына Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе -- әҙиптәр яҙмышын коммунистик идеологияның “кыл иләг”енән үткәреп хәл ҡылырға күнеккән партия функционеры), бара-тора, 180 градусҡа боролдо ла: «Повестә тасуирланған 1920 йылғы баш күтәреү — бөтә Башҡортостанға һәм башҡорт халҡына хас күренеш түгел, ә әҙәби әҫәр объекты булырға лайыҡһыҙ үтә локаль эпизод ҡына ул», — тигән үлтергес рәсми һығымта бирҙе; шуның менән мин совет

хакимиәте өсөн һис бер әһәмиәтһеҙ һәм зарарлы эш эшләп маташыусы насар уйлы (йәғни милләтсе) бер авторға әйләндем; былдай нәмәне матбуғатта сығарырға һүҙ ҙә булырға тейеш түгел, тигәнгә ҡайтып ҡалды. Дөрөҫ, быны менән ризалашмайынса: -- "Ул ихтилал, ун өс кантонлы республикабыҙҙың ун берендә уттай дөрләгәнлектән, һис тә локаль түгел, ә асылда автономияны юҡ ителеүҙән ҡурсалап ҡалыусы *милли хәрәкәт* булған", -- тип ҡарыулашып, шул ваҡыттағы партия өлкә комитетының милли мәсьәлә буйынса IV өлкә партконференцияға еткергән тезистарынан: "Национальный вопрос имеет свой особый характер в Башкирии... Башкиры, пережившие всю тяжесть гнета царей, много раз восставали против них и каждый раз подвергались массовой резне и уничтожению. Поэтому всякое вооруженное выступление башкирской массы во имя завоевания своих прав, прав на самоопределение, нельзя считать случайным явлением, и это отнюдь не доказывает их контрреволюционных стремлений", -- тигән баһаны килтереп ҡараһам да, ярҙам итмәне һәм был хәл үткән быуатта үҙгәрмәне... Әҫәр аҫтындағы даталарҙан күренеүенсә, ҡулъяҙманы быйыл ҡабат ҡараштырып, теге саҡта алып ташланған эпизодтарҙың ҡайһы берҙәрен тергеҙҙем, стилен дә шымартҡыланым.

2. Ваҡиғалар һәм персонаждар документаль теүәллектә сағылдырылһа ла һәм күп документтар файҙаланылһа ла, художестволы әҫәр был. Шуға күрә бер килке геройҙарының тормоштағы ысын исемдәре саҡ ҡына үҙгәртеп бирелде: Сәлимйән Мырҙағолатов – прототибы Сөләймән Мырҙабулатов; Әхмәтзәкир Йәлитов -- Әхмәтзәки Вәлидов; Шаһизада Бәпесев – Шәйехзада Бабичев һ.б.

Төтөн томалауында

Был мәҡәләне ваҡиғаларҙың эҫе эҙенән ҡалышмайынса яҙһам да, үҙ ваҡытында матбуғатҡа сығара алмауымдың, әле килеп, һуңлабыраҡ булһа ла, сайтым аша йәмәғәт иғтибарына ирештерергә ынтылыуымдың сәбәбе бар.

"Башҡортостан" гәзитенең 2007 йыл 10 май (№86) һанындағы "Тарих дөрөҫлөк талап итә" тигән бик ғәҙел рубрика аҫтында "Ҡыҙыл Байраҡты кем ҡотҡарған?" исемле мәҡәлә сыҡҡайны, унда 1943 йылдың февралендә 112-нсе (16-нсы гвардия) Башҡорт атлы дивизияһының немец-фашист илбаҫарҙарының тәрән тылына рейды ваҡытындағы ҡыйралышта дивизияның яугир Байрағын "ҡотҡарыусы"ны эҙләп табыу маҡсаты көн үҙәгенә ҡуйылған. Автор ҡәләме башлыса ике ветеранбыҙ тирәһендә урала, тик уларҙың икеһе лә мәрхүм инде. Һәм мин әруахтарын борсомаҫ та инем, әгәр ҙә ки мәҡәләлә береһе лайыҡһыҙ шөһрәтләнеп, икенсеһенә шулай уҡ лайыҡһаҙ ҡара тап яғылмаһа. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡанлығы өсөн генә лә һәр икеһе хөрмәткә лайыҡ булғанлыҡтан, был урында исемдәрен атамай, элекке хәрби дәрәжәләре буйынса береһен -- Майор, икенсеһен Лейтенант тип аламын.

Эш шунда: дәһшәтле рейдтың башынан алып аҙағынаса дивизияның политбүлек башлығы һәм дошман тылына тәрән рейд ваҡытында ғәмәлдә бер юлы дивизия комиссары вазифаларын башҡарған Майорҙың һуғыштан һуңғы билдәле хәтирәләрендә дивизия Байрағына бәйле кес кенә эпизод бар, әммә унда, Байраҡты "ҡотҡарыу" тураһында түгел, ә үлемесле бәрелештә уның рухландырҡыс роле хаҡында баҫымлыҡлы һүҙ бара. Билдәле булыуынса, рейдта ҡатнашып иҫән ҡалған иң күренекле ветерандарыбыҙ алдында һис ваҡытта ла "кем ҡотҡарҙы?" тигән һорау торманы, сөнки быға сәбәп тә, урыны ла юҡ ине: ул дәһшәтле яу ҡырында дивизияны үҙенән башҡа һис

кем ҡотҡармағандай, яугирҙәребеҙ сафында яугирҙәрсә елберҙәп барған һәм ҡамауҙы бергә ярып сыҡҡан Байраҡты "ҡотҡарыу" тураһында ла һүҙ сирытыу булманы. Шуға күрә теге мәҡәлә бераүҙәргә йөйһөҙ урында йөй эҙләү йәки асыҡ ишекте тибеп асырға маташыуҙай күренһә, бәғзеләргә сәбәпһеҙҙән "ҡараҡтың бүрке яна!" тип һөрәнләүҙәй тойолдо, хатта күҙҙәрҙе томалағыс төтөнө лә килгәндәй ине; тик был төтөн, аяныс! – кемдеңдер кәкре мөрйәһенән түгел, ә ҡайһы бер уйҙырмаларға ихлас ышанып барыусан хөрмәтле ҡәләм эйәләренең ҡәләменән таралды...

"Бирәм тигән ҡолона -- сығарып ҡуйыр юлына", тигәндәй, иҫ китмәле хәбәр көҫәп ҡолаҡтары нык ҡарпайған бер журналисыбыҙ ауылдағы кәйефле сәй мәжлесендә ниндәйҙер бер аҡһаҡалыбыҙ ауыҙынан баяғы рейдтан сыҡҡан саҡта "дивизия Байрағын ҡотҡарыусы батыр" тураһындағы сағыу улъяға юлығып, ҡаһарманды эҙләп тапҡас, һемәйеберәк ҡала: баҡтиһәң, ул хөрмәтле ветеранға, дивизияның түгел, ә "эскадрон флагын ышанып тапшырғандар" икән. Ныҡышмал журналист егәрлелеге арҡаһында икенсе бер риүәйәт геройының да "ҡотҡарыу" ҡаһарманлығы һабын ҡыуығылай һытыла. Әммә геройҙы эҙләп табыу, гәзит уҡыусыларына сенсация яһау теләге тынғы бирмәгәс, осло ҡәләмле эҙәрмәнебеҙ китапханаға инеп, үҙенә күрә ышаныслы эҙҙәр тупланмаһына ("Слава башкирских конников". Уфа -- 2005) юлыға ла ошо китап биттәренән "ҡотҡарыусы" *Лейтенантты* эҙләп табып, дивизия әләмеләй күккә сөйөп, берынғайҙан баяғы һуғыш хәтирәләре авторы Майорҙы пыран-заран килтерә, сөнки әле телгә палынғпан китапта, ысынлап та, тап шулай раҫлап яҙылған. "Һәй афарин, осло ҡәләм, ғәҙеллек ҡурсаусыһы!" тип алҡышлар инек тә бит, әгәр ҙә ки хитапнамәнән күсерелгән мәғлүмәттәре хаҡ булһа...

Ҡоро ҡалаҡ ауыҙ йырта, тигәндәй, ҡаһарманлыҡ ҡиссаһын документтар ярҙамында барлайыҡ.

Китаптан ҡарағанда (135-енсе бит), *Лейтенанттың* (ул саҡтағы кесе лейтенанттың) Башҡорт дивизияһына тәүбашлап килеүе, имеш, яугирҙәребеҙ Брянский фронтта һуғышҡан сағына (1942 йылдың йәйе) тура килә, артабан уның Сталинград янындағы алыштарҙа ҡатнашыуы тумбытыла. Ә ғәмәлдә геройыбыҙ тәрән тылдан дивизияға 1943 йылдың февраль башында атлыларыбыҙ рейдҡа инеп китергә бер аҙна ҡалғас ҡына ПТР взводы (китаптағылай атлы разведка взводы түгел!) командиры сифатында ебәрелә; шуға күрә рейд алдындағы ифрат ҡатмарлы, көсөргәнешле бер-нисә көн араһында яңы килгән кесе командирҙы Шайморатов шәхсән белеп тә өлгөрмәгәндер, быныһы -- бер. Һәм, икенсеһе, бәҫле йыйынтыҡта (137-нсе бит), ауыҙ тултырып, *Лейтенант* Бөйөк Ватан һуғышының еңеүле аҙағынаса һуғышып барып етте, тип ҡупырайтыу ҙа килешмәй, сөнки бит ул, ауырыуы сәбәпле, 1944 йылдың 31 авгусында уҡ хәрби хеҙмәттән бушатылып иленә ҡайтарылған.

Китапта *Лейтенант* тураһында: "Вблизи Шаймуратова... находился довольно часто: получал боевые задания по разведке, о результатах докладывал лично" (136-нсы бит), -- тип мөһим мәғлүмәт бирелә. Билдәле булыуынса, ундай яуаплы вазифаны (разведка взводы командиры) рейдттың башынан аҙағынаса өҙлөкһөҙ 294-енсе полктың разведвзвод командиры өлкән сержант Мирза Ғайсаров уҙаман башҡара, һәм ул туранан-тура дивизияның разведка башлығы Гуловҡа [Миңлеғоловҡа] буйһынған (Йыһат Солтанов. Башҡорт дивизияһы. Төрлө мәғлүмәттәр. Өфө -- 2007; 168 -- 186-нсы биттәр). Ләкин шуныһы сәйер: сая "разведчик" (йәки башҡа вазифалылағы) *Лейтенантты* утты-һыуҙы кискән ветерандар араһынан Ғайсаров та, башҡалар ҙа һис кенә лә хәтерләмәй... Хәйер, рейдтан сығыуға алтмыш ике йыл үткәндән һуң ғына ҡапыл хәтере яңырған һәм китапта

Лейтенанттың “ҡотҡарыусы”лыҡ дәғүәһен тотанаҡлап һүҙ ҡыҫтырған элекке сержант Г.Г. Нагаев ҡына, “ул хаҡта мин әйткәндәрҙе бер ваҡытта ла ҡабул ҡылманылар”, тиеберәк һис нигеҙһеҙ зарлана. Нигеҙһеҙ, сөнки Майор хәтирәләре яҙылмаҫы борон уҡ, 1949 йылда, партия өлкә комитеты һәм Хөкүмәтебеҙ Нагаев шаһәҙәтнамәһенең башҡорт һәм урыҫ телдәрендәге текстарын ихлас ҡабул итеп, мөһим делоға беркеткән (Йыһат Солтанов. Башҡорт дивизияһы. Төрлө мәғлүмәттәр, 151 -- 152-нсе биттәр). Ләкин унда әлеге Лейтенант тураһында бер һүҙ ҙә юҡ.

Китаптағы: “В тот последний день, вернее ночь на 23 февраля 1943 года... (Лейтенант. -- Й.С.) был вызван в штаб дивизии. Шаймуратов в присутствии штабистов вручил... (Лейтенанту. -- Й.С.) Боевое Красное знамя дивизии. “Бери его, тебе поручается вынести знамя из рейда. Вынести во что бы то ни стало. Учти, береги себя и знамя. Еще неизвестно, сможем мы пробиться или нет” (136-нсы бит) тигән “пафослы” юлдар ҙа ышандырмай. М.М. Шайморатов кеүек тәрән хәрби белемле, ҙур тәжрибәле командирҙың хәл иткес һәм яуаплы мәлдә ниндәйҙер бер кесе лейтенант алдында рейдтан сыға алыуға шикләнеп күрәләтә төшөнкөлөккә бирелеүе, икеләнеүе ышандыртмай; сөнки Шайморатовҡа ундай форсат юҡ: корпус разведкаһы алда фашистар фронтының бушаҡлығын -- өҙөк урынын “асыҡлаған”, корпус командиры Борисов кисекмәҫтән алға дөрөргә әмер биргән; өҫтәүенә, разведкаһының шул (яңылыш) мәғлүмәттәренә таянған Борисов үҙе лә, корпус штабын дивизия алдына үткәреп, сығыу яғына елдертеп алып киткән; юҡҡамы ни корпус командиры өлгөһөнә буйһонорға дусар ителгән Шайморатов та кес кенә һағауыл төркөмө менән Борисовтың артынса уҡ алға йүнәлә... Шул шарттарҙа дивизияның намыҫ символын, йәғни Ҡыҙыл Байраҡты, дивизиянан айырып, һуғыштарҙа үҙен күрһәтеп өлгөрмәгән баяғы кесе лейтенантҡа -- һуҡыр яҙмыш ҡосағына тапшырырға Шайморатов бөтмөш фаталист түгел. Байраҡ, киреһенсә, Майор хәтирәләрендә бәйән ҡылынғанса, ҡанлы алыштың иң дәһшәтле мәлдәрендә яугирҙәрҙең алдында дөрләп бара, дошман ҡулсаһын да бергә йырып сыға.

Байраҡты ҡотҡарған ҡаһарманлығы өсөн, тип ғорурлыҡ кисерелә китаптың 137-нсе битендә, Лейтенант Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә! Беҙҙең көндәрҙәге тележурналистар ҙа был тәңгәлдә ашығыбыраҡ, китапта яҙылған ветеранды “үҙе ҡотҡарған дивизия Ҡыҙыл Байрағы” эргәһенә баҫтыртып ҡуйып мәҙехләне... Ә бына Рәсәй Именлек министрлығының Үҙәк Архивынан алынған мәғлүмәтнамә -- Лейтенантҡа бирелгән бүләктәр теҙмәһе:

1. II дәрәжә Ватан һуғышы ордены -- Белоруссия фронтының Артиллерия командующийы әмере менән 16.11.1943;

2. Ҡыҙыл Йондоҙ ордены -- 16-нсы гвардия атлы дивизия командиры әмере менән 09.05.1944;

3. “Германияны еңгән өсөн” миҙалы -- СССР ПВС Указы менән 09.05.1945;

4. “Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы батыр хеҙмәте өсөн” миҙалы -- СССР ПВС Указы менән 06.06.1945;

5. Еңеүҙең 40 йыллығы айҡанлы I дәрәжә Ватан һуғышы ордены -- СССР Именлек министрлығы әмере менән 23.12.1985.

Шулай итеп, ғәмәлдәге биш бүләк араһында уның өсөн иң ғәзизе – “дивизия Байрағын ҡотҡарғаны өсөн” Ҡыҙыл Байраҡ ордены юҡ һәм ул һис булмаған да! Хатта Лейтенант үҙ ҡулы менән яҙған автобиографияһында ла шул уҡ бер хәл...

Бына нимә шомландыра: ветераныбыҙға ҡартлыҡ көндәрендә ана шул алынмаған Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән ҡупырайыу, күренекле яуҙаштары иҫән саҡта ауыҙынан

һис өн сығармай йөрөп, һуңғы сиктә бушҡыуыҡ дан артынан ҡыуыу, журналисты һәм китап авторҙарын аймылыштырыу ниңә кәрәк булды икән? Әлбиттә, дәһшәтле һуғыш ҡырҙарында был яугир ҙә батырлыҡтар күрһәткән – һанап кителгән орден-миҙалдары юҡҡа бирелмәгәндер, әммә рейдта булмағанды булды тип яҙырға ла, күкрәк ҡағып дауларға ла ярамай. Ниндәй шайтан ҡотҡоһо?!.

Ауыр булһа ла, тарихи хәҡиҡәт хаҡына әйтергә тура килә: был һорауҙарға Лейтенанттың шәхси делоларындағы характеристикалар күпмелер яуап биргәндәй: “Мл. Лейтенант... показал себя с плохой стороны, в работе не заинтересован, задания выполняет с холодком, не точно, не аккуратно, с большим опозданием. Большой паникер, за что имеет взыскание -- строгий выговор. С работой не справляется, занимаемой должности не соответствует. 09.1942 г. Райвоенком Ст. Л.-т Табельский”. Һәм йәнә: “Партвзыскания имеет: выговор за пьянку”... Яугиребеҙ данлы Башҡорт дивизияһына, үкенескә ҡаршы, китапта раҫланыуынса, Шайморатовтың уң ҡулы булырға тап шул “күркәм” сифаттары менән барып эләккән...

Йәнә әйтергә кәрәк: мәҡәлә һәм китап авторҙарының ни өсөндөр эсен бошорғос Майор хәтирәләре, китап булып сығырҙан элек, Дивизия ветерандары Советының ултырышында ентекле тикшереп хупланған (Йыһат Солтанов. Башҡорт дивизияһы. Төрлө мәғлүмәттәр, 49 -- 51-енсе биттәр). Хәтирәләрҙә яҙылған Байраҡ эпизоды әгәр шул саҡта шик тыуҙырһа, рейдсыларҙың ишле ҡоро, бигерәк тә Али Ҡарнай фажиғәһенә бәйле штрафбатальонға юлығыуының сәбәпсеһе итеп Майорға ғүмерлек үс һаҡлаған, уға ҡаршы һәр мөмкинлекте файҙаланған әҙип Әхтәм Ихсан (Йыһат Солтанов. Башҡорт дивизияһы. Төрлө мәғлүмәттәр, 74 -- 83-өнсө биттәр), өндәшмәй ҡалмаҫ ине. Икенсе яҡтан ҡарағанда, хөрмәткә лайыҡ был өлкән ҡәләмдәштең 1995 йылда Башҡортостан китап нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан “Саҡматояҡ аттарҙа” тигән, дивизия яугирҙәренең батырлыҡтарын ынйы бөртөктәреләй йыйып алып данлаған китабында ла, Лейтенантҡа фамилиялаш Мансур-һалдат (202, 204, 206-нсы биттәр) йыш телгә алынһа ла, 62 йыл үткәндән һуң һоҡланғыс ҡаһарманлыҡ эйәһе булырҙай Лейтенант “онотолған”...

Факттарҙы дөрөҫләүсе документтар:

1. Рәсәй Именлек министрлығының Үҙәк Архивынан алынған белешмә;
2. Шул уҡ Архивтан Лейтенанттың хәрби хеҙмәт юлы тураһында мәғлүмәт;
3. Автобиографияһы;
4. Характеристика;
5. Партия ағзаһының шәхси делоһынан сәхифә.

Дивизиябыҙ тураһындағы баяғы китап авторҙары киләсәктә уның яңы баҫмаһын әҙерләгәндә иплे генә эш итеп, уҡыусылар күҙен томаларҙай төтөндө елләтһен ине. Тарихҡа хата кермәһен өсөн яҙылған был сәхифәмде, үкенескә ҡаршы, баш мөхәррир итеп ҡуйылған, шәхси мундирының бәҫен ҡурсалауҙы тарихи дөрөҫлөктән өҫтөн һанаған чиновник арҡаһында, өҫтә әйтеп үтелгәнсә, гәзит уҡыусыларына еткерә алмағайным, интернетта булһа ла хәбәрләнһен. Бер-беребеҙҙең яңылышын төҙәтешеү мәслихәт.

Батшалар еренә сәйәхәт

Башҡортостан тупрағында мәңгел тыныслыҡ тапҡан императорҙарыбыҙҙың иң һуңғыһы тураһында бара һүҙ.

Алтын Урҙа дәүләтенең императоры Туҡтамыш-хан һәм шулай уҡ император дәрәжәһенәсә күтәрелгән Еҙекәй батыр тураһында ныҡлап ҡыҙыҡһыныуым үткән быуаттың етмешенсе йылдарында мәшһүр “Үҫәргән тәүәрихе”нән (Библиотека Башкирского филиала Академии Наук СССР, ИБ -- 2279, ғәрәп графикалы ҡулъяҙма хәлендә) уҡып, икеһенең дә килеп сығышы үҙемдеке менән бер иш -- Үҫәргән батшалар шәжәрәһенән, икеһе лә үҙем кеүек үк үҫәргән башҡорто икәнлеген белгәс ныҡлап башланды. Салдарҙан-сал тарихыбыҙҙа соҡсоноп сәсем ағарғас танырға тура килә: төрки донъяһында мәғлүм иң реаль, тарихи ерлекле, ышаныслы шәжәрә -- “Үҫәргән тәүәрихе”, сөнки ул тәғәйен Урал -- Иҙел ерлегенән һәм унда беҙҙең эраға тиклем XV быуатта башҡорт-болғар дәүләтен нигеҙләүсе ***Ишек*** (икенсе бер яҙылыштарҙа ***Ижек***) бабабыҙҙан башлана (1680 -- 82 йылғы башҡорт ихтилалы етәксеһе бөйөк Сәйет Йәғәфәр Садиров бабабыҙ 1680 йылда күсертеп яҙҙыртҡан тәүәрихте ҡарағыҙ: Бахши Иман. Джагфар тарихы, I, II, III том. Оренбург, 1993 -- 1997). Дөрөҫ, донъяла *үҫәргән*, хатта *башҡорт* тигән этнонимдарҙың барлығын да белмәгән (йәки белергә теләмәгән) төрлө милләтле авторҙар (һәм шуларға эйәреп башҡорт ғалимдары!) Туҡтамыш-ханды -- Сыңғыҙ-хан тоҡомло ***татар-монгол*** тип, Еҙекәй батырҙы ***маңғыт*** (йәнәһе шул уҡ монгол!) тип тә, ***ҡуңғырат*** тип тә яҙалар. Ләкин айныҡ тарихсыларға күптән үк яҡшы мәғлүм: Сыңғыҙ-ханды һәм уның кешеләрен хандың ҡан дошманы һаналған этнос исеме менән “татар” тип урыҫтар тамғалаған, ә сығышы менән башҡорт (атаһы -- бөрйән, әсәһе үҫәргән-ҡаңғы башҡорто) бөйөк бабабыҙ үҙенең дәүләтен ***“мәңге-ил”*** (мәңгелек ил) тип атағанлыҡтан, халҡы ла шул ***мәңге-ил -- монгол*** исеме менән тирә-яҡҡа танылған. Еҙекәйҙең маңғытлығы һәм ҡуңғыратлығы ла бик ябай аңлашыла: ***мәңге+т*** (бында “т” -- күплек ялғауы) ***маңғыт*** (“мәңгеләр” мәғәнәһендә) һәм ***ҡаңғы*** (шул уҡ *үҫәргән)****+ир-ат= ҡаңғырат, ҡуңғырат.*** Тимәк, бер үк ерҙә донъяны яуларға ынтылыусы һәм бер-береһенең ҡанын ҡойоусы йыһангирҙәр ***Сыңғыҙ-хан, Туҡтамыш-хан, Аҡһаҡтимер, Еҙекәй батыр*** дүртеһе лә бер үк тоҡом -- башҡортобоҙҙоң Үҫәргән батшалар шәжәрәһенән! (Шәжәрәне ҡарағыҙ: Йыһат Солтанов. Башҡорт батшалары. Сыңғыҙ хандан алып Урыҫ дәүләтенә ҡушылғанғаса. Өфө -- 2007). “Маңғыт”тың үҫәргән-башҡорт икәнлегенә шик ҡалдырмаусы дәлил -- “үҫәргәндәр бабаһы”ның эпосыбыҙға “Маңғыт улы Мөйтән-бей” рәүешендә теркәлеүе (Башҡорт халыҡ ижады, VII том, Өфө -- 2004, 258-енсе бит). Әйткәндәй, быйыл ғына бер мәғлүмәтнамәгә юлыҡтым: Ҡаҙағстан Мосолмандар берлегенең вице-президенты, Алматы ҡала адвокаттар коллегияһы ағзаһы Ҡорбанғәли Юнысовтың Әҙәм пәйғәмбәрҙән алып 96 быуынға еткерелгән шәжәрәһе. Тәүге 65 быуыны ҡәҙимгесә фәстерелеп, Мөхәммәт пәйғәмбәрҙе лә биргән ғәрәп шәжәрәһенән өҙөктө ялғау булһа ла, 66-нсынан ҡала быуындар үҙебеҙҙеке -- әле әйтелгән Үҫәргән батшалар шәжәрәһенең айырылғыһыҙ киҫәге (ҡайһы бер исемдәр генә боҙола биргән). Әммә унда әле һаналған дүрт бөйөк затыбыҙ һәм уларҙың тоҡомдашлығы тураһында минең фекерҙе дөрөҫләүсе ҡиммәтле мәғлүмәт бар:

“Идегей (1352-1419), **Тимур** и **Тимучин- Чингизхан** восходят **к одному общему предку** которого звали **<u>Кайдада</u>**. У Кайдады был сын **<u>Байсункар,</u>** от которого было 9 сыновей. От потомков старшего сына **<u>Нотакына</u>** родился **<u>Кадаркай</u>** отец **<u>Эмира Идегея.</u>** *От потомков третьего сына Кайдады родился* Эмир **Тимур.** *От потомка четвертого сына родился* **Тимучин,** избранный ханом, под именем **Чингизхан**. ***Соглано закона утвержденного Чингисханом только его прямые потомки вправе были быть ханами. По этому Идегей и Тимур не претендовали на титул Хана, а были Эмирами.*** Но они оба и их потомки всегда учитывали что ***Тимучин, то есть Чингиз Хан происходит от 4-го***

сына, тогда как Идегей от первого, а Тимур от 3-го сына <u>их общего предка</u>. А **по лестничной, используемой только тюрками, системе наследования трона, власть переходит от отца к старшему сыну, затем второму сыну и так далее пока все живые сыновья не закончат свое правление. За тем наступает очередь сыновей старшего сына, после них сыновей второго сына и так далее, каждое поколение правителя обязано было править согласно своей очереди**. Тимур нарушил этот тюркский принцип наследуемой по лестничной системе власть, ее фактически узурпировал, при избрании его на трон Хана: вместо того что бы уступил трон тому, кому следовала по закону лестничной системе наследования. Это нарушение, прецедент использовался часто в кризисные моменты истории Золотой Орды, и других татарских государствах после распада Золотой орды. Так например после смерти Хана Тауке, вместо созыва общего курултая и выборе законного единого хана в соответствии с лестничной системой выборов, бии всех 5 жузов страны избрали себе своих ханов, разрушив единое государство на пять. Жузы каракалпаков и киргизов видимо уже окончательно отделились от трех других, которые составляют нынешний Казахстан".

Бабабыҙ Сыңғыҙ-хандың тышҡы ҡиәфәте лә тарих фәнендә беҙгә тылҡылған ҡытай һүрәттәрендәге "типик монгол" түгел, ә V быуатта шул уҡ ҡытайҙар тасуирлап ҡалдырған "зәңгәр күҙле, ерән сәсле" үсүн-үҫәргәндәрҙекенә тап килә; хәҙерге урыҫ ғалимы ла ҡушҡуллап раҫлай быны: "В сохранившихся старинных документах, -- ти ул, -- существуют описание **Чингиэ-хана: высокий, стройный, с каштановыми волосами, голубыми (по другим данным -- зелеными) глазами и широкой окладистой бородой.** Скажем, не вполне типичный облик для монгола.

Кажется удивительным, но и в описаниях внешности многих основателей тогдашних правящих династий (Рюрик, Аспарух, Меровей, Юстиниан), фигурирует схожий внешний облик. То есть основания считать, что эти создатели династий, упоминаемых впоследствии как "царские", относятся к одному и тому же старинному правящему роду или правящим родам" (Александр Горохов. Белый царь). Йәғни ҙә ки уларҙың бөтәһе лә "Үҫәргән батшалар шәжәрәһе"нең емеше булып, ни бары төп олондан (башҡорт-болғарҙан) ярған ботаҡтарҙа ғына башҡалана.

Тәғәйенерәк ҡарағанда, өҫтәрәк килтерелгән бөйөк дүрт шәхестең уртаҡ бабаһы (Ҡ. Юнысов шәжәрәһендәге Ҡайдада, дөрөҫөрәге Ҡай-дәдә -- Бүре-баба) Үҫәргән батшалар шәжәрәһендәге (ул "Башҡорт батшалары"нда тулы бирелгән) **26**-нсы номерлы реаль шәхескә -- шам Ҡыуат (рәсми тарихтағы Ҡубад, батшалыҡ итеү йылдары 488-496 һәм 499-531; "шам Ҡубад 23 йыл шам булды, Фирдәуси хөкөмөнөң заманында ине", -- "Үҫәргән тәүәрихе", 39-ынсы бит) тигән бабабыҙға тап килә. Шуның балаларының береһенән, өҫтәрәк әйтелгәнсә, бөйөк Сыңғыҙ-ханыбыҙҙы биргән тармаҡ айырыла, бына ул: "27. Шам Ҡыуат улы ...**нау...н** (асыҡ уҡылмай), уның улы Жуанир, уның улы Шаһриар, уның улы Мирза-алып, уның улы Һәрмүз (*Хормозд III,* 457-459 йй.), уның улы Тиауач, уның улы Жабин; һәм йәнә Жуанир менән бер туған (Ба)һрам, уның улы Ғам, уның улы **Сиавуш. -- 28. Ғали хан** бин Сиавуш. **-- 29. Ташбуға хан. -- 30. Хан Суман. -- 31. Хан Күсләк. -- 32. Хан Айтуп. -- 33. Хан Тимерил. -- 34. Хан Байкә. -- 35. Хан Ылаусы. -- 36. Хан Байсиуб. -- 37. Хан Ҡара. -- 38. Хан Арғырд. -- 39. Хан Ҡол-алып. -- 40. Хан Байжума. -- 41. (?). -- 42. (?). -- 43. Хан Турмали. -- 44. Турғай Сәхин. -- 45. Тумаул Мәргән. -- 46. Дуинбиан. -- 47. Хан Буртан. -- 48. Хан Буян. -- 49. <u>*Туҡан-хан*</u>** (Темәсйән-Сыңғыҙ-хандың йәш сағында *Туҡанда -- Арҡайымда* торғанындағы ләҡәбе; шул төбәктән Көнсығышҡа ҡасып китеп, көс-ҡеүәт туплағас, тирә-яҡ дала халыҡтары, шул иҫәптән

Башҡортостан батшаһы Муйтән-бей һәм уның бер туған ҡустыһы Майҡы-бей етәкселегендәге башҡорттар, үҙҙәренең шул ҡан ҡәрҙәше Темәсйәнде аҡ кейеҙҙә йыһангир *Сыңғыҙ-хан* итеп күтәрәләр). **-- 50. Уның улдары: а) Жужи-хан** (Яусы); **б) Хан Ҡабил** бин Туҡан; **в) Хан Ҡрыл** (*Кейек*) бин Туҡан, уның улы Хан Ҡотби; **г) Хан Тули,** уның улы Хан Хулукәтули бин Тули, уның улдары Хан Ҡуян, хан Турғай, хан Байду, Абғай-хан...

Шәжәрәлә шул уҡ шам Ҡыуаттың балаларының береһенән бөйөк Туҡтамыш-ханды ла, уның ҡан дошманы Еҙекәй батырҙы ла тыуҙырған изге Баба Төкләҫебеҙҙең тармағы дауамлана: **2)** шам Ҡыуат улы **Нуширван Ғәҙел** *(Хосров I,* 531-579 й.й. "Нуширван... 20 йыл шам булды, уның шаһлыҡ ҡыры: Төркөстандың мәшриғенән Һиндостан мәғрибенәсә уның хөкөмөндә булды". — 39-сы бит). — **28. Бируз** бин Нуширван Ғәҙел (*Хосров II,* 628 йылда үлгән). — **29. Шырау-ир** (был осорҙа Бируздан ҡалмыш тәхет өсөн ҡанлы тартыштар булып, 628-632 йылдар араһында тәхеттә бер-бер артлы *ун батша* алмашына. Йездегирд III [632-652 й.й.] тигән кемдер берәү тәхетте биләп алғас, ***сәсәндәр*** нәҫеленән булған был <u>*Шырау-ир*</u> үҙенең алыҫ бабаһы ***Бәк-сәсәндең*** тыуған еренә — ***Туран иле Башҡортостанға*** ҡасып ҡайтып, сал ***Көн-Өфө*** [*Тура]* ҡалаһындағы ата-баба тәхетенә ултыра: бының тап шулай икәнлеген Шырау-ирҙең бүләренең шәжәрәләге ***"Туран Дархан"*** тигән батшалыҡ ләҡәбе дәлилләй. Күрәһегеҙ, Шырау-ирҙең **Дары** исемле данлы бүләһе Туран [Башҡортостан] дәүләтенең баш ҡалаһы <u>*Өфө*</u> тәхетендә нығынған һәм ***"Туран Дары-хан"*** батша ләҡәбен алған, шунан һуң уның нәҫелдәре лә быуындан-быуынға <u>*"дары-хан" — **тархан**</u>* ләҡәбен йөрөтөп, башҡорттоң *тархандар ҡатламы* барлыҡҡа килгән. Туран Дары-хандың ҡарт-ҡартатаһы Өфөгә ҡайтҡан баяғы 632 йыл менән Туран Дары-хан араһында әҙәмиҙәрҙең ике быуын ғүмере 50 [25+25=50] йыл ятҡанлыҡтан, Туран Дары-хан бабабыҙ Өфө тәхетенә яҡынса 682 [632+50=682] йылда ултырған булырға тейеш). — **30. Шәһриәр. — 31. Аршир. — 32. <u>Туран Дархан</u>** *(баяғы Туран Дары-хан,* йәғни Туран иленең Дары исемле ханы, тигән һүҙ; тәхете, әйтеп үтеүебеҙсә, ***Көн-Өфө — Тура*** ҡуш ҡалаһында). — **33. Жәзир Жир. — 34. Әбү Алсаҡ** ("Алсаҡ-ир бер заман Баратурз дархандың ҡалаларын яулап алды, ҙур ил яһаны. Ғайәт шөҡәтле һәм Искәндәр-сафиуллаға тиң хан ине". — 58-се бит). — **35.** Солтан **Ғоҫман** бин Әбү Алсаҡ (Ғоҫманлы төрөк империяһын нигеҙләүсе, төрөк солтандарының бабаһы). — **36.** Солтан **Жәләлитдин. — 37. Әҙһәм. — 38. <u>Баба Төкләҫ-бей</u>. — 39. <u>Трә (Тура)</u>** бин баба Төкләҫ (*Тура-хан,* XII быуат. Был Тура-хандың ҡәбер кәшәнәһе уның баш ҡалаһы булған Өфөнән алыҫ түгел Шишмә районының *Түбәнге Тирмә* ауылы эргәһендә әлегәсә һаҡланған, архитектор-белгестәр уның ҡоролошон ысынлап та XI-XII быуаттарға ҡарата — Б.Г. Калимуллин. Башкирское народное зодчество. Уфа, 1978; 114-се бит. Боронғо башҡорт тәүәрихсеһе *Ҡыҙрас Муллаҡаевтан* заманында атаҡлы П.И. Рычков [Топография Оренбургской губернии, 372-373-сө биттәр] яҙып алғанса, "хан Тура бин баба Төкләҫ оҙонлоғо ун саҡрымға һуҙылмыш бөйөк ***Өфө*** ҡалаһының аҙаҡҡы ханы булған"). Ҡомарҡынан ап-асыҡ күренеүенсә, башҡорт батыры Йеҙекәйҙең дә, Сыңғыҙ-хан, Туҡтамыш-хан, Аҡһаҡ Тимер кеүек үк, ниндәйҙер татар-монгол ҡәүеменән түгел, ә Үҫәргән (башҡорт) батшалар шәжәрәһенән сыҡҡанлығы төрлө сығанаҡтарҙан дөрөҫләнде. Инде батшалар шәжәрәһен йәнә Үҫәргән тәүәрихендәгесә дауамлайыҡ: **-- 40. Уның (Тура-хандың) улдары: а) <u>*Бәрҙебәк солтан бин Тура*</u>** йәки **<u>*Нармуйынлы Бәрҙебәк*</u>** ("Үҫәргән тәүәрихе", 53,57-се биттәр) һәм **б) Ҡаҙансы** бин Тура (йәйәләр эсендә иҫкәртеп китеү урынлы: Башҡортостаныбыҙҙың хәҙерге Аҫҡын районындағы Ҡаҙансы -- ошо бабабыҙҙың ауылы). Әле генә а) һәм б)

билдәләре аша килтерелгән ике уландан тап беҙҙе ныҡ ҡыҙыҡһындырған ике затыбыҙҙың шәжәрә ботаҡтары фашлана: **а) 40. Бәрҙебәк солтан бин Тура** йәки **Нармуйынлы Бәрҙебәк** (Үҫәргән тәүәрихе, 53, 57-енсе биттәр), уның улы **Ҡиас-хан,** уның улы **Туҡхужа-хан,** уның улы **Туҡтамыш-хан** (Туҡтамыш-хан маҡәме [төп йорто] Сирмешән [Сәрмәсән], Ҡармасан буйында ине һәм ул йәнә *Иҙел — Яйыҡ араһында* сәхрә тарафында *Үҙән* (1) һыуында булды һәм уның һыуы әсе булғанлыҡтан, саҡ сыҙаны, тиҙәр. Ул ваҡытта яҙ һыу ташҡанда алып ҡалып, бер сула тормош иттеләр: шунда хан йортоноң ҡибла тарафында бер шәре-хауыз (2) бар ине, яҙ көнө ҡаҙып һыу ебәрерҙәр ине; һыуы татлы булғаны өсөн шул хауыздың ҡибла тарафында ябыулы бинанан *Мәсет-һарай* төҙөнө, хозур шәһәр булды (3). Һуңынан **<u>Йедәк (4) бәк</u>** менән араларында һуғыш-ҡырылыш булғас, ул ерҙән китеп, *Сирмешән [Сәрмәсән]* һыуында йорт тотто, *<u>ҡәбере шундалыр</u>*; ул ҡорбандыр — *Йедәк [Йеҙекәй]* уғынан ул тәхет кисте, тиҙәр". — 53-сө бит. Тимәк, бөйөгөбөҙ *Туҡтамыш-ханды*, уның тыуған һәм һуңғы торған төйәге *Сәрмәсән* тирәһенә, ә аныҡырағы, шуға яҡын *<u>Төйләл</u>*, йылғаһы буйына һөжүм ҡылып, икенсе бер бөйөгөбөҙ -- үҙенең ҡан ҡәрҙәше *Йеҙекәй батыр* үлтергән). — **44. Уның улдары: Жәләлитдин, Сәғидалитдин, Ҡадирбирҙе, Хаҡбирҙе** (һ.б. күптәр)...

Туҡтамыш-хандың әсәһе, Еҙекәйҙеке кеүек үк, башҡорттоң Ҡаңғы (Ҡуңғырат) ырыуынан икәнлеге сығанаҡтарҙа сағылған; ә хандың үҙен гәрсә "Сыңғыҙ-хан нәҫеленән" тип яҙып килһәләр ҙә, атаһынан артабанғы шәжәрә һуҙымын күрһәтә алыусы юҡ -- тарихсыларҙың көллөһө лә "Яусы (Джучи) тоҡомдарының береһенән булһа кәрәк", тигән билдәһеҙлеккә төкәтеп сикләнәләр, ә "Үҫәргән тәүәрихе"нә хатта башҡорт тарихсыларының да күпселегенең "теше үтмәй". Филологтарыбыҙ ҙа был "сәйер" Туҡтамыш исеменең асылын аңлатҡаны юҡ, ә ғәмәлдә унан башҡортлоҡ аңҡый: **Төктө Мышы** (Төклө Мышы) -- Туҡтамыш, атаҡлы **Мышы Улы** (уны боҙоп Мөшәүле тип яҙып йөрөтәләр) һымаҡ уҡ! Төктө (төклө) -- мал-мөлкәтле, етешле, бай тигән һүҙ, шунан килә үҫәргән бабалар исеме Баба Төкләҫ, Муйтән (төклө тән) һәм мәкәл-әйтемдәребеҙ: "Ат аунаған ерҙә төк ҡала" "Төклө аяғың менән" һ.б.... Йәш Туҡтамыштың Алтын Урҙанан Аҡһаҡтимер ҡанаты аҫтына боҫоуының сәбәбен дә "нәҫелдәше" Урыҫ-хан менән тәхет өсөн тартышыуы итеп аңлатыусандар, ләкин эш башҡасараҡ: Аҡ Урҙа (5)ханы Урыҫ-хан күрше Күк Урҙаны (6)үҙенең урҙаһына ҡушырға яҫҡынғас, Ғаффари тигән боронғо автор яҙыуынса, Маңғышлаҡ бөрйәндәренең бейе Туҡ-хужа, йәғни Туҡтамыштың атаһы, быға ҡаршы төшә һәм шуның өсөн Урыҫ-хан тарафынан үлтерелә, ә Туҡтамыш Аҡһаҡтимер ярлыҡауында ҡотола.

(Иҫкәртмәләр: 1. Үҙән йылғалары хәҙерге Саратов өлкәһендә башланып, Ҡаҙағстанға ағыла.

2. Хауыз — һыу йыйғыс соҡор, хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Биләй районындағы тарихҡа билдәле *Ҡоро-күл* булырға тейеш.

3. *Мәсет-һарай* ҡалаһы — Туҡтамыш-хандың Яйыҡ буйындағы баш ҡалаһы.

4. Йедәк — *Йеҙекәй (Едигей)* батырыбыҙ.

5. Яусы (Джучи) ылыҫының көнсығыштан Иҙелгәсә яртыһы.

6. Яусы (Джучи) ылыҫының көнбайыштан Иҙелгәсә яртыһы).

... һәм **б) 40. Ҡаҙансы** бин Тура. Уның улдары **1) -- 41. Ислам Ҡиә** бин Ҡаҙансы, **2) -- 41. Ҡарадә Ҡиә** бин Ҡаҙансы ("Иҙел -- Яйыҡ араһында хөкөм һөргән", 54-енсе бит). **-- 42. Ҡотло Ҡиә** бин Ҡарадә Ҡиә (мосолманлыҡ исеме Рәхмәтелғәбид). **-- 43. Йедек (Еҙекәй)** бин Рәхмәтелғәбид ("хан Бураҡ `[тәхеттә 1422-1427 йй. -- Й.С.] Сарайсыҡта ине. Ғәйәт алып кеше ине. Ҡан ҡәрҙәше [әсәһе яғынан. -- Й.С.] Йедек унда бей ине. Унан

(Йедек-Еҙекәйҙән. -- Й.С.) Мансур тыуҙы, Мансур ҙа алып кеби булды. Хөсөт итеп, дәдәһе Бураҡты аңһыҙҙан үлтерҙе [1427 йылда. -- Й.С.]", 55-енсе бит); **3) -- 41. Ду(ҡ)с(а)ба (Туҡсаба)** бин Ҡаҙансы ("Иҙел — Яйыҡ араһында хөкөм һөргән... Туҡсаба-хан заманында Буйат-бей — бей ине", — 54,62-се биттәр; шәжәрәне күсереүсе был урында "Ду(ҡ)с(а)ба"ның ике хәрефен — йәйәләр эсендә күрһәтелмеш "ҡ" һәм "а"-ны яңылыш төшөрөп ҡалдырған; шуға күрә дөрөҫө "Туҡсаба" булыр). **-- 42. Муйтән-бей** бин Туҡсаба... Бөйөк шәжәрә олонобоҙ ошолай шанлы Муйтән-бей бабабыҙ аша үтеп, әлегәсә йәшәп килгән бик күп тармаҡтарҙы, шул иҫәптән был юлдар авторының 67 быуынға еткән тармағын да кәүҙәләндерә.

Һорау тыуырға мөмкин: Үҫәргән батшалар шәжәрәһе Ишек баба йәшәгән б.э. тиклем XV быуаттан уҡ башланған икән, ниңә уның быуындары шул 35 быуат һуҙымына тиңәлмәй, ә авторҙың тармағы осланған 67 генә быуынды сағылдыра? Дөрөҫ һорау, сөнки ул 35 быуат эсендә әҙәмдәр ғүмере 140 быуын аша үтергә тейеш. Әммә яҙма шәжәрәләрҙең бөйөктәренең үҙенсәлеген онотмайыҡ: тарихилыҡтан алдағы осорҙар, быуындарҙы тулайым теркәп бөтөү мөмкин булмағанлыҡтан, күпмелер арауыҡ хакимлыҡ иткән батша нәҫелдәре (династиялары) башлыҡтарының ғына исемдәрен атай һәм ул арауыҡ бер юлы 300 йылды ла (мәҫәлән, Михаил Романовтар осоро) һәм 1000 йылды ла (мәҫәлән, Лоҡман-Хәким осоро) тәшкил итергә мөмкин, ә даталар менән билдәләрлек тарихи осорҙар шәжәрәнең һуңғараҡ өлөшөндә булыусан. Бының миҫалын боронғо шумер шәжәрәләрендә, Тажитдин Ялсығол Башғорди һ.б. шәжәрәләрендә күрәбеҙ, Үҫәргән батшалар шәжәрәһенең тарихилыҡ өлөшө иһә Мидия батшаһы Кииксарув хакимлыҡ иткән б.э. тиклем 625-585 йылдарҙан башлана.

"Үҫәргән тәүәрихе"нән әле һоҫолған мәғлүмәт буйынса, Алтын Урҙа императоры Туҡтамыш-хандың тыуған һәм һуңғы төйәге Сәрмәсән һәм Ҡармасан һыуҙары тарафында булған, Еҙекәй ҡулынан китеүе лә, ҡәбере лә шундалыр. Боронғо заман авторҙарына шул яҡтарҙың эрерәк һыуҙары ғына билдәле булып, вағыраҡтары исемһеҙ аҡҡанлыҡтан, шәжәрәбеҙҙә әйтелгән төбәкте яҡынса -- "шундараҡ, шул тирәлә" тип аңлайыҡ. Был, бәлки, әсәһенең иленә -- Ҡаңғы ырыуы башҡорттарының еренә ҡайтып боҫҡан хандың эҙенә төшмәһендәр өсөн, юрый аймылыштырылғандыр. Ә бөгөнгө тарих фәне ысынлап та аймылыш: Туҡтамыш-хандың был төбәккә ҡасып килеүенең сәбәбе булған 1395 йылғы ҡанлы һуғыштың урынын да, тар-мар ҡылынған хандың аҙ һанлы ярандары менән ҡайһы һыуҙы кисеп сығып ҡайһы тарафҡа олағыуын да бутайҙар. Ҡабул ҡылынған рәсми раҫлау буйынса, Аҡһаҡтимер Туҡтамыш-ханды йәнәһе **Иҙелдең** (Ағиҙелдең түгел!) **һул** ярындағы ***Увек*** (хәҙерге Саратов ҡалаһы һәм **Увек** тимер юл станцияһы янындағы **Увек** тауында булған) ҡалаһында ҡыйратҡас... -- уф! тарихсылар йә күрмәгән, йә күрергә теләмәгән ошо буталсыҡты сисәйек: ***Увек (хәҙерге Саратов)*** ҡалаһы Иҙелдең **һул** ярында түгел, ә **уң** ярында урынлашҡан! Шул уҡ тарихсы маһирҙар йәнә лә шул фарсы-ғәрәп сығанаҡтарынан аңлатып яҙыуынса, тар-мар ҡылынған Туҡтамыш-ханыбыҙ, имеш, баяғы "*һул* ярҙағы Увек-Үкек" тән (бында тағы аймылыш -- айырым ике ҡаланы, "Увек"те һәм "Үкек"те, бер үк ҡаланың ике төрлө аталышы итеп берләштерәләр!) Иҙелдең, тимәк, *уң* яғына кисеп сығып, тимәк, *көнбайышҡа* табан олаға ла *Себергә -- Төмән* төбәгенә барып боҫа һәм 1405 йылда шул Себерҙең Төмән төбәгендә үлтерелә..., ләкин *Себер,* әгәр ҙә яңылышмаһам, бөтөнләй киреһенсә, Иҙелдән шөйлә *көнсығыштараҡ* түгелме ни?!. Ә асылда ошолай күҙаллана: ханыбыҙ, Аҡһаҡтимер яуына ҡаршы Ҡафҡазда уңышһыҙ һуғышҡас, Иҙелдең уң яры буйынса һыу үренә бер туҡтауһыҙ сигенеп (артынан Аҡһаҡтимер яуы эйәреп), шул **уң** ярҙағы баяғы Увек

(хәҙерге Саратов) тәңгәлендә Иҙелдең *һул* ярына -- тарихи Башҡортостан тупрағына кисеп сығып, күп аралар үтеп, хәҙерге Өфө эргәһендәге Турбаслы кисеүенән Ағиҙелде ашып, мәркәз ҡалабыҙ *Өфөккә* (ғәрәпсә хәрефле ҡулъяҙманан яңылыш, ундағы "ф"-ны "к" тип уҡып, *"Үкек"* тип яҙалар) урынлаша, булған ғәскәри көстәрен шунда туплап, тап шул ҡалабыҙ эргәһендә Аҡһаҡтимер яуы менән дәһшәтле бәрелешә *лә* ("Башҡорт батшалары" тигән китабымда яҙғанмын), тамам тар-мар ҡылынып, Ағиҙелдең һул ярына кисеп сығып көнбайышҡа (сығанаҡта "Болғар тарафына") -- әйтелгән Сәрмәсән -- Ҡармасан -- Дим йылғалар арауығына ҡаса (ҡарағыҙ: Йыһат Солтанов. Туҡтамыш-хан, Ялыҡ-бей һәм Аҡһаҡ Тимер. "Шоңҡар" журналының 1998 йыл 3 -- 4-енсе һандары). Урыҫ теленә ауҙарылған боронғо фарсы сығанаҡтары *ла* (Йыйынтыҡ: Извлечения из персидских сочинений собранные В.Г. Тизенгаузеном и обработанные А.А. Ромаскевичем и С.Л. Волиным. М. -- Л., 1941) тап ошо юҫыҡтан һөйләй:

"Из "Книги побед" Шереф-ад-дина Йезди. Рассказ о выступлении Тимура в набег (илгар) вслед за Токтамыш-ханом. Прибыв к месту переправы через Итиль (Ағиҙел. -- Й.С.) называемому *Туратурской* (Турбаҫлы. -- Й.С.) переправой... он дал сыну Урыс-хана, Койричак-оглану, отряд..., велел ему переправиться через Итиль (Ағиҙел. -- Й.С.)... Войска подобные судьбе, поспешив по пятам неприятелей, дошли до *Укека* (Өфөк -- Өфө. -- Й.С.) и многих из них убили... Большую часть их взяли в плен, а немногие из них бросились на плотах в воду и переправились на ту сторону Итиля. Токтамыш-хан бросил ханство, дом и все, что имел... и, опасаясь за жизнь свою, с несколькими людьми бежал, ушел *в сторону Булара* (Башҡортостан көнбайышына, ә көнсығыш тарафтағы Себерҙең Төмән төбәгенә түгел! -- Й.С.) *в лесистую местность* (ул яҡтар әлегәсә урманлы. -- Й.С.) и спасся от львиных когтей". Һәр хәлдә, һуңғы төбәк үҙебеҙҙең Сәрмәсән, Ҡармасан, Дим йылғалары бассейнына тура килә һәм быны*ң* да сәбәбе бар:

"Аноним Искандер. Рассказ о царствовании Токтамыша, сына Туй-ходжи-оглана. Мать его была Катун-Кунчек из племени (насл) ***Конгурат*** (тимәк, үҙебеҙҙең ***Ҡаңғы*** ырыуынан! Шуға ла әсәһенең тыуған яғына -- Асылыкүл тирәһенә һыйынған. -- Й.С.). Он был царем способным, храбрым, с хорошим обращением, красивым. Справедливость и хороший характер его общеизвестны. Однако из-за неблагодарности, которую он проявил по отношению ко двору Тимура, все его хорошие качества и похвальные свойства пропали и погибли... он оказался на границе гибели и исчезновения, лишился крови и дома и, наконец, умер... 807 г. (=10.VII.1404 -- 28.VI.1405) в пределах ***Тулина"***. "Списки устроителя мира" тигән әҫәрендә Ғаффари ҙа шуны уҡ яҙа. Тик фарсынан урыҫсаға ауҙарылышты баҫмаға әҙерләп эшкәртеүсе баяғы икәү, Төйлән тигән йылғабыҙҙың донъяла барлығын белмәгәнлектән, бераҙ баш ватҡандан һуң, был "Тулин"ды, ул, "моғайын, Себерҙәге "Тюмен"дер", тип бутап аңлатҡан да һөҙөмтәһе башҡа тарихсыларҙың да хеҙмәттәрендә нығынған, шул арҡала Себерҙең Төмән төбәгендә хатта "Туҡтамыш-хан ҡәбере" лә моронлаған...

Батша ерҙәрен барып күреү, мәсьәләгә асыҡлыҡ керетеү күп йылдар буйына тынғылыҡ бирмәһә лә, форсаты сыҡмай ине. Ниһайәт, ошо 2009 йылдың сағыу көнлө 18 октябрендә көткәнем алдыма килде: башҡорт халҡы, тарихы хаҡына фиҙакәрләнеп йәшәгән уҙаман Әнүәр Мансур улы Йомағолов үҙенең "тимер арба"һында елдертеп алды ла китте; 400 километр юл гиҙеп, күрәһеләребеҙҙе күреп, ишетәһеләребеҙҙе ишетеп, йөрөгән аяҡҡа йүрмә йоҡтороп ҡайттыҡ -- һауаплы хәстәре өсөн ҙур рәхмәт уға.

Әлшәй районын иңләп килеп Димгә ҡойған ***Төйлән*** йылғаһы буйында, Ҡаҙан ауылы тирәһендә гиҙәбеҙ -- ханыбыҙ тап ошонда үлтерелгән. *Төйлән* атамаһы үҙе --

төйәклән, төйәкләнеү урыны тигән һүҙҙер, уны, бәлки, Туҡтамыш-хан үҙе ҡушҡандыр. Тәбиғәт ғәжәп матур, ер-һыу бай, борон заман бигерәк тә хозур булғандыр; тәхетенән яҙған императорыбыҙ ул шомло көндә, моғайын, ошо һоҡланғыс сәхрәгә һунарға сыҡҡандыр, сөнки Ибн-Ғәрәбшаһ яҙа: **“Тохтамыш был убит Едигеем не в правильном сражении, а во время предательского ночного нападения, когда находился один без войска *в загородной местности*”.** Тимәк, торған һарайынан ситтә, ошонда. Ә ҡайһы тәңгәлдәрәк булған һарайы?

Шуныһы яҡшы мәғлүм: Ғаязитдин (мосолманлыҡ исеме) Туҡтамыштың Иҙел аръяғындағы баш ҡалаһы *Һарай* аталған, шунан һуң ул Иҙелдең бирьяғында Яйыҡ буйындағы баш ҡалаһын да *Мәсет-Һарай* исемләгән. Быңдағы ҡалаһы ла, моғайын, *Һарай* булғандыр. Ҡалғанмы шуның эҙе? Ҡалған, бар, тип әйтә алабыҙ -- ошо уҡ төбәктәге ***Һарай*** ауылы! Ул Ҡаҙан ауылынан Торонтайыш аша көньяҡ-көнбайыштараҡ урынлашҡан, унда юл, имештер, тауҙар араһындағы хәтәр ҡыҫыҡтан -- *Хан тарлауығынан* үтә. Үҙебеҙ күреп ышандыҡ: Ҡафҡаз тарлауыҡтарын хәтерләткән тәрән аралыҡ икән был, борон заман әҙәм аяғы баҫмаған төбәккә илткәндер. Юлыбыҙҙың тап осонда хәҙерге *Һарай* ауылы, тәрән үҙәнгә ҡыҫылмыш ***Курсаҡ*** исемле һыуҙы буйлап ултырған. Ә тарлауыҡ асылған ерҙә күккә ашҡан ике бейек тау, улар, ике ҡарауылсылай, бөтөн тирә-яҡҡа өҫтөнлөк итә -- йәтеш ҡарауыл тауҙары! Арғы башҡа һағауыл ҡуйһаң, дошман-фәлән үтеп керерлек түгел, урынды хан яҡшы белеп һайлаған, тип һөйләнәбеҙ. Йылға исеме лә дөрөҫләй быны: *Курсаҡ* кеше аяғын баҫтыртмай ҡурсау урыны (заповедник) тигән һүҙ... Тарлауыҡтан төшкән юлдың тап ошонда тупаҡланып (тупикланып) өҙөлөүе лә юҡтан түгел...

Тәхетенән тибәрелгән бөйөк шәхесебеҙ бында, әлбиттә, йән аҫырап ҡына ятмаған, ә юғары хакимиәт теҙгенен кире ҡайтарып алыу йәһәтенән Аҡһаҡтимер-йыһангирҙең “ҡылын тартҡан”. Шәрәф-әд-дин дә яҙа: “*Тимур обещал Тохтамышу, по окончанию предпринятого похода в Китай, поддержать военной силой его притязания на золотоордынский престол: “После этого похода я, с Божьей помощью, опят покорю улус Джучиев и передам ему”.* Тик Ҡытайға сәфәрендә вафат булып, шунан йылдам файҙаланмыш Еҙекәй батыр ҡәрҙәш көндәшенән арыныу сараһын күрә: әлеге Төйлән буйында аңдып тороп, зәһәр әжәл уғын атып, ҡан дошманы Ғаязитдин Туҡтамыштың шанлы ғүмерен өҙә...

Ауылға килеп кергәндә үк ҡаршыбыҙҙа түңкәрелгән табаҡ һымаҡ түп-түңәрәк бейеклек хасил булып, түбәһендә боронғо ҡәлғә-һарайҙы ныҡ хәтерләтеп суҡайған таш бина (янғын һүндереү ҡалансаһы) иғтибарҙы йәлеп итте: ниндәйен дә йәтеш урын, хан *Һарайы*, моғайын, тап ошонда торғандыр!

Һулдан уңға 1. Хан һарайы тороргай түбә. 2. Янындағы зыярат күренеше. 3. Боронғо ҡәбер

Тау итәгендә бик боронғо таш буралы ҡәберлектәр тимгелләнеп күренә. Әммә зыяратта күпме ҡыҙырһаҡ та, сал таштарҙан яҙыу эҙләп (улар юҡ!) темеҫкенһәк тә, батша ҡәбере булырҙайы табылманы -- хандың замандаштарының гүрелер. Төйлән йылғаһы буйынан хан мәйетен, моғайын, йола ҡушыуынса тейешле урынына --

батшалар зыяратына илткәндәрҙер Ә ул урын быға күрше Миәкә районында, тигән һүҙ йөрөй ине, тура шунда барып етеү фарыздыр.

Юл буйынса уйланам: әгәр тоҫмал хаҡ булһа, берәй батша күмелгән ҡәбер ташында тейешле яҙыу, һис юғында башҡорт-болғар батша тамғаһы ***өсйәп (трезубец)*** осрарға тейеш (һуңғыһы батша гүре өсөн мотлаҡан). Донъяға билдәле был тамға *тәүдин* замандарынан уҡ таралған һәм мифик ***өс донъяның*** (Урта, Аҫҡы, Өҫкө Донъяларҙың) тулы хоҡуҡлы бойороусыһы *Дәү Хоҙайыбыҙ Имирҙың* (йәки тәүдиндән үркәнләнмеш *индуизм* диненең баш хоҙайы "яҡташыбыҙ" *Шиваның)* атрибуты -- Өс Донъяны ла тергеҙергә лә, үлтерергә лә һәләтле мөҡәддәс ҡоралы һаналған. "Шива" исеменең килеп сығышы ла башҡорт теленә бәйле, нигеҙендә Башҡортостандың хәҙерге Эстәрлетамаҡ районындағы изге Өс Убаға (гермафродит Дәү Хоҙай Имирҙың инә яҡ яртыһының ҡуш имсәген, имсәк баштарын һынландырған Ҡуш-тау һәм Йөрәк-тау, Шәке-тау һындарына) табыныу йолаһы ята, быны этимология дәлилләй:

Өсуба -- Асаба (Әсә-Апа) -- Суба/Шива йәки:

Суба -- Сома (зороастризм диненең хоҙайбикәһе) **-- Сомай/Һомай/Умай** ("Урал батыр" эпосындағы хоҙайбикә). Шулай итеп, Һомай (Умай, Сома), Дәү Хоҙайыбыҙ Имирҙың Әсә (Инә) күкрәгенең изге йәне, бер юлы Өс Донъяны ла ярлыҡап, әҙәми зат ҡиәфәтенән ҡанатлы ҡош ҡиәфәтенә лә күсеп, Ер шарының көньяҡ яртыһында -- аҡ ҡош, төньяҡ яртыһында ҡара ҡош рәүешендә осоп йөрөй. Түбәһенә изге Өс Уба ултыртҡан әҙәми затлы Һомай/Умай һүрәтен ғәзиз бабаларыбыҙ хәҙерге Көньяҡ Ҡаҙағстандағы Кесе Ҡаратау һәм Таулы Алтайҙағы Ҡудырға төбәге ҡаяташтарына яһап ҡалдырған (М.Г. Медоев. Гравюры на скалах. Алма-Ата -- 1979, 57-енсе һәм 60-ынсы һүрәттәр):



Һомай һулдан уңға: 1. Ҡаҙағстандағы. 2. Таулы Алтайҙағы

Һәм йәнә:

Әсә-Аба -- Әсә-Атаҡ (Әсә-Аба -- Шүлгән-апа имгән һул имсәк башы Шәке-тау; Әсә-Атаҡ -- Урал-ата имгән уң имсәк башы Йөрәк-тау) **-- Сәбастаҡ/Свастика** (башҡорт-арийҙарҙың төп тамғаһы). "Свастика"ның боронғо тулы әйтелеше "ҡушала": **Асаба** (Аҫаба) -- **Әстәк** (Иштәк); былар иһә башҡорт халҡының игеҙәк төп ырыуҙарының исем-атамаларынан ғибәрәт: **Аҫаба** -- Шүлгән-апа тоҡомо *Үҫәргән*; **Иштәк** -- Урал-ата тоҡомо *Башҡорт*. Шулай уҡ бер оя этнонимдар ҙа ошонан:

өс-уба-әр -- сувар/самар/сумар/шумер/субур/себер.

Элегерәкке китабымда (Йыһат Солтанов. Хәтерхитап. "Китап" нәшриәте, Өфө -- 2002, 169 -- 171-енсе биттәр) Шиваның тәүҙә үҙебеҙҙең хәҙерге Баймаҡ районы Темәс ауылы эргәһендәге ***Яғалса*** (һиндостанлылар яҙыуында *Ҡаялса*) тауында тилереп йөрөү мажараларын таныта биреп ҡуйғайным, индуизм динләр шул "яҡташыбыҙ"ҙың ***өсйәп***

тоттортоп яһалған һынына табына. Башҡорт-болғар батшалары бородан уҡ ер йөҙөндә Дәү Хоҙайҙы кәүҙәләндереүсе һаналғанлыҡтан, ошо ***өсйәп (трезубец)*** уларҙың да һәм уларҙан бөтә евразия ҡитғаһына таралып батшалыҡ иткән нәҫелдәренең дә (царские династии) хакимлыҡ билдәһе булған, был хаҡта атаҡлы "Сәйет Йәғәфәр Тарихы"нда ентекле мәғлүмәт бирелә.



Өсйәптәр һулдан уңға: 1.Шиваныҡы. 2.Болғар-башҡорттоҡо. 3.Ҡырым ханыныҡы.
4. Украина гербы.

Хәйер, хәҙерге заман урыҫ тарихсылары ла кинәнеп раҫлай быны:

*"До принятия религий "моисеева корня" и алфавитов на основе латинской, кириллической или арабской графики, германцы, славяне и тюрки-кочевники из евразийских степей входили в некую общую культурную сферу, отличную от средиземноморской. Все писали рунами, имели схожие законы, в том числе и престолонаследия, внутрисемейный уклад, нередко - близкие по духу верования. И, что нам особенно важно - геральдику, геральдические принципы. Нет, не ту, к которой мы привыкли: изображения на щитах, символизирующие что-либо в виде картинок, а более лаконичную, ёмкую и… жёстко регламентированную. Речь идёт о **тамгах** или, как стыдливо говорят историки европейской школы, "**личных знаках**", восходящих к рунической письменности... **Трезубец** - изображение тамги Чингиз-хана. В полном соответствии с законами тамгаистики, личные знаки его потомков являются модификациями тамги основателя династии, что можно увидеть на монете Батыя. Подобной же **тамгой-трезубцем** отмечены документы болгарских царей Аспарухидов, Асеней, Шишманов. Родственная тамга **(трезубец)** легла в основу до-"монгольских" личных знаков русских князей-рюриковичей. Учитывая то, что французские королевские лилии - по сути своей стилизованные **трезубцы,** возникает мысль о едином корне наиболее влиятельных правящих династий. И этот корень отыскивается в Северном Причерноморье, правители земель которого в начале 1 тысячелетия н.э. обладали всё теми же **трезубцеподобными** личными знаками. То есть основания считать, что эти создатели династий, упоминаемых впоследствии как "царские", относятся к одному и тому же старинному правящему роду или правящим родам"* (А. Горохов. Белый царь)...

Төбәлгән төбәгебеҙгә ана шулай уйлана-уйлана килеп еттек. Административ идаралыҡтарға ял көнө ине, ауыл кешеһенең йорт-ҡурала ла төрлө мәшәҡәттәре күп, ләкин рәхмәт төшкөрө Әхтәм Әүхәҙи улы Ибәтуллин, Әлшәй районының Илсеғол ауыл хакимиәте башлығы, беҙҙең кес кенә экспедицияны ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеп ҡаршыланы, арымай-талмай көнө буйына кәрәкле урындарға оҙатып йөрөнө.

"Китеш" (Аҫкы Донъяға китеү) тауы... Эре-эре яҫы таштарының күбеһе ергә һеңеп бөткән батшалар зыяраты тигәнебеҙ әлеге көндә мал тояғы аҫтында тамам ташландыҡ хәлдә ҡалһа ла, ҙур ғына майҙанды иңләп, сал-боронғолоғо менән һүрҙе зиһенде. Әгәр тоҫмалдарыбыҙ дөрөҫләнһә, төрлө быуын мәрхүм батшаларыбыҙҙан тыш, моғайын, уларҙың туған-тыумасалары, яҡындары ла ерләнгәндер бында. Әммә дәлилләрлек яҙыу

остоғо, тамға табылырға тейеш, өҫтәүенә ***өсйәп*** тә осраһа, тулы уңыш, тигән һүҙ. Имгәкләп тә үрмәләп төпсөнә торғас, ҡәберташтар яҫыһында юйылып бөтә яҙған берәм-һәрәм сыймаҡтар күҙгә салына башланы һәм -- эврика! -- был ерҙәрҙә һирәк була торған **ырын яҙыу** ҡалдыҡтары, ә бигерәк тә мөһиме, ике гүрҙә **өсйәптәр** -- батша билдәләре табылды!

Насар һаҡланған сыймаҡтарҙың ҡулдан күсермәләрен һәм уларҙың хәҙерге графикала уҡылыштарын бирәм; 1-енсеһендә ырын хәрефтәр ҡатарына, сәйерһетеп, ғәрәп һандары килеп кергән -- ырын яҙмала һандар һүҙҙәр менән генә яҙылғанлыҡтан, ҡыҫҡалыҡ һаҡлау ихтыяжылыр, моғайын. Түбәндәге күсермәлә ғәрәп һандары һулдан уңға, ырын яҙыу уңдан һулға ҡарай уҡыла:



Батшалар зыяратындағы ике *өсйәп* һәм ырын яҙыу ҡалдыҡтары

Мәғлүмәттәрҙе ҡуйын дәфтәремә тркрҡәгәндә хәүеф биләне күңелде: беҙҙең эраға тиклем I -- V быуаттарҙа ташҡа сыйып ҡалдырылған Асылыкүл ырын яҙыуҙарын үткән быуат аҙаҡтарында донъяға фашлағайным, күп тә үтмәй, кемдәрҙеңдер яуыз ҡулы ул таштарҙы юҡ итте, быныһы ла шундай яҙмышҡа тарымаһа ярар ине... Шулай ҙа өмөтөм ҙур: юғары мәҙәниәтле Илсеғол ауылы зыялылары, ауыл хакимиәте башлығы вәхшилеккә юл ҡуймаҫ.

Инде ядкәрҙәргә иғтибар итәйек: береһендә ырын яҙыу ҡатарында ғәрәп һандары ҡулланылыуына ҡарағанда, зыярат бик боронғо, ә осорҙоң беҙгә яҡыныраҡ сиге -- был тирәлә ырын яҙма ныҡлы йәшәгән, ғәрәп яҙмаһы ҡулланышҡа керә башлаған заман. Туҡтамыш менән Еҙекәй иһә, гәрсә беҙгә килеп еткән рәсми ярлыҡтары халыҡ-ара аралашыу сараһы булған ғәрәп графикаһында яҙылһа ла, уҙамандарҙың икеһе лә иҫке ырын яҙыу һаман ҡулланыштан сығып бөтмәгән был төбәк кешеләре бит... Инде өҫтә билдәләнгән 1-енсе хан ҡәберенең ғәрәпсә һанлы датаһына иғтибар итәйек: һижрә **782=**

миләди 1380 йыл. Абруйлы тарихсыларҙың һуңғы заман мәғлүмәттәре буйынса, “***Зимой 1379 года*** ***Тимур снарядил против Мелека огромное войско по главе с эмирами Урок-Тимуром, Щияс-ад-дином тарханом и др., «чтобы они посадили... на престол в Сыгнаке Тохтамыша». Тохтамыш у реки Карабака напал на Тимур-Мелека и после упорного сражения Тимур-Мелек вместе со своим главным эмиром (эмир-эль-эмир) Балтычаком, отцом Едигея, был взят в плен. Тимур-Мелек был казнен. Балтычаку предложили перейти на сторону Тохтамыша, но он остался верным своему хану и был казнен Тохтамышем. Эта казнь главного эмира хана впоследствии явилась одной из причин раздора между Тохтамышем и Едигеем. Оставшись в зиму 1379—1380 г. в Синей Орде,*** весной 1380 г. Тохтамыш, «снарядив бесчисленное войско, двинулся в поход, покорил царство Сарайское и область (иль) Мамая)». (Интернеттан алынды, адресы http://www.kalitva.ru/2007/11/zolotaja-orda.-voennye-pokhody-timura..html). Уға ҡалһа, мин үҙем дә тап ошо хаҡта “Башҡорт батшалары” тигән китабымдың “Башҡорт батыры Еҙекәй” тигән бүлегендә яҙғайным, әммә Аноним Искәндәргә таянып биргән датам -- 1384 йыл -- әле цитатанан күренеүенсә, яңылыш булып сыҡты, сөнки Аҡһаҡтимер Күк Урҙа ханы Тимер-Мәликкә ҡаршы -- Туҡтамыш-ханға ярҙамға ғәскәрен 1379 йылдан 1380 йылға ҡараған ҡыш айҙарында юлландырған һәм Туҡтамыш шуның ярҙамында һуғышта Тимер-Мәлик-хан менән уның ил әмире (премьер-министры) Төкхужа-Балтырсаҡты йәғни Еҙекәйҙең атаһын әсир алып, Күк Урҙала (тарихи Башҡортостанда) икеһен дә үлтергән. Фарсы сығанаҡтарында был эпизод ентеклерәк тасуирлана: “Баш әмир булған Балтырсаҡты, — тип яҙа Аноним Искәндәр, — әсир алынған һәм быҒауланған килеш Туҡтамыш йортона килтерҙеләр. Ул үҙенең тоғролоғо, намыҫлылығы менән дан тотҡанлыҡтан, Туҡтамыш уға әйтте: “Әгәр ҙә һин мине үҙеңдең батшаң итеп таныһаң, башыңдан бер сәс бөртөгөң дә төшмәйәсәк, ә мин үҙеңә лайыҡлы хөрмәт һәм ихтирам күрһәтеүҙән тамсы ла тайпылмай, батшалығым һәм мөлкәтем менән идара ҡылыу теҙгенен хәстәрлекле ҡулыңа тапшырырмын”. Балтырсаҡ нәфрәтле ҡалтыранып яуапланы: “Ҡулдарым бәйле булмаһа, белер инем мин һине ни эшләтергә! Һине үҙемдең батшам урынында күрер булһам, күҙем сыҡһын! Әгәр ҙә ки үҙ хөкөмөң ҡулыңда икән, ошонда уҡ үлтерергә бойор мине лә: батшамдың башын — башым өҫтөнә, кәүҙәһен кәүҙәм өҫтөнә һалһындар, сөнки гәрсә мин унан элек үлмәһәм дә, гүргә булһа ла унан элек керәйем”. Туҡтамыш уның һорауын ҡәнәғәтләндерҙе. Ошонан һуң Үзбәк-хандың дәүләте тулыһынса уның хөкөмө аҫтында ҡалды” (Тизенгаузен, 131-132-се биттәр). Тимәк, Тимер-Мәлик-хан менән Төкхужа-Балтырсаҡ, Еҙекәйҙең атаһы, икеһе бер ҡәберҙә ерләнгән, ә ҡайҙа?.. Шул 1379 -- 1380 йылдар ҡышын Туҡтамыш-хан Күк-Урҙала үткәрҙе, тип асыҡ әйтелгән бит, йәғни тарихи Башҡортостан ерендә. Аңлашыла ки, Тимер-Мәлик-хан менән Төкхужа-Балтырсаҡты (Еҙекәйҙең атаһын) хан ҡаршыһына тотоп килтергәс, күпмелер ваҡыт тәфтишләү (допросы), өгөтләүҙәр булғас, тап ошонда ҡәбергә һалғандарҙыр, -- ҡәберташта һаҡланып ҡалған баяғы өсйәп билдәле һәм һижрә менән 782 йыл датаһы шулай һиҙемләргә мөмкинлек бирә. Ирекһеҙҙән уй килә: йолаларыбыҙ буйынса, Еҙекәйҙең йәне булһа ла ата-бабалар еренә, атаһы янына осоп ҡайтырға тейеш...

Аяғөҫтө фекер алыштыҡ:

-- Ә шулай ҙа император ғали янаптары бында юҡ һымаҡ... -- тине Әнүәр юлдашым.

-- Эйе. Туҡтамыш -- ҡануни император, ә Еҙекәй император дәрәжәһендәге шәхес. Ундайҙарҙың урыны Дәү Хоҙайға яҡынырaҡ.

-- Күктәме?.. -- Уйға ҡалды Әхтәм Әүхәҙи улы.

-- Мәҫәлән, заманаһының бөйөк шәхестәренән хәҙерге Йәнсура районында Һарыбил батыр һәм Ерәнсә-сәсән, Усалы районында Берке император, Бөрйәндә Бабсаҡ-бей бейек тау баштарына ерләнгән...

-- Һем... әләйһә, әнә тора ундай ике бейек тау! -- Гиҙҙереүсебеҙ (гидыбыҙ) күгәреп торған үрҙәргә ымлап күрһәтте.

Һулдан уңға: 1. Еҙекәй батыр ерләнгән тау. 2. Туҡтамыш-хан ерләнгән тау

Изге тауҙар егенән урғылып сығып, изге шишмә ағыла, ерле халыҡ уны Еҙекәй шишмәһе тип атаған -- шунан башланыҡ гиҙеүҙе. Сығанаҡты ҡәҙерләп ҡоролған биналары эске һәм тышҡы ҡоймалар бурап ҡурсаланған, бер-нисә гектар майҙанында йәш ҡарағайҙар үҫә. Заманса юғары кимәлдәге төҙөклөк, ҡомартҡыларға ҡарата халыҡ ихтирамы һоҡландырҙы. Изге сығанаҡ (һыуы көмөшлө икән) улаҡ буйлап икенсе күркәм биналағы ҡатын-ҡыҙ һәм ир-ат өсөн айырым бүлмәле ҡойоноу бассейндарын тултыра. Көҙгө көндөң һалҡынса һулышы тойолоуға ҡарамаҫтан, Әнүәребеҙ түҙмәне -- һыуға сумып, шифаһын алып сыҡты.

Һулдан уңға: 1. Изге шишмә. 2. Изге һыуҙа ҡойоноу

“Тимер арба”ларҙы түбәндә ҡалдырып, Еҙекәй тауына үрләйбеҙ. Яҫы таштар тирәсләгән сал ҡәбер бүртек убанан хасил, эргәһендәге ташбүкәндә ғәрәп хәрефле ядкәр ҙә булған, тик уның күп өлөшө ҡулсыр замандаштарыбыҙҙың кириллицалы сыймаҡтары аҫтында юғалып, бөхтә итеп яҙылышлы бер һүҙ генә уҡыла: “...йәмил...”, был (жәмил) иһә ғәрәпсә матур, гүзәл, күркәм, яҡшы, сибәр мәғәнәһендә. Эйе, Еҙекәй баба сифаттары был -- Ибн-Ғәрәбшаһ тасуирлауына ауаздаш:

<u>«Был он очень смугл (лицом), среднего роста, плотного телосложения, отважен, страшен на вид, высокого ума, щедр, с приятной улыбкой, меткой проницательностью и сообразительностью, любитель ученых и достойных людей, сближался с благочестивцами и факирами, беседовал (шутил) с ними в самых ласковых выражениях и шутливых намеках, постился и по ночам вставал (на молитву), держался за полы</u>

шариата, сделав коран и сунну да изречение мудрецов посредником между собою и Аллахом всевышним... Дни его царствования были светлым пятном на челе веков, и ночи владычества его - яркою полосою на лике времен».

Асы-аяуһыҙ тәҡдир: бер үк халыҡтың ике титаны ғүмерҙәре буйынса бер-береһенең башына етергә тип, Ибн-Ғәрәпшаһ яҙыуынса, ун алты тапҡыр ҡанығып һуғышһалар ҙа, ахырында шул ҡанығыуҙарының ҡорбаны булһалар ҙа, баҡый донъяла ла йәнәш-ҡаршы торорға яҙған...

Һулдан уңға: 1. Еҙекәй ҡәбере янында Й. Солтанов, Ә. Ибәтуллин. 2. Шундағы яҙыу ҡалдығы

Миңә ҡалһа, “Башҡорт батшалары”нда был бөйөк заттың ҡәберен, юҡтан тарих яһарға һәүәҫ ҡаҙаҡ имештәренә таянып, Ырымбур өлкәһе Биләй районындағы Яйыҡ буйындағы убала, тип аҡҡа ҡара менән яҙһам да, аҙаҡ “Еҙекәй ҡәбере”нең йәнә икенсе бер урында -- Үҙәк Ҡаҙағстандың Олотау түбәһендә лә изгеләштерелеүен белгәс, тәүге раҫлауым һүрелеп, халҡыбыҙ хәтере һаҡлаған ошо тәңгәлгә күҙ төбәй инем, шул уҡ ваҡытта Еҙекәй ҡәбере тигәндәре Туҡтамыш-хандыҡы булыуы ла ихтимал, тигән уй килә ине. Бына әле Әхтәм уҙаман: “Анау торған изге урынды ла зыярат ҡылайыҡ”, -- тип, һулдараҡ ҡалҡынған икенсе тау түбәһенә килтергәс, ундағы оло убаны ураҡан таш бураның бөйөклөгөн күреп иҫебеҙ китте -- Туҡтамыш-хан ҡәбере тап ошолор!

Император ҡәберенең дөйөм күренеше. Уңдан баҫып торғаны Ә. Йомағолов

Тулҡынланып эсле-тышлы тикшерҙек; шуныһы сәйерерәк -- бер ниндәй ҙә яҙыу-фәлән күренмәй: әллә, тим, баяғы Асылыкүлдекеләй, яуыз йәндәр ядкәрташын урлағандармы? Әллә был билдәһеҙлек -- зыяратты мәрхүмдең дошмандарынан ҡурсалау әмәлеме?.. Бура эсендә шомландырғыс оло ям -- Әхтәм уҙамандың аңлатыуынса, 1990 йылда кемдер (исем-фамилияһын Өфөләге Мираҫ Иҙелбаев белә, тиҙәр) сал ҡәберҙе аҡтарҡан, соҡоп сығарылған һөлдәне һәм ҡылыс һабын алып төшөп, баҫыуҙа эшләп йөрөүсе бер-нисә колхозсыға күрһәткән. Имештер ҙә тап шул ваҡиға артынса уҡ СССР дәүләте емерелеүен, бөтә донъя экономик кризисы билгә килтереп һуғыуын бер килкеләр ошо вәхшәткә бәйләп, 1941 йылда Аҡһаҡтимер һөйәктәрен ҡуҙғатыу

арҡаһында икенсе бөтә донъя һуғышы башланыуға тиңдәй... Һәр хәлдә, мин был бөйөк зыяраттың император Туҡтамыштыҡы икәнлегенә инандым да бәғзе бер урындарҙа ошолай уҡ һөлдәләре соҡоп алып олаҡтырылған Ил Инәһе Бәндәбикә, Бабсаҡ ҡәберҙәренә тиңләнем.

Күреп торабыҙ: бында халыҡ ағыны һис өҙөлмәй, яңынан-яңы быуындарыбыҙ ата-баба тарихтарын ҡәҙерләй. Йәше-ҡарты изге тауҙарға менеп, зыярат ҡылып төшәләр ҙә, изге шишмәнән һыу алып, ҡойоноп та сығалар. Йәне теләгән кешегә ауылда, тән ризығы менән бергә, рух аҙығы ла етерлек -- күркәм мәҙәниәт усаҡтары, кибеттәр, мәҙрәсәле мәсет бар. Республикабыҙ хөкүмәте Башҡортостанда туризмды үҫтереүгә, уны замансa юғарылыҡҡа күтәреүгә иғтибарын арттырҙы -- яҡын киләсәктә Илсеғол ҡомартҡылары ла тейешле баһаһын алыр, ошо гүзәл төбәкте лә район үҙәге менән, федераль трасса менән шыма асфальт юл тоташтырыр тип ышанам.

02.11.2009

Эпилог

Үкенескә ҡаршы, ата-баба ҡәберҙәрен йәберләү, халыҡ хәтерен тапау, тарихыбыҙҙы һанға һуҡмау һәм боҙоу касафаты аң-тоңо түбән бәндәләребеҙҙе генә түгел, ә үҙҙәрен ил ҡаймағы – зыялылары һанап йөрөүсе ҡайһы бер инсандарыбыҙҙы ла урап үтмәгән. Улар ғәҙәттә яңы “демократик Рәсәй” күренеклеләре -- чиновниктар портфелен усында һәлмәкләткән, йәки башына салма ураған, кеҫәләрендә юғары белем, ғилми дәрәжә дипломдары йөрөткән әүәлге большевиктар – үҙҙәренең көндәлек “изге” маҡсаттарына яраштырып тарихты теләгәнсә боҙоу, йәки яңы тарих яһау улар өсөн ҡәҙимге күнегелгән хәл. Шуның сағыу саткыһы быйыл өҫтә хикәйәт ҡылынған Миәкә районы Илсеғол ауылы янында төрлө ҡатлам диндарҙарҙың һәм милли чиновниктарыбыҙҙың оло йыйыны рәүешендә уҡмашып, халыҡ хәтере ҡәҙерләп һаҡлаған, ғилми китаптарыбыҙҙа ташҡа баҫылып сыҡҡан тарихи изге ҡомартҡыны, Еҙекәй батыр зыяратын, заманында Мөхәммәт пәйғәмбәр Башҡортостанға юлландырған Зөбәйер-сәхәбәнең зыяраты тип иғлан ҡылып, шуға бәйле мемориал комплекс ҡороп доға ҡылалар (“Башҡортостан” гәзитенең 2011 йыл 17 июнь һанындағы “Милләтебеҙҙең изге бурысы” мәҡәләһе). Сәхәбәләрҙең ерләнгән урынын эҙләп табып зыярат ҡылыу – изге бурыс, әлбиттә, ләкин ул һис тә шулай уҡ изге башҡа әруахтың ҡәбере өҫтөндә башҡарылырға тейеш түгел, был үҙе оло гонаһ. Борон-борондан уҡ Ислам нурын таратыусы изгеләребеҙҙең хәҙерге Шишмә районындағы Аҡзиратта тыныслыҡ табыуы мәғлүм, һәм унда яҙыуҙары юйылып бөткән оло-оло ҡәберташтары ла бар – баяғы изге мемориал комплексты ниңә тап шунда бина ҡылмаҫҡа ине?..

Илсеғол ауылы янындағы сетерекле ваҡиғаны журналист Әлфиә Батталова Башҡортостан юлдаш телевидениеһынан ихлас гөрләтеп һәм һоҡланып тамаша иттертте, әммә бер-ике йыл элек кенә шул уҡ ханым шул уҡ каналда шул уҡ зыяраттың халыҡ хәтере буйынса ***Еҙекәй ҡәбере*** икәнлеген баҡтыртып күрһәткәйне...

16.09.2011

Бөйөк шәжәрәләребеҙҙең береһе

Ошоғаса килеп еткән һәм билдәле булған иң тәрән йөкмәткеле, бай мәғлүмәтле Үҫәргән батшалар шәжәрәһенең береһе был, ә улар донъяла өсәү:

1. XX быуаттың 20-нсе йылдарында мәшһүребеҙ Сәғит Мерәҫев донъяға сығарған, Үҫәргән батшалар шәжәрәһендәге аҫыл зат Тәтегәс-би (1565 йыл вафат) үҙе әйтеп яҙҙыртып ҡалдырған “Нуғай ылыҫының шәжәрәһе”; совет этнографы Р.Ғ. Кузеев уны, моғайын, үҫәргәнле Тәтегәс-би Юрматы ырыуының бийе булғанға күрәлер, “Шежере башкир племени Юрматы” тип атаған (Р.Г. Кузеев. Башкирские шежере. Уфа – 1960, 27-нсе бит), ғәмәлдә ул Үҫәргән шәжәрәһе.

2. XIX быуат аҙаҡтарында хәҙерге Йәнсура (иғтибар! – шәжәрәләрҙә был бабабыҙҙың исеме тап шулай “Йәнсура” тип яҙылған, ә “Ейәнсура” түгел һәм уның районға исемен биргән Бәкәтәр ауылы ла халыҡ телендә Йәнсура тип йөрөтөлдө) районы Байыш ауылы муллаһы Муса хәҙрәттән күсереп алынған бөйөк “Үҫәргән тәүәрихе”, ә Р.Ғ. Кузеевтың баяғы китабында унан бик бәләкәй өҙөк кенә килтерелеп, ни өсөндөр “Шежере башкир племен Бурзян, Кыпсак, Усерган и Тамъян” тип исемләнгән (75-енсе бит, VII), гәрсә шәжәрә тулыһынса Үҫәргән батшаларыныҡы булһа ла. Был ҡомартҡы баштан-аяҡ беренсе (һәм әлегәсә һуңғы!) тапҡыр мин фәҡирегеҙ тарафынан тәүҙә -- “Ағиҙел” журналында, шунан һуң китапта (Йыһат Солтанов. Башҡорт батшалары. Сыңғыҙ-хандан алып Урыҫ дәүләтенә ҡушылғанғаса. Өфө -- 2007) ташҡа баҫтырылды.

3. Большевиктар тарафынан хәҙерге Ырымбур өлкәһен ҡораҡлағанда ҡырҡып биреп ҡалдырылған элекке Йәнсура районының үҙәге Бәкәтәр-Йәнсура ҡасабаһында йәшәгән, урыны ожмахта булғыры ырыуҙаш аҡһаҡалыбыҙ Рәхмәтуллин Мөким Бәҙретдин улынан үткән быуат баштарында уның ауылдашы Илбулдина Сафия Муллағәли ҡыҙы күсереп алған “Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе”, ә хәҙерен шуны беренсе тапҡыр донъяға сығарыу өсөн бөтә әҙерлек эштәрен үҙем башҡарҙым.

Шуныһы ла ҡиммәтле: “Үҫәргән тәүәрихе”ндәге кеүек үк, шәжәрә быуындары тәңгәлдәренә бик мөһим тарихи мәғлүмәттәр, ауыл исемдәре һ.б. теркәлгән – был баҫмаға шулары ла индерелде. Ошо юлдарҙың авторы теркәгән өҫтәлмәләр иһә дүрткел йәйәләр эсенә һалынды. Хәҙерге яҙылышта ҡабул ителгән “бей” һүҙе төп нөсхәләгесә “би” килеш ҡалдырылды.

Был ҡиммәтле сығанаҡтан байтаҡ ауылдарыбыҙҙың кем тарафынан нигеҙләнеүе, ҡайһы фамилияларҙың кем исеменән башланыуы асыҡлана. Һәм шуныһы ла мөһим: әгәр “Үҫәргән тәүәрихе”ндәге нәҫел бауҙары боронғораҡ осор быуындарында осланһа, бында шуларҙың байтағының дауамдарын шәйләргә, һуңғыраҡ осор быуындар бауын ялғарға була.

Йәнә бер мөһим нәмәгә иғтибар итәйек: изге ҡомартҡыбыҙ “Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе” тип аталған, -- ни өсөн? Сөнки хәҙер айырым ырыу булып йөрөмөш Түңгәүерҙең, бер килке башҡалар кеүек үк, ошо Үҫәргән ырыуынан саталанып сығыуы билдәле һәм мин быға комплексы тикшеренеүҙәр аша инандым. Шәжәрәнең Түңгәүер бауы башында Тимер тип исемләнгән бабаның Туҡсабанан башлап туғыҙынсы быуын Тимерҡабыҡ-би Арбан улы икәнлеген ышанып әйтә алам һәм ул быуындар һанынса ла тап килә. Әйтәйек, 1533 йылда йәшәгән Ябынсы-яҫауыл Һырыш улы һәм 1933 йылда Өфөләге “Йәш төҙөүсе” гәзитендә эшләгән һәм Мәсәлим Вәлиевтың “Аҡ ҡайын” йырының һүҙҙәрен яҙған Зыя Мөхәммәтсадиҡ улы араһы ун алты (16) быуын тәшкил итеп, фәнни ҡабул ҡылынған иҫәп буйынса ул дүрт йөҙ (400) йыл тәшкил итһә, Түңгәүер

ырыу сатаһының башында торған Тимер-батырҙан алып уның нәҫел бауы осондағы Әкрәм Мөхәммәт улы, Вәхит Ғиззәт улы, Рамаҙан Йыһанша улы араларын – шулай уҡ ун алты (16) быуын, Ғибат Һибәт улы, Айтул Ишбулат улы, Мостафа Ғәлиәскәр улы араларын – ун биш (15) быуын, Үмәр Ишмөхәммәт улы араһын – ун өс (13) быуын, Зәйнәғәбдин Рахманғол улы араһын – ун ике (12) быуын, Фәхретдин Яҡуп улы араһын – ун ете (17) быуын, Ибраһим Шакирйән улы араһын ун һигеҙ (18) быуын тәшкил итеп, өҫтә күрһәтелгән Ябынсы-яҫауыл – Зыя арауығы һуҙымына тап килә. Шул йәһәттән байтаҡ соҡсоноу эштәре башҡарҙым, һөҙөмтәһе уның түбәндәгеһе.

Ырыуҙар ҙа мөһәбәт дәү тирәктәй: төп-олондан (тәү ғаиләнән) ҡуш саталы (игеҙәк) ырыуҙар ботаҡлана, ботаҡтарҙан сыбыҡтар (аралар), ә сыбыҡ остарында йәнә яңы ырыу бөрөләре яра — ботаҡ сатаһынан алып осонаса булған ҡәүем — ҡәбилә хасил ҡыла. Ә олондан тарбаҡланмыш көллө ботаҡтар йыйыны тирәк ябалдашына — халыҡтарҙан (милләттәрҙән) торған кешелек донъяһына әүерелә. Шуға күрә башҡорт халҡының ырыуҙарын (ҡәбиләләрен) тикшергәндә уларҙы бер-береһенән айырымлыҡта түгел, ә бөтәһе бер олондан һәм ботаҡтарҙан саталанып тармаҡланған, береһенән береһе тыуған итеп ҡарарға кәрәктер. Шул йәһәттән аҙ өйрәнелгән, ошоғаса баҫмаларҙа хатта ырыу шәжәрәһе лә сағылмаған Түңгәүер ырыуы ҡыҙыҡлы.



Һүрәттә: Донъя-ғаләмдең 12 хоҙайы һәм 2 һын-енесле Дәү Хоҙай

Үҙе урынлашҡан 7 (йәки 14 ярты) ҡаты

Түңгәүер ырыуының тәғәйен Үҫәргән ҡәбиләһенән тармаҡланып килеп сығышы тураһында журнал уҡыусыларыбыҙ филология фәндәре доҡторы Азат Камаловтың ҡыҙыҡлы ла, фәһемле лә хеҙмәтенән (“Ватандаш” 2001/4) арыу уҡ хәбәрдар булғанлыҡтан, дилбегәне ҡыҫҡараҡ тотор өсөн, әллә ни күп өҫтәлмә мәғлүмәттәр сурытмайынса, Сыңғыҙ-хандың фарманында ҡаңғыраттарҙың (ә шәжәрәлә Ҡаңғырат — шул уҡ Түңгәүер) “Күк төйәкле торна ырыуы” тип аталыуын (тимәк, Күк-анаға һәм торнаға табыныусы Үҫәргән нәҫеле!), ә ҡаҙаҡ ырыу шәжәрәләрендә иһә Ҡанлы (шул уҡ Ҡаңғырат йәки Үҫәр-Ҡан) ырыуын “Уйсундың (йәғни Үсен-Үҫәргәндең. — *Й.С.*) улы” тип билдәләүҙәрен иҫкәртеп кенә үтәйек. Сөнки бындағы бурыс — баяғы ғалим фекеренең һәм мәғлүмәттәренең төп юҫығын ҡеүәтләп, шул уҡ ваҡытта “Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе” уның ҡулы аҫтында булмауы сәбәпле иғтибарын йәлеп иттертмәгән ҡайһы бер мөһим мәғлүмәттәрҙе килтереүҙән ғибәрәт (хәҙерге һәм киләсәк тарихсылар өсөн).

Ғалим нигеҙ итеп алған Түңгәүер ырыу шәжәрәһенең төп кәмселеге — өҙөк кенә булыуҙа. Сөнки ул шәжәрә үҙҙәренең иң боронғо тарихын шаҡтай уҡ онотоп ебәргән, урта быуаттар осорон да яҙа-йоҙа ғына шәйләгән билдәле бер төбәктең әһелдәре тарафынан үҫәргәнле төп-олондан мөнтәлеп йәғни Түңгәүерҙе саталандырыусы Әсә ырыу Үҫәргәндең шәжәрәһенән өҙөп алынып, Түңгәүерҙең Үҫәргәнгә ҡағылышһыҙ "мөстәҡил" шәжәрәһе рәүешендә төҙөлгән, йәғни шәжәрә сатағы үҙенең тере ботағынан киҫелгән... Шул мөнтәүле "мөстәҡиллек" касафаты шаҡтай йәшерәк быуынға ла ҡағылып (Түңгәүер тарихын эҙәрмәнләүсе журналист С. Ярмуллин мәҡәләләрен ҡарағыҙ), ғөмүмән, башҡорт халҡының тарихын төпсөнөүселәрҙе аймылыш ҡылыу ихтималлығы булғанлыҡтан, башҡорт ырыуҙарының һәм ҡәбиләләренең береһе лә елдән еленләп тыумағанлығын, бәлки Донъя-Ғаләм-Тереклек яратылғандан уҡ бер-береһенә кендектәре берешлеген ябай ғына алымда — донъя халыҡтарының мифтарына нигеҙләнмеш һыҙмала күрһәтәбеҙ.

Быйндағы буй арҡау-һыҙыҡ менән ҡап-уртаға бүленмеш ҡатлы-ҡатлы түңәрәктәрҙең өҫкө яҡ яртыһы -- Донъя-Ғаләм-Тереклектең тышҡы (йәғни **Ата**) яҡ яртыһын (Евразия ҡитғаһының төньяҡ-көнсығыш яғын); ә аҫҡы яҡ яртыһы -- Донъя-Ғаләм-Тереклектең эске (йәғни **Әсә**) яҡ яртыһын (Евразия ҡитғаһының көньяҡ-көнбайыш яғын) тәшкил итә.

Изге китап Тәүраттан (Библиянан) уҡ билдәле булыуынса, Дәү Хоҙайыбыҙ хасил ҡылмыш дөйөм Донъя-Ғаләм-Тереклек бөтәһе бер-береһенә ҡатланмыш ете уратанан (түңәрәктән) ғибәрәт икән: һыҙмалағы үҙәктән тороп һанағанда был (ғәрәп цифрҙары менән бирелгән) тәүге өс уратала — үҙебеҙ ише бәндәләр, ҡалғандарында беҙҙән өҫтөн хоҙайҙар йәшәй, имеш...

Һыҙмала сағылыуынса, кешелек донъяһының иң үҙәгендәге яртылыҡтарҙа урынлашҡан 1) игеҙәк Шүлгән-Һауа менән Урал-Әҙәм; уларҙан саталанған 2) Шүлгән-Әҙәм сиреүҙәре Аҫаба – һыу-һауа эйәләре һәм Арата – ер-тау эйәләре; 3) шуларҙан уҡмашҡан тәү ырыуҙар Әсәр-Аҡан (Сәр-Ҡан) – Үҫәргән тәүырыуы һәм Абасаҡ-Арат – Башҡорт тәүырыуы; һәм шул бәндәүиҙәр урынлашҡан өс урата яртыларында ике тәүырыуҙан саталана бала-ырыуҙар: "әсәр-аҡан"дың (Үҫәргәндең) Әсә яҡ яртыһы "аҡан"дан (Ҡандан, Ҡаңғынан) — "аҡәпсәк" (Ҡыпсаҡ) ырыуы һәм "абас-аҡ-арат"тың (Башҡорттоң) Әсә яҡ яртыһы "абас"тан -- "абасанаҡ" (Бәжәнәк йәки Печенег) ырыуы тыуған. Әйткәндәй, күренекле ғалимдарҙан Н. Аристов та ҡыпсаҡтарҙы ҡаңғыларҙан килеп сыҡкан тип һанай.

Борон идара итеүсе бәндәләр (биҙәр, хандар һ.б.) ҡағиҙә буларак, әсәләр хакимлыҡ ҡылған матриархат дәүеренән үк нығынып ҡалған ҡанундарға ярашлы, Эске Башҡорт тип аталған Үҫәргән (**Әсә** яҡ) батшалар шәжәрәһендәге шәхестәрҙән тәғәйенләнеүен иҫәпкә алһаҡ, өсөнсө ураталағы "әсәр-аҡан" (йәки сары Көн — һары Ҡояш) — йәғни хәҙерге әйтелештәге *Үҫәргән* этнонимының беренсе яртыһы "әсәр" — "һыу-ер" тигәнде лә аңлата икән һәм шулай уҡ бер үк ваҡытта ул "сәр" (царь) — Үҫәргәндән тыуған бөтә **Ата** яҡ ырыуҙарҙың башлығы йәғни Тышҡы Башҡорт (Ата яҡ) ырыуҙарының башбабаһы ла, батшаһы ла булып тора.

Ә этнонимдың икенсе яртыһы "аҡан" — "һөт-күк" тигәнде лә аңлата һәм шулай уҡ бер үк ваҡытта был "кан" (хан) — Үҫәргәндән тыуған бөтә Әсә яҡ ырыуҙарҙың башлығы йәғни Эске Башҡорт (Әсә яҡ) ырыуҙарҙың башбабаһы ла, ханы ла булып тора.

"Аҡан" һүҙенең алдына ҙурлау эпитеты "аҡа" (аға, ағай) теркәп әйтелһә, хасил була "аҡа-аҡан" — ҡаҡан//ҡаған (император) титулы. Ә шул уҡ һүҙ аҙағына теркәлеп

әйтелеү һөҙөмтәһендә “аҡан-аҡа” — Ҡанаҡа//Ҡаңғы (Үҫәргәндән айырымланған ырыуҙың исеме) килеп сыҡҡан. Ҡаңғыларҙың мифик Көн-Өфө (Ҡәнифә) юлы буйлап алыҫ көньяҡҡа, Күк (Һинд) оҡеаны ярҙарынаса, таралып йәшәгән еренең көньяҡ ҡырыйы — хәҙерге Һиндостандағы Ҡаңғы (Ганг) йылғаһы буйҙары ул. Шуға ла “Ҡанҡа” рәүешендәге был этнонимды иң боронғо яҙма ҡомартҡыларҙа — “Махабхарата”ла (Һиндостан) һәм Авестала (Иран) күрәбеҙ.

Билдәле булыуынса, Уралдағы мифик Ер Кендеге булып һаналмыш иң боронғо ҡалабыҙ Арҡайымдан сатрашланып башланыусы мифик Көн-Өфө (Ҡәнифә) һәм Ҡуңыр-Буға юлдарының дүрт осо Евразия ҡитғаһының дүрт ситенә олғаша: беренсеһенең ике осо Күк (Һинд) һәм Ҡара (Төньяҡ Боҙло) оҡеандарға (Ҡуңыр-Буға юлы), икенсеһенең ике осо Һары (Тын) һәм Ҡыҙыл (Атлантик) оҡеандарға (Көн-Өфө юлы) барып сыға. Көн-Өфө юлы буйлап таралыуҙарында бик боронғо бабаларыбыҙ әсәрҙәр (хәҙерге әйтелештәге үҫәргәндәр) — үҙҙәренең юлбашсыһы итеп соро (Ата) бүрене һанаған (Америка аборигендарында был соро — зорро, урыҫта серый волк), ҡанаҡтар (хәҙерге әйтелештәге ҡаңғылар) — ҡанаҡ (ҡунаҡ, киноҡ, кәнтәй) йәғни Әсә бүрене юлбашсы иҫәпләгәндәр. Ә шул уҡ юлдағы ҡатайҙарҙың юлбашсыһы — аҡ-атаҡ (аҡ Ата бүре, шунан хасил аҡ-атай -- ҡатай), ҡыпсаҡтарҙыҡы — аҡ-Әпсәк (аҡ Әсә бүре, шунан хасил аҡәпсәк -- ҡыпсаҡ) булған. Былар барыһы башбабабыҙ Шүлгәнде имеҙеп үҫтергән мифик Әсә-Бүрегә (юлбашсыға) бәйле.

Ҡуңыр-Буға юлы буйлап таралыусы бик боронғо бабаларыбыҙ абоҙаҡарҙарға (башҡорт-болғарҙарға) иһә быҙау-ир — Үгеҙ юлбашсы булған, ә абоҙанаҡтарға (бәжәнәк-һундарға) абоҙ-анаҡ (боҙ-анаҡ йәки боҙ-инәк) — боҙ Һыйыры (Бизон) юл башлап барған. Былар барыһы башбабабыҙ Уралды имеҙеп үҫтергән мифик Бизон-Һыйырға бәйле. Бәғзеләргә әкиәт кенә булып күренмәле был мәғлүмәттәр тарихыбыҙҙы дөрөҫ аңлап яҡтыртыуҙа ифрат кәрәкле булып, боронғо башҡорт ырыуҙарының Уралдан алып китғаның һәр осонаса ҡайһылай барып сығыуҙарын аңларға ярҙам итә.

Хәҙерге Түңгәүер//Таңғауыр ырыуына килһәк, шәжәрәлә уларҙың башбабаһы итеп яҙылған Ҡаңғырат — Ҡаңғы-ир-ат (йәғни Ҡаңғы ырыуының ир-аты, халҡы) тигән һүҙ ул; был иһә Түңгәүер ырыуының, Ҡыпсаҡ ырыуы һымаҡ уҡ, туп-тура — Ҡаңғынан, ә Ҡаңғы үҙе, өҫтәрәк күреүебеҙсә, Үҫәргәндән тармаҡланып сыҡҡан ырыуҙар икәнлеген иҫбатлай. Ошоно ныҡ иҫтә тоторға кәрәк: әгәр тарихтың төрлө осорҙарында, әйтәйек, Ҡунғырат-би, Түңгәүер-би, Үсен-би, Нуғай-би, Башҡорт-хан, Урыҫ-хан кеүек атамалар күҙгә салынһа, был хәл иһә шул биҙәрҙең һәм хандарҙың, үҙ исемдәре (мәҫәлән, түңгәүерҙәрҙең баш бабаһының исеме Тимер йәки Тимерҡабыҡ) менән түгел, ә шулар етәкләмеш ырыу-ҡәбилә исемдәре менән аталыуҙарын күрһәтә.

Түңгәүерҙең (йәки Дуңгәүерҙең) туп-тура Ҡаңғы аша Үҫәргән дауамы икәнлеген ул ырыу исеменең баяғы мифик Ата бүрегә бәйлелеге лә дөрөҫләй. Этимологияһын тикшерһәк, ошолай килеп сыға:

Атан-аҡ-абар (ата-аҡ-бүре) — танаҡ-абар//данаҡ-абар — Танғауыр//Түңгәүер. Б.э. тиклем һәм б.э. баштарында был “данаҡ-абар” исеме менән Үҫәргән ҡәбиләһенең Ата бүрене юлбашсы итеп һанамыш төньяҡ-көнсығыш сатаһын атағандар; урта быуаттарҙа иһә ошо исем шул уҡ Үҫәргән-Ҡаңғынан тармаҡланмыш яңы ырыуға бирелеп, әлеге көндәге “Түңгәүер” булып йөрөй... Бик боронғо (хәҙерге “Түңгәүер”гә тиклемге) замандарҙа Уралдан алып Ҡафҡазғаса, артабан Көнсығыш Европа үтәләй Италия һәм Грецияғаса барып еткән Үҫәргән сатаһы абарҙар (йәки Ҡафҡаздағы аварҙар) — Ата бүрегә эйәреүсе шул уҡ үҫәргәндәр ул. Әйткәндәй, б.э. тиклем VII — IV быуаттарҙа тап

ошо Тәүтөйәгебеҙҙә — Иҙел — Урал далаларында гөрләтеп донъя көткән һәм тарихсыларға “савромат” исеме менән билдәле булған, ә аҙаҡ килеп шул исемдең ҡыҫҡартып әйтелешендә “сармат” тип аталып, б.э. тиклем III быуат — б.э. IV быуаттарында Уралыбыҙ артындағы Тубылғы (Тобол) йылғаһынан алып Көнбайыштағы Дунай йылғаһынаса йәйрәп йәшәгән данлы бабаларыбыҙҙың да бөйөк Көн-Өфө юлында изге “Әсә-бүре-аба”ға эйәреүсе “Әсә-бүре-аба-т”тар икәнлеген (һуңғы “т” — боронғо күплек ялғауы) йәғни ҡыҫҡартып-шымартып әйтелештәге “савромат”тар булып, шул уҡ үҫәргәндәр икәнлеген тикшереп ҡараусы ла, телгә алыусы ла юҡ. Ошо уҡ Үҫәргән ҡәбиләһе “савромат”тың изге Ата-бүре “сары-аба-ата”ға (һоро-апа-атаға) эйәреүсе бер сатаһы сарабата//сарамата (сармат) — жарамата//юрматы тип атала башлай — хәҙерге башҡорт халҡының Юрматы ырыуы кешеләре...

Үҫәргән тармағы данаҡ-абарҙарҙың заманында баяғы Көн-Өфө юлы буйлап көньяҡ-көнбайышҡа китмеш бөйөк сәфәр эҙҙәрен улар йәшәп уҙа барған һәм уларҙың “данаҡ” исеме ҡушылған ер-һыу атамалары ла мәңгелеккә шаһитлай: Көньяҡ Уралдағы Тана-улаҡ (Таналыҡ) йылғаһы (борон ул Яйыҡ баштарының береһе һаналған) — Дон (Данаҡ) йылғаһы — Днепр (Дан-абар) йылғаһы — Дунай (Данай) йылғаһы — Балҡан ярымутрауы (был исемде лә үҙебеҙҙең Тәүтөйәк тауы Балҡандан алып барып биргәндәр)... Ғөмәрҙең (Гомерҙың) “Илиада” эпосындағы данайҙар (йәғни ата-бүрегә эйәреүсе үҫәргәндәр) б.э. тиклем XIII быуатта уҡ үҙебеҙҙең ҡаңғылар йәки ҡан-аҡайҙар (“Илиада”лағы аҡайҙар — ахейҙар) менән тығыҙ берлектә шул Кесе Азиялағы (хәҙерге Төркиәләге) атаҡлы Троя ҡалаһын яулап алыуҙа әүҙем ҡатнаша. Был яулауҙы ойоштороусы аҡайҙар (“Илиада”лағы ахейҙар) иһә шул уҡ Үҫәргәндең Әсә-Бүрегә эйәреүсе тармағы, йәғни баяғы аҡан-аҡай — Ҡанаҡай//Ҡаңғы ырыуы тап үҙе булып тора; Ғөмәр әҫәрендә иһә был этнонимдың ҡыҫҡаҡланмыш икенсе яртыһы “аҡай” (ахей) телгә алынған. Ҡаңғыларҙың (аҡайҙарҙың) ҡасандыр шунда йәшәгәнлеген шундағы Аҡай (Ағай/Эгей) диңгеҙ исеме лә шаһитлай...

1453 йылда Мәхмүт 2-се солтан етәкселегендәге төрөк бабалары шул замандағы христиандарҙың шанлы ҡәлғәһе булған Константинополде (Истанбулды) һуғышып алғандан һуң, бөтә Көнбайыш христиандар донъяһы уларға ҡаршы хәсөтлө тәре һуғышы әҙерләй башлағас, Көнбайыш Европа илдәре һарайҙарында баяғы Мәхмүт 2-се солтандың Рим папаһы Николай 5-енсегә яҙған хаты тарала; ошо яҙмаһында төрөк солтаны, “төрөктәр кеүек үк, шул уҡ Троя халҡының вариҫтары булған итальяндарҙың” уға йәғни үҙҙәренең тарихи ҡан ҡәрҙәше булған төрөк солтанына дошманлыҡ ҡылыуҙарына аптырауын белдергән; ә бернисә тиҫтә йыл алдараҡ шул уҡ итальяндар кардиналы Исидор ҙа төрөктәрҙең шул уҡ *тевкр* (йәғни Троя халҡы) вариҫтары икәнлеген раҫлап сыҡҡан булан (С. Рансимен. Падение Константинополя в 1453 году. М., 1983, 149-сы бит). Бынан иһә Ғөмәр “Илиада”һындағы боронғо Троя ҡалаһының халҡы ла шул үҙебеҙҙең аҫаба башҡорттар булғанлығы аңлашыла, сөнки ул Троя халҡының гректар үҙҙәренсә боҙобораҡ яҙып ҡалдырған атамаһы “тевкр” — “төп-ҡор” булып, был иһә киң билдәле “баш-ҡор” (башҡорт) этнонимының варианты икәнлеге ап-асыҡ (төрөктәр ҙә башҡорттарға ҡанҡәрҙәш, тимәк)...

Һөҙөмтә: Үҫәргәндең бик боронғо замандарҙан уҡ “атан-аҡ-абар//танаҡ-абар” тип аталып килгән төньяҡ-көнсығыш (Ата яҡ) сатаһының исемен тәүҙә Үҫәргән сатаһы рәүешле унан айырымланған Ҡаңғы (Ҡаңғырат) ырыуының Ата яҡ яртыһы (сатаһы) үҙенә ырыу исеме итеп ала. Ә урта быуаттарҙа иһә ошо исем ҡаңғыларҙан (ҡаңғыраттарҙан) айырымланмыш яңы ырыуҙың исеме булып “Түңгәүер”гә әйләнә.

Үҫәргәндәрҙең “Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе”ндә лә, түңгәүерҙәрҙең үҙҙәренең баяғы ғалимыбыҙ файҙаланған төбәк шәжәрәһендә лә Түңгәүер ләҡәпле шәхестең Ҡаңғырат тип тә йөрөтөлөүе төҫмөрләнә. Шул уҡ ваҡытта түңгәүерҙәрҙең риүәйәттәрендә уларҙың тәүҙә Сырдаръя аръяғында йәшәүе, һуңынан, ҙур ғына ғәскәр туплап һәм изге бүрегә эйәреп, Көньяҡ Уралға күсенеп ҡайтыуҙары бәйән ителә. Тимәк, иң элек Ҡаңғырат-биҙең (йәки хандың) тарихи эҙҙәрен юллап табырға кәрәк, ә был иһә үҙебеҙҙең бабаларҙың боронғо осор төрки-башҡорт тарихына асыҡ яҙып ҡалдырылған: “Өфө ҡалаһы янында, Дим йылғаһы Ағиҙел йылғаһына ҡойған тәңгәлдә, Ҡаңғырат ҡөлғәһе бар ине; уның кешеләре Ургенчкә күсеп киттеләр. Унда ҡәлғә ҡорҙолар һәм уны ла Ҡаңғырат тип атанылар... Ағиҙел йылғаһы буйында Тора тау бар. Тора — Ҡаңғырат ханының исеме ул. Шул тауҙың битләүендә, хәүефһеҙ булһын өсөн, ул ҡәлғә ҡорҙо. Шуға күрә уны Тора тау атанылар. Унда ҡаланың емеректәре ҡалған, шунда булған кешеләр күргән уны” (История Татарии в материалах и доҡументах. М., 1937, 123-сө бит).

Беренсенән, “Ҡаңғырат”тың Ҡаңғы-ир-ат, йәғни “Ҡаңғы ырыуы кешеләре” икәнен аңлатҡайныҡ инде өҫтәрәк.

Икенсенән, “Ҡаңғырат-хан” — Үҫәргәндең Әсә яҡ яртыһы (сатаһы) булған Ҡаңғы ырыуының ханы, тигән ләҡәп ул (ата-әсәһе ҡушҡан исемен белмәйбеҙ). Шулай уҡ әлеге тәүәрихтәге “Тора” ла — бик боронғо исемле Тора тауҙа ҡәлғә ҡорған был хандың ләҡәбе генә, йәғни “Тора тау ханы”, тимәк.

Өсөнсөнән, был ҡаңғыларҙың төп төйәге Ағиҙел буйында булып, баш ҡалаларының беренсеһе, өҫтәрәк әйтелгәнсә, хәҙерге баш ҡалабыҙ Өфөнөң Дим районында, ә унан һуңғы икенсеһе Башҡортостандың хәҙерге Ишембай районының Тора-тау битләсендә торған (унда әлегәсә “Хан юлы”, “Хан күле” тигән атамалар бар). “Көн-аҡ-аба” (ҡояш-аҡ-уба йәки үҙгәртеберәк әйтелешендәге Көнә-Ҡуба — хәҙерге Өфө ҡалаһының Салауат һәйкәле торған Ҡоба тау) тип аталмыш, ә ҡыҫҡараҡ әйтелештә шул Ҡоба - Уба//Уфа//Өфө тип йөрөтөлмөш баш ҡалабыҙҙа ул замандарҙа Мөйтән-бийебеҙ Көн-әсә (кенәз) тәхетендә ултырыуын иҫләһәк, Ағиҙел аша ғына ошо Көн-әсә тәхетенә бойондороҡло аҡан (хан) тәхетен биләмеш Ҡаңғырат-би (хан), моғайын, шул уҡ Туҡсаба — Мөйтән тоҡомолор... Тимәк, Ҡаңғырат-би ниндәйҙер сәбәп менән Уралдан алыҫ көньяҡҡараҡ — Ургенчкә (хәҙерге Ҡараҡалпаҡстанға) иләүен алып киткән дә Сырдаръя аръяғындағы Амударъя йылғаһы буйында әлегәсә йәшәп ятмыш баш ҡалаһын — Ҡаңғырат ҡәлғәһен ҡорған. Тап бына шунда ла инде “Алпамыш” эпосыбыҙ ошо башҡорт-ҡаңғыраттарҙан Урта Азияның башҡа ҡәүемдәренә таралған, шул яҡтарҙа XIV быуатта йәшәмеш шағирыбыҙ Мөхәммәт Хауарезми иһә (ул үҙен,”Ҡаңғырат ҡәбиләһенәнмен”, тип белдерә) атаҡлы “Мөхәббәтнамә” китабын яҙған. Телсе ғалимдарҙың билдәләүенсә, был әҫәрҙең теле шағир Хужа Әхмәт Йәсәүи теленә бик яҡын, йәғни үзбәк һәм ҡаҙаҡ телдәре араһында тора (хәҙерге башҡорт теле һымаҡ уҡ!).

Боронғо ҡанҡәрҙәштәребеҙ Ҡаңғырат тоҡомдары хәҙерге Үзбәкстанда, Ҡараҡалпаҡстанда, Ҡырғыҙстанда, Ҡаҙағстандың Ҡарағанда һәм Көньяҡ Ҡаҙағстан өлкәләрендә йәшәй.

Тыумышы менән Бөрйән ырыуынан булған Сыңғыҙ-хан бабабыҙға заманында ҡаңғыраттар яҡшы хеҙмәт иткән, Сыңғыҙ-хан үҙенең дүртенсе ҡыҙы Тумалунды шул ҡаңғыраттар ханы Алсы-биҙең улы Жиккә (“Жик-Мәргән” тигән эпосыбыҙҙың геройы түгелме?) кейәүгә биргән һәм уны рәсми рәүештә лә “Жик-кейәү” тип йөрөткән. Жик-кейәүҙең атаһы Алсы-би иһә Сыңғыҙ-хандың Ҡаңғырат ҡәбиләһенән алған Бүртә исемле ҡатынының бер туған ҡустыһы (йәғни Сыңғыҙ-хандың ҡәйнеше) булған, шуға ла

ҡытайҙар тарихына тәүге осорҙарҙа ул “Алсы-кәйнеш” титулында яҙылған. Сыңғыҙ-хандың яуҙарында ул, “Алсы” тигән ләҡәбенән күренеүенсә, ғәскәр алдында (авангардта) башлап барған; хан менән гел бергә йөрөп, утыҙ ике һуғышта ҡатнашҡан, Сәмәрҡәндте алыуҙа ҙур батырлыҡтар ҡылған. (Сәмәрҡәндте алышыуҙа ла ҡатнашҡас, Уралдан шунда күсенеп китмеш баяғы тарихи Ҡаңғырат-ханыбыҙмы әллә был?..) 1227 йылда уға ла, Сыңғыҙҙың иң кесе ҡыҙына өйләнгәс, “император кейәүе” тигән дәрәжә бирелә, ә 1232 йылда көмөш мөһөр һәм “ҡаңғыраттар сәрдары” исемен ала, 1237 йылда “200.000 шәлкем тәңкә” менән бүләкләйҙәр. Сыңғыҙ-хандың билдәле фарманы бар: “Ҡаңғырат ырыуында тыуған ҡыҙҙар быуындан-быуынға император ҡатындары булһын, малайҙар иһә быуындан-быуынға император ҡыҙҙарына өйләнһен. Был фарманды быуындан-быуынға һәр йылдың дүрт миҙгеленең тулған Ай көнөндә өҙлөкһөҙ иғлан ҡылһындар”. Тимәк, тип һөҙөмтәләй ғалимдар, Сыңғыҙ-хандың Бөрйән ырыуы менән Ҡаңғырат (Үҫәргән) ырыуы үҙ ара никахлашҡан. Азат Камалов килтергән түңгәүерҙәр риүәйәтендәге: “Түңгәүерҙең атаһы — Бөрйән ҡәбиләһенеке, әсәһе Үҫәргән ҡыҙы булған”, тигән һүҙҙәрҙә мәғәнә бар.

Шуныһы мөһим: был мәғлүмәттәрҙән беҙ Ҡаңғырат ырыуы башлығы тарихи Алсы-биҙең Үҫәргән ырыуы башлығы Мөйтән-би менән бер үк осорҙа йәшәүҙәрен, Сыңғыҙ-ханға бик яҡын кешеләр икәнлеген күрәбеҙ. Тимәк, А. Камаловтың Ҡаңғырат-биҙе 1203 йылда тыуған итеп тоҫмаллауы ғәмәлгә яҡын килә. Ә был иһә Ҡаңғырат-би — Мөйтән-би менән яҡын ырыуҙаштар булған, тип тоҫмалларға мөмкинлек бирә.

1311 йылда Сыңғыҙ-хан нәҫелдәренең тарихын яҙып тамамлаған Рәшид-әд-дин буйынса, Урта Азияла Ҡаңғыраттың Сорлоҡ, Мәргән (баяғы Жик-Мәргән?), Ҡобай, Шәре, Ташбоҙа, Төркәил (?) исемле улдары булғанлығы мәғлүм, әммә Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһендәге ап-асыҡ “Түңгәүер” ләҡәбен унда күрмәйбеҙ һымаҡ (бының сәбәбе торараҡ аңлашылыр).

Тәүәрихтәрҙе аҡтарғанда, Сыңғыҙ-ханға тиклем дә, унан һуң да әле беҙ белгән “Түңгәүер” этнонимы күҙгә салынмай. Рәшид-әд-дин әҫәрендә лә (1311 йыл), ҡаңғыраттар хаҡында һүҙ барһа ла, Түңгәүер төшөнсәһе юҡ. Ҡытай йылъяҙмаларында ла сағылмай. Тимәк, һуңғыраҡ быуаттар емеше, тәғәйен билдәләгәндә, шәжәрәләге 8-енсе быуын Арбан-биҙең улы – 9-ынсы быуын Тимер йәғни Тимерҡабыҡ ул.

“Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе”ндә быуындарҙың арауығын тоҫмаллатҡан йәнә бер таяныс бар: әле әйтелгән 9-ынсы быуын Тимерҡабыҡ-бей Арбан улы тәңгәленә: “Бораҡ хан заманы” (йәғни Бораҡ хан тәхет эйәһе булған 1422 — 1427 йылдар), — тип киҫәтелгән.

Күренеүенсә, Мөйтән-би йәшәгән XIII быуат баштары һәм Бораҡ-хан йәшәгән XV быуат баштары араһында теүәл 200 йыл ята. Шуны әлеге Тимерҡабыҡ-бигәсә булған һигеҙ быуын иҫәбенә бүлеп ҡараһаҡ, һәр быуынға төшә яҡынса 25 йыл — шәжәрә дөрөҫ, тимәк.

Азат Камалов Түнгәүерҙең баяғы сонтор шәжәрәһендәге һуңғы осор быуындарҙың йәшәү йылдарын билдәләү буйынса архив материалдарын уңышлы файҙалана, ә архивта булмаған иң боронғоларын фараз итеү юлы менән тергеҙергә тырыша. Әммә ошо һуңғыһында беҙ килтергән “Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе”н ҡуллана алмауы арҡаһында сараһыҙлыҡҡа ла тарып, түңгәүерҙәрҙең легендар шәхесе **“Мөтәй”** бабаның асылы асылмағанлыҡтан, шәжәрәләге урыны ла билдәләнмәй, күктә аҫылынып торғандай ҡала.

“Түңгәүер ҡәбиләһендә **Мөтәй** тигән кеше була, — тип әйтелә легендала. — Ул Күстәнәнән алдараҡ йәшәгән булырға тейеш. Түңгәүер шәжәрәһе башында “Түңгәүер”

яҙылған. Уның улы Ҡаратөлкө, Ҡаратөлкөнән өс ул ҡалғаны билдәле: Мөлкәмән, Юламан, Иләмән; Иләмәндән Күстәнә килә. Шәжәрәгә **Мөтәй** тигән кеше теркәлмәгән. **Мөтәйҙең** Түңгәүергә бәйләнеше асыҡ күрһәтелмәгән".

Был ни хәл: **Мөтәй** үҙе Түңгәүерҙең билдәле легендар бабаһы, үҙе иһә "шәжәрәгә теркәлмәгән", "Түңгәүергә бәйләнеше лә асыҡ күрһәтелмәгән"...

Был сәйерлектең сәбәбе, минеңсә, әлеге лә баяғы, Түңгәүер шәжәрәһен "Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе"нән бесеп алып биреүҙә — "мөстәҡил"ләүҙә генә. Шул арҡала Ҡаңғырат-би ләҡәпле һуңғыраҡ дәүер кешеһе шәжәрәлә үҙенән әүәлге төп башбаба урынын биләп тора, ә бик мөһим быуын булған **"Мөтәй"** иһә был "мөстәҡил" шәжәрәгә кермәгән -- төп шәжәрәлә ҡырҡылып тороп ҡалған... Ысынлап та, үҙ нәҫеле түңгәүерҙәрҙе лә теркәй барған "Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе" XIII быуат башында йәшәмеш тарихи Мөйтән-би Туҡсаба улынан башлана бит, ә баяғы түңгәүерҙәр легендаһындағы **"Мөтәй"** — шул уҡ **"Мөйтән"дең** боҙоп әйтелеше ул. Легенданың артабанғы өлөшө лә быны яҡшы дәлилләй: **"Мөтәй** йәшәгән дәүерҙә Көньяҡ Урал башҡорттары монгол-татар иҙеүе аҫтына эләгә. Башҡорттар Алтын Урҙа ханына яҫаҡ алып бара. Түңгәүерҙән был бурысты **Мөтәй** башҡара. Ханға был кеше оҡшай төшә, уны бер-ике ай самаһы үҙ янында тота, кәңәшсе итеп тәғәйенләй. Хан, уны төрлөсә һынап ҡарағандан һуң, **Мөтәйгә** ярҙам итергә уйлай. **Мөтәйҙең** һорауы буйынса, Түңгәүер башҡорттарына ер бирелә"... Бөтәһе лә дөп-дөрөҫ һәм Үҫәргәндең Мөйтән-бийе (Мүйтән, Мүктән, Мүкеле, Мухали — бөтәһе бер үк зат) тураһында ғына һүҙ бара бында (ҡарағыҙ: Башкирские шежере. Филологические исследования и публикации. Уфа, 1985, 57-се бит). Уның хаҡында мин "Башҡорт батыры Йеҙекәй" тигән баҫмамда ("Ағиҙел журналы, 2000/1 — 5) ентеклерәк яҙғайным...

Инде тулы шәжәрәнең үҙенә күсер ваҡыт етте. Башта уның ошо көндәргәсә килеп ирешеүенә сәбәпселек иткән изге йәндәрҙең аңлатмаһын бирәйек:

"Шәжәрәне гәрәп хәрефтәрендә яҙған һәм төҙөгән Рәхмәтуллин Мөким Бәҙретдин улының ҡулъяҙмаһынан башҡорт латинсаһына күсерҙе әсәйем Илбулдина Сафия Муллагәли ҡыҙы. Кириллицалы башҡорт яҙмаһына һалды Илбулдин Фәсхи Фәтхелислам улы (1924 йыл тыуған).

Йәнсура-Бәкәтәр ауылы, Ҡыуандыҡ районы, Ырымбур өлкәһе. Ноябрь – декабрь 1983 йыл".

Шулай итеп, башлайбыҙ, бисмилла:

ҮҪӘРГӘН-ТҮҢГӘҮЕР ШӘЖӘРӘҺЕ

Ырыуы – **Үҫәргән.**
Ағасы – **Миләш.**
Ҡошо – **Торна.**
Ораны – **Туҡсаба.**

Тамғаһы – **Аҡа-Ай+Ҡаяс-Көн>Ҡояшҡан (Ҡойошҡан):** .

[1. Туҡсаба]. – 2. Мөйтән-би Туҡсаба улы. – 3. Шаҡмалы-би Мөйтән улы. – 4. Бүрекәй-би Шаҡмалы улы. – 5. Һеркә-би Бүрекәй улы. – 6. Манғут-би Һеркә улы. – 7. Урал-би Манғут улы. 8. Урал-би улдары:

I. Буят-би Урал улы.

II. Арбан-би Урал улы.

III. Инжан-би Урал улы.

Рим цифрҙары менән билдәләнгән ошо Урал улдарынан нәҫел бауҙары дауамлана – айырым-айырым бирербеҙ:

I. 8. Буят-би Урал улы. – 9. Инкеш Буят-би улы. – 10. Туҡай Инкеш улы – 11. Мораҭкабул Туҡай улы. – 12. Солтанай Мораҭкабул улы. – 13. Ғашиҡ Солтанай улы. – 14. Байрамғол Ғашиҡ улы. – 15. Муса Байрамғол улы. – 16. Рәсүл Муса улы. – 17. Хәбибулла Рәсүл улы. Хәбибулланан ике улан:

1) Зәйнулла-ишан Хәбибулла улы Рәсүлев, уның нәҫеле: Ғабдрахман-мөфти Зәйнулла улы (уның улы Ғәбдрәүеф); Ғәбделҡадир Зәйнулла улы; Ғәбделсабир Зәйнулла улы.

2) Фатхулла Хәбибулла улы, уның нәҫеле:

а) Муса Фәтхулла улы, уның улдары: Мөштәбә Муса улы Рәсүлев (башҡорт автономияһын яулау батыры), Мостафара Муса улы, Ғабдулла Муса улы;

б) Ғайса Фатхулла улы, уның улдары: Тойғор Ғайса улы, Дала Ғайса улы.

Инде рим цифры II менән тамғаланған бау:

II.8. Арбан-би Урал улы. – ***9. Тимерҡабыҡ-би Арбан улы*** (өҫтәлгән: “Бораҡ-хан заманы” йәғни 1422-27 й.й.). [Иғтибар! – тап ошонан Түңгәүер ырыу шәжәрәһе дауамлана – аҙаҡтаныраҡ айырым теркәрбеҙ].—10. Һарыбаш-би Тимерҡабыҡ улы (өҫтәлгән: “Жанибәк-хан заманы”). –

11. Һырыш-би Һарыбаш улы (өҫтәлгән: “Ҡасим-хан заманы”). –

12. Уның улдары:

*Һарыбил-батыр Һырыш улы (Өҫтәлгән: “Иҫәнғол ҡасабаһына етмәҫ борон Һарыбил тауы бар, шунда үлгән”. Һәм йәнә: “Һарыбил ҡаҙаҡтар (ҡалмыҡтар?) менән һуғыш ваҡытында Һүрән буйындағы Һарыбил тауында үлгән һәм шунда күмелгән. Шуға күрә хәҙер ҙә Һарыбил тауы тип йөрөтәләр”);

*Болаҡ-батыр Һырыш улы (өҫтәлгән: “Был Болаҡ Тоҙтүбә [Соль-Илецк] тоҙон табып, батшаға барып әйтә. Батша уға наград итеп Ырымбур тирәһенән һораған ерҙе бирә һәм Үһәргән [Үҫәргән] иленә хужа итә”);

*Аҡмасуҡ Һырыш улы, уның улы Туҡмасуҡ, уның улы **Ҡараса**, уның улы

13. Тәтегәс-би Ҡараса улы, уның улдары:

13а. Бикбау-кенәз Тәтегәс-би улы, уның улдары: Кинйәбай Бикбау улы (уның улы Ҡушай, уның улы Тупай) һәм Әлебай Бикбау улы, уның улдары: Шөғәйеп, Ураҙмәт, Тләүмбәт;

13б. Ҡушдәүләт Тәтегәс улы, уның нәҫеле:

*Яҡшытай Ҡушдәүләт улы (өҫтәлгән: “Аҡъяр”);

*Һарытай Ҡушдәүләт улы;

*Турытай Ҡушдәүләт улы, уның улдары:

**Һөләймән Турытай улы;

**Аҡлима Турытай улы;

**Тимербулат Турытай улы, уның улдары:

***Ҡудай Тимербулат улы;

***Биккөн Тимербулат улы;

***Һөйөндөк Тимербулат улы, уның улы Мәмәтюл;

***Аҡтуй Тимербулат улы, уның улы Рахманғол, уның улы Сиреғол [Сиреғол ауылын нигеҙләүсе?],

***Аҡан Тимербулат улы, уның улдары: Көбәк, Мостафа, Туйсура;

***Динбулат Тимербулат улы, уның улдары: Бүләк, Сумаҡ, Күбеш.

Йәнә **Һырыш-би** нәҫеленә күсәбеҙ:

12. Ябынсы-яҫауыл Һырыш улы (өҫтәлгән: "Ябынсы батшаға хеҙмәт итеп, яҫауыллыҡ [хәрби дәрәжәһе] алған"), уның нәҫеле: Ирҡара Ябынсы улы, Этҡара Ябынсы улы, Ибәй (Иҫбай) Ябынсы улы, Күбәй Ябынсы улы, Һурҡара (Сурҡара) Ябынсы улы, Ибәнсе Ябынсы улы. –

13. Үҫәргән Ябынсы улы (кесе улы). – 14. Унан тыуған нәҫел баулы уландар:

I.14. Сөйәлғужа Үҫәргән улы.

II.14. Ялбаҡсал Үҫәргән улы.

III.14. Байғужа Үҫәргән улы.

Инде ошо өсәүҙең нәҫел бауҙарын айырым-айырым теркәйек:

I.14. Сөйәлғужа Үҫәргән улы, уның улы **Мусаҡай** Сөйәлғужа улы. [Ошонан Һунарсы ауылының Мусаҡаевтар, Тләмбәтовтар, Сөйәрмбәтовтар, Сунарчиндарҙың нәҫел бауҙары дауамлана – улар шәжәрәһен айырым яҙғанмын]. Мусаҡай тәңгәленә өҫтәлгән: "Ҡуҙаш, Ҡунаҡ таифәһенең атаһы". **Мусаҡайҙың** улдары:

М.1. Мантай Мусаҡай улы.

М.2. Яукүсте (Күскенсе) Мусаҡай улы.

Ошо икәүҙең айырым нәҫел бауҙары:

М.1. Мантай Мусаҡай улы, уның улы Туҡтамыш, уның улы **Яманһары,** уның улдары:

*Ерәнбәт Яманһары улы;

*Манғутай Яманһары улы;

***Төмәнбәт Яманһары улы**, уның улдары:

**Ҡотломбәт Төмәнбәт улы (уның улы Ҡасҡын, уның улы Аҡкөсөк, уның улы Шаһингәрәй);

**Ырыҫҡол Ҡотломбәт улы [Ырыҫҡол ауылын нигеҙләүсе – Ырыҫҡоловтар фамилияһы], уның улдары Арыҫлан [шул Ырыҫҡол ауылындағы Арыҫлановтар фамилияһы], Ырыҫбай [Ырыҫбай ауылын нигеҙләүсе?];

**Сурағол Ҡотломбәт улы;

**Кинйәғол Ҡотломбәт улы, уның улдары: Күсәй, Бүләк;

Йәнтеш Ҡотломбәт улы, уның улдары: Шәриф, Ҡөҙрәт. Һәм артабан өҫтәге **Төмәнбәттән:

а) Татлөмбәт Төмәнбәт улы, уның улы:

***Буранҡай Татлөмбәт улы,** уның нәҫеле:

**Теүәлбай Буранҡай улы, уның улдары: Ғамоталлап, Билал, Ғабдулла, Аҡмулла, Аҡбулат [Аҡбулат ауылын нигеҙләүсе?], Мотал;

**Исҡужа Буранҡай улы, уның улдары: Ғабдулхалиҡ, Ғабдулвахит, Ғабдул мәжит, Ййыҡбай [Абзан ҡасабаһындағы Ййыҡбаевтар фамилияһы], Аҡъегет;

**Игебай Буранҡай улы, уның улдары: Ғабдрахман (уның улдары: Ғисмәтулла, Ниғмәтулла, Рәхмәтулла, Ғөбәйҙулла, Исламғол); Иғдәүләт; Танһыҡ; Ғөбәйҙулла, уның

улдары: Хажмөхәммәт, Фәтхулла-мулла (уның улдары: Сибәғәтулла-имам, Заһидулла-имам, Лотфулла, Сәлимйән); Дусмөхәммәт; Бикмөхәммәт;

**Сәйфулла Буранҡай улы, уның улдары: Йәнтүрә (уның улдары: Хажиморат, Шаһиморат, Шаһимәрҙән); Мансур, уның улдары: Мырҙағәли, Мырҙалатиф, Мөхәммәтйән.

б) Ҡасбулат Төмәнбәт улы, уның нәҫеле:

*Ҡуҙаш Ҡасбулат улы, уның улы Байғаҙы;

*Этҡабул Ҡасбулат улы;

*Нарбута Ҡасбулат улы, уның улдары: Дәүләткилде, Әлебай.

Инде **Мусаҡайҙың** икенсе улы:

М.2. Яукүсте Мусаҡай улы [Яугустиндар фамилияһы], уның улы **Именбирҙе** Яугүсте улы, уның улдары:

***Болаҡ-батыр Именбирҙе улы** [ошонан яҙыусы Йыһат Солтановты биргән нәҫел бауы дауамлана – шәжәрәмде айырым биргәнмен];

***Таймас-би (кенәз) Именбирҙе улы** (өҫтәлгән**: “**Шешәйләр атаһы”). Уның нәҫел бауы:

1) Мәмбәтле Таймас-би улы (өҫтәлгән: “Мәмбәтленән йәйелгән Һабыр, Буранбай, Ағурҙа ауылдары”);

2) Мортаза Таймас-би улы (өҫтәлгән: “Килситбай (Һыҙғы) ауылы, аҙырағы Атингәндә”);

3) Яҡшығол Таймас-би улы (өҫтәлгән: “Ҡәҙерша, Аҡнаҙар ауылдары”);

4) Тләүмбәт Таймас-би улы [Һунарсы ауылын нигеҙләгән Һунарсының атаһы – Тләүмбәтовтар, Сунарчиндар фамилияһы], өҫтәлгән: “Тләүмбәттән Әлмөхәммәт (Этбармаҫ) Ишмөхәммәт, Юлбарыҫ ауылдары”;

5) Сөйәрембәт Таймас-би улы [Һунарсы ауылындағы Сөйәрембәтовтар фамилияһы];

6) Аҡсура Таймас-би улы [Аҡсура ауылын нигеҙләүсе – Аҡсуриндар фамилияһы?], уның улы Именьюл, уның улы Хужәхмәт, уның улы Балапан, уның улы **Юлмөхәммәт Балапан улы,** уның улдары:

*Ғәлиәкбәр Юлмөхәммәт улы, уның улдары: Ғабдулшафиҡ, Ғабдулнафиҡ, уның улы Ғабдулманнан;

*Ғәлиәхмәт Юлмөхәммәт улы, уның улы Мөхәммәтшафиҡ;

*Ғәлиәскәр Юлмөхәммәт улы, уның улы Мөхәммәтсадиҡ мулла, уның улдары: Хәйретдин, Хөснетдин, Ғәбделхәмит, Зия (өҫтәлгән: “Зия 1933 йылдарҙа “Йәш юҡсыл” гәзитенең сәркәтибе булып эшләй. 1937 й. Ҡулға алынды”. [Мәсәлим Вәлиевтың “Аҡ ҡайн” йыры һүҙҙәренең авторы];

7) Бабай Таймас-би улы (өҫтәлгән: “Бабайҙан Аҡъяр, Тиргәмеш, Ҡырын ауылдары [һәм Бабай ҡасабаһы – аҙаҡ Күмертау ҡалаһы]”). **Бабай улдары** [нәҫел бауҙарын айырым-айырым бирәбеҙ]:

1. Солтанғужа Бабай улы;

2. Ғаббас Бабай улы;

3. Мүһәш Бабай улы;

4. Өмбәт-абыз Бабай улы;

5. Бикбирҙе Бабай улы.

Ошо бишәүҙең нәҫел бауҙары айырым-айырым:

1. Солтанғужа Бабай улы, уның улдары:

*Төлкөбай Солтанғужа улы, уның улы Ищдәүләт, уның улы Ишбулат, уның улдары: Сәмиғулла (уның улы Сәйфулла), Фатхулла, уның улы Мөхәммәт;

*Балаян Солтанғужа улы;

*Балапан Солтанғужа улы, уның улдары: Шәһәрғази, Бәшир, уның улдары: Ғабдулла, Әхмәт;

*Ҡараян Солтанғужа улы, уның улдары: Миңлеғужа, Сәйфетдин, Мифтах, Ҡарағужа;

*Ужнаҡ Солтанғужа улы, уның улдары: Сәфәрғәли, Муса, Ғәлим, Мөхәмәдин.

2. Ғаббас Бабай улы, уның улдары: Урал, Аҡбал, **Нурмөхәммәт (Нурай) Ғаббас улы,** уның улдары:

*Йәнйегет Нурмөхәммәт улы, уның улдары: Садиҡ, Латиф, Аҡмәхмәд;

*Иралы Нурмөхәммәт улы, уның улы Мөхәммәтдин, уның улдары: Бүребай, Яҡшыбай, Бикаш;

*Егетбай Нурмөхәммәт улы, уның улдары: Вахит, Ғабдулла, Мөьмин;

*Дауытбай Нурмөхәммәт улы, уның улдары: Ғабдулғази, Ғабдулғәфәр.

3. Мүһәш Бабай улы, уның улдары:

*Әхмәр Мүһәш улы, уның улы Зөлҡәрнәй, уның улы Һөләймән, уның улы Ғәбделхалиҡ, уның улы Йомағужа, уның улы Исмәғил;

*Аҡғусҡар Мүһәш улы, уның улы Ҡарабулат, уның улдары:

**Мөҡәй (Мөхәммәтғәли) Ҡарабулат улы, уның улдары: Сафа, Мостафа, Сәйфулла;

**Муллағәлләм (Муллаҡай) Ҡарабулат улы;

**Хәмит Ҡарабулат улы, уның улдары: Хәмиҙулла, Суфиян, Мулла (уның улдары: Айса, Рәхим, Ғалимйән), Шакирйән, уның улдары: Сәлимйән, Ҡорман, Шәрифйән.

4. Өмбәт-абыҙ Бабай улы, уның улдары:

а) Этбай Өмбәт-абыҙ улы [Этбай-Үрге Ырыҫҡол ауылын нигеҙләүсе], уның улы **Бохарбай** Этбай улы, уның нәҫеле:

*Янмырҙа Бохарбай улы, уның улы Йәнтимер, уның улдары: Мустаҡ (уның улы Яхъя), Хөснетдин, уның улдары: Рамаҙан, Вәлитдин, Низам;

*Ҡарамырҙа Бохарбай улы, уның улы **Йәнтүрә-батыр** (өҫтәлгән: “1812-14 й.й. француз яуында ҡатнашсы” [матбуғат баҫмаларынан “Йәнтүрә хикәйәте” билдәле]).

б) Дәүләтбай Өмбәт-абыҙ улы, уның нәҫеле: Вәли, Ҡаламан, Аралбай, Ғөбәйдулла, Ансар, Сәләмәт, Рәхмәтулла, Ҡулбай (өҫтәлгән: “Ҡулбаевтар – Аҡъяр ауылы”), Ҡулбай улы Салих, уның улы Ҡотлоғужа, уның улы Муса, уның улдары: Данияр, Әҙһәм, Насирйән, Хәким, уның улдары: Салихйән, Сәлимйән, Ғәзизйән, Хәмитйән, Йәҙгәр.

5. Бикбирҙе Бабай улы, уның нәҫеле:

*Күсәк Бикбирҙе улы;

*Баҡтыбай Бикбирҙе улы, уның улдары:

**Юлдашбай Баҡтыбай улы, уның улы Әлмөхәммәт, уның улдары: Байғужа, Ғабдулла, Һибәтулла, Солтан, Ҡотло, Ғәлиәхмәт;

**Ғәбделкәрим Баҡтыбай улы, уның улдары: Мөхәммәтйәр [Мөхәммәтйәр (Серекәй) ауылын нигеҙләүсе?], Мөхәммәтбаҡый;

**Ғәбделмөьмин Баҡтыбай улы (өҫтәлгән: “Аҡъяр”), уның улдары: Ишем (уның улдары: Солтан, Мырҙаҡай (Мырҙаҡай улы Йосоп, Йосоп улы Төркмән), Ғәбделғариф, уның улы Ғәбидулла, уның улдары: Ғабдулла, Мостафа, Сәлимйән, Сәйфулла.

Өҫтә бирелгән рим цифры бау баштарына күсәбеҙ:

II.14. Ялбаҡсал Үҫәргән улының нәҫел бауы:

*Сыуаш Ялбаҡсал улы, уның улы Сураш-би (өҫтәлгән: “Сураштан йәйелгән ауылдар: Юлдаш, Мырҙабулат, Әселе тамағындағы өс ауыл, Буранғол ауылы һәм ике Үрген ауылдары һ.б.”);

*Килъяҡшы Ялбаҡсал улы, уның нәҫеле:

**Туғус Кильяҡшы улы;

**Ситекәй Кильяҡшы улы;

Туҡтағол Килъяҡшы улы, уның улы **Илмәмбәт Туҡтағол улы, уның улдары:

***Бутҫыҡ Илмәмбәт улы;

***Юнай Илмәмбәт улы [Юнай ауылын нигеҙләүсе?];

***Атанғол Илмәмбәт улы,** уның нәҫеле: Күстән Атанғол улы (өҫтәлгән: “Күстәндән йәйелгән халыҡты “Асҡаҡтар” таифәһе тиҙәр -- Аҡбулат, Тләүғол, Байдәүләт, Ғәли, Бишәй-түбә ауылдары. Янманһары, Дәүләтҡол, Манайыутау (Сусаин-түбә) – по семи волостям. Күҙекәле, Асҡар, Ишбулды, Райман, Мораҡ, Ҡашҡар, Солтанғол, Иләү – Үҫәргән волосы, Айыу-түбә. Аҫҡаҡлар: Бикбау, Ырыҫбай, Абыҙар, Аҡсура, Аҡташ, Байғаҙы ауылдары вә ғәйреләр (һ.б.) – Ишморат, Мәмбәтәй, Ҡансура, Әбеш, Хәлил, Сурай, Ишҡол, Ниязғол, Бикбирҙе, Ибраһим, Ғүмәр, Утраҡ, Абзан”); Күстән улдары: Тимер, Исхаҡ, Бабай, Ташбулат.

Үҫәргән-бабаның өсөнсө улына күсәбеҙ:

III.14. Байғужа Үҫәргән улы, уның нәҫел бауы: Ҡаҙаҡбай Байғужа улы, уның улы Ҡаржау Ҡаҙаҡбай улы, уның улы Ишбирҙе Ҡаржау улы, уның улы Ҡотлоҡәдәм Ишбирҙе улы, уның улы **Төрки Ҡотлоҡәдәм улы**, уның улы **Ильяс Төрки улы,** уның улдары:

И.1. Биксәнбәт Ильяс улы, уның улдары:

*Әбтекәй Биксәнбәт улы;

*Баулыҡ Биксәнбәт улы;

*Туҡлыҡ Биксәнбәт улы, уның улы Рамаҙан, уның улы Зәйнулла, уның улдары: Ғәйнулла, Хәбибулла;

И.2. Рәхмәтулла Ильяс улы, уның улы Байсыуаҡ, уның улдары: Камалетдин, Сәхәүетдин, Тахия, Йомағол, Иманғол, Мөхәммәтйән, Яппар, Мөхәммәтғәли, Баһауетдин;

И.3. Ҡунаҡас Ильяс улы, уның улдары:

*Исмәғил Ҡунаҡас улы, уның улдары: Бикмөхәммәт, Биккинә, Исхаҡ, Әхмәҙулла;

*Дәүләтҡол Ҡунаҡас улы, уның улы Мифтах-хәҙрәт, уның улдары: Мисбах, Ғабдулғәлим;

И.4. Рәхмәтулла Ильяс улы (өҫтәлгән: “Турат ауылы, айыулар”), уның улы Әхмәҙулла Рәхмәтулла улы, уның улы:

Ә.1. Ишмөхәммәт Әхмәҙулла улы, уның нәҫеле:

*Шәмсетдин Ишмөхәммәт улы, уның улдары:

**Имаметдин Шәмсетдин улы;

**Әхмәҙи Шәмсетдин улы, уның улы Әүхәди;

**Нурислам Шәмсетдин улы, уның улдары: Динислам, Мушукир;

*Баһауетдин Ишмөхәммәт улы, уның улы Нуретдин, уның улы Марат, уның улы Риф;

*Бәҙретдин Ишмөхәммәт улы, уның улдары:

**Кәрим Бәҙретдин улы;

**Мөким Бәҙретдин улы, уның улдары: Айрат, Салауат;

**Мөхетдин Бәҙретдин улы;

**Нарркис Бәҙретдин улы, уның улдары: Ҡыуат, Марат;

Ә.2. Солтанәхмәт Әхмәдулла улы, уның улы Файыл;

Ә.3. Баймөхәммәт Әхмәдулла улы, уның улы Баҡый;

Ә.4. Күсмөхәммәт Әхмәдулла улы, уның улдары:

*Тажһөләк Күсмөхәммәт улы, уның улы Ильяс, уның улы Шаһибал;

*Идрис Күсмөхәммәт улы, уның улдары: Ҡотдос, Рамаҙан.

И.5. Шәрип Ильяс улы, уның улдары:

*Мөхәммәтғәли Шәрип улы;

*Кәрим Шәрип улы, уның улдары: Әбделғәфәр, Мантаф, уның улы Әйүп, уның улы Ибраһим.

Артабан бирелә **Үҫәргән ырыуының 9-ынсы быуынынан дауамланған Түңгәүер бауы:**

9. Тимерҡабыҡ-би (Тимер) Арбан улы (өҫтәлгән: "Бораҡ хан заманы [йәғни 1422-27 й.й. Ҡушаматтары] Ҡуңғырат, Түңгәүер, Таңғауыр, Дүңгәүер. Ҡайһы исеме дөрөҫтөр? Асыҡлап белеүсе юҡ. Тимер [Тимерҡотло] — Түңгәүерҙең батыры булһа кәрәк. Түңгәүерҙең батыры Тимерҡотло – юлда бер батыр, тигән ғәйрәт ныҡлығы, хан хәбәрен ишеткәс, туҡтап тормай, йөҙ иллеләп бәһлеүәнен алып юлға сыҡты"). — 10. Ҡаратөлкө Түңгәүер улы (өҫтәлгән: "Дөрөҫөндә ул Хаҡкулы исемле булған. Тик, ҡара төлкө тотҡас, уға ләҡәп-исем биргәндәр, тиҙәр). Уның улдары:

I. Мөлкаман.

Юламан (нәҫеле юҡ).

II. Иламан.

Ике уландың нәҫел бауҙарын айырым-айырым бирәбеҙ:

I. Мөлкаман Ҡаратөлкө улы, уның улдары: Шикаман Мөлкаман улы, Ҡалкаман Шикаман улы.

II. Иламан Ҡаратөлкө улы, уның улы **Күстән Иламан улы**, уның улдары:

*Туҡбай Күстән улы;

*Туҡһары Күстән улы;

*Һарыса Күстән улы;

*Янбараҡ Күстән улы;

*Булансы Күстән улы, уның улы **Бүкәт** (өҫтәлгән: "Ғүмәр ауылдары"), уның улдары):

Б.1. Юлай Бүкәт улы (нәҫелһеҙ).

Б.2. Ҡотош Бүкәт улы, уның улдары:

*Аҡтыҡужа Ҡотош улы, уның улы Йәйләү, уның улы Йәнтүрә, уның улы Абдулҡадир, уның улы Зәйнулла, уның улы Рәхимйән;

*Аҡбирҙе Ҡотош улы, уның улы Тулынбай, уның улдары:

**Байтимер Тулунбай улы, уның улдары: Байтүрә, Абнасир, Маннан, Баймырҙа, уның улы Ҡотлоғужа, уның улдары: Кәлимулла, Сәйфулла-Тартай, уның улы Аллабирҙе, уның улдары:

***Шаһимәрҙән Аллабирҙе улы;

***Рамаҙан Аллабирҙе улы, уның улы Шаһишәриф;

***Ҡотләхмәт Аллабирҙе улы, уның улы Шәрип, уның улы Мәһәҙи, уның улдары: Мөхәммәт (уның улы Әкрәм), Сәғди, уның улы Зәки.

Б.3. Һабай Бүкәт улы, уның улы Теләү, уның улы Туҡһанбай, уның улдары:

*Һикһәнбай Туҡһанбай улы, уның улдары: Ҡаҙаҡбай, Ғүмәр, уның улы Рәхмәтулла, уның улы Әхмәдулла, уның улдары: Ишмөхәммәт, Дусмөхәммәт, Баймөхәммәт, Солтанәхмәт;

*Бүкәнбай Туҡһанбай улы, уның улдары:

**Әлибай Бүкәнбай улы, уның улы Хәким, уның улдары: Сәғит, Мәсғүт;

**Ғәбдрәшит Бүкәнбай улы, уның улы Бәғәҙәт, уның улдары: Рауил, Мәһәҙи;

*Бикбай Туҡһанбай улы, уның улы Бүләк, уның улы Шаһморат, уның улдары: Шаһимәрҙән, Өммөкамал, Лоҡман, уның улы Ғәзиз.

Йәнә килеп өҫтәгенең дауамы:

***Һатыусал Күстән улы,** уның улдары:

**Иштәкәй Һатыусал улы;

**Һеркә Һатыусал улы;

**Ситәй Һатыусал улы, уның улдары:

***Нуғайсы Ситәй улы, уның улдары: Буранғол, уның улы Йосоп;

***Шәнбәк Ситәй улы, уның улдары: Бөтөк, Ишкинә, Ырыҫкол;

**Динис Һатыусал улы, уның улы Алакүҙ, уның улы Бүртә, уның улы Ҡәҙерғол, уның улы Юлдашҡол;

**Татлыбай Һатыусал улы, уның улдары:

***Ҡулиҡай Татлыбай улы, уның улдары: Һибәт, Заһир, Яҡас, **Тәкәй,** уның улдары:

Т.1. Ғүмәр Тәкәй улы, уның улдары:

*Бикбирҙе Ғүмәр улы, уның улы Хоҙайбәндә, уның улы Юлмөхәммәт, уның улдары:

**Сабит Юлмөхәммәт улы, уның улы Аллабирҙе;

**Ғәлиәхмәт Юлмөхәммәт улы, уның улы Хәсән;

**Салих Юлмөхәммәт улы, уның улы Абдулла, уның улы Дауыт, уның улы Мөхәммәтйән;

**Дәүләтбирҙе Юлмөхәммәт улы, уның улдары:

***Ишкилде Дәүләтбирҙе улы, уның улдары: Мәхмүт, Зөлҡәрнәй, Мырҙабулат, уның улдары: Кәрим, Әхмәткәли;

***Әбсәләм Дәүләтбирҙе улы, уның улдары:

****Идрис Әбсәләм улы, уның улдары:

1) Фәхри Идрис улы, уның улы Ҡазыхан;

2) Заһит Идрис улы, уның улдары: Мөхәммәт, Абдулхаҡ;

3) Йосоп Идрис улы;

4) Ғәлләм Идрис улы, уның улы Хәкимжан

****Мөхәммәтдин Әбсәләм улы, уның улдары: Шәрәфетдин, Нәжметдин, Ғатау, Ғәләүетдин, уның улы Бәхтиәр, уның улы Мөслим.

Т.2. Бәкер Тәкәй улы (өҫтәлгән: “Юлдыбай ауылы”), уның улдары:

а) Сыуашбай Бәкер улы, уның нәҫеле:

*Ҡармыш Сыуашбай улы, уның улы Турҙағәли, уның улы Ишбулды, уның улы Айтул;

*Амантай Сыуашбай улы, уның улы:

**Бикеш Амантай улы, уның улдары: Ирмөхәммәт, Мөхәррәм, уның улдары: Хәйрулла, Ғайса);

**Биксәй Амантай улы, уның улы Шоғайыб, уның улы Мөхәммәтғәли, уның улы Шакирйән, уның улы Ибраһим;

**Рауил Амантай улы;

**Әбүбәкер Амантай улы, уның улы Хаммат (туғыҙ улы булған), уның улдары: Уйылдан, Дауыт, Исҡаҡ, Яхъя, Ғәли, Муллағәлләм, Бәғҙәт, Исмәғил, Яҡуб, уның улы Фәхритдин;

**Турһынбай Амантай улы, уның улдары:

***Нәҙерша Турһынбай улы, уның улдары: Абдулла, Йыһангир, Йыһанъюл;

***Ғәлиәскәр Турһынбай улы, уның улы Мостафа);

***Бигаржалан Турһынбай улы;

***Ғабдулмән Турһынбай улы;

***Йыһанша Турһынбай улы, уның улдары: Рамаҙан, Мырҙағәли;

б) Мораҙым Бәкер улы, уның нәҫеле:

*Һары Мораҙым улы;

*Талуҡай Мораҙым улы;

*Ямғыр Мораҙым улы;

в) Ҡарас Бәкер улы, уның улдары:

*Фазыл-сәсән Ҡарас улы, уның улы Ғәйнелхаят;

*Үтәгән Ҡарас улы, уның улы Ҡускилде;

*Ишбулат Ҡарас улы, уның улы Байғуза;

*Именлек Ҡарас улы, уның улдары:

**Йәһүди Именлек улы, уның улы Ғиззәт, уның улы Вахит;

**Сибәғәт Именлек улы, уның улы Сәғидулла;

**Һибәт Именлек улы, уның улы Ғибат;

г) Юлдыбай Бәкер улы (өҫтөлгән: “Юлдыбай ауылы”), уның улдары:

*Йәрмөхәммәт Юлдыбай улы;

*Абсабатар йәки Сабатар [Сабатар ауылын нигеҙләүсе?] Юлдыбай улы, уның улдары: Муллағәли, Әбделмән, уның улдары: Сафиулла, Кәли;

*Рахманғол Юлдыбай улы, уның улдары: Ғөбәйдулла, Бәйрәнтәй, Зәйнәғәбдин;

*Ишмөхәммәт Юлдыбай улы, уның улдары: Әмир, Үмәр;

д) Күкһәй Бәкер улы. — Ҡаҙаҡкол Күкһәй улы. — Даминдар Ҡаҙаҡкол улы, уның улдары:

*Усман Даминдар улы, уның улы Муллағәлләм;

*Шәмситдин Даминдар улы;

*Әйүб Даминдар улы;

*Язар Даминдар улы, уның улы Ғөбәйдулла;

*Әхәт Даминдар улы, уның улы Ҡасим, уның улдары: Мөхәммәт, Мөхтәр, Маҙһар.

15.06.2001.
15.01.2010

Үҫәргән батшалар шәжәрәһен барлау

Ҡомарткының төп нөсхәһе XIX быуат аҙағында хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Йәнсура районы Байыш ауылы муллаһы Муса хәҙрәттә һаҡланған,

Өмбәт ауылы кешеһе Әхмәтшәриф Абдуллин тарафынан башҡарылған күсермәһе 1954 йылда уның улы Ғибарҙан Н.Т.Хәсәновҡа юлығып, Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Тарих, тел, әҙәбиәт институтына тапшырылған. Заманында этнограф Р.Ғ.Кузеев уның 3 битлек өҙөгөн генә файҙаланыуын иҫәпкә алмағанда, был бик мөһим документты ғалимдарыбыҙ иғтибарһыҙ ҡалдырған...

"Үҫәргән тәүәрихе"ндә Үҫәргән-башҡорт батшаларыбыҙҙың "донъя яратылғандан уҡ" быуын-быуын һуҙылып килмеш шәжәрәһе күргәҙмә һабаҡ рәүешендә бирелә (унда башҡорт тарихының һәм бөтә кешелек донъяһы тарихының бик күп серле һорауҙарына яуап бар). Баһалап бөткөһөҙ ҡиммәтле был хазинабыҙ тулы килеш (ошо авторҙың аңлатмалары менән ҡуша) матбуғатҡа тәүге тапҡыр сығарыла:

Үҫәргән тәүәрихе

1. Ишек. — 2. Уның улдары: а) Афрасиаб бин Ишек, **б) Күриң** бин Ишек. — **3. Фаридун** бин Күриң. — **4. Уның улдары: а) Мөслим, б) Алсаҡ Айран, в) Түрәкан Фәкфәдәр. — 5. Ҡаф** бин Түрәкан Фәкфәдәр. — **6. Уның улдары: а) Круз** (Һарт иленең батшаһы, Геродоттағы *Крез*: б.э. тиклем 560-546[57]) һәм уның улы **Таһмәнә Сәбиб; б) Ҡавәб. — 7. Бәширмин** бин Ҡавәб. — **8. Сам Сиуар. — 9. Ңал Ңаман. — 10. Бәһлеүән Рөстәм. — 11. Уның улдары: а) Сәһрәб Ширсуан** һәм уның улы **Бөрзин (Бөрйән) Нирул** һәм уның улы **Тамыр; б) Манужуһр** бин Ирани Таһманиб. — **12. Нәвҙар** бин Манужуһр. — **13. Ңаб** бин Пузар. — **14. Ғиҡбад. — 15. Кииксарув** (Мидия батшаһы, Геродоттағы *Киаксар:* б.э. тиклем 625-585). — **16. Аҡҡар Әййүб** бин Киаксарув. — **17. Кәштә** бин Әййүб. — **18. Әсфәндиәр. — 19. Баһуман. — 20. Уның улдары:** ***Драб бин Баһуман*** (уның нәҫелдәрен айырым алып дауамларбыҙ); **Лоҡман** (*Лоҡман-хәким* – бөрйәндәрҙең бабаһы. – Й.С.). **— 21. Тағиб** бин *Лоҡман*. — **22. Хан Суғар. — 23. Хан Баҡи. — 24. Уның улдары:** ***хан Сәнкүм*** (уның нәҫелдәрен айырым алып дауамларбыҙ), **Башыҡара** бин баҡи. — **25. Хан Ҡантур** бин башыҡара. — **26. Хан Турғай. — 27. Хан Байҡу-тархан** (Майҡы-бей, 1207 йылда Сыңғыҙ-хан урҙаһында булған). — **28. Хан Байандар** (Сыңғыҙ-хандың Ҡытайҙы һәм Манчжурияны яулауында сәрғәскәр булып әүҙем ҡатнашҡан, һуңынан Башҡортостанда татар-монголдарға ҡаршы көрәш башлыҡтарының береһе). — **29. Ауыл Сәхәү-хан...**

Инде килеп баяғы киҫәтеүле (аҫтына һыҙып) торғоҙоп ҡалдырылған саталарҙы айырым сиратлап барлайыҡ:

20. Драб бин Баһуман (Баһуман шам[58]... "Улы юҡтан әҙәм алып тәрбиә ҡылып, Көннур ҡыҙын уға бирҙе; һыуҙан табылғаны өсөн *Драб* тип исем ҡуйҙы; үҙенән һуң шам булды; Искәндәр Йунан унан тыуҙы, тиҙәр". — "Үҫәргән тәүәрихе, 35-се бит. Беҙҙең өсөн бында Драб батшаның бәпес сағында "һыуҙан табып алыныуы" тураһындағы риүәйәт бик фәһемле — был хәл уның ысын-ысындан үҫәргәндәр бабаһы булыуын күрһәтә, сөнки үҫәргәндәрҙең легендар бабалары *Үҫәргән (Саргон)* да, *Көн-би* ҙә, *Муса (Моисей)* ҙа, *Жик-*

---

[57] Быуындарға йәйәләр эсендәге аңлатмалар — авторҙыҡы, ә тырнаҡтар эсенә алынғандары һәм ундағы бит һандары — "Үҫәргән тәүәрихе"нән.

[58] Шам — батша.

Мәргән дә ана шулай “һыуҙан табып алынған”дар. Үҫәргән әсәләре иһә ҡыҙыҡһынып төпсөнөүсе бала-сағаларына әлегәсә, “бәпесте һыуҙан табып алып ҡайттым”, тип аңлата). — **21. Уның улдары: а) Искәндәр Сәхиб Юнан** *(Александр Македонский)* һәм уның улы **Бурач** *(бурасы),* уның улы **Фуч Батамуч** *(батмуссы),* уның улы **Дәүҡиануч** *(дәүбүресе;* “был Дәүҡиануч ғайәт залим ине, аҡыл эйәләре унан ҡасып... мәмерйәләргә керҙеләр, — шуның менән мәшһүрҙер”. — 35-се бит); **б) Ашиҡ** бин Драб (“был Ашиҡ ун йыл шам булды, Искәндәрҙе тәхеткә ултыртҡанда Ашиҡ кескәй ине”. — 35-се бит), уның улы **Ашҡан** бин Ашиҡ (“был Ашҡан һарыҡ йылында шам булды, Дарийҙы Искәндәр харап ҡылғанда Ашҡан кесе ине, Арғын-бей көслө түгел ине. Искәндәр донъянан киткән йылда Римға һөжүм итте, тар-мар ҡылды”. — 35-се бит), уның улы **Һәрмүз** бин Ашҡан, уның улы **Наржа,** уның улы **Алтаф,** уның улы шам **Баһрам,** уның улы **Нәзир Жорд** шам (“Нәзир-йорт шам 20 йыл шам булды, бер мең йөҙ һигеҙгәсә (?), тиҙәр; ғайәт залим ине, үҙ ырыуы харап итте”. — 37-се бит), уның улы **Баһрам Күр; в)** ***Сасун*** ***(Сәсән*** нәҫелле батшаларҙың бабаһы йәғни Тура [Тора] таулы ***Туран иленең*** [Башҡортостандың] шанлы батшаһы ***Бәк-сәсән*** ул, б.э. II быуатында йәшәгән. *Сәсән тоҡомдары [сасанидтар]* б.э. III-VII быуаттары һуҙымында тәхеттә ултырғандар, улар дәүләте хәҙерге Төрөкмәнстан, Афғанстан, Иран, Әрмәнстан, Грузия, Әзербайжан ерҙәрен иңләп урынлашҡан һәм ғәрәптәр яулап алғанға тиклем йәшәгән. Тулыраҡ мәғлүмәтте “Хәтерхитаб”ымдың икенсе томының “Бөйөк Ҡошан” тигән бүлегендә бирҙем). — **22. Бабсаҡ** *(Папак) бин Сасун.* — **23. Артыш-ир** *(Ардашир,* 224-240 йылдарҙа батша; “Бүре-Өфө-өй”өн — Парфияны һәм “бүре-әсә” — фарсы илен һ.б. яулап алып, *Туран иленә* [Башҡортостанға] ҡаршы тороусы *Иран илен* төҙөгән (“Дәүләтебеҙ Бөйөк Ҡошан” тигән хеҙмәтемде ҡарағыҙ). “Үҫәргән тәүәрихе”ндә әйтелә: “Ардашир утыҙ йыл шам булды, *фарсы* вә *гаҡ* вә *лаш* илдәре уның ҡулы аҫтында ине... Бер вәзире бар ине, Шабурҙың анаһын, йәғни үҙенең ҡатынын, шуның менән боҙоҡлоҡ эшләүсе тип һанай башламыштыр һәм шул Шабурҙың анаһын ҡәлғә диуарынан ташлап, ҡанлы кәлйәмәгә әйләндермештер”. — 35-се бит). — **24.** Шам **Шабур** (339-372 й.й. “шам Шабур утыҙ йыл шам булды”. — 35-се бит). — **25.** Шам **Фируз** (Пероз, 459-484 й.й.). — **26.** Шам **Ҡыуат** (Ҡубад, 488-496 һәм 499-531 й.й. “шам Ҡубад 23 йыл шам булды, *Фирдәүси* хөкөмөнөң заманында ине”. — 39-сы бит). — **27. Уның улдары:**

1) шам Ҡыуат улы **...нау...н,** уның улы **Жуанир,** уның улы **Шәһриар,** уның улы **Мирза-алып,** уның улы **Һәрмуз** (*Хормозд III,* 457-459 й.й.), уның улы **Тиауач,** уның улы **Жабин;** һәм йәнә Жуанир менән бер туған **(Ба)һрам,** уның улы **Ғам,** уның улы **Сиавуш.** — **28. Ғали-хан** бин Сиявуш. — **29. Ташбуға-хан.** — **30.** Хан **Суман.** — **31.** Хан **Күсләк.** — **32.** Хан **Айтуп.** — **33.** Хан **Тимерил.** — **34.** Хан **Байкә.** — **35.** Хан **Ылаусы.** — **36.** Хан **Байсиуб.** — **37.** Хан **Ҡара.** — **38.** Хан **Арғырд.** — **39.** Хан **Ҡол-алып.** — **40.** Хан **Байжума.** — **41. (..?).** — **42. (..?).** — **43.** Хан **Турмали.** — **44. Турғай Сәхин.** — **45. Тумаул Мәргән.** — **46. Дуинбиан.** — **47.** Хан **Буртан.** — **48.** Хан **Буян.** — **49. Туҡан-хан** (Үҫәкәй улы Темәсйән-Сыңғыҙ-хандың йәш сағында *Туҡанда — Арҡайымда* торғандағы ләҡәбе; Көнсығышҡа “монгол далаларына” китеп, көс-ҡеүәт туплағас, тирә-яҡ дала халыҡтары, шул иҫәптән башҡорттар, уны йыһангир *Сыңғыҙ-хан* итеп күтәрәләр). Әйткәндәй, атаҡлы йыһангирҙәребеҙ Сыңғыҙ-хан, Йеҙекәй, Аҡһаҡ Тимерҙәрҙең Үҫәргән (башҡорт) батшалар шәжәрәһенән сыҡҡанлығы беҙҙең замандарҙа Ҡаҙағстанда йәшәгән Ҡорбанғәли Юнысовтың шәжәрәһендә лә раҫлана: “Идегей, Тимур и Тимучин-Чингизхан восходят к одному общему предку, которого звали Кайдада. У Кайдады был сын Байсункар, от которого было девять сыновей. От потомков старшего сына Нотакына

родился Кадаркай -- отец Эмира Идегея. От потомков третьего сына Кайдады родился Эмир Тимур. От потомка четвертого сына родился Тимучин, избранный ханом, под именем Чингизхан"... Инде килеп "Үҫәргән тәүәрихе"ндәге баяғы **Туҡан-хан (49)** шәжәрәһенең дауамы: **50. Уның улдары: а) Жужи-хан** *(Яусы);* **б)** хан **Ҡабил** бин Туҡан; **в)** хан **Ҡрыл** *(Кейек)* бин Туҡан, уның улы хан **Ҡотби; г)** хан **Тули,** уның улы хан **Хулукәтули** бин Түли, уның улдары хан **Ҡуян,** хан **Турғай,** хан **Байду, Абғай-хан;**

2) шам Ҡыуат улы **Нуширван Ғәҙел** *(Хосров I,* 531-579 й.й. "Нуширван... 20 йыл шам булды, уның шаһлыҡ ҡыры: Төркөстандың мәшриғенән Һиндостан мәғрибенәсә уның хөкөмөндә булды". — 39-сы бит). — **28. Бируз** бин Нуширван Ғәҙел (*Хосров II,* 628 йылда үлгән). — **29. Шырау-ир** (был осорҙа Бируздан ҡалмыш тәхет өсөн ҡанлы тартыштар булып, 628-632 йылдар араһында тәхеттә бер-бер артлы *ун батша* алмашына. Йездегирд III [632-652 й.й.] тигән берәү тәхетте биләп алғас, ***сәсәндәр*** нәҫеленән булған был <u>*Шырау-ир*</u> үҙенең алыҫ бабаһы ***Бәк-сәсәндең*** тыуған иренә — ***Туран иле Башҡортостанға*** ҡасып ҡайтып, сал ***Көн-Өфө*** [*Тура]* ҡалаһындағы ата-баба тәхетенә ултыра: бының тап шулай икәнлеген Шырау-ирҙең бүләренең шәжәрәләге ***"Туран Дархан"*** тигән батшалыҡ *ләҡәбе дәлилләй.* Күрәһегеҙ, Шырау-ирҙең **Дары** исемле данлы бүләһе Туран [Башҡортостан] дәүләтенең баш ҡалаһы <u>*Өфө*</u> тәхетендә нығынған һәм ***"Туран Дары-хан"*** батша *ләҡәбен* алған, шунан һуң уның нәҫелдәре *лә* быуындан-быуынға <u>*"дары-хан" — **тархан**</u>* *ләҡәбен* йөрөтөп, башҡорттоң *тархандар ҡатламы* барлыҡҡа килгән. Туран Дары-хандың ҡарт-картатаһы Өфөгә ҡайтҡан баяғы 632 йыл менән Туран Дары-хан араһында әҙәмиҙәрҙең ике быуын ғүмере 50 [25+25=50] йыл ятҡанлыҡтан, Туран Дары-хан бабабыҙ Өфө тәхетенә яҡынса 682 [632+50=682] йылда ултырған булырға тейеш). — **30. Шәһриәр. — 31. Аршир. — 32.** <u>**Туран Дархан**</u> *(баяғы Туран Дары-хан,* йәғни Туран иленең Дары исемле ханы, тигән һүҙ; тәхете, әйтеп үтеүебеҙсә, ***Көн-Өфө — Тура*** ҡуш ҡалаһында). — **33. Жәзир Жир. — 34. Әбү Алсаҡ** ("Алсаҡ-ир бер заман Баратурз дархандың ҡалаларын яулап алды, ҙур ил яһаны. Ғайәт шөҡәтле һәм Искәндәр-сафиуллаға тиң хан ине". — 58-се бит). — **35.** Солтан **Ғоҫман** бин Әбү Алсаҡ (Ғоҫманлы төрөк империяһы солтандарының бабаһы). — **36.** Солтан **Жәләлитдин. — 37. Әҙһәм. — 38.** <u>**Баба Төкләҫ-бей**</u>. **— 39.** <u>**Трә (Тура)**</u> бин баба Төкләҫ (*Тура-хан,* XII быуат. Был Тура-хандың ҡәбер кәшәнәһе уның баш ҡалаһы булған Өфөнән алыҫ түгел Шишмә районының *Түбәнге Тирмә* ауылы эргәһендә әлегәсә һаҡланған, архитектор-белгестәр уның ҡоролошон ысынлап та XI-XII быуаттарға ҡарата — Б.Г. Калимуллин. Башкирское народное зодчество. Уфа, 1978; 114-се бит. Боронғо башҡорт тәүәрихсеһе *Ҡыҙрас Муллаҡаевтан* заманында атаҡлы П.И. Рычков [Топография Оренбургской губернии, 372-373-сө биттәр] яҙып алғанса, "хан Тура бин баба Төкләҫ оҙонлоғо ун саҡрымға һуҙылмыш бөйөк ***Өфө*** ҡалаһының аҙаҡҡы ханы булған"). Иғтибар! -- Үҫәргән тәүәрихендәге батшалар шәжәрәһенең дөрөҫлөгө хәҙерге заман Ҡаҙағстан кешеһе -- баяғы Ҡорбанғәли Юнысов төрлө сығанаҡтарҙан һоҫоп алып төҙөгән һәм атабәҙ Әҙәм менән анабыҙ Һауанан башланмыш шәжәрә менән дә раҫлана (әммә унда ҡайһы бер исемдәр боҙоп яҙылған, ә ҡайһылары төшөп тә ҡалған -- шулары бында йәйәләр эсендә Үҫәргән тәүәрихендәгесә төҙәтеп яҙыла): **66. Әбделхаҡ (34. Әбү Алсаҡ). 67. Осман (35. Солтан Ғоҫман). 68. Джалялетдин (36. Солтан Жәләлитдин).** Бер быуын төшөп ҡалған **(37. Әҙһәм). 69. Бабатюкляс (38. Баба Төкләҫ-бей). 70. Термя (39. Тура-хан). 71. Каранчи (40. Ҡаҙансы). 72. Самакай (41. Ҡарадә Ҡиә). 73. Кадаркай (42. Ҡотло Ҡиә). 74. Идегей (43. Йедек -- Йеҙекәй).** Күренеүенсә, башҡорт батыры Йеҙекәйҙең дә, Сыңғыҙ-хан, Туҡтамыш-хан, Аҡһаҡ Тимер кеүек үк, ниндәйҙер татар-

монгол ҡәүеменән түгел, ә Үҫәргән (башҡорт) батшалар шәжәрәһенән сыҡҡанлығы беҙгә бәйле булмаған башҡа сығанаҡтарҙан да дөрөҫләнә. Инде алынған шәжәрәне Үҫәргән тәүәрихендәгесә дауамлайыҡ: **40. Уның (Тура-хандың) улдары:** **Бәрҙебәк солтан бин Тура** йәки **Нармуйынлы Бәрҙебәк** ("Үҫәргән тәүәрихе", 53,57-се биттәр. Уның нәҫелдәрен айырым алып дауамларбыҙ) һәм **Ҡаҙансы** бин Тура. — **41. Уның улдары: Ислам Ҡиә** бин Ҡаҙансы, **Карадә Ҡиә бин Ҡаҙансы** ("Иҙел — Яйыҡ араһында хөкөм һөргән". — 54-се бит; уның нәҫелдәрен айырым алып дауамларбыҙ), — **Ду(ҡ)с(а)ба (Туҡсаба)** бин Ҡаҙансы ("Иҙел — Яйыҡ араһында хөкөм һөргән... Туҡсаба-хан заманында Буйат-бей — бей ине", — 54,62-се биттәр; шәжәрәне күсереүсе был урында "Ду(ҡ)с(а)ба"ның ике хәрефен — йәйәләр эсендә күрһәтелмеш "ҡ" һәм "а"-ны яңылыш төшөрөп ҡалдырған; шуға күрә дөрөҫө "Туҡсаба" булыр). — **42. Мүйтән-бей** бин Туҡсаба — **43. Шаҡмал** бин Мүйтән. — **44. Бүзәк** бин Шаҡмал ("Туҡан-хан заманында бәк булып, хөкүмәт ҡылыр ине". — 60-сы бит). — **45. Йор-уҡ (Жеруҡ,** "Туғрил-хан заманында бәк булып, хөкүмәт итер ине". — 60-сы бит). — **46. Мәңҡут** ("Үзбәк-хан заманында (1290-1341) бей ине һәм тәғрифендә булған халыҡтарға хөкүмәт итер ине". — 60-сы бит). — **47. Урал** бин Мәңҡут ("Урал тапҡан Урал-бей", тирҙәр ине, Жанибәк-хан [һәм Бәрҙебәк-хан] заманында бей булып, хөкөмәт итер ине". — 60-сы бит. Халҡыбыҙ тарафынан ошондай оло баһаға ирешкән бейебеҙҙең эшмәкәрлеге тураһында аныҡыраҡ мәғлүмәттәр һаҡланмауы үкенес). — **48. Анжан-бей** бин Урал ("Нармуйынлы Бәрҙебәк заманында бей булды, хөкүмәт ҡылыр ине". — 62-се бит). — **49. Буйат-бей** ("Туҡсаба-хан[59] заманында бей ине", — 62-се бит). — **50. Арбан-бей** бин Буйат-бей ("Арбан — Туҡтамыш-хан заманында бей булып, хөкүмәт ҡылды һәм, ғәҙел булып, унан һуң еренә *Алгыш Сурабан углы* бей булды, тиҙәр". — 62-се бит). — **51. Сарыбаш-Мәргән** (урыҫ баҫҡынсыларына ҡаршы 1661-1667 й.й. башҡорт ихтилалын етәкләүсе Һары Мәргән шуның исемен ләҡәп итеп алған булһа кәрәк). — **52. Сурабан-бей** ("был Сурабан-бей башҡорт халҡы исеменән [кенәз Бикбау] Иван Василичкә[60] барып баш һалғанда инабат өсөн мәҙкүр ханға [Яуыз Иванға] аманат итеп бирелгәнлегенән һуң Ҡазан шәһәрендә хан хозурында беренсе йыл торғандан һуң вафат булмыш; һәм шул Сурабан тере заманында шәһәре Ҡазандан татар халҡынан ҡатын алмыштыр, *күгәрсен* тигән ырыуҙан; ошо Сурабандың нәҫеле (мәҫәлән, беҙҙең заман Башҡортостандың халыҡ шағиры Марат Кәримов) *Күгәрсен*[61] тигән исемдә мәшһүрҙер". — 64-се бит). *Сурабан-бей улдары:* **Алғыш** ("Туҡтамыш-ханға бей булған Арбан-бейҙән һуң уның ерҙәренә бей булды; ә Арбан-бейҙең атаһы Буйат-бей Туҡсаба-хан заманында бей ине". — 62-се бит); **Тимер Ҡара Буға** ("хан Көсөк заманында бей ине". — 62-се бит);йәнә лә шул Сарыбаш-Мәргәндең улы **Сарыш-бей** ("Сарыш-бей Ҡасим-хан [ул 1524 йылда үлгән] заманында бей ине. Унан һуң Тура-хан[62] заманында бей булып хөкүмәт ҡылды". — 64-се бит). — **53. Аҡмасуҡ** бин Сарыш-бей. — **54. Туҡмасуҡ.** — **55. Тәтегәс-бей** бин Туҡмасуҡ (Юрматы ырыуы шәжәрәһенән: "Тарих туғыҙ йөҙ ҙә етмеш икелә [миләди 1558 йылда] рамаҙан шәрифтең һигеҙенсе көнөндә вафат булды *Тәтегәс* баба". [Башкирские шежере. Уфа, 1960; 31-се бит. Артабан: Тәтегәс-бей шәжәрәһе]. Юрматы бейе рәүешендә билдәле булған Тәтегәстең исемен Үҫәргәндәр

---

[59] Был исемде күсереүсе яңылыштырған: "Туҡҡужа-хан" (Туҡтамыш-хандың атаһы) тип төҙәтеп уҡырға кәрәк.

[60] Урыҫ батшаһы Яуыз Иванға.

[61] Хәҙерге Башҡортостандың *Күгәрсен* районының исеме шунан.

[62] Тура-хан (икенсе) — 1524-1565 йылдарҙа *Өфө-Тура* ҡуш ҡалабыҙҙа тәхетләнмеш Исмәғил Хайрас кенәздең һәм уның улы Хаҡназар-хандың ләҡәбе.

шәжәрәһендә күреп аптырарға ярамай: Юрматы, Ҡанлы, Бөрйән, Түңгәүер, Күбәләк-Тиләү һ.б. ырыуҙарҙың Үҫәргәндән саталанып сыҡҡанлығын яҙғайныҡ. Әйтәйек, үҫәргәндәр табынған Көндөң (Ҡояштың) тулыраҡ исеме ***әсәр-Көн-матер*** *[шәре-ҡан-матур]* әйтелеп, шуның ҡыҫҡараҡ өлгөләренән *әсәр-Көн —* ***Үҫәргән,*** *әсәр-мәте[р] — сәрмәте [сарматы],* ***Юрматы*** һәм шулай уҡ *әсәр-ҡанлы [Үҫәргәнле]* тигәндән, яртылаш ҡыҫҡарып, ***Ҡанлы*** этнонимдары хасил булған. Шулай уҡ Үҫәргән батшалар шәжәрәһе [Геродоттағы "царские скифы"] шәхестәрен, Үҫәргәндән тыш, башҡа ырыуҙарға ла бей итеп ҡуйғандарын онотмайыҡ, мәҫәлән, Барын-Табын ырыуының бейе — үҫәргәнле Майҡы [Байҡы]-бей). — **56. Тәтегәс-бейҙең улдары: Ҡушай Ҡыуат** бин Тәтегәс һәм **<u>кенәз Бикбов (Бикбау)</u>** бин Тәтегәс булмаҡ. — **57. Кинйә** бин Бикбау кенәз. — **58. Уның улдары:**

I. Әлебай бин Кинйә, уның улы **Ураҙ-Өмбәт,** уның улы **Туғанаш,** уның улы **Яппар,** уның улы **Балсыҡ,** уның улы **Сәғит Зүрәт Жүдәк;** йәнә лә шул Әлебай улы **Теләү-Өмбәт,** уның улы **Азатҡул,** уның улы **Аҙғул,** уның улы **Шәриф,** уның улы **Әлмөхәммәт,** уның улы **Боҫҡон,** уның улы **Йылҡыбай,** уның улы **Байыш;** һәм йәнә лә шул Теләү-Өмбәт улы **Булаҡ,** уның улы **Бурағул,** уның улы **Бесәнсе,** уның улы **Яҫауыл Аҡбулат...**

II. Ҡуңғырбай бин Кинйә, уның улы **Түлебай,** уның улдары **Илембәт, Килдеғол, Ғайан, Ҡусҡар, Атлан** һәм дә мәҙкүр **<u>Йәнсура</u>** (исеме менән Башҡортостандың хәҙерге ***Йәнсура*** районы аталған, ләкин рәсми ҡағыҙҙарҙа *"Ейәнсура"* тип яңылыш яҙылып йөрөй). Шуларҙан:

1) *Ҡусҡар улдары*: **Аҡъйән** бин Ҡусҡар, **Бикташ** бин Ҡусҡар, **Аҡбут** бин Ҡусҡар, **Ағурҙа** бин Ҡусҡар;

2) *Атлан улдары:* **Ураҙ** бин Атлан, **Тутаз** бин Атлан, **Мәһди, Атҡужаҡ, Ерәнкәй, Аҡҡужа** һәм Аҡҡужаның улдары **Күҫәкҡол, Бүкәнбай;**

Атлан улы *Ураҙҙан* тыуғандар: **Муса** бин Ураҙ, **Әхмәт** бин Ураҙ, **Ҡәйүал** бин Ураҙ, **Ҡоләхмәт, Ғибадәт,** Ғибадәт улы **Имам;** һәм йәнә лә шул Ураҙ улы имам **Ғәбидулла,** уның улдары: имам **Ғиззәтулла,** имам **Рәхмәтшафиҡ,** имам **Мөфәз** бин Рәхмәтхафиз (Ғәбидулла)...

3) <u>Йәнсура</u> *улдары:* **Исхаҡ** бин *Йәнсура,* уның улы **Балъякшай** бин Исхаҡ; **Ҡустыбай** бин *Йәнсура,* уның улы **Илбай** бин Ҡустыбай; **Мәксүд** бин *Йәнсура,* уның улы **Аҙнабай** бин Мәксүд; **Тимербай** бин *Йәнсура,* уның улы **Миңлебай** бин (Тимербай); **Тимербулат** бин *Йәнсура,* уның улы **Бикташ...**

Урыны ожмахта булғыры Муса хәҙрәт күсереп ҡалдырған был бөйөк шәжәрәбеҙ, ундағы төрлө дәүер төрлө-төрлө батшаларыбыҙҙың исемдәренән үк асыҡ күренеүенсә, ысынлап та Геродот яҙған "батшалыҡ итеүсе скифтар"ҙың (үҫәргәндәрҙең) батшалар шәжәрәһе булып тора. Был юлдарҙың авторының ата-бабалары һөйләп ҡалдырыуынса, боронғо хан урҙаларының береһенең баш ҡалаһы булған һәм Үҫәргән башҡорттары йәшәгән *Сәнкем-Биктимерҙең* (ул ауыл хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Һарыҡташ районына ҡарай ине) *солтандар* (хәҙерге Солтановтар) нәҫеленән ҡасандыр бер заман "һыу башы яғына" (Башҡортостандың хәҙерге *Йәнсура* районына) килен булып төшкән бер һылыуыбыҙ, ата йортонан "бер ниндәй ҙә мал алмай, шул артынан биреләһе мал урынына *эт тиреһенә яҙылған шәжәрәне* һорап алып киткән" — Муса хәҙрәт тап ана шул "эт тиреһенән" күсереп яҙғандыр, бәлки, үҙенең ошо "Үҫәргән тәүәрихе"н... Был

шәжәрәнең ҡиммәте йәнә шунда: *бик күп ауылдарыбыҙҙың һәм нәҫел фамилияларыбыҙҙың ундағы ҡайһы кеше исеменә тип-тура бәйлелеге күренә.*

Ошонда тағы бер мәсьәләне асыҡлап китеү зарур — бөйөк Туҡтамыш-ханыбыҙҙың ҡартатаһының атаһы *"Нармуйынлы Бәрҙебәк"тең* атаһы ысынында кем булғанлығын; сөнки сығанаҡтарҙың береһендә лә беҙ уны таба алмайбыҙ, ә был "Үҫәргән тәүәрихе"ндә иһә ул шаҡтай күҙгә салынып ярылып ята; тик, шәжәрәне быуындан-быуынға күсереп ҡалдырыусыларҙыңмы береһенең яңылышыуы арҡаһындалыр, мәсьәлә буталып ҡалған; әммә ошо буталсыҡты сисерлек бәғзе мәғлүмәттәр "тәүәрих"тең үҙендә лә, фарсы сығанаҡтарында ла етерлек.

"Тәүәрих"тәге был буталыштар Сыңғыҙ-хандың беҙгә билдәле өлкән улы Яусының нәҫелдәр ебендәге **Үзбәк улы Жанибәк-хан** (батшалыҡ итеүе 1341-1357) шәжәрәһен (55-се бит) теркәгәндә ебәрелгән. Беренсенән, унда ысынлап та Жанибәктең улы булған *Бәрҙебәк* (батшалыҡ итеүе 1357-1360) яңылыш рәүештә уның ейәне итеп — йәғни Жанибәк улы Үсәктең (Көсөктөң) улы итеп күрһәтелгән (57-се бит). Икенсенән, Жанибәк улы Үсәктең (Көсөктөң) улы булырға тейешле *Сәйед-Әхмәт (Сәйдәк)* һәм уның нәҫелдәре *Ҡасим-хан* (1524 йылда үлә) һәм уның улы *ХАҡназар-хан* (Аҡназар-хан тип тә йөрөтөлә, 1524-65 йылдарҙа батшалыҡ итеүе билдәле) теркәлмәй ҡалдырылған. Өсөнсөнән, "Өфөнөң һуңғы батшаһы булған" (П.И. Рычков) һәм XII быуатта йәшәгән *Тура-хан (Трә бин баба Төкләҫ),* ныҡ яңылыштырылып, унан байтаҡҡа һуңыраҡ бер осорҙа (1524-1565 й.й.) боронғо Тура-хан баш ҡалаһы Өфөлә ултырып хакимлыҡ ҡылмыш Сыңғыҙ-хан нәҫелле икенсе бер "Тура-хан" — баяғы *ХАҡназар-хан* менән буталғанлыҡтан, шул боронғо Тура-ханыбыҙ унан һуңғы заманалағы Жанибәк бүләре Ҡасим-хандың улы итеп һыҙыҡсалап беркетелгән, ә беҙ уның, баба Төкләҫ улы Тура-хандың, әлеге Үҫәргән батшалар шәжәрәһендәге 39-сы быуынды биләүен беләбеҙ. Дүртенсенән, Жанибәк улы *Бәрҙебәк-хандың* улы итеп яңылыш күрһәтелмеш *Ишем-хан* да ысынында баба Төкләҫ улы Тура-хандың (Трә бин баба Төкләҫтең) улы булырға тейеш, сөнки уның нәҫелдәренең (мәҫәлән, Ҡазан ханлығына ҡаршы аяуһыҙ көрәшкән *Айсыуаҡ-хандың*) ысын башҡорт хандары икәнлеге рәсми тарихтан уҡ билдәле. Өҫтәүенә, Жанибәк улы *Бәрҙебәк,* атаһы Жанибәк-ханды үлтереп тәхеткә үрләгәс, бөтә ағай-энеләрен һәм уларҙың нәҫелдәрен (хатта имсәк балаларына тиклем), береһен-бер ҡалдырмай, төп-ҡыра үлтереп бөтөрә, үҙенән дә нәҫел ҡалмай һәм, тарихсылар Ғаффари һәм Аноним Искәндәр яҙыуынса (Тизенгаузен, 129,211-се биттәр), Сыңғыҙ-хан нәҫеленең был тармағы ошо урында ҡырт-өҙөлә. Һәм Жанибәк-ханға һәм уның нәҫелдәренә ҡағылышлы сығанаҡтарҙа бынан башҡа Бәрҙебәк исемле шәхес юҡ. Тимәк, "Үҫәргән тәүәрихе"ндәге (53-сө бит) *"Бәрҙебәк солтан бин Тура"* — Туҡтамыш-ханыбыҙҙың ҡартатаһының атаһы ***"Нармуйынлы Бәрҙебәк"*** тап үҙе булып сыға һәм уны беҙ үҙебеҙҙең ошо Үҫәргән батшалар шәжәрәһендәге тейешле урынына теркәйбеҙ:

39. Трә (Тура) бин баба Төкләҫ (Тура-хан, XII быуат). — **40. Уның улдары: а) Күсем-хан** бин Тура-хан, уның улы **Ишем-хан,** уның улдары **Туғым-хан** һәм **Айсыуаҡ-хан,** Айсыуаҡ-хан улы хан **Эйәле,** уның улы хан **Туҡай,** уның улы хан **Жиһангир,** уның улы хан **Иләй,** уның улы хан **Вәли солтан Баһадир хан,** уның улы **Ҡаиб-хан; б) Бәрҙебәк-солтан** бин Тура йәки **"Нармуйынлы Бәрҙебәк"** (бөйөк Туҡтамыш-ханыбыҙҙың бабаһы, XIII быуатта йәшәгән был солтан, аталары Тура-хандан ҡалмыш Өфө тәхете өсөн бер туғаны Күсем-хан менән үҙ-ара талашып, үҙе яҡлы бөрйәндәрҙе эйәртеп, Каспий диңгеҙе буйындағы Сыңғыҙ-хан нәҫелдәре хакимлыҡ ҡылмыш

Маңғышлаҡҡа[63] — “Төркөстандың Үсәк [Көсөк] ханына һыйынып ҡасты”; Туҡтамыш-хандың атаһы Төкҡужаның ни өсөн “Маңғышлаҡ гөбөрнаторы” булыуының сере ана шундалыр. Был хаҡта “Үҫәргән тәүәрихе”ндә (57-се бит) ҡиммәтле мәғлүмәт бар: “Бәрҙебәк йылдар аша саманан ашты, тора-тороп Яҫы ташта Күсем-хандың уғландарын үлтерҙе. Үлтерелгән уғландарҙың бабалары башҡорт халҡы ине (Тура-хан бин баба Төкләҫтең һәм уның нәҫелдәренең ысынлап та Үҫәргән (башҡорт) икәнлегенә тура ишара. — *Й.С.*). Улар халҡының бик атаҡлыларынан ине. Улар ғәскәр менән Бәрҙебәк-солтанды үлтермәк өсөн хөсөт ҡылдылар. Шул саҡ Бәрҙебәк-солтан Төркөстанға Үсәк [Көсөк]-ханға һыйыныу өсөн ҡасты, [Үсәк-хандар] — Жанибәк-хан улдары инеләр. Ҡасып барғанда [күрҙе]:Һаҡмар һыуында бер төркөм башҡорттоң үҙенең бәге [бейе] бар ине, *Ҡасынҡы сала-бәк*[64] тип ләҡәпләрҙәр ине, данлыҡлы ине, халҡы *мәсәкле*[65] ине. Унан солтан-Бәрҙебәк һыйыныу үтенде һәм *Ҡасаҡ сала-бәк* уға хуш күңеллелек күрһәтте. Күсем-хан бәктәренән илсе килеп, Бәрҙебәк-солтанды талап иткәнендә, [сала] халҡы ризалыҡ биреп [уны] йәшерҙеләр һәм алып ҡалдылар. Ләкин Бәрҙебәк-солтан эт холоҡло ине: күпселек йәмәғәт уның иҫенә лә кермәне. Бер көн уға *Ҡасаҡ сала* әйтте: минең солтаным, һеҙ анаулары-был халыҡҡа ҡатышманығыҙ, беләм сәбәбен, тине. Солтан-Бәрҙебәк: йөрәгем этйән түгел, аңһыҙҙан был халыҡ мине ҡатил итер [үлтерер], тине. Ҡасаҡ сала-бәк уға үҙ халҡынан бер данлы әҙәмдең Субъямал тигән ҡыҙын никахландырҙы. Ирәүән Ҡасаҡ сала-бәкте Бәрҙебәк-хан сәрғәскәр итеп, халҡы уға ризалыҡ бирҙе... Был Бәрҙебәк-солтан яҡшылыҡ ҡәҙерен белмәҫ кафырҙай ине, башҡа хаталыҡтары ла суҡтыр [күптер]”.

Был атаҡлы “Ҡасынҡы сала-бәк” ләҡәпле бабабыҙҙың атаһы **Яуынсы Яҫауыл** “Күсем-хан заманында уның эргәһендә *яҫауыл* булып хеҙмәт иткән, тиҙәр”, — 66-сы бит; тимәк, бабабыҙ был *Яуынсы Яҫауыл* Себер ханы Күсем (XVI быуат) заманында йәшәгән; уның алты улы — **Арынбай, Аҡбай, Күкбай, Сураҡара, Атҡара, Алҡара** (“был алты уғыл *Яуынсы Яҫауылдың* кесе ҡатынынан ине”. — 66-сы бит). Йәнә лә ике улы: **а) Ҡасаҡ сала-бәк** (“Ҡасаҡ сала-бәк ошбу үҙенең башҡорт халҡына бәк булып, Тора-хан улы Бәрҙебәк [“Нармуйынлы Бәрҙебәк”. — **Й.С.**] халыҡ башлығы булып торған шул үҙ солтанатында[66] ярлыҡанмыштыр”. — 66-сы бит), уның улы **Йыуашбай,** уның улы **Сураш;**

---

[63] Маңғышлаҡ — Мең-ҡышлаҡ, йәғни Үҫәргәндән саталанмыш мең һаҙаҡлы Урҙас-бейҙең (Мең ырыуының) ҡышлау урыны.

[64] Ҡасынҡы сала-бәк (йәки ҡасаҡ сала-бәк) — “ҡасыныу салаһы (селоһы) бәге (бейе)” тигән һүҙ, ул иһә Василий кенәз (Яуыз Ивандың атаһы) ғәскәрендә хеҙмәт иткән атаҡлы *Яуынсы Яҫауыл* бабабыҙҙың улдарының береһе (“Үҫәргән тәүәрихе”; 66,69-сы биттәр). Был “Ҡасынҡы сала” тигән исемле һәм *Ҡаса* — хәҙерге *Ҡаҫмарт* йылға тамағындағы боронғо ауылдың урыны *“Иҫке ҡый”* һәм иҫке зыяраты хәҙерге Ырымбур өлкәһе Һарыҡташ районындағы *Һунарсы* һәм *Сәнкем-Биктимер* ауылдары араһындағы *“Ҡамышлы ҡолаҡ”* тигән төбәктә. Заманында унда, татар-монгол яуҙарынан Каспий диңгеҙенә табан ҡасып китеп барышлай, бөтә Башҡортостандың батшаһы *Муйтән-бей* (баба Төкләҫ улы Тура-хандың бүләһе) ыҫтан ҡороп *ҡасынып* ятҡан (ә бер улы шунда ерегеп ҡалған), шуға күрә лә был ер-һыу *“Ҡасынҡы”* аталған, имеш. Шуға күрәлер инде, ҡарттарыбыҙ “Сәнкем-Биктимер ауылы борон *Муйтән-бейҙең баш ҡалаһы булған”*, тиеп һөйләрҙәр ине.

[65] Мәсәкле — Үҫәргән тәүырыуының башбабаһы Шүлгәнде тыуҙырмыш *“Мәсәк-аба”ға* (Машаҡ-тауға) табыныусы. Был Үҫәргәндәрҙең борон торған ерҙәрендә шул “Мәсәк-аба”ға бәйле *Москова* (Башҡортостандың хәҙерге *Дүртөйлө* районында), *Мәскәү* (Усалы районында) ауылдары һәм алыҫ көнбайыштараҡ *Мәскәү (Москва)* йылғаһы менән *Мәскәү (Москва)* ҡалаһы ҡалған (ул ҡала кенәз Юрий Долгорукий тыуыуҙан күп быуаттар элек үк булған).

[66]Алтын Урҙаның Башҡортостан солтанатында.

б) Үҫәргән, уның улдары: **1) Юламан** ("ҡунаҡ[67] халҡының бабаһы". — 66-сы бит), уның улдары **Ҡоҙаш, Ситкәй; 2) Килдеш** (аҡжаҡ[68] халҡының бабаһы". — 66-сы бит), уның улы **Юнай,** уның улы **Көсөкнисә; 3) Субғужа,** уның улы **Мүскә; 4) Байғужа** ("айыу[69] халҡының бабаһы". — 66-сы бит), уның улы **Ҡаҙаҡбай-бей,** уның улы **Ҡаръяу-бей...**

Бәрҙебәк-солтандың (XIII быуат) заманында уҡ ҙур ҡасаба булмыш шул *Ҡасынҡы саланан* артабан *Сәнкем-Биктимер, Һунарсы, Солтанбай, Ырыҫҡол* һәм *Яңауыл (Яңы Ғафар)* ауылдары бүленеп сыҡҡан. — **41. Ҡиас-хан. — 42. Туҡ-хужа-хан. — 43. <u>Туҡтамыш-хан</u>** ("Туҡтамыш-хан маҡәме [төп йорто] *Сирмешән [Сәрмәсән], Ҡармасан* буйында ине һәм ул йәнә *Иҙел — Яйыҡ араһында* сәхрә тарафында *Үҙән*[70] һыуында булды һәм уның һыуы әсе булғанлыҡтан, саҡ сыҙаны, тиҙәр. Ул ваҡытта яҙ һыу ташҡанда алып ҡалып, бер сула тормош иттеләр: шунда хан йортоноң ҡибла тарафында бер шәре-хауыз[71] бар ине, яҙ көнө ҡаҙып һыу ебәрерҙәр ине; һыуы татлы булғаны өсөн шул хауыздың ҡибла тарафында ябыулы бинанан *Мәсет-һарай* төҙөнө, хозур шәһәр булды[72]. Һуңынан **<u>Йедәк</u>**[73] **<u>бәк</u>** менән араларында һуғыш-ҡырылыш булғас, ул ерҙән китеп, *Сирмешән [Сәрмәсән]* һыуында йорт тотто, *<u>ҡәбере шундалыр</u>*; ул ҡорбандыр — *Йедәк [Йеҙекәй]* уғынан ул тәхет кисте, тиҙәр". — 53-сө бит. Тимәк, бөйөгөбөҙ *Туҡтамыш-ханды*, уның тыуған һәм һуңғы торған төйәге *Сәрмәсән*, ә анығыраҡы — шундағы *<u>Төйләп</u>*, йылғаһы буйына һөжүм ҡылып, икенсе бер бөйөгөбөҙ *Йеҙекәй батыр* үлтергән). — **44. Уның улдары: Жәләлитдин, Сәғидалитдин, Ҡадирбирҙе, Хаҡбирҙе** (һ.б. күптәр)...

Эйе, башҡорт халыҡ эпосында Туҡтамыш-ханды "затһыҙ хан" тип, Аҡһаҡ Тимерҙе ("Сатмыр-хан"ды) ла "затһыҙ тыуған" тип атау ("Ватандаш" журналы, 1997/2; 55,71-се биттәр) ул дәүерҙәге хакимлек ҡылыусы йыһангир Сыңғыҙ-хан нәҫелдәре күҙлегенән ҡарағанда бик ғәҙел һәм урынлы, сөнки әйтелгән шәхестәр икеһе лә, ысынлап та, "затлы" Сыңғыҙ-хан нәҫеленән түгелдәр, Туҡтамыш-хан үҙе гәрсә, Аҡһаҡ Тимерҙән айырмалы булараҡ (ул башҡорттоң *барлас* ырыуынан), был донъяға Сыңғыҙ-ханды ла бирмеш баяғы бер үк *Үҫәргән-Бөрйән* ҡәбиләһенән булһа ла...

Йәнә килеп Үҫәргән батшалар шәжәрәһендәге айырым алып дауамлар өсөн алдараҡ киҫәтеп һәм аҫтына һыҙып ҡалдырып торолған бәғзе быуындарҙың нәҫел бауҙарын һуҙыуҙы дауамлайыҡ:

<u>24. Хан Сәнкүм.</u> — **25. Ғри. — 26. Сәмар. — 27. Тим. — 28. Сәғди** бин Тим. — **29. Ҡағб. — 30. Гру** бин Ҡиас. — **31. Уның улдары: а) Глб** бин Гру, уның улы **Зөһрә Ғәбид Хәләф,** уның улы **(?)** бин Хәләф; **б) Дарам** бин Гру, уның улы **Ғрам** бин Дарам, уның улы **Ғәбуан** бин Ғрам, уның улы **<u>Асаман</u>** һәм уның улы **Жаир** бин Асаман...

Был **<u>Асаман</u>** — *Асамандар (саманидтар)* дәүләтенең (875-999 й.й.) батшалар шәжәрәһен башлаусы уҙаман бабабыҙ ул. Был дәүләт Урта Азияла (баш ҡалаһы *Бохара*)

---

[67] Ҡунаҡ (кинок) — кәнтәй эт, йәғни этҡә табыныусы "нуғай".

[68] Аҡжаҡ (аҡ-жаҡы) — аҡ Шәке йәғни аҡ әсә-бүре, йәғни аҡ бүрегә табыныусы көнбайыш (биләр) үҫәргәндәре.

[69] Айыу — айыуға табыныусы төньяҡ-көнсығыш (саха-яҡут) үҫәргәндәре.

[70] Үҙән йылғалары хәҙерге Саратов өлкәһендә башланып, Ҡаҙағстанға ағыла.

[71] Хауыз — һыу йыйғыс соҡор, хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Биләй районындағы тарихҡа билдәле *Ҡоро-күл* булырға тейеш.

[72] *Мәсет-һарай* ҡалаһы — Туҡтамыш-хандың Яйыҡ буйындағы баш ҡалаһы.

[73] Йедәк — *Йеҙекәй (Едигей)* батырыбыҙ.

урынлашып, X быуаттың тәүге яртыһында Мавереннахр, Хөрәсән, Төньяҡ һәм Көнсығыш Иран илдәрен үҙ эсенә ала, уға Хорезм, Систан, Горган (Үҫәргән), Табаристан (Мазендаран) илдәре буйһоноп йәшәй. Иң мөһим ҡалалары Бохара, Сәмәрҡәнд, Нишапур, Мәреү, Ургенч, Ғират, Бәлх, Ғазни булып, *Асаман* батшалар һарайында Рудаки, Әл-Фараби һ.б. шундай аҫыл заттар ижад иткән. Ул дәүләт Хазар, Иран, Болғар, Ҡытай, урыҫ илдәренә һәм, әлбиттә, Башҡортостанға сауҙа каруандарын йөрөткән...

Ҡалды инде ***41-се быуын — Ҡарадә Ҡиә бин Ҡаҙансы*** һәм уның нәҫел бауы; **Йеҙекәй** батырға ҡағылышлы бик мөһим был тармаҡты беҙ һуңғараҡ — тәғәйен *Йеҙекәй* тураһында һөйләгәндә барларбыҙ.

Саф башҡорт эпосы "Иҙеүкәй менән Мораҙым" Алтын Урҙа тарҡалғандан һуңғы осорҙарҙа уның айырымланмыш халыҡтары (башҡорт, ҡаҙаҡ, нуғай, үзбәк, ҡарағалпаҡ, татар, төрөкмән) тарафынан уртаҡланып, һәр береһе уны үҙ теленә һәм күңеленә яраҡлаштырғанлыҡтан, ситтәр тарафынан үҙгәйләштерелгән башҡа сифаттар ҡатарында батырыбыҙҙың исеме лә төрлө өлгөләрҙә яҙылып йөрөй: *Иҙеүкәй, Йеҙекәй, Йедек, Едигей, Идигу...*

Был серле исемдең мәғәнәһе, ябай-ялпы төпсөүе (этимологияһы) буйынса барлаһаҡ, унда беҙҙе ҡыҙыҡһындырған һүҙ *"Иҙел"* (ҡоро ер сиге — йылға) менән *"иҙеү"* (күлдәк йырығының сиге — иҙеү) берҙәй күреп аңлатыла:

Ун ике йорт ырыуға[74]
Балам да ***иҙеү*** *булһын, тип,*
Илгә килгән дошманды
Агиҙелдәй быуһын, тип,
*...****Иҙеүкәй*** *исемен ҡуйҙы, ти...*

Ләкин был исемдең дөрөҫөрәк әйтелеше *Йеҙекәй* батыр үҙе тере заманда һәм урыҫтар менән яҡын аралашып йөрөгән сағындағы урыҫ йылъяҙмаларына теркәлеп ҡалған — ***Едигей*** (урыҫта "ҙ" хәрефе лә, өнө лә булмағанлыҡтан, башҡортса *"йеҙ"* урынына *"ед"* яҙылған); шулай уҡ иҫке төркиләштерелгән ғәрәп графикалы башҡорт шәжәрәһендә лә был исем, *Йеҙекәй, "әй"* иркәлек ялғауы ҡыҫҡартылып, һәм "ҙ" өнө иҫке төркиләштерелеп, "***Йедек"*** яҙылып йөрөй ("Үҫәргән тәүәрихе"; 54,56-сы биттәр), был иһә тулыраҡ әйтелешле *Едигей — Йеҙекәй* өлгөһөнөң фәнни дөрөҫлөгөн һәм эпостағы *"Иҙеүкәй"ҙең* фәстереп юрау икәнлеген иҫбатлай. Ә исем нигеҙендә ятҡан *"йеҙ"* тәүге ҡараште ҡушылдыҡлы һары бутал (латунь) булып күренә, ләкин был улай түгел. Сөнки *"йеҙ"* тип бабаларыбыҙ эсе ҡыуыш (көпшә) һабаҡлы бейек үләнде атаған, *"сей"* тигән ҡамыш исеме лә шул "йеҙ"ҙән үҙгәреп килеп сыҡҡан; Үҙәк Азия далаларында һыбайлының яурынына тиңәлерлек дәү булып үҫкән был йеҙ (көпшә) үлән — ҡиммәтле мал аҙығы, ә уның кипкән һабаҡтары эшләпә, септә үреү өсөн ҡулланыла; әҫәрен ғәрәпсә яҙған Мәхмүт Ҡашғари уны *"Алла агасы"* тип атаған ("Советская тюркология" журналы, Баку, 1976/3; 41-43-сө биттәр). Далалағы ҡара (ҙур) урмандай булып үҫмеш был "йеҙ" көпшәне Үҫәргән-башҡорт тоҡомдары "ҡара-дәү ҡыяҡ" (дәү ҡыяҡлы ҙур үлән) тип йөрөткән, хатта үҙенең балаларына ла шул үлән исемен ҡушҡан:

---

[74] Ун ике йорт ырыу -- башҡорт халҡының хәҙерге яңылыш яҙып йөрөтөлгән *ете ырыуҙан* түгел, ә *ун ике* төп ырыуҙан хасиллығы эпоста асыҡ әйтелгән.

Ҡара Дәү Ҡыяҡ (шәжәрәләге *"Ҡарадә Ҡиә"*, — "Үҫәргән тәүәрихе", 54-се бит) — *Йеҙекәй* батырыбыҙҙың ҡартатаһының исеме; һәм шул уҡ сатыр сәскәлеләр ғаиләһенән булған, әҙәм балаһының танһыҡ аҙығы итеп ҡулланылған *Төкләҫ* (йөнтәҫ) һәм *молоҡ* (һимеҙ) көпшәле үлән *(балтырган*[75], *балтырсак)* —

Төклө Молоҡ Балтырсаҡ Ҡотло Ҡыяҡ (шәжәрәләге *"Ҡотло Ҡиә"*, — "Үҫәргән тәүәрихе", 54-се бит) — *Йеҙекәй* батырыбыҙҙың атаһының тулы әйтелешле исеме; фарсы сығанаҡтарында ул *Төклөбай, Балтырсы* (Балтасы) булып йөрөй, ә Үҫәргән шәжәрәләренең береһендә *Молоҡ* итеп яҙылған;

һәм шулай уҡ әҙәм балаһының танһыҡ аҙығы булып ҡулланылмыш *ҡаҡы* (ҡымыҙлыҡ) тигән төкләҫ көпшә —

Ҡаҡан Төкләҫ (Ҡаҡы-Төкләҫ) — Үҫәргәндәрҙең киң билдәле бабаһының исеме *баба Төкләҫ* ("Үҫәргән тәүәрихе", 55-се бит).

Сатыр сәскәле был үҫемлектең һыу буйҙарын яратыусы бер төрө бар, ул "сей" (жиз -- еҙ һүҙенән килеп сыҡкан), ә күберәген "ҡамыш" (ҡубыш — ҡыуыш, тигәндән) тип атап йөрөтөлә; әммә М. Ҡашғари яҙған "Алла ағасы" кеүек затлы үлән-көпшәгә бирелмеш *"йеҙ"* үлән атамаһы башҡорт телендә лә һаҡланып ҡалған:

Таштуғайҡай, һинең ҡамышыңды
Йеҙ *ҡурайҡай итеп тартайым...*

Таштуғай.

Тимәк, үлемһеҙ моңобоҙ "Таштуғай"ҙың авторы мәшһүрә Көнһылыуыбыҙ, моғайын, үҙе торған ҡыуан далала *"йеҙ ҡурайҡай"* (йәки *Йеҙекәй* ҡурайҡай) үләне булмағанлыҡтан, ҡулы осондағы нәҙек Таштуғай ҡамышын "*йеҙ* ҡурайҡай итеп" ҡулайлаштырып тарҡкан. Ә инде теге Үҙәк Азиялағы ҡоро далаларҙа урманланып үҫмәле *йеҙ* ҡурай — "Алла ағасы", буйы оҙон булһа ла, һалам кеүек нәҙекәй ҙә ҡурай итеп тартырға төптө яраҡһыҙ булғанлыҡтан, унан эшләпә, септә генә үрәләр, ә донъяла бармы икән һуң йөрәктәрҙең талғын оҙон моңдарын көпшәһенән шаңғыртырлыҡ шыма һәм оҙон булып үҫмәле, ысын-ысындан "Алла үләне" тип әйтерлек *йеҙ-Йеҙекәй — йеҙ* ҡурай? Ҡайҙа үҫә ул *Йеҙекәй?!* — бар икән шул, инш Алла, һәм бөгөнгәсә, тамыры ҡоромай, Уралыбыҙҙа бойоҡмай, ҡусҡылланып үҫә икән шул, тере икән шул, бәрәк Алла! Бына уның, ғалимдәр әйтмешләй, сатыр сәскәләр ғаиләһендәге шыма көпшәле үлән-мөғжизәбеҙҙең, бабалар телендә йөрөгән тулы исеме:

<u>**Йеҙекәй-дәүҡыяҡ-ҡурай.**</u>

Әгәр ҙә ки ошонобоҙҙоң һәр быуынын айырым алып аңлатһаҡ, баяғы *"йеҙ"гә* иркәләү ялғауы *"кәй"* теркәлмеш <u>**"Йеҙекәй"**</u> һүҙен ғилем эйәләре ошолай тип тәфсилләй: "еҙекәй — *шыма көпшә*" (башҡорт теленең һүҙлеге. М., 1993; I том, 309-сы бит). Ә *"көпшә"* тигәнебеҙ, — тип аңлата шул уҡ ғалимдар, — сатыр сәскәләр ғаиләһенә ингән ҡыуыш һабаҡлы бер төркөм үләндең дөйөм исеме ул (шунда уҡ, 544-се бит); ә "сатыр сәскәләр" тигәне, ябай ғына әйткәндә, "таҡыя башлылар" тигән һүҙ. Ә өҫтә күрһәтелмеш тулы исемдең икенсе быуыны <u>**"дәүҡыяҡ"**</u> — дәү (оло) ҡыяҡлы үлән, тигән һүҙ; өсөнсө быуыны <u>**"ҡурай"**</u> — ана шул дәү ҡыяҡлы <u>**Йеҙекәй**</u> үләненең *ҡурылып* кипкән

---

[75] Балтырған (балтыр-ҡан) — тәүдинебеҙҙәге бер үлән-хоҙайҙың исеме.

йәғни тын өрмәле музыка ҡоралы итеп шаңғыртып тартырға яраҡлы ҡыуыш һабағы, көпшәһе; ә *“дәүкыяҡ-ҡурай”* тигәнебеҙҙән *“таҡыя-ҡурай”* йәки *“таҡыя башлы ҡурай”* атамаһы яралған; ҡыҫҡартып уны *“йеҙекәй”* тип кенә лә, *“ҡурай”* тип кенә лә әйткәндәр; әле һүҙ барған батырыбыҙға ла яратып шул моңло исемде ҡушҡандар: ***Йеҙекәй...***

Үҫәргән шәжәрәләренең береһендә (Башкирские шежере. Уфа, 1960; 88-се бит) был нәҫел ошолай сағыла: батырыбыҙҙың ҡартатаһы ***Таукәй*** (*дәүкыяҡ,* тигән һүҙ), уның улы ***Молоҡ,*** унан һуң килә Йеҙекәйҙең улы ***Яҡшыбай*** (был зат Карамзин тарихының V томының 296-сы битендә күренә); тик был шәжәрәбеҙҙә Молоҡ улы ***Йеҙекәй*** үҙе ниңәлер теркәлмәй ҡалған.

Йеҙекәйҙең *Молоҡ-Төкләҫ (Балтырсаҡ)* ләҡәпле атаһының мосолманса *Рәхмәделгәбид* тигән исеме лә булған, Йеҙекәйебеҙ шәжәрәгә тап ана шулай *“Йедек бин Рәхмәделгәбид”* тип яҙылған (“Үҫәргән тәүәрихе”, 54-се бит). Башҡа тарихи сығанаҡтарҙан да яҡшы юллана был бөйөк шәхесебеҙ, Йеҙекәйҙең атаһы. Үҙе батыр йөрәкле лә, мәкерле лә, тәүәккәл дә, фиҙакәр ҙә булған ошо үҫәргәнле-башҡорт уҙаманыбыҙҙы иң элек Алтын Урҙа ханы Жанибәктең (Жанибәк, батшалыҡ итә 1341-1357 й.й.) Баш бейе (премьер-министры) сифатында күрәбеҙ, баяғы төкләҫ-көпшәгә бәйле *Төклө-бай* (Тоғлу-бай) ләҡәбен йөрөтә ул.

Йеҙекәйҙең һәм уның халҡы “нуғай”ҙарҙың — саф Үҫәргән башҡорттары, йәки Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Табын кеүек башҡа башҡорт ырыуҙары булауҙарын Йеҙекәйҙең һәм уның нәҫелдәренең Үҫәргән батшалар шәжәрәһендәге баяғы беҙ айырым алып дауамларға тип киҫәтеп ҡалдырған һәм, киң билдәле 38-се быуын ***баба Төкләҫтән*** бауланып килә-килә, 41-се быуын аша артабан беҙҙең көндәргәсә һуҙылмыш быуындар теҙмәһе лә күрәләтә дөрөҫләй, бына ул:

38. Баба Төкләҫ-бей. — 39. Тура-хан бин баба Төкләҫ (XII быуат аҙағында Көн-Өфө-Тура [хәҙерге Өфө] баш ҡалаһында тәхеттә ултырған). — **40. Ҡаҙансы** бин Тура-хан. — **41.*Карадә Ҡиә*** бин Ҡаҙансы (“Иҙел — Яйыҡ араһында хөкөм һөргән”. — 54-се бит). — **42. Ҡотло Ҡиә** бин Ҡарадә Ҡиә (мосолманлыҡ намы Рәхмәделғәбид). — **43. *Йедек* (Йеҙекәй)** бин Рәхмәделғәбид (“хан Бураҡ [тәхеттә 1422-1427 й.й. — *Й.С.*] һарайсыҡта ине. Ғәйәт алып кеше ине. Ҡан ҡәрҙәше [әсәһе яғынан. — *Й.С.*] Йедек [Йеҙекәй. — *Й.С.*] унда бей ине. Унан [Йеҙекәйҙән. — *Й.С.*] Мансур тыуҙы, Мансур ҙа алып кеби булды. Хөсөт итеп, дәдәһе Бураҡты аңһыҙҙан үлтерҙе [1427 йылда. — *Й.С.*]”. — 55-се бит). — **44. Уның улдары: Ҡасни** бин Йедек, **Науруз** бин Йедек, **Мансур** (балаларының береһе, көсләп суҡындырылып, урыҫтарҙың кенәз Мансуровтар фамилияһын башлаған) бин Йедек, солтан **Нәдерғул** бин Йедек, унан тыуған **Уаҡҡас** бин Нәдерғул (был Уаҡҡастың ошо шәжәрәгә теркәлмәгән **Сәғит** исемле улы ла булып, ул баяғы баба Төкләҫ улы Тура-хандан тыумыш үҙебеҙҙең Күсем-хандың ғәскәр башлығы булған: “Солтан Күсем-хандан һуң уғландары һәр ҡайһылары ил араларында дәғүә-талаш менән [бер-береһен] үлтерҙеләр... Солтан [Күсем-хан] буҙ күҙле ғәйәт алып кеше ине. Тирандазлыҡта [ғәскәр башында] Уаҡҡас-бәктең улы Сәғит ине”. — 57-се бит). — **45. Муса-бәк** (балаларының береһе, көсләп суҡындырылып, урыҫтарҙың дворян Мусин-Пушкиндар фамилияһына ҡатнашлығы бар) бин Уаҡҡас. — **46. Уның улдары: Алсағыр-хан** (ҡаҙаҡ Алаш-Урҙаһының беренсе ханы), **Ирзал Ураҡ** (балаларының береһе, көсләп суҡындырылып, урыҫтарҙың Ураков дворян фамилияларын башлаған), **Ҡалын, *Зартуш Һары Йософ*** (ғүмере буйына Мәскәү кенәзлегенә ҡаршы фиҙакәр көрәшеүсе баһадир, Ҡазан ханбикәһе Сөйөмбикәбеҙҙең атаһы. 1554 йылда бер туғаны Исмәғил Хайрас ҡулынан

ҡорбан була. Унының нәҫел-нәсәбе, көсләп суҡындырылып, урыҫтың кенәз Юсуповтар фамилияһын башлай. — Н.А. Баскаков, 114-се бит), **Мамай-Ҡасим** (йәки Себер-Тура ханы **Мамай-Шәйех** йәки Әстерхан ханы **Мамай-Нар-Ҡасим** йәки шәжәрәләге **“хан Мамай”** — бөтәһе лә бер кеше. “Хан Мамай ғәйәт алып йөрәкле, ҡырағай арыҫлан кеби бәһлеүән ине. Хатта, имешләр, ун ир күтәрмәҫ таш илә Әстерхандың йүкечек [кесе булмаған, ҙур] биналарын атып зир-зибәр ҡылды [таш атҡыс туптары ярҙамында Әстерхан ҡәлғәһен алыуы һәм хан булып ултырыуы. -- *Й.С.*)... Ахыры Исмәғил Хайрас хәйлә илә мәҙкүр ҡәлғәдә [Әстерханда. — *Й.С.*] ҡатил иттерде [язалатып үлтерҙе. — *Й.С.*] һәм ҡәбере Кече Үзән [йылғаһы] башындадыр[76]. Һәм ул заманда Ҡазанда **Сураш солтан**[77], ғәскәре илә барып, бер мәнзил бер ҡалдыҡда [бер туҡталыш ара ҡалған ерҙә. — *Й.С.*] Мофтһуаз илә [ботарлап язалау аша. — *Й.С.*] вафат итди; ғали, ғәдел, суҡау [халыҡсан] әдәм иде”. — 58-се бит), Мамай-Нар-Ҡасим-хандың улы ***Ядкәр Ғоҫман*** (Нуғай ылыҫы йәки Юрматы ырыуы шәжәрәһенән: “Төньяғындан урыҫ көффар килгәйне. Был ерҙәрҙә урыҫ күп булғас... *Ядкәр* мырҙа баш булып, һанһыҙ күп нуғай менән Ҡубанға күстеләр... Туғыҙ йөҙ ҙә илле өстә [=1546] ине”. Ә Ядкәр мырҙаның бер туған ағаһы “Бурнаҡ-бей менән тороп ҡалғандары *иштәк* [башҡорт. — *Й.С.*] аталдылар. Ошбу нуғайҙан ҡалған буш ерҙә ғүмер һөрҙөләр”. — Тәтегәс-бей шәжәрәһе, 29-сы бит); йәнә лә баяғы мәшһүр Муса улдары: **Солтан Сәйдәф, *Исмәгил Хайрас*** (бер туғаны Зартуш Һары Йософто үлтергәненән һуң 1555-1564 йылдарҙағы берләштерелгән Нуғай Урҙаһы кенәзе; шуға тиклем үк Мәскәү кенәзлеге менән рәсми килешеүгә ҡул ҡуйған һәм ахырынаса урыҫҡа тоғролоҡ һаҡлаған зат), **Ырыҫ** (унының ейәндәре, көсләп суҡындырылып, урыҫтарҙың **Урусов** дворян фамилияларын башлаған), **Урмәмбәт** (Тәтегәс-бей шәжәрәһендәге “Сәсле Дәрүиш”), **Әмир Иштерәк**...

Башҡорт батыры Йеҙекәйҙең тап Үҫәргән шәжәрәһендәге атаҡлы бабабыҙ **Баба Төкләҫтән** бауланыуын күрһәткән шәжәрә икенсе бер тәүәрихебеҙ “Сыңғыҙнамә”лә лә бар:

...Баба Туклаш угли Трмә атлиг иерди. Бу Трмә Әдил -- Жаиҡдә хасил булди. Аның угли Ҡазанчи атлиг иерди. Ул һәм Идил -- Жаиҡдә хасил булди. Аның угли Әсламҡиа. Ул һәм Идил – Жаиҡдә хасил булди. Аның угли Ҡарадәкиа. Ул һәм Идил – Жаиҡдә хасил булди. Аның угли Ҡутлуҡиа. Ул һәм Сәмәрҡандтә пида булди. Аның угли Йедикәй... Әммә Баба Туклашнең дүрт угли бар иерди... Әмма Идик би Туҡтамыш ханның өлөшөн бүлди. Идик би угли Нураҙын Мираздур ублаcин өлөшин биләди... Ади Үзән – Туҡтамыш ханның йуртидур. Жим (Сим) – Жаиҡ араси Жәнбәк ханның йуртидур. Аҡидел тамаги Ҡара-хан берлән Бугра ханның йуртидур. Аҡтүбә Бачман ханның йуртидур...

Ҙур Нуғай Урҙаһы кенәзе Йеҙекәй батырҙың шәхсәнә үҙенә килһәк, баяғы хаслашып Әмбә буйына олаҡмыш яһил йән — дуҫтан дошманға әүерелмеш Алтайҡара мырҙаның һәм Туҡтамыш-хан улы Кәримбирҙенең урҙаға өҙлөкһөҙ барымталарынан илде ҡурсалар өсөн, Яйыҡ аръяғы далаларында даими ғәскәр тоторға кәрәк була. Шул сәбәпле Йеҙекәй кенәз йәмле Һаҡмар тамағындағы баш ҡалаһы Аҡтүбәне (хәҙерге Ырымбур) мырҙаларының береһенә ҡалдырып, Яйыҡтың һул ярындағы Бүртә йылғаһы

---

[76] Хәҙерге Саратов өлкәһендә.

[77] Сураш солтан — хан улы Сураш, йәғни Мамай-Нар-Ҡасим-хандың улы, тигән һүҙ.

тамағына (һул ярында) урҙаның яңы баш ҡалаһын — ***Ҡыҙыл Һарайсыҡты*** ҡороп нығына (хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Биләй районындағы *Красногор* салаһы ҡаршыһында, *Күмәк* ауылы янында харабалары һаҡланған). Шул Ҡыҙыл Һарайсыҡ харабаларынан саҡ ҡына төньяҡтараҡ (Күмәк ауылы эргәһендә) таштан һалынмыш "Йеҙекәй мәсете" һәм Рәсәй империяһына ҡаршы 1675-1683 й.й. башҡорт ихтилалы етәксеһе ***Сәйет Йәгәфәр*** батыр ***Садировтың*** исеме уйып яҙылмыш ҡәбер ташы ла бар, имеш; арымай-талмай ҡыҙырынмыш тарихсы-эҙәрмәнебеҙ Ф.Ф. Илбулдин әйтеүенсә, 70-се йылдарҙа шул мәсеттең иҙәне аҫтынан "Йеҙекәйҙең Тимер күлдәген" һәм бик күп "ҡабырсаҡ-аҡса" тапҡандар; Тимер күлдәктең бер киҫәген ул Өфөгә килтереп, Башҡортостан үҙәк музейына тапшырған...

Сал бөркөттәй ҡыуарып ҡартайған Йеҙекәй батыр 1419 йылда һаман үҙенең ғүмерлек ҡан дошмандары — Туҡтамыш-хан улдарына һәм улар менән берлектә хөсөтләшкән баяғыса яңы дошман Алтайҡара мырҙаға ҡаршы һуғыштарын дауамлай һәм шундай бер алышта, П.И. Рычковҡа (69-сы бит) старшина Ҡыҙрас Муллаҡаев биргән мәғлүмәттәр буйынса, Баҫман [Йеҙекәй] кенәзде шул Алтайҡара мырҙа үлтерә. Шул яҡтағы боронғо ваҡиғаларҙан яҡшы хәбәрдар баяғы Чоҡан Вәлиханов (240-сы бит) боронғо бер сығанаҡтан күсереп алыуынса, был ҡанлы ваҡиға хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Илек йылғаһы буйында була: "Андин бариб ир күшә йиҡилди, ани нуҡай Алтай баһадур бариб үлтүрди". — "унан һуң барып ***ир-кеше*** (Йеҙекәй батыр. — *Й.С.*) йығылды, уны нуғай (үҫәргәнле. — *Й.С.*) Алтайҡара баһадир барып үлтерҙе"... Тарихсылар барыһы ла Йеҙекәйҙең Туҡтамыш-хан улы Кәримбирҙе ҡулынан шәһит китеүен яҙалар. Ҡанлы фажиғаның бер шаһиты яҙған йәки һөйләп ҡалдырған ошо һуңғы текстан күренеүенсә, Йеҙекәй батыр тәүҙә Кәримбирҙенең зәһәр уғы тейеүҙән яраланып йығылған да Алтайҡара мырҙа барып уның тамам йәнен алған булырға тейеш... Илек буйындағы ҡанлы был алышта атаһына ярҙамға килгән Нур-ад-дин (Мораҙым) да ҡатнаша һәм, "ҡаты еңелгәндән һуң, диван башлығы Ҡатай Ғәли-бей менән бергә Башҡортостанға килә, ошонда йәшәп вафат була" (Ә.В. Туған, 25-се бит). Хәйер, былдай мәғлүмәтте беҙ "Мораҙын менән Боҫҡон" тигән баяғы бер башҡорт эпосынан да алып биргәйнек...

Йеҙекәй батырҙың ни рәүешле һәләк булыуын уның менән ҡанлы-даулы яуҙарҙа ла, тыныс-имен юлдарҙа ла һәр саҡ бергә йөрөгән, эпосыбыҙҙың заңы менән әйткәндә, һөйөклө "аҡ Нары" ла (бер үркәсле аҡ дөйәһе) күҙ йәштәрен мөлдөр-мөлдөр ҡойоп күреп торғандыр:

...Үлем һис тә аямай,
Иҙеүкәйгә ҡул һалды...
...Иҙеүкәй үҙе әйткәнсә,
Иҙеүкәйҙең кәүҙәһен
Аҡ Нарына артҡан һуң
Нар ҡуҙғалып китте, ти,
Күп ҡаялар үтте, ти,
Күп һыуҙарҙы кисте, ти...

Йола ҡушыуынса үҙ иркенә ебәрелгән аҡ Нар-дөйә Илек йылғаһы буйҙарынан ана шулай, Йеҙекәй мәйетен арҡаһына артмаҡлап, Йеҙекәйҙең баш ҡалаһы Ҡыҙыл-Һарайсыҡ тарафына төньяҡҡа — Яйыҡҡа табан ыңғайлай, тарихта билдәле ағын һыулы

Айғыръял кисеүенән Яйыҡты аша сыға, Яйыҡ менән Һаҡмар аралына йәйрәп ятмыш Яҫы тау һыртынан лапылдап атлай-атлай, хәҙерге Жултый тимер юл станцияһы тәңгәлендә Һаҡмарға барып етеп, Һаҡмарҙы кисмәйенсә кире борола, баяғы Яҫы тау һыртынан лапылдап кире ҡайтып китә; шуға күрә лә ошо дөйә ике тапҡыр ҡаңғырып үткән Яҫы тауҙы ундағылар ***Дөйәтау*** тип атайҙар һәм әлегәсә Яйыҡ менән Һаҡмар араһын шул Дөйәтау һыртындағы Яҫы дөйә юлынан гиҙеп йөрөйҙәр... Йеҙекәй батырҙың үле кәүҙәһен артмаҡлаған аҡ Нар-дөйә, шулай итеп кире-ҡабат дала яғына Яйыҡты кисеп сығып, ҡырт ҡына уңға — Йеҙекәй батырҙың баш ҡалаһы тарафына көнбайышҡараҡ — хәҙерге Ырымбур -- Орск араһындағы таш оло юлдан күҙ йәштәрен супырлатып йүнәлә, хәҙерге Бурансы ауылы ултырған Бүртә йылғаһы тамағына дүрт саҡрымдай ҡалараҡ, эпоста әйтелгәнсә, оло юлдың һул яҡ ситендәге ҙур булмаған “бер түбәгә сүкте, ти”, — ата-баба йолаһы буйынса тап бына шунда ҡәҙерләп ерләйҙәр ҙә инде Йеҙекәй батырыбыҙҙы, башы осона исеме яҙылған ядкәр-таш ҡалҡыталар. Серле ғәрәп хәрефтәре сыйылмыш шул хәсрәтле яҙыуҙың “...зүки” тигән күсермәһен уҡыусыға мәғлүм тарихсы-эҙәрмәнебеҙ Ф.Ф. Илбулдин етмешенсе йылдарҙа мин эшләгән “Ағиҙел” журналы редакцияһына килтереп күрһәткәйне; урындағы ҡаҙаҡтар ул изге зиратты ***“Зюкәй”*** (Йеҙекәй) тип тә, ***“Икетас”*** (Икеташ) тип тә атап йөрөтәләр, имеш... Бурансы ауылының Яйыҡҡа терәлгән осондағы *иҫке* зиратта тағы ла бер тарихи ҡомартҡы “ҡаҙанбаш” — Сыңғыҙ-хан нәҫеле һүләгүҙәр Иранының башҡорт императоры Ҡаҙан-хандың ҡыуарып бөткән баш һөйәге тап ана шул етмешенсе йылдарғаса сал ҡылған араһында аунап ятҡанлығы ла мәғлүм. Уның тап шулай хан кәүҙәһенән айырылған баш икәнлеге Ә.В. Туғандың “Ибн Фаҙландың юлъяҙмаһы” тигән мәшһүр хеҙмәтендә лә сағыла: “Нуритдин[78] Маңыт исемле бейҙең бер принцка әйткән һүҙҙәренә ҡарағыҙ: “Ҡан сөйәге кийә деп, ҡандарды ҡойған Сарайчыҡ бабаңдың башын анда акелип ҡойғанмын”. Ә.В. Туған тәржемәһе: “хан һөйәге бәхетһеҙлек килтерә тип, атайыңдың башын Һарайсыҡтағы зиратҡа илтеп ҡуйғанмын” (“Ватандаш” журналы, 1997/11; 131-се бит). Үрҙәге йөмләнең иҫке төрки ҡатыш тел икәнлегенә иғтибарҙы йүнәлтәйек тә, ундағы Ә.В. Туған яңылыш аңлаған иҫке төркисә “кийә” һүҙенең “бит”, “ки”, “ғуй” тигән киҫәксә икәнлеген (кийә — уменьшительно-выделительная частица. — ДТС, 307-се бит) билдәләп, тексты инде ипләберәк уҡыйыҡ: “Хан һөйәге бит тип, хандарҙы ҡуйған (ерләгән) Һарайсыҡҡа[79] — бабаңдың башын шунда әпкилеп ҡуйғанмын”... Әйткәндәй, шул тәңгәлдә Яйыҡтың уң яғындағы Һарт (урыҫса Ельшанка) ауылы эргәһендә атаҡлы “Үзбәк-хан зираты” ла бар имеш... Был тарихи ҡомартҡыларыбыҙҙы замана бурҙарынан — ҡыҙыл империя осоронда изгеләрҙән изге *Бәндәбикә, Бабсаҡ-баба* зираттарын, Асылыкүл буйындағы *Сураташтора* изге ҡорамының ырын яҙыулы ташын хараплаған зәғиф рухлы археологтарҙың нәүбәттәге баш-баштаҡлығынан ҡурсаларға тейешбеҙ:

Бабаларҙың изге тупрагының
Остого ла елгә осмаһын...

Әммә һуңғы йылдарҙа Еҙекәй батырҙфың да, ул үлтергән Туҡтамыш-хандың да ҡәберҙәре үҙебеҙҙең Миәкә районы Илсеғол ауылы янындағы күршеләш ике тау башында икәнлеге асыҡланды.

---

[78] Нуритдин — Йеҙекәй улы Нур-ад-дин (Мораҙым).

[79] Һарайсыҡҡа — Ҡыҙыл-Һарайсыҡҡа тигәндең ҡыҫҡартып әйтелеше.

Башҡортостан тупрағында мәңгел тыныслыҡ тапҡан императорҙарыбыҙҙың иң һуңғыһы тураһында бара һүҙ.

Алтын Урҙа дәүләтенең императоры Туҡтамыш-хан һәм шулай уҡ император дәрәжәһенәсә күтәрелгән Еҙекәй батыр тураһында ныҡлап ҡыҙыҡһыныуым үткән быуаттың етмешенсе йылдарында мәшһүр "Үҫәргән тәүәрихе"нән (Библиотека Башкирского филиала Академии Наук СССР, ИБ -- 2279, ғәрәп графикалы ҡулъяҙма хәлендә) уҡып, икеһенең дә килеп сығышы үҙемдеке менән бер иш -- Үҫәргән батшалар шәжәрәһенән, икеһе лә үҙем кеүек үк үҫәргән башҡорто икәнлеген белгәс ныҡлап башланды. Салдарҙан-сал тарихыбыҙҙа соҡсоноп сәсем ағарғас танырға тура килә: төрки донъяһында мәғлүм иң реаль, тарихи ерлекле, ышаныслы шәжәрә -- "Үҫәргән тәүәрихе", сөнки ул тәғәйен Урал -- Иҙел ерлегенән һәм унда беҙҙең эраға тиклем XV быуатта башҡорт-болғар дәүләтен нигеҙләүсе ***Ишек*** (икенсе бер яҙылыштарҙа ***Ижек***) бабабыҙҙан башлана (1680 -- 82 йылғы башҡорт ихтилалы етәксеһе бөйөк Сәйет Йәғәфәр Садиров бабабыҙ 1680 йылда күсертеп яҙҙыртҡан тәүәрихте ҡарағыҙ: Бахши Иман. Джагфар тарихы, I, II, III том. Оренбург, 1993 -- 1997). Дөрөҫ, донъяла *үҫәргән*, хатта *башҡорт* тигән этнонимдарҙың барлығын да белмәгән (йәки белергә теләмәгән) төрлө милләтле авторҙар (һәм шуларға эйәреп башҡорт ғалимдары!) Туҡтамыш-ханды -- Сыңғыҙ-хан тоҡомло ***татар-монгол*** тип, Еҙекәй батырҙы ***маңғыт*** (йәнәһе шул уҡ монгол!) тип тә, ***ҡуңғырат*** тип тә яҙалар. Ләкин айныҡ тарихсыларға күптән үк яҡшы мәғлүм: Сыңғыҙ-ханды һәм уның кешеләрен хандың ҡан дошманы һаналған этнос исеме менән "татар" тип урыҫтар тамғалаған, ә сығышы менән башҡорт (атаһы -- бөрйән, әсәһе үҫәргән-ҡаңғы башҡорто) бөйөк бабабыҙ үҙенең дәүләтен ***"мәңге-ил"*** (мәңгелек ил) тип атағанлыҡтан, халҡы ла шул ***мәңге-ил – монгол*** исеме менән тирә-яҡҡа танылған. Еҙекәйҙең маңғытлығы һәм ҡуңғыратлығы ла бик ябай аңлашыла: ***мәңге+т*** (бында "т" -- күплек ялғауы) ***маңғыт*** ("мәңгеләр" мәғәнәһендә) һәм ***ҡаңғы*** (шул уҡ *үҫәргән)****+ир-ат= ҡаңғырат, ҡуңғырат.*** Тимәк, бер үк ерҙә донъяны яуларға ынтылыусы һәм бер-береһенең ҡанын ҡойоусы йыһангирҙәр ***Сыңғыҙ-хан, Туҡтамыш-хан, Аҡһаҡтимер, Еҙекәй батыр*** дүртеһе лә бер үк тоҡом -- башҡортобоҙҙоң Үҫәргән батшалар шәжәрәһенән! (Шәжәрәне ҡарағыҙ: Йыһат Солтанов. Башҡорт батшалары. Сыңғыҙ хандан алып Урыҫ дәүләтенә ҡушылғанғаса. Өфө -- 2007). "Маңғыт"тың үҫәргән-башҡорт икәнлегенә шик ҡалдырмаусы дәлил -- "үҫәргәндар бабаһы"ның эпосыбыҙға "Маңғыт улы Мөйтән-бей" рәүешендә теркәлеүе (Башҡорт халыҡ ижады, VII том, Өфө -- 2004, 258-енсе бит). Әйткәндәй, быйыл ғына бер мәғлүмәтнамәгә юлыҡтым: Ҡаҙағстан Мосолмандар берлегенең вице-президенты, Алматы ҡала адвокаттар коллегияһы ағзаһы Ҡорбанғәли Юнысовтың Әҙәм пәйғәмбәрҙән алып 96 быуынға еткерелгән шәжәрәһе. Тәүге 65 быуыны ҡәҙимгесә фәстерелеп, Мөхәммәт пәйғәмбәрҙе лә биргән ғәрәп шәжәрәһенән өҙөктө ялғау булһа ла, 66-нсынан ҡала быуындар үҙебеҙҙеке -- әле әйтелгән Үҫәргән батшалар шәжәрәһенең айырылғыһыҙ киҫәге (ҡайһы бер исемдәр генә боҙола биргән). Әммә унда әле һаналған дүрт бөйөк затыбыҙ һәм уларҙың тоҡомдашлығы тураһында минең фекерҙе дөрөҫләүсе ҡиммәтле мәғлүмәт бар:

"Идегей (1352-1419), **Тимур** и **Тимучин- Чингизхан** восходят **к одному общему предку** которого звали **<u>Кайдада</u>**. У Кайдады был сын **<u>Байсункар,</u>** от которого было 9 сыновей. От потомков старшего сына **<u>Нотакына</u>** родился **<u>Кадаркай</u>** отец **<u>Эмира Идегея.</u>** *От потомков третьего сына Кайдады родился* Эмир **Тимур.** *От потомка четвертого сына родился* **Тимучин,** избранный ханом, под именем **Чингизхан**. ***Соглано закона утвержденного Чингисханом только его прямые потомки вправе были быть ханами. По***

этому Идегей и Тимур не претендовали на титул Хана, а были Эмирами. Но они оба и их потомки всегда учитывали что ***Тимучин, то есть Чингиз Хан происходит от 4-го сына, тогда как Идегей от первого, а Тимур от 3-го сына*** *__их общего предка__*. А **по лестничной, используемой только тюрками, системе наследования трона, власть переходит от отца к старшему сыну, затем второму сыну и так далее пока все живые сыновья не закончат свое правление. За тем наступает очередь сыновей старшего сына, после них сыновей второго сына и так далее, каждое поколение правителя обязано было править согласно своей очереди**. Тимур нарушил этот тюркский принцип наследуемой по лестничной системе власть, ее фактически узурпировал, при избрании его на трон Хана: вместо того что бы уступил трон тому, кому следовала по закону лестничной системе наследования. Это нарушение, прецедент использовался часто в кризисные моменты истории Золотой Орды, и других татарских государствах после распада Золотой орды. Так например после смерти Хана Тауке, вместо созыва общего курултая и выборе законного единого хана в соответствии с лестничной системой выборов, бии всех 5 жузов страны избрали себе своих ханов, разрушив единое государство на пять. Жузы каракалпаков и киргизов видимо уже окончательно отделились от трех других, которые составляют нынешний Казахстан”.

Бабабыҙ Сыңғыҙ-хандың тышҡы ҡиәфәте лә тарих фәнендә беҙгә тылҡылған ҡытай һүрәттәрендәге “типик монгол” түгел, ә V быуатта шул уҡ ҡытайҙар тасуирлап ҡалдырған “зәңгәр күҙле, ерән сәсле” үсүн-үҫәргәндәрҙекенә тап килә; хәҙерге урыҫ ғалимы ла ҡушҡуллап раҫлай быны: “В сохранившихся старинных документах, -- ти ул, -- существуют описание **Чингиэ-хана: высокий, стройный, с каштановыми волосами, голубыми (по другим данным -- зелеными) глазами и широкой окладистой бородой.** Скажем, не вполне типичный облик для монгола.

Кажется удивительным, но и в описаниях внешности многих основателей тогдашних правящих династий (Рюрик, Аспарух, Меровей, Юстиниан), фигурирует схожий внешний облик. То есть основания считать, что эти создатели династий, упоминаемых впоследствии как “царские”, относятся к одному и тому же старинному правящему роду или правящим родам” (Александр Горохов. Белый царь). Йәғни ҙә ки уларҙың бөтәһе лә “Үҫәргән батшалар шәжәрәһе”нең емеше булып, ни бары төп олондан (башҡорт-болғарҙан) ярған ботаҡтарҙа ғына башҡалана.

Тәғәйенерәк ҡарағанда, өҫтәрәк килтерелгән бөйөк дүрт шәхестең уртаҡ бабаһы (Ҡ. Юнысов шәжәрәһендәге Ҡайдада, дөрөҫөрәге Ҡай-дәдә -- Бүре-баба) Үҫәргән батшалар шәжәрәһендәге (ул “Башҡорт батшалары”нда тулы бирелгән) **26**-нсы номерлы реаль шәхескә -- шам Ҡыуат (рәсми тарихтағы Ҡубад, батшалыҡ итеү йылдары 488-496 һәм 499-531; “шам Ҡубад 23 йыл шам булды, Фирдәүси хөкөмөнөң заманында ине”, -- “Үҫәргән тәүәрихе”, 39-ынсы бит) тигән бабабыҙға тап килә. Шуның балаларының береһенән, өҫтәрәк әйтелгәнсә, бөйөк Сыңғыҙ-ханыбыҙҙы биргән тармаҡ айырыла, бына ул: “27. Шам Ҡыуат улы ...**нау...н** (асыҡ уҡылмай), уның улы Жуанир, уның улы Шаһриар, уның улы Мирза-алып, уның улы Һәрмүз (*Хормозд III,* 457-459 йй.), уның улы Тиауач, уның улы Жабин; һәм йәнә Жуанир менән бер туған (Ба)һрам, уның улы Ғам, уның улы **Сиавуш. -- 28. Ғали хан** бин Сиавуш. **-- 29. Ташбуға хан. -- 30. Хан Суман. -- 31. Хан Күсләк. -- 32. Хан Айтуп. -- 33. Хан Тимерил. -- 34. Хан Байкә. -- 35. Хан Ылаусы. -- 36. Хан Байсиуб. -- 37. Хан Ҡара. -- 38. Хан Арғырд. -- 39. Хан Ҡол-алып. -- 40. Хан Байжума. -- 41. (?). -- 42. (?). -- 43. Хан Турмали. -- 44. Турғай Сәхин. -- 45. Тумаул Мәргән. -- 46. Дуинбиан. -- 47. Хан Буртан. -- 48. Хан Буян. -- 49.** *__Туҡан-хан__* (Темәсйән-

Сыңғыҙ-хандың йәш сағында *Туҡанда -- Арҡайымда* торғанындағы *ләҡәбе*; шул төбәктән Көнсығышҡа ҡасып китеп, көс-ҡеүәт туплағас, тирә-яҡ дала халыҡтары, шул иҫәптән Башҡортостан батшаһы Муйтән-бей һәм уның бер туған ҡустыһы Майҡы-бей етәкселегендәге башҡорттар, үҙҙәренең шул ҡан ҡәрҙәше Темәсйәнде аҡ кейеҙҙә йыһангир *Сыңғыҙ-хан* итеп күтәрәләр). **-- 50. Уның улдары: а) Жужи-хан** (Яусы); **б) Хан Ҡабил** бин Туҡан; **в) Хан Ҡрыл** (*Кейек*) бин Туҡан, уның улы Хан Ҡотби; **г) Хан Тули,** уның улы Хан Хулукәтули бин Тули, уның улдары Хан Ҡуян, хан Турғай, хан Байду, Абғай-хан...

Шәжәрәлә шул уҡ шам Ҡыуаттың балаларының береһенән бөйөк Туҡтамыш-ханды *ла*, уның ҡан дошманы Еҙекәй батырҙы *ла* тыуҙырған изге Баба Төкләҫебеҙҙең тармағы дауамлана: **2)** шам Ҡыуат улы **Нуширван Ғәҙел** *(Хосров I,* 531-579 й.й. “Нуширван... 20 йыл шам булды, уның шаһлыҡ ҡыры: Төркөстандың мәшриғенән Һиндостан мәғрибенәсә уның хөкөмөндә булды”. — 39-сы бит). — **28. Бируз** бин Нуширван Ғәҙел (*Хосров II,* 628 йылда үлгән). — **29. Шырау-ир** (был осорҙа Бируздан ҡалмыш тәхет өсөн ҡанлы тартыштар булып, 628-632 йылдар араһында тәхеттә бер-бер артлы *ун батша* алмашына. Йездегирд III [632-652 й.й.] тигән кемдер берәү тәхетте биләп алғас, ***сәсәндәр*** нәҫеленән булған был <u>*Шырау-ир*</u> үҙенең алыҫ бабаһы ***Бәк-сәсәндең*** тыуған еренә — ***Туран иле Башҡортостанға*** ҡасып ҡайтып, сал ***Көн-Өфө*** [*Тура]* ҡалаһындағы ата-баба тәхетенә ултыра: бының тап шулай икәнлеген Шырау-ирҙең бүләренең шәжәрәләге ***“Туран Дархан”*** тигән батшалыҡ *ләҡәбе* *дәлилләй*. Күрәһегеҙ, Шырау-ирҙең **Дары** исемле данлы бүләһе Туран [Башҡортостан] дәүләтенең баш ҡалаһы <u>*Өфө*</u> тәхетендә нығынған һәм ***“Туран Дары-хан”*** батша *ләҡәбен* алған, шунан һуң уның нәҫелдәре *лә* быуындан-быуынға <u>*“дары-хан” — **тархан**</u> ләҡәбен* йөрөтөп, башҡорттоң *тархандар ҡатламы* барлыҡҡа килгән. Туран Дары-хандың ҡарт-ҡартатаһы Өфөгә ҡайтҡан баяғы 632 йыл менән Туран Дары-хан араһында әҙәмиҙәрҙең ике быуын ғүмере 50 [25+25=50] йыл ятҡанлыҡтан, Туран Дары-хан бабабыҙ Өфө тәхетенә яҡынса 682 [632+50=682] йылда ултырған булырға тейеш). — **30. Шәһриәр. — 31. Аршир. — 32.** <u>**Туран Дархан**</u> (*баяғы Туран Дары-хан,* йәғни Туран иленең Дары исемле ханы, тигән һүҙ; тәхете, әйтеп үтеүебеҙсә, ***Көн-Өфө — Тура*** ҡуш ҡалаһында). — **33. Жәзир Жир. — 34. Әбү Алсаҡ** (“Алсаҡ-ир бер заман Баратурз дархандың ҡалаларын яулап алды, ҙур ил яһаны. Ғайәт шөҡәтле һәм Искәндәр-сафиуллаға тиң хан ине”. — 58-се бит). — **35.** Солтан **Ғоҫман** бин Әбү Алсаҡ (Ғоҫманлы төрөк империяһын нигеҙләүсе, төрөк солтандарының бабаһы). — **36.** Солтан **Жәләлитдин. — 37. Әҙһәм. — 38.** <u>**Баба Төкләҫ-бей**</u>**. — 39.** <u>**Трә (Тура)**</u> бин баба Төкләҫ (*Тура-хан,* XII быуат. Был Тура-хандың ҡәбер кәшәнәһе уның баш ҡалаһы булған Өфөнән алыҫ түгел Шишмә районының *Түбәнге Тирмә* ауылы эргәһендә әлегәсә һаҡланған, архитектор-белгестәр уның ҡоролошон ысынлап та XI-XII быуаттарға ҡарата — Б.Г. Калимуллин. Башкирское народное зодчество. Уфа, 1978; 114-се бит. Боронғо башҡорт тәүәрихсеһе *Ҡыҙрас Муллаҡаевтан* заманында атаҡлы П.И. Рычков [Топография Оренбургской губернии, 372-373-сө биттәр] яҙып алғанса, “хан Тура бин баба Төкләҫ оҙонлоғо ун саҡрымға һуҙылмыш бөйөк ***Өфө*** ҡалаһының аҙаҡҡы ханы булған”). Ҡомартҡынан ап-асыҡ күренеүенсә, башҡорт батыры Йеҙекәйҙең дә, Сыңғыҙ-хан, Туҡтамыш-хан, Аҡһаҡ Тимер кеүек үк, ниндәйҙер татар-монгол ҡәүеменән түгел, ә Үҫәргән (башҡорт) батшалар шәжәрәһенән сыҡҡанлығы төрлө сығанаҡтарҙан дөрөҫләнде. Инде батшалар шәжәрәһен йәнә Үҫәргән тәүәрихендәгесә дауамлайыҡ: **-- 40. Уның (Тура-хандың) улдары: а)** <u>***Бәрҙебәк солтан бин Тура***</u> йәки <u>***Нармуйынлы Бәрҙебәк***</u> (“Үҫәргән тәүәрихе”, 53,57-се биттәр) һәм **б)**

Ҡаҙансы бин Тура (йәйәләр эсендә иҫкәртеп китеү урынлы: Башҡортостаныбыҙҙың хәҙерге Аҫҡын районындағы Ҡаҙансы -- ошо бабабыҙҙың ауылы). Әле генә а) һәм б) билдәләре аша килтерелгән ике уландан тап беҙҙе нығ ҡыҙыҡһындырған ике затыбыҙҙың шәжәрә ботаҡтары фашлана: **а) 40. Бәрҙебәк солтан бин Тура** йәки **Нармуйынлы Бәрҙебәк** (Үҫәргән тәүәрихе, 53, 57-енсе биттәр), уның улы **Ҡиас-хан,** уның улы **Туҡхужа-хан,** уның улы **Туҡтамыш-хан** (Туҡтамыш-хан маҡәме [төп йорто] Сирмешән [Сәрмәсән], Ҡармасан буйында ине һәм ул йәнә *Иҙел — Яйыҡ араһында* сәхрә тарафында *Үҙән*[80] һыуында булды һәм уның һыуы әсе булғанлыҡтан, саҡ сыҙаны, тиҙәр. Ул ваҡытта яҙ һыу ташҡанда алып ҡалып, бер сула тормош иттеләр: шунда хан йортоноң ҡибла тарафында бер шәре-хауыз[81] бар ине, яҙ көнө ҡаҙып һыу ебәрерҙәр ине; һыуы татлы булғаны өсөн шул хауыздың ҡибла тарафында ябыулы бинанан *Мәсет-һарай* төҙөнө, хозур шәһәр булды[82]. Һуңынан **Йедәк**[83] **бәк** менән араларында һуғыш-ҡырылыш булғас, ул ерҙән китеп, *Сирмешән [Сәрмәсән]* һыуында йорт тотто, *ҡәбере шундалыр*; ул ҡорбандыр — *Йедәк [Йеҙекәй]* уғынан ул тәхет кисте, тиҙәр". — 53-сө бит. Тимәк, бөйөгөбөҙ *Туҡтамыш-ханды*, уның тыуған һәм һуңғы торған төйәге *Сәрмәсән* тирәһенә, ә анығырағы, шуға яҡын *Төйлән*, йылғаһы буйына һөжүм ҡылып, икенсе бер бөйөгөбөҙ -- үҙенең ҡан ҡәрҙәше *Йеҙекәй батыр* үлтергән). — **44. Уның улдары: Жәләлитдин, Сәғидалитдин, Ҡадирбирҙе, Хаҡбирҙе** (һ.б. күптәр)...

Туҡтамыш-хандың әсәһе, Еҙекәйҙеке кеүек үк, башҡорттоң Ҡаңғы (Ҡуңғырат) ырыуынан икәнлеге сығанаҡтарҙа сағылған; ә хандың үҙен гәрсә "Сыңғыҙ-хан нәҫеленән" тип яҙып килһәләр ҙә, атаһынан артабанғы шәжәрә һуҙымын күрһәтә алыусы юҡ -- тарихсыларҙың көллөһө лә "Яусы (Джучи) тоҡомдарының береһенән булһа кәрәк", тигән билдәһеҙлеккә төкәтеп сикләнәләр, ә "Үҫәргән тәүәрихе"нә хатта башҡорт тарихсыларының да күпселегенең "теше үтмәй". Филологтарыбыҙ ҙа был "сәйер" Туҡтамыш исеменең асылын аңлатҡаны юҡ, ә ғәмәлдә унан башҡортлоҡ аңҡый: **Төктө Мышы** (Төклө Мышы) -- Туҡтамыш, атаҡлы **Мышы Улы** (уны боҙоп Мөшәүле тип яҙып йөрөтәләр) һымаҡ уҡ! Төктө (төклө) -- мал-мөлкәтле, етешле, бай тигән һүҙ, шунан килә үҫәргән бабалар исеме Баба Төкләҫ, Муйтән (төклө тән) һәм мәкәл-әйтемдәребеҙ: "Ат аунаған ерҙә төк ҡала" "Төклө аяғың менән" һ.б.... Йәш Туҡтамыштың Алтын Урҙанан Аҡһаҡтимер ҡанаты аҫтына боҫоуының сәбәбен дә "нәҫелдәше" Урыҫ-хан менән тәхет өсөн тартышыуы итеп аңлатыусандар, ләкин эш башҡасараҡ: Аҡ Урҙа[84] ханы Урыҫ-хан күрше Күк Урҙаны[85] үҙенең урҙаһына ҡушырға яҫҡынғас, Ғаффари тигән боронғо автор яҙыуынса, Маңғышлаҡ бөрйәндәренең бейе Туҡ-хужа, йәғни Туҡтамыштың атаһы, быға ҡаршы төшә һәм шуның өсөн Урыҫ-хан тарафынан үлтерелә, ә Туҡтамыш Аҡһаҡтимер ярлыҡауында ҡотола.

... Һәм б) 40. Ҡаҙансы бин Тура. Уның улдары **1) -- 41. Ислам Ҡиә** бин Ҡаҙансы, **2) -- 41. Ҡарадә Ҡиә** бин Ҡаҙансы ("Иҙел -- Яйыҡ араһында хөкөм һөргән", 54-енсе бит). **-- 42. Ҡотло Ҡиә** бин Ҡарадә Ҡиә (мосолманлыҡ исеме Рәхмәтелғәбид). **-- 43. Йедек (Еҙекәй)** бин Рәхмәтелғәбид ("хан Бураҡ `[тәхеттә 1422-1427 йй. -- Й.С.] Сарайсыҡта ине.

[80] Үҙән йылғалары хәҙерге Саратов өлкәһендә башланып, Ҡаҙағстанға ағыла.

[81] Хауыз — һыу йыйғыс соҡор, хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Биләй районындағы тарихҡа билдәле *Ҡоро-күл* булырға тейеш.

[82] *Мәсет-һарай* ҡалаһы — Туҡтамыш-хандың Яйыҡ буйындағы баш ҡалаһы.

[83] Йедәк — *Йеҙекәй (Едигей)* батырыбыҙ.

[84] Яусы (Джучи) ылыҫының көнсығыштан Иҙелгәсә яртыһы.

[85] Яусы (Джучи) ылыҫының көнбайыштан Иҙелгәсә яртыһы.

Ғәйәт алып кеше ине. Ҡан ҡәрҙәше [әсәһе яғынан. -- Й.С.] Йедек унда бей ине. Унан (Йедек-Еҙекәйҙән. -- Й.С.) Мансур тыуҙы, Мансур ҙа алып кеби булды. Хөсөт итеп, дәдәһе Бураҡты аңһыҙҙан үлтерҙе [1427 йылда. -- Й.С.]", 55-енсе бит); **3) -- 41. Ду(ҡ)с(а)ба (Туҡсаба)** бин Ҡаҙансы ("Иҙел — Яйыҡ араһында хөкөм һөргән... Туҡсаба-хан заманында Буйат-бей — бей ине", — 54,62-се биттәр; шәжәрәне күсереүсе был урында "Ду(ҡ)с(а)ба"ның ике хәрефен — йәйәләр эсендә күрһәтелмеш "ҡ" һәм "а"-ны яңылыш төшөрөп ҡалдырған; шуға күрә дөрөҫө "Туҡсаба" булыр). **-- 42. Муйтән-бей** бин Туҡсаба... Бөйөк шәжәрә олонобоҙ ошолай шанлы Муйтән-бей бабабыҙ аша үтеп, әлегәсә йәшәп килгән бик күп тармаҡтарҙы, шул иҫәптән был юлдар авторының 67 быуынға еткән тармағын да кәүҙәләндерә.

Һорау тыуырға мөмкин: Үҫәргән батшалар шәжәрәһе Ишек баба йәшәгән б.э. тиклем XV быуаттан уҡ башланған икән, ниңә уның быуындары шул 35 быуат һуҙымына тиңәлмәй, ә был аңлатмалар авторының шәжәрә тармағы осланған 67 генә быуынды сағылдыра? Дөрөҫ һорау, сөнки ул 35 быуат эсендә әҙәмдәр ғүмере 140 быуын аша үтергә тейеш. Әммә яҙма шәжәрәләрҙең бөйөктәренең үҙенсәлеген онотмайыҡ: тарихилыҡтан алдағы осорҙар, быуындарҙы тулайым теркәп бөтөү мөмкин булмағанлыҡтан, күпмелер арауыҡ хакимлыҡ иткән батша нәҫелдәре (династиялары) башлыҡтарының ғына исемдәрен атай һәм ул арауыҡ бер юлы 300 йылды ла (мәҫәлән, Михаил Романовтар осоро) һәм 1000 йылды ла (мәҫәлән, Лоҡман-Хәким осоро) тәшкил итергә мөмкин, ә даталар менән билдәләрлек тарихи осорҙар шәжәрәнең һуңғараҡ өлөшөндә булыусан. Бының миҫалын боронғо шумер шәжәрәләрендә, Тажитдин Ялсығол Башғорди һ.б. шәжәрәләрендә күрәбеҙ, Үҫәргән батшалар шәжәрәһенең тарихилыҡ өлөшө иһә Мидия батшаһы Кииксарув хакимлыҡ иткән б.э. тиклем 625-585 йылдарҙан башлана.

"Үҫәргән тәүәрихе"нән әле һоҫолған мәғлүмәт буйынса, Алтын Урҙа императоры Туҡтамыш-хандың тыуған һәм һуңғы төйәге Сәрмәсән һәм Ҡармасан һыуҙары тарафында булған, Еҙекәй ҡулынан китеүе лә, ҡәбере лә шундалыр. Боронғо заман авторҙарына шул яҡтарҙың эрерәк һыуҙары ғына билдәле булып, вағыраҡтары исемһеҙ аҡҡанлыҡтан, шәжәрәбеҙҙә әйтелгән төбәкте яҡынса -- "шундараҡ, шул тирәлә" тип аңлайыҡ. Был, бәлки, әсәһенең иленә -- Ҡаңғы ырыуы башҡорттарының еренә ҡайтып боҫҡан хандың эҙенә төшмәһендәр өсөн, юрый аймылыштырылғандыр. Ә бөгөнгө тарих фәне ысынлап та аймылыш: Туҡтамыш-хандың был төбәккә ҡасып килеүенең сәбәбе булған 1395 йылғы ҡанлы һуғыштың урынын да, тар-мар ҡылынған хандың аҙ һанлы ярандары менән ҡайһы һыуҙы кисеп сығып ҡайһы тарафҡа олағыуын да бутайҙар. Ҡабул ҡылынған рәсми раҫлау буйынса, Аҡһаҡтимер Туҡтамыш-ханды йәнәһе **Иҙелдең** (Ағиҙелдең түгел!) **һул** ярындағы ***Увек*** (хәҙерге Саратов ҡалаһы һәм **Увек** тимер юл станцияһы янындағы **Увек** тауында булған) ҡалаһында ҡыйраткас... -- уф! тарихсылар йә күрмәгән, йә күрергә теләмәгән ошо буталсыҡты сисәйек: ***Увек (хәҙерге Саратов)*** ҡалаһы Иҙелдең **һул** ярында түгел, ә **уң** ярында урынлашҡан! Шул уҡ тарихсы маһирҙар йәнә лә шул фарсы-ғәрәп сығанаҡтарынан аңлатып яҙыуынса, тар-мар ҡылынған Туҡтамыш-ханыбыҙ, имеш, баяғы "*һул* ярҙағы Увек-Үкек" тән (бында тағы аймылыш -- айырым ике ҡаланы, "Увек"те һәм "Үкек"те, бер үк ҡаланың ике төрлө аталышы итеп берләштерәләр!) Иҙелдең, тимәк, *уң* яғына кисеп сығып, тимәк, *көнбайышҡа* табан олаға ла *Себергә -- Төмән* төбәгенә барып боҫа һәм 1405 йылда шул Себерҙең Төмән төбәгендә үлтерелә..., ләкин *Себер,* әгәр ҙә яңылышмаһам, бөтөнләй киреһенсә, Иҙелдән шөйлә *көнсығыштараҡ* түгелме ни?!. Ә асылда ошолай күҙаллана: ханыбыҙ, Аҡһаҡтимер яуына ҡаршы Ҡафҡазда уңышһыҙ һуғышҡас, Иҙелдең уң яры буйынса һыу үренә бер

туҡтауһыҙ сигенеп (артынан Аҡһаҡтимер яуы эйәреп), шул **уң** ярҙағы баяғы Увек (хәҙерге Саратов) тәңгәлендә Иҙелдең *һул* ярына -- тарихи Башҡортостан тупрағына кисеп сығып, күп аралар үтеп, хәҙерге Өфө эргәһендәге Турбаслы кисеүенән Ағиҙелде ашып, мәркәз ҡалабыҙ *Өфөккә* (ғәрәпсә хәрефле ҡулъяҙманан яңылыш, ундағы "ф"-ны "к" тип уҡып, *"Үкек"* тип яҙалар) урынлаша, булған ғәскәри көстәрен шунда туплап, тап шул ҡалабыҙ эргәһендә Аҡһаҡтимер яуы менән дәһшәтле бәрелешә лә ("Башҡорт батшалары" тигән китабымда яҙғанмын), тамам тар-мар ҡылынып, Ағиҙелдең һул ярына кисеп сығып көнбайышҡа (сығанаҡта "Болғар тарафына") -- әйтелгән Сәрмәсән -- Ҡармасан -- Дим йылғалар арауығына ҡаса (ҡарағыҙ: Йыһат Солтанов. Туҡтамыш-хан, Ялыҡ-бей һәм Аҡһаҡ Тимер. "Шоңҡар" журналының 1998 йыл 3 -- 4-енсе һандары). Урыҫ теленә ауҙарылған боронғо фарсы сығанаҡтары ла (Йыйынтыҡ: Извлечения из персидских сочинений собранные В.Г. Тизенгаузеном и обработанные А.А. Ромаскевичем и С.Л. Волиным. М. -- Л., 1941) тап ошо юҫыҡтан һөйләй:

"Из "Книги побед" Шереф-ад-дина Йезди. Рассказ о выступлении Тимура в набег (илгар) вслед за Токтамыш-ханом. Прибыв к месту переправы через Итиль (Ағиҙел. -- Й.С.) называемому *Туратурской* (Турбаҫлы. -- Й.С.) переправой... он дал сыну Урыс-хана, Койричак-оглану, отряд..., велел ему переправиться через Итиль (Ағиҙел. -- Й.С.)... Войска подобные судьбе, поспешив по пятам неприятелей, дошли до *Укека* (Өфөк -- Өфө. -- Й.С.) и многих из них убили... Большую часть их взяли в плен, а немногие из них бросились на плотах в воду и переправились на ту сторону Итиля. Токтамыш-хан бросил ханство, дом и все, что имел... и, опасаясь за жизнь свою, с несколькими людьми бежал, ушел *в сторону Булара* (Башҡортостан көнбайышына, ә көнсығыш тарафтағы Себерҙең Төмән төбәгенә түгел! -- Й.С.) *в лесистую местность* (ул яҡтар әлегәсә урманлы. -- Й.С.) и спасся от львиных когтей". Һәр хәлдә, һуңғы төбәк үҙебеҙҙең Сәрмәсән, Ҡармасан, Дим йылғалары бассейнына тура килә һәм бының да сәбәбе бар:

"Аноним Искандер. Рассказ о царствовании Токтамыша, сына Туй-ходжи-оглана. Мать его была Катун-Кунчек из племени (насл) ***Конгурат*** (тимәк, үҙебеҙҙең ***Ҡаңғы*** ырыуынан! Шуға ла әсәһенең тыуған яғына -- Асылыкүл тирәһенә һыйынған. -- Й.С.). Он был царем способным, храбрым, с хорошим обращением, красивым. Справедливость и хороший характер его общеизвестны. Однако из-за неблагодарности, которую он проявил по отношению ко двору Тимура, все его хорошие качества и похвальные свойства пропали и погибли... он оказался на границе гибели и исчезновения, лишился крови и дома и, наконец, умер... 807 г. (=10.VII.1404 -- 28.VI.1405) в пределах ***Тулина"***. "Списки устроителя мира" тигән әҫәрендә Ғаффари ҙа шуны уҡ яҙа. Тик фарсынан урыҫсаға ауҙарылышты баҫмаға әҙерләп эшкәртеүсе баяғы икәү, Төйлән тигән йылғабыҙҙың донъяла барлығын белмәгәнлектән, бераҙ баш ватҡандан һуң, был "Тулин"ды, ул, "моғайын, Себерҙәге "Тюмен"дер", тип бутап аңлатҡан да һөҙөмтәһе башҡа тарихсыларҙың да хеҙмәттәрендә нығынған, шул арҡала Себерҙең Төмән төбәгендә хатта "Туҡтамыш-хан ҡәбере" лә моронлаған...

Батша ерҙәрен барып күреү, мәсьәләгә асыҡлыҡ керетеү күп йылдар буйына тынғылыҡ бирмәһә лә, форсаты сыҡмай ине. Ниһайәт, ошо 2009 йылдың сағыу көнлө 18 октябрендә көтҡәнем алдыма килде: башҡорт халҡы, тарихы хаҡына фиҙакәрләнеп йәшәгән уҙаман Әнүәр Мансур улы Йомағолов үҙенең "тимер арба"һында елдертеп алды ла китте; 400 километр юл гиҙеп, күрәһеләребеҙҙе күреп, ишетәһеләребеҙҙе ишетеп, йөрөгән аяҡҡа йүрмә йөкторөп ҡайттыҡ -- һауаплы хәстәре өсөн ҙур рәхмәт уға.

Әлшәй районын иңләп килеп Димгә ҡойған **Төйлән** йылғаһы буйында, Ҡаҙан ауылы тирәһендә гиҙәбеҙ -- ханыбыҙ тап ошонда үлтерелгән. *Төйлән* атамаһы үҙе -- төйәклән, төйәкләнеү урыны тигән һүҙҙер, уны, бәлки, Туҡтамыш-хан үҙе ҡушҡандыр. Тәбиғәт ғәжәп матур, ер-һыу бай, борон заман бигерәк тә хозур булғандыр; тәхетенән яҙған императорыбыҙ ул шомло көндә, моғайын, ошо һоҡланғыс сәхрәгә һунарға сыҡҡандыр, сөнки Ибн-Ғәрәбшаһ яҙа: **"Тохтамыш был убит Едигеем не в правильном сражении, а во время предательского ночного нападения, когда находился один без войска *в загородной местности*".** Тимәк, торған һарайынан ситтә, ошонда. Ә ҡайһы тәңгәлдәрәк булған һарайы?

Шуныһы яҡшы мәғлүм: Ғаязитдин (мосолманлыҡ исеме) Туҡтамыштың Иҙел арьяғындағы баш ҡалаһы *Һарай* аталған, шунан һуң ул Иҙелдең бирьяғында Яйыҡ буйындағы баш ҡалаһын да *Мәсет-Һарай* исемләгән. Былдағы ҡалаһы ла, моғайын, *Һарай* булғандыр. Ҡалғанмы шуның эҙе? Ҡалған, бар, тип әйтә алабыҙ -- ошо уҡ төбәктәге ***Һарай*** ауылы! Ул Ҡаҙан ауылынан Торонтайыш аша көньяҡ-көнбайыштараҡ урынлашҡан, унда юл, имештер, тауҙар араһындағы хәтәр ҡыҫыҡтан -- *Хан тарлауыгынан* үтә. Үҙебеҙ күреп ышандыҡ: Ҡафҡаз тарлауыҡтарын хәтерләткән тәрән аралыҡ икән был, борон заман әҙәм аяғы баҫмаған төбәккә илткәндер. Юлыбыҙҙың тап осонда хәҙерге *Һарай* ауылы, тәрән үҙәнгә ҡыҫылмыш ***Ҡурсаҡ*** исемле һыуҙы буйлап ултырған. Ә тарлауыҡ асылған ерҙә күккә ашҡан ике бейек тау, улар, ике ҡарауылсылай, бөтөн тирәяҡҡа өҫтөнлөк итә -- йәтеш ҡарауыл тауҙары! Арғы башҡа һағауыл ҡуйһаң, дошман-фәлән үтеп керерлек түгел, урынды хан яҡшы белеп һайлаған, тип һөйләнәбеҙ. Йылға исеме лә дөрөҫләй быны: *Ҡурсаҡ* кеше аяғын баҫтыртмай ҡурсау урыны (заповедник) тигән һүҙ... Тарлауыҡтан төшкән юлдың тап ошонда тупаҡланып (тупикланып) өҙөлөүе лә юҡтан түгел...

Тәхетенән тибәрелгән бөйөк шәхесебеҙ бында, әлбиттә, йән аҫырап ҡына ятмаған, ә юғары хакимиәт теҙгенен кире ҡайтарып алыу йәһәтенән Аҡһаҡтимер-йыһангирҙең "ҡылын тартҡан". Шәрәф-әд-дин дә яҙа: *"Тимур обещал Тохтамышу, по окончанию предпринятого похода в Китай, поддержать военной силой его притязания на золотоордынский престол: "После этого похода я, с Божьей помошью, опят покорю улус Джучиев и передам ему".* Тик Аҡһаҡтимер Ҡытайға йүнәлмеш һуғыш сәфәрендә вафат булып, шунан йылдам файҙаланмыш Еҙекәй батыр ҡәрҙәш көндәшенән арыныу араһын күрә: әлеге Төйлән буйында аңдып тороп, зәһәр әжәл уғын атып, ҡан дошманы Ғаязитдин Туҡтамыштың шанлы ғүмерен өҙә...

Әлеге "Үҫәргән Тәүәрихе"ндә Төркиә дәүләтен һәм уның солтандарын башлап ебәреүселәрҙең дә Өфөнән сыҡҡан башҡорттар икәнлеге нәүбәттәге бүлектә шәжәрәләп бирелгән.

1999

Башҡорттар һәм төрөктәр

Боронғоларыбыҙҙы беләбеҙме?

Аяҡ аҫтыбыҙҙа ятҡан, эйелеп кенә алыуҙы көткән ҡатлам-ҡатлам ҡатмарлы, меңәр йыллыҡ фәһемле ғәзиз тарихыбыҙҙы, иҫебеҙ ҙә китмәйенсә, тапап йөрөй бирәбеҙ...

Эйелеп алыусыны иһә күрмәçкә лә ишетмәçкә тырышабыҙ, йә булмаһа, ауыҙ йырып көләбеҙ. Әрһеҙлеген уғата туҡтатмаһа, фәҡир-фоҡор аңыбыҙҙың кимәленән оторо башы сурайып сығып торһа, суҡмар һаплап соңҡаһын сыңлатабыҙ...

Үҙем һымаҡ уҡ ҡәҙимгесә белемле, үҙемә ҡарағанда ла киң күңелле һәм эскерһеҙ йәштәшем бар — гәзит эшендә күҙе сыҡҡан күренекле журналист. Айныҡ сағында әллә ни өн өнәмәүсән шул уҙаман, саҡ ҡына “төшөрөп” алдымы, осратҡаны ғына һайын теле асылып китеп, теңкәгә тейгес бер үк мәрәкәһе менән һиңкәҙетә:

Һе! Башҡорт гегемонсыһы! Беренсе башлап атты өйрәтеүселәр һәм һыбайланып менеүселәр, тәгәрмәсле арба яһап егеүселәр, металл иретеп ҡойоусылар һәм иң боронғо Арҡайым тәгәрмәсҡалаһын ҡороусылар — *башҡорттар булған,* тиһең инде һин, ә?! Ха-ха-ха! Ну шыттыраһың да инде һин, әй!

— Ни эшләйем һуң? Ысынлап та, шулайын-шулай булған бит!

- Шулайын-шулай булғанда ла шаулама! Кеше ышанмаçлыҡ һүҙҙе, дөрөç булһа ла, һөйләмә, тип әйткәне бар ҙа инде Мостай Кәрим ағайым! Гегемонсы!

“Гегемонсы” тамғаһынан шаңҡыбыраҡ, күбеһенсә телемде тешләп уҙам, сөнки “башҡорттоң тарихы 1917 йылғы Бөйөк Октябрь революцияһынан һуң ғына башлана” тип миңрәүләтелгән “зыялы” быуындың вәкиленән артыҡ нимә көтөргә? “Нигилистар” тип кенә үҙенә хас мәргән нарыҡлай торғайны быңдайҙарҙы зирәк аҡыл ағайыбыҙ Лоҡман-Хәким Ғиләжев...

Диңгеҙ арьяғында яткан ҡәрҙәш халыҡ төрөктәрҙә беҙҙеке кеүек “нигилистар” бармылыр, булһа әгәр, нисек аталаларҙыр — асыҡ ҡына белмәйем. Әммә инде үҙебеҙгә килгәндә, донъя-ғаләмебеҙҙең үҙе менән үк бер йәштәге тип әйтерлек сап-сал Урал бөркөтө — иң боронғо халыҡ була тороп та, үҙебеҙҙең үк бик боронғоно бер һаплам еп оҙонлоҡ та күҙ аллай алмауыбыҙҙы таныйыҡ та урта быуаттарҙа ғына үҙ алланып тәпәй баçкан ҡан ҡәрҙәшебеҙ төрөктән был йүнәлештә әллә ни күпте көтөүҙән тыйылайыҡ...

Туғандарса тураһын ғына әйткәндә, төрөктә лә “башҡортса” хәл икән шул: үҙҙәренең Ғоçман дәүләтен беренсе башлап ҡороусыларҙың төбөн-тамырын әлегәсә асыҡлап бөтмәгәндәр, милләт өсөн был бик мөһим башланғыс осор фәҡәт еңелсә имеш-мимеш, риүәйәт һәм легендалар рәүешендә генә һөйләнеп килә икән (М.А.. Гасратян, С.Ф. Орешкова, Ю.А. Петросян. Очерки истории Турции. М., 1983, 18-се бит. Артабан “Очерки” тип алына). Һәм Төркиә тарихын, төрөктәрҙең үҙҙәренән дә бигерәк, сит ил тарихсылары яҙғанлыҡтан, күбеһенсә шуларға таянабыҙ.

742 йылда Көнбайыш Төрки Ҡағанат ҡолатылғас, Уралдан Урта Азияға һәм һуңыраҡ унан — хәҙерге Төркиә биләгән Кесе Азияға тарихсылар тарафынан “төрки-оғуз” тип аталмыш ырыуҙарыбыҙ ағыла. Ә был ырыуҙарҙың тәғәйен исемдәре, шулай уҡ хәҙерге Төркиә еренә (Анталияға) улар ҡайҙан һәм ни сәбәпле килгәндәре лә аҙмы-күпме билдәле: “...Четыре тюркские племени — *печенеги, баджгарды, нукарда и баджна* в результате ожесточенных сражений с огузами, кимаками и карлуками ушли из Приаралья и оказались в Малой Азии. Около 932 — 933 гг. эти племена вторглись в пределы Византии” (Агаджанов С.Г. Очерки истории огузов и туркмен Средней Азии IX — XIII в.в., Ашхабад, 1969). Бындағы “печенег” (йәки “баджна”) һәм “баджгард” (башҡорт) — бик боронғо башҡорт-бәжәнәк ҡәбиләһенең ике сатаҡ-ырыуы ул, ә “нукарда” (нуғай-урҙа) — уғата боронғораҡкы Үçәргән-Ҡаңғы ҡәбиләһенең сатаҡ-ырыуҙары булып, йыйыныһы саф башҡорттар икәнлеге һәм уларҙың Башҡортостан көньяғынан (“Арал яғынан”) ҡубыныуҙары ап-асыҡ. Шулар араһынан тарихсылар яҙған Ҡыныҡы (Ҡаңғы) ҡәбиләһенең (башҡорт ҡаңғылары!) бер сатағы булған Һалъйыуыт

ырыуы (башҡорт һалъйыуыттары!) бер осорҙа ифрат та ҡеүәтләнеп, XI быуаттың икенсе яртыһында Урта Азиянан алып Урта диңгеҙгәсә йәйрәп ятмыш “Бөйөк Һалъйыуыт” империяһын төҙөй.

XI — XII быуаттарҙа улар ҡатарына алыҫ төньяҡ-көнбайыштан (Уралдан!) тағы ла бәжәнәк (Башҡорт!), уз (Үҫәргән!), ҡоман (Ҡыпсаҡ!) ҡәбиләләре эркелә (бөтәһе лә башҡорт бабаларыбыҙ!) һәм хәҙерге Төркиә дәүләте биләгән ер ҡәүемдәренең дә телдәренең баяғы башҡорт ырыуҙары телдәренең тәьҫирендә төркиләшеүенә — хәҙерге төрки телдәренең “оғуз төркөмө” хасил булыуына килтерә (“Очерки”, 4 — 5-се биттәр). Беренсе бөйөк тюрколог Мәхмүт Ҡашғариҙың 1072 — 1078 йылдарҙа яҙып тамамланған төрки телдәре һүҙлегендә: “иң еңел (йәғни ҡатнаш. — *Й.С.*) тел — оғуздар теле, иң дөрөҫ һәм иң шәп тел — тухси (йәғни “Туҡсаба” оранлы Үҫәргән. — *Й.С.*) теле һәм яғма (?) теле, — тип яҙа — уйғурҙар иленә тиклем үк һуҙылған арауыҡтағы Или, Иртыш, Йомар (Һамар. — *Й.С.*), Иҙел йылғалары буйындағы (боронғо Башҡортостандағы! — *Й.С.*) халыҡтарҙың да телдәре — дөрөҫ төрки”. Ошо “дөрөҫ төрки” теллә һөйләшеүсе бабаларыбыҙ Кесе Азияла — хәҙерге төрөк, ә Урта Азияла төрөкмән телдәренең милли тел булып ҡалыплашыуына ла үҙ өлөшөн индерә (төрөкмән телендәге “ҫ”, “ҙ” өндәре — тап шул “башҡортлоҡ”тоң күрһәткестәре).

1092 йылда “Бөйөк Һалъйыуыт” империяһы емерелгәс, урынына шул уҡ һалъйыуыттар етәкселегендәге эреле-ваҡлы солтанаттар барлыҡҡа килеп, XII быуатта улар яңынан шул уҡ һалъйыуыттарҙың ҡеүәтле һәм берәгәйле Рум солтанатына әүерелә; XIII быуатта уның ҡап-яртыһы, татар-монголдар ҡыҫымы аҫтында ҡалып, үҙ аллылығын юғалта. Ә илдең икенсе яртыһында, Көнбайыш Анталыла, төрки бабаларыбыҙҙың үҙҙәренең ырыу башлығы бейҙән башҡа бер кемгә лә буйһонмаған егермеләп бейлеге хасил булып, Ирандағы татар-монголдарҙың һәм Мысырҙағы мәмлүктәрҙең ике яҡлап тирмән ташылай ҡаты ҡыҫымы араһында ҡыйғыр ҡылыс менән генә көн күреүсе “мәңгелек яугирҙәр” хәлендә йәшәй башлай. Тап бына ошо яугир бейлектәр араһынан ҡалҡып сыҡҡан һәм Ғоҫман дәүләтенең (хәҙерге Төркиәнең) беренсе нигеҙ ташын һалған һәм артабан дауам иттерткән ***Иртоғрил бәһлеүәндең*** асылда кемлеген, ҡайҙан һәм ҡайһы ырыуҙан килеп сыҡҡанлығын әлегәсә бер кем дә төплө генә белмәгәнлектән, шуны башҡорт хәтеренә таянып билдәләү бурысы тора (гәрсә авторға, баяғыса, “башҡорт гегемонсыһы” тигән яманат янаһа ла!). Сөнки тарих фәненең үҫеше үҙе быға этәрә бит: үҙебеҙгә билдәле булған мәғлүмәтте, бер ниндәй ҙә ҡаршылыҡтарға ҡарамай, артабанғы тикшеренеүселәр алдына һалыу фарыз. Ә үҙ тарихын һанламаған — үҙен дә абайламаған; үҙен абайламағанды эттәр ҙә абалаған. Ошонаң тап яҡшы киреһе булған, үҙ халҡының тарих ҡынаһын, юҡтан да бар ҡылып, байытырға тырышҡан егәрлелектең ташҡа баҫылған миҫалы алдыбыҙҙа (“Известия” гәзитенең 2001 йылғы 8 июнь һанында уның Париждағы хәбәрсеһе Эльмар Гусейнов мәҡәләһенән):

“Татары вернулись! Тысячелетие Казани отмечают в Париже.

Генеральный директор Юнеско господин Мацура вышел из своего кабинета... татарином...

Татары вновь вернулись в Париж. Искрометная конница с берегов Волги, вступившая во французскую столицу весной 1814 года, оставила тогда неизгладимое впечатление у местного населения. И вот — снова дни Татарстана в самом сердце Францииии...

На вопрос корреспондента “Известий” о том, как он себя здесь чувствует, Минтемир Шаймиев ответил с юмором:

— Нам не привыкать брать столицы...”

Бирһен хоҙай: ташҡа баҫылып сыҡҡас, ысынлап та шулайҙыр. Әммә бында “башҡорт гегемонсылығы”н ҡыйратыусы баяғы “нигилистар”ыбыҙға салҡая биреп хахылдарлыҡ “хикмәт” бар: тимәк, Наполеон илбаҫарҙарынан “Рәсәй-әсәй”ҙе ҡурсаламаҡҡа үҙ хәленән егерме һигеҙ атлы полкын төҙөгән һәм Мәскәү тупһаһы Бородинонан — Парижғаса һуғышып барып еткән, Францияның шул баш ҡалаһына беренселәр сафында бәреп кергән, егетлектәре менән французлдарҙы ла, башҡаларҙы ла таң ҡалдырған башҡорт бабаларыбыҙ ҙа һис бер ҡасан булмаған... йәки... татар булған (әстәғәфирулла тәүбә”)...

Дөрөҫ һүҙҙе, кеше ышанмағанда ла, һөйләй барыу хәйерле.

“Кто владеет прошлым — владеет будущим”, — бөйөк аҡыл эйәһе Никколо Макиавелли (Италия) биргән аҫыл һабаҡ был...

Төркиә тупрағы — борон-борондан төркиҙәрҙең төйәге

Мифик “атан-аҡ-абар”ға (ата-аҡ-бүрегә) эйәреүсе Үҫәргән-Ҡаңғы ҡәбиләһенең төньяҡ-көнсығыш сатаһын шул исемдең бер аҙ ҡыҫҡартылышында “данаҡ-абар//танаҡ-абар” тип атағандар; урта быуаттарҙа иһә ошо исем шул уҡ Үҫәргән-Ҡаңғынан саталанмыш яңы (бала) ырыуға бирелеп, әлеге көндәге “Түңгәүер” булып йөрөй... Бик боронғо (хәҙерге “Түңгәүер”гә тиклемге) замандарҙа Уралдан алып Ҡафҡазғаса, артабан Көнсығыш Европа үтәләй Италия һәм Грецияғаса барып еткән был Үҫәргән тармағы абарҙар (йәки хәҙерге Ҡафҡаздағы аварҙар). Әйткәндәй, Үҫәргән башҡорттарының мифик Әсә-Бүрегә эйәреүсе икенсе яртыһы, йәғни б.э. тиклем VII — V быуаттарҙа тап ошо Тәүтөйәгебеҙҙә (Иҙел — Урал далаларында) гөрләтеп донъя көткән һәм тарихсыларға “савромат” исеме менән билдәле булған, ә аҙаҡ килеп шул исемдең ҡыҫҡартып әйтелешендә “сармат” тип аталып, б.э. тиклем III быуат — б.э. IV быуаттарында Уралыбыҙ артындағы (эйе, “аръяғы”ндағы түгел, сөнки һыуҙың ғына — аръяғы, ә тауҙың арты була!) Тубылғы (Тобол) йылғаһынан алып Көнбайыштағы Дунай йылғаһынаса йәйрәп йәшәгән данлы бабаларыбыҙҙың да “Әсә-бүре-аба-т”тар икәнлеген (һуңғы “т” — боронғо күплек ялғауы), йәғни ҡыҫҡартып-шымартып әйтелештәге “сәбүрабат”тар — “савромат”тар булғанлығын тикшереп ҡараусы ла, телгә алыусы ла юҡ. Ошо уҡ Үҫәргән ҡәбиләһе “савромат”тың баяғы изге ата-бүре “сары-ата-аба”ға (һоро-ата-апаға) эйәреүсе бер сатағы сарабата//сарамата (сармат) — жарамата//юрматы тип атала башлай — хәҙерге башҡорт халҡының Юрматы ырыуы кешеләре...

Үҫәргән тармағы данаҡ-абарҙарҙың заманында бөйөк Көн-Өфө (Ҡәнифә) юлы буйлап алыҫ көньяҡ-көнбайышҡа китмеш бөйөк сәфәр эҙҙәрен улар йәшәп уҙа барған һәм уларҙың “танаҡ//данаҡ” исеме ҡушылған ер-һыу атамаларында күрәбеҙ: Көньяҡ Уралдағы танаҡ-улаҡ (Таналыҡ) йылғаһы (борон ул Йайыҡ баштарының береһе һаналған) — Дон (данаҡ) йылғаһы — Днепр (данаҡ-абар) йылғаһы — Дунай (данай) йылғаһы — Балҡан ярымутрауы (был исемде лә үҙебеҙҙең Тәүтөйәк тауы Балҡандан алып барып биргәндәр)...

Ғөмәрҙең (Гомерҙың) "Илиада" эпосындағы шул данайҙар (йәғни ата-бүрегә эйәреүсе үҫәргәндәр) б.э. тиклем XIII быуатта уҡ үҙебеҙҙең ҡаңғылар йәки боронғо хөрмәтләп әйтелештәге "ҡан-аҡай"ҙар ("Илиада"лағы аҡайҙар — ахейҙар) менән тығыҙ берлектә ошо Кесе Азиялағы (хәҙерге Төркиәләге) атаҡлы Троя ҡалаһын яулап алыуҙа әүҙем ҡатнаша. Был яулауҙы ойоштороусы аҡайҙар ("Илиада"лағы ахейҙар) иһә, әле генә әйтә биреп ҡуйыуыбыҙса, шул уҡ Үҫәргәндең Әсә-Бүрегә эйәреүсе сатаһы ул, йәғни баяғы аҡан-аҡай — Ҡанаҡай//Ҡаңғы ырыуы тап үҙе булып тора; Ғөмәр әҫәрендә иһә был этнонимдың ҡыҫҡаҡланмыш икенсе яртыһы "аҡай" (ахей) телгә алынған. Ҡаңғыларҙың (аҡайҙарҙың) ҡасандыр шунда йәшәгәнлеген шундағы Аҡай (Ағай, Эгей) диңгеҙ исеме лә шаһитлай. Хәҙерге Төркиә тупрағында б.э. тиклем икенсе мең йыллыҡта — башҡорт ҡатайҙарының (хеттарҙың йәки хаттарҙың), ә беренсе мең йыллыҡта башҡорт һарттарының дәүләттәре лә күкрәп сәскә атҡанлығын яҙғайныҡ...

1453 йылда 2-се Мәхмүт солтан етәкселегендәге төрөк бабалары христиандарҙың шундағы шанлы ҡәлғәһе булған Константинополде (Истанбулды) һуғышып алғандан һуң, бөтә Көнбайыш христиандар донъяһы уларға ҡаршы хөсөтләнеп, "тәре һуғышы" әҙерләй башлағас, Көнбайыш Европа илдәрендә баяғы 2-се Мәхмүт солтандың Рим папаһы Николай 5-сегә яҙған хаты тарала; ошо яҙмаһында төрөк солтаны, "төрөктәр кеүек үк, шул уҡ Троя халҡының вариҫтары булған итальяндарҙың" уға, йәғни үҙҙәренең тарихи ҡан ҡәрҙәштәре булған төрөк солтанына, дошманлыҡ ҡылыуҙарына аптырауын белдергән; ә бер нисә тиҫтә йыл алдараҡ шул уҡ итальяндар кардиналы Исидор ҙа төрөктәрҙең, итальяндар кеүек үк, *тевкр* (йәғни Троя халҡы) вариҫтары икәнлеген раҫлап сыҡҡан булған (С. Рансимен. Падение Константинополя в 1453 году. М., 1983, 149-сы бит), ә Рим ҡалаһын нигеҙләүсе башҡорт бабаларыбыҙ тураһында "Хәтерхитаб"ымда ("Ағиҙел"дә "Башҡорт хәтере" тип баҫылды) ентеклерәк яҙғайным. Быларҙан иһә Ғөмәр "Илиада"һындағы боронғо Троя ҡалаһының халҡы ла шул үҙебеҙҙең аҫаба башҡорттар булғанлығы аңлашыла, сөнки ул Троя халҡының гректа үҙҙәренсә боҙоборак теркәп ҡалдырған атамаһы *"тевкр"* — үҙебеҙҙең "төп-ҡор" булып, был иһә киң билдәле "баш-ҡор" (күплек һанда "башҡорт") этнонимының варианты икәнлеге ап-асыҡ (төрөктәрҙең дә башҡорттарға кендеге береш, тимәк)...

Төрөк солтандары

Бөтә ҡан ҡәрҙәш халыҡтарҙың дөйөм атамаһы "төрөк" йәки "тороҡ" (боронғо күплек һанындағы әйтелеше "төркөт") — борон заман муйынына *тороҡ* (фаллос) ишараты баулап аҫҡан башҡорт бабаларҙың ләҡәбе икәнлеген яҡшы иҫләһәк, бөгөнгө Төркиәләге төрөктәрҙең, һис юғында уларҙың солтандар династияһының килеп сығышын башҡорт тәүәрихтәренән юллау яҙыҡ түгелдер.

Риүәйәттәр буйынса, — ти баяғы "Очерки" китабының авторҙары, — *ҡайа* ҡәбиләһенән бүленеп киткән 400 — 500 тирмәле ҙур булмаған күскенселәр төркөмөнөң юлбашсыһы Иртоғрил шундағы Һалъйыуыт иленең солтаны Ғәләүитдин кей-ҡеүәт 1-сенән (1219 — 1236) Сөғүт төбәгендә *ужымлыҡ* (туҡланып йәшәрлек. — *Й.С.*) ер ҡабул итеп ала, шуның хаҡына ул һалъйыуыттар державаһының төньяҡ-көнбайыш сиктәрен һаҡларға тейеш була. Башҡа ужымлыҡтар кеүек үк, был ер уның тоҡомдарына мираҫ итеп ҡалдырыла. Иртоғрилдан һуң уның улы Ғоҫман (1258 — 1324) бей була, артабан был бейлек һәм династия уның исеме менән Ғоҫмандар тип йөрөтөлә" (18-се бит).

Иң тәүҙә геройҙың исем-ләҡәбенә иғтибар ҡылайыҡ: ир-тоғро-ил ("илгә тоғро ир" тигән һүҙ). Ә "Ир" — башҡорттоң иң күренекле юлбашсыларына ғына бирелмеш данлы ләҡәп ул:

Салауат батыр — *Ир* ине,
Менгән аты кир ине.
Дошман менән алышҡанда
Алдын бирмәҫ *Ир* ине.

"Күсәк бей" эпосынан:

Ир-Бабсаҡ Йәмиләне алып ҡайтҡан...

Боронғо Бүре-Өфө (Парфия) дәүләтенең нигеҙендә Иран (йәғни "Ир иле") тигән империя ҡороусы башҡорт батырының да данлы ләҡәбе "Ир" булған...

Иртоғрилға Византия сигендәге был ужымлыҡ ерҙең ни сәбәпле бирелеүен төрөк тарихсыһы, Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың шәкерте Ниһал Атсыз мәҡәләһендә ("Ағиҙел" — 2000/8, 40 — 41-се биттәр) күрәбеҙ: "Иртоғрил бей етәкселегендәге *ҡайылар* ҡәбиләһе, Анталияның көнбайышына табан хәрәкәт иткән саҡта, бер үҙәндә һуғышҡан ике ғәскәргә тап булған. Иртоғрил бей үҙенең кескәй генә ҡеүәте менән еңелеп барыусыларға ярҙам иткәс, татарҙар еңелгән", — тип аңлатыла ине был ваҡиға тарих китаптарында... Һуғыштың һалъйыуыттар менән хорезмдар, Һалъйыуыт солтаны Ғәләүитдин Кей-ҡеүәт менән Хорезмшаһ Йәләлитдин Мәңгебирҙе араһында Яҫҫысимәндә булған һуғыш булыуына тәүгеләрҙән булып Зәки Вәлиди иғтибар иткән. Һуғыш 1230 йылда Эрдзинжан тирәһендәге Яҫҫысимән тигән ерҙә булған. Был хаҡта Зәки Вәлиди Туған тарихсы Нәсәвиҙең яҙмаларынан мәғлүмәт тапҡан. Нәсәви һуғышта еңелеп барған Ғәләүитдин Кей-ҡеүәт, көнсығыштан көтөлмәгән ярҙам килеүе арҡаһында, еңеүгә өлгәшеүе тураһында яҙа".

Тимәк, уҙаманыбыҙ Иртоғрил бәһлеүән (шәжәрәбеҙҙә ул тап шулай ләҡәпләнә) үҙенең яңы солтанатын ҡорасаҡ һәм артабан ул Ғоҫман империяһы — Төркиә тип аталасаҡ тупраҡҡа 1230 йылда килеп аяҡ баҫҡан һәм үҙенең һалъйыуыт-башҡорт ҡан ҡәрҙәштәренә хәл иткес һуғышта батырҙарса ярҙам күрһәткән. Йылына ҡарағанда, был аҫыл зат (Үҫәргән батшалар шәжәрәһе вәкиле) атаҡлы Мүйтән бейебеҙ менән бер үк заманда йәшәгән һәм, бәлки, ул да шул уҡ бабабыҙ Туҡсаба улы — Мүйтән бейҙең бер туғаны булғандыр.

Ғоҫман империяһының нигеҙ ташын һалыусыларҙы "Очерки" авторҙары һ.б. "ҡайа" йәки "ҡайы" ырыуынан тип атаһа ла, Мәхмүт Ҡашғариҙа был этноним аҙаҡҡы һүҙынҡыһыҙ яҙыла: "Румға (Византияға. — *Й.С.*) башҡаларҙан яҡыныраҡ йәшәүсе ҡәбилә — бәжәнәк, артабан китә ҡыпсаҡ, оғуз, йемек (ҡумыҡ. — *Й.С.*), башҡорт, басмыл, *ҡай...*"

Күренеүенсә, Византия (хәҙерге Төркиә) тарафынан тороп һанағанда был "ҡай"ҙар Арал — Каспий буйҙарындағы башҡорттарҙан да арыраҡ — нәҡ Уралдың үҙендә — Үҫәргәндәр тәүтөйәгендә йәшәгәндәр булып сыға.

Әгәр этимологияһын (һүҙҙәр килеп сығышын) барлаһаҡ, баяғы-шул "ҡай"ҙан — ҡай-аҡа//ҡайғы (бүре) — ҡайаҡ//кейек (йыртҡыс януар) һүҙенең, ә "ҡай-ата" (ата бүре) тигәндән ҡайат//койот (бүре) килеп сығышын белгәнлектән, мифик әсә (инә) бүрегә

эйәреүсе үçәргән-нуғайҙарҙың (“нуғай” — “бүре-эткә эйәреүсе” тигән һүҙ) дини ләҡәбенә лә иғтибар итһәк, килеп сыға: ана-ҡай (инә бүре) — наҡай (нуғай — инә бүрегә эйәреүсе үçәргәндәр) — *ҡай* (бүре). Әлхасил, Төркиә солтандар династияһын башлап ебәреүсе Иртоғрил бәһлеүән үҙебеҙҙең Үçәргән ҡәбиләһенең батшалар шәжәрәһе вәкиле булған һәм шул Кесе Азияға Күк Уралдың үҙенән барып сыҡҡан... Был хаҡта Ғоçман империяһы тарихсылары әлегәсә шәйләй алмаһалар ҙа, башҡорт халҡының быуындан быуынға яҙыла барған һәм әлеге көндә Рәсәй Федерацияһы Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы китапханаһында ИБ — 2279 шифры менән һаҡланған “Үçәргән тәүәрихе”ндә ул шаҡтай аныҡ сағыла.

Билдәле булыуынса, боронғо Өфө көләре (ханы) Мүйтән бабабыҙ етәкселегендә татар-монголдарға ҡаршы баш күтәргән һәм күп йылдарса (1224 — 1257) ҡаты һуғыштар алып барған Башҡортостанды 1236 — 37 йылдарҙа бөйөк Сыңғыҙ хан улдарының берләштерелгән армиялары буйҙан-буй айҡап уҙа һәм баш ҡалабыҙ Өфөнө, башҡа ҡалаларыбыҙҙы емерә, Мүйтәнде һәм уның балаларын, туғандарын, үлем язаһынан ҡурсаланып, Каспий диңгеҙе аръяғына (хәҙерге Иран һәм Төркиә ерҙәренә) ҡасырға мәжбүр ҡыла. Ана шулай сит илдәргә олаҡҡанға күрәлерме инде, әллә боронғо шәжәрәлә һәр быуындың иң күренекле бер генә вәкилен теркәү ҡануны буйынсамы, был заттарҙың (Мүйтәндән һәм уның Башҡортостанда ҡалмыш улы Шаҡмалдан башҡа) исемдәре Үçәргән шәжәрәһенә кермәй ҡалған, әммә Иртоғрил исемен тап шул “Үçәргән тәүәрихе”нең 60-сы битендә Мүйтән бей ейәне Йор-уҡ (Heруҡ) исеме тәңгәлендәге тарихи аңлатма рәүешендә күрәбеҙ: “Жеруҡ, *Тогрил хан* заманында бәк булып, хөкүмәт итер ине”. Тимәк, шәжәрәне төҙөүселәр бәһлеүәнебеҙ Иртоғрилдың алыçтағы Анталияла бөйөк хан-солтан дәрәжәһенә ирешеүен, ә Мүйтән ейәне Йор-уҡ иһә уның шанлы бейҙәренең береһе булғанлығын яҡшы белгәндәр. Ана шул хан-солтанлығын иçәпкә алыптыр инде, “Үçәргән тәүәрихе”ндә Иртоғрил нәçелдәренең бөйөк төрөк солтандары рәүешендәге үҙ аллы-айырым шәжәрәһен төҙөгәндәр. Был ҡомартҡы хәҙерге ғилми белешмәгә лә (К.Э. Босворт. Мусульманские династии. Справочник по хронологии и генеологии. М., 1971, 185 — 186-сы биттәр) шаҡтай тап килеү генә түгел, хатта уны бер килке мәғлүмәттәр менән байытыуын да иçәпкә алып, әйләнешкә индереп ебәрәбеҙ (йәйәләр эсендә — “тәүәрих”тәге бит һандары һәм ошо мәҡәлә авторының аңлатмалары).

Шәжәрә

1. Бәһлеүән Тоғрил (Ир-Тоғрил. — 47).

2. Хан бин Тоғрил Ғоçман Ғази.

3. Солтан Ур хан Ғази бин Ғоçман (49).

(Күренеүенсә, был уның исеме түгел, ә ләҡәбе: Ур йәки Уртүбә ҡалаһының ханы, тигән һүҙ. Был Уртүбә — хәҙерге Орск ҡалаһы урынындағы боронғо ҡалабыҙ, 1391 йылда уны АҡһаҡТимер емергән. Атаһы Ғоçман Ғази вафатына тиклем был зат Башҡортостандың Ур ханы булып торғандыр. “Ур хан тарих 724-селә” (һижрә менән) тигән аңлатмаһы бар).

4. Солтан Морат ***Өфө*** бин Ур хан Ғази.

(Атаһы Ур хандың, аҙаҡ Ғоçман дәүләте солтанының, вафатына тиклем ул Башҡортостандың ***Өфө*** ханы булып торған).

5. Йылдырым Баязид.

6. Тимерлән хан. Был (Тимерлән) солтан Мәхмүт заманында, тыумыштан боҙоҡлоҡ, енәйәт ҡылыусы булып, көтөлмәгән тарафтан һөжүм итеп, солтан эстән уларҙы кире (үҙҙәренең) еренә һөрҙө; күп үлем килтереүсе аҡһар булған, тиҙәр һәм илбаҫарҙар яулап алынды һәм ҡара афатлыҡтары харамға сыҡты, тарих 823-тә вафат итте... (51).

7. Муса бәк.

8. Солтан Мәхмүт бин Баязид, 37 йыл тарихдә торурының вафаты булды рабиғәүәлдә (Ай йылының өсөнсө айында).

9. Ир-солтан Мөхәмәдулла бин Баязид.

10. Хан-солтан Моратулла.

11. Солтан Мөхәммәдфатих Исламбура, 894 вафат, 33 йыл тәхетдә булди (53).

12. Солтан Баязид.

13. Солтан Сәлим Алтази. Солтан Сәлим шам заманында 9 йыл шам (тәхет эйәһе) булды, 937 йыл тарихдә вафат.

14. Солтан Морат бин Алтази 2-чи. Солтан Морат 942 тарихдә вөжид (барлыҡҡа) килеб, 992 тәхетдә жалусиәтидә (ултырыусы рәүешендә) 21 йыл шам булды, тарихның ун бердә ваф бузар (интегеп үлде. — 55).

15. Солтан Мөхәммәд бин Алтази.

16. Солтан Мостафа бин Мөхәммәд. 982 (?). Солтан Мостафаның солтан тарихы мәғлүм дәғел, туҡыз йыл шам булды 34 йыл ғүмерендә (57).

17. Солтан Амән.

18. Солтан бин Мөхәммәд (59).

19. Солтан Ибраһим.

20. Солтан Мөхәммәд.

21. Солтан Сиғиә бин Ибраһим.

22. Солтан Амән.

23. Солтан Мостафа. Солтан Мостафа мең йөз ун тулғанда тәхет йолош итди (йолҡоп алды), 1124-дә вафат, урынын ҡәрдәше йолош итди, димешләр (61).

24. Солтан Аҡхан Алтази. Солтан Аҡхан 1129-дә туғыбди (тыуҙы), 1173-дә вафат.

25. Солтан Мәхмүдиә бин Мостафа. Солтан Мәхмүдиә 1173 тарихдә тәхет кичди, 27 йыл солтанәтдә булди, 1178 тарихдә вафат. Бу солтан заманиндә йәғафу (ғәфү иткеһеҙ) кафир илләрүн әсир идеб кәнд мәккү идеб (ҡалаларын хәйләләп) алди... 1178-дә. 1181-дә вафат, солтанәтдә әжғиә...

26. Солтан Ғоҫман бин Мостафа. Солтан Ғоҫман 1178-дә (шам), 1181-дә вафат, солтанәтдә өч йыл.

27. Солтан Мостафа бин Амән. Бу солтан 1181-дә тәхет кичди, 1197 вафат итди.

28. Солтан Дәмин бин Амән. 1213 тарихдә вафат.

29. Солтан Ғәбделхәмид бин Амән. 1197-дә тәхет кичди.

30. Солтан Сәлим бин Ғәбделхәмид (63).

31. Солтан Мостафа бин Ғәбделхәмид.

32. Солтан Мәхмүд бин Ғәбделхәмид.

33. Солтан Ғәбделмәжит.

34. Солтан Ғәбделхәмит.

(Күренеүенсә, шәжәрә теҙмәһе 2-се Ғәбделхәмит тәхеткә ултырмыш осорға, йәғни һижрә менән — 1293, миләди менән 1876 йылғаса еткерелгән, артабанғыһын К.Э. Босворт белешмәһенән барларға була).

29.06.2001.

ҺУНАРСЫ АУЫЛЫН НИГЕҘЛӘҮСЕЛӘР ШӘЖӘРӘҺЕ

(Хәҙерге Ырымбур өлкәһе, Һарыҡташ районы, Жултый ауыл советы)

Мәғлүмәттәр XX быуат баштарында Бәкәтәр-Йәнсура (хәҙерге Ырымбур өлкәһе, Ҡыуандыҡ районы) ҡасабаһының аҡһаҡалы Рәхмәтуллин Мөҡим Бәҙретдин улы төҙөп ҡалдырған "Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе"нән, Рәсәй дәүләт администрацияһы төрлө йылдарҙа үткәргән "ревизские сказки"ҙарҙан һәм 1956, 1960 йылдарҙа Мәскүҙә нәшер ителгән "Материалы по истории Башкирской АССР" исемле документтар тупланмаларының IV һәм V томдарынан, шулай уҡ Сәнкем-Биктимер ауылы мәсетенең метрика кенәгәләренән алынды. Хәҙерге яҙмала ҡабул ителгән "бей" һүҙе шәжәрәләгесә "би" (мәҫәлән, Мөйтән-би) яҙылышында ҡалдырылды; волость – ылыҫ, губерния – гөбөрнә тип бирелә. Текстағы автор өҫтәлмәләре дүрткел йәйәләр эсенә һалынды.

Билдәле булыуынса, Обь – Иртыш үҙәненән алып Ҡама – Иҙел үҙәненәсә, Төньяҡ Боҙло океандан (Ҡар диңгеҙенән – Карское море) Каспий (Үһәргән – Гурган) диңгеҙенәсә йәйрәп ятҡан ерҙәр бик боронғо замандарҙан уҡ башҡорт ырыуҙарының тәүтөйәге булған, ошо тәүтөйәктән бабалар мең-мең йылдар дауамында мифик Бүре һәм Болан (Һыйыр) юлбашсылығында изге Көн-Өфө (Ҡәнифә) һәм Ҡуңыр-Буға юлдары буйлап Евразия ҡитғаһының дүрт тарафына таралған, хатта Америка, Африка ҡитғаларына барып еткән.

Изге Көн-Өфө юлындағы бабалар, әле әйткәнсә, үҙҙәренең юлбашсы-башбабаһы (дәдәме – тотемы) итеп бүре-этте (бүретте – бурятты) һанаған; ырым буйынса дәдәмдең ысын исем-атын әйтеү ҡәтғи тыйылғанлыҡтан, уны "аҙаштырып" Әби-ән-әс (бында Әби-ән -- Әбиҙән йәғни әпи-апабыҙ Көн-Ҡояштан тыуған, әс -- әсә мәғәнәһендә) -- Әби-Нәс тип йөрөткәндәр; ябай ғына әйткәндә, Көн-Әбиҙән (Ҡояш-Апанан) тыуған Әсә (Әсә-Бүре) була инде. Бара-тора "Нәс" тигәнебеҙ "нәсәб" (нәс-әби), "нос" (бүреттең еҫ тойғон осло танауы) төшөнсәләрен биргән. "Нос" тигәнебеҙ тағы "с" өнө "һ"-лашыу һөҙөмтәһендә "нос"тан ноһ – нох – нюх (урыҫса "еҫ тойоу") – еҫкәп белеүсе тойғон-эт мәғәнәһендәге һүҙҙәребеҙ хасил булып, ахырҙа был дәдәмебеҙ донъялағы төп диндәрҙең Нух – Ной пәйғәмбәренә әүерелә. Ошоларғы бәйле, бүрет (бурят) дәдәмле ырыу-ҡәбиләләр ҡәүемен, дөйөмләштереп, Нухай – Нуғай (йәғни бүре-эткә табыныусы) тип атағандар; был атама Сыңғыҙ-хан бабабыҙ заманында уға буйһынған һәм ҡулға бүре-эт эйәләштереүҙе башҡорттарҙан күреп белгән монгол ҡәбиләһенең теленә "эт" мәғәнәһендә "нухай – нуғай" рәүешле барып кергән. (Ентеклерәк белергә теләгән уҡыусыға китап бар: Йыһат Солтанов. Башҡорт батшалары. Сыңғыҙ-хандан алып Урыҫ дәүләтенә ҡушылғанғаса. Өфө, 2007).

Биреләсәк шәжәрәбеҙ кешеләре төйкләнгән тупраҡтың да тарихын ҡыҫҡаса белеү хәйерле. Урта быуаттар Башҡортостан хакимы Сәсле Дәрүиш-биҙән һуң дәүләтебеҙ идаралығы һәм биләмәләре уның ике ейәненә бүленеп, өлкәне Борнаҡ – Себер өлкәһендә (Себер ханлығының башланыуы), кесеһе Ядкәр (1533 йылда тыуған) Өфө

өлкәһендә (Нуғай Урҙаһы) идара ҡыла. Бернисә йыл буйы килгән ҡоролоҡ-ҡытлыҡ арҡаһында ил ҡаҡшап, өҫтәүенә төньяҡлап урыҫ баҫҡынсылығы көсәйгәс, халыҡтың бер өлөшө 1546 йылда Ядкәр уҙаман етәкселегендә илдән ҡубынып, ул саҡтағы тыныс һәм йылы һаналған Ҡубан яҡтарына күсеп китә лә шундағы нуғай халҡына әүерелә. Тәүтөйәкте ташлап китергә риза булмаған башҡорттар (ҡаҙаҡтар уларҙы Себер ханлығындағы әстәк – остяк ҡәүеменең исеме менән истәк – иштәк тип атай) баяғы ҡанҡәрҙәштәренән бушанып ҡалған ерҙәр иҫәбенә биләмәләрен киңәйтеп, Үҫәргән батшалар шәжәрәһенең аҫыл заты Тәтегәс-би (1565 йылда вафат, Юрматы ырыуының бийе) етәкселегендәге берләшмә булараҡ йәшәй, ләкин дөйөм Башҡортостан бернисә өлөшкә бүленгән хәлдә тарҡаулыҡ осорон кисерә. Шул шарттарҙа 1557 йылда башҡорттарҙың дүрт ырыу биҙәре – Үҫәргәндән – Тәтегәс һәм уның улы Бикбау, Бөрйәндән – Иҫке (Иҫәкәй), Ҡыпсаҡтан Мышы улы Ҡараҡужаҡ, Тамъяндан Шәғәли Шаҡман уҙамандар үҙҙәренең ихтияры буйынса Урыҫ дәүләтенә ҡушылыуҙарын иғлан ҡыла һәм шул дәүләт администрацияһынан ергә аҫабалыҡ хоҡуҡтарын һәм биләмә-ер сиктәрен билдәләгән рәсми танытма-грамота ала. Шуға ярашлы Үҫәргән, Ҡыпсаҡ, Тамъян, Бөрйән ырыуҙарыныҡы итеп танылған ер-биләмәнең сиктәре түбәндәгесә (текст бөгөнгө телгә яраштырылды):

«961 йыл ғәкрәбнең 2-че көнендә рус жәмәғәте Ҡазан шәһәрен басып алдылар. Шундан суң, башҡордлар дүрт ыруғындан вәкилләр: Үсәргәндән — Бикбау кенәз, Ҡыпчаҡдан — Мәшәүле Ҡаракөчөк кенәз, Бержәндән — Иске бей кенәз (икенче исеме Буранчы бей), Тамъяндан — Шығай Шаҡман кенәз рус кенәзенең чаҡырыуы буйынча Ҡазанға бардылар. Олуғ кенәз царь Васильевичҡа, тәбиғә вә рәғиәлек (буйһонмаҡҡа) ғарыз (яҙма рәүешле аңлатыу) итүб, ҡабул итеп, үз химаясына алғандан суң, ерләрен һәм сыуларын тигезләб үлчәб бирүб, ғарыз итдиләр. Былар һәр ҡайусына тарханлыҡ чины биреб, башҡордларға ерләрен ғәделләп тигезләб биреү, тигезләб бүлеү ҡайуның өчөн төлкө вә сусар ясағы түләделәр. Еремез түбәндәгечә бүленеб, Олуғ кенәзнең санатлары тәсдик итделәр. Әүәл Жайыҡ буйлап Үрге Жики Бузчык, Ҡызыл, Саҡмар сыуы, Эстәрле, Исәйле Үскәлек, Ике Һүрән — буларның башындан аяғынача, Саялмыш башындан Кер ауылының, Ташкичеүдән Ману йылғасындан Ялғыз өйәнкегәчә, Нуғай кичүе үтә Ер төбәкдән Үксез төбәккәчә, юлҡамы рәүешле Үткелендән, Ҡарағайдан, Керйыуардан, Ҡалмак башындан Сыуал тауынача, Саҡмар буйлаб Кейембирде түбәгенәчә, Таналыктың бөтөн буйы белә Жайыкның Буз тирәгенәчә, Яраҡлидан ҡара урман артсылы Ҡамышлауның Ҡуш Усағындан, Өйрөк Таудан Жим сыуынача — Үсәргән, Ҡыпчак, Тамъян, Бөржәннеңдер. Андан сахра тарафы: түбән чиге Сарайчыҡдан Өч Үзәннең сыу ағышы белән чиге Дүрт Килигәчә — Бөржәннең асаба ерләредер. Бу — башҡордларның мәшһүрәт белән тигезләп үлчәб бүленгән ерләредер. Бу Ҡазан шәһәренең кенәгәсенә теркәлмештер, һәм булар өчөн төлкө, сусар ясағы түләнмеш.

Тарих 970 жөзәнең 29-ынчы көнөндә бу грамута ҡәғәзинең ахрына император Әғзәм хәзрәтләренең олуғ санатлары ҡул ҡуймыш: **Бобров, Степан Белагушин, Степан Соколов,** сәркәтиб **Михаил Белинский».**

Күренеүенсә, Бөрйән ырыуының элекке аҫаба ер-биләмәләре хәҙерге Рәсәй Федерацияһының Куйбышев, Саратов өлкәләрендә һәм Ҡаҙағстанда тороп ҡалған (ҡалдыҡтары әлегәсә шул аҫаба ерҙәрендә донъя көтә). Боронғораҡ (Туҡтамыш-хан заманы) бөрйәндәрҙең уғата көньяҡтараҡ – Каспий диңгеҙе буйындағы Маңғышлаҡ ярымутрауында төйәкләнеүе тураһында ла ҡыҙыҡлы мәғлүмәт бар (Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Башҡорттарҙың тарихы. Өфө, 1994, 23-өнсө бит). Ә ҡыпсаҡтарҙың бер килкеһе

был яҡтарға Килмәк-абыз Нурышов етәкселегендәге башҡорт ихтилалын баҫтырышырға батша ғәскәрҙәре сафында 1736 йылдың йәйендә хәҙерге Ырымбур арты далаларынан килеп төпләнеүе билдәле, ул хаҡта "Башҡорт ҡырылған урын" тигән хеҙмәтемдә йәки "Эскерһеҙҙең тормошо" тигән мемуарҙарымда ентеклерәк уҡырға мөмкин.

Билдәле булыуынса, үҫәргәндәр ерендә Ырымбур ҡәлғәһен ҡорҙортмаҫ өсөн ҡубынған был ҡоралллы күтәрелеште 1735 йылда көнбайыш Башҡортостанда Аҡай-батыр Күсемов башлап ебәрһә, Үҫәргәндә уны Килмәк-абыз Нурышов менән Алғышай-батыр Наҙаров (иртә үлгән шағирыбыҙ Рифҡәт Алғышаевтың бабаһы) етәкләй. Баш күтәреүселәрҙең һуғыш юлдары ҡанлы, ә юл осо ҡот осорғос фажиғәле. Ихтилалсыларҙы баҫтырыуҙа ҡырғынсы ғәскәр сафтарында батша яҡлы төрлө милләт вәкилдәре менән бергә баяғы *ете йөҙ (700) башҡорт ҡыпсағы* ла ҡатнаша. Ихтилал етәкселәренең береһе яҙып ҡалдырған тәүәрихтә был хаҡта асыҡ әйтелгән: "*Ҡыпсаҡтар, үҙҙәренең урыҫтар яҡлы булыуынан маһайып*, Хоҙай уларға тыныслыҡ һәм бәхет килтерҙе, тип һананы һәм тамъяндарға (күтәрелеште тамъяндар башлап ебәргән -- Килмәк-абыҙ тамъян ырыуынан. – Й.С.) ҡаршы көрәште. Тамъяндарҙан үс алырға теләп, Һаҡмарға (йәғни хәҙерге Һунарсы ауылы ултырған ергә. — Й.С.) барып еткән урыҫтар менән берләшеп, тамъяндарға ябырылды. Һуңғылары үҙҙәренә ҡотолор урын таба алманы...

Улар (тамъяндар. — Й.С.), күсенергә теләп, ҡыпсаҡтарҙың тарафына (йәғни ҡыпсаҡтар менән үҫәргәндәр араһын сикләүсе Һаҡмар йылғаһы буйына – хәҙерге Һунарсы ауылы ултырған ергә. — Й.С.) килгәйне, ләкин көтмәгәндә ҡыпсаҡтарҙан булған һатлыҡ йәндәр Һаҡмарға килеүсе урыҫтарға хәбәр иткән улар хаҡында. Мосолмандар иһә бер ни ҙә белмәне. Һатлыҡ йәндәрҙең береһе... *Ҡорбанай...* мосолмандар йәшәгән урынды күрһәткән һәм урыҫтарҙы һуғыш хәйләһенә өйрәткән. Урыҫтар төндә үҙҙәренең туптарын килтерҙе лә иртәнсәк шуларҙан ата башланы. Бахыр башҡорттар, был атыуҙың ҡайҙан ҡупҡанлығын аңлай алмай, төрлө яҡҡа һибелеп ҡаса башланы; күп ҡатындар балаларын ҡосоп йылғаға ташланды ...бәғзеләренең сабый балалары тирәк ботаҡтарына эленгән сәңгелдәктәрҙә ҡалды — бөтәһе лә шунда һәләк булды, сөнки әсәләре уларҙы үҙҙәре менән алырға өлгөрмәне. Яралылар ҙа йылғала һәләк булды. Был һуйышта Һаҙлыйылғала (хәҙерге Һунарсы ауылы аша аға. – Й.С.) мәйеттәрҙән күпер хасил булды. Ҡарттарҙы эт урынына таштар һәм күҫәктәр менән һуғып үлтерҙеләр, имсәк сабыйҙарын ҡылыстар менән тураҡланылар, гөманлы бисара ҡатындарҙың ҡорһаҡтарын ярҙылар, йәш-елкенсәкте мауығып үлтерҙеләр. Шәһиттәрҙең мәйеттәрен ҡарғалар суҡыны һәм төлкөләр кимерҙе. Ошо көндә лә унда ул кешеләрҙең һөйәктәрен табырға мөмкин... Күксә-тархандың ҡатынын — Сураҡайҙың әсәһен — әлһерәп бөткән ҡарсыҡты, урталай яра сабып, юлдың ике яғына быраҡтырҙылар. Тамъяндан Ҡорманғолдо, Аҡмайҙың улын, был фетнәле көндә урыҫтар ҡамаған; үҙенең һөйләүенсә, ул, ике янды бер юлы матҡып алып, керешен бөтөрә тартып, шуларҙан уң яҡлап — урыҫтарға, һул яҡлап мишәрҙәргә атып, үҙенә юл ярған. Бер мишәр унын артынан: «Ах, ни эшләнең һин, яуыз башҡорт?! Һеҙҙе аҫып бөтөрөргә тирәктәр ҙә етмәй бит!» — тип ҡысҡырып ҡалған... Һатлыҡ йәндәр көлдөләр һәм уларҙың ҡайғыһынан ҡыуандылар... Хатта шуға тиклем барып еттеләр: үҙ әтрәттәрен төҙөп, бахыр мосолмандарҙы ҙур тырышлыҡ менән ауланылар һәм уларҙы урыҫ ҡулдарына һаттылар... *улар көслөк менән башҡорт ерҙәрендә ҡалды һәм бөгөн дә күп әле улар*; башҡорт ауылдарында берәүҙе лә тере ҡалдырманылар"...

Рәсәй хөкүмәтенең рәсми документтарында быларҙың барыһы дөрөҫләнә.

1736 йылдың 2 июнендә Ырымбур экспедицияһы башлығы И.К. Кирилов әбей батшаға кинәнесле хәбәрләй:

«Ее императорскому величеству, самодержице всероссийской всеподданнейшее в Кабинет доношение.

После всеподданнейших нижайшего раба репортов и отъезду отсюду генерала-лейтенанта и казанского губернатора Румянцева получил известие от майора *Останкова,* что яицкими казаками вступя от Сакмарска Нагайской дороги в Башкиры *19 мая,* ушедших с Демы реки воров, на которых *пришли внезапно,* в горах *между Ика и Сакмары рек,* добита *мужеска полу с 600, женска* ***немалое число,*** причем получено лошадей, скота и пожитку довольно...». Шул ҡырғында батша яҡлы (“доброжелательные башкирцы”) башҡорт ҡыпсаҡтарының да ете йөҙ (700) кешелек әтрәте ҡатнашлығын батшаға ентеклерәк итеп Һуңғараҡ яҙылған хисапнапмәлә күрәбеҙ: “Майор Останков 2 сентября из Сакмары писал: ...собравший он, майор, доброжелательных башкирцев з 700 же человек да яицких казаков с 300 человек, отправил на вора Алгишея по другую сторону реки Сакмары, о котором де есть известие, что кочует на реке Космарке и Оняку (дөрөҫө Эйек. – Й.С. [Материалы по истории Башкортостана, том VI, автор-составитель Н.Ф. Демидова. Уфа – 2002, №312, 475-енсе бит])”.

Һүр. 1. Карталағы түңәрәк төртөклө пунктир -- Аҡһаҡтимер яуының юлы. Тәреле пунктир -- Кириловтың Ырымбур экспедицияһы юлы. Уҡлы һыҙыҡ -- батша ҡырғынсыларының Ҡасанҡый-Салаға (башҡорт яуының төбәгенә) уҙған юлы. 1. Сәнкем-Биктимер. 2. Ҡасанҡый-Сала -- батша ҡырғынсылары 1200 башҡортто ҡырған урын. 3. Ҡаҫмарт йылғаһының иҫке үҙәне. 4. Тәре-билдә -- Тирәкле йылғаһы янында Кирилов драгундары Килмәк-абыз яуы менән һуғышҡан урын. 5. Тәреле түңәрәк-билдә -- Аҡһаҡтимер һәм Туҡтамыш-хан ғәскәрҙәре бәрелешкән урын.

Иғтибар итегеҙ: 1736 йылдың 19 майында хәҙерге Һунарсы ауылы урынлашҡан ерҙә 600 ир-ат һәм ***унан да кәм булмаған һанда*** (тимәк, тағы 600) ҡатын-ҡыҙ, бала-саға — бөтәһе 1200 кеше, көтмәгәндә баҫып алынып, бер юлы үлтерелгән, һәм был ҡанлы фажиғә тап ошо беҙҙең төбәктә — Эйек менән Һаҡмар аралығындағы минең бабалар ауылы Ҡасанҡый-Сала ерендә булған (ауыл тулыһынса яндырылған – Иҫке Ҡый тигән ерҙә өй урындары беленә)... Ә Ырымбур экспедицияһының 1736 йыл 30 июндә яҙылған икенсе бер документында: «Майор *Останков* с яицкими казаками после первой над

ворами победы *от* 22 по 30 числа мая ходил по реку Яику, где воровских разорил и выжег 113 деревень, и с башкирцами, коих было 1000 человек, бились и побито больше двух сот...» — тип әйтелә. Тимәк, ауылыбыҙ Ҡасанҡый-Салала ҡырғынсылар тарафынан 1200 ир-аттың, ҡатын-ҡыҙҙың, бала-сағаның язалап үлтерелеүе һәм ауылыбыҙҙың яндырылып юҡ ителеүе 1736 йылдың иҫке стиль менән 22 майында булған, был иһә Себер юлы Балыҡсы ылыҫы Сейәнтусы ауылы фажиғәһенән кәм түгел. Айырма шунда ғына: Тәфтиләү менән бергә йөрөгән П.И. Рычковтың яҙма-шаһәҙәтнамәһе арҡаһында ғына Сейәнтусы тарихҡа керһә, Ҡасанҡый-Сала фажиғәһе тарихтан ситтә ҡалған.

Был ҡанлы фажиғә урыны төбәгебеҙҙең һыҙмаһында (һүр. 1.) – тәре тамғаһы менән, ә Һаҡмарҙың һул ярынан ҡырғынсылар килгән юл уҡбашаҡлы һыҙыҡлап күрһәтелде. Ҡорбанай (йәки Ҡорбантай) тигән хыянатсы ҡырғынсыларҙы аҫтыртын үткәргән йәшерен юлды төртөклө пунктирҙар менән билдәләнек; шул кисеү һәм уның аръяғындағы төбәк хәҙер ҙә *Ҡормантай төбәге* тип атала. Хәҙерге Һунарсы ауылынан Сәнкем-Биктимергә табан Әселе үҙәкте сыҡкас та, юлдың һул яғында һөргән ер эсендә (хәҙер инде һөрөлмәй — ауыл өйҙәре аҫтында ҡалып бара) эре-эре таштар менән буралған, арҡырыһы — биш, буйы ун метр самаһындағы оҙонса-түңәрәк (овальный) уба, ә уның ян-яҡтарында шулай уҡ таш бураулы бәләкәйерәк ике уба (ирҙәр, ҡатын-ҡыҙҙар, бала-саға айырым-айырым өс ҡәбергә ерләнгән) бар ине — «Сәғир-Сағаид» зыяраты. Ҡайһы берәүҙәр уны, «Сағаид»ә һүҙен боҙоп әйтеп, «Сәғиҙә зыяраты» тип йөрөттө, шуға күрә унда, имеш, «атаһы менән ҡунаҡтан ҡайтып барышлайы юлда үлеп ҡалмыш Сәғиҙә тигән ҡыҙ күмелгән», тип һөйләне (бер юлы өс зыяратҡамы?!.). Әммә зыяраттың бабаларыбыҙ ҡушып ҡалдырған ғәрәпсә исемендәге «Сәғир» — «ғазап уты», ә «Сағаид» — «бейек урын, уба» тигән һүҙ икән. Фани донъяла уҡ ғазап утында янып-язаланып үлеүселәрҙең — изге шәһиттәребеҙҙең уба-зыяраты, тимәк...

Мең дә ике йөҙ шәһит күмелгән был убаның эре-эре бура таштарын үткән быуаттың алтмышынсы йылдар уртаһында Хәмитов Миңнебай тигән кеше ташып алып, саҡ ҡына үрҙәрәк Әселе үҙәктең һул ярында өйөнөң нигеҙенә һалған, белекһеҙҙе берәү ҙә туҡтатмаған (башҡорт маңҡортҡа әүерелә -- ата-бабалар тарихын тойомламай). Шул йылдарҙа Һунарсы ауылы Әселе үҙәктең баяғы ҡанлы уң ярынаса ҙурайып китеп, шәһиттәрҙең изге зыяраттарына еткерә яҙып яңы йорттар төҙөлгән һәм улар, изге зыяраттар, бура таштарының урланып бөтөүе сәбәпле, ер менән тигеҙләнгән -- зыярат булыуынан туҡтаған. Ошо көндә ул урынды ауылдың бернисә ҡарты ғына (мәҫәлән, минең замандаштарым Сөйәрембәтев Фәсхетдин, Ҡыуатов Атауылла, Мостряков Алексей-Луңке — ғүмерҙәре буйына шул зыяратты уратып үтеп ер һөргән тракторсылар) күрһәтеп бирә алыр ине (ул изге урынды 2003 йылдың июлендә ғаиләм менән ауылға ҡайтҡаныбыҙҙа баяғы уҙамандар менән берлектә урта тәңгәленә бүрәнә киҫкәһе һалып ваҡытлыса ғына билдәләп киткәйнек. Аҙаҡ 2008 йылда Фәсхетдин һәм Атауылла вафат булған тип ишеттем). Халҡыбыҙҙың ҡаны аҡҡан изге зыярат мотлаҡ тергеҙелергә һәм унда мәңгелек матәм һәйкәле ҡуйылырға тейешле, тип һанайым.

Һаҙлыйылға буйындағы ҡанлы еңеүенән рухланған секунд-майор Б.Л. Останков үҙенең ҡырғын әтрәте менән май айының аҙаҡҡы аҙнаһында үҫәргән ерҙәре буйлап Һаҡмар менән Яйыҡ аралығынан үрләп китә лә 113 башҡорт ауылын яндырып, 200 башҡорттоң башына етеп ҡайта. Ошондай ҡырғын өҙлөкһөҙ ҡоторона. Секунд-майор Останковтың хисапнамәләре буйынса, 1737 йылдың август аҙаҡтарында ул Ағиҙел аръяғынаса дөрөп, Нөгөш, Мәләүез йылғалары буйындағы ихтилалсы башҡорттарҙың ҡанын ҡоя. Һөҙөмтәлә был ерҙәрҙең үҫәргәндәре йә ҡырылып, йә төрлө яҡҡа һибелеп

бөтөп, бик һирәкләнеп ҡала, урындарына баяғы батша яҡлы ҡәүемдәр төйәкләнә (хәҙер һәр ауылда, тип әйтерлек, ҡатнаш йәшәйбеҙ).

Һаҡмар һәм Ҡаҫмарт буйҙарындағы ауылдарҙы нигеҙләгән Үҫәргән башҡорттарының бер тармағы -- тарихи Солтанов – Боҫҡонов – Уралбаев (Аралбаев) фамилияларын биргән бабаларыбыҙ XII быуат баштарында (1200 йылда) уҡ ошо Ҡаҫмарт йылға тамағындағы Мөйтән-би ыҫтаны Ҡасанҡый-Салала (Урта Сәнкем тип тә йөрөтөлгән) донъя көтөп торғанлығы билдәле. Шул уҡ Үҫәргәндең икенсе бер тармағы -- хәҙерге Һунарсы (Үрге Сәнкем) ауылын нигеҙләгән Сунарчин, Тләүмбәтов, Сөйәрмбәтов, Мусаҡаев, Яугустин фамилиялары һәм Этбай (Үрге Ырыҫҡол), Ырыҫҡол, Солтанбай, Тирәкле ауылдарын нигеҙләүсе Этбаев, Ырыҫҡолов, Арыҫланов, Солтанбаев, Ярышев фамилияларының һәм, моғайын, Үҫәргән ырыуынан булмаған Биктимеров (Сәнкем-Биктимер ауылын нигеҙләүселәр), Баубаков, Байназаров фамилияларының бабалары, быуындан-быуынға тапшырылған риүәйәттәр буйынса, был төбәккә һуңыраҡ – баяғы бер ҡәүем башҡорт-нуғайҙарҙың 1546 йылда Ҡубанға күсенеп китеүе осоронда Нөгөш йылғаһы буйынан килеп төпләнгән булырға тейеш. Үҫәргәндәрҙең ул яҡтағы биләмәләре тураһында тарихи мәғлүмәттәр бар: мәҫәлән, 1787 йылдың 3 сентябрендә Нуғай юлы Сәнкем-Ҡыпсаҡ ылыҫы башҡорттарының Нөгөш йылғаһы буйындағы аҫаба ерҙәрен завод хужаһы Д.И. Пашковаға һатыуы тураһында килешеү ҡағыҙы бар; унда, башҡалар менән бергә, *Һунарсы Тләүмбәтов* (Елумбетов тип боҙоп яҙылған) Ишбулат Тләүмбәтов (Тляуф тип боҙоп яҙылған) ҡул ҡуйған (Материалы по истроии Башкирской АССР, V том, М., 1960, №220. – Артабан томдар ғына күрһәтелә). Тап беҙҙең төбәк үҫәргәндәрҙең исем-фамилиялары Тляумбет Явгостин (Сәнкем-Ҡыпсаҡ ылыҫы старшинаһы), Абдрак Явгостин, Калмаҡ Явгостин, Суярымбет Явгостин, Буляк Тляумбетов, Урускул Кайбулатов, Урускул Айтаков, Аблай Урускулов, Казянь Урускулов, Давлет Урускулов, Унгар Урускулов, Юлтимир Урускулов, Ибрай Урускулов, Сакир Урускулов, Урускул Елдашев, Исергап Аллабердин (сотник), Яруш Сулеймановтар (IV томдың беренсе киҫәгендә 1754-70 йылдар ҡыҫаһындағы документтар: №47,167,181,298,302,311) һәм Калкаман Бускунов, Исергап Бекбовов, Ильчугул Таймасовтар (V томдың 1770 йылғы №317 һәм 1791 йылғы №321 документтары) теркәлгән сәхифәләр бар.

Инде төбәгебеҙ ауылдарының ҡыҫҡаса тарихына бер килке күҙ һалайыҡ.

Әйтеп үтелеүенсә, хәҙерге ауылдарыбыҙҙың әсәһе Ҡасанҡый-Сала (Мөйтән-биҙең ҡасанҡы – ҡышлау ҡасабаһы) хәҙерге Һунарсы ауылынан түбәндәрәк Иҫке Ҡый (иҫке ауыл урыны) тигән ерҙә булған; унан саҡ ҡына түбәндәрәк – Ҡамышлыҡолаҡ күтеренең ситендәге тәбәнәк тауҙа – шул ауылдың зыяраты. Бабабыҙ Мөйтән-биҙең (“Башҡорт батшалары” тигән китабымдың тышлығында уның ҡытай рәссамы яһаған һүрәте бирелде) 1207 йылда Бөрйән бәге Темәсйәнде аҡ кейеҙҙә Сыңғыҙ-хан (император) итеп күтәрешкәнен һәм күп йылдар уның уң ҡулы булғанлығын (аҙаҡ дошманлашалар) беләбеҙ. Тимәк, урындағы халыҡ телендә уның “баш ҡалаһы” тип йөрөтөлгән Ҡасанҡый-Саланың йәшәү тарихын иң кәмендә ***1200 йылдан башлап*** һанай алабыҙ. Баяғы 1735 йылдың 19 майындағы оло фажиғәлә был сала (село) ҡырғынсылар тарафынан тулыһынса яндырылғас, тере ҡалғандарҙың береһе Биктимер ҡарт тап шул 1735 йылда ауылды түбәндәрәк – Ҡаҫмарт йылғаһы Һаҡмарға ҡойған урында тергеҙеп, йорт һалып ултыра, тере ҡалған башҡа ауылдаштары ла бер-бер артлы шунда ултыраҡланғандан һуң, ауыл инде Биктимер (аҙаҡ Сәнкем-Биктимер) исемләнә. 1795 йылғы V ревизия буйынса, ундағы 40 ғаилә-йортта 124 ир-ат, 102 ҡатын-ҡыҙ йәшәгән. Был күрһәткестәр

Солтанбайҙа (Һултамбайҙа) 24 һәм 42 – 50, Ырыҫколда 24 һәм 50 – 43, ә Һунарсыла 9 һәм 34 – 28 һандарында сағыла.

Ҡыҙыҡһынғандар өсөн йәнә:

Һунарсыла 1816 йылда 14 йорт, 44 ир-ат, 24 ҡатын-ҡыҙ; 1859 йылда 41, 96 – 90; 1866 йылда 35, 91 – 87.

Солтанбайҙа 1816 йылда 5, 26 – 24; 1859 йылда 25, 66 -- ?; 1866 йылда 22, 53 – 42.

Ырыҫколда 1816 йылда 22, 200 – 169; 1859 йылда 112, 311 – 304; 1866 йылда 102, 261 – 231.

Сәнкем-Биктимерҙә 1816 йылда 21, 105 – 76; 1859 йылда 95, 230 – 207; 1866 йылда 99, 226 – 211. Заманында гөрләп ауылыбыҙ большевиктарҙың 70 йыллыҡ хакимиәте осоронда ҡороп юғалды.

Инде Сәнкем-Биктимерҙән заманында яңы ауылдар бүленеп сығыуының сәбәбен ҡыҫҡаса аңлатайыҡ.

XVIII быуат урталарында батша самодержавиеһы тарафынан башҡорттарҙың Урта Азияға юлын быуыр һәм уларҙы ауыҙлыҡлап тотор өсөн Башҡортостан көньяғы Самаранан алып Орскиғаса хәрби ҡәлғәләр (крепостар) менән уратып алына. Ҡәлғәләрҙең бер өлөшө Һаҡмар йылғаһының һул яры буйлап та ҡорола, ә уң яҡ яр буйы, башҡорттар менән рәсми килешеү нигеҙендә, башҡорттарҙың һис кем ҡағылышһыҙ аҫаба ерҙәре итеп танила. Өфө янындағы Шишмә ҡасабаһынан килтерелеп Һаҡмарҙың һул яғында (хәҙерге Шишмә ауылы) урынлаштырылған Шишмә ландмилицияһы тигән ғәскәри төркөм кешеләренә (татарҙарға) бабаларыбыҙ йыл да, уң ярға сығып, Әселе йылғаһы тамағында бесән сабырға рөхсәт бирә.

Әбей батшаның 1767 йыл 1 июнь указына ярашлы, 1768 йылда Һаҡмар буйы ҡәлғәләренә хәрби казак рәүешендә 1044 нуғай Ҡазандан килтерелеп, Водвиженка ҡәлғәһенә, Никитин һәм Жултый редуттарына, Ҡундрау биҫтәһенә бүлеп ултыртыла. Шунан һуң был нуғайҙарҙың Һаҡмар аша башҡорт ерҙәренә ҡул һуҙыуы йонсота башлай, был йылдан-йыл көсәйә. Шуға сик ҡуйыр өсөн, Сәнкем-Биктимер ауылы башҡорттарының бер өлөшө Һаҡмар түбәнендә Никитин нуғайҙары зыянлыҡлаған үҙ аҫаба ерҙәренә күсенеп, яңы ауыл нигеҙләй, уға ла Биктимер исеме бирелә. Хәҙер ул ауыл башҡорттары, балалары мәктәптә татарса уҡытылыу сәбәпле, татарға әүерелгән. VII (1816 йыл) һәм IX (1859 йыл) ревизия мәғлүмәттәре был Биктимерҙәрҙең икеһендә лә байтаҡ ҡына бер үк фамилияларҙың (мәҫәлән, биктимеровтар, сиреүбаевтар, алтынбаевтар, мәсәғутовтар) булыуын күрһәтә. Шуныһы ҡыҙыҡ: Алтын(бай) Сиреүбаев ике ауылда ла теркәлгән – икеһендә лә аҫаба ер биләмәләренә эйә булыу маҡсатынандыр, бәлки.

Воздвиженка нуғайҙары һис бер тынғы бирмәгәс (улар хатта Әселе тамағын мишәрҙәргә 500 һумға һатып ебәрә), бабаларыбыҙ был ерҙәрен Ырымбур алпауыты Васильевка һатып ҡотола, ә Васильевтан поручик Петр Дмитриевич Крашенинников (атаҡлы яҙыусы Н.А.Крашенинниковтың ҡартатаһы, шундағы Петровское/Кершәнник ҡасабаһын нигеҙләүсе) һатып ала ла уның баяғы Әселе мишәрҙәрен үҙ биләмәләренән ҡыуҙыртыу өсөн күп йылдарға һуҙылған, аҙаҡ еңеүе менән осланған дәғүә-тартышы башлана.

Ҡундрау нуғайҙарының баҫҡынынан ҡотолоу өсөн, Ырыҫкол ауылы башҡорто Юлғотло шул тәңгәлдә утарланып ултыра һәм ул төбәк башҡорттары, балалары мәктәптә татарса уҡытылыу сәбәпле, татарға әүерелмеш Юлғотло (Утар) ауылына әйләнә.

Башҡорттарҙың үҙ аҫаба ерҙәрен ҡурсалап ҡалыу өсөн өс тиҫтә йылға һуҙылған иң ҙур дәғүәле тартыш Ҡаҫмарт һыуының ике яғындағы оло байлыҡ -- Олобай сабынлығы өсөн була, ул эш батшаға барып етеп кенә башҡорттар файҙаһына хәл ителә; һәм Сәнкем-Биктимерҙән күснеүселәр тарафынан Һунарсы, Яңы-Ғафар (Яңауыл) ауылдарының нигеҙләнеүе лә тап шул Олобайға бәйле. Архив документтарынан Һунарсының башланыу йылын асыҡлайыҡ.

Олобайҙы башҡорттар ҡулында һаҡлап ҡалыу өсөн яҙған ғаризаларында Ырымбур түрәләренән уҙып батшаға тиклем барып еткән уҙаман – хәҙерге Солтанов фамилиялыларҙың олатайҙарының береһе кенәздәрҙән тархан Боҫҡон Даянов (ҡағыҙҙарҙа Бускун Дуянов) ул. 1804 йылдың 28 майы менән тамғаланған ике ауыл ышаныҡтарының юлламаһы ла ҡыҙыҡлы, уға Сәнкем-Биктимерҙән Аҫылғужа Биктимеров, Абуталип Солтанморатов, Баубаҡ Байназаров, Бикйән Хоҙайназаров, Әлибай Биктимеров, Иҙелбай Сәғитов, Моҡанай Хәлилов, Ғайса Бикташев, Ишмөхәмәт Этйейләсев, Ғүмәр Итчин уҙамандар, десятник Абдулла һәм бер килке ауылдаштар Баймөхәмәт, Ташбулат, Ҡотлогилде, кәсепсе Көбәк Ҡәҙербирҙин, ә Һунарсынан указлы мулла Өмөрҙаҡ Солтанморатов, кенәздәрҙән тархан Боҫҡон Дуянов, ***Һунарсы Тләүмбәтов*** (ауылды нигеҙләүсе), Илбул Ҡалмаҡов, Йәрмөхәмәт Ҡотлобаев, Айдарбәк Килдебаев, Килсембай Сөйәрембәтов, Әбйәлил Сунарчин уҙамандар ҡул ҡуйған.

Жултый нуғайҙарының ышаныҒы Кидрали Азяпов тигән бәндә Ҡаҫмарт йылғаһының ике яғын башҡорттарҙан арындыртыуҙы һорап 1804 йылдың 10 июнендә Ырымбур генерал-гөбөрнәтере Г.С.Волконскийға атҡарған шикәйәтендә башҡорттарҙың унда тәүҙә утар булып ултырыуын, шунан һуң “самовольно” ауыл барлыҡҡа килеүен; нуғайҙарҙың был ерҙәргә дәғүәһе Ырымбур Земский Суды тарафынан 1782, 1785, 1802 йылдарҙа ҡаралып та, һаман нуғайҙар файҙаһына хәл ителмәүен яҙа. Тимәк, Олобай сабынлығындағы башҡорт Һунарсы Теләүембәт улының утары нуғайҙар Жултыйға күсеп килгән 1768 йыл һәм Судта беренсе дәғүә ҡаралған 1782 (йәмғеһе 14 йыл) араһында булған. Эҙләнгән урталыҡ һан 14:2=7 тип алып, Һунарсы утарының нигеҙләнеү йылын яҡынса билдәләйбеҙ: 1768+7=1775. Ләкин ул 1775-тең ҡанҡойошло бола заманы икәнен һәм 1795 йылда Һунарсы ауылында 9 өй генә булыуын иҫәпкә алып, ул туғыҙ өйҙөң һигеҙе иң кәмендә 5 йыл дауамында ырағандыр тип һанаһаҡ, ***1790 йыл Һунарсы ауылының нигеҙләнеү йылы булып тора һымаҡ.*** Ләкин Һунарсы ауылы Ҡасанҡый-Саланың да, Сәнкем-Биктимерҙең дә туранан-тура дауамланышы икәнен ныҡ иҫтә тотоп, уның ысын тыуған йылын билдәләйбеҙ – Мөйтән-би үҙе нигеҙләгән ***1200 йыл.*** Тимәк, ошо юлдар яҙылған 2010 йылда ***Һунарсыға 810 йәш*** тулды.

Ләкин Һаҡмар аръяғы һөмһөҙҙәре һаман Олобайҙың арғы осонан баҫып кереп ыҙалағанлыҡтан, 1863 йылда Сәнкем-Биктимер һәм Һунарсы ауылдарының бер килке башҡорттары шул тәңгәлгә күсеп барып яңы ауыл нигеҙләй, беренсе булып нигеҙ һалған Һунарсы ауылы башҡорто Ғабдул-Ғафар (1812 йылда тыуған) Ғабдулсәләмов-Моратбаҡтыев (Моратов) уҙамандың исеменән ул ауыл рәсми ҡағыҙҙарҙа Ново-Гафарово тип яҙыла, ә ябай телдә Яңауыл тип йөрөтөлә (хәҙерге ваҡытта был ауылдың башҡорттары, балалары мәктәптә татарса уҡытылыу сәбәпле, тоташ татарға әүерелгән).

Ҡыҫҡаһы, Һунарсы ауылының ысын тыуған йылы ***1200.***

Һунарсы икенсе тыуған ауылым (сөнки Сәнкем-Биктимерҙең совет осоронда һирәкләнеп ҡалған һуңғы халҡы ла шунда күсенде) булғанлыҡтан, был ауылды нигеҙләгән ырыуҙашыбыҙ Һунарсы Тләүмбәт улының шәжәрәбеҙҙәге нәҫел бауын ҡәҙерле ауылдаштарым һәм башҡаларҙың иғтибарына еткереүҙе изге бурысым

һананым. Әммә бер иҫкәртеү яһарға кәрәк: һуңғы йылдарҙа үҫәргәндәрҙең “Туҡсаба” тигән ырыу оранын яңылыштырып, “ораны Мөйтән” тип яҙыусылар күренә, быны сәбәбе, моғайын, Ҡыпсаҡ ырыуының да ораны шундай уҡ булыуҙан сәйерһенеү ғәләмәтеләр. Ләкин быға һис аптырарға ярамай, сөнки боронғо заманда ҡыпсаҡтарҙың үҫәргәндән сataланып сығыуы билдәле, шуға күрә уларҙа ла Үҫәргән ырыуының ораны һаҡланған.

Шулай итеп, бисмилла:

Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһенең һунарсы бауы

Ырыуы – **Үҫәргән.**

Ағасы – **Миләш.**

Ҡошо – **Торна.**

Ораны – **Туҡсаба.**

Тамғаһы – **Аҡа-Ай+Әсә-Көн>Ҡаяс-Көн>Ҡояшҡан (Ҡойошҡан):** .

Оран һәм тамға атамаларыбыҙҙың килеп сығышы (этимологияһы):

ТУҠСАБА: Ат-Аҡ (Ата-Аға)+Әс-Аба (Әсә-Апа йәки Аҫаба)=

1. Атаҡ – Таҡ – Тау (йәки Ир-Ер);

2. Әсаба – Әсә-Сауа (Һыу-Һауа) йәғни боронғо “төрөк-бөтөн” бабаларыбыҙ изгеләштереп табынған Ер һәм Һыу (Ер-Һыу) ул. “Төрөк” (тороҡ) атамаһы – Тороҡ-атау (Тора-тау) иленең (йәғни Башҡортостандың) кешеһе тигән һүҙ. Изге Тора-тау (боронғоса Тороҡ-атау) Башҡортостан Республикаһының хәҙерге Ишембай районында урынлашҡан.

ҠОЙОШҠАН: Аҡ-Ай (Аға-Ай)+Әс-Көн (Әсә-Көн)= шул уҡ боронғо “төрөк-бөтөн” бабаларыбыҙ изгеләштереп табынған Ай һәм Көн (Ай-Көн) ул.

Иҫкәртмә: ошо Күк есемдәренең икеһенең дә Урта Донъялағы (Евразия ҡитғаһындағы) мифик енес күрһәткестәре (Ай – ата, Көн -- әсә) улар орбиталары буйынса Өҫкө Донъяға (Африка ҡитғаһына) һәм Аҫҡы Донъяға (Америка ҡитғаһына) уҙған саҡта ҡапма-ҡаршы (Ай -- әсә, Көн – ата булып) үҙгәргән.

Тимәк, хәҙерге үҫәргәндәр – боронғо Орхон – Селенга ядкәрташтарындағы ырын (рун) яҙыуҙарында тәүәрихләнеп данланған, Айға һәм Көнгә, Ергә һәм Һыуға табынған “төрөк-бөтөн” халҡының туранан-тура тоҡомо, вариҫтары.

Шәжәрә (Туҡсабанан башланған өҙөгө):

[1. Туҡсаба]. – 2. Мөйтән-би Туҡсаба улы. – 3. Шаҡмалы-би Мөйтән улы. – 4. Бүрекәй-би Шаҡмалы улы. – 5. Һеркә-би Бүрекәй улы. – 6. Манғут-би Һеркә улы. – 7. Урал-би Манғут улы. – 8. Арбан-би Урал улы. – 9. Тимерҡабыҡ-би Арбан улы (өҫтәлгән: “Бораҡ-хан заманында йәшәгән” йәғни 1422-27 йылдарҙа). – 10. Һарыбаш-би Тимерҡабыҡ улы. – 11. Һырыш-би Һарыбаш улы (өҫтәлгән: “Ҡасим-хан заманында йәшәгән”). – 12. Ябынсы-яҫауыл Һырыш улы (өҫтәлгән:”Ябынсы бабабыҙ батшаға хеҙмәт итеп, яҫауыллыҡ

һәрби дәрәжәһе алған”). – 13. Үҫәргән Ябынсы улы (өҫтәлгән: “Кесе улы”). – 14. Сөйәлғужа Үҫәргән улы. – 15. **Мусаҡай** Сөйәлғужа улы [Мусаҡаевтар фамилияһы]. – 16. Яукүсте (Күскенсе) Мусаҡай улы [Яугүстиндар фамилияһы]. – 17. Иҫәнбирҙе Яукүсте улы [Иҫәнбирҙе улы Болаҡ батырҙан яҙыусы Йыһат Солтановты биргән нәҫел бауы дауамлана]. – 18. Таймас-би (кенәз) Иҫәнбирҙе улы, уның улдары:

А. Тләүмбәт Таймас улы Яугүстин (Сәнкем-Ҡыпсаҡ ылыҫы старшинаһы [1754 йылдың 6 июнендәге рәсми ҡағыҙға ҡул ҡуйған -- Тләүмбәтовтар фамилияһы]), уның улы **Һунарсы Тләүмбәт улы Тләүмбәтов** [Һунарсы ауылын нигеҙләгән инсан, 1787 йылдың 3 сентябрендәге һәм 1804 йылдың 28 майындағы рәсми ҡағыҙҙарға ҡул ҡуйған – Сунарчиндар фамилияһы]. Уның улдары:

I. Ғәбделяйыҡ Һунарсы улы Сунарчин, 1757 йылда тыуған, уның улы Лот, 1794 йылда тыуған;

II. Ғәбделйәлил Һунарсы улы Сунарчин (йорт сотнигы), 1762 йылда тыуған. Уның улдары:

1) Сәйфулла Ғәбделйәлил улы, 1796 йылда тыуған;

2) Мөхәммәтколой Ғәбделйәлил улы, 1805 йылда тыуған, уның улдары:

*Ғатаулла Мөхәммәтколой улы, 1830 йылда тыуған, уның улы Сөләймән, 1853 йылда үлгән;

3) Ғәйнулла Ғәбделйәлил улы, 1813 йылда тыуған, уның нәҫеле:

*Асатулла Ғәйнулла улы, 1840 йылда тыуған (1860 йылда Себергә һөрөлгән), уның улы Ғиззәтулла Асатулла улы, 1857 йылда тыуған;

4) Мөхәммәтҡунафиә Ғәбделйәлил улы, 1822 йылда тыуған, уның улдары:

а) Мөхәммәтсафа Мөхәммәтҡунафиә улы, 1847 йылда тыуған, уның нәҫеле:

*Хөснулла Мөхәммәтсафа улы Сунарчин, 1898 йылда тыуған, уның балалары:

**Мәзит Хөснулла улы Сунарчин;

**Сафия Хөснулла ҡыҙы Сунарчина-Байназарова;

**Наилә Хөснулла ҡыҙы Сунарчина-Байназарова;

б) Мөхәммәтхан Мөхәммәтҡунафиә улы Сунарчин, 1855 йылда тыуған һәм йәнә:

б) Ғәлиулла Мөхәммәтҡунафиә улы Сунарчин, 1893 йылда тыуған, 1920 йылда иҫән;

в) Идрис Мөхәммәтҡунафиә улы Сунарчин, 1878 йылда тыуған;

г) Ерйеҫ Мөхәммәтҡунафиә улы Сунарчин, 1880 йылда тыуған;

д) Фәйзулла Мөхәммәтҡунафиә улы Сунарчин, 1890 йылда тыуған, уның балалары:

*Хаматулла Фәйзулла улы Сунарчин, 1924-42;

*Фатҡулла Фәйзулла улы Сунарчин;

*Фәррәх Фәйзулла улы Сунарчин;

*Маһира Фәйзулла ҡыҙы Сунарчина;

е) Баймөхәммәт Мөхәммәтҡунафиә улы Сунарчин, 1895 йылда тыуған, уның нәҫеле:

*Рамаҙан Баймөхәммәт улы Сунарчин, 1924 йылда тыуған, уның улы Йосоп Сунарчин;

*Фирҙәүес Баймөхәммәт ҡыҙы Сунарчина-Иҡсанова, уның улы Таһир Иҡсанов.

III. Ғәбделрәхим Һунарсы улы Сунарчин, 1771 йылда тыуған, уның нәҫеле:

1) Ишмөхәммәт Ғәбделрәхим улы, 1796 йылда тыуған, уның улы Хөснетдин -- указлы мәзин, 1823 йылда тыуған;

2) Шәрәфетдин Ғәбделрәхим улы, 1813 йылда тыуған;

3) Мөхәммәтсәхи Ғәбделрәхим улы, 1805 йылда тыуған.

IV. Ғәбделрафиҡ Һунарсы улы Сунарчин, 1775 йылда тыуған, уның нәҫеле:

1. Мерәҫ Ғәбделрафиҡ улы Мусаҡаев, 1793 йылда тыуған, уның нәҫеле:

а) Ғәбделвәли Мерәҫ улы Мусаҡаев, 1822 йылда тыуған, уның улы Идрис, 1855 йылда үлгән;

б) Ғәбделғәлим Мерәҫ улы Мусаҡаев, 1824 йылда тыуған, уның улдары:

*Мөхәммәтсәлим Ғәбделғәлим улы, 1853 йылда тыуған;

*Мөхәммәткәрим Ғәбделғәлим улы, 1856 йылда тыуған;

в) Мөхәммәтшәриф Мерәҫ улы Мусаҡаев, 1827 йылда тыуған;

г) Шәрәфетдин Мерәҫ улы Мусаҡаев, 1832 йылда тыуған, уның улы Мөхәммәтәмин, 1859 йылда үлгән;

д) Хисаметдин Мерәҫ улы Мусаҡаев, 1837 йылда тыуған, уның улы Низаметдин Хисаметдин улы Мусаҡаев, 1902 йылда тыуған, уның нәҫеле (Мусаҡаевтар):

*Сания Низаметдин ҡыҙы Мусаҡаева-Аҡманова;

*Роза Низаметдин ҡыҙы;

*Робес Низаметдин улы, 1941 йылда тыуған;

*Илдар Низаметдин улы, 1945 йылда тыуған;

*Шәриф Низаметдин улы, 1950 йылда тыуған.

е) Сәләхетдин Мерәҫ улы, 1871 йылда тыуған, уның улы Зәйнетдин Сәләхетдин улы Мусаҡаев, 1910 йылда тыуған, уның улдары (Мусаҡаевтар):

*Зәйнәғәбдин Зәйнетдин улы, 1925 йылда тыуған;

*Ғәпсәләм Зәйнетдин улы, 1931 йылда тыуған;

*Ғәлимйән Зәйнетдин улы, 1947 йылда тыуған.

ж) Ҡунаҡкужа Мерәҫ улы Мусаҡаев, 1881 йылда тыуған, уның балаһы Ғәйникамал Ҡунаҡкужа ҡыҙы Мусаҡаева-Байназарова;

з) Толомғужа Мерәҫ улы Мусаҡаев, 1885 йылда тыуған, уның нәҫеле (Мусаҡаевтар):

*Дәүләткирәй Толомғужа улы, 1924-43;

*Әлимә Толомғужа ҡыҙы;

*Рауил Толомғужа улы, 1935 йылда тыуған, уның нәҫеле (Мусаҡаевтар):

**Рәмил Рауил улы, 1960 йылда тыуған, уның улдары:

***Тимур Рәмил улы, 1984 йылда тыуған;

***Руслан Рәмил улы, 1988 йылда тыуған;

**Радик Рауил улы, 1964 йылда тыуған, уның улы Марат Радик улы, 1988 йылда тыуған.

2. Мөхәммәтғәли Ғәбделрафиҡ улы Мусаҡаев, 1805 йылда тыуған;

3. Әхмәтйән Ғәбделрафиҡ улы Тләүмбәтов, 1820 йылда тыуған, уның улдары:

*Мөхәммәтсадиҡ Әхмәтйән улы, 1849 йылда тыуған;

*Мөхәммәтлатиф Әхмәтйән улы, 1852 йылда тыуған;

*Абзалалетдин Әхмәтйән улы, 1861 йылда үлгән.

4. Мөхәммәтша Ғәбделрафиҡ улы Тләүмбәтов, 1809-1853, уның улы Хәлиулла Мөхәммәтша улы, 1848 йылда тыуған.

V. Ғәбделнасир Һунарсы улы Тләүмбәтов, уның улы Фәйзулла Ғәбделнасир улы Тләүмбәтов, 1795-1852.

VI. Динмөхәммәт Һунарсы улы Сунарчин, уның улы Шаһиәхмәт, 1836 йылда тыуған.

Таймас-биҙең икенсе улына күсәбеҙ:

Б. Сөйәрмбәт Таймас улы Яугүстин [1754 йылдың 6 июнендәге рәсми ҡағыҙға ҡул ҡуйған -- Сөйәрмбәтовтар фамилияһы], уның улдары:

1) Килсебай Сөйәрмбәт улы Сөйәрмбәтов, 1753 йылда тыуған, уның балаһы Баһауетдин Килсебай улы, уның улы Фәхретдин Баһауетдин улы, 1872 йылда тыуған, уның улдары (Сөйәрмбәтовтар):

*Ҡолмөхәммәт Фәхретдин улы, 1904-43, уның балалары (Сөйәрмбәтовтар):

**Фәсхетдин Ҡолмөхәммәт улы, 1930 йылда тыуған;

**Шәмсинур Ҡолмөхәммәт ҡыҙы, 1932 йылда тыуған;

**Ғилминур Ҡолмөхәммәт ҡыҙы;

**Маһинур Ҡолмөхәммәт ҡыҙы;

**Алмира Ҡолмөхәммәт ҡыҙы.

*Нәбиулла Фәхретдин улы Сөйәрмбәтов, 1924-43.

Ошо урында үҙемдән остоҡ хәтирә: бер туғандар Ҡолмөхәммәт менән Нәбиулла һуғышта үлеп ҡалды. Һуғыш йылдары аслығында Ҡолмөхәммәттең биш балалы тол ҡатыны Ғәйнекамал еңгәй, балаларын астан үлтермәҫ өсөн, ырҙында эшләп йөрөгәнендә кеҫәһенә һалып алған ҡушус бойҙай менән тотолоп, биш йылға хөкөм ителеп, уны Тоҙтүбә төрмәһенә алып киттеләр, фронтовиктың биш балаһы ҡартәсәләре Мәхмүзә инәй ҡулында ҡалды... “Таң нурҙары” тигән повесым шул ваҡиғаларға нигеҙләнгән.

Шәжәрәне дауам ҡылайыҡ:

2) Ялсыйән Сөйәрмбәт улы Сөйәрмбәтов, 1785 йылда тыуған;

3) Хөсәйен Сөйәрмбәт улы Сөйәрмбәтов, 1787 йылда тыуған;

4) Беләр Сөйәрмбәт улы Сөйәрмбәтов, 1794 йылда тыуған;

5) Йосоп Сөйәрмбәт улы Сөйәрмбәтов, 1801 йылда тыуған;

6) Әйүп Сөйәрмбәт улы Сөйәрмбәтов, 1804 йылда тыуған;

7) Сәйет Сөйәрмбәт улы Сөйәрмбәтов, 1805 йылда тыуған.

8) Абзан Сөйәрмбәт улы Сөйәрмбәтов [Абзан ауылын нигеҙләүсе?], уның улы Ғәбделсәләм Абзан улы, 1784 йылда тыуған, уның улы Ғәбделманнан Ғәбделсәләм улы, 1805 йылда тыуған...

Шәжәрә бауҙарының бөгөнгәсә еткерелмәгәндәрен уларҙың тоҡомдары үҙҙәре тикшереп ялғай алыр. Ә Солтановтар шәжәрәһенең алтмыш ете быуынын элегерәк төпсөнөп төҙөгәнмен.

26.01.2010

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Хәтирәләрҙән сәхифәләр
Аҙнамөхәмәт, Салауат һәм Юлай йондоҙлоғо
Улар теҙләнмәне
Заманаһы ҡушыуынса
Үҙ фекере бар
Ваҡланмаһын Тора тау
Коротко о наших госсимволиках
Бөйөклөгө алдыбыҙҙа
Заманаға ярашлы
Һәр кемгә лә кәрәкле
Р.Байымов тәнҡитенә ҡарата
Ғәлим Хисамовтың “Аһура Мазда” тигән тарихи романы
“Коммунист”ҡа ҡарата авторҙан аңлатма
Төтөн томалауында
Батшалар еренә сәйәхәт
Бөйөк шәжәрәләребеҙҙең береһе
Һунарсы ауылын нигеҙләүселәр шәжәрәһе